ЯНЫБАЙ ХАММАТОВ

# БАШҠОРТТАР КИТТЕ ҺУҒЫШҠА...





ЯНЫБАЙ
ХАММАТОВ

# БАШҠОРТТАР КИТТЕ ҺУҒЫШҠА...

РОМАН



ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН
КИТАП НӘШРИӘТЕ
1990

ББК 84 Баш
Х 23

**Хамматов Яныбай**

Х 23 Башҡорттар китте һуғышҡа... Роман. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. — 408 бит.

Авторҙың яңы романы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының Бөйөк Ватан һуғышы фронттарындағы героик юлын һәм тыл хеҙмәтсәндәренең шул осорҙағы фиҙәкәрлеген һүрәтләй. Гитлерсы баҫҡынсылар менән көрәштә ҡаһарман дивизия Ленин ордены, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм 2-се дәрәжә Кутузов ордендары менән бүләкләнде.

Х $\frac{4702110100 - 213}{М\ 121(03)-90}$ 53—90

ББК 84 Баш
Х 23

ISBN 5-295-00458-7

© Хамматов Яныбай, 1990 й.

*М. И. Шайморатовты оло ихтыярлы, көслө, һәләтле хәрби начальник һәм намыҫлы совет патриоты тип белә инем мин. Немец-фашист илбаҫарҙарына каршы көрәшкән ауыр йылдарҙа ул үҙен оҫта ойоштороусы, кавалерия соединениеһының командиры итеп танытты, шәхси батырлык, тәүәккәллек, каһарманлык миҫалдарын күп тапкырҙар күрһәтте.*

*С. М. Буденный,*
*Советтар Союзы Маршалы.*



# БЕРЕНСЕ ҠИҪӘК

## I

Яҙмыш!

Ҡайһылай оло тылсымлы һүҙ был!

Ошо һүҙгә инанған әҙәм заты ғүмеренең иң һуңғы минутына саҡлы нимәгәлер өмөтләнеп, киләсәккә ышаныс менән йәшәй.

Һәр кешенең яҙмышы тик үҙенә генә хас. Ул берәүҙәрҙе сабый сағынан уҡ бәхетле итһә, икенселәр өсөн ул үгәй әсәгә әүерелә. «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тип донъя ағышына ҡаршылыҡһыҙ буйһоноусыларҙы ул ҡыйырһытһа, ҡыйынлыҡтарға ҡаршы көрәшеүсе һәләтле, ихтыярлы кешеләрҙең тоғро юлдашына әйләнә.

Шул хаҡта малай сағында бик йыш ишетеп үҫкән Миңлеғәле Шайморатов, хәҙер, ир ҡорона кергәс, үткән тормош юлын башынан кисерҙе. Революция булмаһа, ул хәҙер кем булыр ине? Донъяны күп күрҙе ул, һабағын да күп уҡытты уға был донъя... Ҡалманы Ҡытайы, башҡа илдәре... Генерал Доватор корпусында полк командиры ине... Ҡукрәгендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены... Бына әле килеп уға Башҡорт кавалерия дивизияһын ойоштороуҙы тапшырҙылар... Был да яҙмыш... Аҡлармы ул был ышанысты? Өлөшөнә тейгән көмөшөмө был, әллә...

Ауыр уйҙарға күмелгән Миңлеғәле таң алдынан ғына йоҡлап китте. Ул күпме йоҡлағанын һиҙмәне. Тышҡы ишектең шығырлап асылыуын, хужабикә менән кемдең-

дер шыбырлашыуын ишеткәс тә, Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙағы ғәҙәте буйынса, урынынан һикереп торҙо.

— Ғәйниә апай, кем бар?

— Һеҙҙе фатирға урынлаштырған егет килгәйне...

Ашыҡ-бошоҡ кейенгән ыңғайы, Шайморатов төпкө бүлмәнән сыҡты. Таныш егетте күргәс, ҡәтғи һорап ҡуйҙы:

— Байдәүләтов, Совнарком председателе вәғәҙәһе үтәлдеме?

— Үтәлде, иптәш полковник! Аттың иң шәбен һеҙгә бирергә ҡушты Совнарком председателе Ваһапов ағай, — тине егет, һалдаттарса кәүҙәһен турайтып.

Шайморатов унан-бынан ғына тамаҡ ялғаны ла, оҙон салғыйлы шинеле менән бүркен кейгәс, аттар янындағы Байдәүләтов Зәки эргәһенә сыҡты.

— Ҡайһы атты менергә?

— Үҙегеҙҙекен, иптәш полковник!

— Нисек... үҙемдекен?

— Эйәрле ҡара-ерән ҡашҡа — Башҡортостан хөкүмәтенең һеҙгә биргән бүләге, иптәш полковник!

Ҡолағын ҡарпайтып ҡараған ҡара-ерән ҡашҡаның буй-һыны менән полковник Шайморатов оҙаҡ һоҡланды.

— Бик оло, һәйбәт бүләк, — тип ул аттың ялынан һыйпаны, муйынынан һөйҙө лә өр-яңы йүгәнде, көмөш өҙәңгеләрҙе, аттың киң күкрәгенән ҡорһағы аша тарттырылыулы айыл менән ҡашы матурлап һырылған эйәр өҫтөндәге күн мендәрҙе тотҡолап ҡараны. — Был Совнарком председателенең үҙ аты түгелдер бит?

— Ваһапов ағай үҙе менеп йөрөгән ат ул, иптәш полковник!

— Был донъяла ниҙәр күрмәй, ир-егеткәй менән ат башы, — тип һамаҡлай-һамаҡлай, ҡара-ерән ҡашҡаның муйынынан ҡосаҡлап һөйҙө лә, Шайморатов һыңар аяғын өҙәңгегә баҫып, бер ынтылыуҙа эйәргә атланды.

Ҡара-ерән ҡашҡа, таныш булмаған кешегә баш бирмәҫкә, уны нисек тә булһа һыртынан бырғытырға тырышып, бышҡыра-бышҡыра, үрә баҫты. Унан бер тирәлә тапанды, тапанды ла осаһын һикертергә тотондо. Эйәрҙә ныҡ ултырған яңы хужаһын алып ташлай алмағас, ҡабаттан үрә баҫты. Шунда ла һыбайлынан ҡотола алмаясағын аңлағас, ҡапыл тынысланып, теҙгенде шаҡара тартҡан ихтыярлы көскә буйһонорға мәжбүр булды.

— Тимәк, дуҫлаштыҡ, — тип полковник Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаны ике ағас өй араһындағы асыҡ ҡапҡаға ыңғайлатты.

Байдәүләтов та, Шайморатовтан артта ҡалмаҫҡа тырышып, Өфөнөң Пушкин урамы буйлап елдерҙе.

Паром менән Ағиҙел аша сыҡҡан ваҡытта ла Шайморатов, аттан күҙен алмайынса, һаман һоҡланды.

— Йомшаҡ юрта, теҙгенде яҡшы тоя!

Артабанғы яҙмышы мыҡты кәүҙәле полковникка ялғаныуын, барлыҡ ҡыуаныс-ҡайғыларҙы уның менән бүлешергә тура киләсәген ҡара-ерән ҡашҡа ғына белмәне. Ҡәһәрле Бөйөк Ватан һуғышы сығыуын һәм Совет иленә оло бәлә килеүен ҡайҙан белһен инде хайуан? Ул, ай яҡтыһына ҡойонған аҡланда тыуып көс-хәлгә аяҡтарына баҫҡандан бирле, һәр саҡ хәрәкәттә. Тәүҙә инәһенең — туры бейәнең ҡорһағын мороно менән төрткөләй-төрткөләй, бер урында тапанды. Аҙаҡтан, оҙон тояҡтары бер аҙ ныҡығас, яҡты донъяла йәшәүенә ләззәтләнеп, кешнәй-кешнәй, танһығы ҡанғансы уйнаҡланы, сабышты. Үҫеп еткәс, ҡыйынлыҡтар менән булһа ла ирке сикләнеүенә күнегеп, һыртына атланған кешеләр ихтыярына буйһонdo. Уларҙың һәр ҡайһыныһы ҡара-ерән ҡашҡаға ҡарата төрлө мөнәсәбәттә булды. Ул берәүҙәрҙе үҙенә яҡын да юлатманы. Икенселәрен, һыртына бер ҡасан да атланмаҫтай итеп, ергә быраҡтырҙы. Өсөнсөләрен, тәүге тапҡыр ныҡлы көс һынашҡандан һуң, үҙенең хужаһы итеп таныны һәм уға тиҙ арала эйәләште...

Ағиҙел аръяғына сыҡҡас, күбәләкләп ҡар яуа башланы, ел дә көсәйҙе.

Шайморатов, осҡан ҡоштай, алдан елдерҙе. Унан ҡалышмаҫҡа тырышҡан Байдәүләтов ҡола юрғаһын ҡамсыланы. Ләкин полковникты ҡыуып етә алманы. Малай сағынан һыбай йөрөп күнегеүе менән маҡтанһа ла, гел һелкенеп барыуҙан ул бик йәһәт арыны. Аяҡтары, осаһы, быуындары, бөтә тәне һыҙлай башлағас, атын яйлатырға мәжбүр булды.

Егеттең хәленә кереп, Шайморатов та атын яйлатты, ҡайһы саҡта көтөп тә алды.

Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итергә хыялланған Байдәүләтов артта ҡалыуы сәбәбен атына япһарырға маташты.

— Мин менгән ат һыбай йөрөүҙе яратмай.

— Һыбай йөрөй белмәүгә хайуан ғәйепле түгел, — тип Шайморатов йүгән теҙгенен бушатты. Шуны ғына көткән ҡара-ерән ҡашҡа тағы ла алға ынтылды. Соҡор-саҡырлы юлдарҙағы таштарға һуғылып, дағаларҙан осҡон сәсрәне.

Киң юлдың буйынан-буйына һуҙылған зифа аҡ ҡайындар, шыр яланғас ботаҡтарына ҡунған ҡар бөртөктәрен тирә-яҡҡа һирпеп, әле уңға, әле һулға бөгөлә лә сайҡала. Улар ниндәйҙер һағыш, ауыр тойғо уята, полковниктың алыҫ үткәндәрен хәтеренә төшөрә.

Ошондай уҡ эс бошорғос йонсоу көндәрҙең береһендә, ун алты йәше тулыр-тулмаҫтан, ауылынан сығып киткәйне Миңлеғәле лә. Унан бирле егерме ете йыл ваҡыт уҙҙы. Әммә ҡайҙа ғына йөрөмәһен, ниҙәр генә күрмәһен, күңеле һәр саҡ тыуған төйәгендә булды. Уйһыулыҡта йәйелеп ятҡан Биштәкә ауылын ҡап уртаға бүлеп, Штил йылғаһы аға. Шундағы балыҡ ҡармаҡлауҙы, танһығы ҡанғансы һыу ингән яр буйҙарын, тәүлектәр әйләнәһенә ҡош-ҡорт тауышы өҙөлмәгән, гүзәл тәбиғәтле, һоҡландырғыс Буләк урманында ялан баш, ялан аяҡ, ыштан-күлдәктән генә йөрөп, емеш-еләк йыйған малай сағын, тиҫтерҙәре менән күңел асҡан урындарҙы, көтөүҙән ҡайтышлай һөрән һалып кем уҙарҙан баҡырышҡан күмәк малдарҙы, ҡояш нурҙарына ҡойонған иген баҫыуҙарын, йәки көтөлмәгәндә йөрәгенә ҡабынған йән тетрәткес беренсе мөхәббәт тойғоһон ҡасан да булһа онотоу мөмкинме ни? Улар йәнгә ғәзиз тыуған тупраҡтың төҫө булып күңеленә мәңгелеккә һеңгән. Советтар Союзы Геройы генерал-майор Доватор Лев Михайлович командалығындағы кавалерия корпусы сафына ингән кавалерия полкы башында Мәскәү өсөн фашистар менән яуһыҙ алышҡанда ла ана шул алыҫтағы ата йорто, ауылы, тыуған тәбиғәте күҙ алдынан китмәне.

Ҡуйы ҡарағусҡыллы болоттар таралғандан һуң, күк йөҙө асылғас, ҡояш күренде. Уның һалҡын нурҙарына сағылып, ерҙәге ҡар бөртөктәре баҙланы, тоҡсайҙарын елкәләренә аҫып, ҡайҙалыр китеп барыусы кешеләр ҙә йышыраҡ осраны.

Улар араһында Шайморатов ете йән эйәһен аҫраған ата-әсәһен, ағаһын, апаһы менән ҡустыһын күргәндәй булды. Улар һаман да шул Ғәлләметдин байҙың иген баҫыуына тамаҡ ялы өсөн юллайҙарҙыр һымаҡ... Тормош түгел, бары йән аҫрау, тамуҡ ине ул замандар...

Үҙҙәренә терәк булырҙай балалары бер аҙ үҫеп, йүнле тормош күрәм тигәндә генә, Миңлеғәленең ата-әсәһе донъя ҡуйҙы. Уларҙы ерләгәндән һуң күп тә уҙманы, беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан Әхмәтгәрәй ағаһының юғалыуы хаҡында хәбәр алынды, һәм ғаилә яҙмышы Ҡамила апаһына ҡалды. Ҡамила барыһынан да олораҡ ине. Үҙенә нисек кенә ҡыйын булыуына ҡарамаҫтан, Миңлеғәленең ауыл мәҙрәсәһендә уҡыуын бүлдермәне. Унан бәләкәй Ғабдулла менән Ғәлимәне етем итмәү өсөн дә барлыҡ көсөн бирҙе. Кейәүгә сыҡҡас та Ҡамила апаһы ата-әсә өйөнөң нигеҙен һаҡлап ҡалды. Кесе йәштән атаһына ярҙамлашып, эшкә күнеккән Миңлеғәле Ҡамила апаһына ауырлыҡ төшөрмәҫкә тырышты. Мәҙрәсәлә дәресе бөткәндән аҙаҡ, бай шәкерттәрҙең йомошон йомошланы, ауыл

байҙарының игенен һуғырға ялланды, тотонғандан артып ҡалған аҡсаһына хатта гармун һатып алды. Уның һәләтле гармунсы икәнлеген белгәс, Нурғәле бай йәнә бер гармун һатып алып бүләк итте. Шунан һуң ауылда уҙғарылған һәр туй, һәр мәжлес Миңлеғәле ҡатнашлығында үтте. Уға ғашиҡ булмаған ҡыҙ юҡ ине ауылда. Гармун бүләк иткән Нурғәле байҙың ҡыҙҙары ла, юҡ йомошто бар итеп Ҡамила апаһы эргәһенә килгән һайын, Миңлеғәленең күҙенә салынырға тырыша торғайнылар. Әммә егеттең күңеле, уй-тойғолары тик бер һылыуға — Хәҙисә исемле ҡыҙға тартылды. Хәҙисә — уның иң тәүге мөхәббәте, әле һаман да онотолмай. Йылдар артынса йылдар уҙған һайын, ошо мөхәббәт Миңлеғәленең иҫенә йышыраҡ төшә, ниңәлер һәр саҡ күңелен һыҡрандыра. Ғүмер уҙған һайын Хәҙисә эргәһендә булған һәр минуты, яңынан-яңы сифаттар өҫтәлеп, күңелендә һынлана...

— Иптәш полковник, иң башта район үҙәгенә барабыҙмы?

Уйҙарына бирелгән Шайморатов, егеттең ни әйткәнен аңламаған шикелле, Байдәүләтовҡа ҡараны. Шунан, ниҙер иҫенә төшөрөп, ҡабаланды.

— Юҡ, юҡ, туп-тура Биштәкәгә барабыҙ, — тип атын ситкә ҡайырылған сана юлына борҙо.

Ҡар аҫтында ҡалған игенде ураҡ менән урыусы ҡатын-ҡыҙҙы, көлтә ташыусы бала-сағаны, оло йәштәге ҡарт-ҡороно күргәс, атын яйлатып, тирә-яҡҡа ҡарана-ҡарана барҙы полковник Шайморатов. Алыҫтағы һуғыш ялҡыны бында йәшәүсе халыҡты ла ялмауы, кешеләрҙең ҡайғы-хәсрәтен арттырыуы Миңлеғәлене бик нык бошондорҙо. Ир-атһыҙ ҡалған колхоздар, ҡыйынлыҡ менән үҫтерелгән игенде йыйып ала алмайынса интегә, ыҙа сигә. Дәһшәтле ҡомһоҙ һуғыштың әле осо-ҡырыйы һаман күренмәй. Ул оҙаҡҡа һуҙылһа, тылдағы кешеләр нисек йәшәр һәм нисек итеп фронтҡа ярҙам итер?

## II

Биштәкә ауылына еткәс, ҡалҡыуыраҡ урынға күтәрелеп, Шайморатов тирә-яҡты оҙаҡ күҙәтте. Аҫта, тип-тигеҙ уйһыулыҡтың иң төпкөл өлөшөндә, дүрт киҫәктәй булып күренгән оло ауыл ус аяһындай ғына һымаҡ. Орошло менән Ҡарғалы йырындары ҡушылған ерҙән башланған Штил йылғаһы буйындағы ағастар бик нык һирәгәйгән, ҡаршылағы Бүләк урманы Арыҫлан ауылы янында ғына ныҡлы һаҡланған. Монар эсендәге ауыл тоноҡ төҫмөрләнә. Бында йәшәгән башҡорт, типтәр, татар халыҡтары

өсөн элгәрге заманда өс мәсет һалынған булған. Хәҙер улар ҙа юҡ инде. Миңлеғәле ана шунда, яр буйындағы мәҙрәсәлә, белем алды. Унда ике йыл уҡығас, ауылдағы берҙән-бер мәктәпкә күсеп, дини сүрәләрҙән башҡа, рус телен өйрәнде. Артабан белем алыу, ниндәй ҙә булһа һөнәр алыу теләге менән ул сәфәр сығып китте...

Күп йылдар уҙғандан һуң, 1925 йылдың йәйендә беренсе мәртәбә ҡунаҡҡа ҡайтҡас, Миңлеғәленең коммунист икәнлеген ишетеп, ауыл ҡарттары шау-шыу ҡубарҙы. Егеттең быға иҫе лә китмәне. Гармунын алып уйнаған ыңғайы:

Әй, дуҫтарым, башым һыҙлай,
Үлһәм, ҡәбер ҡаҙығыҙ.
Баш осома таш ултыртып,
«Коммунист» тип яҙығыҙ, —

тип үҙе сығарған йырҙы йырлап ебәрмәһенме! Уны «аҡылға» ултыртырға, тәүбәгә килтерергә өндәгән ауылдаштары ла табылды. Егет тыңламағас, асыуҙары ҡабарған ҡарттар:

— Иманын шайтанға һатҡан кафыр эргәһендә тормағыҙ,— тип йәштәргә өгөт-нәсихәт уҡып, төкөрөнә-төкөрөнә, йәһәтерәк китергә ашыҡты.

Дин әһелдәре таралышҡас, Миңлеғәле янында ҡалған йәштәр клубҡа барҙы. Улар, Миңлеғәле гармунына ҡушылып, танһыҡтары ҡанғансы йырланы, таҡмаҡ әйтте, аяҡтары талғансы бейене...

Күңел асҡан йәштәр араһында Хәҙисәнең булмауы ғына Миңлеғәленең эсен бошорҙо. Уйын тамамланып, кешеләр таралыша башлағанда Хәҙисә күренгәс, егет, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә: «Хәҙисә... Хәҙисәкәй!» тип бышылданы.

Шунан икеһе лә шымып ҡалды.

Урам буйлап атлағанда ла һөйләшергә һүҙ табылманы. Ҡыҙ йәшәгән өй тәңгәленә яҡынлашҡас ҡына:

— Ғәфү ит, — тип егет Хәҙисәнең терһәгенә ҡағылды.

Тулы ай яҡтыһы төшкән урында торған Хәҙисә йылмайып ҡараны. Ул танымаҫлыҡ булып үҙгәргәйне һәм үҫкәйне. Уның һөйкөмлө күҙҙәре баҙлап яна, ҡара һөрөңкө һылыу йөҙөнән нурҙар ағыла! Бала сағындағы тип-тигеҙ түше, ҡабарыңҡыланып, ныҡ беленә башлағайны, ә ҡырлы танауы уның мөләйем йөҙөнә матурлыҡ өҫтәй кеүек...

Миңлеғәле, ни әйтергә белмәйенсә, бер үк һүҙҙе ҡабатланы:

— Ғәфү ит!..

— Нимә өсөн? — Ҡыҙ яғымлы йылмайҙы.

— Һине танымағанға... Ҡлубта күргәс, саҡ төҫмөрләнем... Элеккегә ҡарағанда ла һылыуыраҡ булып киткәнһең...

Егеттән маҡталыуына оялып, Хәҙисә башын эйҙе.

— Ҡуйсәле, юҡты...

— Ихлас әйтәм.

— Мин керәйем инде, — тип ҡыҙ ҡапҡаға тартылғайны, егет уның беләгенән тотто.

— Өлгөрөрһөң. Ниңә ҡабаланырға? Мин һине һағынып ҡайттым... Ниңәлер мине ятһынаһың...

Әүәлге мөнәсәбәттәре ағай менән һеңле шикелле булғанлыҡтан, егеттең һоҡланыуына ҡыҙ уңайһыҙланды һәм ҡапыл ғына тыйнаҡланды. Икегә бүлеп үрелгән ҡалын сәс толомдарын, ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәй, бер артҡа, бер алға күсерҙе. Шунан китергә теләне. Ләкин Миңлеғәле уны был юлы ла ебәрмәне. Ҡыҙ тәүҙә тартҡылашты. Аҙаҡтан, егет бик ныҡышҡас, тынысланды.

Улар был төндө Штил яры буйында уҙғарҙы. Берберенән айырылышыр мәлдә Бүләк урманындағы ҡарт имән эргәһендә кис тағы осрашырға килештеләр. Әммә уларға башҡаса осрашырға, танһыҡтары ҡанғансы һайрашырға, бер-береһенә эс серҙәрен асырға насип булманы. Ауыл халҡы йоҡонан уянырға ла өлгөрмәне, улар төндө бергә уҙғарыуҙары хаҡындағы хәбәр, әллә нисәмә тапҡыр арттырылып, кешеләргә таралырға өлгөрҙө. Ләститтең көсәйгәндән-көсәйә барыуына, коммунист исемен йөрөткән Миңлеғәлене ҡәһәрләгән ауыл ҡарттарының һәм күршетирәләге ҡатын-ҡыҙҙың хөсөтөнә бирелеп, Хәҙисәнең әсәһе үҙен мәсхәрәләнгән әҙәм аҡтығы кеүек хис итте. Шул көндән башлап ҡыҙын, тышҡа сығармайынса, өйҙә генә тотто.

Өҙөлөп һөйгән ҡыҙын күрә алмай интеккән Миңлеғәләләнең ашағаны — аш, ялы — ял, йоҡоһо йоҡо булманы. Буш ваҡытын нисек итеп уҙғарырға белмәйенсә, аптырап, ҡош-ҡортҡа, төрлө бөжәктәргә, емеш-еләккә бай Бүләк яланына барҙы. Әммә сабый сағынан таныш, һоҡландырғыс тәбиғәт ҡосағында ла был юлы йәм тапманы. Хәҙисә хаҡында уйланыуҙан туҡталмайынса, көнө буй аңҡы-тиңке йөрөүҙән ялыҡҡас, ауылға боролдо. Ҡамила апаһы ҡайнатҡан сәйҙе эскәндән һуң да, ауылда имеш-мимеш һүҙҙәрҙең таралыуына эсе бошоп, ғүмерендә беренсе мәртәбә йөрәген яулаған ҡыҙ мөхәббәтенә нахаҡтан тап төшөрөлөүенә һәм бысраҡ өйөлөүенә ҡайғырҙы.

Миңлеғәле төрлөсә баш ватты. Ҡис Хәҙисә йәшәгән өй янына барҙы. Ул тирәлә бер кем дә күренмәгәс, урам буйлап атланы. Ғәләметдин байҙан ҡалған ташландыҡ

хәлдәге йылҡы аҙбары ҡаршыһындағы веялка янында йоҡлап ятҡан кешене күреп, шатланды. Төрткөләп-төрткөләп уята алмағас, уны ашлыҡ иләгенә ҡуша бәйләп, яҡындағы ҡыйыҡһыҙ мунса өҫтөнә мендереп ҡуйҙы. Иртәгеһе көндө «бисмилла» әйтергә онотҡан тиле Йыһаншаны шайтан мыҫҡыл иткән, күктә осороп йөрөткән-йөрөткән дә иләккә сырмап, мунса башына төшөргән имеш, тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә таралды. Ләкин был ваҡиға Хәҙисә тураһындағы ғәйбәтте онотторманы.

Яратҡан ҡыҙын ҡасан да булһа күреренә өмөтөн өҙгән Миңлеғәле хат яҙҙы һәм уны Хәҙисәгә тапшырыу өсөн Ғәлимә һеңлеһен күршеләренә ебәрҙе. Нindәйҙер һылтау табып, Хәҙисә эргәһенә барған Ғәлимә ағаһының йомошон тырышлыҡ менән башҡарҙы.

Улар аҙна буйы хатлашты.

Хеҙмәт иткән хәрби часына ҡыҙҙы алып китергә теләк белдереп, Миңлеғәле сираттағы хатын яҙҙы. Япа-яңғыҙы тороп ҡаласаҡ әсәһен йәлләүҙән дә бигерәк, намыҫын юғалтыуҙан, мәсхәрәгә ҡалыуҙан, артабанғы яҙмышынан уңмаһа, ғүмерс буйы ғазапланасағынан ҡурҡып, Хәҙисә был мәсьәләне бер аҙнаға кисектереүҙе үтенде.

Ҡыҙҙың ҡыйыуһыҙлығына Миңлеғәленең асыуы ҡабарҙы. Бер ни тиклем тынысланғас, Хәҙисәнең хаҡлы икәнлеген аңланы.

«Элекке замандағы шикелле ҡыҙ урлау миңә, эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының эскадрон командирына, коммунисҡа хурлыҡ! Бындай ҡыланышым өсөн башымдан һыйпамаясаҡтар», — тип үҙен-үҙен йыуатҡан Миңлеғәле китергә йыйналды. Уны оҙатырға килеүселәр араһында Хәҙисәнең юҡлығы, Ғәлимә һеңлеһе унан килтергән хат менән генә ҡәнәғәтләнергә мәжбүрлеге үтә аянысла ине.

— Ауылға йәнә ҡасан ҡайтаһың? — тип кемдер һорағас, тауышы әллә ни моңло булмаһа ла, Миңлеғәле үҙе сығарған йыр менән яуап ҡайтарҙы:

Һалдат булдым, һары ҡайыш
Быуҙым мин билдәремә.
Ҡара сәстәрем ағарғас,
Ҡайтырмын илдәремә...

Ун ете йыл элгәре мәрәкәләп йырлаған ошо йырҙың һүҙҙәре ысынға тура килер тип башына ла килтермәгәйне Миңлеғәле.

«Ҡырҡ өс йәшем тулып, сөм-ҡара сәстәремдең күбеһе ағарғанда ғына тыуған төйәгемә ҡабат ҡайтып киләм», — тигән уй менән ул ҡара-ерән ҡашҡаһын урамға табан ыңғайлатты. Штил аша һалынған күперҙән сығып, һөҙәк

яр тәңгәлендәге иҫке ихаталарҙы уҙғас, ике тәҙрәһе урам яғына, икеһе картә эсенә ҡараған бәләкәй генә ағас өйгә боролдо. Унын серегән стеналары яртылаш ергә һеңгән, һалам менән ябыулы ҡыйығы күп йылдарҙан бирле төҙәтелмәгән, кәртә-ҡаралтыһы таный алмаçлыҡ булып туҙған.

Тыуған өйөнә яҡынлашҡан һайын[1], ауыр тойғоларҙы ныҒыраҡ кисергән Миңлеғәленең йөрәге әрнене.

«Өйөбөҙ ошондай хәлдә икәнлеген һуғышҡа тиклем белгән булһамсы! Был хаҡта ниңә хәбәр итмәне икән Ҡамила апайым? Ата-әсәйем йортон рәтләрҙәй әмәлен табыр инем, моғайын. Хәҙер, бөтә ил яҙмышы ҡыл осонда саҡта, өй ҡайғыһымы ни?..»

Миңлеғәле, ҡара-ерән ҡашҡаны йорт мөйөшө тәңгәлендә туҡтатып, эйәрҙән төштө. Теҙгенде Байдәүләтовҡа тотторҙо ла, бер һүҙ өндәшмәйенсә, яҡтауы ҡыйшайған ишеккә табан атланы.

Иҫке-моҫҡоға төрөнөп, япа-яңғыҙы һикелә ятҡан Ҡамила апаһы, ишек шығырлап асылыуын ишеткәс, баш ҡалҡытып ҡарамайынса, ишетелер-ишетелмәç тауыш менән һораны:

— Күрше, һинме?

— Был — мин, апай!

Миңлеғәлене тауышынан таныған Ҡамила, көтөлмәгән ҡыуанысынан ауырыуын да онотоп, түшәгенән күтәрелде.

— Һине күрәһе көндәрем бар икән, туғаным! — тип ул кипкән ҡаҡса бармаҡтары менән Миңлеғәленең яурынынан һыйпап һөйҙө лә, һыҙланыуын белгертмәçкә тырышып, һемәгенән аҡҡан иҫке самауырҙа сәй ҡайнатырға кереште.

Үҙе килтергән аҙыҡ менән сәй эскәндә, Миңлеғәле яғымлы йылмайҙы.

— Э-эх, тыуған яҡтың сәйе лә тәмле шул!

— Беҙҙә һыу йомшаҡ, — тине Ҡамила.

— Һыуға үҙең йөрөйһөңмө?

— Юҡ, күрше ҡатын килтерә. Бер көйәнтә һыу минең яңғыҙыма ике-өс көнгә етә.

— Күптәнән сирләйһеңме?

— Әллә ни сирләмәйем былай, — Ҡамила хәлен белгертергә теләмәне. — Билем ауырта... Ҡар аҫтындағы игенле урғанда һалҡын тейҙе, ахырыһы...

— Апай, мин һине больницаға һалырмын. Өйөңдө, кәртә-ҡаралтыңды ла берәйһе менән һөйләшеп төҙәттерермен, — тип Миңлеғәле кеçәһенән аҡса сығарып бирҙе.

---

[1] Бала сағын уҙғарған Шайморатовтың тыуған өйө хәҙер юҡ. Ошо йорт урынына Биштәкә урта мәктәбе һалынған.

Үҙе хаҡындағы хәстәрләнеүгә уңайһыҙланған Ҡамила Миңлеғәленән Мәскәүҙәге Ольга килене менән Октябрина ҡыҙының хәлен һораша ғына башлағайны, ваҡытлыса колхоз идараһы председателе вазифаһын башҡарған сулаҡ Суфиян Бәҙретдинов килеп инде. Уның артынса бүтәндәр ҙә берәм-һәрәм йыйналды.

Ауылда йүнле ир заты ҡалмауы, ҡыйынлыҡтар менән урып һуғылған игендең һәр бөртөгө тиерлек хөкүмәткә тапшырылыу сәбәпле, бала-саға картуф, картуф һабағы менән туҡланыуы хаҡында белгәс, уларға бына хәҙер үк ни менәндер ярҙам итә алмауына полковник Шайморатовтың эсе бошто, үҙен ниндәйҙер булдыҡһыҙ һымаҡ тойҙо, ирекһеҙҙән ҡылысын һындырғандай булды.

Миңлеғәле ауылдаштарын фронт хәбәрҙәре менән йыуата алманы. Һуғыштың ҡыҙғандан-ҡыҙа, көсәйгәндән-көсәйә барыуын, гитлерсыларҙың йыртҡыстарса ҡыланыуын, үҙенең ошоғаса генерал Доваторҙың атлы корпусында полк командиры булып, Мәскәү өсөн барған алыштарҙа ҡатнашыуын һөйләне.

Ауылдаштары менән иркенләп ултырып әңгәмәләшергә Миңлеғәленең ваҡыты булманы. Өфөләге берәй больницала урын барлығын асыҡлағас та Ҡамила апаһына кеше ебәрәсәген әйтеп, ул ата-әсәһенең ҡәберен һәм ауыл тирәһендәге ерҙәрҙе ҡарарға теләне.

— Ниңә ҡабаланырға? Бөгөнгә ял ит, туғаным. Булә к урманы тирәһендәге ерҙәр менән атай-әсәйең ҡәберен күрергә иртәгә лә көн бөтмәгән, — тине колхоз идараһы председателе. — Һөйләшеп ултырыр инек...

Был ғәзиз ерҙең һәр осмото Шайморатов өсөн ҡәҙерле һәм изге икәнлеген ауылдаштарына нисек төшөндөрөргә? Унда уны Хәҙисәһе көтөп торған һымаҡ!..

Асыҡ ялан уртаһындағы ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс, үҙенә генә билдәле уй-тойғоларға бирелеп, Шайморатов ап-аҡ ҡарға күмелеүле тирә-яҡты оҙаҡ күҙәтте. Бик ныҡ һирәкләнгән Булә к урманы юҡ тиерлек хәлгә еткерелгәйне. Тимәк, Хәҙисә лә юҡ. Ул, үҙендә тоҡанған йәшлек хистәренән уңайһыҙланғандай:

— Ауыл тирәһендәге тәбиғәт күренеше мин киткәндән бирле таный алмаҫлыҡ булып үҙгәргән, — тип яманһыу күрһәндә лә, ҡара-ерән ҡашҡаһын ауылдаштарынан бер аҙ ситтәрәк торған Байдәүләтов яғына йүнәлтте. — Йә, ҡуҙғалабыҙмы?

— Ҡуҙғалабыҙ, иптәш полковник, — тине Зәки, әҙерлек белдереп.

Ҡамила апаһы менән һаубуллашып, уға тиҙҙән кеше ебәреп, больницаға һаласағы тураһында тағы бер ҡат

иҫкәртте лә, полковник Шайморатов атына атланды һәм район үҙәгенә табан һуҙылған сана юлы буйлап юрттырҙы. Унан ҡалмай эйәреп барған колхоз председателе:

— Райкомдың беренсе секретары итеп Сәлимйәнованы ҡуйғандары бирле, беҙгә пакуй бөттө, — тип ҡуйҙы. — Әле тегенеһен, әле мыныһын эшләтмәгәнһең тип мыжып, теңкәне ҡорота. Ҡолхоздағы бөлгөнлөктө күрмәй, ҡыҫа ла ҡыҫа! Аптырағас, председателлектән төшөрөүен һорап ғариза яҙғайным... Ҡайҙа ул бушатыу! Ҡүмәк кешеләр алдында пыр туҙҙырып әрләне-әрләне лә, һуғышҡа һылтанып, миңә «дезертир» ҡушаматын таҡты, йәнә шулай ҡылanһам, төрмәгә оҙатыу менән янаны. Уҡытыусы сағында апаруҡ йыуаш, баҫалҡы, тыйнаҡ һымаҡ ине. Фронтҡа оҙатылған ире урынына райком секретары итеп ҡуйылғайны, үҙгәрҙе лә ҡуйҙы.

— Эше ауыр бит. Аптырағандандыр, — тине Шайморатов.

— Һуғыш заманында район хужаһына дилбегәне ҡаты тотоу, мужыт, кәрәктер,— тине колхоз председателе теләр-теләмәҫтән ризалашып. — Әммә ул бисә, түрә булғас та, артығыраҡ ҡылана! Райком бюроһына саҡыртҡанда, беҙ, колхоз председателдәре, дер ҡалтыранып барабыҙ. Үҙе ҡушҡан эште ваҡытында үтәмәгән өсөн Сәлимйәнова бергилке мине милицияға тотторop ебәрҙе.

— Ғәйебең булғандыр?

— Урып һуғылған игенде хөкүмәткә тейешле ваҡытҡа тапшыртмауҙа, әрәм-шәрәм итеүҙә ғәйепләне... Ярай әле, исмаһам, мине аҙаҡтан ярлыҡаны. Райкомға саҡыртылған ике колхоз председателен туранан-тура Өфө төрмәһенә оҙаттырҙы.

Һәр саҡ ғәскәри хеҙмәттә булғанлыҡтан, полковник Шайморатов ауыл тормошон, ундағы тәртиптәрҙе белмәй ине. Шулай булһа ла, фронтты аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән тәьмин итеү өсөн барлыҡ көсөн һалған райком секретарының хаҡлы икәнлегенә ул шикләнмәне.

— Минеңсә, Сәлимйәнованың эше колхоз идараһы председателенекенә ҡарағанда ла ҡыйыныраҡтыр, моғайын,— тине Шайморатов, ауыр һулап.— Фронттағы эскадрон, полк командиры юғарынан ебәрелгән берәй бойороҡҡа ҡарата ризаһыҙлыҡ белдерһә, йәки төрлө сәбәптәргә һылтанып, уны ваҡытында үтәп өлгөрмәһә, фашист илбаҫарҙарын Мәскәү эргәһенән ҡыуа алыр инекме? Ундағы ҡаты бәрелештәрҙә унар меңләгән Башҡортостан егеттәре ҡатнашты һәм...

— Энем, ҡуйсы, бындағы хәл менән һуғышты тиңлә-

мә, — тип бүлдерҙе колхоз идараһы председателе, кәпрәйеп.

— Һуғыш барған осорҙа бында ла, фронттағы шикелле, тимер тәртип кәрәк, ағай!

— Э-эх, Миңлеғәле туған... — Башлаған һүҙен әйтеп бөтөрмәгән колхоз председателе, ҡаршы яҡтан килгән һыбайлы ҡатынға күрһәтеп, ишетелер-ишетелмәç тауыш менән шыбырланы: — Ана, түрә бисә үҙе килә ята...

Ҡарамаҡҡа үтә сибек, буй-һыны бәләкәй райком секретары, полковник Шайморатовҡа яҡынлашҡас, үҙе беренсе булып иçәнләште лә:

— Иптәш комдив, был ни тигән эш? Биштәкәгә барышлай һеҙ партия район комитетына һуғылып китергә тейеш инегеҙ! Совнарком председателе иптәш Ваһапов һеҙҙең турала һорашып телефондан шылтырата, понимаешь, ә мин бер ни белмәйем...Былай килешмәй, һис тә килешмәй, яҡташ, — тип шелтәләне.

— Һеҙҙе борсорға теләмәнем.

— Нисек инде «борсорға теләмәнегеҙ?»

— Унан һуң, мин бик ҡабаланам.

— Эйе, Миңлеғәле туған ысынлап та ҡабалана, — тип дөрөçләне колхоз председателе.

Райком секретары, артабан һүҙ көрәштермәйенсә, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командирының йыйырсыҡлы йөҙөнә, ҡашы аçтында тәрән урынлашҡан аҡыллы күҙҙәренә, йәйеңке ауыҙына, киң яурынлы кәүҙәһенә һоҡланып ҡарап:

— Һеҙ, Миңлеғәле туған, оло ҡунаҡ ҡына түгел, беҙҙең оло абруйлы яҡташыбыҙ ҙа! Ҡырмыçҡалы районына килерегеҙҙе алдан белгән булһаҡ, хөрмәтләп ҡаршылаған булыр инек, — тине йомшағыраҡ тауыш менән.

— Шау-шыу ҡубарып ҡаршы алырығыҙҙы белгән өсөн дә, районға ҡайтырымды алдан белгертергә теләмәнем.

Шайморатовтың быңдай мөғәмәләлә булыуҙы оҡшатмауын һиҙеп, райком секретары һүҙҙе икенсе яҡҡа борҙо:

— Оҙаҡҡа ҡайттығыҙмы, иптәш комдив?

— Бына Өфөгә кире ҡайтып барам.

— Ниңә ашығыс?

— Эш көтә... Ҡамила апайҙың хәлен белеп, тыуған ауылымды күрергә генә килдем...

— Район үҙәгенә һуғылмай китергә булдығыҙмы ни?

— Миңә дивизияға йәһәтерәк барырға кәрәк...

Ҡолхоз председателенә ауылда ҡалырға, баçыуҙа ҡар аҙ саҡта иген урыуҙы тиҙләтергә, һәр бөртөк игенде юғалтыуһыҙ йыйҙыртып алыу өсөн барлыҡ көстө тупларға ҡушты ла, Сәлимйәнова атын район үҙәгенә табан борҙо.

Ҡирегә ынғайлаған колхоз председателе алыҫлашҡас та, райком секретарының ҡырыҫ холҡо үҙгәрҙе, ҡаҡса сибек йөҙө лә ҡатындарса яғымлыланды. Ул, ябай ауыл бисәһе шикелле, Шайморатов менән ипле генә һөйләшә башланы.

— Һуғыш ваҡытында район менән етәкселек итеүе ҡыйын, ифрат та ҡыйын, Миңлеғәле Минһажетдинович!

Полковник Шайморатов, ризалашып, баш ҡаҡты.

— Билдәле, еңел түгел... Әммә һеҙҙең кеүек ихтыярлы, көслө, ныҡышмалы райком секретары ауырлыҡтарға бирешмәйәсәк!

Сәлимйәнова көлдө.

— Тыштан батыр, көслө, ғәйрәтле булып күренергә тырышһам да, тыумыштан ҡурҡаҡ, ҡуян йөрәк мин, Миңлеғәле Минһажетдинович! Райком секретары булып һайланғандың беренсе көндәрендә, үҙемдең оялсанлығым, үтә баҙнатһыҙлығым арҡаһында, бик интегә торғайным. Аҙаҡтан, партия өлкә комитеты бюроһына саҡыртылып әрләнә торғас, ҡыйынлыҡ менән булһа ла, талапсанлыҡты арттырырға, уҫаллашырға тура килде.

— Холоҡто ҡапыл үҙгәртеп буламы ни?

— Бик, бик теләһәң, мөмкин икән шул, Миңлеғәле Минһажетдинович! Йәшермәйем, тиҫкәре колхоз-совхоз етәкселәрен тәүҙә ҡулға алыуы еңел булманы. Дәүләткә иген тапшырыу буйынса өҫтәлмә задание алып Өфөнән ҡайтҡас, партия район комитетында кәңәшмә йыйып, һәр хужалыҡҡа яңы задание еткерҙем. «Ҡарлыман» совхозы директоры, бүтән саҡтағыса минең менән иҫәпләшмәйенсә, шау-шыу ҡубарҙы. Уға ҡушылып, ҡалған хужалыҡ етәкселәре лә тауышлана башланы. Ваҡиғаны артыҡ ҡуйыртырға теләмәнем. Тәнәфес иғлан итеп, бүлмәлә «Ҡарлыман» совхозы директоры менән икәүҙән-икәү генә ҡалдыҡ. Аулаҡта ла үҙ һүҙен өҫтөн ҡалдырырға ҭырышып, ул бәхәсләшә башланы. Унан шөрләүемде белгертмәҫкә тырышып, мин ҡаты һөйләштем. Тиҫкәре совхоз директоры менән улай һөйләшеүемдең файҙаһы булмаясағын аңлағас, оялышымдан һәм ҡурҡышымдан эстән генә ҡалтырана-ҡалтырана, өҫтәлгә йоҙроҡлап һуҡтым да, ирҙәр генә әйтә торған яман һүҙ менән һүгендем. Бындай хәлде көтмәгән совхоз директоры, күҙҙәрен аҡайтып ҡарап, урынында шаҡ ҡатты. Мин оторо ярһыным. «Һәүетемсә килешәбеҙме, әллә алышабыҙмы?» — тип асыу менән һорағайным, совхоз директоры бәлйерәп төштө. «Кәрәкмәй, Хөснә Мәжитовна, һәммәһен яҡшы аңланым. Мине, зинһар, ғәфү итегеҙ», — тип башын эйҙе. Шунан аҙаҡ бул-

мәгә саҡыртылған бүтән хужалыҡ етәкселәре лә йомшарҙы, һәм райондағы эш барышы ла яйланды.

Ҡешеләрҙе тупаҫлыҡ, ҡурҡытыу менән тыңлатырға тырышыу зарарлы икәнлеген Шайморатов аңлатҡас, райком секретары ҡыҙарынды.

— Беләм, бүтәнсә мөмкинлек ҡалмағас, ҡалайтаһың,— тип ул аҡлана башланы.

Улар һүҙһеҙ ҡалды.

Тәүге осрашҡанда уҡ Шайморатовҡа юҡ-барҙы һөйләүенә үкенде райком секретары. «Полковник хаҡлы. Кешеләр аң менән эшләгәндә генә уңышлыҡтарға өлгәшергә мөмкин. Минең эш стилем яраҡһыҙ. Ләкин һуғыш ваҡытында башҡаса әмәл юҡ... Шулай ҙа Шайморатов әйткәндәрҙе онотторға ярамай. Ул тәжрибәле, аҡыллы кеше, бушты өйрәтмәҫ...»

Юл сатына еткәс, өҙәңгегә кейҙерелеүле ямалған быйма үксәһе менән һәлмәк кенә юртҡан атының ҡабырғаһына тибәләнә-тибәләнә, райком секретары алға сыҡты.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, район үҙәгенә һуғылып китегеҙ!

— Ғәфү итегеҙ, Хөснә Мәжитовна, ҡабаланам.

— Райкомдың бюро ағзалары һеҙҙе көтә. Улар менән осрашып, фронт хәлдәрен һөйләһәгеҙ, бик файҙалы буласаҡ, — тип бик ныҡышҡан райком секретары полковник Шайморатовты район үҙәгенә алып ҡайтты.

Райком работниктары ысынлап та уларҙы көтә ине.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, иң әүәл ашханаға барып тамаҡ туйҙырҙылар. Шунан һуң ғына райкомда йыйналған кешеләр менән бергә осрашыу уҙғарылды. Сәлимйәнова район хәлдәрен, ә Шайморатов үҙе ҡатнашҡан Мәскәү эргәһендәге һуғыштар хаҡында һөйләне.

Был осрашыу бюро ағзалары һәм райком работниктары өсөн генә түгел, Сәлимйәнованың артабанғы эше өсөн дә файҙалы ине. Сөнки ул ошоғаса иғтибар итмәгән күп нәмәне Шайморатовтан ишетеп белде, кешеләр менән ниндәй мөғәмәләлә булырға өйрәнде.

«Бик грамоталы, аң-белемле икән дивизия командиры! Уның менән бер мәртәбә һөйләшеп ултырыу ғына ла оло һабаҡ һәм фәһемле», — тип уйланы ул.

Полковник Шайморатов, һүҙен йомғаҡлап:

— Район халҡының барыһына ла минән сәләм тапшырығыҙ. Фронтҡа ярҙам итеүҙәре өсөн уларға рәхмәт! Беҙ, һалдаттар, фашистарҙы еңеп ҡайтырға тигән антыбыҙҙы намыҫ менән үтәрбеҙ, — тине.

Райком секретары, уның менән теләктәшлек белдереп, баш ҡаҡты:

— Беҙ ҙә һынатмабыҙ, Миңлеғәле Минһажетдинович. Фронтовиктар ышанысын аҡларбыҙ!

## III

Полковник Шайморатов, Өфөгә һуғылмайынса, тура 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы урынлашҡан ергә китте. Ҡасан килерен алдан хәбәр итмәгәс, уны бер кем дә ҡаршыламаны.

Тимер юл станцияһынан алыҫ булмаған ике ҡатлы ағас йортта урынлашҡан дивизия штабына етәрәк, Шайморатов уның тирәһендәге һалдаттар менән командирҙарҙың ҡыланышын ситтән күҙәтеп торҙо.

«Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итәсәк кешеләр йыйналғанмы бында? Уларҙа хәрби дисциплина тигән нәмәнең әҫәре лә тойолмай. Хатта лейтенант һәм өлкән лейтенанттар ҙа буй-һындары, ҡыланыштары менән башҡаларҙан айырылмай», — тип уйлап, ул тирә-яҡты күҙәтте. Буласаҡ яугирҙарҙың өҫтөндәге кейем төрлөсә. Берәүҙәрҙең башында ҡолаҡсын бүрек, өҫтөндә көпө, аяҡтарында ямаулы быйма; икенселәренең аяҡтарында тула ойоҡ, тәрән ҡуңыслы калуш, сабата, өҫтәрендә сәкмән йәки тиртун...

Дивизия штабы алдындағы шау-шыулы күренеште йәкшәмбе көнөндәге Өфө баҙарына оҡшатып, Шайморатовтың эсе бошто: «Башҡорт кавалерия дивизияһы сафына алынған былдай «кавалеристар» менән ҡалайтырмын икән? Уларҙы хәрби тәртипкә күндереүе һәм ысын воиндар итеп тәрбиәләүе еңел булмаясаҡ...»

Дивизия штабының беренсе һәм икенсе ҡаты ла хәрби хеҙмәткә яңы алынған кешеләр менән шығырым тулы ине. Улар үҙ-ара шырҡ-мырҡ мәрәкәләшә, көлөшә, күңел аса. Икенселәре ҡурай тарта, йырлай, таҡмаҡ әйтә. Өсөнсөләре һөйгән йәрҙәренән, бала-сағаларынан айырылып китеүгә зарлана. Дүртенселәре фронттағы хәлдәр менән ҡыҙыҡһына...

Ҡискә һарҡҡан көн яҡтыһы төшмәгән коридорҙың уртаһына еткәс, хәрби хеҙмәткә алынғас та әүәлге холҡонан айырылмаған егеттәрҙе өйрәтелмәгән тай-тулаҡҡа оҡшатҡан Шайморатов туҡталыбыраҡ торҙо.

Ишек тәңгәлендә өйөлөшөп тороусылар, таныш булмаған полковникты күргәс, шып-шым булды.

— Штаб начальнигы ҡайһы бүлмәлә? — тип һораны Шайморатов.

Коридорҙың арғы осонда тороусы хәрбиҙәргә күрһәтеп, егеттәр дәррәү яуап ҡайтарҙы:

— Ана, унда!
— Командирҙар торған тәңгәлдә!
— Бөтә нәмәне шул тәңгәлдәге бүлмәлә йомошлайҙар!..
Егеттәр күрһәткән бүлмә тәңгәлендә тороусы командирҙар, полковник яҡынлашыуын күреп, честь бирҙе. Шул минуттан файҙаланған лейтенант бүлмәгә сиратһыҙ-ниһеҙ инергә булғайны, Шайморатов уның юлын бүлде.
— Туҡта!
Лейтенант, полковник ҡаршыһында һынын ҡатырып, уға ҡараны.
— Тыңлайым, иптәш полковник!
— Фамилияғыҙ нисек?
— Хөсәйенов!
— Бында һеҙ кем?
— Әлегә бер кем дә түгел, иптәш полковник!
— Ҡайҙан килдегеҙ?
— Госпиталдән...
— Фронтовикмы?
— Так точно, иптәш полковник!
— Гражданкала ниндәй эш башҡарҙығыҙ?
— Мин әлекке нефтсе, иптәш полковник! — Шайморатовтың асыулы ҡарашы менән осрашҡан лейтенанттың йөҙө бөрсөк-бөрсөк тир тамсылары менән сыбарланды.
— Фронтта кем инегеҙ?
— Уҡсы взвод командиры инем...
— Бында ҡасан килдегеҙ госпиталдән?
— Бөгөн, иптәш полковник!
— Фронтовик, строевой взвод командиры була тороп, армиялағы дисциплинаны оноттоғоҙмо?
— Ғәфү итегеҙ, иптәш полковник, ғәйеплемен.
— Армияла нисә йыл?
— Һуғыш башланғандың беренсе көнөндә алындым хәрби хеҙмәткә.
— Ә мин Ҡыҙыл Армия сафында егерме ете йыл. Үҙемдән юғары званиелы командир асҡан ишектән бер ҡасан да ингәнем булманы...
— Мин һеҙҙе абайламаным, иптәш полковник! — Ҡыҙарынып-бүртенгән лейтенант Хөсәйенов, аҡланыуы мәғәнәһеҙ икәнлеген аңлап, дөрөҫөн әйтергә мәжбүр булды: — Ҡазармаға йәки фатирға урынлашыуы мөмкин түгел, иптәш полковник! Шуға торабыҙ бында...
— Ҡалғандар ҙа торлаҡһыҙмы?
— Башҡаларҙы белмәйем, иптәш полковник!
Хөсәйеновтың өҫтөндәге иҫке һалдат шинеленә, бүркенә, билендәге брезент ҡайышҡа, ботинка өҫтөнән сырмалған обмоткаға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, Шайморатов бойорҙо:

— Лейтенант, торлаҡ хаҡында аҙаҡтан хәстәрлек күрерһегеҙ. Ә хәҙер, өҫ-башығыҙҙы рәткә килтерегеҙ ҙә, коридорҙа һәм дивизия штабы тирәһендә тейешле тәртип урынлаштырығыҙ!

Хөсәйенов, әҙерлек белдереп, честь бирҙе.

— Есть, өҫ-башымды рәтләргә һәм дивизия штабында тейешле тәртип урынлаштырырға!

— Бында бер кем дә ҡалырға тейеш түгел!

— Бойороғоғоҙ үтәлер, иптәш полковник, — Хөсәйенов тыҡ итеп боролдо ла коридорҙа тороусы кешеләр араһына инеп юғалды. Урам яғындағы тәҙрә тәңгәленә еткәс, ул йәнә асыҡ урынға сыҡты. Брезент ҡайышы аҫтына ҡулын тығып шинеленең алғы яғын шымартҡас, яғаһындағы «кубик»тарын рәтләне лә коридорҙағы кешеләргә ҡысҡырып өндәште:

— Барығыҙға ла дивизия штабынан сығырға һәм үҙ частарығыҙға таралышырға бойорам!..

Коридорҙа ҡасан тәртип урынлаштырылыуын көтөргә теләмәне полковник Шайморатов. Хөсәйенов кешеләрҙе тышҡа ҡыуып сығара башлағас та, ул ишек алдында сиратта тороусылар төркөмө араһынан уҙып, тәмәке төтөнө тулған иркен бүлмә ишеген асты. Полковник күренгәс тә, бүлмәләге командирҙар, урындарынан һикерешеп тороп, честь бирҙе.

— Здравия желаем...

Шайморатов, ишек янында бер аҙ туҡталып торғандан аҙаҡ, оҙон өҫтәл артында тороусы өлкән лейтенантҡа яҡынлашты.

— Бында ҡайһығыҙ дивизия штабы начальнигы?

— Дивизия штабы начальнигы әлегә тәғәйенләнмәгән, иптәш полковник, — тине өлкән лейтенант, һынын ҡатырып.

— Һеҙ ниндәй вазифа үтәйһегеҙ?

— Башҡорт кавалерия дивизияһы штабы начальнигы ярҙамсыһы эшен башҡарам, иптәш полковник!

— Ә мин дивизия командиры, — тине Шайморатов ҡәтғи тауыш менән.

Бүлмә тулы хәрбиҙәр сығып киткәндән һуң, дивизия командиры эргәһендә яңғыҙы ҡалған өлкән лейтенант аҡлана башланы:

— Ғәфү итегеҙ, иптәш полковник! Һеҙҙе районға киткән, имеш, тигәйнеләр... Бөгөн килерегеҙҙе белһәк...

Өлкән лейтенанттың аңлатмаһын тыңларға теләмәгән Шайморатов, йөҙөн сырылтып, бүлдерҙе:

— Ҡәрәкмәй!..

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты.

Бындай тәртипһеҙлеккә штаб начальнигы ярҙамсыһы ғына ғәйепле түгел икәнлеген аңлап, дивизия командиры өлкән лейтенантҡа бәйләнеүҙе мәғәнәһеҙ һананы. Ул, өндәшмәйенсә, тәҙрә тәңгәленә барып баҫты. Лейтенант Хөсәйеновтың йүгереп йөрөп тышта тәртип урынлаштырыуын һәм штаб тирәһендә кешеләр ҡалмауын күргәс, Шайморатов күкрәк тултырып һуланы.

— Урамда ҡайһы полк кешеләре ине?

Дивизия командирының асыуы тиҙ баҫылыуына ҡыуанған өлкән лейтенант, һынын ҡатырып, йәнә кәүҙәһен турайтты.

— Ҡайһы полктан икәнлектәре билдәһеҙ, иптәш полковник!

— Полктарҙа занятиелар ойошторолғанмы?

— Ойошторолоуға ойошторолған да... Хәрби дисциплина булмағас, кешеләр көнө буйы ошо тирәлә урала.

— Бында уралыуҙарының сәбәбе ниҙә?

— Райондарҙан килә-китә йөрөгән туған-тыумасаларын йәки белеш-таныштарын осратырға киләләр, иптәш полковник!

— Тәртип урынлаштырырҙай командирҙар юҡмы ни дивизияла?

— Ундай командирҙар күп, бик күп, иптәш полковник!

— Күп булғас, ниңә тәртип юҡ?

— Тәртип буласаҡ, иптәш полковник! Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторола башланыуына ике ай самаһы ғына бит әле.

— Ике ай ваҡытта тәртип урынлаштырыуы мөмкин түгел инеме? — Урамдағы күренеште, лейтенант Хөсәйеновтың бер төркөм кешеләрҙе ҡысҡырып туҡтатыуын, асыулы һелтәнеүен, башҡа командирҙарҙың да уға тәртип урынлаштырыуҙа ярҙамлашыуына иғтибар итеп, Шайморатов тәҙрә яҡтауына яурыны менән терәлде. — Барлыҡ бәлә ваҡыт наҡыҫлығында түгел, ә дивизия штабы һәм командирҙар ғәмһеҙлегендә!

— Полктарҙа күп командирҙар етешмәй, иптәш полковник!

— Дивизия штабы тирәһендә тәртип булдырыу, һаҡсылар ҡуйыу өсөн көс кәрәкме? Ана, ҡарағыҙ, лейтенант Хөсәйенов яңғыҙы тышта тәртип урынлаштыра, ә һеҙ ваҡытты бушҡа уҙғараһағыҙ!

Ниндәй лейтенант хаҡында һүҙ барыуын төшөнмәйенсә, аптырап, өлкән лейтенант яурынын йыйырҙы.

— Дивизия штабында мин бик тә бәләкәй кеше, иптәш полковник!

— Оло дәрәжәле командирҙарҙан кемдәр бар?

— Дивизияның политбүлек начальнигы дивизион комиссары иптәш Абдуллин менән ваҡытлыса дивизия командиры вазифаһын башҡарыусы...

— Улар әле ҡайҙа?

— Полктарҙа йөрөй торғандарҙыр. Уларҙы саҡыртып бирәйһен ебәртәйемме? — тип өлкән лейтенант урынынан ҡуҙғалғайны, Шайморатов уны туҡтатты.

— Кәрәкмәй!

— Хәбәр итмәгән өсөн асыуланмаҫтар микән?

— Өлкән лейтенант, һеҙгә хәрбиҙәрсә һөйләшергә һәм үҙегеҙҙән оло дәрәжәле командирҙарға хәрби устав ҡушыуы буйынса мөрәжәғәт итергә өйрәнергә ваҡыт, — тип ҡаты иҫкәртте лә, тимер юл станцияһы тирәһендәге йорттарҙа һәм яҡындағы ауылда урынлашҡан полктарға барырға булды Шайморатов.

Ул ишектән сығырҙан алда ғына штаб начальнигы ярҙамсыһы бүлмәһенә хәрби һәм штат кейемендәге бер төркөм кеше килеп инде. Алдағыһы, шәп килеүҙән тыны ҡурылып аһылдай-аһылдай, дивизия командирына честь бирҙе.

— Политбүлек начальнигы Абдуллин!

Уның артынса башҡалар ҙа берәм-берәм дивизия командирын үҙҙәре менән таныштырып сыҡтылар:

— Икенсе полк командиры майор Нафиҡов!

— Өсөнсө полк командиры майор Макаев!

— Беренсе кавалерия полкы комиссары Әлибаев!..

Күкрәгенә СССР Верховный Советы депутаты значогын таҡҡан Сәғит Әлибаевтың Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссары булып эшләүе хаҡында ишетеп белгәнлектән, Шайморатов уға һынаулы ҡараш ташланы.

— Һеҙҙең полк комиссары булыуығыҙ минең өсөн ҡыуаныс, иптәш Әлибаев, — тине лә күҙ ҡарашын политбүлек начальнигына күсерҙе:

— Иптәш Абдуллин, был подразделениеға килгәнгә саҡлы һеҙ ниндәй эш башҡарҙығыҙ?

— ВЛКСМ Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары инем, иптәш комдив!

Полк командирҙарының да ошоғаса ҡайҙа хеҙмәт итеүҙәрен һорашып белгәс, полковник Шайморатов күҙ ҡарашын Абдуллиндың тут баҫҡан оҙонса йөҙөнә ҡабаттан йүнәлтте.

— Беренсе полк әлегә командирһыҙмы?

— Беренсе полкта ваҡытлыса мин командир,— тип йыуантаҡ, төпөш егет алға сыҡты.

— Фамилияғыҙ нисек?

— Ҡапитан Шәмсетдинов, иптәш комдив!

— Хәрби хеҙмәткә алынғанға тиклем кем булдығыҙ?

— Районполминзагта эшләнем.

— Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итмәнегеҙме әлгәре?

— Юҡ!

Шайморатов шымыбыраҡ торҙо.

— Дивизияның дөйөм хәле нисек?

— Һәйбәт, иптәш комдив. Кешеләрҙең кәйефе күтәренке. Барыһы ла йәһәтерәк фронтҡа китергә һәм немец-фашист илбаҫарҙарын ҡыйратырға ашҡына, — тип яуап ҡайтарҙы Абдуллин.

Политбүлек начальнигы әйткәнде дөрөҫләп, бүтәндәр ҙә ихлас һүҙгә ҡушылды.

— Егеттәр фронтҡа ынтыла!

— Фашистарға ҡарата уларҙың нәфрәте көслө!..

Полковник Шайморатов, улар менән ризалашмайынса, баш сайҡаны.

— Егеттәр хаталана... Фашистарға ҡаршы йөҙгә-йөҙ килеп алышырға теләк белдереү, нәфрәтләнеү һәм ҡыйыулыҡтар күрһәтергә ашҡыныу ғына етмәй, иптәштәр!.. Һуғыш үтә ҡатмарлы, үтә ауыр шарттарҙа бара. Ул «ура» ҡысҡырып дошманға ҡаршы ябырылыу ғына түгел, — тине лә, бер аҙ шымып торғандан һуң, ҡабаланмай ғына төшөндөрҙө: — Беҙгә иң әүәл дивизияла тимер дисциплина булдырыу мөһим. Унан аҙаҡ, ярты йыл ваҡыт эсендә тупланған һуғыш тәжрибәһенән сығып, һәр ҡыҙылармеецты, һәр командирҙы ҡыҫҡа, бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә һуғыш оҫталығына өйрәтергә кәрәк. Шунһыҙ дошманды еңеү мөмкин түгел!

— Башҡорт егеттәре ауырлыҡтарға бирешмәйәсәк, иптәш комдив! Улар һыбай йылғыр саба, ҡылыстары менән дә оҫта һелтәнә, — тине Шәмсетдинов, ҡупырынып.

Һуғыш ҡатмарлылығын күҙ алдына ла килтерә алмаған йәш егет менән бәхәсләшеүҙе мәғәнәһеҙ һанап, полковник Шайморатов бойорҙо:

— Полктар менән таныштырығыҙ!

— Тәүҙә фатирға урынлашырға теләмәйһегеҙме, иптәш комдив? — тип һораны Абдуллин.

Уның тәҡдимен Әлибаев та хупланы:

— Тамаҡ туйҙырып алыу ҙа зыян итмәҫ ине, иптәш комдив! Ҡайыш аҫты күптән бушаны.

Башҡалар ҙа бар үк фекерҙә икәнлеген белгәс, Шайморатов ҡаршылашманы.

— Ярай. Ас йөрөүе ысынлап та килешмәҫ, ә фатирға урынлашыу ҡасмаҫ, — тип ишеккә йүнәлде. Коридорға сыҡҡас, ул япа-яңғыҙы көтөп торған лейтенант Хөсәйеновты осратты.

— Тәртип урынлаштырылдымы?

— Так точно, иптәш дивизия командиры! Һеҙҙең бойороғоғоҙ тулыһынса үтәлде, — тип лейтенант Хөсәйенов рапорт тапшырҙы.

— Рәхмәт!

— Советтар Союзына хеҙмәт итәм!

— Взвод командиры вазифаһын башҡарғанға саҡлы, дивизия штабы ярҙамсыһына булышығыҙ! Шунда үҙегеҙҙең торлаҡ мәсьәләһен дә бергә хәл ҡылырһығыҙ, — тине полковник Шайморатов.

— Есть. Китергә рөхсәт итегеҙ, иптәш комдив?!

— Барығыҙ!

Етеҙ хәрәкәт менән өтә баҫып киткән лейтенант Хөсәйенов күҙҙән юғалғас, ярҙамсыларын эйәрткән полковник Шайморатов аулағайып ҡалған коридор буйлап атланы.

Бергә хеҙмәт итәсәк иптәштәре менән тәүге осрашыуҙа уҡ уртаҡ тел табырға, эскерһеҙ асыҡ һәм талапсан булырға тырышып, дивизия командиры лейтенант Хөсәйеновты ниндәй шарттарҙа осратыуы хаҡында һөйләне.

— Полктарҙа, эскадрондарҙа һәм взводтарҙа тимер дисциплина булдырырға тейешбеҙ икән, фронтовик лейтенант Хөсәйенов кеүектәргә таянып эш итергә кәрәк. Дивизияла баш-баштаҡлыҡ, командирҙар менән иҫәпләшмәү күҙгә салына. Бында анархия хөкөм һөрә. Дивизия штабы тәңгәлендәге бөгөнгө буталышҡа ҡарап, ғәжәпкә ҡалдым. Был ниндәй хәл? Ни өсөн кешеләр үҙҙәренә урын тапмай? Улар менән әлегәсә ни өсөн занятиелар уҙғарылмай?

— Боецтар менән занятиелар ойошторолған. Занятиелар бөткән ваҡытҡа тура килгәнһегеҙ, иптәш полковник,— тип аңлатты полк командиры майор Нафиҡов.

— Занятиелар төштән һуң уҙғарылмаймы ни? — полковник Шайморатов ҡаш аҫтынан томрайып ҡараны. Уның һорауына яуап ҡайтарыусы табылмағас, ҡаты иҫкәртте: — Дисциплинаны ҡырҡа нығытырға, ҡыҙылармеецтарҙың teләһә ҡайҙа аҙып-туҙып йөрөүен бөтөрөргә, занятиеларҙы таңдан киске ҡараңғыға саҡлы уҙғарырға! «Подъем»дан «отбой»ға саҡлы кавалеристарҙың бер генә минутын да әрәмгә уҙғармаҫҡа! Политик уҡыуҙарҙы, практик күнегеүҙәрҙе һәм башҡа занятиеларҙы расписание, график буйынса теүәл уҙғарырға!

— Эште юлға һалырбыҙ, иптәш комдив, — тине политбүлек начальнигы Абдуллин.

Полковник Шайморатов артабан атланы. Бейек ҡойма буйында аттар менән аҙапланған Байдәүләтов Зәки тәңгәленә еткәс, аҙымын яйлатты.

— Нимә эшләйһең?

— Аттарға һоло ашатам, иптәш полковник!

— Ҡайҙан һоло алдың?

— Ошо егет бирҙе, — тип Байдәүләтов үҙе эргәһендәге ҡара мыйыҡлы егеткә ымланы.

— Ә ул һолоно ҡайҙан алған?

— Үҙ атымдыҡын бүлеп килтерҙем, иптәш полковник. Хайуанды ашатыу ғәйепме ни? Ҡасанан бирле астар бит, — тип мыйыҡлы кеше ҡара-ерән ҡашҡаның муйынынан һыйпап һөйҙө. — Шәп ат! Теле булмаһа ла яҡшылыҡты аңлай торған мәхлүк!

Полк командирҙары бер-береһенә ҡарашып көлөшкән саҡта ла Шайморатовтың етди йөҙө үҙгәрмәне.

— Минең коновод булырға теләйһеңме?

— Был һинең атыңмы ни?

— Эйе.

— Мынауҙай шәп ызбурыйлы атҡа менеп йөрөүсе иң оло командирыбыҙ икәнһең! — Мыйыҡлы кеше, ҡәнәғәт йылмайып, теләр-теләмәҫтән генә ризалыҡ белдерҙе: — Ярар, миңә ни кем атын ҡараһам да барыбер. Тик беҙҙең эскадронныйҙан рөхсәт кәрәгер.

— Дивизияға эскадрон командиры хужамы әллә?.. — тип башлаған Нафиҡовты Шайморатов ашығыс бүлдерҙе:

— Ҡәрәкмәй, ҡыҙылармеец хаҡлы! Командирығыҙ менән аҙаҡтан килешербеҙ. Әлегә ошо ат хаҡында хәстәрлек күрергә!

— Булдырабыҙ уны, ағай!

— Тик миңә Өфөгә ҡайтып китергә рөхсәт итегеҙсе, иптәш полковник? — тип һораны Байдәүләтов.

— Рөхсәт итәм... Тәүҙә беҙҙең менән барып тамағыңды туйҙыр!

Байдәүләтов ҡаршылашманы.

«Был егеттәрҙе ысын һуғышсы итеү өсөн күпме тырышлыҡ, көс һәм тир түгергә тура киләсәк», — тип уйланы Шайморатов.

Ҡүмәк кешеләр ҡамауында ҡайҙалыр киткән яңы хужаһына ҡолаҡтарын ҡарпайтып ҡарап ҡалған ҡара-ерән ҡашҡа йүгән ауыҙлығын сылтыратып һелкенде лә алдындағы һолоға ҡалын ирене менән ҡабаттан үрелде.

Эңер етеп тирә-яҡ ҡараңғыланғанда мыйыҡлы кеше уны үҙе менән алып китте. Ҡүмәк аттар менән шығырым тулы оло кәртә эргәһендәге айырым аҙбарға индереп бәйләгәс, һыртындағы эйәрҙе һалдырып, өҫтөнә септә япҡас, хуш еҫле бесәнде ҡара-ерән ҡашҡаның алдына килтереп һалды.

— Аша, малҡай, аша! Аҙаҡтан, тиреҥ бер аҙ ҡатҡас, мәкегә апарып һуғарырмын!

Тамағы бик ныҡ кипкән ҡара-ерән ҡашҡа, теләр-теләмәҫ кенә бесән ашаған ыңғайҙа күрше кәртә эсендәге күмәк аттарҙы күҙәтеп, дөбөр-шатыр сабышып көтөүҙә йөрөгән ҡолон сағын иҫенә төшөрҙө, ҡылған үләнле киң-киң далаларҙы һәм ҡая ташлы тауҙар араһындағы урмандарҙы күҙ алдына килтерҙе. Урал тауҙары буйында сылтырап аҡҡан көмөштәй саф йылғаларҙың һыуын уртлаһа, йәки инәһенең һутлы һөтөн ауыҙ итһә, уның һыуһыны бик тиҙ ҡаныр һымаҡ тойолдо...

## IV

Башҡорт кавалерия дивизияһына килгәне бирле саҡ ҡына ла йүнләп ял итмәйенсә, полковник Шайморатов эскадрондарҙа йөрөнө. Ул ҡайҙа ғына бармаһын, казармаларҙа бысраҡ, тәртипһеҙлек күҙенә ташланды. Дневальныйҙар менән һаҡсылар ҙа һәр урында исем өсөн ҡуйылғайны. Өлкән командирҙар килгән саҡта устав буйынса «Встать! Смирно!» командаһын биреп, рапорт тапшырырға ла өйрәтелмәгәйне ҡыҙылармеецтар. Үҙ иркенә ҡуйылған кешеләр командирҙарҙан рөхсәтһеҙ-ниһеҙ теләгән еренә барып ҡайта, ял итә, тәмәке тарта, тамағын туйҙыра.

Икенсе полктың 2-се һанлы эскадронына «отбой» алдынан барғас, полковник Шайморатов ҡыҙылармеецтарҙы сафҡа теҙергә ҡушты.

Аяҡтарына сабата, калуш, ботинка, өҫтәренә камзул, көпө, сәкмән йәки салбарһыҙ ыштан-күлдәк кейгән кешеләр ҡабаланмайынса, илке-һалҡы ғына сафҡа теҙелә башланы.

Эскадрон командиры ла, хәрби хеҙмәттә булмағанлыҡтан, үҙ белдегенсә ҡыланды. Кешеләрҙе теҙеп, уларҙы көс-хәлгә тигеҙләгәс, ҡарлыҡҡан сибек тауыш менән «Смирно» командаһын ҡысҡырҙы ла икенсе полк командиры Нафиҡов торған яҡҡа әйләнеп ҡараны.

— Кешеләрҙе сафҡа теҙҙем, иптәш майор!..

Эскадрон командирының рапорт тапшыра белмәүенә ғәрләнгән полк командиры ҡып-ҡыҙыл булып бүртенде. Ләкин аҡланырҙай һүҙ таба алманы. Дивизия командирына эйәреп йөрөүсе башҡа командирҙар ҙа, быңдай хәлгә үҙҙәрен ғәйепле һанап, шып-шым ғына торҙо.

Артабан түҙер хәле ҡалмаған полковник Шайморатов казарманың уртаһына сығып баҫты.

— Ҡыҙыл Армия сафында элгәре хеҙмәт иткән йәки Ватан һуғышында ҡатнашыусылар бармы арағыҙҙа?

Ватан һуғышы башланғандың тәүге көндәрендә үк элгәре хәрби хеҙмәткә әҙерлекле, һәләтле 250 мендән артыҡ башҡорт егеттәре фронтҡа оҙатылғандан һуң ҡалғаны ғына ине бит бында. Шулай булғас, хәрби хеҙмәткә өйрәтелгән кешеләрҙе ҡайҙан табырға?

Сафта тороусылар өндәшмәгәс, Шайморатов лейтенант Хөсәйеновты саҡыртып кеше ебәртте. Шунан, ваҡытты әрәмгә уҙғарырға теләмәйенсә, өгөт-нәсихәтте алыҫтан башланы:

— Башҡорт кавалерия дивизияһына килерҙән алда, үҙемдең тыуған Ҡырмыҫҡалы районында булып, унан ауыр тойғолар менән киттем. Барлыҡ эш хәҙер ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро елкәһендә. Нисек кенә интегеүҙәренә ҡарамаҫтан, ҡар аҫтынан йыйған ашлыҡтың һәр бөртөгөн һеҙгә ашатыу өсөн тырыша улар. «Үҙебеҙ асяланғас булғанда ла фашистарға ҡаршы һуғышҡа китеүсе атай-ағайҙарыбыҙға, ир-егеттәргә, уландарыбыҙға, кейәүҙәребеҙгә ярҙам булһын өсөн, уларҙы ас итмәҫ өсөн, өҫтәре бөтөн булһын өсөн тырышабыҙ», тиҙәр улар. Ә һеҙ... Бала-саға, ҡатын-ҡыҙ әҙерләгән ризыҡты ашап, оҙон көндәр буйы ваҡытты бушҡа уҙғараһығыҙ. Оятығыҙ ҡайҙа!

Сафтың арғы осонда тороусыларҙан бер нисә кеше:

— Тик ятыуға беҙ ғәйепләмени?

— Фронтҡа ебәрегеҙ!

— Һуғышҡа китергә бөгөндән әҙербеҙ, — тип ҡысҡырышты.

Полковник Шайморатов тауышланыусылар яғына табан ыңғайланы. Ул ашыҡмай ғына атлаған саҡта билендәге яҫы ҡайышҡа тағыулы ҡылысы шинель салғыйы елпенгән ыңғайға сайҡалды, итек үксәһендәге шпорҙары зыңҡылданы.

— Һуғышҡа былай әҙерләнмәйҙәр! Әлегә һеҙ ялпы, әтрәгәләм, — тине лә, аңғармаҫтан тупаҫыраҡ һүҙ ысҡындырыуына уңайһыҙланғандай, тауышын үҙгәртте.— Фронтҡа китергә ашҡыныу ғына аҙ. Ҡылысты баш осо тәңгәлендә уйнатып, дошманға ҡаршы һыбай сабыуҙан да тормай был һуғыш. Киләсәктә дәһшәтле алыштарҙа ҡатнашасаҡ кавалеристар, атта сабышып, ҡылыс менән оҫта эш ҡылыуҙан тыш, иң әүәл тимер дисциплинаға күнегергә, окоп, траншея ҡаҙа, гранаталар ташлай, дошман танкыларын яндыра, пушкаларын ҡыйрата белергә, ПТР-ҙан, мылтыҡтарҙан, автоматтарҙан, пулеметтарҙан атырға һәм ҡул һуғышына еңгекле өйрәнергә бурыслы. Тере ҡалырға, дошманды дөмөктөрөп ғаиләгеҙгә еңеүсе даны менән ҡайтырға теләһәгеҙ, барлыҡ һуғыш һөнәрен тылда саҡта өйрәнергә кәрәк! Был — Ватаныбыҙ талабы!..

Өтә баҫып казармаға ингән лейтенант Хөсәйенов коридорҙа күренде. Ишек тәңгәлендәрәк туҡталып, тиҙ-тиҙ генә өҫ-башын төҙәткеләне лә, уң ҡулын бүрке тәңгәленә күтәргән көйө, строевой аҙым менән алға атланы. Полковник Шайморатовҡа етергә өс аҙым самаһы ара ҡалғас, ҡапыл туҡталып, рапорт тапшырҙы:

— Иптәш полковник, һеҙҙең ҡушыуығыҙ буйынса лейтенант Хөсәйенов килде!

Лейтенанттың устав ҡушыуы буйынса эш ҡылыуы, тыйнаҡлығы, хәрби тәртипте яратыуы, оло дәрәжәле командирҙар ҡушҡанды тотҡарлыҡһыҙ башҡарырға әҙер тороуы барыһын да хайран ҡалдырҙы.

— Лейтенант, һеҙгә икенсе полктың икенсе кавалерия эскадроны командиры вазифаһы йөкмәтелә, — тине Шайморатов.

Быңдай бойороҡто ишетермен тип башына ла килтермәгән Хөсәйеновтың үткер ҡарашлы күҙҙәре баҙлап янды, ҡалын ирендәре ҡымтылды.

— Иптәш полковник, был хаҡта үҙ фекеремде әйтергә рөхсәт итегеҙ!

— Әйтегеҙ, — тине Шайморатов.

Хөсәйенов, маңлайы тәңгәленә күтәргән уң ҡулын төшөрмәйенсә, дивизия командирының етди йөҙөнә текләнде.

— Мин кавалеристлыҡҡа өйрәтелмәгән, строевой командир булып үҙ взводымда ҡалырға теләйем!

— Берәү ҙә кавалерист булып донъяға тыумай, лейтенант!

— Ә мине строевой командир итеп ҡалдырығыҙ, иптәш полковник!

Хөсәйеновтың ныҡышмалылығын Шайморатов оҡшатманы, ахырыһы. Ҡаш аҫтынан асыулы ҡараны ла:

— Тәжрибәле эскадрон командиры табылғанға саҡлы, һеҙгә ошо эскадрон менән командалыҡ итергә бойорам, — тине тауышын үҙгәртмәйенсә.

Лейтенант Хөсәйеновҡа дивизия командиры ҡушҡанға буйһоноуҙан башҡа әмәл ҡалманы.

— Есть, ваҡытлыса икенсе эскадрон командиры вазифаһын үтәргә! — тине лә, шинель яғаһына беркетеүле өрәңы «кубик»тарын тоноҡ яҡтыртыулы электр шәме яҡтыһында ялтлатып, сафҡа теҙелеүселәргә табан боролдо. — Эс-кад-ро-о-он, слушай мою команду!.. Равня-я-йсь!.. Сми-ир-но!.. Отс-та-вить!..

Команданың берҙәм, етеҙ, теүәл үтәлешен тәьмин итергә тырышып, лейтенант Хөсәйенов кешеләрҙе оҙаҡ ыҙалатты, үҙе лә ныҡ интекте.

Хөсәйенов, «отбой» командаһын бирерҙән алда һәммәһен асыҡлап, эскадронда ике ҡыҙылармеецтың ауырыуы, алты кешенең рөхсәтһеҙ Өфөгә киткәндән казармаға ҡайтмауы, өс кешенең ашханала эшләүе хаҡында рапорт тапшырғас, Шайморатовтың асыуы йөҙөнә сыҡты.

— Самоволкала йөрөүселәрҙе хәрби трибуналға!

— Присяга ҡабул итмәйенсә, ҡаты хөкөмгә тарттырыу килешерме, иптәш полковник? — тип шыбырлап ҡына һораған Нафиҡовты тыңларға теләмәне дивизия командиры. Политбүлек начальнигын, полк командирҙары менән комиссарҙарын эйәртеп урамға сыҡҡас, икенсе полк командирына ябырылды:

— Нимә, майор, хәрби дисциплинаны һеҙ ҙә оноттоғоҙмо?! Ҡыҙылармеецтарҙың баш-баштаҡлығына юл ҡуйыуығыҙ етмәгән, минең менән һүҙ көрәштереп, яҡшы күренергә маташаһығыҙмы подчиненныйҙарығыҙ алдында? Эскадрондарҙағы етешһеҙлектәр өсөн иң әүәл һеҙ яуаплы! Бындай хәлгә артабан шәфҡәт булмаясаҡ, белегеҙ! — тип Нафиҡовты иҫкәртте лә, тып-тын урам буйлап бер аҙ барғас, үҙенә эйәреп йөрөүселәргә әйләнеп ҡараны. — Ҡәтғи талап бөтә командирҙар менән комиссарҙарға ла ҡағыла!

Үҙенең ғәйебен таныған майор Нафиҡов бер урында тапанып торҙо-торҙо ла дивизия командирына мөрәжәғәт итте:

— Иптәш полковник, миңә икенсе эскадронда булырға рөхсәт итегеҙ?

— Рөхсәт, — тине Шайморатов.

Яңыраҡ ҡына үҙе булып киткән казармаға кире ингәс, ишек төбөндәге дневальныйға тауышламаҫҡа ҡушып, Нафиҡов лейтенант Хөсәйеновтың ни эшләүен күҙәтте. Ваҡытлыса эскадрон командиры вазифаһын башҡарған лейтенант, кеҫә сәғәтен усында тотоп, ике ҡатлы һәндерәләр араһындағы асыҡ урындың ҡап урта өлөшөнә баҫҡан да, үткән ваҡыттың һәр минутын, һәр секундын һанай-һанай, кешеләрҙе бер сисендереп түшәктәренә яткыра, бер кейендертеп сафҡа теҙә лә ҡабаттан «отбой» иғлан итә. Бер үк күренеште бик күп ҡабатлап, кешеләрҙең күпселек өлөшөн тейешле тәртипкә күндергәс, тейешле ваҡытта кейенергә, сисенеп урындарына ятырға ҡушты. Ә бызмырҙарҙы алып ҡалып күнегеүҙәрҙе ҡабатланы, бойороҡҡа буйһонорға теләмәүселәргә сиратһыҙ наряд биреп, кешеләр йоҡлаған саҡта казарма иҙәнендәге сүп-сарҙы таҙартырға һәм йыуырға бойорҙо. Хәрби хеҙмәткә алынғанға тиклем район Советы башҡарма комитетында эшләгән йыуан ҡорһаҡлы Усманғәлингә барыһына ҡарағанда ла нығыраҡ эләкте. Усманғәлин, нисек кенә ҡабаланмаһын, лейтенант

Хөсәйенов ҡушҡандарҙың береһен дә ваҡытында үтәргә өлгөрмәне. Аҙаҡтан, тамам хәлһеҙләнеп, стенаға терәлде.

— Иптәш лейтенант, ни үсегеҙ бар миндә?

— Үҙегеҙ өсөн тырышам, боец, — тип Хөсәйенов ҡабаттан ус төбөндәге сәғәтенә ҡараны: — Отбой!

Усманғәлин, йыуан ҡорһағын кәпәйтеп, көс-хәлгә сисенде. Ләкин түшәгенә ятырға ла өлгөрмәне, яңы команда яңғыраны:

— Подъем!

— Хәлдән тайҙым!

Уны тыңларға теләмәйенсә, Хөсәйенов командаһы ҡабаттан ишетелде:

— Подъем!

Ах та вах килеп, Усманғәлин йәнә кейенә башланы.

— Һеҙҙә кешелек сифаты ҡалмаған!

— Әрепләшеүегеҙ өсөн сираттан тыш ике наряд! — тине лейтенант. — Төндә иҙән йыуырһығыҙ! Еңеләйгәс, команда еңел үтәлер!..

Хөсәйенов ыҙалатҡан элекке яуаплы совет работнигы майор Нафиҡовҡа бик тә йәл ине. Ләкин, тейешле күнегеүҙәрһеҙ Усманғәлиндең һимеҙлеге кәмемәйәсәген һәм ысын ҡыҙылармеец исеменә лайыҡ була алмаясағын аңлап, ул ҡыҫылманы.

Иртәгеһе көндө, дивизия командиры ҡушҡан йомош менән, майор Нафиҡов Мәскәүгә китте. Аҙна аҙаҡтарында командировканан ҡайтҡас, икенсе эскадрондағы тәртипкә аптыраны. Ҡазарма эсе тап-таҙа. Элек мөйөштәрҙә аҫылынып торған үрмәксе ауҙары юҡ хәҙер, урындар йыйыштырылған, һәр ерҙә тәртип...

Нафиҡовтың Хөсәйеновҡа ҡарата булған асыуы ихтирам тойғоһо менән алмашынды һәм уны яманлап политбүлек начальнигына һөйләүе өсөн үкенде.

Барлыҡ ерҙе ентекле тикшереп сыҡҡас, полк командиры үҙенә устав буйынса рапорт тапшырған дневальныйҙың өр-яңы хәрби кейеменә иғтибар итте.

— Обмундированиены ҡасан алдығыҙ?

— Өс көн элгәре, иптәш майор!

«Өлгөр, бик тә өлгөр булып сыҡты лейтенант! Дивизия командиры алдында ярамһаҡланырға тырыша», — тип уйланы Нафиҡов.

— Кешеләр ҡайҙа?

— Занятиела.

— Занятие ҡайҙа уҙғарыла?

— Йылға буйында. Строевая подготовка.

Нафиҡов икенсе эскадрон кешеләренең хәрби уйынды нисек үҙләштереүҙәрен ҡарарға китте. Ағас мылтыҡ-

тар һәм ағас пулеметтар менән ҡоралланған ҡыҙылармеецтарҙың сафта йөрөргә өйрәтелеүен ул алыҫтан ҡарап торҙо. Эскадрон ҡарамағындағы взводтар, отделениелар, ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүленгеләнеп, уларҙың һәр ҡайһыныһына ҡыҙылармеецтар араһынан командирҙар билдәләнгән. Улар, бер-береһен уҙҙырырға тырышып, команда бирәләр.

Күнегеүҙәр барышын ҡалҡыу урындан күҙәткән лейтенант Хөсәйенов, бер төркөмдәге кешеләр янына барып, сафта йөрөү һәм боролоу ҡағиҙәләрен аңлатты ла ҡалҡыу урынға кире килеп баҫты. Һыбайлы полк командирының яҡынлашыуын күргәс, лейтенант етдиләнде. Майор Нафиҡовҡа тейешлесә рапорт тапшырғас, ҡыҙылармеецтарҙың строевой подготовкаһын дауам итергә рөхсәт һораны.

Күнегеүҙәр үткәрелеүе менән ҡәнәғәтләнгән полк командирының йөҙө яғымлыланды.

— Строевой аҙым менән йөрөй башлағас, Усманғәлиндең дә буй-һыны ыҡсымлана төшкән!

— Уның менән һеҙ танышмы?

— Таныш!

— Хәрби хеҙмәт уға ҡыйынлыҡ менән бирелә. Уны берәй хозчасҡа күсергәндә яҡшы булмаҫмы икән?

— Был мәсьәләне үҙегеҙ хәл ҡылығыҙ, лейтенант!

— Мин ваҡытлыса ғына эскадрон командиры бит, иптәш майор, — тине Хөсәйенов.

— Ниңә «ваҡытлыса»? Эшегеҙ ыңғай бара. Эскадрон командиры булып, бәлки, бөтөнләйгә ҡалырһығыҙ?

— Бөтөнләйгә ҡалмайым, иптәш майор! Мин строевой взвод командиры, — тине лейтенант Хөсәйенов, ныҡышмалылыҡ менән.

Нафиҡов һүҙҙе ҡуйыртманы, атын яҡындағы беренсе эскадронға табан ыңғайлатты.

Был эскадронда ла хәрби уйындың иң ҡыҙған мәле ине. Эскадрон командиры кавалеристарын «дошман»ға ҡаршы һөжүмгә алып бара, уларҙы ерҙә шыуыштырта, гранаталар ырғытырға һәм ҡул һуғышына өйрәтә...

Егерме-утыҙ градус һалҡынға еткән декабрҙә, ҡапыл йылытып, ап-аҡ ҡар епшене, һибәләп кенә ваҡ күҙле ямғыр яуа башланы. Хәрби уйындарҙа ҡатнашҡан кешеләр күшекте, бысранды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дивизия командиры тарафынан раҫланған ҡәтғи график-расписание буйынса башҡарылыусы хәрби күнегеүҙәр туҡтатылманы.

Һуғыш уйыны уҙғарылған яландан ҡайтып барышлай, Нафиҡов политбүлек начальнигын осратты. Ғәҙәтенсә алғы тештәрен йылтыратып, Абдуллин яғымлы йылмайҙы.

— Эштәр ҡалай, иптәш Нафиҡов?

— Арыу, — тине майор һәм полкта башҡарылған эш хаҡында ҡыҫҡаса һөйләп алды.

Политбүлек начальнигының ҡара-һөрөңкө оҙонса йөҙө балҡып китте.

— Яҡшы, бик яҡшы!

— Мине бүтән бер нәмә борсой, иптәш батальон комиссары. Талапсанлыҡты арттырабыҙ тип, кешеләргә артыҡ шәфҡәтһеҙлек күрһәтмәйбеҙме икән, — тип майор Нафиҡов шик белдерҙе.

Политбүлек начальнигының йөҙө үҙгәрҙе.

— Кешеләрҙе артыҡ ыҙалатыу хаҡында иптәш Әлибаевтан да ишетергә тура килгәйне миңә, — тип Абдуллин теләктәшлек белдергәс, Нафиҡов ҡыйыулана төштө.

— Мин яңылышҡанда ла иптәш Әлибаев яңылышмаҫ! Артыҡ талапсан командирҙарҙың ҡыланышы арҡаһында, беҙҙең полктағы бик күп кешеләргә һалҡын тейҙе. Медицина пункты ла сырхауҙар менән шығырым тулы. Күнегеүҙәрҙе хәрби шарттарға ярашлы рәүештә уҙғарырға кәрәк, әлбиттә. Ләкин сама тигән нәмәне лә онотоу килешмәҫ, минеңсә. Кешеләрҙе ауырытып сафтан сығарып бөтһәк, һуғышҡа кем менән барырбыҙ?

— Мин ни эшләргә тейеш? — тип һораны Абдуллин.

— Дивизия командиры менән ошо хаҡта һөйләшеп ҡарағыҙ. Үтә һалҡын көндәрҙә асыҡ яланда занятиелар уҙғарыуҙы кисектерһен ине.

— Полковник Шайморатов үҙенең приказын үҙгәртеүе икеле, — тине политбүлек начальнигы. — Шулай ҙа, иптәш Шайморатов ҡайтҡас, һөйләшеп ҡарармын...

— Комдив ҡайҙа китте?

— Совнаркомға...

## V

Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы йортона шәп-шәп атлап ингән полковник Шайморатов, бүрке менән шинелен сисенеү бүлмәһендә ҡалдырып, гимнастерка итәген шымарта-шымарта, иркен баҫҡыстан менеп китте. Икенсе ҡатҡа күтәрелгәс, туҡталыбыраҡ, ағарған ҡуйы сәстәрен артҡа һыпырҙы ла еҙ тотҡалы оло ишекте асты. Халыҡ менән шығырым тулы ҡабул итеү бүлмәһендә туҡталып тормайынса, ул Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе Ваһапов бүлмәһенә инде. Шайморатов күренгәс тә, оҙон өҫтәл артында ултырыусы республика етәкселәре һикереп торҙо. Ваһапов Шайморатовҡа ҡаршы атланы.

— Әйҙә, иптәш полковник, рәхим итегеҙ, — тип ҡул бирep күрешкәс, Шайморатовҡа һоҡланып ҡараны. — Бик тә вакытлы килдегеҙ! Дивизия менән танышырға өлгөрҙөгөҙмө?

— Өлгөрҙөм, иптәш Совнарком председателе.

— Якшы. Комиссия ағзалары менән дивизияға бәйләнешле айырым мәсьәләләрҙе тикшереп ултыра инек. Уларҙы бергә хәл ҡылыу мөһим, — тип Шайморатовты комиссия ағзалары менән берәм-берәм таныштырып сыҡты: — Башҡорт кавалерия дивизияһын ойоштороу буйынса комиссия председателе урынбаçары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы председателе иптәш Ибраһимов Рәхим Қирәевич, комиссия ағзаларынан: Насир Рафикович Уразбаев — партия өлкә комитеты секретары, Ғилман Вилданович Ниғмәтйәнов — республика Госпланы председателе, иптәш Иванов — БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе урынбаçары, Буреньков — ВКП(б) өлкә комитеты секретары...

— Кавдивизия командиры килгәс, эш ыңғайланасаҡ, — тине Ибраһимов. — Беҙҙе, комиссия ағзаларын, мөмкин булһа, үҙегеҙ менән дә таныштырһағыҙ ине, иптәш полковник!

Шайморатов, һалдаттарса һынын ҡатырып, торайҙы.

— Мөмкин!..

— Һеҙ ултырығыҙ!

— Миңә аяҡ өҫтө тороуы яйлы. — Шайморатов, күҙҙәрен ҡыçыҡландырыбыраҡ, ҡабаланмай, һәр һүҙенә баçым яһағандай, һөйләп китте. — Мин, Шайморатов Миңлеғәле Минһажетдинович, Башҡортостан кешеһе. Милләтем — башҡорт. Ҡырмыçҡалы районының Биштәкә ауылында 1899 йылдың ун бишенсе августа батрак ғаиләһендә тыуғанмын. Егерме дүртенсе йылдан бирле ВКП(б) ағзаһы. Ун туғыҙынсы йылда Бишенсе армияның утыҙынсы уҡсы дивизияһына буйһонған ике йөҙ ҙә етмешенсе Белорет уҡсы полкында хеҙмәт иттем, граждандар һуғышында ҡатнаштым. Ҡазан кавалерия курсын тамамлағас, Ростовта беренсе атлы армияның ун дүртенсе кавалерия дивизияһында эскадрон командиры, курсант, унан аҙаҡ йәнә эскадрон командиры, Кремлде һаҡлаусы полк командиры, Фрунзе исемендәге Хәрби академия тыңлаусыһы, Оборона Халыҡ Комиссариаты идаралығының бүлек начальнигы урынбаçары, Ҡытайҙа хәрби атташе, Генеральный штаб идаралығында бүлек начальнигы урынбаçары, СССР Оборона Халыҡ Комиссариатының айырым кавалерия полкы командиры вазифаларын башҡарҙым. Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көндәренән үк генерал Доватор корпусы-

ның икенсе кавполк командиры булараҡ, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыштым. Бына хәҙер 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры итеп тәғәйенләндем...

Шайморатовтың көнгә янған ихтыяри йөҙөнә һәм киң күкрәгендәге өр-яңы хәрби орденына текләп ҡараған Ваһапов берҙән-бер һығымтаға килде:

— Утты-һыуҙы уҙып ҡайтҡанһығыҙ икән, Миңлеғәле Минһажетдинович!

Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе әйткәнде Ниғмәтйәнов та ҡеүәтләне:

— Хәрби тәжрибәгә бай яҡташыбыҙҙың Башҡорт кавалерия дивизияһының командиры итеп тәғәйенләнеүе ҡыуаныс!

Йәштән үк хәрби тәртипкә ныҡ күнегеп, үҙенә һәм ярҙамсыларына ҡарата талапсан булырға, һәр нәмәне тиҙ үтәргә ғәҙәтләнгән Шайморатов, комиссия ағзаларының ваҡытын йәлләп, бында оҙаҡламаҫҡа тырышты. Шуға күрә ул дивизияға бәйләнешле мөһим мәсьәләләрҙе ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп һөйләне.

— Дивизия ойошторолһа ла, комсоставтың етешмәүе, бер полк, дүрт эскадрон, алты взводтың һаман командирһыҙ булыуы эшкә тотҡарлыҡ яһай. Политработниктар ҙа етешмәй...

— Рядовойҙар араһында командир йәки политработник итеп үрләтерҙәй кешеләр юҡмы? — тип һораны Уразбаев.

— Яраҡлылары үрләтелде.

— Дивизияла элекке район Советы башҡарма комитеты работнигы булырға тейеш.

— Усманғәлинме? Ул хәҙер икенсе кавполкта политработник!

— Кешеләр менән ярҙамлашырбыҙ, — тине Ваһапов. — Йәнә нимә талап ителәбеҙҙән?

— Ағас мылтыҡтар кәрәк.

— Күпме?

Шайморатов яуап ҡайтарырға өлгөрмәне, һуҙып-һуҙып телефон шылтыраны. Трубканы алғас, Ваһаповтың түп-түңәрәк һимеҙ йөҙө таный алмаҫлыҡ булып үҙгәрҙе, һарғылт күҙ ҡабағы һалынып төштө, ялтлас маңлайы бөрсөк-бөрсөк тир тамсылары менән сыбарланды.

— Иптәш Сталин һөйләшергә тейеш, — тип ҡалтыранған тауыш менән бышылданы ла, өҫтәлдәге ҡағыҙҙарҙы үҙенә яҡынырак шылдырҙы.

Комиссия ағзалары ла, көсөргәнешле һағайып, Ваһапов ҡулындағы телефон трубкаһына төбәлде.

Көсөргәнешле тынлыҡта уҙған бер нисә минут самаһы ваҡыт Миңлеғәле Минһажетдинович Шайморатов өсөн бигерәк тә тулҡынландырғыс хәл ине. Сталин менән һөйләшкәндә тыңлап тороуҙы йәпһеҙ һанап, ул ҡабул итеү бүлмәһенә сығып торорға булғайны, Ваһапов ым менән туҡтатты.

Сталиндың тоноҡ, үтә тыныс тауышы ишетелгәс, йәнен үс төбөнә ҡыҫырҙай хәлгә еткән Ваһапов сытырайҙы.

— Мин һеҙҙе тыңлайым, иптәш Сталин! — Ныҡ тулҡынланған Ваһапов, Иосиф Виссарионовичтың һәр һүҙен мейеһенә ныҡлы һеңдерергә теләгәндәй, өнһөҙ ҡалды. Шунан республикалағы хәлдәрҙе ашығыс һөйләргә кереште: — Бөтә нәмә тотҡарлыҡһыҙ башҡарыла! Йөҙ ҙә ун икенсе башҡорт кавалерия дивизияһында башҡорттар һаны һикһән бер, йөҙ ҙә ун өсөнсө кавалерия дивизияһында — һикһән ике процент тәшкил итә...

Ваһаповтың күп һүҙен Шайморатов аңламаны.

«Мин аңламағанды, Сталин нисек аңлай икән?» — тип уйлап, иғтибарын арттырҙы.

Ваһапов, ҡыҙарына-бүртенеп, тотлоға-тотлоға әйтте:

— Кавалерия полктарында хәрби күнегеүҙәр башҡарыла... Граждандар һуғышы йылдарынан һуң йәшереп ҡалдырылған хәрби ҡоралдар юҡ беҙҙә, иптәш Сталин! Егерменсе йылдарҙа уҡ халыҡтан йыйылып алынып, тейешле урынға тапшырылды... Аңлашыла... Яҡшы... Мөмкин булмағанын да эшләргә тырышырбыҙ, иптәш Сталин!.. Хушығыҙ!..

Телефон трубкаһын һалғас та тынысланa алмаған Ваһапов, йән-фарман сабышҡан ат шикелле йыш-йыш һулап, ҡулъяулығы менән аҡһыл йөҙөн оҙаҡ ышҡыны.

— Барыһына ла төшөндөгөҙмө? Ул беҙгә ҡаты талаптар ҡуя, — тип телефонға ымланы ла, ауыр һулап, полковник Шайморатовҡа ҡараны: — Миңлеғәле Минһажетдинович, бер килгәс, ҡалған мәсьәләләрҙе лә бергә хәл ҡылыу өсөн был төндө Өфөлә уҙғарһағыҙ ине.

— Есть, — тине полковник, кәүҙәһен турайтып.

Ваһапов Шайморатов менән хушлашты ла, комиссия ағзаларының башы аша үрелеп, оҙон өҫтәлдең мөйөшөнә терәлеп ниҙер яҙған ярҙамсыһына ҡараны:

— Әбсәләм, иптәш полковник хаҡында хәстәрлек күр!

Шайморатов артынса бүлмә ишеге ябылғас та, кәңәшмәлә ҡатнашыусы республика етәкселәренең иғтибары йәнә Ваһаповҡа йүнәлде.

— Сабир Әхмәтйәнович, Башҡортостандағы эшкә ризаһыҙлыҡ белдерәме әллә иптәш Сталин?

— Мәскәүҙең яңы талабы ниҙән ғибәрәт?

— Дивизия өсөн ҡоралды беҙ табырға тейешме ни?..

Иптәштәренең түҙемһеҙләнеүенә Ваһаповтың асыуы ҡабарҙы.

— Илгә оло бәлә тыуған саҡта, Дәүләт Оборона Комитеты председателе республикалағы етешһеҙлектәр өсөн башыбыҙҙан һыйпарға тейешме?! Башҡорт кавалерия дивизияларын материаль яҡтан беҙҙең республика тулыһынса тәьмин итергә бурыслы икәнлеген тағы ла иҫкәртте, — тип ул телефонға ымланы.

— Бер мең һигеҙ йөҙ ун икенсе йылғы Ватан һуғышындағы һымаҡ...

Ваһапов Ниғмәтйәновты ашығыс бүлдерҙе:

— Совет хөкүмәтенең башҡаса мөмкинлеге юҡ! Республика өсөн нисек кенә ауыр, ҡатмарлы булмаһын, башҡорт кавалерия дивизияларын кейем-һалым, аҙыҡ менән тәьмин итергә һәм фронт өсөн кәрәкле барлыҡ нәмәне етештерергә бурыслыбыҙ, иптәш Ниғмәтйәнов! Шуға күрә, Госплан райондарҙа өҫтәлмә быймалар баҫтырыуҙы, йөн бейәләй, йөн ойоҡ бәйләтеү кеүек мөһим эштәрҙе ашығыс ойоштororға тейеш! Ҡыҫҡаһы шул, иптәштәр, СССР Дәүләт Оборона Комитеты талаптарына ярашлы рәүештә, иртәнге сәғәт унға комиссия ағзалары үҙҙәренең конкрет тәҡдимен килтереүе мөһим. Бүтән мәсьәләләрҙе лә иртәгә ҡарарбыҙ. Әлегә барығыҙ, фронтҡа бәйләнешле эштәрегеҙ менән шөғөлләнегеҙ!

Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндән бирле көнөнтөнөн йүнле ял итмәгән республика етәкселәре сығып киткәс тә, Ваһапов ярҙамсыһына баш ҡаҡты:

— Приемныйҙа кемдәр көтә?

— Наркомдар, предРИҠтар, завод етәкселәре һәм өсдүрт хәрби, — тип яуап ҡайтарҙы Әбсәләм.

— Тәүҙә хәрбиҙәр инһен!..

Ашығыс йомош менән килеүсе һәр кешенең йомошон йәһәт хәл ҡылыуына ҡарамаҫтан, Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе эшен төн уртаһына тиклем бөтөрә алманы.

Иртәнге сәғәт өстәр тирәһендә генә ҡайтырға йыйынлған сағында, бүлмәгә Ниғмәтйәнов килеп инде.

— Иптәш Ваһапов, ҡайтырға ҡабаланаһығыҙмы?

— Ни йомош? — тип һораны Сабир Әхмәтйәнович, йонсоу йөҙөн сирылтып.

— Аулаҡта кәңәшләшәһе мәсьәлә бар ине.

Кейгән пальтоһын сисеп, Ваһапов өҫтәл артына ултырҙы.

— Йә, һөйлә!

— Йөҙ ҙә ун өсөнсө Башҡорт кавалерия дивизияһын беҙгә тарҡатырға тура киләсәк.

— Ниндәй һүҙ был?! — Ваһаповтың йөҙө ҡарайҙы. — Сәбәбе?!

Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы председателенең сәнскеле күҙ ҡарашына сыҙамайынса, ҡуйы ҡара ҡаш аҫтынан ҡараған Ниғмәтйәнов ситкә боролдо.

— Сәбәптәр бик күп, — тип ул минут самаһы уйға ҡалыбыраҡ торҙо. — Икенсе дивизияны тулыһынса ойоштороу өсөн республикала тейешле резервтар, командирҙар етешмәй һәм...

— Туҡтағыҙ әле! — Ниғмәтйәновты Ваһапов асыу менән бүлдерҙе. — Башҡорт кавалерия дивизияларын ойоштороға үҙебеҙ рөхсәт һораныҡ, ә хәҙер ике дивизияның береһен тарҡатырғамы? Минеңсә, был тәҡдим аҡылһыҙлыҡ! — тине лә, Ниғмәтйәнов өндәшмәгәс, Башҡортостан республикаһы етәкселәре исеменә ебәрелгән СССР Дәүләт Оборона Комитеты телеграммаһын уҡып ишеттерҙе: «Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы хеҙмәтсәндәренең теләген хуплап, Дәүләт Оборона Комитеты республика территорияһында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ике башҡорт кавалерия дивизияһы төҙөргә рөхсәт итә. Номерҙары 112, 113. Уңыш теләйбеҙ». Йә, шунан һуң ни әйтерһегеҙ?

— Мәсьәләне реаль мөмкинлектән сығып ҡарау мөһим, иптәш Ваһапов,— тине Ниғмәтйәнов, төшөнкөлөк менән.— Республикала күп нәмә үҙгәреүен иҫтән сығарырға ярамай. Дивизиялар ойошторолоу менән генә эш тамамланамы? Үҙегеҙ яҡшы аңлайһығыҙ бит... Уларҙы тулыландырыу, ашатыу-эсереү, кейендереү, аттар менән тулыһынса тәьмин итеү хәстәрлеген күрергә лә тура киләсәк. Ә кешеләрҙе ҡайҙан табырға? Республикалағы күпселек ир-арыҫландар һуғыш башынан уҡ фронтҡа оҙатылды. Башҡортостандың комсомол ойошмаларынан ғына алтмыш меңгә яҡын комсомолец Ҡыҙыл Армия сафына алынһа, партия ойошмаларынан яртыһынан күберәге һуғышҡа китте. СССР Дәүләт Оборона Комитеты ҡарары нигеҙендә, август—сентябрь айҙарында запастағы ун етенсе уҡсылар бригадаһы, запастағы туғыҙынсы кавалерия полкы, 361-се уҡсы дивизия, ике снайперсылар, ике автоматсылар, миномётсылар полкы һәм башҡа төрлө хәрби частар ҙа Башҡортостанда ойошторола бит! Ирҙәрҙе ҡайҙан табырға барыһы өсөн? Уларҙан тыш, Башҡортостанға эвакуацияланып килгән завод-фабриктар өсөн дә эшселәргә мохтаж булыуыбыҙҙы онотторға ярамай!

— Ҡатын-ҡыҙҙы һанға һуҡмайһыңмы, иптәш Нигмәтйәнов?! Уларҙы завод-фабриктарҙа эшләргә өйрәтергә, ә ирҙәренең урыны — фронтта!

— Йөҙ ҙә ун икенсе кавалерия дивизияһы өсөн дә резерв кәрәк икәнлеген аңларға теләмәйһегеҙме, Сабир Әхмәтйәнович? Минеңсә, 113-сө кавдивизияны ойоштороуҙы туҡтатыу йәки уны резервта ҡалдырыу дөрөҫ буласаҡ.

Оҙаҡ ваҡыт икеләнеп ултырғандан һуң, Ваһапов ҡыйынлыҡ менән ризалашты:

— Был хаҡта ВКП(б) өлкә комитеты секретары менән кәңәшләшергә кәрәк. Тейешле материалдар әҙерләгеҙ!

— Иптәштәрҙе хәҙер үк эшкә ҡушам! — Нигмәтйәнов ишеккә табан йүнәлде. Бүлмәнән сығырҙан алда боролоп ҡараны. — Сабир Әхмәтйәнович, ҡайтып ял итәһегеҙме?

Стеналағы сәғәт телдәренә күҙ һирпеп, Ваһапов баш сайҡаны.

— Ҡайтырға тура килмәҫ, ахрыһы. Тиҙҙән эшкә килер ваҡыт етә бит!

Галстугын бушатып, күлдәгенең өҫкө һиҙәбен ысҡындырҙы ла, сисенмәйенсә, төпкө ҡыҫыҡ бүлмәләге тимер карауатҡа ятыу менән Ваһапов йоҡоға сумды. Ләкин ике сәғәт тә ял итергә тура килмәне. Бүлмәгә ингән дежурный тауышын ишеткәс, һиҫкәнеп уянды.

— Ни булды?

— Һеҙҙе — телефонға! ВКП(б) Үҙәк Комитеты секретары иптәш Маленков һөйләшергә тейеш.

Йүгерә-атлай барып телефон трубкаһына тотонған Ваһапов ҡабаланып әйтте:

— Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе һеҙҙе тыңлай, иптәш Маленков! — Һәм яуап урынына һанап китте: — СССР нефть промышленносты наркоматы, Дәүләт контроле, Союз элемтәһе, РСФСР-ҙың социаль тәьминәт һәм урындағы промышленность наркоматтары, Маркс—Энгельс—Ленин институты, Украина компартияһының Үҙәк Комитеты нәшриәте, ун һигеҙ фәнни учреждениелары менән Украина ССР-ының Фәндәр академияһы, Украина Яҙыусылар союзы, композиторҙары, художниктары урынлаштырылды. Торлаҡ яғымы? — тип һораны ла Ваһапов ҡыйыуһыҙ ғына яуап ҡайтарҙы: — Торлаҡ яғы бик хөрт, иптәш Маленков, Башҡортостанға күсеп килеүселәрҙең ғаиләләре Өфөгә яҡын райондарҙағы ауылдарҙа урынлаштырылды. Айырым шәхси йорттарҙа ике-өс ғаилә бергә йәшәй... Алыҫ райондарҙа ла ситтән күсеп килеүселәр бик күп... Аңлашыла, иптәш Маленков,— тине Ваһапов, ВКП(б) Үҙәк Комитеты секретарының көн-

байыштан күсерелеүсе заводтарға ишара яһауына төшөнөп. — Уларға иғтибар беренсе сиратта. Иҫән булығыҙ!

Мәскәү менән һөйләшкәндән аҙаҡ ятырға тура килмәне Сабир Әхмәтйәновичҡа. «Бытовка» тип йөрөтөлгән бүлмәһенә инеп йыуынғас, дежурныйҙан ҡайнаттырған сәйҙе эсте. Уғаса, һуғышҡа бәйләнешле йомош менән йөрөүсе кешеләр йыйылырға ла өлгөрҙө һәм көндәге үтә мәшәҡәтле эш башланды.

## VI

Байдәүләтов, Совнарком ҡаршыһындағы бер ҡатлы ағас өйгә барышлай, ишек алдында йыйналған тауыҡтарына ем һипкән Ғәйниәне күргәс, алыҫтан ҡысҡырып һораны:

— Апай, фатирың әҙерме?

— Әҙерсе! Төпкө бүлмәләге өс карауат шул көйөнсә тора, — тине хужабикә, өҫтөндәге туҙанды тиҙ-тиҙ генә ҡаҡҡылап.

— Фатирҙа бер кем дә юҡмы?

— Юҡсы, юҡ! Совнарком ҡушмағас, фатир һорап килеүселәрҙең береһен дә индермәнем.

Егеттең йөҙөндә маһайыу билдәһе сыҡты.

— Дөрөҫ эшләгәнһең, апай, сит кешеләрҙе фатирға индермә! Ату, понимаешь, ҡамасауларҙар ине. Шайморатов ағай бөгөн дә ошонда ҡунырға тейеш. Совнарком председателе ярҙамсыһы был хаҡта үҙе әйтте! — тип ул китеп тә барҙы.

Ярты сәғәт самаһы ваҡыт уҙғас, Байдәүләтов Шайморатов менән бергә килде.

— Ҡалалағы гостиницалар сит кешеләр менән шығырым тулы. Уларҙың береһендә Георгий Димитров менән Коммунистик интернационал башҡарма комитеты ағзалары һәм эвакуацияланған заводтарҙың етәкселәре йәшәй. Шунлыҡтан был фатир һеҙҙең өсөн генә тотола, иптәш полковник, — тине Зәки.

Луылса таҙа итеп йыйыштырыулы, саф һауалы, күркәм, ыҡсым өйҙөң төпкө бүлмәһенә ингәс, Миңлеғәле Минһажетдинович ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Һәйбәт, бик һәйбәт!

Дивизия командирының күңеле күтәренкелегенән файҙаланып, Байдәүләтов үҙ йомошон әйтеп ҡалырға ашыҡты:

— Иптәш полковник, һеҙгә бер үтенесем бар. Мөмкинме?

— Мөмкин.

— Мин дә Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итергә теләйем! Военкоматҡа барғайным, ваҡыты еткәс саҡыртырбыҙ тип, алманылар... Уларҙың ҡасан саҡыртыуын күпме көтөргә?

— Совнаркомда ниндәй эш башҡараһығыҙ?

— Әйттем бит... Ваҡ-төйәк...— Байдәүләтов ниндәй эштәр башҡарыуын асыҡ әйтергә ҡыйынһынды. — Мине Башҡорт кавалерия дивизияһына алығыҙ, иптәш полковник!

— Мине тыңларҙармы һуң?

— Тыңларҙар, мотлаҡ тыңлаясаҡтар, иптәш полковник! — Байдәүләтовтың ҡара ҡашы аҫтындағы күҙҙәре баҙлап янды.

— Ярар, һөйләшеп ҡарармын, — тине Шайморатов.

Ул танһығы ҡанғансы һалҡын һыу менән йыуынып һөртөнгән саҡта, йәп-йәш ҡатын килеп инде. Ул ҡатын, ныҡ ҡыҙартылған ирендәрен ҡымтып тирә-яҡҡа алан-йолан ҡараны ла, Шайморатов ҡаршыһындағы Байдәүләтовҡа күҙ һирпте:

— Зәки, йәнә ниндәй түрә алып килдең?

Егет яуап ҡайтармағас, егерме өс-егерме биш йәштәр самаһындағы һылыу ҡатын тоҡ-томалға көлөп алды ла, ауыҙын турһайтып, үпкәләне.

— Һөйләшергә теләмәһәң, инәлмәйем, — тип ҡылансыҡ тауыш менән асыуланыуын белдерҙе лә хужабикәгә ашһыу әҙерләргә ярҙамлашты.

Ҡыҙҙың еңел холоҡло ҡыланышына уңайһыҙланған Байдәүләтов Шайморатов йәшәргә тейешле төпкө бүлмәнең ишеген ябып ҡуйҙы.

— Хужабикәнең ҡыҙымы? — тип ҡыҙыҡһынды полковник.

— Юҡ та... Совнарком ысталауайында буфетчица. Түрәләр ҡушыуы буйынса һеҙгә ашарға алып килгән.

— Юҡҡа борсолалар... Ҡыҙҙың исеме нисек?

— Зәйтүнә.

Хужабикәнең Шайморатовты өҫтәл янына саҡырыуын ишеткәс тә, Байдәүләтов китергә ҡабаланды. Уға эйәреп, Зәйтүнә лә тышҡа сыҡты.

— Зәки, әйт әле, ниндәй түрә алып килдең бында?

— Ниңә? — тип һораны Байдәүләтов.

— Күҙем төштө!

— Күҙең төшмәгән ир бармы?

— Бар. Мәҫәлән, һин!

— Яратҡан Мәстүрәм булғанда, һинең кеүектәр ниңә миңә, — тип асыуланды Байдәүләтов.

— Шулай ҙа әйт әле..,

— Әйтмәйем, ағайҙың үҙенән һорашып белеш!

— Бушҡа тексәймә инде, Зәки! — Зәйтүнә, шаярып һөйләшеүенән тыйылып, етдиләнде. — Үҙем өсөн түгел. Совнарком столовойы директоры кемгә аҙыҡ ебәреүен белешергә ҡушты.

— Хәйләләшмә! Белмәгән, күрмәгән оло ағай алдында шырҡ-мырҡ ҡыланыуың бик тә йәпһеҙ! Холоҡһоҙлоғоңдо Совнаркомда белһәләр, буфетта бер көн дә эшләтмәҫтәр.

— Ошаҡлашмаҡсы булдыңмы? Бар, ошаҡлаш, ошаҡ сәрмәһе! — тине лә, ҡыҙыулыҡ менән әйткән һүҙенә үкенгәндәй, Зәйтүнә ҡапыл ҡайтымһаҡланды. — Зинһар, үпкәләмә. Яҡын күреп шаяртам. Әйт әле, ысынын. Ул ағай ниндәй түрә?

— Полковник Шайморатов, Башҡорт кавалерия дивизияһының командиры. Ул беҙгә Мәскәүҙән килде.

— Мәскәүҙән булғас, ысынлап та оло түрә икән шул! — Күлдәксән генә тышҡа сыҡҡан Зәйтүнә, көҙгө һалҡынға сыҙамайынса, еңелсә ҡалтыранды.

— Тыумышы буйынса ул ҡайҙан?

— Ҡырмыҫҡалы районының Биштәкә ауылынан.

— Бисәһе бар микән?

— Унһы ниңә һиңә?

— Мужыт, кәрәгер әле, — тине лә, шарҡылдап көлә-көлә, Зәйтүнә ағас күтәрмәгә табан ыңғайланы.

Өшөп ингәс, йылына алмайынса, ҡалтырана-ҡалтырана, Зәйтүнә ҡыҙыу итеп яғылған мейес эргәһендә үрһәләнде.

— Көн һыуыҡҡан, ай, яман һыуыҡҡан!

— Күлдәксән генә сығып, һалҡын алмаһын үҙенде, — тине хужабикә.

— Зәкиҙә йомошом булғанға ғына сыҡҡайным...

— Сәй эсһәгеҙ, йылынырһығыҙ, Зәйтүнә. Килегеҙ, ултырығыҙ, — тип Шайморатов өҫтәл ҡаршыһындағы буш ултырғысҡа ымланы.

Зәйтүнә инәлтмәне, өҫтәл артына барып уҡ ултырҙы. Бер сынаяҡ сәй эскәс, күҙҙәрен майландырып йылмайҙы.

— Йылындым, буйтым йылындым. Рәхмәт!

— Йәнә берҙе яһап бирәйемме? — тип һораны хужабикә.

Зәйтүнә, өндәшмәйенсә, сынаяғын һондо.

Икенсегә яһатып алған сәйҙе ул ашыҡмай, тамсылап тигәндәй эсте. Ә үҙе, һөйкөмлө күҙ ҡарашы менән полковникты иркәләп, өҙлөкһөҙ һөйләнде. Туймазы районында тыуып үҫеүе, таныш ҡатын менән бергә Өфөгә килгәс, Халыҡ Комиссарҙары Советы ашханаһындағы буфетҡа эшкә урынлашыуы, әсәһенән сабый сағында уҡ етем ҡа-

лыуы, һуғыш сыҡҡандың беренсе көндәрендә үҙ теләге менән фронтҡа киткән атаһының хәбәрһеҙ юғалыуы хаҡында түкмәй-сәсмәй теҙҙе.

Үтә алсаҡ, күңелендә сер һаҡлай белмәгән, еңел холоҡло күренгән һылыу ҡатын менән бергә ваҡыт уҙғарыуы Шайморатов өсөн күңелле ине.

Ҡиске тамаҡ туйҙырғандан аҙаҡ, бушаған һауыт-һабаны төргәс, Зәйтүнә китергә йыйналды.

— Столовой директоры юғалтҡандыр инде мине. Йәһәтерәк бул да, йәһәтерәк бул, тип ашыҡтырғайны... Бында килгәс, һүҙгә әүрәп, оҙаҡланым...

— Эш көнө бөтмәнеме ни? — тип һораны Шайморатов.

— Совнарком кешеләре өйҙәренә ҡайтмай оҙаҡ эшләгәс, беҙҙе лә төн уртаһына саҡлы бушатмайҙар шул!

— Оҙатып ҡуйырғамы?

— Юҡ, кәрәкмәй, кәрәкмәй! — Зәйтүнә ҡурҡты. — Беҙҙең директор күреп ҡалһа, эләгәсәк! Рөхсәт итһәләр, иртәнге ризыҡты ла һеҙгә мин алып килтерермен, — тип Зәйтүнә китергә ашыҡты.

## VII

Шайморатов Өфөнән ҡайтҡас та, политбүлек начальнигы Абдуллин килеп инде. Уның артынса полк командирҙары менән комиссарҙар ҙа йыйнала башланы.

Подразделениеларҙағы тормошто һорашып белгәс, полковник Шайморатов ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары менән Башҡортостандың Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе ярҙамында дивизия өсөн мөһим мәсьәләләрҙең хәл ителеүе, шулай уҡ 113-сө Башҡорт кавалерия дивизияһы бөтөрөлөүе, ундағы күпселек командирҙарҙың 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ҡарамағына күсерелеүе хаҡында әйткәс, командирҙар ҡәнәғәтләнеү белдерҙе.

Полк командирҙары менән комиссарҙар таралышып, бүлмәлә икәүҙән-икәү генә ҡалғас, дивизияның политбүлек начальнигы Абдуллин Шайморатовҡа яҡынырaҡ килеп ултырҙы.

— Иптәш полковник, һеҙгә һүҙем бар.

— Йә, әйт, — Шайморатов һағайыулы ҡараны.

— Айырым командирҙар, һеҙҙең приказға һылтанып, талапсанлыҡты, хәрби дисциплинаны үҙҙәренсә аңлайҙар һәм рядовой кавалеристарға ҡарата тупаҫлыҡ һәм кешелекһеҙлек күрһәтәләр.

— Командирҙарҙың тупаҫлығы һәм кешелекһеҙлеге нимән ғибәрәт?

Дивизияның политбүлек начальнигы майор Нафиҡовтан ишеткәндәрен үҙенсә үҙгәртеп һөйләп биргәс, Шайморатовтың йөҙө ҡарайҙы.

— Был хаҡта һеҙ үҙегеҙ нисек уйлайһығыҙ?

— Миненсә, ҡыҙылармеецтарға ҡарата хәстәрлекле, кешелекле булыу — һәр командирҙың изге бурысы.

— Ҡешеләргә һыуыҡ теймәһен, ҡарҙа оҙаҡ ятып өшөмәһен йәки ямғырға күшекмәһен, бысранмаһын өсөн тейешле сара күреүемде теләйһегеҙме?

— Мине дөрөҫ аңлағанһығыҙ, иптәш полковник!

— Ә мин, киреһенсә, һеҙҙе аңламайым һәм аңларға ла теләмәйем, иптәш политбүлек начальнигы! Фронтта ла кешеләргә гражданкалағы шикелле шарттар тыуҙырыр инегеҙме?

— Фронт шарттарын бындағы хәл менән сағыштырыу мөмкинме ни, Миңлеғәле Минһажетдинович?

— Фронттағы ҡыйын шарттарға бирешмәһен өсөн кешеләрҙе иң әүәл бында саҡта сыныҡтырыу мөһим икәнлеген нисек аңларға теләмәйһегеҙ, иптәш Абдуллин?! — Шайморатов үҙен тыныс тоторға тырышты. — Хәҙер, һуғыш башланғаны бирле, ауылдағы бала-сағаны, ҡарт-ҡороно ла йәлләмәйенсә, ҡар аҫтынан ҡаҙып алынған игенде һуғып фронтҡа оҙатырға ҡушалар. Ә һеҙ, талапсанлыҡты арттырыу, күнегеүҙәрҙе фронт шарттарындағыса уҙғарырға ярҙамлашыу урынына, ялҡау боецтарҙы яҡлайһығыҙ! Шуны бер ҡасан да иҫегеҙҙән сығармағыҙ, иптәш батальон комиссары: боец командирҙар ҡушҡанға ҡаршылыҡһыҙ буйһонорға бурыслы! Уны йәлләү — дисциплинаны күрәләтә юҡҡа сығарыуға тиң, ә дисциплинаһыҙ армия булмай!

Бүлмәгә Шайморатовтың адъютанты килеп инде.

— Иптәш полковник, беҙҙең дивизияға штаб начальнигы итеп тәғәйенләнгән майор Күсимов килде!

— Ул әле ҡайҙа?

— Ҡабул итеү бүлмәһендә.

— Саҡырығыҙ!

Адъютант ишектән сығып та өлгөрмәне, бәһлеүән кәүҙәле майор үҙе баҫып килеп инде һәм честь бирҙе.

— Иптәш полковник, майор Күсимов һеҙҙең ҡарамаҡҡа килде!

Дивизия командиры майорға текләп ҡараны.

— Яҡшы, ваҡытлы килгәнһегеҙ. Ултырығыҙ.

Дивизия командиры менән һөйләшкәндә ултырыуҙы әҙәпһеҙлек һанаған Күсимов аяҡ өҫтө ҡалды.

Полковник Шайморатов, фронтҡа бергә китәсәк майор

хаҡында белергә теләп, Ҡусимовтың быҙаса ҡайһы хәрби подразделениеларҙа хеҙмәт итеүен һораштьг.

Майор Ҡусимов башынан үткәндәр менән ҡыҫҡаса таныштырҙы. Аслыҡ йылдарында атаһы менән бергә Ҡаҙағстан, Төркөстан яҡтарын гиҙеп йөрөүен, Ҡыҙыл Армия сафына алыныр алда, егерме һигеҙенсе йылдың яҙында Башҡортостанға ҡайтып, тулмаған бер йәшен өҫтәтеп яҙҙыртыуын һәм Ҡазандағы Берләшкән татар-башҡорт мәктәбенә уҡырға инеүен әйтте. Уны тамамлағас, Беренсе татар уҡсылар дивизияһында хеҙмәт иткән, унан аҙаҡ Бакуҙағы Кавказ аръяғы хәрби округындағы Етмеш етенсе тау-уҡсылар дивизияһындағы айырым атлы разведка эскадронына командалыҡ иткән.

Утыҙ туғыҙынсы йылдың Беренсе Май байрамы парадында эскадроны менән ҡатнашыуын, парадтан һуң партияның Әзербайжан Үҙәк Комитеты секретарына саҡыртылыуы һәм үҙенә ҡарабах тоҡомло арғымаҡ бүләк итеүҙәрен әйтеп, Ҡусимов маҡтанып та алды.

— Ул арғымаҡ, иптәш полковник, бер ни тиклем һеҙҙең ҡара-ерән ҡашҡағыҙға оҡшағайны. Атығыҙҙы миңә коноводығыҙ күрһәтте.

— Ҡара-ерән ҡашҡаны ла миңә Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы бүләк итте, — тине Шайморатов.

Дивизия командиры менән политбүлек начальнигының үҙен ихлас тыңлауына иғтибар итеп, Ҡусимов һүҙгә әүәҫләнде.

— Ватан һуғышы сығырҙан алда бер нисә ай элгәре, Кавказ аръяғы хәрби округындағы Егерме дүртенсе атлылар дивизияһының илле алтынсы полк командиры итеп тәғәйенләнеләр. Аҙаҡтан, Егерме өсөнсө атлылар дивизияһы сафында, үҙем формировать иткән Ун дүртенсе атлылар полкы командиры вазифаһын башҡарҙым.

— Ул полк һуғышта ҡатнаштымы? — тип һораны Абдуллин.

— Ҡатнашманы. — Әлегәсә фронтта ҡатнаша алмауына үкенгән һымаҡ, Ҡусимов уның сәбәбен аңлатырға ҡабаланды: — Фашистар Совет иленә көньяҡтан һөжүм башларға әҙерлек алып барғанлыҡтан, Ирандың көньяҡ еренә Англия, төньяғына — совет ғәскәрҙәре индерелде. Беҙҙең дивизия ил сигенә саҡлы күсерелде. Нахичеванда минең полкка Иран Әзербайжанының үҙәге булған Тавиз ҡалаһына — Иран шаһтарының тыуған иленә табан йүнәлергә ҡушылды. Шул тәңгәлдәге Ирандың атлылары менән уҡсылар дивизияһы ҡаршылыҡ күрһәтһә, уларҙы ҡоралһыҙландырырға тигән бойороҡ та алдым.

— Иран ғәскәрҙәре менән бәрелеш булманымы?

— Ундай хәл булманы, иптәш полковник. Беҙ яҡыная башлағас, Иран офицерҙары тауҙарға табан ҡасты, ә ҡоралһыҙландырылған һалдаттарын өйҙәренә тараттыҡ. — Аяҡ өҫтө тороп арығас, Шайморатовтан рөхсәт алып, Күсимов Абдуллин ҡаршыһындағы ултырғысҡа ултырҙы. — Сик буйында хеҙмәт итеүсе бер полковник иллегә яҡын фашист агенттарының исемлеген, уларҙың фотоһүрәттәрен беҙгә бирҙе һәм барыһын да ҡулға алыуҙы һораны. Аҙаҡтан килеп еткән Егерме өсөнсө дивизияның штабы Иран Әзербайжанының үҙәк ҡалаһында ҡалды, ә минең полк Иран, Ирак, Төркиә илдәре тоташҡан ергә күсерелде. Шул тирәлә йәшәүсе курд халҡы беҙҙе бик йылы ҡаршыланы, һәм улар менән тиҙ арала дуҫлашып та өлгөрҙөк. Унда оҙаҡ булырға тура килмәне. Мине дивизия штабына саҡырттылар. Советтар Союзы Маршалы Семен Михайлович Буденныйҙың приказы буйынса һеҙҙең дивизияға тәғәйенләнеүемде әйттеләр.

Майор Күсимов кеҫәһенән сығарған ҡағыҙҙы һондо.

— Һеҙҙең шикелле тәжрибәле кадровый командирҙың беҙҙең дивизия штабы начальнигы итеп тәғәйенләнеүенә шатмын, — тине Шайморатов.

— Иптәш полковник, үҙ фекеремде әйтергә рөхсәт итегеҙ был хаҡта. — Күсимов урынынан һикереп торҙо.

— Рөхсәт!

— Иптәш полковник, мине атлылар полкы командиры итеп ҡуйыуығыҙҙы теләр инем!

— Дивизия штабы начальнигы итеп кемде ҡуйырға? — тип һораны Шайморатов.

— Хәрби академияны бөтөргән кешене ҡуйығыҙ, иптәш полковник! Минән йүнле штаб начальнигы сыҡмаясаҡ. Асығын әйтәм, сөнки ҡағыҙҙар менән эш итә белмәйем.

— Өйрәнерһегеҙ!

— Мин строевой командир!

Мәсьәләне Күсимов теләгәнсә хәл ҡылырға ашыҡманы Шайморатов. Тәрән уйға ҡалып, стеналағы Сталин һүрәтенә ҡараны. Шунан, өҫтәл артынан күтәрелеп, бүлмә буйлап йөрөргә тотондо. Һуғыш ҡаты барған ерҙәре ҡаҙаулы ҡыҙыл флажоктар менән сыбарланған карта тәңгәленә барып баҫҡас, политбүлек начальнигы Абдуллинға һораулы ҡараш ташланы.

— Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?

— Минеңсә, Күсимов хаҡлы...

— Күндерҙегеҙ, — тип Шайморатов теләмәҫтән генә ризалашты. — Һеҙҙе 275-се һанлы беренсе кавполк командиры итеп тәғәйенләйем, — тине лә, Күсимовты ҡаты иҫкәртте: — Бик ныҡ эшләргә тура киләсәк! Унда дисцип-

лина башҡа полктарға ҡарағанда ла йомшаҡ! Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә кешеләрҙе һуғыш һөнәренә өйрәтеү мотлаҡ. Талапсан булығыҙ!

— Партия-комсомол һәм политработниктарға таянып эш ҡылығыҙ, — тип өҫтәне политбүлек начальнигы.

— Есть, ышанысығыҙҙы аҡлармын! — Үҙ теләгенә ирешеүгә ҡыуанған Күсимовтың күҙҙәре баҙлап янды. — Коммунистар күпме икән беҙҙең полкта?

— Дивизияла барлығы өс йөҙ һикһән ете коммунист һәм ике йөҙ һикһән биш комсомолец бар, — тине лә, ниҙер иҫенә төшөрөп, Абдуллин һораны: — Ғәфү итегеҙ, һеҙ үҙегеҙ коммунисмы?

— Әлбиттә! Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ икенсе йылдың яҙынан бирле.

— Уңыш теләйем!

— Рәхмәт! Полкты ҡасан ҡабул итеп алырға?

— Бөгөн.

— Үҙ полкыма китергә рөхсәт итегеҙ, иптәш полковник!

— Бергә барырбыҙ, — тип Шайморатов кейенә башланы.

Дивизия штабы тәңгәлендә көтөп тороусы Байдәүләтовты күргәс, полковник Шайморатов аҙымын яйлатты.

— Бында ни эшләйһегеҙ?

Байдәүләтов урынына Күсимов яуап ҡайтарҙы:

— Ул егетте үҙемә коновод итеп алдым!

— Ҡасан танышырға өлгөрҙөгөҙ?

— Аттар торған ерҙә, иптәш полковник!

«Дивизияға килергә саҡ өлгөргән, коновод табыу хәстәрлеген дә күргән», — тип уйлап, полковник Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаһына атланды.

## VIII

275-се кавалерия полкына майор Күсимов тәғәйенләнеүен белгәс, комиссар Әлибаев ҡыуанып бөтә алманы.

— Бына, исмаһам, беҙ ҙә командирлы булдыҡ! Командирыбыҙ булмағас, үҙебеҙҙе етем кеүек тоя инек, — тип Таһир Таипович Күсимовты фатирына йоҡлатырға алып ҡайтты.

Бер-береһенә улар бик тиҙ эйәләште.

Кис тамаҡ туйҙырғас, түпкө бүлмәләге ике карауаттың стена буйындағыһы буш икәнлеген әйтте Әлибаев. Ләкин улар йоҡларға ҡабаланманы. Балалар уҡытыуға ғүмерен бағышлаған Сәғит Әлибаев хәрби тормошҡа ҡыйынлыҡ менән күнегеүен, йомшаҡ холҡо, үтә әҙәплелеге

арҡаһында кешеләргә тейешлесә талапсан була алмауын һөйләне.

— Бына хәҙер, һуғыш сыҡҡас, яратҡан эшемде ҡалдырып, үҙемде үҙем уҫаллыҡҡа өйрәтергә, үтә талапсан булырға тырышып йөрөйөм, фашистарҙы күберәк дөмөктөрөү тойғоһона кешеләрҙе лә, үҙемде лә күндереү өсөн күп көс һалам...

Полк комиссарының күңелендә ауыр йөк булып ятҡан эске кисерештәрҙән ҡотолорға тырышыуын тиҙ төшөндө Күсимов.

— Балалар уҡытыуҙан хәрби тормошҡа күсеүе һеҙгә еңел түгеллеген аңлайым, бик тә аңлайым, Сәғит Рәхмәтович, — тине ул, комиссарға теләктәшлек белдереп. — Дошманды еңел генә еңергә ышаныс тотоусы кешеләрҙе тимер дисциплинаға күндереүе бик ҡыйын буласаҡ беҙгә...

— Һеҙ килгәс, полкта эш ыңғайланасаҡ, — тине Әлибаев.

— Беҙҙең полк командиры урынбаҫары ниндәй кеше?

— Ханнановмы? Ул элгәре действительныйҙа хеҙмәт иткән. Бик етеҙ, энергиялы, егәрле, ҡушҡанды эшләргә ашҡынып тора. Тик инициативаһы аҙ...

— Эскадрон һәм взвод командирҙарының хәрби белеме бармы?

— Улар барыһы ла фронттан килде.

— Рядовойҙар составы нисек?

— Улар армияла хеҙмәт итмәгәндәр. Күбеһе исем-фамилияһын да яҙа белмәй. Ғүмерҙәрен йылҡы малы араһында уҙғарһалар ҙа, үҙҙәре менеп йөрөгән аттарҙың ялҡойроғон тәрбиәле тоторға, ваҡытында дағаларға, ҡырғыслап таҙартырға оноталар.

— Сабый саҡтан һыбай йөрөргә күнеккән башҡорт кавалерия өсөн тыуған донъяға!

— Әммә сафта йөрөүҙе һәм строевой подготовканы яратм**айҙар.**

— Күнеккәс, яратырҙар әле... Бүтән полктарҙа тормош нисек?

— Яҡшыра.

— Беҙҙә лә яҡшырасаҡ! — Күсимовтың тауышында еңелсә тулҡынланыу ҡатыш сәмләнеү һиҙелде. — Уларҙы ҡыуып етеү һәм уҙып китеү өсөн барлыҡ көсөмдө һаласаҡмын!

Кешеләргә ҡарата талапсанлыҡты кәметкән, уларҙы ауыр шарттарға күнектермәгән командирҙарға полковник Шайморатовтан һәр саҡ нык эләгеүе хаҡында Әлибаев әйткәс, Күсимов карауатында тыныс ята алмайынса борғоланды.

— Дөрөҫ эшләй! Дивизия командиры ҡаты тотмаһа, мотлаҡ бөләсәкбеҙ!

— Шайморатов үтә ҡаты, талапсан булһа ла, хәстәрлекле, кешелекле, аҡыллы, ихтыярлы, юғарғы культураға эйә булған командир!.. Шунын өҫтәүенә, уға тыумыштан тәбиғи ҡыйыулыҡ, рухи көс бирелгән.

— Ул минә беренсе осрашыуҙа уҡ оҡшаны, — тине Күсимов. — Ҡешеләрҙе бүлдермәйенсә, ныҡлы иғтибар менән тыңлай белә. Үҙен тыныс тота.

— Таһир Таипович, һеҙ яңылышмағанһығыҙ, — тине Әлибаев, Күсимов әйткәндәр менән ихлас ризалашып. — Дивизия командирынан уңдыҡ!

Күсимовтың тауыш-тыны сыҡмағас, Әлибаев та сиселеп карауатына ятты.

«Таһир Таипович ныҡ арыған, бик йәһәт йоҡлап китте», — тип уйлап, ул үҙе лә хырылдарға тотондо.

Икенсе көндө тороп иртәнге сәйҙе эскәс, Күсимов менән Әлибаев 275-се полк кешеләренең һыбай нисек йөрөүҙәрен һәм «дошманға» ҡаршы һуғышыуҙарын барып ҡарарға булдылар.

Тышта һепертмә ел сыҡҡан. Көн аяҙлы-болотло.

— Ҡисә генә йылы, епшек ҡар яуа ине, бөгөн яман һалҡынайтҡан, — тине Күсимов, ҡар өйөмдәрен бер урындан икенсе урынға күсереп ҡоторонған көслө ел ағымынан йөҙөн йәшереп. — Нисә градус икән?

Атын Күсимовтыҡына ярышлатып юрттырған Әлибаев, эйәрҙә һәлмәк һелкенә-һелкенә, бүркенең ҡолаҡтарын төшөрөп бәйләне.

— Егерме биш-егерме һигеҙ самаһы барҙыр.

— Еле булмаһа, һалҡын әллә ни көслө түгел икән!

Ауыл ситенә сығыр саҡта уҡсылар взводын ҡыуып еттеләр. Үҙәккә үтерҙәй һалҡынға иғтибар итмәйенсә, типтигеҙ сафта теҙелешеп барыусылар араһынан кемдер көр тауыш менән йыр башланы:

Вставай, страна огромная,  
Вставай на смертный бой.  
С фашистской силой темною,  
С проклятою ордой.

Яңғыҙ йырсыға ҡалғандар ҙа дәррәү ҡушылды:

Пусть ярость благородная  
Вскипает, как волна.  
Идет война народная,  
Священная война!

— Ниндәй взвод был?

— Лейтенант Хөсәйеновтың уҡсылар взводы, — тине Әлибаев. Ә үҙе, тынын ҡыҫып, йән тетрәткес йырҙы тыңланы.

— Ниңә уны башҡортса йырламайҙар икән?

— Лейтенант Хөсәйеновтың уҡсылар взводында госпиталдән килгән төрлө милләт кешеләре. Ишетәһеңме, ҡайһылай оҫта йырлайҙар!

— Фронтовиктар булғас, уларҙың оҫта йырлауҙары һәм сафта оҫта йөрөүҙәре бер ҙә ғәжәп түгел, — тине Күсимов.

— Бөтә хикмәт взвод командирының уңғанлығында, — тине Әлибаев, Күсимов менән ризалашмайынса. — Лейтенант Хөсәйенов дивизия командирының иң яратҡан, ихтирам иткән кешеләрҙең береһе, — тип взвод командирына бәйләнешле ваҡиғаларҙы ҡыҫҡаса һөйләне лә, үкенесле тауыш менән һүҙен тамамланы: — Хөсәйенов икенсе полктың икенсе эскадронында ныҡлы дисциплина урынлаштырыуҙа, ҡыҙылармеецтарҙы хәрби уйынға өйрәтеүҙә бик күп көс һалды, ә үҙе эскадрон командиры булып ҡалырға теләмәне.

— Бәлки, һыбай йөрөй белмәйҙер?

— Башҡорт малайы була тороп, нисек һыбай йөрөй белмәй ти? Әммә кавалерияла хеҙмәт итергә теләмәне. Фронттан ебәрелгән бер өлкән лейтенантҡа эскадронын тапшырҙы ла, үҙе уҡсылар взводын ойоштorҙо.

— Ныҡыш егет икән, — тине майор Күсимов һәм үҙе лә маҡтанып алды: — Мин дә йәш сағымда тәүәккәл, дыуамал егет инем!

Полк командирының киң яурынына, бәһлеүәндәй олпат кәүҙәһенә һиҙҙермәй генә ҡарап, Әлибаев көлөмһөрәне.

— Һеҙ әле лә бынамын тигән егет, Таһир Таипович! Үҙегеҙҙе тиҙ ҡартайтырға тырышмағыҙ!

— Һа, әйттегеҙ һүҙ! — тип Күсимов атын шпорланы. — Ҡырҡты уҙҙым бит инде!

«Дошман»ға туптар яуҙырған артиллеристар менән минометсылар эргәһендә туҡталмайынса, улар артабан юрттылар.

Күмәк аттар үтеүҙән тап-таҡырға әйләнгән Авдон ауылы янындағы киң яланда ағас ҡылыстарын уңға-һулға һелтәп йән-фарман сабышыусы һыбайлыларҙы күргәс, Күсимов йәнләнде.

— Беҙҙең полк һыбайлылары апаруҡ «һуғыша» ла баһа! Тик етеҙлек һәм сослоҡ етешмәй!

— Етешһеҙ яҡтарын эскадрон командирҙарына әйтергә кәрәк!

— Был хаҡта әйтеү генә аҙ, комиссар! Ул ярҙамды үҙебеҙ күрһәтергә тейеш!

Майор Ҡусимов яҡынлашып килгән эскадрон командирына табан атын ыңғайлатты.

Эскадрон командирының рапортын тыңлағас, һыбайлыларҙың «һуғыш» ваҡытындағы етешһеҙлектәрен әйтте лә, Ҡусимов ағас мылтыҡ менән ағас ҡылыс һорап алды.

— Хәҙер мин нисек «һуғышҡанды» күҙәтегеҙ, — тине лә, атын шпорлап, осҡан ҡоштай алға елдерҙе. Йән-фарман сабып барышлай, «дошман» һалдаттарын ҡылысы менән ҡыҙыу тураҡланы, сәнсте, мылтыҡтан атты, прикладымenән дә уларҙы «дөмөктөрҙө» һәм артабан елдерҙе. Ҡаршылағы траншеяларға етер саҡта «дошман» утына эләгеп, эйәренән һикереп төштө. Шул ыңғайҙа, бер-бер артлы гранаталар ташлап, алға табан ерҙән шыуышты...

Фронт шарттарында ҡулланыласаҡ айырым һуғыш алымдарын-серҙәрен ҡат-ҡат күрһәткән полк командирының һәр хәрәкәтен көсөргәнеш менән күҙәткән һыбайлылар хайран ҡалды.

— Ҡайһылай етеҙ полк командиры!

— Үлһәк тә улай булдыра алмабыҙ!..

Һыбайлылар эргәһенә кире әйләнеп килгән майор Ҡусимов:

— Тырышһағыҙ, минән дә етеҙерәк «һуғышырға» өйрәнерһегеҙ, — тип үҙе күрһәткән һуғыш уйындарын ҡабатларға ҡушты.

Егеттәр арығас ҡына, күнегеүҙәрҙе бер аҙ ял иткәндән һуң дауам итергә бойороп, полк командиры әйтеп ҡуйҙы:

— Фронтҡа китеүҙе тиҙләтергә теләһәгеҙ, көсөгөҙҙө йәлләмәҫкә!

— Иптәш майор, һорарға рөхсәтме?

— Рөхсәт, — тип Ҡусимов киң күкрәкле йыуантаҡ һыбайлыға ҡараны.

— Миңә, республикалағы бик күп көрәшселәрҙе һабан туйҙарындағы ярыштарҙа еңгән кешегә, ҡул һуғышына өйрәнеүҙең кәрәге бармы?

— Ҡул һуғышында дошманды еңел еңеренә ышанаһыңмы?

— Ныҡ ышанам, иптәш майор!

— Әләйһә, әйҙә, дошманға саҡлы минең менән көс һынашып ҡара, — тип Ҡусимов эйәренән төштө.

— Һеҙҙең менән көс һынашырға теләмәйем, иптәш майор!

— Ниңә?

— Берәй ерегеҙ имгәнһә, бәләгеҙ булыр!

Ҡавалеристар көләштө.

— Бәләм булмаç, әйҙә, алышабыҙ!

Йыуантаҡ егет, ағас мылтығы менән сәнсергә маташып, һөжүм башланы. Күсимов етеҙ янтайҙы һәм кавалеристың ҡабырға яғынан сығып уны ергә тәкмәстерә һуҡты. Хурлыҡҡа ҡалған егет икенсе тапҡыр ихласлап тотондо. Ләкин икенсе, өсөнсө һөжүме лә юҡҡа сыҡты. Аҙаҡтан, иптәштәре алдында мәсхәрәгә ҡалыуына оялып, ҡул һелтәне.

— Бүтәнсә булмай! Көрәшселәрҙең көрәшсеһе икән һеҙ, иптәш командир!

— Был алышты барығыҙ ҙа фәһем алһын өсөн ойошторҙом! Үҙегеҙ күрәһегеҙ, мәкерле дошманды ҡул һуғышында еңеү өсөн көс кенә аҙ, таçыллыҡ һәм етеҙлек тә мөһим. Ә уны үҙләштереү өсөн ныҡышмалы күнегеүҙәр кәрәк! Аңлашыламы?

— Аңланыҡ, иптәш командир, — тип шаулашты һыбайлылар.

— Йәнә бер һорауым бар! — Күсимов уң ҡулын күтәрҙе. — Һуғышта иçән-һау ҡалырға теләйһегеҙме?

— Әлбиттә, теләйбеҙ!

— Кемдең үлгеһе килһен ти?..

Күсимов шымыбыраҡ торҙо.

— Тере ҡалыу өсөн, — тине ул аҙаҡ, — һеҙҙе үлтерергә килеүсе фашисты унан элгәре дөмөктөрөргә өйрәнегеҙ!

Ваҡытлыса туҡталыған күнегеүҙәр ҡабаттан ҡыҙҙы.

«Дошман» менән алышыусыларҙы күҙәтеп торған саҡта майор Күсимовҡа ниндәйҙер һыбайлы яҡынлашты. Аяғына бийма, өçтөнә ап-аҡ тиртун, башына бүрек кейгән ыҡсым кәүҙәле ул кеше:

— Һаумыһығыҙ, иптәштәр, — тип честь бирҙе.

— Һаумыһығыҙ, — тине лә, эйәренән төшкән оҙон буйлы, күҙлекле кешене танығас, Әлибаев алсаҡланды: — Таһир Таипович, беҙҙең Башҡорт кавалерия дивизияһындағы «Ҡыҙыл атлылар» исемле газетаның редакторы, яҙыусы Али Ҡарнай менән таныш булығыҙ!

Майор Күсимов менән күрешеп танышҡандан һуң, Али Ҡарнай кеçәһенән ҡағыҙ-ҡәләм сығарҙы.

— Иптәш полк командиры, беҙҙең редакцияны ҡыҙыҡһындырған бер нисә һорауға яуап бирегеҙ!

— Ниндәй һорау?

— Газетаға һеҙҙең хаҡта очерк яҙырға теләйем.

— Әләйһә, булмай! — Күсимовтың йөҙө үҙгәрҙе, күҙҙәре тағы ла нығыраҡ ҡыçыҡланды. — Минең хаҡта очерк яҙырға иртә, бик тә иртә!

— Атлы егеттәрҙе «дошман»ды ҡул һуғышына нисек өйрәтеүегеҙҙе үҙем күрҙем. Миненсә, бындай өлгө бүтән подразделениеларға ла фәһемле булыр ине, иптәш майор!

— Барыбер минең хаҡта яҙмағыҙ! — тине лә, һыңар аяғын өҙәңгегә ҡуйып, бер ынтылыуҙа Күсимов эйәргә менеп атланды. — Хушығыҙ, иптәш редактор!

— Йәнә осрашҡанға саҡлы, — тип ҡалды Али Карнай.

Яҙыусынан бер ни тиклем алыҫлашҡас, полк командиры ғәжәпкә ҡалды.

— Нимә эшләүемде һиҙҙермәй генә күҙәтеп торған редактор!

— Мин дә уға иғтибар итмәнем, — тине Әлибаев.

— Атлылар араһында торғандыр. Күсимов оҙаҡ өндәшмәй барҙы. — Али Карнай ниндәй кеше?

— Ул һәйбәт журналист һәм талантлы яҙыусы.

— Ташҡа баҫылған нимәләре бар?

— Өс хикәйәләр, өс очерктар китабы һәм граждандар һуғышы йылдарындағы киҫкен ваҡиғаларҙы, ауылда коллектив хужалыҡты нығытыуҙы сағылдырған ике шәп повесы баҫылып сыҡты. Ул ялҡынлы публицист һәм оҫта тәржемәсе. Уның «Йәмле Ағиҙел буйҙары» исемле бер пьесаһы ла бар. Әҙәби тәнҡит һәм теоретик мәҡәләләре лә бик күп. Хәҙер дивизия газетаһының редакторы булараҡ та ул бик күп файҙалы эштәр башҡара. Али Карнайҙың һеҙҙең хаҡта очерк яҙырға теләүенә юҡҡа ҡаршы булдығыҙ, Таһир Таипович! Матбуғат полкты күтәрә, пропагандалай, оло командирҙар алдында уның абруйын да күтәрә бит!

— Етешһеҙлектәрҙе яҙһа ла күтәреләме абруй?

— Был юлы редактор һеҙгә яҡшы ниәт менән мөрәжәғәт итте бит.

— Һин хаҡлы, комиссар, — тине Күсимов, үҙе лә һиҙмәҫтән «һин»гә күсеп. — Ярай, ундай хатаны бүтәнсә ҡабатламаҫҡа тырышырмын. Йәнә ниҙер әйтергә теләгәйнең түгелме, комиссар?

Әлибаев уйға ҡалыбыраҡ яуап бирҙе:

— Көрәшсе егет менән бая көс һынаша башлағас, һеҙҙең өсөн шөрләгәйнем... Полк командирына шулай ҡыланыу килешәме икән?

— Килешмәгәс, мине газетала ниңә маҡтауҙарын теләгәйнең?

— Һеҙҙең хаҡта Али Карнайҙың яҙырға теләк белдереүе аҙаҡтан булды... Имгәнһәгеҙ, йәки еңелһәгеҙ, оялмаҫ инегеҙме?

Күсимов шарҡылдап көлдө лә, ҡапыл тыйылып:

— Хәлемдән килмәстәйгә мин тотонмайым, комиссар! Тотонам икән, йөҙөмдө ҡыҙартмаҫтай итеп башҡарам һәр эште, — тине. Бер аҙҙан һуң өҫтәне: — Бәлки, һин хаҡлылыр...

Байтаҡ ваҡыт өндәшмәй барҙылар.

Әлибаев алдында үҙен уңайһыҙ тойған Күсимов эште нисек яйларға белмәне.

— Тәүге көндән үк бер-беребеҙгә бәйләнмәйек әле, — тине лә, барлыҡ асыуын арттараҡ ҡалып килгән коноводына төшөрөп, екеренде: — Беҙ һөйләшкәнде ниңә тыңлайһың?!

— Тыңламайымсы, иптәш командир! — Нахаҡтан әрләнеүенә үпкәләгән Байдәүләтов, атын яйлатып, артта ҡалды һәм коновод булып хеҙмәт итеүенә үкенде. Полк командирынан әрләнә-әрләнә, уға ошолай эйәреп йөрөүҙең ни ҡыҙығы бар? Фронтҡа барғас та ваҡытын Күсимов атын ҡарап уҙғарһа, әҙәм мәсхәрәһе бит! Ауылдаштарына аҙаҡтан ни әйтер? Бүтән хеҙмәткә һорарға микән? Эскадрондарҙа ла, уҡсы взводтарҙа ла, артиллеристар менән миномётсыларҙа ла хеҙмәт еңел түгел. Берәүҙәр иртәнге ҡараңғынан киске ҡараңғыға саҡлы туң ерҙе ҡаҙа, ауыр бүрәнәләрҙе елкәләрендә ташып, әллә ниндәй соҡорҙар эсен бурай, өсөнсөләре һыбай сабыша, ҡалғандары йүгерешә, сафта йөрөй, мылтыҡтарҙан атырға өйрәнә...

«Күрмәгәндең күргеһе килә, күргәндең ҡоçаһы килә» тигән мәҡәлде иçенә төшөрөп, яҙмышына зарлана-зарлана, байтаҡ алға киткән полк командиры менән комиссарҙы йәһәтерәк ҡыуып етергә ҡабаланды Байдәүләтов Зәки.

## IX

Бер кирегә китһә, китә ул. Байдәүләтовтың үҙ хеҙмәтенән уңмауы етмәгән, Күсимовҡа эйәреп йөрөгәндә һалҡын тейҙереп, ауырып китте. Һауыҡҡандан аҙаҡ, ауылдағы яңғыҙ әсәһе эргәһенә ҡайтып килергә рөхсәт алғас ҡына, уның кәйефе бер ни тиклем күтәрелде.

Поездан төшөп ҡалғас, район үҙәгенән ҡырҡ саҡрым алыçлыҡтағы араны Зәкигә йәйәү барырға тура килде. Уның тыуған ауылы тау-ташлы урман менән уратып алынған тәрән үҙәндә урынлашҡан. Ауылда райместпром артеленән башҡа хужалыҡ юҡ. Кешеләрҙең күбеһе, договор төҙөшөп, шунда эшкә ялланған, ҡалғандары ваҡ-төйәк нәмә менән шөғөлләнеп көн күрә.

Зәки кистән көрт баçҡан сана юлынан көс-хәлгә барҙы. Бала сағынан таныш тауҙар теҙмәһе, тәрән ҡарға

сумған ағастар, һалҡындан ҡурҡып ҡалтыранған һымаҡ, хәрәкәтләнмәйенсә, тып-тын ғына тора. Ошондай күркәм, матур тәбиғәтле ерҙән китеп, ситтә йөрөүе, ауылдағы һөйгән ҡыҙын күптәнән бирле күрмәүе, әсәһе эргәһенә лә күптәнән ҡайтмауы өсөн яфаланып, Зәки аҙымын йышайтты.

Ауылға яҡын һуңғы ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс, Байдәүләтов оҙаҡ ваҡыт тирә-яҡты күҙәтеп торҙо. Аҫта, урманлы тау итәгендәге йылға буйында, ауылдағы өйҙәр күренеше тоноҡ төҫмөрләнә. Ап-аҡ ҡарға сумған урам буп-буш, унда бер йән эйәһе лә күренмәй.

Зәки яурынындағы тоҡсайын төҙәтте лә түбәнгә ыңғайланы. Урамда хатта эттәр өргәне лә ишетелмәй.

Үҙҙәренең өйө тәңгәленә еткәс, көрт баҫып киткән урамға ҡаранып торҙо-торҙо ла индек ҡапҡанан үтте. Ишек алдындағы ҡарҙы таҙартып маташҡан әсәһе улының яҡынлашыуын һиҙмәйенсә, сыйылдыҡ тауышын тирбәлдереп, боронғо йырҙы йырлауын белде.

> Әрәмәгә инһәм, үлән һирәк,
> Сәхрәләргә сыҡһам, ер еләк;
> Эсемдә генә минең уттар яна,
> Ник елкенә икән был йөрәк...

— Әсәй!..

Зәкиҙе тауышынан таныған әсә тертләне. Үҙ ҡолаҡтарына ышанмағандай, минут самаһы тапанып торғандан һуң:

— Әй, балаҡайым, — тип үҙенән аша ҡарап торған улының күкрәгенә һыйынғас, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә, бышылданы: — Ҡолонсағым, күҙ терәп торған берҙән-бер таянысым, сабыйым минең!..

Зәки көлдө.

— Әсәй, шул тиклем сөсөкәләргә мин бәләкәй түгел дә баһа!

— Минең өсөн һин бәләкәй, бәпес!

Ситтә йөрөп ҡайтҡас ҡына әсә хәстәрлеген ныҡлы тойған Зәки, ғүмере буйы кемгә бурыслы икәнлеген аңлап, ошоғаса уның ҡәҙерен белмәүе һәм уға иғтибарһыҙ булыуы өсөн үкенде.

Өйгә ингәс тә әсә йүгереп йөрөп сәй ҡайнатырға тотондо.

Атаһын ағас баҫып үлтергәндән бирле тормоштоң барлыҡ ауырлығын үҙ елкәһендә татыған әсәһе йәл, ҡыҙғаныс булып китте. Һөйәлләнеп ҡатҡан, етеҙ хәрәкәтләнеүсән ҡулдарынан һәм мәлһеҙ сырыш баҫҡан йөҙөнән күҙ-

ҙәрен алмайынса, хыялланды: «Ҡайһылай ыҙалана, интегә, бахырҡай! Һуғыш бөтөп, иҫән-һау ҡайтһам, әсәйемде ҡайғы-хәсрәтһеҙ йәшәтер инем...»

Зәки, тыныс ултыра алмайынса, тышҡа сыҡты. Атаһынан мираҫҡа ҡалған кәртә-ҡаралтыға ҡарап торғандан һуң, ҡар көрәй башланы. Ә уйҙары, бала сағына ялғанып, һөйгән ҡыҙы Мәстүрәне күҙ алдына килтереп баҫтырҙы. Иҫ белгәндән бергә үҫеүҙәренә ҡарамаҫтан, Зәки менән ҡыҙ бик йыш асыуланышты. Нимәгә булһа ла үсеккән Мәстүрә уйынсыҡтарын йәшерһә, Зәки уның сәсенән тарта торғайны, хатта уны туҡмаған саҡтары ла булғыланы. Аҙаҡтан, Мәстүрәне йәлләп, үҙе лә уға ҡушылып иланы. Бер аҙ үҫкәс, ҡыҙ менән егеттең бала саҡ хисе мөхәббәткә әүерелде...

Буйҙаҡ сағында уҡырға, белем алырға, ниндәй ҙә булһа һөнәргә өйрәнергә ниәтләнгән Байдәүләтов ҡалала эшкә урынлашҡас, Ватан һуғышы башланды, һәм уның киләсәккә ҡарата йөрөткән уй-хыялдары селпәрәмә килде. Хәҙер берҙән-бер маҡсаты: тыуған илде фашист илбаҫарҙарынан йәһәтерәк таҙартыу... Һуғыш сыҡҡандың беренсе көндәрендә үк үҙ теләктәре менән фронтҡа киткән ауылдаштарының күбеһе һәләк булды йәки ҡаты яраланды. Мәстүрәнең атаһы ла һуғышта хәбәрһеҙ юғалды. Бындай ҡайғыға сыҙай алмаған әсәһе лә тиҙ арала донъя ҡуйҙы. Япа-яңғыҙы ҡалған Мәстүрә яфалана, интегә торғандыр инде...

Ҡапма-ҡаршы ултырып сәй эскәндә лә һағышлы күҙҙәрен улы йөҙөнән алмаған әсә, ҡапыл һағайып, һораны:

— Балаҡайым, сәйгә саҡырайыммы әллә Мәстүрәне?

Әсә йөрәгенең сослоғона, һиҙгерлегенә ғәжәпләнгән Зәки, ҡолаҡтарына саҡлы ҡыҙарынып, тотлоға-тотлоға яуап ҡайтарҙы:

— Ҡуй, кәрәкмәй!

Хәмиҙә әбей артыҡ ныҡышманы. Һауыт-һабаһын сайҡап һарҡытырға ҡуйғанда, ашыҡмай ғына ауылдағы яңылыҡтарҙы һөйләне һәм аңғармаҫтан һораны:

— Мәстүрәгә ҡайтырыңды хәбәр иттеңме?

— Юҡ.

Шымып ҡалдылар.

Эшен тамамлағас, әсә улы янына килеп ултырҙы һәм йәнә Мәстүрә хаҡында һүҙ башланы:

— Хатлашаһыңмы?

— Кем менән? — Зәки белмәмешкә һалышты.

— Билдәле инде. Мәстүрәне әйтәм...

— Уға хат яҙырға ваҡытым булманы, әсәй.

— Ваҡыт табырға кәрәк ине, улым... Мәстүрә уңған ҡыҙ. Уның шикелле ҡыҙ һирәк осрай... Бергә донъя көтөүегеҙҙе бик тә теләр инем, балаҡайым!..

— Ҡәләш алыу ҡайғыһымы ни хәҙер, — тип асыуланды Зәки.

— Улай тимә, улым! — Әсә, улын иркәләп, уның башынан һыйпаны, арҡаһынан һөйҙө.— Тормош ауыр, ошондай ҡайғылы заманда йәнең һөйгән йәрең эргәһендә булыу яҙыҡ түгел, улым. Килен менән бергә ҡалһам, миңә лә еңелерәк булыр ине ҡартайған көнөмдә...

«Минән дә бигерәк, әсәйем үҙен хәстәрләй, ахырыһы», — тип уйланы Зәки.

Урамда ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде.

Хәмиҙә әбей, урынынан күтәрелеп, боҙға уҡмашҡан бер ҡатлы тәҙрә ситенән тышҡа ҡараны ла:

— Әрҙәнә ҡырҡыусы бисәләр диләнкәнән ҡайта! Улар ул-был иткәнсе, бар, балаҡайым, Мәстүрәнең хәлен барып белеш, — тине.

Зәки башҡаса тыныс ултыра алманы. Бүркен маңлайына батыра баҫып, шинелен кейгән ыңғайында ишектән сығып йүгерҙе. Урам уртаһына еткәс, ул икеләнеберәк торҙо. Шунан, оло юлдан ҡайырылып, тәрән көрткә батасума, тыҡрыҡ тәңгәлендәге өйгә табан ыңғайланы.

Һуҡыр шәм яҡтыһында ултырып тамаҡ туйҙырған Мәстүрә, ишек асылған тауышҡа күтәрелеп ҡараны ла, берҙән-бер һүҙҙе ҡыйынлыҡ менән һығып сығарҙы:

— Зә-Зәки!

Зәки, хәрәкәтһеҙ ҡалған ҡыҙҙы күргәс, ҡапыл баҙнатһыҙланып, ишек тәңгәлендә туҡталды. Шунан ул ҡыҙҙы еңел генә күтәреп алды ла иҙән уртаһында зыр әйләнергә тотондо.

Егеттең муйынынан һығып ҡосаҡлаған ҡыҙ ҡысҡырып көлә-көлә ҡысҡырҙы:

— Етте, етте, башым әйләнә!

Был минутта Зәки менән Мәстүрәнән дә бәхетлерәк кеше юҡ ине. Әйтерһең, тетрәткес мөхәббәт ялҡынына солғанған ике йәш йөрәктән башҡа донъяла бүтән йән эйәһе ҡалмаған...

Танһыҡтарын ҡандырғансы иркәләнергә, хатта берберенә ҡарата булған иң изге һүҙҙәрҙе әйтергә лә өлгөрмәне улар. Зәкиҙе күреү һылтауы менән шау-шыу ҡубарып килеп ингән ауыл ҡыҙҙары:

— Мәстүрә, Зәки һалдатты һиндә тиҙәр!

— Уны күрергә килдек!

— Ҡайтып етмәгән, Зәки һалдат бында шылған!

— Белә ул ҡайҙа барырға!

— Икәү генә ултырмағыҙ әле, әйҙә, клубҡа барып, күмәкләп күңел асайыҡ!

— Зәки һалдат ҡурай тартыр, беҙ бейербеҙ, — тип ҡара сәүкәләр шикелле ғауғалаша-ғауғалаша, Зәки менән Мәстүрәне тышҡа алып сыҡтылар.

Атай-ағайҙарын, ирҙәрен һәм һөйгән йәрҙәрен фронтҡа оҙатҡандан бирле донъяның барлыҡ ауырлыҡтарын үҙ елкәләрендә татып, тәүлектәр, айҙар буйы эштә ыҙаланған, ҡайғы-хәсрәтте уйын-көлкө менән еңергә тырышыусы ҡатын-ҡыҙҙан нисек ҡотолорға белмәйенсә, Байдәүләтов хәйләләште:

— Ҡурайһыҙ нимә тартайым?

— Ҡурайыңды килтерҙек, — тип йыуантаҡ ҡыҙ Зәкиҙең ҡурайын һондо.

— Күптәнән ҡурай уйнағаным булмағас...

Егетте бүлдереп, ҡыҙҙар шаулашты:

— Йә, инәлтмә!

— Ниңә киреләнгәнеңде беләбеҙ!

— Мәстүрәң ҡасмаҫ!

— Уның менән һайрашырға ваҡыт табылыр!..

Әхирәттәре алдында үҙен уңайһыҙ һиҙгән Мәстүрә клубҡа барыуға ҡаршы булмағас, Зәки бик йәһәт ризалашты:

— Әйҙә, киттек!

Һуғыш башланып, ир заты фронтҡа оҙатылғандан бирле әҙәм аяғы баҫмаған ташландыҡ хәлдәге клуб һалҡын, һөйкөмһөҙ ине. Ҡатын-ҡыҙ, иҙәндәге сүп-сарҙы һепереп бер мөйөшкә өйгәс, Зәки ғыжғылдатҡан ҡурай көйөнә ҡушылып йырланы, таҡмаҡ әйтеп, тыпыр-тыпыр бейене...

Күңел асыусы ҡатын-ҡыҙҙан йәһәтерәк ҡотолорға, ҡалған ваҡытты Мәстүрәһе эргәһендә уҙғарыу хаҡында хыялланған Зәки, юлда йонсоп ҡайтыуына һылтанып, өйөнә йыйналды. Ләкин урамға сыҡҡас та, ҡатын-ҡыҙ Мәстүрә менән Зәкиҙән айырылманы. Ҡыҙҙарҙан еңел ҡотола алмаясағын аңлағас, Мәстүрә егетте өйөнә алып инергә теләмәне.

— Иртәгә килерһең, көтөрмөн, — тип шыбырланы ла өйөнә табан йүгерҙе. Ә ҡатын-ҡыҙ Зәкиҙе ҡапҡа тәңгәленә саҡлы оҙатып барҙы.

Усаҡтан төшкән яҡты алдында ултырып ниҙер ямаған Хәмиҙә әбей, улы ҡайтып ингәс, һораулы ҡараны:

— Сәй ҡайнатайыммы, балаҡайым?

— Кәрәкмәй!

— Мәстүрәне күрҙеңме?

— Күрҙем...

Хәмиҙә әбей башҡа нәмә хаҡында һорашырға теләмәне. Зәкийе түрбаштағы һикегә менеп ятҡас, үҙе лә түшәгенә йүнәлде. Ҡараңғы өй эсендә тынлыҡ урынлашты. Урам уртаһында тороп ҡалған ҡатын-ҡыҙ, һуғышҡа киткән һөйгән йәрҙәрен һағыныуҙың сигенә етеп, үҙҙәрен-үҙҙәре йыр менән йыуатты:

Баҡсаларға керәмен дә
Арлы-бирле үтәмен.
Почтальон күренгән һайын
Һинән хаттар көтәмен.

Алма баҡсаларын үтәм,
Үргән сәсемде һүтәм.
Сабыр итәм, һине көтәм,
Ҡәрәкмәй миңә бүтән...

Урамдағы йыр баҫылғандан һуң да Зәки тынысланa алманы. «Әсәйем хаҡлы. Мин Мәстүрәгә өйләнеп китергә тейешмен. Мәстүрә менән әсәйем бергә ҡалһалар, икеһенә тормош көтөүе лә еңелерәк буласаҡ», — тип уйланы ул.

Был тойғо иртәгеһе көндө лә тынғы бирмәне Зәкигә.

Эңер төшкәндә генә алып ҡайтҡан бесәнде бушатҡас, санаға егеүле ҡола атты Зәки «Заря» промартеленең йылҡы аҙбарына алып китте.

Ул әсәһе эргәһенә Мәстүрәне эйәртеп ҡайтты. Ишекте асып инеү менән ҡысҡырып өндәште:

— Әсәй, беҙ өйләнешергә килештек!

Мәсьәләнең йәһәт, көтөлмәгәндә хәл ҡылыныуына аптыраған Хәмиҙә әбей, ни әйтергә белмәйенсә, ыҡ-мыҡ итте.

— Яусыһыҙ-ниһеҙ...

— Үҙебеҙ килешкәс, ниңә беҙгә яусы!

— Хоҙай тәғәлә бәхетегеҙҙе бирһен, — тине Хәмиҙә әбей, бик тиҙ ризалашып. — Итәк тулы бала-саға үҫтереп, бергә-бергә ҡыуаныс менән донъя көтөргә яҙһын!..

Ҡәләше менән ни бары өс кенә көн йәшәне Зәки. Дүртенсе көндө ул үҙенең хәрби часына юлланды.

## X

Башҡорт кавалерия дивизияһы көсөргәнешле боевой тормош менән йәшәне. Подразделениеларҙа ныҡлы дисциплина булдырылды, командирҙарҙың талапсанлығы ла артты. Һәр ерҙә күркәмлек һәм ойошҡанлыҡ күҙгә салынды. Командирҙар атлыларҙы көнөн-төнөн һуғыш уйы-

ныпа өйрәтһә, политработниктар уларҙы рухи яҡтан әҙерләү сараһын күрҙе.

Мәскәү өсөн һуғышҡан ваҡытта туплаған хәрби тәжрибәһен, оҫталығын, белемен уртаҡлашырға тырышып, полковник Шайморатов полк һәм эскадрон командирҙары менән үҙе шөғөлләнде.

Сираттағы күнегеүҙәрҙән һуң ҡайтып барған сағында, уны ярты юлда адъютанты ҡыуып етте.

— Иптәш полковник, һеҙҙе Совнаркомға ашығыс саҡырталар!

Ни өсөн саҡыртыуҙарының сәбәбен белмәйенсә, аптырап, Шайморатов юл буйынса баш ватты.

Өфөгә етеп, Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе ярҙамсыһы менән осрашҡас ҡына, республикаға СССР Оборона Комитеты ағзаһы, Советтар Союзы Маршалы Ворошилов килеүен ишетеп, ул бик тулҡынланды.

— Башҡортостанға килгәс, уның дивизияға барыуы ихтимал, — тип Шайморатов үҙенең ординарецын дивизияға ебәрҙе лә, бер урында тыныс ултыра алмайынса, коридорға сыҡты.

«Иптәш Ворошиловтың алдында үҙемде нисек итеп торорға? Уны ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп яуап бирә алырмынмы?..»

Шайморатовҡа оҙаҡ көтөргә тура килмәне.

Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе Ваһапов менән бергә ултырған Ворошилов, мәсьәләне һуҙмайынса, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында ниндәй эштәр башҡарылыуын ентекләп һораша башланы.

— Командирҙарға мохтажлыҡ юҡмы?

— Хәҙер командирҙар тулыһынса етә, иптәш Советтар Союзы Маршалы, — тип яуап ҡайтарҙы Шайморатов.

— Ҡыҙылармеецтарҙың кәйефе нисек?

— Күтәренке, иптәш маршал! Улар фронтҡа ашҡына!

— Ҡорал яғы нисек?

— Әлегә ағас мылтыҡтар, ағас автоматтар, ағас пулеметтар, ағас ҡылыстар менән эш итәбеҙ, иптәш маршал!

— Ҡорал фронтта ла етешмәй... Башҡа нәмәләр етешәме?

— Ауыҙлыҡ һәм өҙәңгеләр таба алмайбыҙ, иптәш маршал, — тине Шайморатов ҡыйыуһыҙ ғына.

— Уныһы үтә ваҡ мәсьәлә, — тине Ваһапов.

Ворошилов уның менән ризалашманы.

— Хаталанаһығыҙ, иптәш Ваһапов! Кавалеристар өсөн ауыҙлыҡ һәм өҙәңге — бик мөһим нәмәләр, — тине лә йә-

нә Шайморатовҡа боролдо: — Өфө моторҙар заводына беҙҙең менән барырға теләгегеҙ юҡмы, полковник?

— Риза, иптәш маршал!

— Башҡорт кавалерия дивизияһына өҙәңге, даға, йүгән ауыҙлыҡтары етешмәүе хаҡында завод эшселәренә үҙегеҙ әйтерһегеҙ, — тине Климент Ефремович Ворошилов.

Өфө моторҙар заводы эшселәре данлыҡлы маршалды ҡапҡа тәңгәлендә алҡышлап ҡаршыланы. Шунда уҡ уҙғарылған митингынан аҙаҡ, цехтарҙан цехтарға йөрөп, яртышар тәүлек буйы бер ниндәй ялһыҙ-ниһеҙ ең һыҙғанып эшләүсе эшселәр менән Ворошилов дуҫтарса һөйләште, кәңәшләште, уларҙың тормошон, көнкүрешен, нимәгә мохтажлыҡ кисереүҙәрен һорашты.

Завод эшселәре ҡыйынлыҡтарға зарланманы. Үҙҙәренә ауыр булыуына ҡарамаҫтан, фашист илбаҫарҙары менән батырҙарса алышыусы Ҡыҙыл Армияға кәрәкле барлыҡ нәмәне срогынан алда етештерергә һүҙ бирҙе улар.

Өфө моторҙар заводы директоры Баландин Ворошиловты һәр сменала дүртәр-бишәр норма биреүсе эшселәр менән таныштырҙы.

— Һеҙҙең батырлыҡтар хаҡында СССР Дәүләт Оборона Комитетында мотлаҡ һөйләйәсәкмен, — тине ул алдынғы завод эшселәре менән һоҡланып. — Тәрән тылда һеҙҙең шикелле хеҙмәт батырҙары бар саҡта фронт ҡоралға мохтажлыҡ кисермәйәсәк! Беҙҙең төп көс — фронт менән тыл берҙәмлегендә!

«Ниндәй шарттарҙа ла тормоштарына зарланмайынса, фронт өсөн мөһим булған барлыҡ нәмәне етештерергә тырышыусы завод эшселәренең хеҙмәте фронттағы батырлыҡтарға бермә-бер тиң», — тип уйлаған Шайморатов, эшселәр менән уратыулы Ворошилов үҙен саҡыртыуын ишеткәс, кешеләр төркөмөн йырып, алға уҙҙы.

— Тыңлайым һеҙҙе, иптәш маршал!

Ворошилов, һүҙенән бүленеп, фронтҡа китергә теләк белдереүсе завод эшселәре менән Шайморатовты таныштырҙы ла:

— Башҡорт кавалерия дивизияһы өсөн кәрәкле нәмәләрҙе бына уларҙан һорағыҙ, — тип эшселәргә күрһәтте.

Полковник Шайморатов Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советында әйткәндәрен ҡабатлағас, эшселәр кем уҙарҙан шаулашты:

— Дивизияға кәрәкле барлыҡ нәмәләрҙе етештерербеҙ!

— Нимә кәрәклеген генә әйтегеҙ!..

Эшселәр тауышланыуҙан баҫылғас, Ворошилов ҡыҙыҡһынды:

— Дивизияға кәрәкле нәмәләрҙе бер ай эсендә эшләй алырһығыҙмы?

— Тырышырбыҙ!

— Ял иҫәбенә, ун-ун биш көн ваҡыт эсендә етештерербеҙ!

— Тик нимә, күпме кәрәк икәнлеген яҙып бирһендәр,— тип ҡысҡырышты эшселәр.

Башҡорт кавалерия дивизияһына бәйләнешле мәсьәлә ыңғай хәл ҡылынғас, Шайморатов үҙенә китергә рөхсәт һораны.

— Завод эше менән ныҡлы танышыу һеҙгә лә зыян итмәҫ, полковник, — тип Ворошилов уны ебәрмәне.

Маршал хаҡлы ине. Фронт өсөн мөһим булған ҡорамалдарҙың нисек етештерелеүен күреү, үҙҙәре ас-яланғас булып та барлыҡ тормошон, көнкүрешен һуғыш мәнфәғәтенә буйһондорған завод эшселәренең уй-тойғоларын белеү һуғышсыларҙы тәрбиәләү өсөн дә кәрәк — полковник Шайморатов быны яҡшы төшөндө.

Асыҡ һауалағы таш иҙәнгә ҡуйылған станоктарҙың геүгөж эшләүҙәрен күргәс, дивизия командиры эшселәрҙең һыуыҡҡа сыҙамлыҡтарына, уларҙың ныҡышмалылығына һәм тәүәккәллегенә хайран ҡалды. Бына ҡайҙа ысын мөғжизә! Төҙөүселәр, монтажсылар, сварщиктар, сменалары тамамланғас, өйҙәренә ҡайтмайынса, төҙөлөш майҙандарында һәм цехтарҙа ҡунып йөрөй. Иң ҡыйын, мөмкин булмаҫтай хәлдә лә улар бөтә нәмәне урынына еткереп башҡарырға тырыша. Буласаҡ цехтарҙың иҙәндәре тәрән траншеялар менән сыбарланыуына ҡарамаҫтан, көнбайыштан һүтеп алып килтерелгән заводтарҙы йәһәтерәк йыйып бөтөрөү өсөн ашҡына...

— Бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылдың яңы йылын эшселәр заводта байрам итәсәк, — тип завод директоры Баландин ике-өс ай эсендә ун производство корпусы төҙөлөүе, ҡойоу, термик, тимерлек цехтарының, һынау станцияһының эшләй башлауы, ҡырҡ ике километр оҙонлоғонда тимер юл һалыныуы, депо, йөк машиналарын ремонтлау өсөн өр-яңы корпустар төҙөлөүе, хәрби самолеттар өсөн ҡеүәтле моторҙар эшләнеүе хаҡында мауығып һөйләне.

— Завод эшләп сығарған моторҙар ниндәй самолеттарға ҡуйыласаҡ? — тип һораны Ворошилов.

— «Пе-2» бомбардировщиктарына, «Як-3», «Як-7», «Як-9» самолеттарына ҡуйыласаҡ, иптәш маршал, — тип яуап ҡайтарҙы завод директоры.

— Ситтән ниндәй заводтар күсерелде бында?

— Верхневолжскиҙағы, Мәскәүҙәге, Ленинградтағы авиа-машина эшләү заводтары күсерелде. Рыбинскиҙағы завод ҡорамалдарын станция һәм порттан ташыу өсөн генә Өфөнән егерме трактор, илле биш автомашина, йөҙҙән артыҡ ат ҡатнашты.

— Беҙҙән һеҙгә ниндәй ярҙам талап ителә?

— Әлегә беҙгә бер ниндәй ҙә ярҙам кәрәкмәй, иптәш Ворошилов. Бөтә нәмәгә үҙ көсөбөҙ етерлек!

— Берәй нәмәгә мохтажлыҡ кисерһәгеҙ, туранан-тура хәбәр итегеҙ!

— Хәстәрлегегеҙ өсөн, иптәш Ворошилов, рәхмәт!

Өфө моторҙар заводы коллективының үтә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бик күп файҙалы эштәр башҡарыуына ҡәнәғәтләнеүен белдереп, Ворошилов кешеләр менән йылы хушлашты.

Завод ашханаһында тамаҡ ялғап алғас, Ворошилов 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына барып әйләнергә теләк белдерҙе.

Ауыл эргәһендәге яланда ойошторолған һуғыш уйынында ҡатнашыусыларҙың оҫта сабышыуҙарын, «дошманды» ҡыйыу тураҡлауҙарын, егеттәрҙең йылғырлығын һәм соҫлоғон күҙәткән саҡта тәьҫирләнеүенән һаман да тыныслана алмайынса, граждандар һуғышы йылдарындағы кавалеристарҙың ҡыйыу атакаларын күҙ алдына килтереп, Ворошилов Шайморатов яғына ҡараны.

— Полковник, граждандар һуғышы менән хәҙерге һуғышта ҡатнашыусы кавалеристарҙың төп айырмаһы, һеҙҙеңсә, ниҙән ғибәрәт?

— Минеңсә, төп айырма хәрби техникала, иптәш маршал!

— Фекерегеҙҙе ентекләберәк төшөндөрөгөҙ!

Үҙен Фрунзе исемендәге Хәрби академияла һынау тапшырғандағы шикелле тойған Шайморатов һәр һүҙен ныҡлы уйлап әйтергә тырышты:

— Граждандар һуғышы хәҙерге һуғыш менән сағыштырыу мөмкин түгел, иптәш маршал! Граждандар һуғышы йылдарында иң удар көс ат менән боец ине. Ватан һуғышында ҡатнашыусы һыбайлылар атыу, артиллерия-миномет кеүек һуғыш ҡоралдарының ҡеүәтле утына таянып эш итә, ә унан аҙаҡ танкыларҙың һөжүме... Генерал Доватор командалығындағы Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа минең кавполкка егермеләп пулемет, ике орудие, ике миномет бирелде. Граждандар һуғышы йылдарындағы һәр кавполкта дүрт-биш пулеметтан башҡа нәмә булманы. Элгәрге кавалеристар йәйәү һирәк һуғышты. Был һуғышта ҡатнашасаҡ һыбайлылар, ҡылыс, мылтыҡ менән эш

итеүҙән тыш, йәйәү алышырға, гранаталар ташларға, ПТР-ҙан, пулеметтарҙан, хатта миномет-орудиеларҙан атырға ла өйрәтелә.

— Эйе, һуғыш асылы үҙгәрҙе, — тип ризалашты Ворошилов. — Элгәрге ваҡыттағы һымаҡ, атакаға ҡыйыу ташланыу менән генә сикләнмәй хәҙерге һуғышта ҡатнашыусы кавалеристар...

— Ҡеүәтле һуғыш ҡорамалдарының фронтта әле лә етешмәүе, танкыларыбыҙҙың һәм самолеттарыбыҙҙың бик аҙ булыуы үкенесле хәл, иптәш маршал!

Шайморатовтың һуңғы һүҙе Ворошиловҡа оҡшаманы, ахырыһы.

— Был тәңгәлдә СССР Оборона Комитеты тарафынан тейешле эш башҡарыла. Минең Башҡортостанға килеүем дә ошо мәсьәләгә бәйләнгән,— тине лә ул шып-шым булды.

Маршал дивизияла оҙаҡ булманы. Һуғыш уйыны ҡыҙыу барған урындарҙы, траншеяларҙы, окоптарҙы, төрлө нығытмаларҙың ныҡлығын тикшереп, полк командирҙарын һәм политработниктарҙы йыйып кәңәшмә уҙғарҙы ла Өфөгә йүнәлде.

«Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөлгән Башҡорт кавалерия дивизияһының һуғышҡа ныҡышмалы әҙерләнеүе — ҡыуаныслы хәл. Полковник Шайморатов молодец! Дивизияла бөтә нәмәне яҡшы ойоштороуға өлгәшкән. Боецтарҙың кәйефе күтәренке, һәр подразделениелағы хәрби тәртип яҡшы. Ҡешеләрҙе һуғыш ҡорамалдарын ҡулланырға өйрәтеү ҙә яҡшы кимәлдә. Башҡорттарҙың тыуған ил ышанысын намыҫ менән аҡлаясаҡтарына шик юҡ», — тип уйланы ул.

## XI

«Башкирия» ҡунаҡханаһында туҡталған Ворошилов менән һаубуллашҡас, Шайморатов үҙ фатирына китте.

Аулаҡ өйҙә япа-яңғыҙы ғына ултырған Зәйтүнәне күргәс, Шайморатовтың йөрәге елкенеп ҡуйҙы.

— Иҫәнме, һеңлекәш!

— Һаумыһығыҙ!

— Хужабикә ҡайҙа?

— Мунсала, — тине Зәйтүнә, ҡыланышлы йылмайып.

— Бер кисте ошонда уҙғарырға рөхсәт итер микән хужабикә?

— Үҙегеҙ электән төшөп йөрөгән фатир бит!

Миңлегәле, байрамса ҡупшы кейенгән ҡыҙҙың буйһынына, ҡабартылып таралған сөм-ҡара сәсенә, ептәй

тигеҙләнгән ҡашына, еңелсә ҡыҙартыулы ирендәренә күҙ йөрөтөп сыҡҡас ҡына, бүрке менән шинелен систе.

— Ҡупшыланып ҡайҙа барҙың?

— Барманым... Бөгөн ял бирҙеләр.

Ишек алдында хужабикәнең аяҡ тауышы ишетелде.

Һыңар ҡулына еҙ тас, иженсеһенә миндек тотҡан Ғәйниә, Шайморатовты күргәс, яғымлы йылмайҙы.

— Оло ҡунаҡ килгән икән!

— Еңел тән менән һеҙҙе, апай!

— Рәхмәт, Миңлеғәле ҡусты, рәхмәт!

Өҫ-башын бер аҙ рәтләгәс, еүеш сәсен икегә бүлеп үрҙе лә, Шайморатов килтергән күстәнәстәрҙе өҫтәлгә ҡуйып, хужабикә сәй хәстәрләне.

— Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ. Анһыҙ ҙа оҙаҡ көттөрҙөм. Асыҡҡанһығыҙҙыр инде!

Китергә йыйналған Зәйтүнәне лә хужабикә сәй эсергә ҡалдырғас, Миңлеғәленең йөҙө яҡтырҙы. Ул, ҡыҙҙан күҙҙәрен алмайынса, эстән генә һоҡланды: «Күңел аҙзырырҙай һылыу ҡатын! Йөрөгән кешеһе бар микән?»

Миңлеғәленең уйын һиҙгәндәй, Зәйтүнә йылмайып ҡараны.

Сәй эскәндән һуң, Миңлеғәле Зәйтүнәне оҙата сыҡты. Улар ашыҡмайынса урам буйлап атланы. Тирә-яҡ тыптыныс. Аяҡ аҫтындағы ҡар шығырлауынан башҡа нәмә ишетелмәне.

— Йәшәгән фатирығыҙ йыраҡмы? — тип һораны Миңлеғәле.

— Ағиҙел яры буйында.

Улар төнгө урам буйлап артабан атланы.

Ағиҙел яры буйындағы күмәк ағас өйҙәрҙең береһе тәңгәлендә Зәйтүнә туҡталды.

— Мин ошонда йәшәйем, — тип китергә булғайны, Миңлеғәле уның юлын быуҙы.

— Йоҡларға ҡабаланаһыңмы?

— Юҡ.

— Ҡабаланмағас, ошо тирәлә әҙерәк йөрөйөк.

Ризалыҡ белдереп, Зәйтүнә баш ҡаҡты.

Миңлеғәле Зәйтүнәне ҡултыҡланы. Улар текә ярға яҡынлаша башлағас, ел көсәйҙе.

Шайморатов Ағиҙелдең буйынан-буйына һуҙылған шәрә ағастарға, тау итәгендә сыбарланған ағас өйҙәрҙең тәҙрәләренән тоноҡ төшкән һарғылт төҫтәге шәм яҡтыларына ҡарап, һоҡланды:

— Ә-әх, һәйбәт! Йәй көнө был тирә бигерәк тә йәмлелер!

— Йәйен ҡайҙа ла йәмле, — тине Зәйтүнә.

— Тыуған ерҙең ҡәҙере ситтә оҙаҡ йөрөгәндә генә ныҡлы беленә. Һуғыш тамамланғас, һәр йәйҙе Башҡортостанда ғына уҙғарасаҡмын!

Зәйтүнә өшөнө. Ул, еңелсә ҡалтырана-ҡалтырана, Миңлеғәленең ҡултығы аҫтына һыйынды.

— Ой, һыуыҡ!..

Йәш ҡатынды үҙ күкрәгендә тойған Миңлеғәле ярһыны. Ҡайҙалыр ойоп ятҡан ниндәйҙер көслө хис, ҡан тамырҙарын таштырып, бөтә тәне буйлап ағылды.

— Өшөһәң, йылытайым, — тип Миңлеғәле Зәйтүнәнең биленән һығып ҡосаҡланы ла, ирененән үпте. Йән кинәндергес ләззәтләнеү кисергән йәш ҡатын, теше тешкә тейеп үбешкән ваҡытта, еңелсә ыңғырашты, быуындары бушап, һушһыҙ ҡалды...

Болот өйөмө араһынан сыҡҡан ай күренде. Зәйтүнәнең ай яҡтыһына сағылған күҙҙәре баҙлап янды.

«Оҫта үбешә. Бына, исмаһам, ир!» — тигән уй менән ул ситкә тартылды.

— Ҡайтайым инде, миңә таңдан эшкә!

Миңлеғәле Зәйтүнәне ебәрмәй тотто.

— Тағы осрашабыҙмы?

— Белмәйем.

— Киләһе аҙнаның шәмбеһендә эшләйһеңме?

— Әйтә алмайым.

— Сменаңды алмаштырып булһа ла осрашайыҡ шул көндө.

— Самалап ҡарармын... Мин Ғәйниә апайҙа көтөрмөн.

— Унда йәпһеҙ булмаҫмы?

— Апай үҙебеҙҙеке бит!..

Фатирына ҡайтып йоҡларға ятҡас та Миңлеғәле тиҙ генә тыныслана алманы. Ҡатыны Ольга Павловна менән ҡыҙы Октябрина алдында намыҫы таҙа түгел һымаҡ итеп тойҙо ул үҙен. Зәйтүнә менән үбешеүе һәм уның менән тағы ла осрашырға теләк белдереүе өсөн үкенеп, төрлө уйға күмелеп оҙаҡ яфаланды. «Ольга Павловна ошолай хыянат итһә, оҡшатыр инемме? Былдай аҡылһыҙ мауығыу яҡшыға килтермәйәсәк! Зәйтүнәнең нимәһенә ҡыҙыҡтым мин? Ул ҡатын йәш, һылыу. Ләкин патологик мөхәббәт, нисек кенә күпереп сәскә атыуына һәм хуш еҫтәр аңҡытып балҡыуына ҡарамаҫтан, емешһеҙ үҫемлек кеүек булпбуш. Ысын мөхәббәт — үлемһеҙ! Уның бөйөклөгөн данлап шағирҙар шиғырҙар яҙа, композиторҙар йырҙар сығара... Данте, малай сағында уҡ ғашиҡ булған Беатриче исемле ҡыҙы икенсе кейәүгә сығып үлгәндән һуң, ауыр ҡайғы кисереүенә сыҙай алмайынса, үҙенең «Илаһи комедия»һын ижад иткән. Әммә оло, саф мөхәббәт тойғоһона Дантеның

хыянат итеүен һәм Беатриче үлгәс күп тә уҙмайынса уның бөтөнләй сит ҡатынға өйләнеүен нимә менән аңлатырға?» — тигән һорауына ыңғай яуап таба алмайынса, ғүмере буйы йөрәген әрнетеп һыҙландырған беренсе мөхәббәтен — Хәҙисәне иҫенә төшөрҙө Миңлеғәле. Был әллә яҙмыш, әллә яңылыш булдымы? Тыумыштан бөтә нәмәне үҙ мәнфәғәте өсөн оҫта файҙаланып, тормошҡа еңел яраҡлашыусан үтә хәйләкәр, мәкерле бәндәләр генә яҙмыштан өҫтөн торорға маташа. Миңлеғәле шикелле эскерһеҙ, ғәҙел, хәйләләшеүҙең ни икәнлеген дә белмәгән кешегә яҙмыштан уҙмыш юҡ. Йылдың-йылы өҙөлөп һөйгән Хәҙисәһе эргәһенә барырға ашҡынып-талпынып та, ауылға ҡайтмауы һәм бөтөнләй уйламағанда Елена исемле ҡыҙға өйләнеүе яҙмыш тиҫкәрелеге түгелме ни? Елена Павловна илгәҙәк, һөйкөмлө ҡатын ине. Ләкин ул Миңлеғәлегә тоғро булманы. Хәрби атташе итеп Ҡытайға ебәрелеүенә ярты йыл да уҙманы, ул таныш бер генералға кейәүгә сыҡты. Бындай хыянатты Миңлеғәле үтә ауыр кисерҙе. Ул, эсе бошоп, Еленаға үпкә хаты яҙҙы. Ләкин яуап килмәне. Аптырап, Миңлеғәле Еленаның әхирәтенә — Ольга Павловнаға хат яҙҙы һәм улар үҙ-ара хатлаша башланы. Ҡытайҙан ҡайтышлай, аэропортта ҡаршы алыуын һорап, Миңлеғәле Ольгаға телеграмма ебәрҙе. Шул осрашыуҙан һуң, бер-береһенән айырылмайынса, улар ирле-ҡатынлы булып йәшәй башланы...

Тыуған ауылын аҙаҡҡы тапҡыр ҡайтып күргәндән һуң, инде онотола башлаған ваҡиғалар Миңлеғәле күңелен ҡабаттан ҡуҙғатты...

## XII

Фронт өсөн мөһим әйберҙәрҙе етештереүсе Башҡортостандағы барлыҡ предприятиеларҙың эше тураһында белергә теләп, СССР Дәүләт Оборона Комитеты ағзаһы, Советтар Союзы Маршалы Ворошилов ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында махсус кәңәшмә уҙғарҙы.

Саҡырылған республика етәкселәре кәңәшмәгә йыйналғас та, ул беренсе булып һүҙ алды.

— Граждандар һуғышы барған йылдарҙа бөйөк юлбашсыбыҙ Владимир Ильич Ленин бер үҙәктә ныҡлы ойошоуҙы талап итте. Хәрби дисциплина менән сиктәш булған тимер дисциплина хакимлыҡ иткәндә генә коммунистар партияһы үҙенең бурысын үтәй аласағына ныҡлы ышаныс белдерҙе Ленин. Уның был иҫкәртеүе бөгөнгөсә яңғырай. — Ворошилов, кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға күҙ йүгертеп сыҡҡас, һүҙен дауам итте: — Бөйөк даһиҙың ошо

талаптары нигеҙендә партия органдары аппараты — өлкә, ҡала, район комитеттары хәрби штаб аппараты шикелле эшләргә бурыслы. Үҙҙәренең намыҫлылығы, етеҙлеге, егәрлелеге, һәр эште бик тиҙ башҡарыуҙары менән партия работниктары барлыҡ совет һәм хужалыҡ аппараттарына өлгө булырға тейеш, — тип кәңәшмәне асҡас, Дәүләт Оборона Комитеты тарафынан ҡуйылған ҡәтғи талаптарҙың үтәлеше хаҡында урындағы партия етәкселәрен тыңларға теләк белдерҙе Климент Ефремович. — Тәү башлап кем һөйләргә теләй?

— Рөхсәт итегеҙ, иптәш Ворошилов,— тип ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Вострецов һүҙ һораны.

— Рәхим итегеҙ!

Партияның өлкә комитетында нефть, металлургия, авиация бүлектәре, ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитетында айырым оборона промышленносы бүлеге ойошторолғаны бирле эштәр яҡшырғандан-яҡшыра барыуын билдәләп, республикалағы тормош-көнкүрештең, барлыҡ эштең һуғыш мәнфәғәттәренә ярашлы үҙгәртеп ҡоролоуы хаҡында ентекләп һөйләргә кереште Вострецов.

— Халыҡты армияға оҙатыу менән бер рәттән, фронт өсөн хәрби продукцияларҙы күберәк етештереүҙе, заводтары менән бергә Башҡортостанға күсеп килеүсе эшселәргә, уларҙың ғаиләләренә торлаҡ табыу, көнкүрештәрен яҡшыртыу, ата-әсәһеҙ ҡалған етем бала-сағаны урынлаштырыу, аҙыҡ-түлеккә карточка булдырыу сараһын да башҡарҙыҡ. Беҙҙең республикаға күсерелгән хәрби уҡыу йорттарын, атап әйткәндә, Ҡыҙыл Армияның генштабы академияһын, Ленин исемендәге хәрби-политик академияны, Ленинградтың артиллерия, Севастополдең зенит артиллерияһы, хәрби-авиация мәктәбен, һауаны күҙәтеү училищеһын, офицерҙар өсөн «Выстрел» курсын, хәрби фельдшерҙар мәктәбен урынлаштырыу, совхоздарҙа һәм машина-трактор станцияларында политбүлектәр төҙөү буйынса ла партия ойошмалары тарафынан байтаҡ эштәр башҡарылды.

— МТС-тарҙа ойошторолған политбүлектәрҙә эшләү өсөн нисә коммунист ебәрелде? — тип һораны Ворошилов.

— Биш йөҙ коммунист, — тип яуап ҡайтарҙы ла Вострецов республикалағы промышленность предприятиеларының эшенә күсте: — Дәүләт Оборона Комитеты талаптарынан сығып, ҡорос табаҡ, тимер сым, подшипниктар, пружина һәм тростар әҙерләүсе Белорет заводтарына беҙ бик ныҡ иғтибар иттек.

Башҡортостан геология идаралығы тарафынан һуңғы һигеҙ-туғыҙ ай эсендә генә оборона промышленносы өсөн мөһим сырье булған боксит, марганец, баҡыр рудаһы, никель ятҡылыҡтары асылды. Республикала табылған боксит рудаһы оборонаға бәйләнешле һигеҙ заводта, шулай уҡ Магнитогорск менән Ҡузнецк металлургия комбинаттарында файҙаланыла. — Вострецов, Ворошиловтың иғтибар менән тыңлауын һиҙеп, ҡыйыуланды. — Металл эшкәртеүсе һәм машиналар эшләү предприятиеларында, айырым цехтар асып, авиабомбалар, миналар, төрлө снарядтар эшләп сығарыуға ла иғтибар көсәйҙе. Өфө паровоз ремонтлау заводының айырым цехтары, тау-байыҡтырыу заводы, яҙыу машинкалары, Благовещен машиналар заводы, Өфөләге, Стәрлетамаҡтағы, Белореттағы мехмастерскойҙар боеприпастар эшләп сығарыуға күсерелде. Оборона продукцияһы, мәҫәлән, паровоздар ремонтлау заводында ғына ҡырҡ һигеҙ процент тәшкил итә. Ул завод бронеплощадка һәм бронепоездар производствоһын үҙләштерҙе, һуғышҡа саҡлы техник яҡтан мөмкин булмаған «ФД» маркалы иң ҡеүәтле паровоздарҙы ремонтлауға керešте. Октябрь революцияһы исемендәге Өфө суднолар ремонтлау заводы Ҡыҙыл Армия өсөн аэросаналарҙы күпләп сығара башланы. Башҡортостандың ағас эшкәртеүселәре авиапромышленность өсөн фанера һәм артиллерия саналары етештереү менән шөғөлләнә. Өфө, Ишембай, Черниковка кейем тегеү фабрикалары, фронт ихтыяждарынан сығып, тулыһынса үҙгәртеп ҡоролдо һәм шинель, хәрби обмундированиелар әҙерләй. Бер үк ваҡытта, махсус цехтар асып, төрлө ҙурлыҡтағы тоҡтар, тоҡсайҙар тегә, саналар менән саңғылар эшләп сығара. Республикалағы предприятиелар быларҙан тыш всеобуч пункттары өсөн ике йөҙ етмеш мең ағас мылтыҡ, ун биш мең самаһы ҡул гранаталары болванкаһы, ике мең ҡыҫҡа һаплы көрәктәр, кешеләрҙе ҡул һуғышына өйрәтеү өсөн меңдән артыҡ чучелолар, йөҙ һикһән буй күнегеүҙәр кәртәһе етештерҙе...

Ворошилов, ғәфү үтенеп, докладсыны бүлдерҙе:

— Башҡортостанға көнбайыштан күсерелгән предприятиеларҙың эше һәм уларҙың биргән продукцияһы хаҡында ентекләберәк туҡталһағыҙ ине.

— Аңлашыла, Ҡлимент Ефремович. — Вострецов сығышы икенсе йүнәлеш алды. — Бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ беренсе йылдың июленән декабрь айына саҡлы Украинанан, Әзербайжандан, Белоруссиянан, Ленинградтан, Мәскәүҙән һәм башҡа өлкәләрҙән ике мең биш йөҙ туҡһан өс предприятие Башҡортостанға күсерелде. Уларҙың күбеһе, үтә ҡыҫҡа ваҡытта йыйылып, фронтҡа кәрәкле про-

дукцияны сығара башланы. Мәҫәлән, Мәскәү өлкәһенән килтерелгән витамин заводы бик тиҙ арала йыйналып, Өфө кондитер фабрикаһына ҡушылғас, яралы воиндар өсөн ике ай эсендә күп витаминдар етештереүгә өлгәште. Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы станоктар заводы, Белореттағы «Автотрактордеталь», Өфөләге күн заводтары Башҡортостанға күсерелеп килтерелгәндең икенсе ай аҙаҡтарында уҡ продукция сығара башланы. Ленин исемендәге Стәрлетамаҡ станоктар заводы коллективы 1942 йылдың беренсе кварталында танк етештереү өсөн утыҙ төрлө станок һәм ҡырҡ төрлө танк деталдәре эшләп сығарыуға өлгәште. Белоретта машиналар эшләү, Ишембай менән Туймазыла нефть сығарыу предприятиелары барлыҡҡа килде.

— Башҡортостан — нефть сығарыу буйынса илебеҙҙең иң мөһим районы. Оборонаға туранан-тура бәйләнештә булған авиамоторҙарҙы яҡшы бензин менән тулыһынса тәьмин итеү өсөн партия өлкә комитеты һәм Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы тарафынан ниндәй сара күрелә? — тип һораны Климент Ефремович.

— СССР Халыҡ Комиссарҙары Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан ҡуйылған ҡәтғи талаптар нигеҙендә беҙҙең Башҡортостан ғалимдары, нефть промышленносы наркоматы менән берлектә, иң юғары сортлы авиабензинды айырып алыу ысулын тапты. Ҡыҙыҡһынһағыҙ, был хаҡта ғалимдар һеҙгә аҙаҡтан ентекләп аңлатыр. Әлегә ҡайҙа, ниндәй районДарҙа яңы нефть ятҡылыҡтары асылыуы хаҡында ғына бер аҙ һөйләргә теләйем...

— Улары кәрәкмәй,— тине Ворошилов, һуғыш башланғандың беренсе көндәренән бирле ял итмәйенсә көнөн-төнөн көсөргәнешлек менән эшләп йонсоған ВКП(б) өлкә комитеты секретарының ныҡ һурыҡҡан йөҙөнә иғтибар менән ҡарап. — Ҡыҙыл Армияға Башҡортостан республикаһы биш мең бер йөҙ еңел һәм йөк машиналары, ете йөҙ егерме трактор, етмеш мең ат, ун ике мең арба оҙатҡан. Ошо һандарҙы арттырыу өсөн йәнә ниндәй мөмкинселектәр бар?

— Ремонтланып сығасаҡ машиналар, тракторҙар араһынан иң яҡшыһы фронтҡа һайлап оҙатыласаҡ, иптәш маршал.

— Тағы ла өҫтәп, утыҙ һигеҙ йөк машинаһы, егерме өс трактор, мең ярым баш ат менән арба ебәрә алырһығыҙмы фронтҡа?

— Фронт талап итә икән...

— Тылдағы хужалыҡтарға нимә ҡала?

— Әмәлен табырға тырышырбыҙ, иптәш маршал!

Байтаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң, Ворошилов башын ҡалҡытып ҡараны.

— Өҫтәлмә машиналар фронтҡа оҙатылғандан һуң ауыл хужалығында ниндәй тартыу көсө ҡаласағы билдәләнде партия өлкә комитеты менән Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советына?

— Әлегә ап-асыҡ әйтә алмайым,— тине Вострецов, ҡыҙарынып.

— Фронтҡа яраҡһыҙ иҫке машиналарҙы, егергә өйрәтелмәгән йылҡы малы менән һыйырҙарҙы ауыл хужалығында файҙаланыу сараһын күрәсәкбеҙ, иптәш Ворошилов, — тип Ваһапов та һүҙ ҡыҫтырҙы.

Фронт өсөн хәленән килгән барлыҡ нәмәне биргән һәм бирергә әҙер торған Башҡортостан халҡы үҙе үтә ауыр шарттарҙа ҡалыуын Климент Ефремович Ворошилов яҡшы белһә лә, Дәүләт Оборона Комитеты ағзаһы, СССР Верховный Баш командованиеһы ставкаһы вәкиле булараҡ, бөтә көстө һуғыш файҙаһына хәл ҡылырға тырышты. Шул оло маҡсаттан сығып, махсус кәңәшмәлә ҡатнашыусы партия, совет работниктарының һәм айырым хужалыҡ етәкселәренең эшенә тейешле баһа бирҙе, етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөүгә йүнәлдерелгән юғары талаптар ҡуйҙы.

Махсус кәңәшмә тамамланғас, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретарҙары менән Ворошилов айырым осрашты. Әңгәмә ваҡытында уларҙың эше, тормошо, көнкүреше менән ҡыҙыҡһынды, Башҡортостанда ойоштороla башлаған уҡсы дивизиялар, айырым уҡсы бригада, Украиналағы ҡаты бәрелештәрҙән аҙаҡ Башҡортостанда тулыландырылған Өс йөҙөнсө уҡсы дивизия, өр-яңынан ойошторолған артиллерия һәм мина хәрби частары, Салауат Юлаев исемендәге 1292-се һанлы артполк хаҡында, Башҡортостанда фронтҡа оҙатылған 21-се гвардия уҡсы дивизияһы менән ниндәй элемтәлә булыуҙары, яугирҙарҙың кәйефе, тылдағы хеҙмәтсәндәр араһында политик эштең торошо, партия өлкә комитеты менән республика хөкүмәтенең Георгий Димитров етәкселегендәге Коминтернға ниндәй ярҙам күрһәтеүе тураһында Ворошилов ентекләп һораштьы.

Иртәгеһе көндө Климент Ефремович Ворошилов «Башкирия» ҡунаҡханаһында йәшәүсе бер төркөм Коминтерн ағзалары менән осрашты. Кушнаренко ауылында йәшәүсе ҡалған коминтернсылар эргәһендә лә булып әйләнде. Шуның икенсе көнөндә ул Мәскәүгә осто.

## XIII

Маршал Ворошиловтың 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары менән осрашыуы һәм дивизияға тейешле ярҙам ойоштороуы барлыҡ командирҙарҙың, комиссарҙарҙың, политработниктарҙың кәйефен күтәрҙе, ҡатмарлы хәрби уйындың көсөргәнешлелеген арттырҙы һәм фронтҡа әҙерлек менән китеүҙе тиҙләтеүгә рухландырҙы.

Ошо уңайлы шартты тейешлесә файҙаланып, талапсанлыҡты артабан арттырырға, хәрби күнегеүҙәрҙе ысын һуғыштағы һымаҡ башҡарырға ҡушты Шайморатов.

Үҙәккә үтерҙәй һалҡын ҡыштың бер таңында полковник Шайморатов полк һәм эскадрон командирҙарын, комиссарҙар менән айырым штаб работниктарын дивизия штабына йыйҙы ла:

— Иптәштәр, һыбайлы боецтарҙы һуғышҡа әҙерләү срогы икеләтә ҡыҫҡартылыу сәбәпле, ҡалған ваҡыттың һәр көнөн, һәр сәғәтен, һәр минутын тулы файҙаланырға бурыслыбыҙ, — тип алда нимә эшләнергә тейешлеге хаҡында аңлатты: — Занятиеларҙы һуғышҡа тиң шарттарҙа уҙғарыуҙы ныҡлы ойоштороу өсөн, күнегеүҙәрҙе иң әүәл һеҙҙең менән башларға булдым. Ниндәй генә буран, һалҡын булмаһын, һәр көндөң таңынан тороп, ун-ун биш километр араны саңғы ярышында йәки йәйәүләп уҙырға бурыслыбыҙ! Былдай занятиелар, приказда күрһәтелгән тактик, оборона күнегеүҙәренән тыш, һәр полкта, һәр эскадронда, һәр взводта башҡорт халҡының быуындан быуынға күсә килгән ғәҙәтенә ярашлы ойоштоторласаҡ!

— Иптәш полковник, һорау бирергә мөмкинме? — Беренсе полк командиры Күсимов, һынын ҡатырып, ҡулын маңлайы тәңгәленә күтәрҙе. — Саңғыларҙы ҡайҙан табырға?

— Саңғылар әҙер, күрше бүлмәлә. Үҙегеҙгә яраҡлаһын һайлағыҙ, — тине лә, командирҙарҙың күҙ ҡарашынан ҡәнәғәт булмауҙарын һиҙеп, Шайморатов ҡәтғи бойорҙо: — Бер кемгә, бер ниндәй ташлама булмаясаҡ!

Улар йәһәт кенә йыйналдылар ҙа, эйәртенешеп, урман ситенән һуҙылған иҫке эҙ буйлап шыуҙылар.

Шайморатов үҙе юл башлап ебәрҙе. Уның артынан дивизия комиссары Нәзиров, политбүлек начальнигы Абдуллин, полк командирҙары менән комиссарҙар һәм эскадрон командирҙары эйәрҙе.

Асыҡ урында ел шәбәйҙе, үҙәккә үтерҙәй ҡышҡы һалҡын саңғысыларҙың бит алмаларын сәпәкәйләне, тындарын ҡурҙы.

Һыртҡа күтәрелгәс, Шайморатов артына әйләнеп ҡараны. Көслө буран борҡотҡан ҡар туҙаны ҡатыш иртәнге ҡараңғыла бер ни күренмәгәс, артта ҡалыусыларҙы көтөбөрәк торҙо.

— Етеҙерәк, етеҙерәк! — тип ҡабаландырып, арттағыларҙы ҡыуып уҙған Күсимовҡа юл башлап барырға ҡушып, Шайморатов саңғы эҙенән ситкә ҡайырылды.

Төркөмдән ҡалыбыраҡ килгән майор Нафиҡов тиңләшкәс:

— Һеҙҙән башҡа кеше юҡмы артта? — тип һораны Шайморатов.

— Бар!

— Кемдәр?

— Белмәйем, — тине Нафиҡов, ах та ух тышылдайтышылдай.

Артта ҡалыусыларҙың береһе майор Макаев, икенсеһе уның полкындағы эскадрон командиры булып сыҡты.

— Ни өсөн яйланығыҙ? — тип һораны Шайморатов, асыуланып.

— Битен өшөткән икенсе эскадрон командиры янында туҡталдыҡ, — тине Макаев.

— Әле ул ҡайҙа?

— Санэскадронға ебәрҙем.

— Кешеләрҙе йәлләү, төрлө шарттарҙа сыныҡтырмау, талапсанлыҡты кәметеү бына ниндәй һөҙөмтәләргә килтерә! Фронтовик була тороп та әлегәсә шул хәҡиҡәтте төшөнмәгәнһегеҙ! Беренсе ҡыйынлыҡтарға үҙегеҙ ҙә, һеҙҙең командалағы эскадрон командирҙары ла түҙмәне. Лейтенант Хөсәйеновҡа һеҙҙең менән күнегеүҙәр ойоштororға ҡушһам, ниндәй ғәрлек буласаҡ! — тип асыуланды Шайморатов.

Ҡашы, керпектәре, бүрке менән шинель яғалары боҙланған полк командиры Макаев, үҙ ғәйебен танып, етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөргә һүҙ биргәс, полковник Шайморатов бер аҙ йомшарҙы.

— Кешеләрҙе ҡыйынлыҡтарҙы еңеүгә өйрәтеүҙә көсөгөҙҙө йәлләмәгеҙ! Әле ни тиклем күберәк тир түгелһә, фронтта шул тиклем кәмерәк ҡан түгелер. Быныһы бер. Икенсенән, занятиеларҙа ла, һуғыштарҙа ла коммунистар иң алда барырға бурыслы, — тип иҫкәртте лә, Макаев менән эскадрон командирына алдағыларҙы ҡыуып етергә ҡушып, Шайморатов уларҙың артына сыҡты.

Дивизия командирының бойороғо тайпылышһыҙ үтәлергә тейеш икәнлеген аңлаған майор Макаев, алдағыларҙы нисек тә булһа ҡыуып етергә тырышып, ҡабаланды.

Ҡыҙыу барыуҙан манма һыуға төшөп тирләгән полк командиры майор Макаев алдағыларҙы ҡыуып уҙғас та, саҡ ҡына ла яйламайынса, артабан ҙур тиҙлектә шыуҙы.

Офоҡ ситен ҡыҙартып, тауҙар аръяғынан ашыҡмай күтәрелгән ҡояш күренгәс кенә, саңғысылар үҙ подразделениеларына әйләнеп ҡайтты.

## XIV

Миңлеғәле менән Ағиҙел яры буйында торған кистән бирле Зәйтүнә тынғылығын юғалтты. Ул ҡайҙа ғына бармаһын, ниҙәр генә эшләмәһен, күңеле, уй-хыялдары тик Шайморатовта булды. Бүтән ирҙәрҙең холоҡ-ҡыланышына оҡшамаған Миңлеғәленең мөнәсәбәте, уның мөләйем күҙ ҡарашы, яғымлы йылмайыуы күҙ алдынан китмәне. Үҙен фатирына оҙатып барғанда ҡултыҡларға рөхсәт һорауы, ҡар өйөмө аша уҙғанда ярҙамлашыуы һәм яр буйында үбешеүҙәре Зәйтүнәлә йән кинәндергес ләззәтләнеү тойғоһо уятты...

«Мине ул ярата, беренсе тапҡыр осрашыуҙа уҡ уның ғашиҡ булыуын һиҙҙем. Хәҙер уны ҡулымдан ысҡындырмаясаҡмын! Уны үҙемә эҫендереү өсөн, барлыҡ һәләтлегемде һаласаҡмын», — тип Зәйтүнә Миңлеғәле менән ҡабаттан осрашасаҡ көндө түҙемһеҙләнеп көттө.

Миңлеғәленең Мәскәүҙә ҡатыны барлығын иҫенә төшөргәс, Зәйтүнә күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Ләкин оҙаҡ ҡайғырманы.

«Ҡатыны һылыу микән? Юҡтыр. Ун алты йәшлек үҫкән ҡыҙы булғас, күптәнән олоғайып, йәмһеҙләнгәндер инде. Шуға тартыла ул миңә», — тигән һығымтаға килгәс, Зәйтүнә йәнә татлы тойғоларға күмелде.

Аҙна аҙағында буфет эргәһенән үтеп барған Шайморатовты күргәс, Зәйтүнә үҙе лә һиҙмәҫтән ҡысҡырып өндәште:

— Һаумыһығыҙ!

Тирә-яғына әйләнеп ҡараған Миңлеғәле ниндәйҙер ишара яһаны ла үҙен көтөп торған Ниғмәтйәновҡа табан ыңғайланы.

Миңлеғәленең туҡталмай уҙып китеүенә эсе бошҡан Зәйтүнә төрлөсә баш ватты. Ҡешеләр алдында һөйләшергә ғәрләнәме икән ни? Шулай булғас, ниңә осрашыу көнөн билдәләне?..

— Ҡабаландырҙың, ҡабаландырҙың да, сменаңды тапшырып бөткәс, ниңә шаҡ ҡаттың, — тип үҙен алмаштырған буфетсы ҡатын терһәгенә ҡағылғас ҡына Зәйтүнә күңелһеҙ уйҙарынан бүленде:

— Хәҙер, мин хәҙер!..

Зәйтүнә унан-бынан ғына йыйынды ла фатирына ҡайтып китте.

Кис, Миңлеғәле ҡунып йөрөй торған фатирға килгәс, Зәйтүнә шыбырлап ҡына һораны:

— Ғәйниә апай, бында бөгөн аулаҡмы?

Ғәжәпкә ҡалған хужабикә һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы:

— Аулаҡ икәнен күрмәйһеңме ни?

— Күрәм, апай, күрәм! — Зәйтүнә тоҡ-томалға хихылдап көлдө. — Бөгөн һиндә ниндәй ҡунаҡ ҡунырға тейеш икәнлеген дә хәбәр итмәнеләрме?

— Юҡсы.

— Әһә, төшөндөм! Бөгөн бында төн уҙғарырға тейешлеген бер кемгә лә белгертергә теләмәгәндер!

Ғәйниә, бер ни аңлмайынса, байрамса биҙәнеп кейенгән Зәйтүнәнең ҡыланышына сәйерһенеп ҡараны.

— Кем теләмәгәндер?

— Миңлеғәле.

— Әстәғәфирулла тәүбә! — Хужабикә бот сабып көлдө. — Бында ҡунасағын ул ниңә белгертмәҫкә тейеш кешеләргә?

— Минең өсөн, апай, минең өсөн!.. Уның менән мин ошонда осрашырға тейешмен. Әле ул Совнаркомда йөрөй. Яңыраҡ ҡына күрҙем. Хәҙер бында килергә тейеш, — тип Зәйтүнә үҙе менән алып килгән ашамлыҡтарҙы өҫтәлгә ҡуйҙы һәм салғыйы аҫтынан бер шешә араҡы сығарҙы. — Йә, апай, сәйеңде хәстәрлә!

Хужабикә урынынан ҡуҙғалманы. Байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырғандан һуң, күкрәк тултырып һуланы.

— Миңлеғәле ҡусты килһә, ысынлап та, ни эшләргә уйлайһың?

— Белмәйһеңме? Өсәүләп тамаҡ туйҙырырбыҙ. Аҙаҡтан, берәй һылтауын табып, һин күршеләргә китерһең, ә беҙ ҡалырбыҙ...

— Ғәйбәт таралыуынан ҡурҡмайһыңмы?

— Беҙҙең осрашыуыбыҙҙы һинән башҡа кем белә?

— «Беҙ ҡапсыҡта ятмай» тигәндәй, һәммәһе ишетеләсәк! Был турала иң әүәл һин үҙең шапырынасаҡһың!

— Әй, апай, ҡуйсәле, — Зәйтүнә, өҫтәлдәге ашамлыҡтарҙы әле бер, әле икенсе урынға рәтләп ҡуйған ыңғайҙа, хужабикә менән ризалашмайынса, ҡул һелтәне. — Йәшлек үтеп бара, ҡартайғас үкенергәме?

— «Әҙәп барҙа иман бар» тигәндәй...

Зәйтүнә, түҙемһеҙләнеп, бүлдерҙе:

— Нимә «әҙәп»? Әҙәп һаҡлайым тип, ғүмерҙе заяға уҙғарырғамы?

— Бик кәрәккәс, Миңлеғәле ҡустынан башҡа ир заты бөткәнме һиңә?

— Ир заты, теләһәм, ҡырылмаһа ҡырҡ! Ә күңелемә нык оҡшағанын беренсе мәртәбә осраттым. Ул да мине ярата!

— Бер оҙатып ҡуйыуҙан яратыу буламы?

— Яратмаһа, үбешер инеме?

— Бүтәндәр менән үбешкәнең юҡмы ни?

— Быныһы икенсе, бөтөнләй икенсе, — тине Зәйтүнә, иларҙай хәлгә етеп.

Хужабикә, йәш ҡатындың тойғолары менән иҫәпләшмәйенсә, баш сайҡаны.

— Яңылышаһың, ай, яңылышаһың, ҡыҙыҡай! Үҙ яманатыңды сығарыуҙан шикләнмәһәң, исмаһам, Миңлеғәле ҡусты хаҡында уйла! Ваҡ-төйәк әҙәмме ни ул! Ошондай ауыр һуғыш барған йылдарҙа Башҡортостандың иң оло ғәскәр башлығына, Миңлеғәленең изге исеменә тап төшөрмә!

— Мин... Мин бит, апай... — Зәйтүнә, башлаған һүҙен әйтеп бөтөрә алмай, быуылды, ҡарлыҡты. Оҙаҡ илауынан күңеле бушап бер аҙ тынысланғас, танауын мышлатып һулҡылдай-һулҡылдай, битендәге буяуҙарҙы ебетеп һарҡҡан күҙ йәшен ҡулъяулығы менән һөртөргә тотондо. Төҙәнеп-биҙәнеп, өҫ-башын ҡабаттан төҙәткәс кенә, тамам тынысланып, ҡайғылы күҙҙәрен хужабикәгә төбәне.

— Апай, бында ултырырға рөхсәтме миңә?

— Миңлеғәле ҡусты алдында артыҡ шырҡаңламаҫтай булһаң, рөхсәт. Ул килгәс, бында оҙаҡ ултырма, — тине хужабикә.

«Ул килһә, берәй әмәлен табырмын әле», — тип уйлап, Зәйтүнә хужабикә менән һүҙ көрәштермәне.

Зарығып көткән ҡунағы оҙаҡлағас, йәш ҡатын борсола башланы.

— Берәй кәңәшмәләме икән әллә Миңлеғәле?

— Кәңәшмә оҙаҡ була торғайнымы? — Тыйнаҡланған Зәйтүнә хужабикәгә нисектер ҡыҙғаныс булып китте.

— Бәғзе саҡта төн буйына һуҙыла торғайны.

— Көн етмәйме икән ни түрәләргә?

— Көллөһөнә көндөҙ етешә алмай торғандарҙыр.

— Оло түрәләргә лә ҡыйын икән.

Зәйтүнә, өндәшмәйенсә, ниҙер һағайып тыңланы. Тышта тауыш-тын ишетелмәгәс, күңелһеҙләнде.

— Ел-маҙар, ахырыһы!

— Кәңәшмә төнө буйы һуҙылыр булғас, уны көтөүең бушҡа!

— Ул барыбер киләсәк, — тине Зәйтүнә.

— Бер һиндәме ни уның ҡайғыһы?

Хужабикә барып түшәгенә ятҡас та Зәйтүнә ҡайтып китергә теләмәне. Ул шәлен бөркәнгән көйө ултырғыста ултырып йоҡланы. Әтәстәр кем уҙарҙан ярышып ҡысҡырыша башлағанда ғына фатирына ҡайтып китергә йыйналды.

Ҡайтып өҫтөн алмаштырғандан һуң, ял итмәйенсә, Зәйтүнә эшкә барҙы. Шунда ла тынғы бирмәгән күңел бушлығынан ҡотола алмайынса, Шайморатовтың ни сәбәптән фатирына килмәүен асыҡларға тырышты. Үткән төндө бер ҡайҙа ла кәңәшмә уҙғарылмауын, Халыҡ Комиссарҙары Советында ниндәйҙер ашығыс мәсьәләне хәл иткәс тә Шайморатовтың ҡайтып китеүен белгәс, Зәйтүнә үҙен донъялағы иң бәхетһеҙ бәндә итеп тойҙо.

Зәйтүнәнең йонсоу, ҡайғылы, шешенгән йөҙөнә текләп ҡараған ашхана мөдире мыҫҡыллы көлдө.

— Берәйһе йоҡо бирмәнеме әллә?

Ғәйниәнең ҡат-ҡат иҫкәртеүен иҫенә төшөрөп, Зәйтүнә Миңлеғәлене төнө буйы көтөүен әйтмәҫкә тырышты.

— Ауырыйым!

— Ауырыған кеше улай ҡоторонмай!

— Һеҙ, ирҙәр, бөтәгеҙ ҙә бер ҡалыпҡа һуғылған, — тип асыуланды Зәйтүнә. — Һылыу бисәләрҙе күрһәгеҙ, юхаланаһығыҙ, төрлө вәғәҙәләр бирәһегеҙ. Аҙаҡтан...

— Ҡысҡырма, ярар, ҡысҡырма! Ана, беҙҙең яҡҡа кешеләр әйләнеп ҡарай, — тине ашхана мөдире, тирә-яҡҡа һағайыулы ҡаранып.

— Миңә барыбер!..

— Сеү, сеү, — тип ашхана мөдире китеп барғас, Зәйтүнә, бер аҙ тынысланып, Миңлеғәле менән осраша алмауы сәбәбен аҡларға тырышты: «Оло дәрәжәле командир булғас, бушамайҙыр. Беҙҙең үҙ-ара мөнәсәбәтебеҙҙе лә кешегә белгертергә теләмәгәндер. Берәй һылтау табып, уның эргәһенә үҙем барып әйләнәм! Улай килешерме? Уның Өфөгә килеүен көтөргәме икән әллә?»

Зәйтүнәнең Миңлеғәле менән ҡабат осрашыу өмөтө аҡланманы. Ул аҙна буйы өҙгөләнеп-үрһәләнеп йөрөнө лә, түҙемлегенең ахыр сигенә етеп, Миңлеғәле хеҙмәт иткән хәрби часҡа китте.

Дивизия урынлашҡан ерҙе эҙләп тапҡас, Зәйтүнә туптура штабҡа барҙы. Үҙен бер туған һеңлеһе тип танытып, Шайморатовты күрергә теләүен әйтте. Шайморатовтың

тактик уйында ҡатнашыусы һыбайлылар эргәһенән ҡайтмауын асыҡлағас, Зәйтүнә уның фатирына китте.

Тәҙрәһенән тоноҡ шәм яҡтыһы төшкән бер ҡатлы ағас йорт күренгәс, йәш ҡатын тулҡынланды. «Миңлеғәле өйөндә!» — тип ул аҙымын йышайтты, ә Зәйтүнәне оҙатып килеүсе боец туҡталды.

— Һау булығыҙ!

— Бергә инмәйбеҙме ни?

— Юҡ, — тип честь бирҙе лә егет кирегә табан ыңғайланы.

Әлегәсә ныҡлы ышаныс менән килгән Зәйтүнә, яңғыҙы ҡалғас, ҡапыл ҡыйыуһыҙланды, шомланды. «Уның эргәһенә ингәс, ни әйтермен? Алдан хәбәр итмәйенсә килеүем өсөн асыуланмаҫмы?»

Ҡарҙы шығырлата баҫып, Зәйтүнә тәҙрәгә яҡынлашты. Пәрҙә арҡыры бер ни күренмәгәс, икеләнеүле тойғоға бирелеп, тирә-яғына ҡарана-ҡарана ишеккә табан йүнәлде. Унда һаҡсы тора. Тимәк, Миңлеғәле эргәһенә һиҙҙермәй генә инеүе мөмкин түгел. Хәҙер ҡалайтырға?

Ҡараңғы тынлыҡты боҙоп ҡысҡырта-ҡысҡырта, ниндәйҙер поезд тимер юл станцияһына етеп килә.

«Һаҡсы ла әҙәм балаһы, тотоп ашамаҫ әле», — тип Зәйтүнә асыҡ урынға сыҡты. Ләкин бер нисә аҙым атларға ла өлгөрмәне, күмәк һыбайлылар ҡапҡа тәңгәленә килеп туҡталды. Эйәрле атты эйәртеп алып килгән һыбайлыларҙың береһе, бер мөйөшкә йәшеренергә өлгөргән Зәйтүнәгә иғтибар итмәйенсә, яҡындан ғына уҙып китте. Эре-эре аҙымдар менән өйгә барып ингәс, уның кемгәлер рапорт тапшырған тауышы ишетелде.

Күп тә уҙманы, бер төркөм командирҙарҙы эйәртеп, өйҙән Шайморатов сыҡты. Ул ишекте бикләгән боецҡа:

— Миңә был төндә йоҡларға тура килмәйәсәк. Асҡысты фатир хужаһына ҡалдырырға, — тип бойорҙо ла, эйәрле атына атланып, дивизия штабы яғына елдерҙе. Башҡа һыбайлылар уның артынан эйәрҙе.

«Хеҙмәтенән, ысынлап та, бушай алмай икән! Былай булғас, юлым уңманы», — тип үкенә-үкенә Зәйтүнә станцияға табан ыңғайланы.

## XV

Полковник Шайморатовтың ҡәтғи талаптары нигеҙендә барлыҡ хәрби подразделениеларҙа һуғыш шарттарына ярашлы күсөргәнешле күнегеүҙәр дауам итте.

Өйөнә ҡайтып килгәндән һуң уҡсылар взводында хеҙмәт итеүсе Зәки Байдәүләтовҡа ла күнегеүҙәр еңел бирел-

мәне. Ҡыҙылармеецтар, тәүлектәр буйы казармаларына ҡайтмайынса, һалҡын асыҡ яланда йәшәне. Авдон, Жуково, Йоматау ауылдарының тирә-яғындағы ерҙәрҙә «оборона» тотоусы башҡа подразделениелар шикелле, Байдәүләтов хеҙмәт иткән уҡсылар взводы ла көнөн-төнөн ер ҡаҙҙы, траншеяларҙы ныҡытты, бик йыш «дошманға» ҡаршы атакаға күтәрелде...

Ҡышҡы сатлама һалҡын көндәрҙә лә күнегеүҙәр туҡтатылманы. Ҡөслө ҡырҡыу ел, бәйҙән ысҡынғандай, яман ҡотороноп бер туҡтауһыҙ олоно, ҡыҙылармеецтарҙы өшөттө.

Байдәүләтов эргәһендә траншея ҡаҙып аҙапланған егет, ҡыҫҡа һаплы көрәген ҡомло балсыҡ өйөмөнә асыу менән батырҙы ла, хәле бөтөп, соҡор төбөнә сүкәйҙе.

— Уф, арытты!

— Тирләгән көйө һалҡын ергә ултырма, — тине Зәки.

— Хәл йыйырға ла ярамаймы?

— Траншея әҙер булмайынса, командир ял итергә ҡушманы бит!

— Командирға ярамһаҡланма!

— Юҡҡа ажарланаһың, Мөхәммәтҡазы!

— «Тяжала в баю, лигка учинйә» тип йәнде алғас ни, нисек итеп ажарланмаҫҡа?

— Яңылыш әйтәһең, Мөхәммәтҡазы! «Тяжело в ученье, легко в бою», — тип төҙәтте Зәки.

— Барыбер түгелме ни?

— Түгел шул!

— Көстө әрәмгә түгеүе ҡыҙғаныс миңә! Берәй соҡорҙо кеше буйы хәтле итеп тәрәнәйтергә өлгөрмәйһең, икенсе урынға барып, бүтән соҡор ҡаҙырға ҡушалар, — тип зарланды Мөхәммәтҡазы.

— Дивизия командирының бойороғо шулай булғас, беҙҙең командир нишләһен? Беҙҙең шикелле рядовойҙарға түгел, эскадрон, хатта полк командирҙары менән дә ученье уҙғара Шайморатов ағай.

Мөхәммәтҡазы өндәшмәне. Ҡар өйөмдәрен траншея төбөнә борҡотоп өҙлөкһөҙ олоған буран тауышына ойоп ултыра торғас, уны йоҡо баҫты. Эшен туҡтатып Мөхәммәтҡазыға арҡаһы менән һыйынған Зәки ҙә күҙҙәрен йомғайны, яҡында ғына взвод командирының асыулы тауышы ишетелде:

— Һеҙҙең өсөн траншеяны кем тәрәнәйтергә тейеш? Ниңә туҡталдығыҙ?!

Мөхәммәтҡазы, йоҡо аралаш һикереп тороп, көрәгенә йәбеште. Зәки, өшөй башлаған кәүҙәһен ҡыймылдата алмайынса, урынында ҡалды.

— Байдәүләтов, йоҡламаҫҡа! — тип ҡысҡырған взвод командирының талапсан тауышын ишеткәс кенә буйһонорға теләмәгән аяҡтарына ҡыйынлыҡ менән баҫты ул. Ләкин, теше тешкә теймәйенсә, ҡалтырана башланы.

— Ай, туңдым!..

— Донъяға бөгөн тыуҙыңмы? Йылынырға теләһәң, етеҙ хәрәкәтлән, эшлә! Боец барлыҡ ҡыйынлыҡтарға күнегергә бурыслы!..

Көсөргәнешле күнегеүҙәр Зәкиҙе сыҙамлы булырға өйрәтте, сыныҡтырҙы. Бәғзе саҡта былдай һынауҙарға ул сыҙамаҫ, үҙәккә үткән ҡышҡы һалҡын көндәрҙең береһендә үҙе ҡаҙған соҡор төбөндә хәлдән тайып үлер һымаҡ ине. Сабый саҡтан үҙ яйына йәшәргә күнеккәнлектән, командирҙарҙың талапсанлығы, әйтер һүҙен дә әйттермәй: «Молчать! Выполняйте приказ! Кру-гом! Идите», — тип екеренеүҙәре уның зитына тейҙе һәм артабан түҙә алмаҫлыҡ мәсхәрә, шәфҡәтһеҙлек булып күренде. Телләшкән саҡтарында уға тағы ла нығыраҡ эләкте. Ул, сиратһыҙ наряд алып, кешеләр йоҡлаған саҡта казарма иҙәнен йыуҙы йәки әбрәкәйҙе таҙартты, ә иртәнсәк, ял итмәйенсә, иптәштәре менән бергә тағы сафҡа баҫты...

Бына бөгөнгө төндә лә, тынғыһыҙ уйҙарынан айырылмайынса, взводташтары шикелле, ҡомло траншея төбөн тәрәнәйтеүен белде. Уның күршеләре, уларҙан арыраҡ урынлашҡан хеҙмәттәштәре лә, тирләп-бешеп, хужалыҡ өсөн бер нидәй ҙә файҙаһы теймәҫтәй ерҙе ҡаҙыу менән мәшғүл.

— Байдәүләтов, балсыҡты ниңә ситкә һирпәһең? Уны брустверға һалып тигеҙлә, — тип ҡысҡырҙы отделение командиры.

«Взводныйға ярамһаҡланып, отделение командиры ла уғата мыжыҡҡа әйләнде! Юҡҡа-барға бәйләнеп бара», — тип уйлап, Зәки аҡланды:

— Ҡараңғы буранлы төндә бер ни күренмәй, иптәш сержант!

— Боец буранлы төндә лә күрә белергә тейеш, — тип тупраҡты брустверға нисек итеп өйөргә кәрәклеген аңлатты отделение командиры.

Таң яҡынлашҡанға саҡлы байтаҡ эштәр башҡарылды, һәм хәлдән тайырҙай булып арыған ҡыҙылармеецтарға бер аҙ серем итеп алырға ҡушылды.

Зәки менән Мөхәммәтҡазы, соҡор төбөнә ваҡ-төйәк нәмәләрҙе йәйгәс, бер-береһенә һыйынып хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Саҡ та соҡ ишетелгән көрәк тауыштары бер ыңғай

баçылып, тынлыҡ урынлашты. Яман тауыштар менән олоп ҡоторонған бурандан башҡа нәмә ишетелмәне.

«Туҡта, кем килә?!» тип һирәк-мирәк ҡысҡырған тауышты йоҡо аралаш ишетеп күҙҙәрен аса ла, Байдәүләтов йәнә һушһыҙ йоҡоға сума. Ял итеп алырға ҡушылғаны бирле күпме йоҡлағанын һиҙмәне ул. Төшөндә тыуған ауылына ҡайтып, Мәстүрәһен ҡосаҡлап үбергә маташҡан саҡта, яҡында ғына команда яңғыраны:

— Вста-а-ть!..

Хеҙмәттәштәре менән бер үк ваҡытта траншеянан һикереп сыҡҡас та, төшөндә күргән кәләше ҡосағынан айырылғыһы килмәйенсә, Зәки йән әрнеткес юҡһыныу тойғоһо кисерҙе.

«Мәстүрә, Мәстүрәкәйем минең!» — тип эстән генә һыҡраныл, иртәнге ризыҡты алып килгән поход кухняһы яғына табан барыусы иптәштәре артынан эйәрҙе.

Тауҙар аръяғынан күтәрелгән ҡояштың һалҡын нурҙары ергә һибелгәс, тирә-яҡ йәмләнде, ваҡ-ваҡ ҡына ҡар бөртөктәре иçәпһеҙ-һанһыҙ осҡондар кеүек баҙланы.

Котелоктары төбөнә һалдырып алынған тары бутҡаһын ашағанда бер-береһен мәрәкәләшеп көлөшкән хеҙмәттәштәренә ҡатышмайынса, Зәки аулағыраҡ урынға барып ултырҙы.

Шул саҡ взвод командиры уға хат килтереп тотторҙо.

— Кем яҙған? — тип һораны Мөхәммәтҡазы.

— Кәләшемдән.

— Уғата йыш яҙа. Ярата торғандыр.

Мөхәммәтҡазының һорауына яуап ҡайтармайынса, Зәки Мәстүрәһе яҙған хатты асып уҡырға кереште. Уны ике-өс тапҡыр уҡып сыҡҡас, күҙҙәрен йылтыратып йылмайҙы.

— Иртәнге төшөмдә Мәстүрәне күргәйнем, ошо хатты алырға булған икән!

— Төшкә ышанаһыңмы?

— Элгәре иғтибар итмәй инем, хәҙер ышанам!

— Кәләшең ниҙәр яҙа?

— Үҙҙәре тормошо тураһында, — тип Зәки бүленгән ризығын ашарға тотондо.

— Кәләшең менән оҙаҡ йәшәнеңме?

— Өс көн самаһы.

— Ҡайһылай аҙ, үкенесле! — Мөхәммәтҡазы, елгә арҡаһы менән боролоп, маңлайына батыра кейгән бүркенең ҡолаҡтарын аçҡа төшөрөп бер-береһенә ҡуша бәйләне лә, быйма үксәләре менән тоҡ-томалға ҡарҙы иҙҙе. — Кәләшең һылыумы?

— Бүтәндәргә нисектер, белмәйем, ә минең өсөн Мәстүрәнән дә һылыуыраҡ ҡатын донъяла юҡ, — тип Зәки кеҫәһенән сығарған фотоны дуҫына һондо.

Мөхәммәтҡазы, фотоны төрлөсә әйләндергеләп иғтибар менән ҡарағас, өндәшмәйенсә кире бирҙе.

Зәки ҙә тауыш-тын сығарманы. Тамаҡ туйҙырып, котелогы төбөнә ҡойҙороп алған һалҡын сәйҙе бер тына һемереп эскәс, бармаҡ башы йыуанлығындай итеп самосад төрөп, уны саҡматаш сағып тоҡандырғас ҡына, ҡуйы ҡара төтөндө ауыҙ-морононан урғылдырып борҡота-борҡота, ыһылдағанға оҡшаған тауыш сығарҙы:

— Ҡәләш алғанға саҡлы бер ни түгел ине, хәҙер гел уйландыра...

— Ҡәнишнә уйландырыр, — тип ризалашты Мөхәммәтҡазы. — Ҡүҙле-башлы булыу менән яңғыҙ йөрөүҙә ҙур айырма бар... Мин дә бер ҡыҙҙы ярата торғайным...

— Ул икенсе иргә сыҡтымы?

— Һуғышҡа китеремде белгәс, ҡыҙымдың башын ғаиләгә бәйләмәйем тип, өйләнмәгәйнем... Яңыраҡ, минең ҡасан ҡайтыуымды көтмәйенсә, икенсе иргә сыҡҡан...

— Мәрәкә икәнһең!

— Эйе, мәрәкәмен! — Ҡапыл асыуланған Мөхәммәтҡазының күҙҙәре таҫрайҙы. — Өйләнһәм, бала етем ҡалырға тейеш инеме?

— Барлыҡ ир заты һинең шикелле булһа, донъяла кеше нәҫеле ҡороясаҡ, — тине Зәки.

— Атайһыҙ үҫеүҙе үҙ башымда татығас, етемлектең ни икәнлеген мин бик яҡшы беләм,— тип Мөхәммәтҡазы тормошо хаҡында һөйләй генә башлағайны, өлгөрмәне. Күнегеүҙәрҙе дауам итергә тигән команда яңғыраны.

«Дошман» һөжүмен көткән ҡыҙылармеецтар көндөҙ ҙә оборонаны нығытты, окоптар ҡаҙҙы, блиндаждар төҙөнө, уларҙы ентекләп маскировкаланы.

Ике тәүлек ваҡыт уҙғас, ниндәй ҡыйынлыҡтар менән эшләнгән нығытмаларҙы ҡалдырып, ауыл арьяғындағы әрәмәлеккә табан йүнәлделәр. Улар Дим буйында «дошман» утына эләгеп туҡтарға мәжбүр булдылар, һәм ҡабаттан траншеялар менән окоптар ҡаҙыу эше башланды...

## XVI

1942 йылдың мартына тиклем көсөргәнешлелек менән көнөн-төнөн барған «алыштар» Көньяҡ Урал округынан килеүсе хәрби совет ағзалары тарафынан уҙғарылған сборҙарҙа, тактик занятиеларҙа башҡорт егеттәренең хәрби-политик әҙерлеген тикшереү һәм 112-се кавалерия диви-

зияһын Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарамағынан СССР Оборона Халыҡ Комиссариатына буйһондороу менән тамамланды.

Башҡортостан республикаһы ойоштороролоуын билдәләүгә бер көн ҡалғас, 22 марттың иртәһендә, әлегә ҡорал алмаһа ла ғәскәри соединениеға әүерелгән дивизияның кавалеристары Башҡортостан хөкүмәтенең байрағы һәм башҡорт халҡының наказы тапшырыласаҡ урынға — штаб ҡаршыһындағы иркен асыҡ яланға ҡарай ағылды.

Үҙҙәрен хәрбиҙәрсә тоторға өйрәтелгән ғорур ҡиәфәттәге егеттәрҙең күңеле көр, йөҙҙәренән шатлыҡлы нурҙар балҡый. Сөнки улар хәҙер — ысын яугирҙар. Тыуған совет иленә баҫып инеп, бөтә халыҡты ҡол итергә маташыусы фашистарға ҡаршы һуғышҡа китергә тулыһынса әҙер булыуҙары уларға ҡыуаныс түгелме ни?

Быуындан быуынға күсә килгән олатайҙар ғәҙәте буйынса, ҡурайсылар командаһы колонналарҙан алда бара. Музыканттарҙың дәртле көйөнә ныҡлы аҙымдар менән атлаған 275-се, 294-се, 313-сө полктар сафындағы эскадрондар, тип-тигеҙ рәттәргә теҙелешеп, бер тән шикелле берҙәм ағыла.

Ситтән ҡарап тороусы күмәк кешеләрҙең һоҡланыуына, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша ҡул болғауҙарына иғтибар иткән Байдәүләтов, Башҡорт кавалерия дивизияһы сафында хеҙмәт итеүенә оло ҡыуаныс тойғоһо кисереп, күкрәген нығыраҡ кирҙе, башын теп-текә тоторға, һәр аҙымын командирҙар өйрәтеүе буйынса баҫырға тырышты. Күңел елкендергес уй-тойғоларын ҡурай моңо менән генә баҫа алмайынса, ул йыр башланы:

Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында.

Зәкигә иптәштәре лә ҡушылды:

Булгадир булған, ай, Салауат
Егерме лә ике йәшендә...

Эскадрондар ике йөк машинаһын бер-береһенә төкөтөп эшләнгән трибуна ҡаршыһына етеп туҡталғас, кавалеристарға үҙ алдына күңел асырға рөхсәт ителде.

Сафтар тарҡалыу менән Байдәүләтов ҡурайҙа бейеү көйөн уйнап ебәрҙе, егеттәр шул көйгә ҡушылып таҡмаҡ әйтте:

Елбер-елбер итмәһә,
Елдәр алып китмәһә,

Эшкә батыр, төҫкә матур,
Миҙалы бар етмәһә!
Ритә-ритә ритәйем,
Әйҙә, алып китәйем...

Дивизия штабы комиссары — республиканың элекке Осоавиахим комитеты председателе Аритҡолов, үҙенә иғтибар итеүҙе талап итеп, ҡоласын йәйҙе. Шунан:

— Ҡурайсылар менән гармунсыларға етеҙерәк уйнарға! — тип ҡысҡырҙы ла йүгереп йөрөп бейергә тотондо.

Уның артынса уртаға сыҡҡан бүтән егеттәр ҙә, үҙ-ара сәмләнешеп, дәртле «Перовский», «Ҡарабай», «Үҙән буйы» көйөк көйҙәргә танһыҡтары ҡанғансы бейене.

Улар эргәһенә ауылдан килгән йәш ҡатындар, ҡыҙҙар ҡыҫҡын йыйналды һәм, алдан һүҙ берләштергән шикелле, «Ерән ҡашҡа»ны йырлап ебәрҙе:

Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ,
Баш күнәккәй, баш күнәккәйҙе лә ҡулға элеп.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Башын сайҡай малҡайым.
Алдарында һолоһо бөтһә,
Һыҙыла йөрәк майҡайым.
Исән генә йөрөп, һау ҡайтығыҙ,
Китәһегеҙ, китәһегеҙ инде лә ҡуҙғалып.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Елдәр тарай ялҡайын.
Эйәрләгән егетеңде
Ташлап китмә, малҡайым,
Эй-й... ташлап китмә, малҡайым.

Яуға китәсәк егеттәр йәш ҡатындарға йыр менән яуапланы:

Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡоралды алып,
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарҙы.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Арымай сабыр малҡайым.
Эйәреңдә егет барҙа
Бойоғоу белмәҫ малҡайым,
Эй-й... бойоғоу белмәҫ малҡайым.
Исән генә булығыҙ, ҡайғырмағыҙ,
Йыш яҙығыҙ, йыш яҙығыҙ яуап та хаттарҙы.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Башын сайҡай малҡайым.
Был һуғыштан иҫән ҡайтһаҡ,

Уҡалармын ялҡайын,
Эй-й... уҡалармын ялҡайын.

Ҡапма-ҡаршы йырлашып танышҡан егеттәр, хатлашырға килешеп, ҡыҙҙарҙың адрестарын яҙып алған саҡта, сафтарға теҙелергә ҡушылды.

Иртәнге сәғәт ун тулғас, трибунаға бер төркөм Башҡортостан хөкүмәте ағзалары күтәрелде. Улар араһында торған Башҡортостан Верховный Советы Президиумы председателе Ибраһимовты, партияның өлкә комитеты секретарҙары Буренкин менән Усмановты, Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы председателенең урынбаҫары Маслинды, республиканың Дәүләт планы председателе Нигмәтйәновты, ВКП(б) өлкә комитетының хәрби бүлеге мөдире Мензелинцевты танып, Байдәүләтов ҡалҡынып ҡуйҙы һәм республика етәкселәренә үҙен дә таныттҡыһы килде.

Беренсе булып Ибраһимов һүҙ алды. Ул кавалеристарҙы хәрби күнегеүҙәрҙең уңышлы тамамланыуы һәм Башҡортостан республикаһы ойошторолоуының егерме өс йыллығы менән ҡотланы.

Башҡорт кавалерия дивизияһына байраҡ тапшырылыуға бағышланған митингыны асыҡ тип иғлан иткәндән һуң трибунанан төшкән Ибраһимов кавалеристар ҡаршыһындағы майҙан уртаһына яҡынлашты.

Шул саҡ көслө «смирно» командаһы яңғыраны.

Дивизия командиры полковник Шайморатов строевой аҙым менән Ибраһимовҡа ҡаршы атланы. Уға барып етергә ике-өс метр самаһы ҡалғас, ҡапыл туҡталып, рапорт тапшырҙы:

— Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы председателе...

Дивизия командиры тапшырған рапортты алғандан һуң, Рәхим Кирәевич Ибраһимов 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына хәрби байраҡ тапшырыу тураһындағы грамотаны сафта тороусы ҡыҙылармеецтарға ҡысҡырып уҡыны:

— *Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы, башҡорт халҡы исеменән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына байраҡты тапшырғанда, немец илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышасаҡ дивизия башҡорт халҡының һәм Башҡортостан хөкүмәтенең ышанысын аҡлаясағына шикләнмәй.*

*Бөйөк Ватан һуғышы яланында ҡатнашыусы рустар, украиндар, белорустар, үзбәктәр, ҡаҙаҡтар һәм бүтән халыҡ боецтары менән бергә башҡорт халҡының ғәйрәтле*

*улдары ла Совет иленең именлеген яҡлай һәм Ватанды һаҡлай.*

*Иптәш боецтар, командирҙар, комиссарҙар, политработниктар! Данлыҡлы Ҡыҙыл Армия сафындағы бүтән частар менән бергә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы беҙҙең изге еребеҙҙе немец илбаҫарҙарынан таҙартасағына һәм фашист бандаларын тулыһынса ҡыйратасағына Башҡортостан хөкүмәте ныҡлы ышана.*

*Немец илбаҫарҙарына үлем!*

*Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы.*

*Өфө ҡалаһы. 22 март, 1942 йыл».*

Оркестр дәртле көй уйнап ебәрҙе. Ибраһимов, полковник Шайморатовтың ҡулын ҡыҫып, уға хәрби байраҡты тапшырҙы.

— Ҡотлайым!

— Рәхмәт!

Дивизия командиры бер аяғы менән ергә теҙләнде. Ал-ҡыҙыл төҫлө ебәк байраҡтың ситенән үпте лә уны байраҡ йөрөтөүсегә тотторҙо һәм Ибраһимов менән бергә трибунаға күтәрелде. Уның митингыла һөйләгән сығышы дивизияның барлыҡ личный составы исеменән әйтелгән ант менән тамамланды:

— ...Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар кисерергә тура килмәһен, беҙ совет хөкүмәтенең, партиябыҙҙың, СССР Дәүләт Оборона Комитетының ышанысын намыҫ менән аҡлаясағыбыҙҙы белгертеп, тыуған илебеҙҙе азат итергә, фашистарҙы үҙ өңөнә — Берлинға ҡыуып индереп дөмөктөрөргә һәм мәңгелеккә юҡ итергә ант итәбеҙ.

Немец-фашист оккупанттарына үлем!..

Полковник Шайморатовтың аҙаҡҡы һүҙе көслө «ура» яңғырауына күмелде.

Дивизия командирынан һуң партияның өлкә комитеты секретары Буренкин кавалеристарҙы хәрби байраҡ алыуҙары һәм Башҡортостандың егерме өс йыллыҡ юбилейы менән ҡотланы.

Байраҡты тигеҙ сафҡа теҙелгән һыбайлыларға күрһәтеп сыҡҡас, митинг тамамланды һәм эскадрондарҙың спорт ярышы башланды.

Ярышҡа алдан ныҡлы әҙерләнеп, ялдары байрамса ҡыҙыл таҫмалар менән биҙәлгән эйәрле аттарға атланған 313-сө полктың һыбайлылары беренсе булып майҙанға сыҡты. Аттарҙы артҡы аяҡтарына баҫтыртып бейеткән һыбай-

лыларҙың һәр хәрәкәтен халыҡ алҡышлап хупланы, сәпәкәй сапты. Аттар бер-бер артлы төрлө кәртә-ҡамауҙар аша һикерешә башлағас та, Байдәүләтов Зәки үҙен-үҙе онотоп ҡысҡырҙы:

— Шәп, ҡайһылай етеҙ!

Уны башҡалар ҙа хупланы:

— Бына, исмаһам, маладис!

— Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, полк командиры Макаев үҙе ҡайһылай сабыша!

Бүтән полктарҙың егеттәре 313-сө полк һыбайлыларынан да уҙҙырып ебәрҙеләр. Шунлыҡтан ярыштағы приздарҙың күбеһенә майор Нафиҡов командалығындағы 294-се кавалерия полкы, унан ҡала 313-сө полк һыбайлылары лайыҡ булды, ә конкурстан тыш уҙғарылған спорт ярышында майор Күсимов командалығындағы 275-се полк еңеп сыҡты. Был полк командирының һәр ҡыланышын иғтибар менән күҙәткән Ниғмәтйәнов, бер урында тыныс тора алмайынса:

— Күсимов ысын ыласын да баһа! — тине, тулҡынланып.

Уның менән Буренкин да ризалашты:

— Һеҙ хаҡлы, Ғилман Вилданович! Дивизия күләмендәге һикереү ярышында ла, рубканан да майор Күсимов һынатманы!

— Һуғышта ла был полк командиры үҙен күрһәтер әле, — тине лә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы председателе Ибраһимов дивизияның һыбайлылары алдында майор Күсимовҡа ап-аҡ бурка бүләк итте.

Байраҡ тапшырыуға һәм республиканың юбилейына бағышланған спорт ярыштары тамамланғас, дивизияның политбүлек начальнигы Абдуллин политработниктарҙы кәңәшмәгә йыйҙы.

— Бөгөнгө митингының, ат-спорт ярышының ойошҡанлыҡ менән уҙғарылыуы ҡыуаныслы хәл. Бында политработниктар ҙа ҙур өлөш индерҙе, — тип үткән көнгә ҡыҫҡаса йомғаҡ яһаны ла, айырым етешһеҙлектәрҙең асыҡланыуы, уларҙың ваҡытында бөтөрөлмәүенә кемдәр ғәйепле икәнлекте исемдәре менән атап әйтеп, подразделенисларҙа политик эште артабан нисек итеп көсәйтеү хаҡында һөйләне.

Абдуллиндан һуң сығыш яһаған дивизия комиссары Нәзиров кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға кавалеристарҙы һуғышҡа әхләҡи яҡтан әҙерләү өсөн ниндәй эштәр башҡарырға кәрәклеген аңлатты һәм яңы бурыстар ҡуйҙы.

Кәңәшмә тамамланғас, Сәғит Әлибаев дивизия комиссары эргәһенә килде.

— Иптәш Нәзиров, һеҙҙә бер йомошом бар ине. Шул мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкинме?

— Рәхим итегеҙ, Сәғит Рәхмәтович, — тине Нәзиров, дуҫтарса йылмайып.

— Өфөгә ҡайтып килергә теләгәйнем.

— Оҙаҡҡамы?

— Бер тәүлеккә.

— Улай оҙаҡҡа булмай. Үҙ хоҡуғым менән бер кискә генә ҡайтара алам, — тине Нәзиров. — Иртәгә эш бик күп буласаҡ. Сәғәт ундарға килеп етегеҙ!

Әлибаевтың килеүенә, ысынлап та, дивизияла эштәр күбәйгәйне...

Кис, арып-талып фатирына ҡайтҡас, ул унан-бынан ғына тамаҡ ялғаны ла бер көн эсендәге яңылыҡтарҙы көндәлегенә яҙырға ултырҙы.

«23 март. Өфөнән ҡайтыуыма, начштаб яңы хәбәр килтерә: 26 мартта ҡуҙғалабыҙ. Был турала инструктаж биреү өсөн бөгөн 17-гә комдив саҡырҙы. Барҙыҡ. Беҙҙе оҙатырға хәрби округтан комиссия килгән...

20 сәғәттә, үҙебеҙҙең эскадрон командирҙарын, политруктарын, служба начальниктарын йыйып, һәр төрлө күрһәтмәләр, бойороҡтар бирҙек. Парторгтар ҙа, инструктаж алып, эшкә тотондолар. Партия, комсомол йыйылыштары әҙерләнә башланы. Полктың политработниктары ла эскадрондарға ебәрелде. (Улар яҡындағы төрлө ауылдарҙа торалар.)

...Партия сафына ҡабул ителгән бик күп һалдат, командирҙар партбилет алмағандар. Партбюро секретары Ғ. В. Вәлиев шуны ойошторҙо. Мине тағы бер хәл борсой. 1-се эскадрон командиры С. Бикмәтовты өйөнә (Боҙаяҙға) ҡайтарғайным. Телеграмма бирҙек. Һаман юҡ. Пульэскадрон политругы Зыя Латипов командировкала. Ул да ҡайтып етмәгән...»

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы менән Халыҡ Комиссарҙары Советы тарафынан Өфөлә ойошторолған хушлашыу кисәһендә булып дивизияға ҡайтҡандың иртәгеһенә 275-се кавполк комиссары Әлибаев үҙенең тәьҫораттарын йәнә көндәлегенә теркәне:

«26 март. Отправка һаман юҡ әле. Тик дивизия ваҡытты бушҡа уҙғармай. Боевой, политик әҙерлек эштәре дауам итә, дивизияның әҙерлеге камиллаша бара.

Ошо уҡ арала байтаҡ райондарҙан делегациялар ҡабул иттек. Улар алып килгән халыҡ наказдарын боец, командирҙарға еткерҙек.

Эскадрондарҙа йөрөгәндә аҙым һайын бер һүҙ ишетәһең:

— Беҙ әҙер, комиссар иптәш!
Гәпләшеп китәбеҙ.
— Ҡурҡмайһыңмы?
— Юҡ, ни эшләп ҡурҡа ти!
— Фашист ҡурҡһын!
Шулай ҙа, билдәләнгән көндәрҙә китмәгәс, боецтар бошона башланы. Әйләнгән һайын: «Етерлек яттыҡ бит, туйҙырҙы, тиҙерәк китәйек инде», — тигән һүҙҙәрҙе ишетәһең».

## XVII

Барлыҡ эш тәртипкә һалынып бөткәс тә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы егеттәрен фронтҡа оҙатыу апрель айына тиклем һуҙылды.

Фронтҡа китергә әҙерлек барған көндәрҙә Шайморатовҡа йүнләп ял теймәне. Төндәрен дә эш менән уҙғарырға тура килде уға. Атлыларҙың ниндәй эш башҡарыуын асыҡларға тырышып, ул полк командирҙарының әле береһен, әле икенсеһен дивизия штабына саҡыртып һөйләште, етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөүҙе талап итте. Комиссарҙар менән политработниктарҙы ла иҫтән сығарманы. Уларҙы йыйып, кешеләр менән ниндәй политик эштәр башҡарылыуы хаҡында һорашты һәм тейешлесә ярҙамлашты.

Политработниктарҙы йыйып уҙғарылған сираттағы кәңәшмә тамамланғандан һуң, Шайморатов, дивизия комиссары Нәзировтың яңғыҙын ҡалдырып, дуҫтарса һораны:

— Мөбәрәк, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһын һин даими уҡып бараһыңмы?

— Һирәк-һаяҡ уҡырға тура килә, — тине Нәзиров.

— Ниңә һирәк-һаяҡ?

Дивизия командиры менән үҙен тиң хоҡуҡлы, хатта унан өҫтөнөрәк тә һанаған Нәзиров ҡыҙарынды.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, минән, дивизия комиссарынан һорау алырға ни хаҡығыҙ бар?

— Мин бер мәсьәләне асыҡларға теләгәйнем...

Нәзиров, Шайморатовты тыңларға теләмәйенсә, бүлдерҙе:

— Дивизия газетаһының ваҡытында сығарылыуы-сығарылмауына, унда баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙең насармы-яҡшымы икәнлегенә иң әүәл политбүлек начальнигы, батальон комиссары иптәш Абдуллин менән уның аппаратындағы политработниктар яуаплы түгелме ни?

— Һеҙ, райкомдың беренсе секретары булып эшләгән кеше, иптәштәрсә, икәүҙән-икәү ҡалған саҡта, асыҡтан-

асыҡ һөйләшергә ниәтләнеүемде үҙегеҙҙән һорау алыуға һанаһағыҙ, хаталанаһығыҙ, — тине Шайморатов, тынıслығын юғалтмайынса. — Боецтарҙы ысын патриот, ысын һуғышсы итеп тәрбиәләүҙә газетаның ниндәй роль тотоуын кем-кем, әммә һеҙ яҡшы аңларға тейеш инегеҙ. Мин яңылышҡанмын, ахырыһы... Минең изге ниәтемде белергә теләмәүегеҙ сәйер һәм үкенесле. Крылов мәҫәлендәге суртан, аҡҡош, ҡыҫала шикелле һәр ҡайһыбыҙ төрлө яҡҡа тартылһаҡ, личный составҡа бер үк талап ҡуйылмаһа, белмәйем, комиссар, беҙҙән ысын һуғышсы сығыр микән?

Дивизия командирының ҡыҙмауы, үҙен әҙәпле һәм ышанıслы тотоуы Нәзировты тынıсландырҙы.

— Ғәфү итегеҙ, Миңлеғәле Минһажетдинович. Хата миндә, — тине ул, ҡайтымһаҡланып. — Үҙебеҙҙең дивизия газетаһын даими уҡымау, унда кемдәр хаҡында нимә яҙыуҙарын белмәү, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә редакция работниктарына тейешенсә ярҙамлашмау, әлбиттә, килешмәй...

Шайморатов мәсьәләне ҡуйыртманы. Дивизия, полк комиссарҙарының, политработниктарҙың иғтибарын «Ҡыҙыл атлылар» газетаһына йүнәлтергә тырышып, махсус кәңәшмә үткәрергә булды. Унда һөйләнәсәк сығышы ҡоро һүҙ бутҡаһына әүерелмәһен өсөн, Миңлеғәле Минһажетдинович төндәр буйы ултырып газета подшивкаһын аҡтарҙы. Тейешле фекер туплағас, редакция хеҙмәткәрҙәре менән политработниктарҙы йыйҙы.

Тәүҙә, кәңәшмә башланғас, ул редакция работниктарының кәйефе һәм эше хаҡында һорашты. Аҙаҡтан, уларҙың һәр ҡайһынıһын берәм-берәм иғтибар менән тыңлағас, полковник Шайморатов үҙе һүҙ башланы.

— Бәләкәй генә форматлы беҙҙең дивизия газетаһы сығыуы ҡыуанıслы хәл. Корректорҙарҙы, наборщиктарҙы иҫәпкә алмағанда, унда ни бары өс танылған башҡорт совет яҙыусыһы булыуы ғына ла күп нәмәне аңлата. Редакциялағы яҙыусыларыбыҙҙың барыһы ла — белемле, газета һәм журнал редакцияларында оҙаҡ йылдар эшләп, бай тәжрибә туплаған кешеләр. Али Карнай иптәш «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторы итеп тәғәйенләнгәнгә саҡлы педагогия техникумының икенсе курсын тамамлаған, Центросоюздың юғары кооператив курстарын уңышлы бөтөргән. Бер мең туғыҙ йөҙ егерме һигеҙенсе йылдан журналистика һәм әҙәби эш менән шөғөлләнә. «Далалағы уттар», «Беҙ ҡайтырбыҙ» исемле киң билдәле повестарының, бик күп хикәйәләрҙең һәм очерктарҙың авторы, — тине лә, һынын ҡатырып баҫҡан Али Карнайға ултырырға ишара яһап, Шайморатов күҙ ҡарашын газетаның яуаплы секре-

тарына күсерҙе. — Ике китап сығарған Әһел Истамғәлин менән газетаның әҙәби сотрудниғы Шакир Насыров та — береһе шағир, яҙыусы, икенсеһе журналист. Улар «Ҡыҙыл атлылар» газетаһын ойоштороуҙа һәм унда һәйбәт мәҡәләләр баҫып сығарыуҙа байтаҡ көс һалдылар. Алдынғы ҡыҙылармеецтар хаҡында ҡыҙыҡлы очерктар һәм фәһемле хәбәрнамәләр баҫылып сығыуы — барлыҡ работниктарҙың уңышы. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы биттәрендә ашығыс әтмәләнгән мәҡәләләр ҙә осрай. Бындай хәлгә ни өсөн юл ҡуйыла? — тип полковник ҡарашын Али Карнайға йүнәлтте. — Редактор иптәш, газета эшендәге етешһеҙлектәрҙең төп сәбәбен аңлатығыҙ!

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторы Али Карнай, ни әйтергә белмәйенсә, аптырап, газетаның яуаплы секретары ултырған яҡҡа боролоп ҡараны. Күҙлеген бер сисеп, бер кейгән Әһел Истамғәлин иғтибар итмәгәс, ул күкрәк тултырып һуланы.

— Редактор булараҡ, газета эшендәге етешһеҙлектәр өсөн, әлбиттә, мин генә ғәйепле, иптәш дивизия командиры! Артабан ундай хаталар ҡабатланмаҫ!

Али Карнайҙың яуабы Шайморатовты ҡәнәғәтләндермәне. Ул, минут самаһы уйланып ултырғандан һуң, дивизияның политбүлек начальнигы Абдуллинға ҡараны.

— Был хаҡта һеҙ ни әйтерһегеҙ?

Абдуллин, газетаның етешһеҙлегенә ҡағылмайынса, дөйөм һүҙҙәр менән генә сикләнде. Дивизия комиссары Нәзиров та газета эшенә ҡарата әллә ни әйтә алманы.

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһында баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙе политработниктарҙың уҡымауы, ундағы етешһеҙлектәргә иғтибар итмәүҙәре, редакция работниктарына тейешле ярҙам күрһәтмәүҙәре хаҡында ҡат-ҡат иҫкәртеп, Шайморатов хәрби журналистарҙың фронттағы вазифаһы, һуғышсыларҙы батырлыҡҡа әйҙәүсе, дошманға ҡарата нәфрәт тәрбиәләүсе тос һүҙҙәр таба белеү кәрәклеген иҫкәртте.

— Рядовой ҡыҙылармеецтарға бәйләнешле мәҡәләләрҙе яҙғанда факттарҙы ҡупыртмау, бүтәндәргә фәһем булырҙай итеп, ысынын күрһәтеү мөһим. Шунда ғына «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының абруйы, популярлығы артасаҡ, — тине ул, һүҙен йомғаҡлап.

Кәңәшмә тамамланып, унда ҡатнашыусылар урындарынан күтәрелә башлаған саҡта Али Карнай ҡул күтәрҙе.

— Иптәш дивизия командиры, мөмкин булһа, минең бер тәҡдим бар!

**— Тыңлайым, — тине Шайморатов.**

— Минең урынға редактор итеп икенсе кешене ҡуйыуҙы һорар инем!

— Сәбәбе нимәлә? — Полковник Шайморатов ғәжәпкә ҡалды.

— Минеңсә, бүтән редактор яҡшыраҡ эшләйәсәк!

— Тәнҡитте күтәрмәйһегеҙме?

— Юҡ, тәнҡит өсөн түгел, иптәш полковник!

— Балаларса ҡыланыуығыҙ килешмәй! Редактор вазифаһын башҡарырға теләмәүегеҙҙең сәбәбен асыҡ төшөндөрөгөҙ!

Али Ҡарнай, ни эшләргә белмәйенсә, икеләнде. Шунан түҙмәне, ҡыҙыулыҡ менән һүҙ башланы:

— «Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай» тигән башҡорт халҡы мәҡәле бар, иптәш полковник! Газетаның яуаплы секретары иптәш Истамғәлин менән бер редакцияла килешеп эшләү мөмкин түгел! Ул үҙен барыбыҙға ҡарағанда ла газета эшендә тәжрибәлерәк, өҫтәүенә, талантлы шағир һәм прозаик һанап, үҙ вазифаһына яуапһыҙ ҡарай. Шуға күрә, уны редактор итеп тәғәйенләһәгеҙ, бәлки, газета эше яйға һалыныр?

Башын һалындырып ултырған Истамғәлин, үҙе лә һиҙмәҫтән, һикереп торҙо.

— Редактор итеп ҡуйһағыҙ, ышанысығыҙҙы аҡлармын!

Шайморатов, уға иғтибар итмәйенсә, Али Ҡарнай менән һөйләште:

— Үҙегеҙ ниндәй эш башҡарырға уйлайһығыҙ?

— Рядовой литсотрудник итеп ҡалдырығыҙ.

Шайморатовтың күҙ ҡарашы Истамғәлингә йүнәлде:

— Һеҙ редактор вазифаһының яуаплылығын күҙ алдына килтерәһегеҙме, иптәш?

— Бер бөгөн генә эшләмәйем газета эшендә, иптәш полковник. Али Ҡарнай теләһә ҡайҙа аҙып-туҙып йөрөгән саҡта, редакторлыҡты былай ҙа яңғыҙым башҡарам!

— Хәрби подразделениеларға барып мәҡәләләр яҙыуҙы ойоштороуымды аҙып-туҙып йөрөүгә һанайһыңмы? — тип һораны Али Ҡарнай.

— Мәҡәләләр ойоштороу өсөн газетаның әҙәби хеҙмәткәре бар, — тип яуап ҡайтарҙы Истамғәлин.

Шайморатов, асыуланып, өҫтәл шаҡыны.

— Баҙарҙағы шикелле ыҙғышыуҙы бөтөрөгөҙ!

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты.

Ике яҙыусы-коммунистың үҙ-ара уртаҡ тел таба алмауына кәйефе киткән полковник Шайморатов Абдуллинға һораулы ҡараш ташланы.

— Бындай хәлде беләһегеҙме?

— Беренсе тапҡыр ишетәм, иптәш полковник!

— Ә һеҙ, иптәш комиссар?

Дивизия командирының редакция эшенә ҡыҫылыуын оҡшатмаған Нәзиров, үҙенә һәм политработниктарға һабаҡ булһын өсөн ҡылана икән тигән фекергә килеп, урынынан торҙо.

— Уларҙың үҙ-ара ыҙғышыуҙарын минең дә ошоғаса ишеткәнем булманы.

— Политработниктарҙың газета эше һәм ундағы иптәштәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте хаҡында белмәүе күңелһеҙ, үтә ҡыҙғаныс хәл. — Шайморатов, эстән нисек кенә ярһыуына ҡарамаҫтан, үҙен тыныс тоторға тырышты. — Бынан кире «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакцияһына барығыҙҙың да иғтибарлы булыуығыҙҙы һорар инем. Артабан да ошолай ҡыланыуҙарын дауам итһәләр, был мәсьәләне парткомиссия ултырышында тикшереп, тейешле һығымта яһарға кәрәк!

— Иптәш полковник, мине редактор вазифаһынан бушатыу мәсьәләһен кисектергеһеҙ хәл ҡылыуҙы үтенәм, — тине Али Ҡарнай ныҡышмалылыҡ менән.

— Яҡшы, был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ, — тип вәғәҙә бирһә лә, һуғышҡа китергә йыйналған ваҡытта эштәр үтә тығыҙ һәм мәшәҡәтле булыу сәбәпле, Шайморатов уны башҡа көндәргә кисектерергә мәжбүр ине.

Ҡәңәшмәлә ҡатнашыусылар таралышҡандан һуң да Али Ҡарнай менән Әһел Истамғәлиндең үҙ-ара һыйышмауы хаҡында оҙаҡ баш ватты Шайморатов. Берниндәй ҙә һығымтаға килә алмағас, күңелһеҙ уйҙарынан нисек тә булһа ҡотолорға ниәтләнеп, Дим буйына китте. Ләкин боҙолған кәйефе унда ла күтәрелмәне.

«Истамғәлин хәйләкәр, аҫтыртын, мәкерле күренә. Ябай, кешелекле, ҡыҙыу холоҡло Али Ҡарнайҙы күрәләтә хурлап, үҙе редакторлыҡҡа ынтылған әҙәмдән яҡшылыҡ көтөү мөмкин түгел! — тип фараз итте ул. — Али Ҡарнайҙан да яҡшыраҡ редакторҙы ҡайҙан табырға? Юҡ, ул үҙ урынында ҡалһын! Тик уға ныҡлы ярҙам ойошторорға кәрәк. Фронтҡа барғас, уларҙа ыҙғышыу, эш бүлешеү ҡайғыһы булмаҫ.

Фронт иң ҡырыҫ холоҡло кешеләрҙе лә яҡынайта һәм бер-береһенән айырылмаҫ дуҫҡа әйләндерә...»

Ярҙарынан ашҡан йылғаның уҫал кейектәй ажарланып-талпынып ағыуы, һыу эсендә ҡалған ағастарҙың ботаҡтары араһында оя ҡороп, үҙ-ара ығы-зығы килгән күмәк ҡоштарҙың ҡысҡырышыуы һәм ҡайҙалыр алыҫта барған дәһшәтле һуғыш шауҡымының уларға һис тә ҡағылмауы Шайморатовтың күңелен наҙландырҙы, һағышландырҙы.

Балалар сығарып үҫтереү өсөн йылы яҡтан тыуған иленә ҡайтыусы ҡоштар, мәңгелек мөхәббәтте данлап, ҡыуаныс кисерә, ә Башҡортостан егеттәре ошондай матур, һоҡландырғыс, гүзәл, саф һауалы ерҙәрен ҡалдырып һуғышҡа китергә йыйнала. Уларҙың күбеһе ата-әсәһе, һөйгән йәре, бала-сағаһы янына әйләнеп ҡайта алмаясаҡ...

## XVIII

Дим буйынан ҡайтышлай, фатиры тәңгәлендә үҙен көтөп тороусы Зәйтүнәне күргәс, Шайморатов ғәжәпләнде.

— Бында ниндәй ел ташланы һине?

— Ҡунаҡҡа килдем, — тине Зәйтүнә, яғымлы йылмайып. — Миңә асыуланмайһыңмы?

— Юҡ.

— Шулай булғас, ниңә ҡосаҡламайһың?

Миңлеғәле, тирә-яҡҡа һағайыулы ҡаранып, һораны:

— Минең фатирҙы нисек таптың?

— Тел Киевҡа алып барып еткерә, тиҙәр бит! — Зәйтүнә тоҡ-томалға көлдө. — Бында икенсе мәртәбә килеүем инде. Тәүге килеүемдә, мине күрмәй, эргәмдән генә уҙып киттең.

— Ниңә өндәшмәнең?

— Кешеләр күп ине. Ҡапҡа төбөндәге эйәрле атҡа мендең дә, улар менән ҡайҙалыр китеп тә барҙың.

Шайморатов, шаяртып бармаҡ янаны ла, фатиры ишеген асты.

— Әйҙә, килгәс, рәхим ит! Тик һыйым юҡ.

— Һинеке булмаһа, минеке бар, — тип Зәйтүнә тимер мейескә ут яҡты һәм сәйнүктә сәй ҡайнатырға ҡуйҙы. — Хәҙер үҙеңде йыуаса менән һыйлайым!

— Поезға һуңламайһыңмы ни? — тип һораны Шайморатов.

— Ниңә ҡабаландыраһың? Мин тиҙ ҡайтып китергә килмәнем! — Зәйтүнә, иркәләп, Миңлеғәленең ҡуйынына һырыҡты. — Һағындым, үтә өҙөлөп һағындым! Бөтөнләйгә һинең эргәңдә ҡалһам, ҡаршы булмаҫһыңмы?

— Нисек «бөтөнләйгә»?

— Аңламайһыңмы? Мин һинең менән бергә һуғышҡа китергә теләйем!

— Шаяртма!

— Ихлас әйтәм!

— Дивизия командирына штат буйынса һөйәркә ҡаралмауын белмәйһеңме ни?

— Һөйәркә ҡаралмаһа, һиңә аш бешереүсе йәки ваҡтөйәк эшендә башҡарыусы булырға тейештер бит, моғайын?

— Ундай эшкә хәрбиҙәр тәғәйенләнә.

— Үҙ эргәңдә тоторға ҡурҡһаң, мине бүтән берәй урынға урынлаштыр!

— Улай килешмәй, Зәйтүнә һылыуҡай, һис тә килешмәй! — тип Миңлеғәле ҡыҙҙы өгөтләне: — «Уйнап һөйләшһәң дә, уйлап һөйләш» тигәндәй, зинһар, башымды ҡатырма. Һуғыш — уйын түгел...

— Мин һәммәһенә лә риза! Һуғышҡа китәсәк врачтар менән медсестралар эргәһендә, моғайын, эш табылыр! — тине Зәйтүнә, ҡыйтаңлап.

— Мине ниндәй хәлгә ҡалдырыуыңды аңлайһыңмы?

— Һин дә мине аңла! Һуғышҡа алып китереңә ышанып, мин эшемде ташланым.

— Уныһы бөтөнләй аҡылһыҙлыҡ! — Шайморатов, Зәйтүнәнең шаяртмауын белгәс, бөтөнләй кәйефһеҙләнде. — Минең менән һәйбәт мөнәсәбәттә булырға теләйһеңме?

— Теләйем!

— Әләйһә, әйҙә, тимер юл станцияһына саҡлы оҙатып ҡуям. Ҡабат эшеңә керергә лә ярҙамлашырмын. Тыңла. Аҡыллы бул, йәме?

Зәйтүнә, ризалашмайынса, үкһеп-үкһеп иларға тотондо. Миңлеғәле уны нисек йыуатырға белмәне. Ахырҙа йәш ҡатындың яңғыҙын фатирында ҡалдырып китергә мәжбүр булды.

Үҙенә ныҡ эҫенергә өлгөргән Зәйтүнәнән еңел генә ҡотола алмаясағын белеп, Шайморатов оҙаҡ баш ватты. Тейешле әмәлен тапмағас, аңҡы-тиңке булып, штабҡа барҙы. Уны коридорҙа штаб начальнигы полковник Голенев ҡаршыланы.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, миңә һеҙ кәрәк инегеҙ!

— Кәрәккәс, әйҙә, рәхим итегеҙ, — тине Шайморатов. Полктарҙың фронтҡа ниндәй тәртиптә оҙатыласағы тураһында ентекләп һөйләгән дивизия штабы начальнигын иғтибар менән тыңларға тырышыуына ҡарамаҫтан, полковник Шайморатовтың фекерен аңлайышһыҙ уйҙар тарҡатты.

«Ниңә бәйләндем мин аҡылһыҙ ҡатынға? Хәҙер нисек ҡотолорға унан?»

Тынғы бирмәгән эс бошорғос һорауҙарына яуап таба алмайынса, Шайморатов шым ғына Голеневты тыңланы.

— Беренсе эшелонда фронтҡа оҙатыласаҡ Ҡусимов полкындағы эскадрон командирҙарын иҫкәртегеҙ: юлда

тәртипте боҙмаһындар! Бер ниндәй ҙә «ЧП» булырға теейеш түгел, — тип ул дивизия штабы тарафынан әҙерләнгән график аҫтына ҡултамғаһын ҡуйҙы.

Күн тышлы папкаға ҡағыҙҙарҙы һалды ла, Голенев бүлмәнән сыҡты. Ләкин күп тә уҙманы, ул ҡабаттан килеп инде.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, беҙҙең иң яҡшы уҡсылар взводы командирын Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарары буйынса бында бронь менән ҡалдырырға булғандар.

— Сәбәбе билдәлеме?

— Билдәле. Ул нефтсе-инженер икән.

— Лейтенант Хөсәйенов түгелме? — тип һораны Шайморатов.

— Эйе, лейтенант Хөсәйенов, — тине Голенев, ғәжәпләнеп. — Ул һеҙгә танышмы ни?

— Яҡшы таныш, — тип Шайморатов күкрәк тултырып тын алды. — Алдынғы взвод командирын дивизиянан алып ҡалыуҙары йәл. Бында ҡалырға үҙе теләгәндер.

— Киреһенсә, фронтҡа китергә ярҙамлашыуҙы һорап Хөсәйенов үҙе штабҡа килде. Был хаҡта һеҙҙең менән һөйләшергә вәғәҙә бирҙем. Иптәш Ваһаповҡа әйтһәгеҙ, бәлки, ул һеҙҙе тыңлар.

— Улай килешмәҫ, Иван Иванович, — тине полковник Шайморатов, штаб начальнигының тәкдиме менән ризалашмайынса. — Нефть промыслалары, ысынлап та, белгестәргә мохтаж. Фронт өсөн бензин күпләп кәрәк икәнлеген онотмайыҡ.

— Хөсәйенов әле бында. Ул һеҙҙең янға керһенме?

— Кәрәкмәй, — тине Шайморатов. — Тик уның урынына взвод командиры итеп яҡшы фронтовикты табығыҙ!

— Хөсәйеновтың уҡсылар взводына командир итеп лейтенант Атаевты тәғәйенләрбеҙ.

— Лейтенант Атаев Башҡортостан егетеме?

— Ул Төркмәнстандан. Фронтта уҡсылар взводы командиры булған. Өфөләге госпиталдәрҙең береһендә дауаланып һауыҡҡандан һуң, беҙҙең дивизияға ебәрелгән.

Бүлмәнән сығып коридор буйлап атлаған Голеневтың аяҡ тауышы баҫылғандан һуң да Шайморатов урынынан ҡуҙғалманы. Төнгө этәс тауышы ишетелгәс кенә эшен тамамлап, дөм ҡараңғы урамға сыҡты. Фатирына яҡынлаша башлағас, тәҙрәнән төшкән ут яҡтыһынан ҡурҡҡан шикелле, ул ҡапыл аҙымын йәйлатты.

**«Зәйтүнә Өфөгә китмәгән, бында ҡунырға ҡалған. Мине көтә», — тип тапанып торҙо-торҙо ла, фатирына инмә-**

йенсә, 275-се полк комиссары Әлибаев эргәһендә уҙғарырға булды төндә.

Әлибаев йоҡларға ятмағайны әле. Ул, етеле шәм яҡтыһында китап уҡыуынан бүленеп:

— Эйе, эйе, ишек асыҡ, инегеҙ! — тип ҡысҡырҙы ла, дивизия командирын күргәс, һикереп тороп, ашыҡ-бошоҡ кейенә башланы. — Ғәфү итегеҙ, Миңлеғәле Минһажетдинович!..

— Мәлһеҙ маҙаһыҙлауым өсөн, киреһенсә, һеҙ ғәфү итегеҙ мине, — тип Шайморатов түргә уҙҙы.

— Берәй ашығыс яңылыҡ бармы әллә, иптәш полковник?

— Яңылыҡтар әлегә юҡ, Сәғит Рәхмәтович, — тип ваҡытһыҙ борсоуы өсөн йәнә ғәфү үтенеп, Шайморатов сисенде. — Рөхсәт итһәгеҙ, был төндә һеҙҙең менән бергә уҙғарырға теләйем.

Шәм яҡтыһында шаҙралары ныҡ беленгән ҡаҡса йөҙөнә ғәжәпләнеү билдәләре сығарып, Әлибаев, бер ни аңламайынса, хәрәкәтһеҙ ҡалды.

— Ни булды, Миңлеғәле Минһажетдинович?

— Булманы. Фатирым буш түгел... Унда бер һылыуҡай ҡуңырға тейеш. Шуға ҡастым.

Ҡуңыр күҙҙәрен майландырып, Әлибаев көлдө.

— Һылыу ҡыҙҙан ҡасып йөрөүегеҙ яҙыҡ булмаҫ микән, Миңлеғәле Минһажетдинович?

— Һылыу ҡыҙҙарҙың да төрлөһө була бит, Сәғит Рәхмәтович! Холоҡһоҙ, каприз ҡыҙҙан ваҡытында ҡасып ҡотолоу, минеңсә, егетлек, — тип Әлибаевтың шаяртыуына шаяртыу менән яуап ҡайтарҙы Шайморатов. — Бында миңә урын табылырмы?

— Ошоғаса Күсимов йоҡлап йөрөгән тимер карауат буш тора, — тине Әлибаев, ҡараңғы мөйөшкә ым менән күрһәтеп. — Ана! Оҡшатһағыҙ...

— Таһир Таиповичҡа оҡшаған карауат, моғайын, миңә лә оҡшар!

Әлибаев ҡайнатҡан сәйҙе эскәс тә ныҡлы тынысланa алмаған Миңлеғәле төрөпкәһенә тәмәке тултырҙы.

— Әллә ниндәй тиҫкәре булды әле үткән көн.

— Нисек?

— Тәүҙә «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы работниктарының үҙ-ара ыҙғышыуы... Аҙаҡтан, Дим буйынан тынысланып ҡайтһам, бер таныш һылыу ханым кәйефемде бөтөнләй боҙоп ҡуйҙы, — тип Шайморатов Зәйтүнә менән булған мажараны һөйләп бирҙе. Ул шымғас, Әлибаев баш сайҡаны.

— Юҡ өсөн борсолоп, йәш ҡатынды үҙегеҙҙән биҙҙерергә маташыуығыҙ, минеңсә, килешмәç. Дивизияла хеҙмәт итергә ҡыҙҙар ҙа кәрәк бит. Фронтҡа барырға теләк белдергәс, берәй санвзводҡа йәки санэскадронға тәғәйенләргә кәрәк уны.

— Ошондай кәңәшегеҙ өсөн рәхмәт, иптәш комиссар! Әммә кәңәшегеҙҙе файҙалана алмайым! Уны бында торғоҙоп ҡалдырмайынса, миңә тынғы булмаясаҡ...

— Ҡалдырырға булғас, эш ниҙә?

— Ул һылыуҡай менән бәйләнеште өҙөүҙә һеҙҙең ярҙамығыҙға ышанам... Иртәгә Зәйтүнә менән һөйләшеп ҡарағыҙ... Һеҙ педагог бит, бәлки, һеҙҙе тыңлар. Үҙ тиңдәшен тапһын... Аңлайһығыҙмы мине?

— Аңлайым, Миңлеғәле Минһажетдинович.

Хәрби вазифаһын үтәгән ваҡыттарҙа ла аҙ һүҙле, үтә талапсан, ҡырыç холоҡло күренгән дивизия командирының үҙенә ышаныс белдереп серҙәрен асыуы һәм ябай мөғәмәләлә булыуы Әлибаевты ҡыуандырҙы, уға ҡарата ихтирамын арттырҙы. Үҙе лә күңелендә һаҡлап йөрөгән үкенесле яңылышыу-хаталаныуҙарын һөйләне.

Шәмде һүндереп карауатына ятҡас та, Сәғит Рәхмәтович өйҙө тетрәтерҙәй яман тауыш менән хырылдарға тотондо.

«Бындай хәлгә Күсимов нисек сыҙап ятты икән? Ныҡ йоҡлаһа, бәлки, бер ни һиҙмәгәндер», — тип уйланы Шайморатов. Көслө хырылдауҙан ҡотолорға тырышып, ҡолаҡтарын мендәр менән ҡаплауҙың да файҙаһы теймәгәс, аптырап, ул түшәген аш бешереү бүлмәһендәге иҙәнгә күсерҙе.

— Түшәгегеҙҙе ниңә унда йәйҙегеҙ, Миңлеғәле Минһажетдинович? — тип һораны Әлибаев йоҡо аралаш, йөрәкһенеп.

Шайморатов, фатир хужаһының хырылдауы хаҡында әйтергә уңайһыҙланып, хәйләләште.

— Унда һауа тонсоҡторғос, эçе. Ишек төбөндә һәйбәт.

Әлибаев карауатына тороп ултырҙы.

— Ә, шулаймы ни әле? Мин дә саф һауалы урынға күсәйем, — тип түшәген Шайморатов эргәһендәге буш урынға һалып ятҡас та, ул йәнә хырылдай башланы.

«Сәғит Рәхмәтовичтан ҡотолор әмәл ҡалманы бит бында», — тип уйлаған Шайморатов карауатына ҡабат барып ятырға мәжбүр булды.

Иртәнсәк йоҡоһонан уянғас ҡына, дивизия командирының ни өсөн бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөү сәбәбен аңлаған Сәғит Рәхмәтович:

— Һеҙҙе маҙаһыҙланым, ахырыһы, — тип ғәфү үтенде.

— Зинһар, борсолмағыҙ. Мин бик яҡшы йоҡланым, — тине Шайморатов, Әлибаевты тынысландырып.

## XIX

Сәғит Рәхмәтович Әлибаев менән һөйләшкәндән аҙаҡ шәмәреп иланы-иланы ла, Зәйтүнә Өфөгә китте. Әммә ул ҡалала тыныс йәшәй алманы. Ҡайҙа бармаһын, нимә генә эшләмәһен, барлыҡ уй-хыялдары Миңлеғәлелә ине уның. Күңел иткән кешеһенән айырылып ҡалыу, уны мәңгелеккә юғалтыу тойғоһо Зәйтүнәне өҙләкһеҙ яфаланы, ғазап сиктерҙе. Ике тәүлек буйы үҙ алдына өҙгөләнеүенең аҡтыҡ сигенә еткәс, дивизияһы менән фронтҡа китәсәк Шайморатовты алыҫтан булһа ла күреп ҡалырға тигән ниәт менән, ун беренсе апрелдең таңында Дим станцияһына килде.

Күмәк кешеләр менән шығырым тулы станция тирәһе бал ҡорто күс айырғандағы шикелле ҡайнай ине. Ирҙәрен, һөйгән йәрҙәрен, туған-тыумасаларын, атай-ағайҙарын һуғышҡа оҙатырға килгән ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро илашыуын күҙәткән Зәйтүнә бер аҙ тынысланды.

«Минең ҡайғы — ҡайғымы ни? Бына кемдәргә ҡайғы!» — тип уйлап, ул иртәнге ҡояш нурҙарына ҡойоноп оло даръя кеүек ҡайнаған кешеләр ағымын ҡарап торҙо. Берәүҙәр, һуғышҡа китеүселәрҙе ҡосаҡлап, зар илаша, икенселәре алыҫ юлға оҙатылыусыларға өгөт-нәсихәт ныҡый, өсөнсөләре гармун йә ҡурай көйөнә ҡушылып йырлай, таҡмаҡ әйтә, йәки бер тирәлә өйөрөлөп, тыпыр-тыпыр бейей...

Ошондай күмәк кешеләр ағымы араһында йөрөгән Зәйтүнәлә генә бер кемдең эше юҡ. Ул, япа-яңғыҙы аңҡы-тиңкеләнеп йөрөүенән ялҡҡас, Шайморатовты ҡайҙа булһа ла осратмаммы тип, оҙон эшелон буйлап атланы. Составтың урта тәңгәленә еткәс, һөрән һалып ҡысҡыртҡан паровоз тауышы ишетелде. Фронтҡа оҙатылыусылар, яҡындары менән ҡабалан ғына хушлашып, үҙҙәренең вагондарына табан ашыҡты.

— Хушығыҙ!

— Яуыз дошманды еңеп, иҫән-һау әйләнеп ҡайтығыҙ!..

Поезд ҡуҙғалып киткәс, һөрән һалып аҡырышҡан, илашҡан тауыштар бигерәк тә артты. Кешеләр, бер-береһен ҡыҫырыҡлап, этешә-төртөшә, тиҙлеген арттырғандан-арттыра барған поезд ыңғайына ағылды.

Йөк вагондары ишегенән һонолоп ҡул болғаусы ҡыҙыләрмеецтар араһынан кемдер, ҡурай моңона ҡушылып, боронғо оҙон көйҙө һуҙҙы:

Алыҫтарҙан, ай, күренгән
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы...

Яңғыҙ йырсының көйөн башҡалар ҙа күтәреп алды:

Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

Бер үк ваҡытта арттағы йөк вагондарына тейәлгән егеттәр икенсе йырҙы башланы:

Әрмеләрҙә йөрөп, сәс үҫтерҙем,
Сәскенәйем етте лә үрмәгә.
Ризыҡ яҙған булһа, беҙ ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе лә күрмәгә...

Ҡавалеристарҙы тейәгән поездар бер-бер артлы Дим тимер юл станцияһынан көнбайышҡа табан китә торҙо, тик китеүселәр араһында Шайморатовты ғына күрә алманы Зәйтүнә.

«Уның тураһында берәйһенән һорашып белергәме икән әллә?» — тип уйланып тора торғас, Әлибаевтың Шайморатовҡа бәйләнмәҫкә ҡушып ҡат-ҡат киҫәтеүен иҫенә төшөрөп, икеләнде: — «Улай әрһеҙләнеп йөрөүем, ысынлап та, килешерме? Көсләп асҡан күҙҙең яҡтыһы юҡ, тиҙәр. Миңлеғәлегә инәлеп йөрөүҙән ни файҙа?..»

— Зәйтүнә, һаумы!

Үҙенең исемен аңғармаҫтан ишетеп тертләгән Зәйтүнә артына әйләнеп ҡараны. Ауылса кейенгән йәп-йәш ҡатындың яурынына ҡулын һалған Байҙәүләтов Зәкиҙе күргәс, ул ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ә-ә-әй, һаумы!?

— Ҡемде оҙатырға килдең? — тип һораны Зәки.

— Былай ғына килдем... Һин фронтҡамы?

— Фронтҡа! — Зәки, дуҫтарса йылмайып, Зәйтүнә менән ҡатынын таныштырҙы: — Минең кәләшем!

Зәйтүнә Мәстүрәгә һоҡланып ҡараны.

— Кәләшең шәп күренә!

— Шәп булмаһа, алмаҫ инем, — тип кәпрәйҙе Зәки.

— Икегеҙҙе лә законлы никах менән ҡотлайым, оҙон ғүмер, бәхет теләйем, — тине Зәйтүнә.

— Рәхмәт!

— Ярай, иҫән йөрөп, һау ҡайтығыҙ, — тип Зәйтүнә китергә булғайны, Зәки уны туҡтатты:

— Шулай ҡайҙа ҡабаланаһың? Беҙҙең эшелон хәҙер ҡуҙғала. Оҙатып ҡал!

Зәйтүнә теләр-теләмәç кенә туҡталды.

— Миңә бер кешене эҙләп табырға ине...

— Шайморатов ағайҙымы? Уны мин кисә күргәйнем.

— Ҡайҙа күрҙең? — Зәйтүнәнең йөҙө яҡтырҙы.

— Полктарҙың һуғышҡа китергә әҙерлеген тикшереп йөрөгән сағында күрҙем.

— Бөгөн осратманыңмы?

— Үҙем осратманым... Бүтәндәр әйтеүенә ҡарағанда, ул беренсе эшелонда китәсәк кешеләр менән митингы уҙғарған...

— Ул әле ҡайҙа икән? — Зәйтүнә йөрәкһенде.

— Белмәйем, — тине лә, яҡындан ғына үтеп барыусы яңы взвод командиры лейтенант Атаевтың ҡаршыһына сығып, хәрби устав ҡушыуы буйынса мөрәжәғәт итте: — Иптәш лейтенант, һеҙҙән һорарға рөхсәт итегеҙ!

— Һорағыҙ!

— Дивизия командиры ҡайҙа икәнлеген белмәйһегеҙме?

— Ниңә һеҙгә дивизия командиры?

— Миңә түгел, иптәш лейтенант, уның һеңлеһенә кәрәк!

Киң яңаҡлы, сөм-ҡара сәсле, ҡара һөрөңкө йөҙлө лейтенант Атаев, ҡырыç һәм сәнскеле күҙ ҡарашын яғымландырыбыраҡ, һорғолт күҙҙәрен Зәйтүнәгә йүнәлтте.

— Комдивтың бер туған һеңлеһеме һеҙ?

Бит алмаларына, хатта алҡа тағыулы ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарынған Зәйтүнә, нисек алдашырға белмәйенсә, тотлоға-тотлоға яуап ҡайтарҙы:

— Ике туған һеңлеһе мин...

— Комдивтың ҡасан китерен алдан белмәнегеҙме ни? Полковник Шайморатов үҙенең штабы менән фронтҡа беренсе эшелонда киткән, тиҙәр.

— Комиссар Әлибаев ағай ҙа уның менән бергә микән? — Күҙҙәренә бөрсөк-бөрсөк тамсылар ҡалҡып сыҡҡан Зәйтүнәнең тауышы ҡайғылы яңғыраны.

— Уның хаҡында әйтә алмайым, ғәфү итегеҙ. Башҡорт кавалерия дивизияһында мин яңыраҡ хеҙмәт итәм, — тип уң ҡулын пилоткаһы тәңгәленә күтәреп төшөрҙө лә лейтенант Атаев артабан атланы.

Атаев киткән яҡҡа ымлап, Зәки бышылданы:

— Беҙҙең яңы взвод командиры!

Полковник Шайморатов хаҡында уйланыуынан туҡтамаған Зәйтүнәгә бөтә нәмә тоноҡ һәм мәғәнәһеҙ һымаҡ булып тойолдо. Эсе бошоуына, Миңлеғәлене юҡһыныуына сыҙай алмайынса, шәмәреп иланы-иланы ла, Зәки ултыр-

ған поезд ҡуҙғалып китеү менән, шаҡ ҡатып бер урында торған Мәстүрәне ҡосаҡланы.

— Ирҙәр һуғышҡа китеп бөткәс, беҙ, бисә-сәсә, нисек ғүмер итербеҙ инде, — тип ул йәнә күҙ йәштәрен түкте.

— Зәйтүнә, һылыуҡай, илама! Борон-борондан килгән йола ҡушыуы буйынса, ирҙәр яуға киткән саҡта иларға ярамай, — тине Мәстүрә, үҙе лә илауҙан көс-хәлгә тыйылып.

— Ниңә ярамай?

— Илап оҙатҡан ир-аттың яуҙа юлы уңмай, ти.

Зәйтүнә, күҙ йәшен һөртөп ҡороткас, Мәстүрәне ҡосаҡлап яурынынан һөйҙө.

— Бөттө! Зинһар, ғәйеп итмә.

— Ғәйеп итергә һинең миңә ни зыяның тейгән? Зәки менән бик яҡындан таныш инегеҙме?

— Эш буйынса ғына таныш инек, ә былай юҡ... Шайморатовтан башҡа йәрҙе өҙөлөп һөйгәнем булманы минең!

Муйылдай сөм-ҡара күҙҙәрен шар асып ҡараған Мәстүрә аптыраны.

— Ул ағайҙың бисәһе юҡмы ни?

— Мәскәүҙә бит уның бисәһе.

— Шуны белә тороп һөйҙөңмө Шайморатов ағайҙы?

— Бисәле иргә күҙ төшөүе яҙыҡмы ни?

— Белмәйем...

— Йөрәк тигән нәмәнең кемгәлер тартылыуын тыйыу мөмкин түгел шул! Бер янһа, ярауын-ярамауын тыңламайынса, ул ялҡынлана, өтөлә, үҙенә иш табырға ынтыла. Бөтөнләй туң йөрәкле, үҙ ғүмерендә мөхәббәттең тәмен дә татымаған әҙәм генә аңламай торғандыр уның тетрәткес көсөн...

— Нисек аңламаһын ти? Ғишыҡ утына янмаусы бәндә донъяла юҡтыр, моғайын. Әҙәм заты түгел, хатта бер нәмәгә эшкинмәгән, кәрәге булмаған иң аҡтыҡ йән эйәһенең дә үҙенә күрә мөхәббәте бар бит! Һәр мәхлүк, тейешле шартын тура килтереп, бер-береһенә тартыла, үҙенә яраҡлы ишен таба. Ә былай, буйың етмәҫтәй бейеклектәге бәхет тәтемәйәсәген белә-күрә, эҫе бутҡа эргәһендә собалған бесәйҙәй, сит иргә ымһынып йөрөүҙән ни хәсиәт?

— Ҡасан буйым етеүен көтөп, мин ишһеҙ ҡалырға тейешме?

— Шайморатов ағай һине бисә итеп алырға вәғәҙә иткәйнеме? — тип һораны ла, Зәйтүнә өндәшмәгәс, Мәстүрә ғәфү үтенде: — Тураһын әйткән өсөн, зинһар, асыуланма! Миңә лә йәремдән тороп ҡалыуы еңел түгел, ауыр, бик тә ауыр!

— Исмаһам, һинең зарығып көтөрҙәй ирең бар, — тине Зәйтүнә, Мәстүрәнең бәхетенән көнләшкән һымаҡ. — Ә бына минең бер кемем дә юҡ! Яҡты донъяла нинә йәшәүемде үҙем дә белмәйем...

— Ҡәһәр һуҡҡан һуғыштан аҙаҡ ирҙәр ҡайтҡас, моғайын, бәхетеңә яҙғанын табырһың әле. Әлегә, барына шөкөр ҡылып, ҡыйын булһа ла һәммәһенә сыҙарға тура килә. — Мәстүрә, үҙ ҡайғыһын белгертмәйенсә, яңы танышы тураһында хәстәрләнде. — Шайморатов ағай хушһынмағанға ҡайғырма. Мына мин әйтте тейерһең, үҙеңә тиң икенсе йәр табыласаҡ, мотлаҡ табыласаҡ!

— Былай ҙа әрнеп һыҙлаған йөрәгем яраһына, исмаһам, һин тоҙ һипмә, — тип асыуланды Зәйтүнә.

Уның күңелен Мәстүрә үҙенсә табырға тырышты:

— Илгә оло бәлә килгән саҡта бер-беребеҙгә асыуланышмайыҡ. Мин бит һиңә яҡшы ниәттән әйтәм. Ана, күр, нисәмә меңләгән кешеләр ҡайғы-хәсрәт кисерә! Уларға еңелме ни? Бөтә ерҙә ҡәһәрле һуғыш шауҡымы һиҙелә. Беҙҙең бәп-бәләкәй ауылда ла ҡарт-ҡоро, малай-шалайҙарҙан бүтән ир заты ҡалманы. Похоронка ҡағыҙы алыусы бисәләр ҙә йышайҙы... Атайымдың һуғышҡа китеп эҙһеҙ юғалыуы, әсәйемдең ҡайғынан үлеүе етмәгән, бына хәҙер Зәкиҙе оҙаттым...

Үҙенең шәхси тойғоларына күмелеп, башҡаларға ғәмһеҙлек күрһәткән Зәйтүнә, ябай ауыл ҡатынының һөйләнеүенә тәү тапҡыр әһәмиәт итеп, ил буйынса ябырылған оло ҡайғының бер кемде лә аямауын йөрәге менән аңланы. Тормошҡа ашмаҫтай мөхәббәт хаҡында хыялланыуы, ғазап сигеүе был минутта үтә бәләкәй, иғтибарға лайыҡһыҙ икәнлегенә төшөнгәс, Сәғит Әлибаевтан ишеткән өгөт-нәсихәт һүҙҙәре бөтөнләй икенсе мәғәнәлә яңғыраны: «Һуғыш сыҡҡанға саҡлы булған ғәмһеҙлегеңде, тотанаҡһыҙлығыңды артабан булдырмаҫҡа тырыш, һеңлекәш. Илгә, фронтҡа файҙаң тейерҙәй эшкә урынлаш. Кешеләргә ныҡлы һынау мәлендә йәшәйбеҙ беҙ. Фронтҡа ярҙам итеү һәр бер намыҫлы совет кешеһенең изге бурысы икәнлеген бер ҡасан да онотторға ярамай!..»

Өфө тимер юл вокзалында төн уҙғарырға уйлаған Мәстүрәне Зәйтүнә үҙ фатирына алып ҡайтты. Иртәгеһен уны ауылына оҙатҡас, илгә файҙаһы тейерҙәй эшкә урынлашырға ниәтләнеп, үҙе лә апаһы менән еҙнәһе эшләгән Туймазыға юл тотто.

Туймазы станцияһында туҡталған поездан төшөп, вокзал артына сыҡҡас, ҡайҙа барырға белмәгәндәй, Зәйтүнә уйға ҡалыбыраҡ торҙо. Шунан тимер юл буйынан башланған Туймазы поселогының шыҡһыҙ, бер ҡатлы тәпә-

шәк кенә өйҙәре араһынан һалынған юлда бата-сума, бер туған апаһы йәшәгән фатирға китте.

Туҡталмай яуған ямғырға бүртенгән тирә-яҡ тып-тын, эс бошорғос ине.

Поселок уртаһындағы магазин-лавка эргәһендә асыҡ ялан уртаһында ултырған бер ҡатлы ағас баракка еткәс, иң ситке фатирҙың күтәрмәһенә менерҙән алда суҡыраҡ уҡмашҡан итеген сисеп ҡалдырҙы ла ишек тотҡаһына үрелде.

Икенсе көндө, иртә таңдан тороп, Зәйтүнә нефть промыслаһына эшкә урынлашырға китте.

## ИҠЕНСЕ ҠИҪӘК

### I

1942 йылдың апрель аҙаҡтарында Брянск фронтынан егерме километр алыҫлыҡтағы урынға етеп, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 8-се кавалерия корпусына ҡушылды һәм ҡуйы урман эсендәге уйһыулыҡта йәнә күнегеүҙәр менән шөғөлләнде.

Июнь айының икенсе яртыһында, хәрби уйындар тамамланғандан һуң ойошторолған һынау уңышлы тапшырылғас, ҡоралландырылған Башҡорт кавалерия дивизияһының һыбайлы полктары юлға сыҡты.

Ҡайҙа баралар улар?

Ҡайҙа барыуҙары рядовой һыбайлыларға ғына түгел, полк командирҙарына ла билдәһеҙ ине.

Көньяҡ-көнсығышҡа табан ҙур тиҙлектә барҙылар. Көндөҙ дошман самолеттары осҡанда юғарынан күренмәҫтәй уңайлы урында туҡталып ял иттеләр ҙә эңер төшөү менән йәнә ҡуҙғалдылар.

Марш оҙон, көсөргәнешле, үтә иҙрәткес булды. Кешеләр ҙә, аттар ҙа бик нык йонсоно. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дивизия командиры Шайморатов полк командирҙарын өҙлөкһөҙ ҡабаландырҙы:

— Күсимов, ниңә яйланығыҙ?

— Аттар йонсоно, иптәш полковник, — тип аҡланды 275-се полк командиры.

— Прогулкаға сыҡтығыҙмы? Шәберәк барырға!

Полковник Шайморатовтың бойороғона буйһоноп, полк командиры эскадрондарҙы ашыҡтырҙы.

294-се полктың һыбайлылары артта ҡалыуын белгәс, колонна башында барыусы майор Нафиҡовты Шайморатов саҡыртты.

— Ни өсөн һеҙҙең полк һуҙылды? Төп көстө ҡыуып етегеҙ!

— Иптәш полковник!..

Нафиҡовты тыңларға теләмәйенсә, Шайморатов бүлдерҙе:

— Бойороҡто үтәгеҙ!

— Есть! — тип 294-се полк командиры честь бирҙе лә, манма һыуға төшкән атын ҡамсылай-ҡамсылай, кирегә сапты.

Биш тәүлек ваҡыт эсендә алты йөҙ километр араны уҙып, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Олым йылғаһы буйында туҡталғас, дивизия штабы Борки ауылы уртаһындағы алты мөйөшлө йортта урынлашты.

Көсөргәнешле ауыр юлдан һуң ҡырынып алырға ла ирек бирмәйенсә, полковник Шайморатов үҙенең урынбаҫарҙарын, полк, артиллерия дивизионы командирҙарын, комиссарҙарҙы, айырым хәрби частар менән подразделение командирҙарын саҡыртып алды.

— Иптәштәр, командование тарафынан билдәләнгән урынға килеп еттек. Хәҙер беҙ ҡайтанан формировать ителәсәк ошондағы уҡсы подразделениеларҙы алмаштырырға тейеш булабыҙ, — тип стенаға ҡаҙаҡланыулы бәләкәй генә карталағы билдәләргә күрһәтте. — Беҙҙең Башҡорт кавалерия дивизияһына бына ошо ерҙәрҙә, һигеҙенсе кавалерия корпусының флангыһында ун ике километр киңлегендәге урында оборона тотоу һәм Воронежға табан хәрәкәт итеүсе гитлерсыларҙы артабан ебәрмәү бурысы йөкмәтелә. — Полковник Шайморатов ҡулындағы ҡәләменең тупаҡ осо менән дивизия оборона тотасаҡ урындарҙы күрһәтте: — Майор Ҡусимовтың 275-се полкы Олым йылғаһы буйындағы 208,9—224,6 ҡалҡыулыҡта, унан һулда майор Нафиҡовтың 294-се полкы, майор Макаев командалығындағы 313-сө полк икенсе эшелонда нығына. Һәр полкта дүртәр эскадрон. Байтаҡ кавалеристар аттарҙы ҡарарға беркетелеү сәбәпле, эскадрондарҙағы йөҙ егерме-йөҙ утыҙ боецтың етмеш бише — туҡһаны ғына оборона тотоуҙа файҙаланыла. Был тейешле норманан байтаҡҡа кәм. Ә дивизия ҡарамағындағы дошман көсө, разведка мәғлүмәттәренән күренеүенсә, өс мәртәбәгә артыҡ. Гитлерсылар теләгән минутта авиация, танкылар һәм орудиелар файҙалана аласаҡ. Беҙҙең ундай мөмкинлегебеҙ юҡ. Барлыҡ ышанысыбыҙ, күршеләребеҙҙәге егерме беренсе һәм илле бишенсе кавалерия дивизиялары шикелле, һыбайлы боецтарыбыҙҙың ҡыйыулығында. Шуға күрә оборонаға әҙерлекте, уяулыҡты, һиҙгерлекте икеләтә-өсләтә көсәйтергә бойорам!

— Иптәш полковник, һорау бирергә мөмкинме? — урынынан һикереп торҙо Күсимов.

— Һорағыҙ!

— Полк ҡарамағындағы ҡырҡ биш, етмеш алты миллиметрлы танкыға ҡаршы батарея менән һикһән ике миллиметрлы миномет батареяһынан тыш, беҙгә өҫтәлмә ҡорал биреләме?

— Юҡ. Булған техниканы яҡшы файҙаланырға!

— Есть!

— Йәнә кемдең ниндәй һорауы бар? — Полковник Шайморатов тынып торҙо. Тауыш биреүсе булмаһас, оборона өсөн һәр минутты файҙаланырға ҡушып, һүҙҙе дивизияның политбүлеге начальнигы Абдуллинға бирҙе...

Кәңәшмә уҙғарылғандан һуң да полковник Шайморатов ял итмәне. Унан-бынан ғына тамаҡ ялғаны ла дивизия комиссары Нәзиров менән корпус штабына китте.

Урман эсендәге һуҡмаҡ буйлап юртҡанда полковник Шайморатов Нәзировтан:

— Комиссар иптәш, һеҙҙеңсә нисек, немецтарҙың ҡыҫымына ҡаршы тора алырмы беҙҙең егеттәр? — тип һораны.

— Шигем юҡ! Был хаҡта политдонесениела ла апасыҡ яҙҙым, — тип Нәзиров планшетын күрһәтте.

Шайморатов уйға ҡалыбыраҡ барҙы.

— «Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта» ти. Һуғышта, бигерәк тә иң беренсе һуғышта, көтөлмәгән хәлдәр килеп сығыуы ихтимал. Шуға күрә политдонесениены ҡупыртып яҙыу килешерме?

— Ныҡлы ышаныс ярты еңеү түгелме ни, Миңлеғәле Минһажетдинович? — Шайморатов яуап ҡайтармағас, дивизия комиссары һүҙен дәртләнеберәк дауам итте: — Һәр подразделениела политработниктар уҙғарған политик-ағартыу эштәре, партия, комсомол ойошмаларындағы йыйылыштар, агитаторҙарҙың һәр боец менән айырым-айырым әңгәмәләшеүе, төрлө кәңәшмәләрҙә иптәштәрҙең сығыш яһауы, һәммәһе, һәммәһе лә — беҙҙең еңеүгә йүнәлтелгән түгелме ни? Ватан, ил алдындағы үҙ бурыстарын егеттәр яҡшы аңлай, әхләҡи яҡтан улар тотанаҡлы, рухтары күтәренке.

Партияның район комитеты секретары булып нисәмә йылдар эшләп тә, фронттағы ҡатмарлы шарттарҙы Нәзировтың күҙ алдына килтерә алмауы, мәкерле дошманға ҡаршы һуғышыуҙы, уны еңеүҙе алдан малайҙарса хәл ҡылырға тырышыуы полковник Шайморатовтың эсен бошорҙо. Ләкин бындай яуаплы осорҙа ул дивизия комиссары менән бәхәсләшергә теләмәне. Иң мөһиме шул: Нәзиров

намыçлы, үҙ эшен тырышып башҡара. Ҡалғандарын һуғыш һабаҡтары өйрәтер әле...

Хужаһының холоҡ-ҡылығына тиҙ арала өйрәнеп, уның һәр теләгенә ҡаршылыҡһыҙ буйһонорға ғәҙәтләнгән ҡара-ерән ҡашҡа, комиссарҙың ҡола аты менән йәнәш барышлай, хайуандарға ғына хас уйҙарға күмелде. Ҡолон сағында инәһенән ҡалмай эйәреп йөрөүен, яйы тура килгәндә һөлөктәй ләззәтләнеп уны имеүен, танһығы ҡанғансы уйнаҡлауын, саң-туҙан ҡубарып сабышып йөрөүен иçенә төшөрҙө. Уның Урал аръяғындағы йәм-йәшел урмандарҙы гиҙеп йөрөгөһө, сылтырап аҡҡан тау йылғаларының саф һыуын эскеһе, тыуған төйәгенә кире ҡайтҡыһы, өйөрҙәге күмәк йылҡылар менән бергә йәмле йәйҙе ҡайғыһыҙ-моңһоҙ уҙғарғыһы килде. Көтөүҙән айырылып алыçҡараҡ киткән сағында инәһенең кешнәй-кешнәй уның артынан эйәреп барыуы әле лә ҡара-ерән ҡашҡаның хәтерендә. Ләкин уны алыçҡа ебәрмәй ине айғыр. Инәһе саҡ ҡына өйөрҙән ситләшһә, бәкәленән йәки осаһынан тешләй, муйынын һонол ярһый торғайны. Көлтә ҡойроғон елпендереп өҙлөкһөҙ уйнаҡларға, танһығы ҡанғансы сабышырға яратҡан бәләкәй генә ҡара-ерән ҡашҡаның уларҙа эше булманы. Ул үҙе теләгәнсә, тыйнаҡһыҙ үçте. Бер мәлде, ҡышҡы һалҡын көндө тибенлектә йөрөгәндә, ниндәйҙер ҡурҡыныс яҡынлашыуын һиҙенгән көтөүҙең хужаһы — ҡола айғыр, ҡолондарҙы, байталдар менән ҡонандарҙы, оло бейәләрҙең урта өлөшөнә урынлаштырып, үҙе тирә-яҡты һағалап йөрөнө. Тормош тәжрибәһе булмаған ҡара-ерән ҡашҡа, өйөр тышында нимә бар икәнлеген асыҡларға теләп, ҡола айғырға һиҙҙермәй генә ситкә сапты. Ап-аҡ ҡар өçтөндә һуҙылып ятҡан ниндәйҙер ҡараçҡы әкрен генә ҡойроғон болғауын күргәс, барлыҡ донъяһын онотоп, ул алға барыуын белде. Алыçҡараҡ шыуышҡан ҡараçҡы ҡойроҡ болғап әүрәткән һайын, ҡара-ерән ҡашҡаның ҡыҙыҡһыныуы артты. Үҙен ике яҡлап ҡамарға маташыусы эттәргә иғтибар итҡәс кенә, ҡото алынып кешнәне лә кирегә табан сапты. Уны эҙәрләп килеүселәр ана-бына ҡыуып етер саҡта ҡола айғыр күренде һәм эттәр тип уйлаған бүреләргә ҡаршы ташланды. Йыртҡыстарҙың береһен ул тибеп осорҙо, икенсеһен тапаны, өсөнсөһөнөң йөнтәç кәүҙәһенә тештәрен батырҙы. Ҡалған бүреләр, төрлө яҡтан уратып алып, айғырҙың үҙен ауаһыҙ өҙгөләргә тотондолар...

Ғүмере буйы күҙ алдынан китмәгән был фажиғәле күренеш ҡара-ерән ҡашҡа өсөн оло һабаҡ булды. Аҙаҡтан, бер аҙ үçкәс, ҡола айғыр шикелле ҡыйыу булырға, өйөрҙәге тәртипте боҙмаçҡа, йәштәрҙе ҡурҡыныстан ныҡлы

һаҡларға хыялланды. Ләкин теләге тормошҡа ашманы. Уның менән иҫәпләшергә теләмәүсе кешеләр арҡаһында, ул көтөүҙән айырылды. Шунан һуң бер хужанан икенсеһенә, өсөнсөһөнә күсте... Хужалары араһында яҡшыһы ла, яманы ла осраны. Бына хәҙер ул дүртенсе кешегә хеҙмәт итә һәм уға эйәләшергә лә өлгөрҙө. Элеккеләренә ҡарағанда хәҙерге хужаһы менән мәшәҡәтлерәк. Сөнки ул бик күп һыбай йөрөргә ярата, бүтән һыбайлыларға ла ял бирмәй... Ай самаһы йөк вагонында бикле көйө бер ниндәй хәрәкәтһеҙ килеүе еңел булдымы ни? Ундай ял үлемгә тиң. Баҫып тороуҙан тояҡтар тала, саф һауа етешмәй. Вагон һелкенгән һайын төрлө яҡҡа сайҡалдырыуы көсөргәнешлелекте арттыра, башты әйләндертә. Уларға тик тороуы ҡыйын икәнлеген хужалары ла аңлағандарҙыр. Юғиһә, уларҙы вагондарҙан сығарып, саф һауала йөрөтмәҫтәр ине. Ундай минуттар аттар өсөн оло байрам һымаҡ булды. Улар, ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла үҙҙәрен иректә тойоп, ҡыуаныстарынан һөрән һалып кешнәне, аунаны, уйнаҡларға маташты... Тыуған яҡтарҙан алыҫ ерҙәргә килеп еткәс тә, туҡталып ял итмәйенсә, улар ҡайҙалыр бара ла бара...

Урман уртаһындағы ауылға еткәс, уйҙарынан бүленеп, ҡара-ерән ҡашҡа аҙымдан юртыуға күсте.

Ике ҡатлы йортта урынлашҡан корпус штабында полковник Шайморатов оҙаҡ торманы. Дивизия өсөн мөһим булған мәсьәләләрҙе хәл ҡылғас та, Нәзировты корпустың комиссары эргәһендә ҡалдырып, кирегә табан ыңғайланы.

Йәм-йәшел урман эсендәге саф һауаны иркенләп һулауы рәхәт ине. Ана, ағас япраҡтары араһындағы бер төркөм турғайҙар, икенсе тапҡыр сығарырға өлгөргән балаларын тормошҡа нисек яраҡлашырға өйрәтеп, сыр-сыу ыҙғыша. Яр аҫтындағы ҡуйы әрәмәлектә яңғыҙ ҡуян дыңҡылдауы ишетелә. Әйтерһең, бер ниндәй ҙә һуғыш юҡ, бар ерҙә мәңгегә тынлыҡ урынлашҡан!

Шайморатов, ғәҙәтенсә Биштәкә ауылы эргәһендәге урманды бындағы тәбиғәт күренеше менән сағыштырып, бала сағын уҙғарған ерҙәрҙе күҙ алдына килтерҙе, ғүмере буйына әсе әрнеү тойғоһо ҡалдырған тәүге мөхәббәтен — Хәҙисәһен иҫенә төшөрҙө...

Ольгаһы менән нисәмә йылдар буйы бергә донъя көтөп, бер ҡыҙ үҫтереүҙәренә, бер-береһен ихтирам итеүҙәренә, яратышыуҙарына ҡарамаҫтан, ниңә шулай һағындыра, һыҙландыра, үҙәккә үтерҙәй булып юҡһындыра икән алыҫ йәшлек?

«Күпме ерҙәр гиҙергә, күпме тапҡыр сит илдәрҙә йәшәргә тура килһә лә, тыуған еремде — Биштәкәмде үлгәнсе онота алмам. Шул ер именлеге, халҡымдың ирке, азатлығы өсөн, борон замандан күпме ҡан түгелгән, күпме ир-егеттәрҙең ғүмере өҙөлгән», — тип уйланды Миңлеғәле. Унан граждандар һуғышы йылдарында атаҡлы полководец Блюхер менән нисек танышыуын, уның етәкселегендә разведкала ҡатнашыуын һәм рейдта йөрөүен хәтерләне. Эскадрон командиры булып Петроградтағы бандаларҙы ҡыйратыуҙа, ҡаланы обороналауҙа, шундағы һуғыштарҙа нисек ҡатнашыуын ҡасан да булһа онотоу мөмкинме ни? Аҙаҡтан ул Төркөстанды, Муса Мортазин командалығындағы бригада сафында Украинаны, Дон эргәһендәге Ростовты, Ростов өлкәһен, Бәләкәй Тоҡмаҡ, Никополь, Бәләкәй һәм Өлкән Озерки, Грушев, Марьевка ҡалалары өсөн барған һуғыштарҙы иҫенә төшөрҙө, ә Перекопты штурмлап алғанда ҡаты яраланыуын онотоп буламы ни? Бына хәҙер тыуған ере, ауылы, Башҡортостаны, Рәсәйе, бөтә ил өсөн уға икенсе мәртәбә немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышырға тура киләсәк...

Ҡискә табан көн боҙолдо. Ваҡ-ваҡ күҙле ямғыр һибәләй башланы. Шыр ҡара урман эсенән һыбай барыуы ла ҡыйынлашты. Полковник Шайморатов асығыраҡ урынға сыҡты.

Ҡалҡыулыҡҡа үрләгәндә, тылға табан тәртипһеҙ рәүештә төркөм-төркөм булып ағылған йәйәүле ҡыҙылармеецтарҙы осратып, Шайморатов ғәжәпкә ҡалды. Ул, атын шпорлап, мылтыҡтарын таяҡ шикелле һөйрәгән ҡыҙылармеецтарҙың ҡаршыһына сыҡты.

— Ҡайҙа бараһығыҙ?

— Сигенәбеҙ, — тине оҙон буйлы ҡыҙылармеец.

— Кем ҡушты?

— Белмәйбеҙ. Бүтәндәр сигенгәс, беҙ уларҙан ҡалмаҫҡа булдыҡ.

— Ҡайҙа командирҙарығыҙ?

— Беҙ ҡайҙан беләйек...

— Ниндәй частан?

Ҡыҙылармеецтар, яуап ҡайтармайынса, ризаһыҙлыҡ белдереп шаулаша башланы:

— Юлыбыҙҙы быумағыҙ!

— Һеҙҙең кеүек һыбайлымы ни беҙ дошмандан ҡасып ҡотолорға?..

Шайморатовтың асыуы ҡабарҙы. Үҙенең кем икәнлеген танытып, ҡасҡындарға ҡәтғи талаптар ҡуйғас ҡына, шаушыу баҫылды, ә оҙон буйлы ҡыҙылармеец алға сыҡты.

— Иптәш полковник, беҙгә артҡа сигенергә һәм бынан ун-ун биш километр алыҫлыктағы уйһыулыкта туҡталып, ирттағыларҙы көтөргә комбриг ҡушҡан.

— Ҡомбригығыҙ ҡайҙа?

— Пудовкинмы? Уның ҡайҙалығын белмәйбеҙ, иптәш полковник!

— Ниндәй частан һеҙ? — тип Шайморатов һорауын ҡабатланы.

— Йөҙ ҙә алтынсы һәм йөҙ ҙә етенсе уҡсы бригадаларҙан беҙ, иптәш полковник!

— Ҡомбригтан башҡа, бүтән командирҙарығыҙ юҡмы ни?

— Дошман самолеттары беҙҙе бомбаға тотҡан саҡта күпселек командирҙарыбыҙ ҡырылды. Иҫән ҡалғандары бармы-юҡмы икәнлеген белмәйбеҙ!

Шайморатов, сыпраҡланған ҡара-ерән ҡашҡаһының ауыҙын шаҡара тартып, бойорҙо:

— Мәсьәлә асыҡланғанға саҡлы, уҡсы бригадаларҙағы ҡыҙылармеецтар миңә буйһондорола! — Ҡасҡындар өндәшмәгәс, адъютанты эргәһендәге дивизияның оператив бүлек начальнигына ҡараны. — Йосопов, һеҙ ошонда ҡалаһығыҙ! Сигенеүселәрҙең һәммәһен туҡтатырға һәм бергә йыйырға! Приказға буйһонорға теләмәүселәрҙе, Ватанға хыянат иткәндәре өсөн, хөкөмһөҙ-ниһеҙ атырға!

— Есть! — тип әҙерлек белдергән майор Йосопов, эйәрендә кәүҙәһен турайтып, честь бирҙе. — Бергә йыйналғас, ҡасҡындарҙы ни эшләтергә?

— Беҙҙең дивизия менән берлектә оборона тотоуҙа файҙаланырға! — тине лә, Шайморатов юлын дауам итте. Ләкин ул дивизия штабына ҡайтып полктарҙа оборона тотоуға әҙерлек барышы хаҡында полковник Голеневтан һорашырға ла өлгөрмәне, майор Йосопов килеп инде.

— Иптәш полковник, ҡасҡындар менән яңғыҙым бер ни ҙә эшләй алмайым! Бер төркөмдө туҡтатып, бер урында ҡалдырып китһәм, икенсе төркөмдәгеләрен алып килеүемә, былары китә лә бара. Миңә берәй ярҙамсы бирегеҙ!

— Дивизия штабы комиссары Аритҡолов һеҙҙең менән барыр. Бер ыңғай ҡасҡындар араһында политик эш тә башҡарыр!

Дивизия штабы комиссары ярҙамында майор Йосопов ике йөҙҙән артығыраҡ ҡасҡынды йыйҙы һәм улар араһындағы берҙән-бер кесе лейтенантты командир итеп тәғәйенләне.

Ҡасҡындарҙы йыйып ойошторолған уҡсы частарҙың 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы менән 21-се кавалерия дивизияһы араһындағы дүрт километрлы буш урын-

ға оборона тоторға урынлаштырылыуын, улар ҡарамағында пушка, егермеләп станоклы пулемет, бик күп гранаталар барлығын белгәс, Шайморатов дивизияның асыҡ флангыһы ябылыуы өсөн ҡыуаныс белдерҙе. Дивизия штабы начальнигы полковник Голенев, киреһенсә, йөҙ ҙә алтынсы һәм йөҙ ҙә етенсе уҡсы бригада өсөн борсолдо:

— Уларға мин ышанмайым, Миңлеғәле Минһажетдинович. Ҡасҡындарҙың дошман ҡыҫымына сыҙауҙары шикле. Гитлерсылар алйот түгел. Оборона йомшағыраҡ урынды һайлаясаҡ. Көстө туплап, шына һымаҡ уҡсы бригадалар тотҡан оборона тәңгәленән үтеп инеүе һәм беҙҙең дивизия тылына сығыуы ихтимал.

Граждандар һуғышында ҡатнашҡан ҡарт большевик Голенев — һуғыш һөнәрен яҡшы белгән кеше. Ул Башҡорт кавалерия дивизияһын ойоштороуҙа, һыбайлы егеттәр араһында ныҡлы дисциплина булдырыуҙа полковник Шайморатовҡа һәр яҡлап ярҙамлашты һәм уның ихтирамын яуланы. Фронтҡа килгәс тә ғәҙәттәге тыныслығын юғалтмайынса, дивизия штабы менән яҡшы етәкселек итте.

— Нимә тәҡдим итәһегеҙ? — тип һораны Шайморатов.

— Уҡсы бригадалар тотҡан позицияға берәй эскадронды күсерергәме икән әллә, тим.

— Ун ике километрға һуҙылған беҙҙең дивизия үҙе ярҙамға мохтаж бит!

— Ҡомкорҙан һораһаҡ, бәлки...

— Юҡ, Иван Иванович, юҡ, — тип бүлдерҙе Шайморатов. — Корпус командирына ла ундай резерв ҡаралмаған. Беҙҙән ул үҙе һорағайны бер эскадронды... Берҙән-бер сара, минеңсә, дошмандың төп маҡсатын асыҡларға кәрәк. Әгәр шуны белһәк, ул һөжүм башлаясаҡ урынға көс тупларбыҙ. Дошманды барлыҡ артиллериянларҙан ут асып ҡаршыларға һәм ҡыйратырға.

— Фекерегеҙ аңлашыла, Миңлеғәле Минһажетдинович, — тине полковник Голенев, ризалашып.

— Немецтар яғында нисек?

— Әлегә тыныс. Разведчиктарҙың донесениеһынан күренеүенсә, беҙҙән ун-ун ике километр алыҫлыҡта туҡталған дошман һалдаттары 275-се полк йүнәлешендә һөжүмгә әҙерләнә.

— Күсимов беләме был хаҡта?

— Хәбәр иттем.

— Күрше дивизиялар менән бәйләнеш нисек?

— Яҡшы.

Дивизия штабы начальнигы менән һөйләшкәндән аҙаҡ, полковник Шайморатов тәүҙә 275-се, һуңынан 294-се башҡорт кавалерия полкы командирының күҙәтеү пунктына

барҙы. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡыҙыл кавалеристар тарафынан ҡаҙылған траншеяларҙы, окоптарҙы, ячейкаларҙы, йыуан-йыуан бүрәнәләр түшәп нығытылған дзоттарҙы тикшереп йөрөгән саҡта, ул полк командирынан һораны:

— Яугирҙарҙың кәйефе нисек? Йәһәтерәк һуғыш башларға ашҡыналармы?

— Ашҡыналар, иптәш полковник, — тине полк командиры. — Әммә немецтарҙың беҙгә яҡынлашыуы тураһында уҡсы бригадаларҙағы ҡасҡындарҙан ишеткәс, боецтарҙың элгәрге ғәйрәтлеге бер аҙ кәмене, ә ҡайһы берәүҙәре шөрләп тә ҡуйҙы.

— Ундай тойғо миңә лә таныш, — тине дивизия командиры, кешеләрҙе ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләмәйенсә. — Иң ҡыйыу, иң сая батыр ҙа беренсе һуғышта ҡатнашҡанға саҡлы ҡурҡа. Аҙаҡтан, немец һалдаты ла үҙе шикелле кеше икәнлегенә инанғас, тынысланa, әкренләп күнегә башлай. Ҡыҙылармеецтарҙы ҡурҡыу тойғоһонан ҡотолдороу өсөн дошман менән алышта бәләкәй генә булһа ла еңеү кәрәк. Гитлерсыларҙың ҡасан һөжүм башлауын көтөп тик ятыуҙан файҙа күрмәйем. Уларҙы атакалау, ҡыйратыу яғын үҙегеҙ ойоштороғоҙ!

— Был тәңгәлдә тейешле эш башҡарыла, иптәш полковник!

— Ниндәй?

— Артиллеристар һәм танкистар менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙыҡ. Разведчиктарҙы ебәреп, дошман позицияһын өйрәнәбеҙ һәм үҙебеҙ уларға ҡаршы һөжүмгә әҙерләнәбеҙ, — тине майор Нафиҡов.

— Яҡшы, Гәрәй Әхмәтович. Ләкин күршегеҙҙәге йөҙ ҙә алтынсы уҡсы бригада менән дә бәйләнештә өҙмәгеҙ. Ауыр хәл килеп сыҡһа, уларға ярҙам ойоштороғоҙ, — тине лә, Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаһын икенсе эшелондағы Макаев полкына ыңғайлатты.

Ҡара-ерән ҡашҡа бер тиҙлектә юртты. Һыбайлыны йөрөтөргә өйрәтелгәндән бирле ул үҙ хужаларына тоғро хеҙмәт итте. Айырма тик шунда: элгәрге хужаларының холоҡ-ҡылығына ҡыйынлыҡтар менән күнекһә, Шайморатовҡа бик тиҙ эйәләште.

Ошондай алыҫ ерҙәргә тыуған төйәгенән килеү сәбәбен, артабан ҡайҙарға барырын, ниндәй эштәр ҡыласағын ғына белмәне ҡара-ерән ҡашҡа. Шулай ҙа, аҡыллы, һиҙгер мал булараҡ, яңы хужаһы бындағы барлыҡ һыбайлыларға баш икәнлеген, уның кешеләргә ҡарата булған мөнәсәбәтенән, киҫкен күҙ ҡарашынан, талапсан һүҙҙәренән аңлап тора ул.

Ҡара-ерән ҡашҡаның тормош тәжрибәһе әллә ни ҙур түгел. Кешеләр менән аттарҙы сағыштырырҙай мөмкинлеге лә юҡ уның. Ләкин йылҡы көтөүендә йөрөгән саҡта күргән ҡыҙыҡлы мажаралар, өйөр айғырының хәстәрлеге, көтөүҙе күҙ ҡараһы кеүек һаҡлауы, йәш быуын именлеге өсөн үҙен-үҙе аямауы мәңге онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырған унда. Шуға күрә лә яңы хужаһына күмәк кешеләрҙең тайпылышһыҙ буйһоноуы уны һис тә ғәжәпләндермәй. Батыр, талапсан, яғымлы хужаһы эргәһендә ул үҙен тыныс һиҙә. Бер ҡара-ерән ҡашҡа ғынамы ни? Уның яңы хужаһы алдында иң уҫал күренгән кешеләр ҙә бик тиҙ йыуашлана һәм тыйнаҡлана.

## II

Дивизия командирын оҙатҡас, майор Нафиҡов полк штабы начальнигы менән эскадрон командирҙарын блиндажына саҡыртты. Ул һәр эскадрондан икешәр-өсәр кеше бүлергә, график буйынса уларҙы алғы һыҙыҡҡа ебәреп, Олым йылғаһы аръяғындағы гитлерсыларҙың ҡайһы яҡтан килеүҙәрен, ҡайҙа, ниндәй көстәре урынлашыуын күҙәтергә бойорҙо.

— Фашистар ҙа ике аяҡлы, ике ҡуллы кешеләр икәнлеген үҙ күҙҙәре менән күреп белһәләр, ҡыҙылармеецтар фронт шарттарына йәһәтерәк күнегәсәк, — тип эскадрон командирҙарын ҡат-ҡат киҫәтте ул.

Шул ваҡыттан башлап, эскадрондарҙа ниндәйҙер йәнләнеү һиҙелде. Бер төркөм ҡыҙылармеецтар дошман һалдаттарын яҡын урындан күҙәтеп кире килеүгә, икенсе төркөмдәге кешеләр китергә әҙер торҙо.

Лейтенант Атаев командалығындағы бер төркөм менән алғы һыҙыҡты барып күҙәтергә тейешлеген белгәс, Байдәүләтов Зәки ҙә бик ныҡ тулҡынланды. Йөрәген әлегәсә беленмәгән ҡурҡыу тойғоһо солғап алды. Ләкин ул хәлен белгертмәне. Соҡор-саҡырҙарҙа, ағас дүңгәктәре артына йәшеренеп, ул иптәштәре артынан шыуҙы. Баш ҡоҫҡан арыш араһына еткәс тә ҡурҡыуы кәмемәне. Киреһенсә, дошманға яҡынлашҡан һайын, үҙен тамуҡ утына инеп барғандай тойҙо, ҡот осҡос бер төрлө уй теңкәһен ҡоротто: «Иҫән-һау ҡалырға яҙғанмы, юҡмы?»

Йылға яры буйындағы ҡыуаҡлыҡҡа етеп йәшеренгәс кенә, үҙенә ҡабаттан йән ингәндәй булып, Зәки аръяҡтағы дошман һалдаттарын күҙәтеүсе Атаевҡа ҡараны. Взвод командирының йөҙөндә бер ниндәй ҙә борсолоу билдәһе беленмәгәс, Байдәүләтов аҙыраҡ тынысланды һәм күҙ

ҡарашын йылға аръяғындағы дошман һалдаттарына йүнәлтте.

Үҙҙәренең окоптарына кире ҡайтҡас, ҡыҙылармеецтарҙы траншеяларға таратты ла взвод командиры Атаев эскадрон командирына доклад яһарға китте. Алғы һыҙыҡта күргән-белгәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп, эскадрон командирынан яңы бойороҡ алып ҡайтҡас та үҙ взводын урман ситендәге буш ергә алып барҙы һәм өр-яңы траншея ҡаҙырға ҡушты. Ҡыҙылармеецтар үҙ эшен тамамларға өлгөрмәне, Олым йылғаһы аша сыҡҡан дошман һалдаттары, танкыларына ышыҡланып, һөжүмгә күсте. Ләкин, ҡыҙылармеецтар асҡан көслө утҡа ҡаршы килергә баҙнат итмәй, Набережный янында туҡталдылар.

Эңер еткәс, бер төркөм автоматсылар менән пулеметсыларҙы һәм «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы Али Ҡарнайҙы эйәрткән полк командиры майор Нафиҡов лейтенант Атаевтың уҡсылар взводы урынлашҡан ергә килде.

— Набережный ауылындағы гитлерсыларҙың көсөн беләһегеҙме?

— Беләбеҙ, иптәш майор! Унда йөҙ-йөҙ егермеләп фриц тупланған. Разведчиктарҙың һүҙенә ҡарағанда, фашистар үҙҙәрен үтә ғәмһеҙ тота. Ҡараңғы төшкәс тә ауылдағы өйҙәргә таралышып, флангыларына һаҡсылар ҡуйыу хәстәрлеген дә күрмәгәндәр.

Планшетында йөрөткән картаға ниндәйҙер билдәләр яһағас, майор Нафиҡов тынысланды.

— Яҡшы, Атаев, — тине ул. — Фашистарҙы беҙгә өс яҡлап атакаларға кәрәк!

294-се кавполк командиры Нафиҡов, иң яҡын ярҙамсыларын йыйып, гитлерсыларҙы нисек итеп ҡыйратыу хаҡындағы планды төшөндөрҙө. Лейтенант Атаев взводына Набережный ауылындағы немецтарҙың тылына һиҙҙермәй үтеп инергә, ракета һауаға күтәрелеү менән боецтарҙы атакаға күтәрергә бойорҙо ла дошман аңламаған башҡорт телендә Шайморатовҡа радио аша асыҡтан-асыҡ үҙ фекерен тапшырҙы:

— Иптәш беренсе, мин ҡуҙғалам...

Һуғыш яуаплы икәнлеген һәм майор Нафиҡовтың төнгө һөжүме уңышлы тамамланһа, бүтән полктар өсөн дә өлгө буласағын аңлаған дивизия командиры Шайморатов:

— Хәйерлегә булһын, — тине һәм шул минуттан башлап барлыҡ иғтибарын Нафиҡов төркөмөнә тупланы.

Төн уртаһы ауышты, ә Набережный ауылы яғынан бер ниндәй ҙә тауыш ишетелмәй. Һәр минут көсөргәнешле уҙҙы. Тирә-яҡ үтә тыныс. Хатта күк йөҙөн сыбарлаған

иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар ҙа нимәнәндер һағайып, ҡалтыранған һымаҡ күренә...

Ана, һауаға ҡыҙыл ракета осто. Шул уҡ минутта автоматтарға пулеметтарҙың тәтелдәүе ҡушылды, ҡул гранаталары ярылыуы һәм «ура» тауышы ишетелде...

Офоҡ сите күкһелләнеп яҡтыра башлағанда ғына майор Нафиҡов төнгө заданиенан ҡайтты һәм дивизия командирына рапорт тапшырҙы:

— Иптәш полковник, Олым йылғаһы буйындағы гитлерсылар тулыһынса ҡыйратылды! Набережный ауылында бер генә фриц та ҡалманы.

— Пленныйҙар юҡмы? — тип һораны Шайморатов.

— Дошмандың ике һалдаты пленға алынды. Уларҙы трофейҙар тейәлгән һуғыш ҡорамалдары, техникалары менән бергә алып киләләр.

— Пленныйҙарҙан һорау алырға һәм уларҙы корпус штабына оҙатырға!

— Есть!

— «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторының да һеҙҙең менән бергә булыуы ысынмы?

— Так точно, иптәш полковник! Али Ҡарнай һөжүмдең башынан аҙағына саҡлы беҙҙең менән бергә булды, — тине Нафиҡов, ярһыуынан һаман баҫыла алмайынса.

— Али Ҡарнай ҡайҙа?

— Ул редакцияға китте.

— Тәүге еңеү менән ҡотлайым һәм рәхмәт белдерәм!

Майор Нафиҡов ғорур яуапланы:

— Советтар Союзына хеҙмәт итәм!

Набережный ауылындағы төнгө һуғыш тураһында ентекләп һорашҡандан һуң, полковник Шайморатов байтаҡ ваҡыт уйланып ултырҙы.

— Егеттәрҙең кәйефе нисек?

— Күтәренке, иптәш полковник!

— Иң ҡыйыу боецтарҙың исемлеген төҙөп, миңә бирегеҙ!

— Айырым кешеләрҙе һайлап исемлеккә яҙыу ҡыйын, иптәш полковник! Барлыҡ боецтар ҙа ҡыйыу алышты. — Майор Нафиҡов шымыбыраҡ торҙо. — Уҡсылар взводының яңы командиры лейтенант Атаев менән автоматсы Ҡолмөхәммәтов айырыуса маҡтауға лайыҡ!

— Лейтенант Хөсәйенов урынына тәғәйенләнгән командирҙан уңдыҡ! — тине Нәзиров.

— Егеттәрҙең иң батырҙарын Али Ҡарнай беләме? — тип һораны дивизия командиры.

— Үҙе күрҙе, үҙе шаһит!

— Али Ҡарнай күҙлекле булһа ла, күҙе үткер уның! — тине политбүлек начальнигы Абдуллин.

— Беренсе һуғыштың барышы тураһында яҙыуы иң тәжрибәле фронтовик-журналистарға ла еңел түгел. Шуға күрә Али Ҡарнайҙан әллә ни көтөргә ярамай, — тине полковник Голенев.

Уның фекере менән дивизия комиссары ризалашманы:

— Мин, киреһенсә, ошо төнгө һуғышта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең ҡаһарманлыҡтарын бүтәндәргә өлгө булырҙай итеп тап Али Ҡарнайҙың яҙасағына ныҡ ышанам!..

## III

Төнгө һуғыштан һуң Али Ҡарнай редакцияға килде, ләкин ял тураһында уйламаны. Унан-бынан ғына тамаҡ ялғап алғас, тоноҡ ҡына яҡтыртҡан шәм яҡтыһында мәҡәлә яҙырға тотондо.

Төнгө һуғыш ваҡытындағы күренештәр, айырым ваҡиғалар бер-береһен ҡыҫырыҡлауҙан барлыҡҡа килгән уй-тойғолары тәртипһеҙ ағылыуы һәм кәрәгенән артыҡ ҡабаланыуы сәбәпле, Али Ҡарнай тәүҙә фекер туплай алмай интекте. Күргән-белгәндәре, һуғышсыларҙың ҡайһы взводтан, ҡайһы эскадрондан икәнлеге бергә буталып, күҙ алдында сыбарланды.

Мәҡәләһен башлай алмай оҙаҡ ыҙаланды ул. Дошман һалдаттары урынлашҡан Набережный ауылын өс яҡтан ҡамаған боецтарҙың берҙәм атакаға ташланыуын тасуирлай ғына башлағайны, илһамланып китте һәм эше лә ыңғайланы. Ул, үҙе өсөн генә хас булған дәрт-сәм менән өтөлөп-янып, туҡталмай яҙҙы ла яҙҙы. Иң һуңғы һөйләмгә нөктә ҡуйып, тынғы бирмәгән тойғоларынан бушанғас ҡына, ижади ҡәнәғәтләнеү хисе менән өҫтәл артынан күтәрелде. Шунда ғына яһалма шәмөнең төпсөгө генә ҡалыуына, һауаһыҙ ҡыҫыҡ бүлмә эсенә ҡояш нурҙары тулыуына, ҡайһы аралалыр йыйналырға өлгөргән редакция работниктарының һәр ҡайһыһы үҙ вазифаһын башҡарыуына иғтибар итте һәм бик ныҡ йонсоуын һиҙҙе.

— Хәйерле иртә, иптәштәр!

— Иҫәнмеһегеҙ, Ҡарнай ағай, — тип яуап ҡайтарҙы редакцияның әҙәби хеҙмәткәре Шакир Насыров.

Хәреф йыйыусы ҡатын-ҡыҙ ҙа, шау-шыу килеп, редактор менән ихлас иҫәнләште:

— Һаумыһығыҙ!

— Эшегеҙ ундымы?

— Унды, — тине Али Ҡарнай.

Редакцияның яуаплы секретары Әһел Истамғәлин яңғыҙы ғына, өндәшмәйенсә баш ҡағып, күҙлегенең өҫкө яғынан редакторға һөҙөп ҡараны.

— Ҡасан ҡайттығыҙ?

— Таң ҡыйылғанда.

Төнгө һуғыш хаҡында һүҙ сыҡҡас, хәреф йыйыусылар, Али Карнайҙы уратып алып, һораша башланылар:

— Карнай ағай, фашистарҙы үҙ күҙегеҙ менән күрҙегеҙме?

— Ҡурҡманығыҙмы?

— Һуғыш нисек булды?

— Һөйләгеҙ әле!..

Али Карнай, бик ныҡ йонсоуынан йомолоп барған ҡоңғорт күҙҙәрен ҡыйынлыҡ менән асып, күҙлеген алып һөрттө лә, ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы елпендерҙе.

— Һеҙҙе ҡыҙыҡһындырғандарҙың бөтәһе ошонда яҙылды. Уҡығас, барыһын да белерһегеҙ, — тип ул япа-яңғыҙы бер яҡ ситтә ултырған яуаплы секретарға өндәште: — Иптәш кесе политрук, ошо очеркты газетаның сираттағы һанына!

Әһел Истамғәлин, оҙонса аҡһыл йөҙөн ризаһыҙлыҡ менән сырылдырып, асыулы ҡараш ташланы.

— Машинкала баҫырға, унан йыйырға кәрәк. Ваҡыт үтә бит. Ә номер әҙер.

Истамғәлиндең аҫтыртын ҡыланышына, һәр саҡтағыса тиҫкәреләнергә әҙер тороуына тәҡәте ҡороған Али Карнайҙың йөҙө ҡарайҙы. Ләкин ул үҙен тыныс һәм ышаныслы тоторға тырышты.

— Мәҡәлә егеттәрҙең беренсе алышы турында. Срочно!

— Өлгөрөп булһа...

— Өлгөрт!

— Ярар, хәреф йыйыусыларҙың хеҙмәтен һанға һуҡмағас, әйҙә, һин ҡушҡанса булһын!

Хәреф йыйыусыларға үҙен ҡаршы ҡуйырға маташҡан Истамғәлиндең мәкерле уйын аңлаһа ла, уның менән бәхәсләшерҙәй хәле ҡалмағайны Али Карнайҙың. Шинелен бер мөйөшкә йәйеп ятыу менән ул йоҡоға сумды.

Али Карнай оҙаҡ ял итмәне. Йоҡоһонан уянғас, йәһәт кенә ҡырынып йыуынды ла, редакция работниктарын йыйҙы. Эш барышы тураһында һорашып, айырым етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөү буйынса үҙенең фекерен белгерткәндән һуң, редакцияның әҙәби хеҙмәткәре Насыровҡа икенсе эшелондағы Макаев полкына, Истамғәлингә майор Нафиҡов полкына барырға ҡушты.

— Минең төп эш, газетаның яуаплы секретары булараҡ, газета сығарыу, — тине кесе политрук Истамғәлин,

ризаһыҙлыҡ белдереп. — Миненсә, Нафиҡов менән бергә үҙең төн уҙғарыуың еткән, иптәш редактор!

— Етмәгән! — тип Али Ҡарнай ҡырт киҫте.

— Ҡавалеристар яҙған мәҡәләләр редакцияла бөтөрләөк түгел дә баһа! Беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәҡәлә бик кәрәкһә, авторҙарҙы бында саҡырып яҙҙыртырға ла мөмкин бит!

— Бергәләп бешергән аш тәмлерәк була ул, — тине Али Ҡарнай. — Ҡеше ҡалағын алмаҫҡа, үҙеңә бешерергә өйрәнергә кәрәк бутҡаны. Шунһыҙ уның тәме булмай. Һалдаттар шулай ти. Аңланыңмы, иптәш кесе политрук?

— Редакцияла үҙең ҡалаһыңмы?

— Ҡалмайым, Күсимов полкына барам.

— Бындағы эште Пушкин башҡарырмы?

— Сираттағы газета сыға бит. Тимәк, бүтән ашығыс эш әлегә юҡ.

Әһел Истамғәлин бәхәсләшеп эш сыҡмаясағын аңлағас, йөрәге ауыртыуына һылтанды.

«Ҡурҡа. Немецтарҙан ҡурҡа, ҡуян йәнле әҙәм», — тип уйланы Али Ҡарнай. Ләкин хәреф йыйыусы ҡатын-ҡыҙ алдында тауышланырға теләмәне. Атына атланды ла 275-се кавполк урынлашҡан ергә елдерҙе. Юлда барышлай, Өфөләге шикелле, фронт шарттарында ла газетаның яуаплы секретары кесе политрук Истамғәлин менән уртаҡ тел таба алмауы өсөн борсолдо. Ниңә гел тиҫкәреләнә икән Әһел? Дивизия командиры менән политбүлек начальнигы бер нисә мәртәбә киҫәткәндән һуң да ул эшкә мөнәсәбәтен үҙгәртмәне. Артабан бергә нисек эшләмәк кәрәк? Был турала Миңлеғәле Минһажетдиновичҡа әйтергәме икән әллә? Үҙ ҡулың аҫтындағы кешегә ҡарата яманлыҡ ҡылыу килешерме? Юҡ, улай ошаҡлашыу егетлек түгел! Нисек тә булһа Истамғәлин менән татыулашыу юлын табырға кәрәк. Уны редактор итеп ҡуйһалар, бәлки, яуаплылыҡ тойор ине. Был мәсьәләне ҡабаттан ҡуҙғатһам, мине политбүлектә дөрөҫ аңларҙармы? Барыбер берәй әмәлен табыу мөһим. «Истамғәлин минең урынға үрләтелһә, тынысланыр ине. Ә мин, газетаға очерк-мәҡәләләр яҙған арала, киләһе әҫәрем өсөн материалдар туплар, йыйған материалдарымды рәтләп, берәй повесть яҙыр инем», — тип уйланы ул. Ләкин уның тәҡдимен дивизия командиры менән бүтәндәр хуплармы? Фронттың алғы һыҙығына барырға ҡурҡҡан һәм редакция эшенә ныҡлы егелергә теләмәгән әҙәмдән редактор барып сыҡмаһа, дивизия етәкселәренең күҙенә нисек күренер? Әһелдең мәҡәләләр яҙыу, редакцияға килгән хаттарҙы редакторлау һәләтлеге лә самалы бит! Өҫтәүенә, ялҡау, тыл-

дағы хәрби подразделениеларҙа булырға ла яратмай. Барған сағында ла боецтар менән аралашмай, улар эргәһендә оҙағырак йәшәргә, күңел биреп һөйләшергә теләмәй, штабистар йәки командирҙар һөйләгән мәғлүмәттәр менән генә сикләнә. Комиссар Әлибаев та уның менән ҡәнәғәт түгел икән. Ҡсрашҡан һайын көндәлек дәфтәрен һорап ыҙалата, ти... Хәҙер ҡалайтырға?

Һорауына яуап таба алмай, Али Карнай яфаланып барҙы. 275-се кавполк урынлашҡан ергә еткәс кенә, эс бошорғос уйҙары тарҡалып, күңеле бер ни тиклем күтәрелде.

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторы Али Карнай ҡайһы эскадронға йәки ҡайһы ғына взводҡа бармаһын, кемдәр менән генә осрашып һөйләшмәһен, төнгө һуғышта ҡатнашҡан полк командиры майор Нафиҡов менән уның командалығындағы яугирҙарҙың батырлығы хаҡында һүҙ барҙы. Ҡыҙылармеецтарҙың дошман һалдаттарын ҡыйратыуы әлегәсә ҡурҡыу тойғоһо кисергән һәр кешелә үҙ көсөнә ҡарата ышаныс тыуҙырҙы, уларҙы илбаҫарҙарға ҡаршы ауыһыҙ һуғышырға рухландырҙы.

275-се кавполкта төн уҙғарған Али Карнай, иртәгеһе көндө редакцияға һуғылмайынса, 294-се кавполкҡа барҙы. Уны майор Нафиҡов үҙе яҡын итеп ҡаршыланы.

— «Ҡыҙыл атлылар» газетаһында баҫылып сыҡҡан очергығыҙҙы бөтә кавалеристар ҙа ҡыҙыҡһынып уҡый. Набережный ауылы эргәһендәге һуғыш барышы бик мауыҡтырғыс, фәһемле итеп яҙылған! Ҡыҙыулыҡ менән мин күрмәгән, аңғармаған эпизодтарҙы ла ҡайһылай дөрөҫ һүрәтләгәнһегеҙ! Фашистарҙы аяуһыҙ ҡыйратыусы ир-егеттәрҙең төнгө ҡараңғыла саҡ беленгән буй-һыны, ҡиәфәтенә саҡлы иғтибар иткәнһегеҙ! Беҙҙе һөйөндөрөүегеҙ, данлауығыҙ өсөн рәхмәт, ҙур рәхмәт, — тип маҡтай-маҡтай майор Нафиҡов уны полк командирының күҙәтеү пунктына алып барҙы. Дошман тотҡан позицияны оҙаҡ ваҡыт иғтибар менән ҡарағандан һуң, ул биноклен Али Карнайға һуҙҙы: — Мә, яҙыусы иптәш, хәҙер һеҙ ҡарағыҙ фашистарҙы. Төнгө ҡыйралыштары өсөн беҙҙән үс алырға ниәтләнеп, һөжүмгә әҙерләнәләр.

Биноклдән күҙен алмайынса, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы полк командирының һүҙен дөрөҫләне:

— Эйе, дошман һеҙҙең полк тәңгәлендә көс туплай. Был юлы уларҙы еңеүе ауырға тура киләсәк!

— Барыбер бирешмәбеҙ, иптәш яҙыусы!

Али Карнай, бәхәсләшмәйенсә, кеҫәһенән ҡуйын дәфтәрен сығарҙы. Тирә-яҡтағы күренешкә иғтибар менән күҙ йөрөтөп сыҡты ла ниҙер яҙа башланы.

Полк командиры, яҙыусыға ҡамасауларға теләмәйенсә, эскадрон командирҙары менән телефондан берәм-берәм һөйләшеп сыҡты. Иң аҙаҡтан үҙен дивизия командиры менән тоташтырырға ҡушты. Телефон трубкаһында полковник Шайморатовтың тауышы ишетелгәс тә, ул саф башҡортса һөйләшә башланы:

— Иптәш беренсе, тегеләр беҙҙең көстө йәнә һынамаҡсылар. Эштәр ҡатмарланһа, артдивизионға ярҙамлашырға ҡушыуығыҙҙы үтенәм!

— Борсолмағыҙ, миңә һәммәһе мәғлүм, — тине дивизия командиры.

Полковник Шайморатов менән һөйләшкәндән һуң да борсолоуы кәмемәгән Нафиҡов дошман позицияһын ҡабаттан күҙәтергә кереште.

## IV

Артналет тамамланыу менән, дошман һалдаттары атаҡаға күтәрелде. Уларҙың яҡынлашыуын күҙәткән 294-се полктың эскадрондарында ла йәнләнеү һиҙелде.

Лейтенант Атаевтың уҡсылар взводындағы пулеметсы Байдәүләтов икенсе расчеттағы ярҙамсыһы менән берлектә алғы һыҙыҡты күҙәтергә ҡамасаулаған арыш башаҡтарын өҙгөләй башлағайны, отделение командирының асыулы тауышы ишетелде:

— Ятырға!

Шул уҡ секундта дошман пулялары ҡолаҡ төбө тәңгәленән фыйт та фыйт һыҙғырышып үтте. Ҡото алынған Байдәүләтов ҡуйы арыш араһына йығылып өлгөрҙө һәм ситкә табан имгәкләне. Окоп төбөндәге ярҙамсыһы эргәһенә еткәс кенә бер аҙ йән инде.

— У-уф, ҡотто алды, — тип пилоткаһы менән бысраҡ тиргә мансылған елкә-муйынын, битен һөрттө.

Ваҡыт көсөргәнешле уҙҙы.

Болоттар таралышып, көн аяҙытты.

Ҡояш юғарыға күтәрелгән һайын, томра һауа ҡуйырҙы, эҫе ағым артты. Күҙ күреме етмәҫтәй киң баҫыуҙағы арыш башаҡтарын тулҡынландырып иҫкән еләҫ ел окоптағы егеттәргә төрлө сәскәләр еҫен килтереп таратты.

— Фрицтар ҡайҙа юғалды? — тип һораны кемдер.

Икенсе боец мыҫҡыллы көлдө:

— Шөрләйһеңме?

— Беҙҙең тылға сыҡмаһындар, тим.

— Сыҡмаҫтар! Улар беҙҙең ҡаршыла туҡталды.

— Танкылар килеүен көтәләр микән?

— Дә-ә... Танкылар менән һөжүм итһәләр, ҡыйын буласаҡ!

— Ярар, шыңшыма, паникер!..

Ҡыуаҡлыҡтар артына етеп туҡталған гитлерсыларҙың ҡабат ҡасан күтәрелерен көтөп тәҡәте ҡороған Байдәүләтов бер-береһен ирештереүсе иптәштәренә асыуланды:

— Нимә ҡыланаһығыҙ, тел бисҙтәләре!

Күрше окоптағы ҡыҙылармеецтар үҙ-ара бәхәсләшеүҙән тыйылғас, Байдәүләтов июль айына ғына хас Урал тәбиғәтен, тауҙар араһындағы ауылын, өйҙә икәүҙән-икәү генә тормош көткән кәләше менән әсәһен күҙ алдына килтерҙе. Ни хәлдә йәшәй икән улар? Интегә торғандарҙыр инде, бахырҡайҙар!..

Зәкиҙең уйҙарын бүлдереп, көсәйгәндән-көсәйә, яҡынлашҡандан-яҡынлаша килгән күмәк моторҙар геүләүе ишетелде. Ҡайҙа, нимә килә икән?

Байдәүләтов тирә-яғына ҡаранып алды, күккә күҙ һалды. Ике-өс минут самаһы ваҡыт уҙыуға, бер-бер артлы тигеҙ сафта килеүсе унарлаған самолет күренде. Уларҙың икеһе төркөмдән айырылып, аҫҡа табан кәйкәләү менән ҡорһаҡтарынан айырылған оҙонсай ҡара нәмәләр ергә ҡойола башлағас та шул тәңгәлдә тетрәткес шартлауҙар яңғыраны.

— Самолеттар! — тип сарылданы кемдер.

Уға яуап һымаҡ, икенсе тауыш ишетелде:

— Йәшеренергә! Паникаға бирелмәҫкә!

Бомбаларҙың береһе яҡында ғына төшөп ярылды. Уның артынса тағы, тағы...

Байдәүләтов Зәки, ете ҡат ер аҫтына инеп китерҙәй хәлгә етеп, соҡор төбөнә башы менән ҡапланды.

«Үлемем ошонда икән» тигән ҡот осҡос уй уның ҡан тамырҙары буйлап үтте.

Көслө шартлауҙар баҫылғас, иҫән ҡалыуына һаман ышанмайынса, Байдәүләтов соҡор төбөнән күтәрелә генә башлағайны, икенсе тапҡыр әйләнеп килгән «юнкерс»тар йәнә бомбалар яуҙырырға тотонды. Ауыр йөктәрен бушатҡан дошман самолеттары китеп өлгөрмәне, улар артынса йәнә бүтәндәре күренде. Самолеттарҙың ҡорһағынан ағылған бомбаларҙың береһе, бруствер тәңгәлендә ярылып, траншеяны тупраҡ менән күмде...

Ҡолаҡ тондорғос һәр шартлауҙан һуң, йәне ус төбөнә еткән Байдәүләтов тертләне, әллә нисәмәшәр тапҡыр үлеп терелде. Иң аҙаҡҡы бомба төшөп ярылғандан һуң тынлыҡ урынлашты. Тере ҡалыуына, именлегенә һаман ышанмаған Зәки аяҡ-ҡулын, башын тотҡолап ҡараны, тәнен семетте.

Бүтән һуғышсылар ҙа, дер ҡалтыранып, аһылдаша-аһылдаша, өҫтәренә ҡунған тупраҡтар ҡатыш туҙан өйөмөн ҡаҡҡылай-һыпырғылай, траншеянан күтәрелде.

Үлеләр араһындағы яралыларҙы йыйып санэскадронға оҙатҡан санитарҙарҙы күҙәткән Байдәүләтовтың тәне эҫе-ле-һыуыҡлы булып китте, ныҡ тирләне, күңеле болғанды.

— Атаканы кире ҡағырға әҙерләнергә! — тигән взвод командиры Атаевтың бойороғо ишетелгәс кенә аңына килгән Байдәүләтов менән уның ярҙамсыһы, бомбаға тотоу мәлендә траншея төбөнә йәшерергә өлгөргән «Максим» пулеметын элгәрге урынына урынлаштырып, патрон таҫмаларын рәтләне.

Ер өҫтөн томалаған саң-туҙан ҡатыш ҡуйы төтөн аша бер ни йүнләп күренмәне.

Дөм ҡара ағым һирәгәйеү менән, ҡуйы арыш башаҡтары араһынан күтәрелгән гитлерсыларҙың йүгерә-атлай килеүе күренде. Уларға төбәп артдивизион һәм полк батареяһы ут асты.

Немецтар ергә һыйынырға мәжбүр булды. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Беҙҙең батареялар атыуҙан туҡталғас та, улар йәнә ҡуҙғалды.

«Үлергә ҡабаланалар», — тип уйланы «Максим»ы артында ятҡан Байдәүләтов.

Ғәжәп хәл: бомбалар төшөп ярылған ваҡыттағы шикелле ҡурҡыу тойғоһон Зәки башҡаса һиҙмәне. Ул, бөтөнләй тынысланып, пулеметы гашеткаһына баҫырға әҙерләнде. Әммә ут асырға тигән команда булманы.

Гитлерсылар ҡабалана. Уларҙың ҡысҡырышҡан тауышы асығыраҡ ишетелә башланы. Шунда ла взвод командирының атырға тигән командаһы булманы.

Байдәүләтов түҙемһеҙләнде.

«Ниңә һуҙа икән командир? Фашистар үҙебеҙҙе дөмөктөрәсәк бит», — тип уйларға ла өлгөрмәне, лейтенант Атаевтың ут асырға тигән командаһы ишетелде.

Шуны ғына көткән Байдәүләтов гитлерсыларҙы ҡурғаш ямғыры менән ҡойондора башланы. Бер үк мәлдә бүтән ҡыҙылармеецтар ҙа мылтыҡтарҙан, карабиндарҙан һәм ҡул пулеметтарынан ут асты. Гранаталар ярылған тауыштар ҙа йышайҙы.

Фашистар ни тиклем күп ҡырылһа, Байдәүләтов Зәки ҙә шул саҡлы дәртләнә, ярһый төштө. «Максим» пулеметының оҙаҡ атыуҙан көбәге ҡыҙҙы.

— Пулемет кожухына һыу ҡой! — тип ажарланып ҡысҡырҙы ул, атыуынан тыйылмайынса.

— Булмаған һыуҙы ҡайҙан алырға? — тип һораны икенсе расчеттағы боец.

— Флягандағын бушат!

Ярҙамсыһы нык ҡыҙған пулемет менән аҙапланған арала Байдәүләтов яҡындағы гитлерсыларға бер-бер артлы граната ырғытты. Илле-алтмыш метр самаһы алыҫлыҡтағы ергә боҫорға мәжбүр булған немецтар ҙа оҙон һаплы гранаталарын ташлай башланы. Дошман гранаталарының береһе брустверҙа ярылып, уның ярсығы Байдәүләтовтың яурынына тейҙе. Ҡыҙыулыҡ менән яраһы һыҙлауын һәм тәне буйлап аҡҡан ҡаны гимнастеркаһы аша һарҡыуын һиҙмәйенсә, ул үлгән ҡыҙылармеецтың карабинын алды. Арыш башаҡтары араһындағы һалдаттарын алға барырға әйҙәп ниҙер аҡырған фашист офицерына карабинын тоҫҡаған сағында, кемдер унан элегерәк атып өлгөрҙө. Фашист офицеры ергә тәкмәсте. Шул ваҡытта брустверға һикереп менгән полк командиры Нафиҡов күренде.

— Ватан-әсә өсөн! Сталин өсөн! Минең арттан, алға-а-а! — тип ҡысҡырҙы ла гитлерсыларға табан йүгерҙе.

Полк командиры артынса һикереп торған лейтенант Атаев та боецтарын алға әйҙәне. Ҡалған эскадрондар ҙа алға ябырылды...

Лейтенант Атаев, майор Нафиҡовты уҙып китеп, иң беренселәрҙән булып гитлерсылар менән алыша башланы. Дошман һалдаттары, ҡыҙылармеецтарҙың берҙәм ҡыҫымына сыҙай алмайынса, оҙон арыш башаҡтары араһында борғоланып, эләгә-йығыла кире сигенде.

— Фашистарҙы эҙәрләргә! — тип елкенде Атаев.

— Отста-ви-ить!.. Үҙ позицияларығыҙға ҡайтырға! — тип бойорҙо майор Нафиҡов.

Оборона тотҡан элгәрге урынына еткәс кенә Байдәүләтов һул яҡ яурыны һыҙлауына һәм гимнастерка еңенең ҡанға мансылыуына иғтибар итте.

— Мәлһеҙ яраланғанмын, — тип үкенес белдерҙе ул.

Уның яраһын бәйләгән санинструктор:

— Санэскадронға барырға тура киләсәк һиңә, — тине.

— Һөйәгем именме?

— Имен.

— Мин — эт йәнле бәндә, һөйәгем имен булғас, йәрәхәтем йәһәт уңаласаҡ, — тип Байдәүләтов санэскадронға китергә теләмәне.

Ҡиске аштан һуң, ҡыҙылармеецтарға ҡыйратылған нығытмаларҙы, окоптарҙы рәтләргә, һуғыш припастарын тулыландырырға, алмаш-тилмәш ял итергә, гитлерсыларҙың ҡабатланасаҡ атакаһын кире ҡағырға һәр саҡ әҙер торорға ҡушылды.

Байдәүләтов, тылға китмәйенсә, оборона тотоусылар менән бергә алғы һыҙыкта ҡалды һәм барлыҡ мөһим эштәрҙе башҡарыуҙа ҡатнашты. Яраһы бик нык һыҙлай башлағас ҡына уға йыш туҡталырға тура килде. Төндә, траншея төбөндә ял иткән саҡта ла, яраһы үҙәгенә үтерҙәй булып һыҙлауына интекте. Таң алдында ғына әҙерәк тынсып күҙҙәрен йомғайны, дошман самолетының иртәнге тынлыҡты боҙоп геүләүе ишетелде. Ул гитлерсыларҙың һауа разведчигы булған икән. Самолет китеп күҙҙән юғалыуына күп тә үҙманы, күҙәтеүселәрҙән кемдер ҡысҡырҙы:

— Һауа!..

— Дошман бомбардировщиктары!..

Ҡыҙылармеецтар тәрән траншея төбөнә һырыҡты.

Байдәүләтов Зәки, һаҡлыҡ менән генә башын ҡалҡытып, самолеттарҙы күҙәтте. Ҡанаттарына ҡара тәре төшөрөүле дошман самолеттарының береһе, кисәге һымаҡ тигеҙ сафта килеүсе төркөмдән айырылып, түбәнгә табан кәйкәләгән ыңғайҙа бомбаларын ергә ҡойҙо ла юғарыға күтәрелде. Уның артынса бүтән бомбардировщиктар ҙа ауыр йөктәрен бушата башлағас, тирә-яҡтағы барлыҡ нәмә ҡыйратылды, емерелде, ер өҫтө геүләне, аҫты-өҫкә урғылды, әсе көйөк еҫе таралды.

Һәр бомба үҙенә йүнәлдерелгән һымаҡ хис иткән Байдәүләтов, ҡасан үлемгә сират етеүен көтөп, бөршәйҙе, ирекһеҙҙән аллаһы тәғәләне ҡат-ҡат иҫенә төшөрҙө, әсәһенән ишеткән доғаларҙы бышылданы. Айырым ҡыҙылармеецтар самолеттарға мылтыҡтарҙан ата башлағас ҡына, аңына килеп, ул күҙҙәрен асты һәм көтөлмәгән күренеште күреп аптыраны. Баш осо тәңгәленән көнбайышҡа табан осоп барған ике моторлы фашист бомбардировщиктарының иң арттағыһы ҡапыл яйланы, бомбаларын ташларға йыйналғандағы шикелле, һул ҡанатына ҡыйшайҙы, һауала ниндәйҙер эҙ ҡалдырып төтәне һәм аҫҡа ҡолай башланы. Күп тә үҙманы, ул Олым йылғаһы буйындағы әрәмәлеккә барып төштө, көслө шартлау ишетелде.

— Ура-а-а!

— Дошман ҡоҙғоно дөмөктө!

— Иҙрисов дөмөктөрҙө!

— Эйе, бронебойно-зажигательный пуляһы тейҙе уның, — тип ҡысҡырышты егеттәр.

Траншея буйлап йүгерә-атлай килгән оҙон кәүҙәле, көнгә янған түңәрәк йөҙлө, күҙлекле кешене күргәс, лейтенант Атаев шаулашҡан ҡыҙылармеецтарҙы иҫкәртте:

— Тауыш! Беҙгә «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы килә!

— Али Ҡарнай ағай ҙа баһа! — тине кемдер, уны танып.

— Редактор булғас, ниңә ул өлкән лейтенант званиеһында? — тип һораны икенсе боец.

Взвод командиры асыуланды:

— Өлкән лейтенант булырға строевой командирмы ни ул? Иптәш Али Ҡарнай — яҙыусы һәм редактор, йәғни политрук!

Али Ҡарнай көлөмһөрәне. Ул, взвод командиры Атаев менән күрешкәс, траншеялағы ҡыҙылармеецтарға баш ҡағып иҫәнләште лә яурыны аша аҫып йөрөткән планшетынан ҡағыҙ-ҡәләм сығарҙы.

— Дошман самолетын кем атып төшөрҙө?

Ҡыҙылармеецтар бер-береһен бүлдереп шаулашты:

— Иҙрисов!

— Иҙрисов атып төшөрҙө ул ҡоҙғонды, иптәш политрук!

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы, кемделер эҙләп, тирә-яғына ҡараны.

— Ул мәргәнде күрһәтегеҙ әле.

— Иҙрисов!

— Мин бында!

— Иҙрисов, яҙыусыға күрен!

Иҙрисовтың исемен, фамилияһын, Башҡортостандың ҡайһы районынан, ауылынан икәнлеген һорашып яҙҙы ла, Али Ҡарнай бүтән боецтарҙың да һуғыш ваҡытындағы батырлыҡтары менән ҡыҙыҡһынды.

Дивизия газетаһы редакторын оҙатҡас, взвод командиры, ҡабаттан атакаға әҙерләнеүсе гитлерсылар яғындағы ориентирҙарҙы күрһәтеп, яугирҙарға яңы бурыс ҡуйҙы.

Төшкө аш килтерҙеләр.

Йылҡы итен мул һалып бешергән һөҙләклө ашты термостан котелоктарға бүлеп һалғанда уҡ ләззәтләнеп тамшанған Байдәүләтов ыһылданы:

— Ә-ә-әх, йылҡы ите һурпаһы!

Уға ҡушылып бүтәндәр ҙә аш бешереүсене маҡтаны:

— Шәмсетдин ағайҙың ҡасан тәмһеҙ аш бешергәне бар?!

Ул бешерһә, бешерә инде. Теленде йоторлоҡ!

Помкомвзвод тараткан ашты ашаған егеттәрҙән маҡталыуға шатланған Шәмсетдин маҡтанмай булдыра алманы:

— Заманында мин Гайҙың үҙенә аш бешергән кеше инем!

— Кем ул Гай?

— Граждандар һуғышы геройы, командир, — тине Атаев.

Шәмсетдин ҡупырайҙы.

— Һа-а-ай, бар ине шәп саҡтар!.. Мин фин һуғышында ла ҡатнашҡан кеше. Тик унда танкист инем!

Егеттәр ғәжәпкә ҡалды.

— Танкист?

— Ә кәкже, — тип баш ҡаҡты аш бешереүсе.

— Ниңә әле танкист түгелһең?

— Духтыр ҡушмағас, ҡалайтайым?

— Танкист булырға ҡушмай яҡшы иткәндәр! Танкы йөрөтһәң, беҙгә ошондай тәмле ашты кем бешерер ине? — тине помкомвзвод, үҙенә аш өҫтәп ҡуйған саҡта.

— Ә миңә уның ашы оҡшамай, — тип ҡырт киҫте Иҙрисов.

Тамаҡ туйҙырыусылар, ризаһыҙлыҡ белдереп, шаулашты:

— Оятың бармы ошондай ашты хурларға?

— Хушһынмағас, Шәмсетдин абзый бешергән һалманы ниңә һыпыртаң?

Иҙрисов иптәштәренең һорауына яуап ҡайтарырға ҡабаланманы. Котелогы төбөнән ҡалағы менән һоҫҡан йылҡы итен ауыҙында оҙаҡ сәйнәп йотҡас ҡына, иптәштәренә күтәрелеп ҡараны.

— Ағайҙың ашы тәмле, тел йоторҙай булғанға оҡшамай миңә!

— Нисек инде улай? — Байдәүләтов аптыраны.

— Шәмсетдин абзый бешергән ашты ҡомһоҙланып ашайым да, көсөм артыҡ күбәйеп, ҡан тамырым ташыуына сыҙай алмай, бисә ҡуйынын һағына башлайым!

Юҡ-барҙан мәрәкә табырға әҙер тороусы ҡыҙыл армеецтар һаһылдашып көлөргә тотондо.

— Һеҙгә, кәнишнә, мәрәкә, ә миңә бисәһеҙ йәшәүе бик ҡыйын, — тине Иҙрисов. — Йәнем сарсый ҙа тора бит! Шул мәлде, исмаһам, еҫен еҫкәрҙәй генә булһа ла бисәсәсә йөрөһәсе яҡын-тирәлә!

Тамаҡ туйҙырыуҙан бүленгән егеттәр һындары ҡатып көлөштө.

— Бисә еҫен еҫкәгең бик килгәс, санэскадронға һора! Унда ҡатын-ҡыҙ етерлек, — тине Байдәүләтов.

— Санэскадронға ебәрһәләр, дошман самолетын минән башҡа кем атып төшөрөр?

— Һинең урынға Мөхәммәтҡазы ҡалыр. Ул ПТР-ҙан, төрлө калибрлы орудиеларҙан оҫта ата.

— Юҡ, китмәйем. Фашистар ғәзиз еребеҙҙе тапаған саҡта бисәләр ҡайғыһымы, — тине Иҙрисов.

— Ҡатын-ҡыҙ арҡаһында берәй һемәйгәнең булманымы?

— Танмайым, егеттәр, бисәләр арҡаһында ауыҙым бешкән саҡтар ҙа булғыланы, — тип Иҙрисов аяғын салып ултырҙы. — Эйе, улар касафатынан күп һемәйҙем! Бигерәк тә һуғыш башланырҙан алдараҡ командировкала йөрөгәндә бер бисә менән яман ҡыҙыҡ хәл булды.

Иҙрисовты ауыҙ асып тыңларға әҙерләнгән йәштәр яҡынырак шыуып ултырҙы.

— Йә, ағай, һөйлә әле!..

Иҙрисов, котелоктан эскән һалҡын сәйгә еүешләнгән мыйығы осон һыпырғылап:

— Башпотребсоюзда ревизор булып эшләгән саҡ ине. Унда гелән командировкала йөрөнөм. Ҡәнишнә, командировкала йөрөгәндә, бер ыңғай, күңелем төшкән бисәнең береһен дә ҡулымдан ысҡындырманым. Балҡышлыға барғанда ла, ғәҙәтемсә, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, бешкән сейәләй алһыу иренле, нескә билле, төҫ-һыны ҡупшы ғына Гөлниса исемле йәп-йәш бисә менән тап булыштыҡ. Береберебеҙгә ныҡ эйәләшкәс, кәнишнә, һәр кис һайын, ҡараңғы төшкәс, уның эргәһенә барҙым. Бик шәп, илгәҙәк бисә ине. Барып инһәм, минең өсөн йәнен бирерҙәй булып тора инде! Өйөндә булған бөтә тәмле-татлы ризығын минән ҡыҙғанманы. Бар ай буйы шулай кинәнеп йәшәгәндән һуң, командировкам срогы бөтөп, кәнишнә, Өфөгә ҡайтып киттем. Эшем уңышлы булыуына, командировкаға бирелгән аҡсам тотонолмай кеҫәмдә ҡалыуына, мине ҡуйынында йылытҡан бисәнән имен-аман ҡотолоуыма ҡыуанып та бөтә алманым. Әднәке ҡыуанысым күпкә барманы. Бер мәлде эшемдән өйөмә ҡайтһам, Гөлнисаны күреп, йөрәгем жыу итеп ҡалды. Ҡәнишнә, хәлемде белгертмәҫкә тырыштым. Ҡатыным минең менән ипле генә һөйләшкәс, Гөлнисаның минең турала яман һүҙ әйтмәүен аңлап, әҙерәк тынысландым. Бергә ултырып киске тамаҡты туйҙырғанда ла Гөлниса менән бер-беребеҙҙе белмәмешкә һалыштыҡ. Төндә, йоҡларға ятҡас, ҡатыным әйтте: Өфөлә белеш-танышы булмаған Гөлнисаны йәлләп, үҙебеҙҙә фатирҙа ҡалдырған икән. Шунан һуң мин бөтөнләй иркенләнем. Иртәгеһен эшкә киттем, ә ҡатыным менән Гөлниса өйҙә ултырып ҡалды. Эшкә барыуыма ярты сәғәт тә үтмәне, Гөлниса Башпотребсоюзға килде. Мине аулаҡ коридорға саҡырып сығарҙы ла: «Һинән йөклө ҡалғанмын. Шул йөгөмдән ҡотолоу өсөн Өфөгә килгәйнем, духтыр биш йөҙ тәңкә аҡса һорай», — тип бәләһен һалды. Ундай аҡсаны таба алмаясағымды әйткәйнем, теге бисә асыулана башланы. Үҙеңә үпкәлә, ти. Бисәңә һөй-

ләһәм, унан һиңә көн булмаясаҡ, эшеңдән дә ҡыуҙыртасаҡмын, ти. Шаһит булырҙай кешеләрем дә бар, ти. Сабый тыуһа, суд аша элимент юллап, ғүмерең буйы елкәңде кимерәсәкмен тигәс, ҡотом алынды.

— Биш йөҙ тәңкәне тәки табып бирҙеңме? — тип һораны Мөхәммәтҡазы.

— Бирҙем, кәнишнә.

— Шуның менән ҡотолдоңмо?

— Ҡотолоп булманы шул! — Иҙрисов, йөҙөн сырылтып, көләмһөрәне. — Башыңа бәлә төшһә, йәһәт кенә бөтә буламы? Гөлниса миңә ҡабат килде. Ул килеүендә өс йөҙ, иң аҙаҡҡыһында дүрт йөҙ тәңкә аҡсамды алып китте...

Иҙрисовты тыңлаусылар ах та ух ҡысҡырышты:

— Яман һемәйткән икән!

— Үәт яуыз бисә!

— Командировкаң бик ҡыйбатҡа төшкән бит!

— Бүтән килмәнеме ул бисә?

— Килмәне, — тине Иҙрисов.

— Буйға ҡалыуы ысын булғанмы?

— Шут белһен инде. Мужыт, алдашҡандыр...

— Бер бисә менән ауыҙы бешеүе етмәгән, уға һаман да бисә давай, — тине Байдәүләтов.

Егеттәр рәхәтләнеп көлөштө.

Иҙрисов ниҙер әйтергә теләп ауыҙ асҡайны, өлгөрмәне. Ер өҫтөн һелкендереп, тирә-яҡта дошмандың туптары ярыла башланы...

## V

Алыҫта ярылған туптарға ошоғаса ҡара-ерән ҡашҡа артыҡ иғтибар итмәне. Уның гөрһөлдәүен ҡолон сағынан билдәле булған ғәҙәттәге күк күкрәүе һымаҡ итеп тойҙо. Шуға күрә фронттың алғы һыҙығынан байтаҡ төптә булған урман эсендәге ағастарҙың береһендә бәйле көйө тыныс торҙо. Донъяны тетрәткән гөрһөлдәүҙәр был юлы яҡынайғандан-яҡынайып, төбө-тамыры аҡтарылған ағастарға буталып ер ҡуба башлағас, аңлайышһыҙ күренешкә ул аптырап ҡараны. Һәр гөрһөлдәүҙән һуң ҡуйы төтөн менән туҙанға солғанған эргәләге аттар, аҡылдарынан шашҡан шикелле, ҡоторонон кешнәй-кешнәй, күҙ алдында өҙгөләнеүҙәрен, ергә тәкмәсеүҙәрен, иҫән ҡалғандары, теҙгендәрен өҙөп ситкә тартылған ыңғайы, ҡасып ҡотолорҙай урын таба алмайынса төрлө яҡҡа сабышыуҙарын күргәс, ҡара-ерән ҡашҡаның да ҡото осто. Был бәлә үҙен ситләп уҙмаясағын аңлап, ул асыулы хорһолданы, аяғы аҫ-

тындағы ерҙе сапсый-сапсый, һөрән һалып кешнәне. Шунда ла хужаһы ярҙамға килмәгәс, ауыҙлығы йыртҡан ирендәре һыҙлауын һиҙмәйенсә, ситкә тартылды. Ана, туптар бөтөнләй яҡында ярыла башланы. Ер өҙлөкһөҙ тетрәй, ҡалтырана, әле бында, әле тегендә юғарыға урғылып сайҡала... Утлы өйөрмә араһындағы сауҡаға бәйле ҡара-ерән ҡашҡа үлемдән нисек тә булһа ҡотолорға, тере ҡалырға тырышып, бер туҡтауһыҙ тыпырсынды. Ситкә тартылып-тартылып та бәйле урындан ысҡына алмағас, асыуы ҡабарып, сауҡаны кимерергә тотондо. Шул саҡ туптар ярылыуҙан туҡтаны. Ләкин ҡара-ерән ҡашҡа ғына йәһәт тыныслана алманы. Көслө шартлауҙар ваҡытында ҡайҙалыр боҫоп ятҡан коновод күренде. Ул сауҡаға бәйләнгән теҙгенде сисеү менән, ат ситкә тартылды. Атты ебәрмәҫкә тырышҡан коновод ҡуш ҡуллап йүгәнгә йәбеште һәм ярһыу ҡара-ерән ҡашҡаның мороно тәңгәлендә аҫылынды. Әммә ат уға буйһонорға теләмәне, ҡапыл ситкә янтайҙы. Асыу менән коноводты ергә бырағытып, ул тәрән соҡор аша һикерҙе һәм туптар төшөп ярылған ваҡытта ботаҡтары тураҡланған ағастар араһында юғалды.

— Олатайҙың [1] атын тотоғоҙ!..

Коновод ҡысҡырған тауышҡа иғтибар итмәйенсә, кавалеристар туптар ярылғанда иҫән ҡалған аттарҙы тота алмай ыҙаланды.

Бәйҙән ысҡынған ҡара-ерән ҡашҡа бер ерҙә лә туҡталып торманы, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, тирә-яҡҡа һағайыулы ҡарана-ҡарана, һаман сабып барыуын белде. Алда емерек ылауҙарҙы, бик күп йөк машиналары яныуын, тупраҡ араһындағы мәйеттәр менән яралыларҙы күргәс, ҡапыл һиҫкәнеп, уңға боролдо. Бер урындан икенсе урынға сабып байтаҡ йөрөгәндән һуң, дивизия командирының ышыҡ урындағы блиндажына табан ынғайланы. Ишек янында торған һаҡсыға ун-ун биш аҙым самаһы ара ҡалғас, аҙымын яйлатып, кешнәп ебәрҙе. Шунда ла хужаһы блиндажынан сыҡмағас, ерҙе сапсып бышҡырҙы-бышҡырҙы ла, башын һалындырып, уның артынан ҡыуып килгән коноводҡа ҡаршы атланы.

Туптар төшөп ярылғанда үлемдән саҡ ҡотолған коноводтың да йөҙө бик ныҡ үҙгәреп, күҙҙәре ҡурҡыу ҡатыш ялтлай ине.

Йөҙөндә йән әҫәре ҡалмаған, алйыған коноводтың ҡултығы аҫтына мороно менән терәлгән ҡара-ерән ҡашҡа, ныҡлап тыныслана алмайынса, һаман ҡалтыранды. Уның күҙҙәренән һығылып сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк йәш тамсыла-

[1] Шайморатовты күпселек башҡорттар «олатай» тип йөрөткән.

рының ергә һарҡыуын һәм ауыҙлыҡ йыртып ныҡ шешенгән ирендәренә ҡан ҡатыуын күргәс, коновод үҙе лә илап ебәрерҙәй хәлгә етте.

«Ҡара-ерән ҡашҡа илай! Кеше һымаҡ, хайуан да күҙ йәштәрен түгеп илай белә икән! Әх, малҡайым, бахырҡайым! Ҡәһәр һуҡҡан фашистар арҡаһында һеҙгә лә күпме ыҙалыҡтар кисерергә тура килә бит!» — тигән уй менән аттың муйынынан һыйпаны, иркәләне, һөйҙө, һыртындағы тупраҡ ҡатыш туҙанды таҙартты, бер яҡҡа ҡыйшайған эйәрҙе төҙәтте, өҙгөләнгән теҙген осон ялғаны.

— Былдай хәлдәр күп булыр әле, сыҙарға тырыш, малҡай! Бер күнегеп алһаң, артыҡ ҡурҡмаҫһың. Һиңә түгел миңә лә ҡыйын, бик ҡыйын, — тип һөйләнде ул үҙ алдына.

Коноводтың нимә әйтеүен аңламаһа ла, уның яғымлылығы ҡара-ерән ҡашҡаға ыңғай тәьҫир итте һәм тынысландырҙы.

Бөтә ерҙә тынлыҡ урынлашты.

Тиҙҙән дошман һөжүме ҡабатланасағын һиҙеп, коновод ҡара-ерән ҡашҡаны хәүефһеҙерәк урынға алып барҙы. Әммә ат әүәлгесә тыныс тора алманы. Ниндәй ҙә булһа тауыш сыҡҡан һайын тертләне, ҡалтыранды, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, тирә-яҡҡа һағайыулы ҡараны. Уның башы әйләнеүе, ҡолағы геүләүе һаман баҫылманы, ирендәре һыҙлауы йөрәгенә үтте, тамағы ла сарсап кипте. Уралға кире әйләнеп ҡайтып, танһығы ҡанғансы тау йылғаһы һыуын эсергә мөмкинлек булһасы!.. Сит ерҙәрҙә, бәлки, оҙаҡ йөрөмәҫтәр. Ниңәлер туҡталмай бер урындан икенсе урынға йөрөгән кешеләрҙең йомошо бөткәс тә, улар киреҡ ыңғайлар һымаҡ булып тойолдо ҡара-ерән ҡашҡаға...

Йәйрәп ятҡан тыуған иленә тиҙ генә әйләнеп ҡайта алмаясаҡтарын, бөгөнгө шикелле утлы өйөрмә, ҡот осҡос күренештәр, йән тетрәткес төрлө кисерештәр алда күп, бик күп тапҡыр ҡабатланасағын ҡайҙан белһен инде мәхлүк йән?

## VI

Артиллериянан һуң дошман атакаға мотлаҡ күтәреләсәген белгән дивизия командиры Шайморатов, ҡара-ерән ҡашҡаһы яҙмышы тураһында иҫенә лә төшөрмәйенсә, икенсе эшелондағы майор Макаев кавполкының һигеҙенсе кавалерия корпусы командиры резервына күсерелеүен һәм көстөң аҙ ҡалыуын ауыр кисерҙе. Ныҡ һирәгәйгән Күсимов менән Нафиҡовтың полктары тулыландырылмауы, һуғыш ҡоралдарының етешмәүе, урманда йәшерелгән күп

кенә аттарҙың ҡырылыуы арҡаһында дошман һалдаттарының ҡыҫымына сыҙауы ҡыйын буласағы мәғлүм. Фашистарҙың сираттағы атакаһын кире ҡағыуы ҡатмарлы, үтә ауыр буласаҡ!..

Артиллерия уты баҫылыуға күп тә уҙманы, гитлерсыларҙың атака башлауын күҙәткән полковник Шайморатов артиллерия дивизионы командирына ут асырға бойорҙо. Беҙҙең туптар менән миналар бер-бер артлы ярыла башлағас та, дошман һалдаттары төрлө яҡҡа һибелде, тарҡалды. Шул мөмкинлектән файҙаланған беҙҙең БТ-7 танкыларыбыҙ алға елдерҙе. Улар артынса кавалеристар ҙа ҡуҙғалды.

Окоптан Олым йылғаһы буйындағы оҙон ҡамыллы арыш араһына ялға күсерелгән кесе лейтенант Яйыҡбаевтың пулемет расчеты менән лейтенант Мәмбәтҡоловтың [1] эскадрондары ла юл буйлап сигенеүсе немецтарҙы аяуһыҙ ҡыйратыуҙары, лейтенант Әминев эскадронының уларҙы йылға аръяғына тиклем эҙәрләүе, полк комиссары Нәзиров менән политрук Фәхретдинов яугирҙарының контратакаға берҙәм күтәрелеүе хаҡында белгәс, полковник Шайморатовтың күңеле күтәрелде.

Телефон шылтыраны. Элемтәсе трубканы һондо.

— Иптәш полковник, һеҙҙе?

— Кем?

— Майор Нафиҡов.

Башҡорт кавалерия дивизияһына командир итеп тәғәйенләнгәндең иң беренсе көндәренән башлап башҡортса өр-яңынан өйрәнергә мәжбүр булған Миңлеғәле Минһажетдинович, телефон трубкаһын ҡулына алғас та «тыңлайым» тип әйтәһе урынға «ишетәм» тигәс, уның эргәһендәге элемтәсе көлөмһөрәне.

294-се полк командиры менән һөйләшеп бөткәс, полковник Шайморатов дивизия штабы начальнигы Голеневҡа ҡараны.

— Иван Иванович, майор Күсимов полкының өсөнсө эскадроны дошманды уңышлы атакалай икән, ә беренсе эскадроны сигенгән. Шунан файҙаланған гитлерсылар майор Нафиҡов полкының уң яҡ флангыһына үтеп ингән! Дошман һалдаттарының беҙҙең тылда икәнлеген белгәс, 106-сы һәм 107-се уҡсы бригадаларҙа ла паника башланған. Улар, беҙҙең штабҡа һәм Нафиҡовҡа хәбәр итмәйенсә, үҙ рубеждарын ҡалдырып киткән. Хәҙер 294-се кавполктың флангылары асыҡ. Ни эшләйбеҙ?

---

[1] Мәмбәтҡолов хәҙерге көндә Сибай ҡалаһында йәшәй.

Полковник Голенев, фекер туплап, уйға ҡалыбыраҡ торҙо.

— Беҙҙең берҙән-бер таянысыбыҙ артиллеристарҙа, Миңлеғәле Минһажетдинович.

— Танкистар менән бәйләнеш бармы?

— Бар. Әммә беҙҙең ҡарамаҡтағы танкыларҙың дүртеһе гитлерсылар тарафынан яндырылды, ҡалған өсөһө бензинһыҙ тора.

— Башҡортостанда нефть сығарып, Башҡорт кавалерия дивизияһына беркетелгән танкыларҙың горючийһыҙ тороуҙары ғәрлек!

Полковник Шайморатов артиллеристарға утты икеләтә көсәйтергә бойорҙо һәм дивизия ҡарамағындағы саперҙар менән химия эскадронын һуғышҡа индерергә мәжбүр булды.

Ҡараңғы төшкәс, һигеҙенсе кавалерия корпусы командирының рөхсәте менән полковник Шайморатов Башҡорт кавалерия дивизияһын яңы урынға күсерҙе, ә икенсе көндөң таңында Малые Борки ауылы тәңгәлендә немецтарға ҡаршы һуғышыусы майор Нафиҡов полкына ярҙамлашыу өсөн 275-се кавполк менән махсуслаштырылған хәрби частарҙы күтәрҙе. Ошо ярҙамдан файҙаланып Нафиҡовтың 294-се кавполкы ҡамауҙан сыҡҡас, гитлерсыларға һиҙҙермәйенсә ул үҙ дивизияһын Опухтино—Борки—Плехановка рубежына күсерҙе һәм шунда оборона тоторға ҡушты.

Һигеҙенсе кавалерия корпусының һул яҡ флангыһындағы Урицкое—Александрово—Бибиково йүнәлешендә һөжүм итеүсе немецтар Воронежды төньяҡтан урап уҙырға ниәт тотто, ләкин обороналағы ҡыҙыл кавалеристарҙың көслө утына эләкте һәм, ҡанһырап, ҡат-ҡат ҡабатланған атакаларын туҡтатырға мәжбүр булды.

Аҙна буйы барған дәһшәтле алыш әкренләп баҫылғас, бик күп командирҙарын һәм рядовой кавалеристарын юғалтҡан 112-се Башҡорт кавалерияһын Беренсе гвардия үкселәр дивизияһы алмаштырҙы. Әммә башҡорттарға ял итергә тура килмәне. 8-се кавалерия корпусы командирынан яңы бойороҡ алынды һәм Башҡорт кавалерия полктары урындарынан ҡуҙғалды.

Кешеләргә билдәһеҙ маршрутта төнө буйы барҙылар. Киҫәнән бирле туҡталмай ямғыр яуа. Юлдар иҙелеү сәбәпле, аттар бата-сума барҙы. Эйәр өҫтөндәге егеттәр ҙә нык еүешләнде, күшекте. Ауыр йөк тейәлгән арбаларҙың тәгәрмәстәре, тубығына саҡлы батып, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Йөк машиналары ла, батҡаҡлы урындарҙан үтә алмайынса, зыр әйләнгән артҡы тәгәрмәстәре менән батҡаҡты

сәсрәтә-сәсрәтә, өҙләкһеҙ ҡалтырана, әллә ниндәй йәмһеҙ тауыштар сығарып шыңшый, зыйлай, ажғыра.

— Машиналарҙы сығарышырға ине, — тине дивизияның комиссары Нәзиров, шоферҙарҙы йәлләп.

Уның менән Шайморатов ризалашманы:

— Машиналар менән аҙапланырға ваҡыт юҡ, Мөбәрәк Зиганиевич!

Шайморатовтың атына үҙ атын ярышлап атлатҡан дивизия штабы начальнигы Голенев, саҡ ҡына артта ҡалыбыраҡ килгән политбүлек начальнигы Абдуллин менән дивизияның комиссары Нәзировҡа боролоп ҡараны ла, бер ни өндәшмәйенсә, колоннанан ситкә сыҡты. Дивизия командиры ла уның менән бергә тороп ҡалды һәм, адъютанттар, ординарецтар, коноводтар, штабсылар уҙып киткәс, 275-се кавполк башында килеүсе майор Ҡусимовты саҡырып алып, ни хаҡындалыр ҡыҙыу һөйләшә башланы.

Төндә лә туҡталып ял итмәнеләр.

Иртәнге яҡты беленгәндә генә Озерки һәм Лобановка исемле ауылдар эргәһендәге урманға көс-хәлгә барып еттеләр. Шунда туҡталыу менән саперҙарҙың бер төркөмө блиндаждар, траншеялар ҡаҙҙы; икенселәре нығытмалар өсөн йыуан-йыуан ағастарҙы киҫеп ташыны; өсөнсөләре сәнскеле тимерсыбыҡтар һуҙҙы...

Төнө буйы керпек тә ҡаҡмай юлда килгән һыбайлыларға ла бында ял эләкмәне. Полковник Шайморатов, Ҡусимов менән Нафиҡовты саҡыртып, 275-се кавполкҡа Озерки һәм Голосновка йүнәлешендә, ә 294-се кавполкка Лобановка менән Никольский ауылдарына табан һөжүм башларға бойорҙо.

Майор Нафиҡов үҙ эскадрондарын шул сәғәттә үк дошманға ҡаршы атакаға күтәрҙе. Разведчиктар алдан әҙерләгән урындан сабышҡан ваҡытта дошман автоматсыларының көслө ут ағымына эләккән кавалеристарҙың бер нисәһе ергә тәкмәсте, ҡалғандары туҡталмайынса алға ябырылды.

Ҡавалеристар ярһыу алышты. Улар дошмандың икенсе траншеяһын һуғышып алғас, ҡул һуғышы башланды.

Ҡыҙылармеецтар менән гитлерсылар бергә буталып алышҡан саҡта кем кемде тәкмәстерә һуғыуын, йәки штыгы менән сәнсеп үлтереүен дә майор Нафиҡов аңлай алманы. Сөнки ул үҙе лә әле ҡылыс, әле револьвер менән һуғыша ине.

— Командир, һаҡлан! — тип ҡысҡырған тауыш та һуғыш шауҡымында юғалып ҡалды. Өс яҡлап ҡыҫырыҡлаусы немецтың береһенең башына приклад менән тондороп, икенсеһенең күкрәгенә штыгы менән ҡаҙаған егет-

тең кем икәнлеген танығас ҡына, үҙенә ҡысҡырып өндәшеүсе политрук Фәхретдинов Хәйретдин икәнлеген белде. Улар икәүләп бүтән урында алышыусы кавалеристарға тағы ла ярҙамға ташланды.

Башҡорттарҙың ҡыҫымына сыҙай алмаған гитлерсылар сигенә башлағас та, ныҡ ярһыған майор Нафиҡов эскадрон командирҙарына бойорҙо:

— Туҡталмаҫҡа!.. Фашистарҙы артабан эҙәрләргә!..

Беренсе эшелондағы Әлибаевтың, Сирегоровтың, Мирсаяповтың һәм икенсе эшелондағы Колесниктың эскадрондары алға ябырылды. Әлибаевтың эскадроны әрәмәлектең төньяғына үтеп ингәс, дошман һалдаттары күҙ асҡыһыҙ ут асты. Ике яҡлап атыш башланды.

Майор Нафиҡов икенсе эшелондағы эскадрон командирына бойорҙо:

— Колесник, Әлибаевҡа ярҙам ойоштор!

— Есть!..

Колесник һыбайлылары барып еткәс тә, көслө ҡыҫымға сыҙай алмаған немец автоматсылары сигенергә мәжбүр булды. Шул уҡ ваҡытта Сирегоров менән Мирсаяповтың эскадрондары әрәмәлекте урап уҙғас, Лобановкаға табан ҡасып барыусы дошман һалдаттарын эҙәрләне.

Колесник менән Әлибаевтың эскадрондары килеп ҡушылыуын көтөргә теләмәйенсә, майор Нафиҡов менән полк штабы Лобановкалағы немецтарҙы ҡыҫырыҡлап сығарған Сирегоров менән Мирсаяпов эскадрондары артынан барҙы. Ләкин, көслө ут ағымына эләгеп бүленеп ҡалған ике эскадрон килеп етмәүенән файҙаланып, немецтар үҙҙәре контратакаға күтәрелде һәм ҡыҙылармеецтарҙы Лобановка ситендәге уйһыулыҡҡа сигенергә мәжбүр итте.

Көн кискә һарҡты. Әлибаев менән Колесник эскадрондары һаман юҡ. Уларҙың килеп етеүен көтөп, тик ултырырғамы? Дивизия командирының бойороғо буйынса, Лобановка ауылы немецтарҙан таҙартылырға тейеш!

Аттарын әрәмәлектә йәшереп, үҙҙәре өсөн окоп соҡоған ҡыҙылармеецтарҙың тамағын туйҙырырға ҡушты ла, төрлө яҡҡа ебәрелгән разведчиктарҙың килеүен көтөп түҙемһеҙләнгән майор Нафиҡов үҙенең эргәһендә ултырған полк штабы начальнигы майор Юренкоға ҡараны.

— Политрук Фәхретдинов иҫәнме?

— Иҫән.

— Уны яҡшы беләһеңме?

— Дивизия ойошторола башлағандың беренсе көндәренән үк.

— Һуғышҡа саҡлы кем булған?

— Уҡытыусы.

— Һәйбәт профессия, — тине Нафиҡов. Әлеге һуғышта үҙен үлемдән ҡотҡарған эскадрон политругын яҡындан белмәүенә үкенеп, өҫтәне: — Полк командиры була тороп, кешеләрҙе белмәүем шәп түгел!

— Үтә ҡыйыуһыҙ, баҫалҡы, оялсан, күҙгә кереп бармай ул.

— Фәхретдинов ысын батыр икән! Минең күҙ алдымда ғына әлеге һуғышта унлаған фашисты дөмөктөрҙө.

— Яугирҙың яуҙа һыналыуы шул инде, — тине майор Юренко.

— Политрук Фәхретдиновты Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлауҙы һорап, реляция яҙырға!

— Ул элгәрге һуғыштағы батырлығы өсөн наградланған орденды ла алмаған әле, Гәрәй Әхмәтович.

— Икеһен бергә алыр. Бөгөнгө һуғышта батырлыҡтар күрһәткән башҡа кешеләрҙе лә онотмаҫҡа!

Полк штабы начальнигы, планшетынан сығарған ҡағыҙға ашыҡ-бошоҡ ниҙер яҙҙы ла:

— Онотмабыҙ, Гәрәй Әхмәтович, — тине.

Разведчиктар килгәс, дошмандың ҡайҙа, ниндәй ут нөктәләре урынлашыуы хаҡында картаға ниндәйҙер билдәләр яһағас, майор Нафиҡов уйға ҡалды.

— Фрицтар төндә һуғышырға яратмай, тиҙәр. Шуны һынап ҡарайыҡ әле: ҡараңғы төшкәс тә Лобановка ауылына һөжүмде ҡабаттан башлайбыҙ!

— Беҙҙең көс самалы, иптәш майор... — Штаб начальнигы Юренко икеләнде. — Әлибаев менән Колесниктың эскадрондарын көтәйек.

— Лобановка ауылын беҙ немецтарҙан таҙартҡан саҡта улар ҡыуып етәсәк. Берәй төрлө ҡыйынлыҡҡа тарыһаҡ, Озерки ауылы янында беҙгә ярҙам итерҙәй Күсимов полкы бар.

— Күсимов полкы менән бәйләнеш өҙөлдө. Шуға күрә уларҙың ярҙамына ышаныу дөрөҫ булырмы? — тип майор Юренко шик белдерҙе.

— Беҙҙе яңғыҙ ҡалдырмаясаҡтар. Мине дивизия командиры менән тоташтырһындар!

— Рация эшләмәй, иптәш майор.

— Нишләп? Сараһын күр! — тине Нафиҡов.

Офоҡ ситенә барып байыған ҡояштың нурҙары күк йөҙөндә юйылып, тирә-яҡ ҡараңғыланғас, һалҡынса дымлылыҡ артты, тын алыуы ла еңеләйеп ҡалғандай тойолдо.

Майор Нафиҡов ике эскадрон командиры менән политруктарына алда торған маҡсатты аңлатты:

— Лобановка ауылына аңғармаҫтан һөжүм итеп, дош-

мандың ут нөктәләрен ҡыйратырға һәм дошман һалдаттарын ҡырырға!..

Сиреғолов менән Мирсаяпов командалығындағы эскадрондар шунда уҡ атакаға ташланды. Тиҙ арала төньяҡтағы ҡыуаҡлыҡтар араһында урынлашҡан дошмандың ике артиллерия һәм ике миномет батареяларын ҡыйратып, улар Лобановка ауылындағы гитлерсылар менән алыша башланылар...

Ике эскадрондың уңышлы һөжүме менән артыҡ мауығып, майор Нафиҡов үҙенең арттағы эскадрондарынан бөтөнләй айырылыуын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Лобановка немецтарҙан таҙартылғас та, ауылдың төньяҡ-көнбайыш тәңгәлендәге ҡалҡыулыҡта көслө дошман утына ҡаршы килә алмайынса бүленеп ҡалған Әлибаев менән Колесник эскадрондарын алып килеү өсөн майор Нафиҡов уларҙың һәр ҡайһыһына ун бишәр һыбайлыны ебәрҙе. Шул уҡ ваҡытта ул дошмандың ут нөктәләрен майор Күсимовтың һыбайлылары ҡыйратасағына һәм һөжүм итеүсе 294-се кавполк эскадрондарының флангыларын һаҡлаясағына ныҡ ышана ине.

Ярҙам килеүен көтөп тормайынса, Сиреғолов менән Мирсаяповтың эскадрондары таш өйҙәрҙә пулеметтар һәм автоматтар менән урынлашҡан дошман һалдаттарын ҡыҫрыҡларға тотондолар.

Һуғыш барышын көсөргәнешлек менән күҙәткән майор Нафиҡов эскадрон командирҙарына яңынан-яңы бойороҡтар тапшырҙы:

— Мирсаяпов, бер төркөм һыбайлыларҙы ебәреп, сигенеү юлын быу! Сиреғолов, ҡыйыҡтағы пулеметты юҡ итергә!..

Таң беленгәндә Лобановка ауылы гитлерсыларҙан таҙартылды. Ләкин күптән килеп етергә тейешле Әлибаев менән Колесник эскадрондары оҙаҡланы. Һул флангыла Озерки ауылына һөжүм итеүсе Күсимовтың 275-се кавполкынан да һаман хәбәр юҡ, уларға һәм дивизия штабына ебәрелгән элемтәселәр ҙә кире әйләнеп ҡайтманы.

Төнгө һуғышта полк штабы начальнигы майор Юренконың, өс взвод командирының, егерме биш һыбайлының һәләк булыуына һәм төп көстән айырылған ике эскадрондың ауыр хәлдә икәнлегенә эсе бошҡан Нафиҡов, Сиреғолов һәм Мирсаяпов менән кәңәшләште лә политрук Фәхретдиновты саҡыртты.

— Хәйретдин туған, үҙең теләгән ике егетте комэскадрон Сиреғоловтан һорап ал да, хәҙер үк дивизия штабына! Лобановка ауылын һуғышып алғандан һуң ниндәй ҡатмарлы хәлдә ҡалыуыбыҙҙы дивизия командирына йәки

штаб начальнигы Голеневҡа тапшыр һәм тиҙ арала кире әйләнеп ҡайт, — тип политрукка уңышлы юл теләне.

Дивизия менән бәйләнеш булдырыу өсөн ебәрелгән политрук Фәхретдинов та, элгәре ебәрелгән кешеләр шикелле, эҙһеҙ юғалды. Уны көтөп, көн үтте. Яңынан эңер яҡынлашты. Баш осо тәңгәленән яңғыҙ дошман самолеты осоп уҙҙы. Алыҫта авиабомбалар ярылыуы, ялҡынлы утҡа солғанған бензоцистерналарҙың яныуы күренде, һирәк-мирәк автоматтарҙан атҡан тауыштар ишетелде.

Төн уртаһында барлыҡ ерҙә тынлыҡ урынлашты.

Арып-талыуҙан да бигерәк берҙән-бер ныҡлы ышанысы булған политрук Фәхретдиновтың ҡасан әйләнеп килеүен, дивизия командирынан йәки Колесник менән Әлибаев эскадрондарының ярҙамға килеп етеүен көтөп йонсоған полк командиры керпек тә ҡаҡманы. Дежур вазифаһын башҡарған взвод командиры Искәндәровҡа Лобановка тирәһендәге һаҡты көсәйтергә, элемтәселәр килһә, йәки бүтән төрлө мәшәҡәт тыуһа, үҙен мотлаҡ уятырға ҡушып, ташландыҡ хәлдәге буш өйҙә серем итеп алырға булды.

Эйәренә һалып йөрөй торған күн мендәргә башын терәп күҙҙәрен саҡ йомғайны, Нафиҡов ҡыштырлаған тауышҡа һикереп торҙо.

— Ни булды?

— Листовкалар, иптәш майор! — тине баяғы дежур взвод командиры.

— Листовка? Ниндәй листовка? Ҡайҙа, бир әле, — тип майор Нафиҡов ҡағыҙҙарға күҙ йүгертеп сыҡты:

«Большевиктар башҡорт халҡына көн күрһәтмәй, иҙә, уның әҙәбиәтен, сәнғәтен, боронғо культураһын юҡҡа сығара. Беҙҙең яҡҡа сыҡһағыҙ, һеҙгә ысын азатлыҡ килтерәбеҙ».

Шул һүҙҙәрҙе уҡығас, Нафиҡовтың тәне буйлап тоҡ үткәндәй булды.

— Беҙгә ниндәй «азатлыҡ» килтереүҙәрен бик яҡшы беләбеҙ, — тине ул, ярһып. — Кешеләр йоҡлаған ваҡытта барлыҡ листовкаларҙы йыйып яндырырға!

— Листовкаларҙы Мирсаяпов менән Сиреғолов йыйҙыртты, иптәш майор!

— Ниңә тәүҙә миңә әйтмәнең?

— Һеҙҙе борсорға теләмәгәйнем, иптәш майор, — тине Искәндәров.

— Бының өсөн хәҙергә шелтә һиңә! Ҡабатланһа — ҡатырағы булыр!

Лейтенант Искәндәров киткәс, майор Нафиҡов таң яҡтыһында хат яҙырға ултырҙы.

«Зоя, йәнем минең! Һиңә һәм балаларға йөрәгемдән урғылып сыҡҡан һағышлы сәләмдәремде ебәрәм», — тип ҡатынына хат яҙа ғына башлағайны, эскадрон командиры Сиреғолов килеп инде.

— Иптәш майор, беҙ ҡамауҙа! Ике батальон самаһы немецтар... Минометтары ла бар!

Полк командиры ҡаушап ҡалды.

— Тимәк, беҙҙең һул яҡтағы күршебеҙ Күсимовтан өмөт юҡ! Флангылар асыҡ. Ике эскадроныбыҙҙы көтөүебеҙ ҙә бушҡа! — тине ул, башҡаларҙан айырылып, ашығыс алға китеүенә әрнеп.

— Хәҙер ҡалайтырға, иптәш майор?

Политрук Фәхретдиновтың дивизия штабына имен-аман барып етәсәгенә һәм полковник Шайморатов үҙҙәренә ашығыс ярҙам ойошторасағына һаман да өмөтөн өҙмәгән полк командиры бойорҙо:

— Лобановка ауылынан сигенмәҫкә, дошман һалдаттарына ҡаршы ҡамауҙа көйө һуғышыуҙы дауам итергә!

— Боеприпастарһыҙ нисек һуғышырға, иптәш майор? — тип һораны эскадрон командиры Сиреғолов.

— Трофейға алынған ҡоралдарҙы һәм боеприпастарҙы файҙаланырға! — тип майор Нафиҡов ике эскадрондан иҫән ҡалған һыбайлылар менән немецтар һөжүмен кире ҡағырға әҙерләнде.

Көн томра.

Урам һуғышы барған ваҡытта һәләк булған кавалеристарҙы һәм үле аттарҙы ерләргә өлгөрмәгәнлектән, бөтә ергә һаҫыҡ еҫ таралды.

Миналар шартлауы баҫылғас та, гитлерсылар атакаға күтәрелде.

— Приказһыҙ ут асмаҫҡа, — тине полк командиры.

Дошман һалдаттары ҡыймылдашыуы күренгәс тә, кавалеристарға ауыл ситендәге өйҙәрҙең ҡыйығы аҫтына йәшеренергә ҡушып, егермеләп боецты үҙе артынан эйәрткән майор Нафиҡов ауыл урамы буйлап сигенде.

Еңел уңышҡа өлгәшеүгә ҡыуанған немецтар эҙәрләүҙе көсәйтте, һаҡһыҙлана төшөп, ауыл уртаһына барып еткәс, өй ҡыйыҡтары аҫтында йәшеренеп ултырған егеттәр уларға тоҫҡап көслө ут асты. Сигенеп барыуҙан туҡталған майор Нафиҡов төркөмө лә, гранаталар ташлап, мылтыҡтарҙан ата-ата, дошман һалдаттарына ҡаршы ташланды.

Бындай хәлде көтмәгән гитлерсылар, мәйеттәр менән яралыларҙы урам уртаһында ҡалдырып, кире сигенде.

Бер ҡайҙан да ярҙам килмәйәсәге тамам асыҡланғас, артабан Лобановка ауылында ҡалыуы мәғәнәһеҙ һәм хәүефле ине. Шуға күрә майор Нафиҡов ике эскадрондан

ҡалған кавалеристарҙы ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүлде. Уларҙың һәр ҡайһыныһына командир тәғәйенләне лә, билдәләнгән маршрут буйынса үҙебеҙҙекеләр яғына ҡамауҙан сығырға ҡушты.

— Иптәш майор, һеҙҙең менән нисек элемтә тоторға? — тип һораны эскадрон командиры Мирсаяпов.

— Ҡамауҙан мин иң аҙаҡтан сығам!

— Ниңә һеҙ? Ниңә мин ҡалмайым?

— Бойороҡто үтәгеҙ! Кесе лейтенант Абдрахманов төркөмөн ҡаршылағы дошман пулеметы расчетын ҡыйратырға ебәргәйнем. Ул төркөмдән ниндәй ҙә булһа сигнал алыу менән, үҙ маршрутығыҙ буйынса барырға!

Абдрахманов төркөмө киткән ҡалҡыулыҡ яғында тауыш-тын ишетелмәгәс, майор Нафиҡовтың борсолоуы артты. Улар ҙа берәй бәләгә тарыҡтымы икән әллә? Ҡалҡыулыҡта урынлашҡан дошман пулеметы ҡыйратылмаһа, ҡыҙылармеецтарға ҡамауҙы йырып сығыуы ҡыйынға тура киләсәк! Абдрахмановҡа ярҙам ебәрергәме икән? Юҡ, ярҙам ебәреүҙең файҙаһы теймәйәсәк! Хәҙер бик һуң... Ана, һорғолт-йәшел кейемдәге немецтар йәнә атакаға килә...

Лобановка ауылына һөжүм итеүсе гитлерсылар тылындағы ҡалҡыулыҡта бер-бер артлы гранаталар гөрһөлдәп ярылыуы ишетелде.

Ауыл осона килеп еткән немецтар, үҙҙәренең тылындағы кесе лейтенант Абдрахмановтың утына эләгеп, байтаҡ һалдатын юғалтып, ҡайҙа ҡасырға белмәйенсә, төрлө яҡҡа ташланды.

— Егеттәр, минең арттан! — тип майор Нафиҡов атына һикереп менде.

Полк командиры артынан эйәргән һыбайлылар, йәнфарман сабышып барышлай, Абдрахманов төркөмөнөң пулемет уты тарҡалдырған гитлерсыларҙы уңға-һулға сапҡылап, мылтыҡ-карабиндарҙан ата-ата, алға ябырылды.

Улар ҡамауҙы йырып сығыуға, башҡорт һыбайлылары араһында ла ара-тирә дошман миналары төшөп ярыла башланы.

Ҡавалеристарға тарҡауыраҡ барырға ҡушып ҡысҡырған майор Нафиҡовҡа мина ярсығы килеп тейҙе. Ул, сабып барышлай, каска кейгән башын һалындырып, эйәрендә бик йәпһеҙ хәлдә хәрәкәтһеҙ ҡалды һәм ҡулындағы автоматының ҡалтыраныуын һиҙҙе.

«Йәшәргә ине! Әх, бик тә йәшәгем килә! Зоям менән балаларымды, исмаһам, бер тапҡыр күрергә ине!» — тип үҙ ғүмерендә беренсе мәртәбә әрненеп-әсенеп уйларға ла өлгөрмәне, ниндәйҙер эсе нәмә күкрәген яндырып уҙҙы.

Майор Нафиҡов, башҡаса кәүҙәһен тота алмайынса, эйәренән ҡоланы. Әммә ерҙә ятҡан сағында ла иҫенән тиҙ яҙманы. Дошман миналарының шыпылап ярылыуы, мылтыҡ-карабиндарҙан атҡан тауыштар, яралыларҙың һыҡранышыуҙары, ярҙам һорап ҡысҡырышыуҙары, һәммәһе бергә буталып, йоҡо аралаш ишетелгәндәй тойолдо. Тора-бара ул аңын юғалтты...

## VII

Лобановка ауылының төньяҡ-көнбайышындағы һөҙәк ҡалҡыулыҡта дошман утына эләгеп оҙаҡ ваҡыт ерҙә ятырға мәжбүр булған 294-се полктың ике эскадроны менән берлектә майор Күсимов полкының Озерки ауылына табан һөжүме туҡтатылыу сәбәпле, корпус командиры ҡуйған бурыстың үтәлмәүен, полк командиры Нафиҡовтың, полк штабы начальнигы Юренконың, бик күп взвод командирҙарының һәм рядовой һыбайлыларҙың һәләк булыуын, дивизия штабына ебәрелгән политрук Фәхретдиновтың хәбәрһеҙ-ниһеҙ юғалыуын ауыр, бик тә ауыр кисерҙе полковник Шайморатов. Берҙән-бер йыуанысы шул: кавдивизия тейешле рубежға сыға алмаһа ла, дошман һөжүмен туҡтатты. Көстөң тиң булмауын да иҫтән сығарыу ярамай. Дошмандың уҡсылар дивизияһында ун дүрт мең кеше булһа, Башҡорт кавалерия дивизияһында ни бары дүрт кенә мең...

Башҡорт егеттәренең батырлыҡтарын күҙ алдына килтереп, полковник Шайморатов үкенеп ҡуйҙы. Фашистарҙың автоматтарына ҡаршы — хан заманындағы мылтыҡ та карабин, ҡеүәтле хәрби техникаларына ҡаршы — кеше көсө, батырлыҡ һәм атта сабышыуҙар... Хатта барлы-юҡлы БТ-7 һәм Т-26 танкыларыбыҙ ҙа был һуғыш өсөн иҫкергән, файҙаһыҙ ине. Беҙҙең, исмаһам, бер самолетыбыҙ күренһәсе! Бында Нафиҡовҡа ярҙам итмәгән Әлибаев менән Колесник һәм майор Күсимовтың кавполкы ғәйепле! Дивизия штабының оператив эш итә алмауына, эскадрондар менән элемтә булмауына, ғөмүмән, ошо хәлгә төшөүгә Шайморатов үҙен ғәйепле һананы.

Блиндаж уртаһындағы өҫтәлгә йәйеүле картанан күҙҙәрен алмайынса, ул һаман баш ватты.

— Ниңә 294-се полктың ике эскадроны менән Күсимовтың полкы майор Нафиҡовҡа ярҙам итмәне?! — тине ул, ярһып. — 275-се кавполк Озеркиҙы алырға һәм Лобановка ауылын тотоусы эскадрондарҙың флангыһын һаҡларға тейеш ине бит! Ниңә Күсимов приказды үтәмәне? Был — енәйәт!

Блиндажға дивизия комиссары Нәзиров менән штаб начальнигы полковник Голенев килеп инде.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, подразделение командирҙарын йыйып кәңәшмә уҙғарырға кәрәк.

— Иң әүәл, приказды үтәмәгән өсөн, майор Күсимовты яуаплылыҡка тарттырырға!

Дивизия командирының былай ярһығанын бер ҡасан да күрмәгән Голенев эште нисек тә булһа яйларға тырышты.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, ашығыс һығымта яһарға ҡабаланмайыҡ. Иң тәүҙә һәммәһен яҡшылап асыҡлайыҡ. Озеркиға һөжүм итергә һәм уны алырға Күсимовтың ысынлап та мөмкинлеге булмағандыр, бәлки?

— Нафиҡовҡа Лобановка ауылын һуғышып алыуы һәм уны ике тәүлек буйы ярҙамһыҙ-ниһеҙ тотоуы еңел булғанмы?

— Олым йылғаһы, Тербуны-2, Лобановка ауылдары эргәһендәге һуғыштарҙа хаталаныуыбыҙ, ысынлап та, беҙгә беренсе оло һабаҡ, — тине полковник Голенев. — Күсимовты яуапҡа тарттырырға ҡабаланмаһағыҙ ине. Ул бәғзе ваҡытта үтә дыуамал, әммә һәләтле командир!

Үҙен ҡулға алып, полковник Шайморатов ярһыуын баҫырға тырышты. Бер аҙ тыныслана төшкәс, подразделение командирҙарын йыйырға ҡушты.

Дивизия командиры, блиндажға йыйылыусыларға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, өҫтәл артынан күтәрелде.

— Күсимов менән комиссары ҡайҙа?

— Улар тиҙҙән килеп етәсәк, — тине дивизия штабы начальнигы.

— Ни тигән һүҙ ул: «Тиҙҙән килеп етәсәк?!» Фронтмы был, әллә ауыл сходымы?

Полковник Голенев нисек яуап ҡайтарырға белмәй торғанда, тышта Күсимовтың тауышы ишетелде. Полк комиссары Әлибаевты эйәртеп блиндажға ингәс тә, уң ҡулын пилоткаһы тәңгәленә күтәреп төшөргән ыңғайы Макаев эргәһендәге буш урынға ултырырға булғайны, дивизия командирының ҡәтғи тауышын ишеткәс, үрә ҡатты.

— Күсимов, һуңға ҡалыуығыҙ сәбәбен аңлатығыҙ!

— Ғәйеплемен, иптәш полковник! — тине Күсимов, ҡыҙарынып.

— Бына кемдәрҙән башлана 275-се кавалерия полкындағы хәрби дисциплинаның йомшаҡлығы, — тип уларҙы шелтәләне лә, кәңәшмәне башларҙан алда эргәһендә ултырған киң маңлайлы, оҙон оло танаулы, аҡ йөҙлө полковник менән бүтәндәрҙе таныштырҙы: — Григорий Андреевич Белов 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы коман-

диры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Уға ҡырҡ бер йәш. Ульянов өлкәһендә тыуған. Егерменсе йылдан башлап үҙ теләге менән Ҡыҙыл Армия сафында Врангельдан Ҡырымды азат итеүҙә, Украиналағы Махно бандаларын ҡыйратыуҙа ҡатнашҡан. Хәрби-политик академияны тамамлағандан һуң, кавалерия полкының комиссары булып хеҙмәт иткән. Аҙаҡтан полк командиры булған һәм Фрунзе исемендәге хәрби академияла уҡытҡан.

Шайморатов һөйләп туҡталғас, майор Макаев һикереп торҙо.

— Иптәш комдив, полковник Беловҡа һорау бирергә мөмкинме?

— Һорағыҙ!

— Иптәш Белов, һеҙ фронтта булдығыҙмы?

— Әлегәсә булырға тура килмәне, — тине Белов, аяҡ үрә баҫып. — Ҡырҡ беренсе йылдың сентябренән бирле мин Мәскәү янында урынлашҡан запастағы кавалерия полкы менән командалыҡ иттем. Фронтҡа ебәреүҙе һорап, бер нисә тапҡыр рапорт яҙҙым. Тик әле генә ошо дивизияға тәғәйенләнеүгә ирештем...

Дивизия командирынан шелтә алған Күсимов ҡына, өндәшмәйенсә, киң яңаҡлы ҡара һөрөңкө йөҙөн сырылтып, күңелһеҙ ултырҙы. Ул, ҡыҫыҡ күҙҙәрен тағы ла ҡыҫа төшөп, ҡулъяулығы менән киң маңлайындағы тир бөрсөктәрен һөртә-һөртә, эс бошорғос уйҙарына күмелде: «Бер шелтә менән генә тамамланмаясаҡ эш! Нафиҡовты ауыр хәлдә ҡалдырыуым өсөн дивизия командиры мине аямаясаҡ! Озерки йүнәлешендәге һөжүмдең уңышһыҙ тамамланыуына бер мин генә ғәйеплеме ни?..»

Ләкин беренсе һуғыш тәжрибәһен дөйөмләштереп сығыш яһаған Шайморатов башҡаса Күсимовҡа ҡағылманы.

— Беҙгә оборона тотоу, Воронежға табан ынтылыусы дошманға кәртә булыуыбыҙ менән генә сикләнергә ярамай. Беҙ актив оборона тоторға тейешбеҙ. Шуға күрә Башҡорт кавалерия дивизияһының төп бурысы: дошманға бер генә минут та тынғы бирмәҫкә, һуғышсан разведка яһап, уны ҡытыҡлап торорға, хәлһеҙләндерергә! Фронтта төп фигура — боец! Ул яуға үлер өсөн түгел, еңер өсөн күтәрелә. Шуның өсөн уны һаҡлай белергә кәрәк. Аҡыллыһыҙ саялыҡ та батырлыҡ түгел әле. Ҡылыс болғап, танкыға ҡаршы бармайҙар. Ә беҙҙә ундайҙар бар әле, — тине лә, полковник Шайморатов Нәзиров ултырған яҡҡа әйләнеп ҡараны. — Бына мин комиссар иптәш менән лейтенант Атаев взводында булдым. Димдә саҡта лейтенант Хөсәйенов урынлаштырған хәрби дисциплина взводта тағы ла нығый төшкән. Унда командирҙың күҙәтеү пункты

өс накатлы землянкала урынлашҡан. Амбразураһынан тирә-яҡ алыҫтан күренә. Траншея-окоптары тәрән ҡаҙылған. Өҫтән күренмәҫлек итеп оҫта маскировкаланған. Дошман танкыларына ҡаршы кәртәләр ҡуйылған, улар араһына миналар һалынған. Төп оборонанан тыш, дошманды алдау өсөн башҡа урындарҙа ялған траншея, окоптар ҡаҙылған, төрлө ныҡытмалар эшләнгән. Унда ағастан этмәләнгән ҡоролмалар дошман күҙенә бәрелерлек итеп асыҡ урынға урынлаштырылған. Атаев взводы шундай хәйлә менән гитлерсыларҙы дезориентировать иткән һәм улар ялған позицияны утҡа тотҡан ваҡытта боецтар икенсе урында иҫән-һау ҡалған. Бына исмаһам командир! Бөтә подразделениеларға уны өлгө итеп ҡуям һәм шулай эшләргә бойорам!

Блиндажда ултырыусылар берҙәм күтәрелеп яуапланы:

— Есть, иптәш полковник!

Кәңәшмә тамамланыу менән, командирҙар үҙ подразделениеларына китергә ашыҡты. Күсимов, блиндаж ишеге тәңгәленә еткәс, кире боролдо һәм ҡыйыуһыҙ ғына дивизия командирына яҡынлашты.

— Иптәш полковник, Нафиҡовтың үлеменә мин ғәйепле!

— Нафиҡовҡа ярҙам ойошторолмауына, дивизияла дисциплинаның йомшаҡ булыуына, һинең полктың һөжүме барып сыҡмауына иң беренсе нәүбәттә, дивизия командиры булараҡ, мин һәм минең штабым ғәйепле! Сөнки подразделение командирҙарына талапсанлыҡты кәметтем. Һинең шикелле баш-баштаҡ полк командирҙарының тотанаҡһыҙлығына, үҙҙәрен үтә иркен тотоуҙарына әлегәсә килешеп ҡараным, — тине Шайморатов, һынын ҡатырып ҡаршыһында шаҡ ҡатҡан Күсимовтан асыулы күҙҙәрен алмайынса.

Дивизия командирының ғәйепте үҙ өҫтөнә алыуын Күсимов үтә ауыр кисерҙе. Ләкин аҡланырға урын юҡлығын тойоп, китергә рөхсәт һораны.

Полковник Шайморатов, Күсимовҡа яуап ҡайтармайынса, Беловҡа өндәште:

— Григорий Андреевич, Күсимовтың 275-се кавалерия полкына барып әйләнергә теләмәйһегеҙме?

Полковник Белов, әҙерлек белдереп, кәүҙәһен турайтты.

— Ҡасан, иптәш комдив?

— Күсимов менән хәҙер китегеҙ һәм уға ярҙам итегеҙ!

Блиндажда япа-яңғыҙы ҡалғас, Шайморатов дивизияның оператив бүлеге начальнигын саҡыртты.

— Йосопов, мин һораған мәсьәләне асыҡланығыҙмы?

— Асыҡланым, иптәш полковник! Лобановка ауылындағы Нафиҡовҡа ярҙам ойошторолмауҙа 275-се полктың комиссары иптәш Әлибаев та ғәйепле, — тине Йосопов.

— Асығыраҡ әйтегеҙ!

— Озерки йүнәлешендәге һөжүм ваҡытында 275-се полктың һул флангыһындағы ике эскадрон өсөн яуаплы итеп комиссар Әлибаев тәғәйенләнгән булған. Немецтар ҡыҫа башлағас, тотҡан позицияларын ҡалдырып, ул эскадрон командирҙарына сигенергә ҡушҡан. Шунлыҡтан ҡамауҙағы Нафиҡов төркөмө ауыр хәлдә ҡалған. Ә унан алдараҡ, һөжүмде ойоштороу урынына, Күсимовҡа: «Таһир, һинең өсөн был ауылда шәп фатир әҙерләттем, уның хужабикәһе йәш, һылыу. Ул ҡатын һиңә оҡшарға тейеш», — тип записка ҡалдырған, ти.

— Әлибаевтың үҙе менән һөйләштегеҙме был хаҡта?

— Һөйләштем. Ләкин Күсимовҡа ундай записка яҙыуын тана.

— Ундай записка яҙылыуын-яҙылмауын асыҡлай алмағас, был турала башҡаса ләстит һатмағыҙ! — тип киҫәтте Шайморатов. — Оператив эш тураһында күберәк уйлағыҙ. Бында таяҡтың бер башы һеҙгә төшә. Онотмағыҙ.

Шайморатов 294-се кавалерия полкына барырға йыйналған саҡта, дивизия штабы начальнигы Голенев шылтыратты.

— Иптәш полковник, ҡыуаныслы хәбәр бар, — тине ул.

— Ниндәй?

— Фронт командующийының мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылдың утыҙ беренсе июлендә ҡул ҡуйған приказы буйынса, беҙҙең дивизияның оборона тотҡан ваҡытындағы батырлыҡтары юғары баһаланған, туҡһан ете боец орден һәм миҙалдар менән наградланған! СССР Верховный Советы Президиумы исеменән наградаларҙы тапшырыу өсөн 38-се армияның хәрби советы ағзаһы, СССР Верховный Советы депутаты генерал-майор Вороник беҙгә килергә тейеш!

Полковник Шайморатов көрһөнөп ҡуйҙы:

— Орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеүселәрҙең күбеһе был ҡыуаныстан мәхрүм бит, Иван Иванович. Үтә аяныс! Политрук Фәхретдиновтың яҙмышы һаман да билдәле түгелме?

— Юҡ. Комэскадрон Сиреғолов та политругы яҙмышына борсола, — тип яуап ҡайтарҙы Голенев.

## VIII

Майор Нафиҡовтың бойороғо буйынса дивизия штабына табан елдергән политрук Фәхретдиновтың төркөмө һө-

ҙәк ҡалҡыулыҡҡа килеп етер саҡта дошман засадаһына эләкте. Бәрелеш ваҡытында политрук менән килгән һыбайлылар ҡыйратылды, ә Фәхретдинов үҙе ҡул гранаталары шартлаған ыңғайҙа аты менән берҙә ергә ҡоланы һәм иҫенән яҙҙы.

Күпме ваҡыт аңһыҙ ятыуын ул белмәне. Немец телендә һөйләшеүҙе ишеткәс кенә бер ни тиклем аңына килгәндәй булды. Ләкин күҙҙәрен асып ҡарарға ла хәле етмәне. Сүкеш менән сүкегән шикелле сәнскеп һыҙлаған башы, уйларға, фекер туплауға мөмкинлек бирмәйенсә, өҙлөкһөҙ геүләне, аҡтыҡ көсөнән яҙҙырҙы.

Ҡайҙа ятыуын, эргәһендә кемдәр барлығын белергә теләп, Фәхретдинов ҡыйынлыҡ менән башын ҡалҡытып ҡараны. Ер өҫтө төнгө ҡараңғыға солғанғайны. Аҙаҡтан, автоматтарын күкрәктәренә аҫҡан немец һалдаттарын төҫмөрләгәс, уның йөрәген ҡот осҡос уй ҡыйпып уҙҙы: «Мин, политрук, фашистар ҡулында!»

Яҡындағы немец Фәхретдиновҡа бармағы менән күрһәтеп үҙҙәренсә ниҙер әйткәс, ҡалғандары көлөштө.

«Ҡасырға!.. Ҡасырға мөмкинлек булмаһа, фашистар менән аҡтыҡ тамсы ҡаным ҡалғансы һуғышырға!» — тигән фекергә килеп, ул билендәге ҡайышын һәрмәкләп ҡараны. Ҡобуралағы ҡоралын таба алмағас, ҡапыл хәрәкәтләнеүгә тәнен ауырттырып салҡан тәгәрәне һәм йәнә хәлһеҙләнде. Майор Нафиҡовтың бойороғо үтәлмәүе арҡаһында ҡамауҙағы иптәштәренә бер ҡайҙан, бер ниндәй ярҙам булмаясағын аңлап, үҙен әрләне: «Анра мин, алйот мин!..»

Гитлерсылар, ситкә китмәйенсә, Фәхретдиновтың баш осо тәңгәлендә тапанды. Үлтерергә ниәтләнәләр микән? Әх, аяҡ-ҡулы яраланмаған булһасы!

Немецтың береһе, атырға ҡырсынып, автоматын Фәхретдиновтың күкрәгенә тоҫҡаны. Шунан әллә ниндәй һүҙҙәр әйтеп һүгенде лә, иптәштәре эргәһенә барып баҫты.

Әкренләп кенә таң беленде.

Иртәнге талғын ел, аҡландағы сәскәләрҙе тулҡынландырып, тәмле-татлы еҫтәр килтереп таратты. Яр аҫтындағы йылғала балыҡ ҡарпыуы ишетелде. Ҡояш нурҙары менән ҡойонған алыҫ бейеклектә һайраған ҡош моңо ҡолағына салынғандай тойолдо...

Фәхретдинов ирекһеҙҙән һуғышҡа тиклемге бәхетле тормошон иҫенә төшөрҙө. Ҡайһылай күңелле, ҡайғы-хәсрәтһеҙ замандар бар ине бит! Хәйретдин малай сағында һәр яҙҙың таңынан тороп өй янындағы ҡарт ҡайын башына менә лә ҡоштарҙың ҡасан йылы яҡтан ҡайтыуын зарығып көтә торғайны. Сөнки һабан турғайы бәхет килтерә

тиган хәбәргә ышана ине. Ә инде һабан турғайының берексе моңон ишетһә, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, һорап һала торғайны. Бер аҙ үҫә төшкәс тә ҡош-ҡорт тауыштары менән тулған урындарҙа йөрөп, тәбиғәттең гүзәллегенә һоҡланды. Тыуған төйәгенә иҫән-һау ҡайтып, һөйөклө ҡатыны Минйыһаны менән бергә донъя көтөргә яҙғанмы икән?..

— Э-эй, рус, встайть! — тип ҡысҡырған немец ҡабырғаһына итек үксәһе менән типкәс, Фәхретдинов тештәрен ҡыҫып ыңғырашты.

«Яуыздар! Ҡасан дөмөгөрһөгөҙ икән!» — тип урынынан торорға булғайны, яралы аяҡтарына баҫа алмай, ергә йығылды һәм иҫенән яҙҙы.

Ҡабаттан иҫенә килгәндә, Фәхретдинов үҙе кеүек ауыр яралылар тейәлгән йөк машинаһында бара ине инде.

Фронттан алыҫлаша барған һайын, Фәхретдиновтың борсолоуы артты, тотҡонлоҡтан ҡотолоу өмөтө лә кәмене...

Соҡор-саҡырлы урындарҙан үткән йөк машинаһы һелкенгән саҡта аяҡ-ҡулы һәм башы һыҙлауынан интеккән яралыларҙың йән әрнеткес тауыштар менән ҡысҡырыуына бер кем дә иғтибар итмәне.

Машина артынан эйәреп килеүсе еңел яралы әсирҙәргә бигерәк тә ҡыйын ине. Конвойсылар улар менән бөтөнләй иҫәпләшмәне. «Шнель! Шнель!» тип екеренеү менән сикләнмәйенсә, хәлһеҙләнеп артта ҡалыусылар менән тәнтерәкләп йығылыусыларҙы атып үлтерҙеләр.

Аңы буталған минуттарҙа Фәхретдинов яраһы һыҙлауын, ыңғырашыуын һәм һаташыуын да һиҙмәне.

Иҙрәткес йәйге оҙон көн кискә һарҡҡанда ғына ауыр яралыларҙы утын шикелле тейәп килтергән йөк машинаһы ниндәйҙер ауыл осона етеп туҡтаны. Үҙҙәре йөрөй алырлыҡ яралылар сәнскеле тимерсыбыҡтар менән ҡат-ҡат уратып алынған асыҡ урынға, ә йөрөй алмаусы яралылар шундағы ат аҙбарына урынлаштырылды.

Һауыт-һаба йыуынтыһы һымаҡ шып-шыйыҡ, сирҡандырғыс өйрәне ауыҙ иткәс, нисек кенә ас булыуына ҡарамаҫтан, уны ашай алмайынса, Фәхретдинов уҡшыны, ҡоҫҡоһо килде.

— Ниңә һаҫыҡ был өйрә ишараты? Аҫтыбыҙҙағы һалам ҡатыш тиҙәк еҫе аңҡый ҙа баһа!

— Асығып үлергә теләмәһәң, ҡыйын булһа ла уны ашарға тырыш, — тине Фәхретдиновҡа эргәһендә ятҡан күршеһе, ҡан уҡмашып ҡатҡан сепрәк менән бәйләнгән яралы аяҡтары һыҙлауына түҙмәйенсә, йөҙөн сырылтып, ыңғыраша-ыңғыраша. — Үҙең ҡайһы яҡтыҡы?

— Башҡортостандан.

— Яҡташтарбыҙ икән! Мин Пермь өлкәһенән. Таныш булайыҡ: Николай Пантелеевич Розанов...

Лагерь ашын ашатҡандан аҙаҡ, ҡаты яралылар эргәһенә бер нисә әсир совет врачын алып килделәр. Тейешле эш шарттары тыуҙырылмауына һәм яралыларҙы дауалар-ҙай дарыуҙары булмауына ҡарамаҫтан, врачтар яралыларҙың хәлен еңеләйтергә, уларҙы өмөтләндерергә тырышты.

— Сыҙағыҙ, туғандар. Беҙ һеҙгә наркозһыҙ-ниһеҙ операция яһарға мәжбүрбеҙ, — тип улар марля менән мамыҡ урынына яралыларҙың бысраҡ ыштан-күлдәктәрен йәки гимнастеркаларын йыртып файҙаланды. — Иң мөһиме — һеҙҙә гангрена булдырмау һәм йәрәхәттәрегеҙҙе эренләтмәү.

Ошоға тиклем гитлерсыларҙың аттары торған аҙбар мөйөшөндә ятҡан Фәхретдинов, үҙенә сират килеп еткәс, яралы аяҡ-ҡулын ҡыймылдата ла алмауына, мейеһе һыҙлауына, башы геүләүенә һәм фекере тарҡалыуына зарланды.

— Контузия! Аяҡ-ҡул яраһы төҙәлер, һөйәгегеҙ имен. Һеҙ әле йәш, таҙа, тиҙҙән аяҡҡа баҫырһығыҙ. Тик аштан оло булмағыҙ. Аслыҡтан үлергә теләмәһәгеҙ, биргән аштарын ҡыйынлыҡ менән булһа ла бөтөрә ашағыҙ, — тине врач, тимер кружкалағы шыйыҡсаны сайпылдыра-сайпылдыра.

Икенсе аҙна аҙаҡтарында әсир совет врачтарының бүтән ергә күсерелеүе асыҡланды. Улар булмағас, яралыларҙың яҙмышы бер кемде лә борсоманы. Йөрөй алмаусылар ғына түгел, сәскеле тимерсыбыҡтар менән уратып алыныулы асыҡ һауала көнөн-төнөн йәшәүсе өс йөҙ самаһы әсир ҙә, ауыһыҙ ҡыҙҙырған көндөҙгө ҡояш эҫеһендә һыуһыҙ тамаҡтары кибеүгә, асығыуҙарына, иҫәпһеҙ-һанһыҙ осҡан серәкәйҙәрҙән, ләпәкәйҙәрҙән, күгәүендәр менән себендәрҙән таланыуҙарына сыҙамайынса, ауырып, бер-бер артлы ҡырыла башланы. Утын шикелле өйөлгән мәйеттәрҙән һаҫыҡ еҫ таралды.

Ат аҙбарындағы яралылар араһынан Розанов менән Фәхретдинов ҡына иҫән ҡалды. Улар үҙҙәре эргәһендәге мәйеттәрҙе йыйып алыуҙы һорағас, полицийский екеренде:

— Барығыҙ ҙа дөмөккәс, бер ыңғай сығарырбыҙ!

Иҫән ҡалғандар менән бергә Розанов һәм Фәхретдинов та лагерҙағы барлыҡ ауырлыҡтарға сыҙаны. Аҙаҡтан улар ҡалаға күсерелде һәм кирбес стеналы казарманың икенсе ҡатындағы лазаретҡа урынлаштырылды.

Румын һалдаттары лазаретты ғәмһеҙ һаҡланы. Шунлай мөмкинлектән файҙаланып, ҡала кешеләре лазаретта дауаланған әсирҙәргә аҙыҡ биргеләп торҙо. Сәнскеле тимерсыбыҡ аша танышҡан ун дүрт-ун биш йәштәр самаһындағы ҡыҙҙың хәстәрлеге арҡаһында Хәйретдин дә бик тиҙ һауыҡты, көс йыйҙы һәм яҡын-тирәләге партизандар отрядына ҡасыу хаҡында уйлана башланы.

Сентябрь етте. Лазареттағы бер төркөм әсирҙәрҙе, вагондарға тейәп, Германияға оҙаттылар.

— Германияла беҙҙе ниндәй ауыр яҙмыш көткәне билдәле. Поезд Украина еренән барған саҡта ҡасып ҡотолоу сараһын күрергә кәрәк, — тине Фәхретдинов.

— Дөрөҫ, аҙаҡтан ҡасыуы ҡыйын буласаҡ, — тине Розанов.

Улар уңайлы ваҡытты көттөләр.

Ҙур булмаған ниндәйҙер тимер юл станцияһына еткәс, ике тәүлек буйына эшелон ҡуҙғалмай торҙо. Ләкин әсирҙәрҙе буштан-бушҡа ашатып ятҡырырға теләмәнеләр. Уларға тимер юл буйындағы таш күмер өйөмөн складҡа биҙрә менән ташырға ҡуштылар.

Ҡөнсығышҡа табан елдергән поездар бер-бер артлы уҙып киткән һайын Фәхретдиновтың йөрәге ярһыны.

— Коля, һин әҙер тор! Ошонан да уңайлы мөмкинлек бер ҡасан да булмаясаҡ!

— Конвойҙар ныҡ һаҡлай. Уларҙан атылып үлгең киләме? — тип һораны Розанов.

— Или пан, или пропал, дуҫҡай! — тине Фәхретдинов.

Улар, сираттағы поезды көтөп, бер-береһенә яҡынырaҡ урында эшләргә тырышты.

Шәп килгән поезд яҡынлашыуы ишетелде.

Хәл иткес минутты көсөргәнешлек менән көткән Хәйретдиндең йөрәк тибеше йышайҙы, үлемдән ҡотолоу инстинкты уға ихтыяр, көс бирҙе, саялыҡ өҫтәне.

Поезд станция тәңгәлендә бер аҙ яйланы. Шуны ғына көткән Фәхретдинов менән Розанов эргәнән үтеп барыусы эшелон буйлап йүгерҙе. Артта һаҡсыларҙың ҡысҡырғаны һәм автоматтарҙан атыу тауышы ишетелде.

Фәхретдинов бер нәмәгә лә иғтибар итмәй йүгерҙе. Станцияла торған вагондар теҙмәһе аръяғында бүленеп ҡалғас, конвойсыларҙың атыуы туҡталды. Аҡтыҡ көсөн туплап алға ынтылған ыңғайҙа Фәхретдинов вагон тормозының тимер тотҡаһына йәбеште һәм юғарыға күтәрелде. Үҙенән артта ҡалыбыраҡ йүгергән Розанов дуҫына ғына ҡасып ҡотолорға насип булманы. Ул, станцияла торған составтың осона сығырға өлгөргән һаҡсыларҙың пуляһы тейеүҙән үлемесле яраланып, ергә ауҙы.

Алдағы тимер юл станцияһында поезды туҡтатасаҡтарын һәм үҙен тотасаҡтарын белгән Фәхретдинов, ярты юлды уҙғас, бер ниндәй икеләнеүһеҙ тормоз майҙанынан аҫҡа һикерҙе. Аяҡтары ергә тейер-теймәҫтән һөрөнөп йығылған саҡта муйын тамырҙары менән эсәк-ҡарындары шартлаған һымаҡ тойҙо. Елдереп уҙған поездың һуңғы вагоны күҙҙән юғалғас, көс-хәлгә ерҙән күтәрелеп, Фәхретдинов ауыртҡан тәнен тотҡолап ҡараны, ергә бәрелгәндә һыҙырылған урынға йәбешкән сүп-сарҙы таҙартты ла аҡһай-аҡһай яр буйындағы әрәмәлеккә табан ынғайланы. Ундағы йылға ҡороған икән. Ҡумырыҡ төбөндәге күләүек һыуын эсеп һыуһынын ҡандырғас, ҡараңғы төшкәнсе ҡыуаҡлыҡтар араһында йәшеренергә булды. Төндә ҡайҙа барасағы һәм кемдән ризыҡ һораясағы тураһында уйламаҫҡа тырышты. Яҡын-тирәләге ауылдарҙа йәшәүсе украиндар, моғайын, ярҙам итерҙәр әле. Иң мөһиме шул: фашистар ҡоллоғонан имен ҡотолдо!

Уй-хыялдары менән ул үҙен йәнә Башҡорт кавалерия дивизияһының эскадронында хеҙмәт итеүсе политрук дәрәжәһендә хис итте. Баш ос тәңгәлендәге аҡһыл болоттар өйөмөнөң һуҙыла-һуҙыла теткеләнеүен күҙәтеп ята торғас, Фәхретдиновты йоҡо баҫты. Төшөндә ул ҡатынын күрҙе. Ҡултығы аҫтына уҡыусы балаларҙың дәфтәрҙәрен ҡыҫтырып мәктәпкә барышлай, уның ниҙер ҡысҡырыуын ишеткәс, Хәйретдин алға ынтылды. Ләкин атларға, ҡатынына яҡынлашырға ниҙер ҡамасаулай. «Миңлейыһан, һөйөклөм, мине көт, китмә», — тип ҡысҡырған тауышы ла сыҡмай. Мәктәп тәңгәленә еткәс, Миңлейыһан артына боролоп ҡараны. Ҡулын болғап көлдө-көлдө лә үҙен ситтә көтөп тороусы ауылдашы Ғилметдиндең ҡосағына ташланды. «Ниндәй оятһыҙлыҡ! Көпә-көндөҙ, кешеләрҙән тартынмайынса, урам уртаһында үбешәләр! Бисә түгел, кәнтәй икән!» — тип баҫлығып уянғас, тауыш-тын сығармай эргәһендә баҫып торған ике немец һалдатын күреү менән Фәхретдиновтың йөрәге алынды һәм тәне әҫеле-һыуыҡлы булып китте.

«Эләктем, алйоттарса эләктем! Былар беҙҙең конвой һалдаттары түгел», — тип уйлап, ул бер ни белмәмешкә һалышты.

— Һеҙгә нимә кәрәк?

Гитлерсыларҙың береһе, телһеҙ кеше һымаҡ өндәшмәйенсә, һуҡмаҡтан барырға ымланы, икенсеһе уның арҡаһына автоматын терәне.

Юлда бер кем осраманы.

Ҡалаға барып етергә ике-өс километр самаһы ара ҡалғанда, ҡояш байый башланы.

Урман эргәһенән һуҙылған һуҡмаҡ картуф баҡсаһына тибап боролған саҡта Фәхретдинов йәнә ҡасырға ниәтләнде. Ләкин ҡоралллы һалдаттарҙан ҡасып буламы ни?

Фәхретдиновты мәктәп ихатаһында урынлашҡан хәрби штабҡа алып килделәр.

Дошман һалдатының береһе дежур немец офицерына рапорт тапшырғас, икенсеһе Фәхретдиновтың артҡы салбар кесәһенән тапҡан фотоны күрһәтте. Немец офицеры, Хәйретдиндең ата-әсәһе, ҡустыһы, һеңлеһе, кәләше менән бергә төшкән фотоһына теклэп ҡарап торҙо-торҙо ла, өндәшмәйенсә, төпкө бүлмәгә инеп китте. Унан кире сыҡҡас, ике ҡатлы төпкө бүлмәнең ишеген шар асып, Фәхретдиновҡа инергә ҡушты.

— Битте! [1]

Икенсе бүлмәнең өҫтәле артында ултырған ялтлас башлы, йыуантаҡ немец полковнигы, мундиры төймәләрен ҡаптырғылап, Фәхретдиновты фоторәсеме менән сағыштырып ҡараны. Шунан, рус телен вата-боҙа, һораны:

— Ви комиссарен или политук?

Политработниктар менән коммунистарҙы фашистар аямауы, беренсе һорау алынғас та атырға хөкөм итеүҙәре хаҡында белгәнлектән, Фәхретдинов алдашырға һәм үҙенең кем икәнлеген йәшерергә ҡарар итте.

— Мин комиссар түгел!

— Большевикмы?

— Юҡ!

— Кем? — Немец полковнигының йөҙө томрайҙы. — Комиссар булмағас, фотоғыҙҙағы гимнастерка яғаһында ни өсөн өс кубик?

— Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итеүсе өлкән лейтенант дәрәжәһендәге командирҙар ҙа өс кубик йөрөтә!

— Гут, зер гут! — Дошман полковнигының йөҙө алсаҡланды. — Ви есть ко-ман-дир? Наса немеска армии осень уважайть строй командир! — Ул яғымлы йылмайҙы. — Как фамилия?

— Фәхретдинов.

— Милләтегеҙ?

— Башҡорт.

— Хоросо, осень хоросо! — Немец полковнигы, яһалмалы көлөп, Хәйретдин Махияновичтың ҡаршыһына күсеп ултырҙы һәм бер үк һүҙҙе ҡат-ҡат әйтте: — Наса немеска армии много народ уважайть!

Дошман полковнигының кәрәгенән артыҡ кешелекле

---

[1] Битте! — рәхим ит! (*немецса*).

булып ҡыланыуы, хатта уның үткән тормошо менән артыҡ ҡыҙыҡһынмауы Фәхретдиновты һағайтты.

«Төлкөләй ниңә юхалана икән? Нисек кенә алдашһам да, еңел ризалашыуының сәбәбе ниҙә?»

Гитлерсылар индергән «яңы тәртип»кә теләктәшлек белдереүсе совет кешеләренә, бигерәк тә строевой командирҙарға, ҡарата немец командованиеһының һәр саҡ шәфҡәтле, дуҫтарса мөнәсәбәттә булыуы хаҡында өгөт-нәсихәтен ныҡығандан аҙаҡ, һүҙ йүнәлешен үҙгәртеп, дошман полковнигы аңғармаҫтан һораны:

— Немец командованиеһы менән хеҙмәттәшлек итергә теләйһегеҙме?

Фәхретдинов яуап ҡайтарманы.

Полковник һорауын ҡабатланы.

Фәхретдинов, шымып тороуҙан файҙа сыҡмаясағын аңлап, баш сайҡаны.

— Полицай эшенә мин яраҡһыҙ!

— Юҡ, полицай түгел, һеҙгә почетлы должность тәҡдим итәбеҙ, — тип немец полковнигы аңлатты: — Мосолман легионына батальон командиры кәрәк! Ризаһығыҙмы?

— Юҡ, — тип Фәхретдинов ҡырт киҫте.

Немец полковнигының йөҙө үҙгәрҙе, ләкин ул тыныслығын юғалтманы.

— Ни өсөн риза түгелһегеҙ?

— Мин хыянатсы түгел!

— Ҡайҙа икәнлегегеҙҙе оноторға ярамаҫ. — Ҡорһағын кәпәйтеп, полковник кире өҫтәл артына күсеп ултырҙы. — Беҙ ҡаршылашҡанды яратмайбыҙ!

«Мосолман легионы батальонына командир таба алмағанға минең менән былай аҙаплана икән!» — тип уйланы Фәхретдинов.

Немец офицеры текләп ҡараны.

— Фекерегеҙҙе үҙгәртергә теләмәйһегеҙме?

— Юҡ!

Дежур офицер арҡыры саҡыртылған бәһлеүән кәүҙәле әҙәм кергәс, полковник, Фәхретдинов яғына ҡарамайынса, эйәк ҡаҡты. Әйтмәйенсә лә үҙ вазифаһын яҡшы аңлаған палач оло гер кеүек тос йоҙроғо менән Фәхретдиновты иҙәнгә тәгәрәтә һуҡты, күкрәгенә типте.

— Әлегә етер, — тине полковник.

Палач артынса ишек ябылғас, немец офицеры иҙәндән күтәрелеүсе Фәхретдиновҡа төбәлде.

— Фекерегеҙ үҙгәрҙеме?

— Үҙгәрмәне!

Полковниктың әүәлге тыныслығы юғалды.

— Ниндәй тиҫкәре һин, Сталин эте! — тип екеренде лә ул Фәхретдиновты төрмәгә оҙатырға ҡушты.

Хәйретдинде унда ике тәүлек буйы тоттолар. Өсөнсө көндө, нык туҡмалғандан аҙаҡ, ул:

— Легион батальоны командиры булырға ризамын! — тип белдерҙе.

— Риза, имеш! Бына ҡасан аҡылға ултырҙы, — тип төрмәлә һорау алыусы хихылдап көлдө. — Ҡушһалар, һинең кеүектәрҙең береһен дә ҡалдырмай дөмөктөрөр инем! — Ул, ниндәйҙер ҡағыҙға ҡул ҡуйҙыртҡас, кем менәндер телефондан һөйләште лә күп туҡмалыуҙан интеккән Фәхретдиновты мосолман легионерҙары урынлашҡан казармаға оҙатты.

Хәйретдинде казармала ҡаршылаған немец майоры уның менән тәржемәсе арҡылы һөйләште:

— Герр полковник исеменән һеҙҙе мосолмандар легионының батальон командиры итеп тәғәйенләнеүегеҙ менән ҡотлайым! Тырыш хеҙмәт беҙҙә яҡшы баһалана. Һеҙгә ни бары егерме биш йәш кенә икән әле. Барлыҡ ғүмерегеҙ алда. Немец командованиеһының ышанысын аҡлаһағыҙ, бик тиҙ үрләйәсәкһегеҙ һәм фюрер ихтирамына лайыҡ буласаҡһығыҙ!

Фәхретдинов өндәшмәне.

Ҡазарма ҡаршыһындағы асыҡ урында төрлө милләт мосолмандарынан ойошторолған батальон сафҡа теҙелгәс, немец майоры менән тәржемәсеһе алға сыҡты. Ул, яңыраҡ ҡына Фәхретдиновҡа әйткән һүҙҙәрҙе саҡ ҡына үҙгәртеп ҡабатлағас, мосолман легионерҙарына батальон командиры итеп тәғәйенләнгән «обер лейтенант» Фәхретдиновҡа һүҙ бирҙе.

Фашистарға хеҙмәт итергә ризалыҡ биргән егеттәрҙең ҡыланышына асыуы ҡабарып, Фәхретдинов, нәфрәтләнде.

— Намыҫығыҙға, халҡыбыҙға, Ватаныбыҙға, туған-тыумасаларығыҙға, ата-әсәгеҙгә, һөйгәндәрегеҙгә, бала-сағаларығыҙға хыянат итеп, һатлыҡ йәнгә әйләнеүегеҙ өсөн ҡасан да булһа үкенәсәкһегеҙ, бик тә үкенәсәкһегеҙ, — тип сафта тороусы яҡташтарының Ватан-әсә алдындағы изге бурысы хаҡында һөйләгән Фәхретдиновтың һүҙҙәрен тәржемәсе әйтә башлағас та, уны немец майоры бүлдерҙе. Ниҙер ҡысҡырынып һүгенде лә, мосолмандар легионының «большевистик агитация таратыуҙа» ғәйепләнгән яңы батальон командирын ҡулға алырға ҡушты.

«Бынан кире иҫән ҡалдырмаясаҡтар!» тигән һығымта яһап, Хәйретдин эстән генә яҡты донъя менән бәхилләште.

Ғәжәп хәл: был юлы ла, яҙмышы ярлыҡап, уны иҫән

ҡалдырҙылар. Аҙна самаһы туҡмап ыҙалаттылар ҙа бер төркөм совет кешеләре менән уны Германияға оҙаттылар.

Германияға барғас, Фәхретдиновты тәүҙә Аллах лагерында тоттолар, аҙаҡтан фашистарҙың Дахау концлагерына күсерҙеләр.

Үлем концлагерының «Брама» тип исемләнгән ҡапҡаһы аша уҙған саҡта уҡ, ҡасан да булһа бынан иреккә сығасағына өмөтөн өҙөп, уны «хәбәрһеҙ юғалды» исемлегенә индереп өлгөргән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт итеүсе дуҫ-иштәрен күҙ алдына килтерҙе.

## IX

Полковник Шайморатов ҡуйған яңы һуғышсан бурыстар тормошҡа ашырылырға өлгөрмәне, таң беленгәндә фашистарҙың бер көтөү «Ю-87» самолеттары һауаны иңләп килеп сыҡты. Бөтә ерҙең аҫтын-өҫкә әйләндереп бомбалар ташлаған самолеттар китеп күҙҙән юғалғас та, дошман яуҙырған туптар һәм миналар дивизия тылындағы урманда ҡабаттан ярыла башланы. Ҡыйратылған «ветлазареттың», ундағы төрлө ҡорамалдар менән арбаларҙың ваҡ-төйәк һыныҡтары төтөнлө ер киҫәктәренә буталып һауаға урғылды. Яраланған меҫкен аттар, ҡайҙа ҡасып ҡотолор урын таба алмайынса, һөрән һалып кешнәй-кешнәй, төрлө яҡҡа сабыша...

— Ярһыған аттарҙы ездовойҙар тота алмай! Уларға ярҙамлашам, — тип яңыраҡ ҡына пулеметтың икенсе расчетына тәғәйенләнгән Мөхәммәтҡазы траншеянан сығып йүгерә башлағайны, Байдәүләтовтың асыулы тауышы яңғыраны:

— Урыныңдан ҡуҙғалма!

Мөхәммәтҡазы, тылдағы урман эсендә ҡурҡып сабышҡан аттарҙан күҙҙәрен алмайынса, соҡор төбөнә сүкте.

Гитлерсыларҙың һуңғы тубы төшөп ярылыуына ун — ун биш минут та уҙманы, кемдер ҡысҡырып ебәрҙе:

— Танкыла-аар!..

Байдәүләтов Зәки һаҡлыҡ менән күтәрелеп тирә-яҡҡа ҡараны. Әрәмәлек аша арыш баҫыуына сыҡҡан танкылар геүләүе асығыраҡ ишетелде. Улар лейтенант Гәрәев батареяһына табан килә ине.

— Үҙҙәренә үлем эҙләп баралар, — тине Мөхәммәтҡазы.

— Беҙҙекеләр ниңә шып-шым? Әллә күрмәйҙәр микән?

Иң алдағы дошман танкыларының береһе минаға эләгеп шартлағас та, лейтенант Гәрәевтың батареяһы уларға тоҫҡап ут асты. Икенсе машина, урынында зыр әйләнеп,

төтөнгә солғанды. Ҡалғандары, тиҙлектәрен кәметмәйенсә, һаман яҡынлашты. Аралар ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡара, кәмегәндән-кәмей барҙы. Бына ике йөҙ, йөҙ илле метр самаһы ғына ҡалды...

Пулеметы артында ятҡан Байдәүләтов һуғыштың хәл иткес минутын көттө. Батареялар еңерме, әллә дошман танкыларымы?

Гәрәев батареяһы йәнә бер танкыны дөмөктөрҙө. Унан арттараҡ килгәндәре, ҡапыл йүнәлешен үҙгәртеп, һул флангыға табан ыңғайланы. Уларҙың да береһе ПТР-ҙан атып яндырылды.

— Мөхәммәтҡазы, хәҙер беҙҙең сират, — тине Зәки Байдәүләтов.

«Максим»ды уңайлы ергә урынлаштырғас та ул атырға ҡабаланманы. Танкылар урғылтҡан ҡыҙғылт-һары төҫтәге ҡуйы төтөн ҡатыш туҙан араһында килеүсе дошман автоматсылары яҡынлашҡас ҡына Байдәүләтов пулеметтың гашеткаһына баҫты. Көслө пулемет утына эләгеп танкыларҙан айырылып ҡалған гитлерсылар һөжүме туҡтатылды. Ләкин шунда уҡ, һикереп тороп, улар йәнә алға ташландылар.

— Әллә иҫеректәр инде, — тине Мөхәммәтҡазы.

Дүртенсе тапҡыр лентаны алмаштырырға өлгөргән Зәки пулеметын икенсе урынға күсерҙе.

— Тиҙҙән фрицтарҙы айнытабыҙ, — тип Зәки ҡурғашлы ямғыр яуҙыра ғына башлағайны, көбәгенә патрон ҡыҫылған пулемет тынып ҡалды. Уның менән аҙапланыуы бушҡа икәнлеген аңлағас, Зәки Мөхәммәтҡазыға бойорҙо: — Фашистарҙы уң яҡтан уҙғарма! Шул тәңгәлдәге ячейкаларҙың берәйһенә күсеп, уларға ут ас, гранаталар бырғыт!

Арыш башаҡтары араһынан Мөхәммәтҡазы ситкә ыңғайланы. Илле — алтмыш метр самаһы алыҫлыҡтағы ячейкала урынлашҡас, өҙлөкһөҙ атыш, гранаталар ярылыуы, ҡысҡырышыуҙар араһында ул үҙен донъяла япаңғыҙ ҡалған һымаҡ тойҙо. Ләкин шунда уҡ уның көрәштәше иҫенә төштө, һәм ул немецтарға бер-бер артлы гранаталар быраҡтыра башланы.

— Дөмөгөгөҙ, ҡәбәхәттәр, — тип сәмләнеп ҡысҡырҙы ул граната ырғытҡан һайын.

Дивизиялағы артиллеристар танкыларҙы ҡыйратҡас, дошман минометы ут асты. Төрлө калибрлы миналар уңда, һулда, артта һәм алда төшөп ярылды. Брустверға төшкән мина ҡуйы тупраҡ өйөмөн Мөхәммәтҡазы өҫтөнә урғылтты. Үлгәнме, әллә тереме икәнлеген белергә теләп, ул торорға булғайны, хәле етмәне. Шунан, аяҡ-ҡулы, тәне

имен икәнлегенә ышанғас, тирә-яҡты һағайыулы тыңларға тотондо.

— Ниңә атыш тынды? — тип ихтыярһыҙҙан ҡысҡырып һораған ваҡытта уның эргәһенә Байдәүләтов килеп тәгәрәне.

— Әйҙә, тор! Ергә боҫҡан фрицтар ҡабат күтәрелгәнгә саҡлы китеп ҡалайыҡ!

— Ҡайҙа?

— Сигенәбеҙ!

— Приказһыҙмы?

— Оҙаҡ һатыулашма, бында беҙ икәү генә ҡалдыҡ!

Соҡор төбөнән күтәрелгән Мөхәммәтҡазы төрлө яҡҡа һаҡ ҡына ҡараш ташланы. Тапалған арыш баҫыуы уртаһында һаман төтәп янған беҙҙең өс БТ-7 һәм ҡыйратылған дошмандың һигеҙ Т-4 танкыларынан башҡа нәмә күренмәгәс, уның йөрәген ҡурҡыу солғаны.

— Нимә ҡаттың? — тип Зәки асыуланғас ҡына, Мөхәммәтҡазы урынынан ҡуҙғалды.

Аттар ҡалдырылған урманда үлектәр шығырым тулы ине. Ундағы барлыҡ нәмәнең аҫты өҫкә әйләндерелгән.

— Беҙҙекеләр ҡайҙа икән? — тип һораны Мөхәммәтҡазы.

— Ошо яҡта, — тип Зәки урман артына ымланы.

Туҙан ҡатыш әсе төтөнгә ыҫланған ер өҫтө һаҫыҡ еҫ менән тулған. Ул еҫ күңелде болғата, уҡшыта.

Дивизияның төп көсө Тербуны ауылы тирәһендә тупланған булып сыҡты. Зәки менән Мөхәммәтҡазының взводы ла шунда ине.

Санэскадронға барыуҙан ҡырҡа баш тартҡан Байдәүләтов Зәки, һыҙланыуын белгертмәҫкә тырышып, Мөхәммәтҡазы дуҫына траншея менән бруствер тирәләрен маскировкаларға ярҙамлашты.

Уларҙың баш осо тәңгәлендә «Фокке-Вульф» маркалы дошман самолеты — «рама» өҙлөкһөҙ өйрөлдө. Разведка самолетын алдатыу өсөн төп позициянан ситтә һауанан күренерлек итеп юрамал ҡаҙылған окоптарға, ячейкаларға һәм башҡа төрлө алдатҡыс нығытмаларға ағастарҙан яһалған һуғыш ҡорамалдары ҡуйылды.

Яугирҙарға төшкө аш килтерелде.

Яралы беләге һыҙлауынан интеккән Зәки, Мөхәммәтҡазы дуҫының котелогы төбөнә үрелеп ҡараны ла салбар кеҫәһенән сығарған аллюминий ҡалағын кире йәшерҙе.

— Әпәт тары өйрәһе!

Мөхәммәтҡазы ябалаҡтыҡы шикелле күҙҙәрен түңәрәкләндереп Зәкигә ҡараны.

— Ашамайһыңмы?

— Юҡ!

— Ярар, миңә бата ул, — тип көлә-көлә, Мөхәммәтҡазы икеһе өсөн бер котелокҡа һалдырып алған өйрәне ысғыҙы һыпыртырға тотондо.

— Ауырыйым, ахырыһы!

— Яраң касафатылыр, тәнең ҡыҙыу! Санэскадронға барып күрен, — тине Мөхәммәтҡазы.

— Бармайым!

Шул саҡ Байҙәүләтовты дивизия штабына саҡыртып кеше килде.

Яралы ҡулын ҡабаттан бәйләтте лә, Зәки үҙен саҡырып килгән ҡыҙылармеец артынан эйәрҙе.

Дивизия штабы тәңгәлендә уны «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының яуаплы секретары Әһел Истамғәлин ҡаршыланы.

— Байдәүләтовмы?

— Эйе!

Әһел Истамғәлин, Байдәүләтовтың ҡара-күмгел киң яңаҡлы йөҙөнә, сепрәк менән аҫылыныулы яралы беләгенә һәм көнгә уңалып төҫһөҙләнгән гимнастеркаһы күкрәгендәге «Батырлыҡ өсөн» миҙалына күҙлеге аша ҡарап, шымыбыраҡ торҙо.

— Бында килерҙән алда, исмаһам, өҫ-башыңды рәтләп, таҙартынһаңсы!

— Өҫ-баш рәтләү ҡайғыһымыни һуғышта?

— Барыбер былай килешмәҫ, Байдәүләтов, — тине Истамғәлин. — Как-никак, һинең личность менән «Красная Звезда» газетаһының махсус хәбәрсеһе, урыҫ яҙыусыһы Константин Симонов үҙе ҡыҙыҡһына!

— Уны ҡыҙыҡһындырырҙай ни эш боҙған мин? — Көтөлмәгән хәбәрҙе ишетеп, Зәки ҡурҡты.

— Белмәйем. Ҡәрәк булғаның өсөн саҡыртҡандыр, — тип Истамғәлин үҙе кеүек һонтор, ябыҡ, асҡаҡ билле күк атҡа менде. — Әйҙә, минең арттан ҡалма!

Константин Симоновтың башҡорт кавалерия дивизияһына аҙна элгәре килеүе, полковник Шайморатов эргәһендә ике көн буйы булыуы, барлыҡ полк, айырым эскадрон, взвод командирҙары һәм ҡыйыу һуғышҡан яугирҙар менән осрашып һөйләшеүе тураһында белгәс кенә, Зәкиҙең ошоға тиклемге ҡурҡыу ҡатыш борсолоуы ғорурлыҡ тойғоһо менән алмашынды: «Алама ниәт менән саҡыртмағас, һәйбәт! Ысындан да, өҫтөмдө таҙартып, йыуынырға кәрәк булған...»

Йәм-йәшел үләнле аҡланға еткәс, атын ағасҡа бәйләп, Әһел Истамғәлин артабан йәйәү барҙы. Тәрән соҡор төбөндә йыйналған взвод командирҙары, сержанттар, рядо-

вой ҡыҙылармеецтар, дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров һәм Али Ҡарнай менән дуҫтарса һөйләшеп ултырған Константин Симонов Байдәүләтов менән яғымлы йылмайып күреште.

— Һеҙҙең менән танышыуға шатмын!

Яраһы һыҙлауҙан интеккән Зәки Константин Симонов алдында уңайһыҙланды. Бер аҙ өйрәнгәс кенә яҙыусыға йәшлеге, ауылда уҙғарған тормошо, нисек хәрби хеҙмәткә алыныуы һәм гитлерсыларға ҡаршы һуғышыуы хаҡында һөйләп бирҙе.

Симонов уны ихлас тыңланы. Әлдән-әле ҡуйын дәфтәренә ниҙер ашыҡ-бошоҡ яҙҙы ла, иғтибарлы, уйсан, аҡыллы күҙҙәрен йәнә Зәкигә йүнәлтте. Иң аҙаҡтан, йылмайып, һораны:

— Ҡатынығыҙ менән хатлашаһығыҙмы?

— Хатлашам.

— Йәнә бер нәмә ҡыҙыҡһындыра, — тине Константин Симонов, «р» хәрефен һаҡаулап. — Мин танышҡан башҡорт егеттәренең һәр ҡайныһы йә йырсы, йә бейеүсе, йә ҡурайсы. Һеҙҙең ниндәй һөнәрегеҙ бар?

— Мин дә ҡурай тартам. Буш сағымда йырлаштырам да...

— Ниндәй йырҙар беләһегеҙ?

— Күпте... Күңелемә килгәндәрҙең барыһын да йырлайым!

— Берәйһен йырлап ҡарамаҫһығыҙмы?

Башҡортса бер ни аңламаған рус яҙыусыһына боронғо оҙон көйҙө һуҙып йырлауы килешерме икән тигәндәй, Байдәүләтов Зәки дивизия комиссары Нәзиров ултырған яҡҡа ҡараны.

— Йәпһеҙ булмаҫмы, иптәш комиссар?

— Булмаҫ. Белһәң, әйҙә, «Урал»ды йырла, — тине Нәзиров.

Байдәүләтов йырлай башлағас та, уға ҡурайсы ҡушылды.

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге...

Йырҙың һүҙҙәрен белмәһә лә, һағышлы зар менән һуғарылған моң Константин Симоновты тетрәтте. Ул, башҡорт халҡының үткәндәге ауыр яҙмышын, тормошон, көнкүрешен, киләсәккә ҡарата булған уй-хыялдарын сағылдырыусы көй ағышы ыңғайына тәьҫирләнеп, ҡапыл моңайҙы. Бик боронғо замандан бирле толпарҙарға атланып,

уҡ-һаҙаҡтары менән дошман яуына ҡаршы сыҡҡан башҡорт егеттәрен оҙатып ҡалған бейек-бейек Урал тауҙарын, уның тау-ташлы урмандарын, ҡош-ҡорттарын, көмөштәй сылтырап аҡҡан йылғаларын, хуш еҫле сәскәләргә күмелеүсе болон-туғайҙарын күҙ алдына килтергән рус шағиры ирекһеҙҙән Башҡортостандан алыҫтағы эҫе, иҙрәткес Воронеж яғы ерҙәре менән Урал тәбиғәтен сағыштырҙы...

Моңло «Урал» йырын мауығып тыңлаған Константин Симонов, уйсан ҡиәфәтен үҙгәртмәйенсә, тәрән итеп ҡаҙылған «ҡарлуғас ояһы»нан һуҙылған ПТР-ҙың оҙон көбәген, ҡул пулеметтарын, траншея аръяғындағы ваҡ-ваҡ ҡыуаҡлыҡтар араһында үлән утлаған эйәрле аттарҙы күҙәтте...

«Рус еренең азатлығы өсөн Емельян Пугачев менән бергә ҡулға-ҡул тотошоп көрәшеүсе Салауат Юлаевтың ейәндәре үҙ иленең азатлығы һәм намыҫы өсөн рустар менән бергә ҡабаттан дошманға ҡаршы алыша», — тип Константин Симонов «Красная Звезда» газетаһына яҙыласаҡ айырым фекерҙәрен ҡуйын дәфтәренә теркәне [1].

Ҡайҙалыр миналар ярылыуына ла иғтибар итмәй, бындай ваҡиғаларға күптәнән күнегергә өлгөргән ир-егеттәр атай-олатайҙарҙың батырлығын данлаусы моң даръяһына күмелде. Уларҙың һәр хәрәкәтен мәңгелеккә хәтерендә ҡалдырырға тырышҡан яҙыусының иғтибарынан бер нәмә лә ситтә ҡалманы.

Ҡыҙыл Армия сафында егерме ете йыл буйы хеҙмәт иткән осорҙа Совет хөкүмәтенең заданиеларын үтәп ярты ер шарын урап уҙған ҡырыҫ, етди, ябай, талапсан, аҙ һүҙле полковник Шаймуратовтың 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына тапшырылған Ҡыҙыл Байраҡты кешеләрҙең һөйләүе буйынса күҙ алдына килтерергә тырышты яҙыусы. Дивизия командирының ебәк туҡыма осон нисек тубыҡлапып үбеүен, үҙе яҡшы белгән һуғыш һөнәрен яугирҙарға арымай-талмай өйрәтергә тырышыуын, вагондарға тейәлгән башҡорт егеттәренең тыуған илен ҡалдырып киткәндәге уй-тойғоларын, фронттағы ҡәҙимге көнкүреште, башҡорт атлыларының яуҙағы ҡаһарманлыҡтарын һүрәтләү өсөн иң кәрәкле, иң мөһим һүҙҙәрҙе табырға тырышты: «...Һуғыштар туҡталмай. Һәр көн һәм һәр кис яңынан-яңы ҡорбандар килтерә. Ауылдар ҡулдан ҡулға күсә, һәм киске офоҡ ситендә яҡтылыҡ ҡалҡа.

---

[1] Константин Симоновтың «Башҡорт дивизияһында» тип исемләнгән мәҡәләһе 1942 йылдың 31 июлендә «Красная звезда» газетаһында баҫылып сыҡты.

Төндә немец разведчиктары ағас төбөндә ҡағыҙ ҡалдырып киткән: «Рус, әйҙә атышмайыҡ. Һәм беҙгә төндә килмәгеҙ, беҙ ҙә бармайбыҙ. Төндә атылыуҙарынан йәки тамаҡтарына ҡыҫҡа хәнйәр ҡаҙалыуынан ҡурҡалар. Улар ныҡ борсола. Эҥер етеү менән туҡталмай автоматтарынан аталар, миналары алғы позицияға шахмат тәртибендә төшөп ярыла.

Ләкин башҡорт разведчиктары, тауыш-тын сығармайынса, ҡараңғы төшөү менән ҡыуаҡлыҡтар һәм соҡорсаҡырҙар араһынан ҡабаттан шыуышалар, һәм немец окоптарында иртәнсәк йәнә мәйетәр табыла.

Көн кискә һарҡты. Шайморатовтың тәҙрәләре юрған менән көпләнгән, штабында карта йәйелгән өҫтәл артында командирҙар ултыра. Улар сираттағы төнгө атакаға әҙерләнеү хаҡындағы планды тикшерә. Уларҙың киң яңаҡлы бронза йөҙҙәренә тоноҡ шәм яҡтыһы төшә...»

Күкрәк көсөн башҡорт йыр менән ҡурайҙан ала, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр икән! Йырсы күкрәгенән урғылып сыҡҡан йән кинәндергес моң, йөрәктең иң нескә ҡылдарын тирбәлдереп, һаман яңғырай, ирек һәм азатлыҡ һөйөүсе ир-егеттәрҙе фашист илбаҫарҙарына ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә саҡыра:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын.
Аямаған йәнен, тыуған ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Байдәүләтов йырлауҙан туҡталғас та, Урта рус яланындағы күҙәтеү пунктында яңғыраған һуҙынҡы көй шауҡымына бирелеп, кешеләр тауыш-тын сығарманы. Талғын ғына иҫкән йылы ел ҡояш ҡыҙҙырған әрем ҡатыш дала сәскәләре еҫен таратты.

— Яҡшы, бик яҡшы йыр! Мин, һүҙҙәрен белмәһәм дә, һәммәһен аңланым! Рәхмәт һеҙгә, — тине Константин Михайлович Симонов. — Яҡшы көйҙөң һүҙҙәрен белеү мөһимме ни? Халыҡтың тормошон, йөрәген, уй-тойғоларын сағылдырыусы ысын йыр, ниндәй генә телдә йырланыуына ҡарамаҫтан, бүтән милләт вәкилдәренең күңеленә лә яҡын һәм ҡәҙерле!

Рус яҙыусыһы әйткәнде Али Ҡарнай ҙа ҡеүәтләне:

— Һеҙ бик тә хаҡлы, Константин Михайлович! Ҡурай менән йыр — борон-борондан башҡорттарҙың айырылғыһыҙ юлдашы. Бер мең биш йөҙ илле етенсе — илле һигеҙенсе Ливон һуғышындағы рус ғәскәре сафында сит ил дошмандарына ҡаршы көрәшеүсе башҡорттар ҙа йыр ме-

нән ҡурайҙан айырылмаған. Унан аҙаҡҡы Ҡырым һәм төрөк һуғыштарында, Минин менән Пожарский ополчениеһы сафында поляк пандарынан Мәскәүҙе азат иткәндә лә башҡорттар бик күп йырҙар сығарған, һәм шул замандағы халыҡтың тормошо, патриотик уй-фекерҙәре шул йырҙарҙа кәүҙәләндерелгән. Рус ғәскәре сафында төрлө походтарҙа ҡатнашҡан башҡорттарҙың батырлығына арналған йырҙар ҙа бар. Рус батшаһы Алексей Михайловичтың Өфө воеводаһы Федор Михайлович Алябьевҡа тапшырған грамотаһы ла шул турала һөйләй.

— Башҡорттар әүәл-әүәлдән йыр-моңға әүәҫ халыҡ,— тип дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров та әңгәмәгә ҡушылды. — Үҙ ирке менән ҡушылған Рәсәйҙе уртаҡ Ватанәсә һанап, уның ерен, именлеген сит ил килмешәктәренән һаҡлау өсөн йәнен-тәнен аямай һуғышыусы башҡорттарҙың батырлыҡтарын сағылдырыусы патриотик рухтағы йырҙар беҙҙә бөтәһе түгел! Бер мең һигеҙ йөҙ ун икенсе — ун дүртенсе йылдарҙағы Ватан һуғышында сығарылған «Кутузов», «Ҡаһым түрә», «Ғилмияза», «Шаһибәрәк», «Любизар» кеүек йырҙар бөгөнгө көн өсөн бигерәк тә әһәмиәтле!

— Мең һигеҙ йөҙ ун икенсе йылғы Ватан һуғышында башҡорттар күп ҡатнашҡанмы? — тип һораны Константин Симонов.

— Ул замандағы француз яуына ҡаршы барлығы илле һигеҙ башҡорт казачий полкы ҡатнашҡан. Шул иҫәптән егерме һигеҙ башҡорт һыбайлылары полкы һуғыштарҙа туранан-тура ҡатнашҡан. Уларҙы тулыландырыу өсөн номерһыҙ ун «ремонтный» полк резервта торған, ә егерме башҡорт полкы Рәсәйҙең көнсығыш сиген һаҡлаған. Улары, әйтергә кәрәк, ҡарт-ҡоролорҙан ғына торған...

— Ул заманда һәр полкта нисә кеше иҫәпләнгән?

— Биш йөҙ утыҙ дүрт кеше.

— Тимәк, 1812 йылғы Ватан һуғышында барлығы утыҙ мең туғыҙ йөҙ етмеш ике башҡорт ҡатнашҡан? — Константин Симонов, ғәжәпкә ҡалып, төрөпкәһенә тәмәке тултырҙы. Ләкин уны тоҡандырырға ҡабаланманы. Байтаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң ғына аҡыллы күҙҙәре менән Нәзировҡа ҡараны. — Һан яғынан күп булмаған башҡорт халҡының үткән быуаттағы Ватан һуғышында үҙ ҡоралы, үҙ аҙығы, үҙ кейем-һалымы, үҙ аты менән күпләп ҡатнашыуы һәм, еңеүсе данын яулап, тыуған иленә ҡайтыуы ғорурлыҡ тойғоһо уята. Атай-олатайҙарының батырлығы менән башҡорттар хаҡлы рәүештә маҡтана һәм ғорурлана ала! Башҡорттарҙың үткән быуаттағы Ватан

һуғышында күрһәткән батырлыҡтары рухында кешеләрҙе тәрбиәләү беҙҙен бурыс, иптәштәр!

— Башҡорт кавалеристарын тәрбиәләүҙә халҡыбыҙ тарихы ныҡ файҙаланыла, — тине Нәзиров, «Ҡыҙыл атлылар» редакторы ултырған яҡҡа ишара яһап. — Политрук Али Ҡарнай иптәш, мәҫәлән, үткән быуаттағы Ватан һуғышы батырҙарын газета биттәрендә популярлаштырыу менән сикләнмәйенсә, Бөйөк Ватан һуғышына бағышланған ҙур күләмле әҫәр яҙыу өсөн кәрәкле материалдар йыя.

— Изге теләк!..

Дуҫтарса ҡоролған әңгәмә ваҡытында күп нәмәне асыҡларға ярҙамлашыуҙары өсөн башҡорт егеттәренә ҡат-ҡат рәхмәттәр әйтеп, һаубуллашҡандан һуң да яралы ҡулын күкрәгенә ҡыҫып ҡосаҡлаған Байдәүләтовтан күҙен алмаған Константин Симонов:

— Яраланған көйө интегеп йөрөүе килешмәҫ, һеҙгә мотлаҡ дауаланырға кәрәк, — тине.

Взвод командирына барып рөхсәт алғас, Байдәүләтов санэскадронға китте.

Күптәнге танышы медицина сестраһы Шәһиҙә уны яғымлы ҡаршы алды.

— Йәнә яраландыңмы?

— Күрәһең бит!

— Яраң нисек?

— Еңел.

— Бәхетлеһең, — тип медицина сестраһы егеттең фамилияһын журналға теркәне. — Хәҙер хирургҡа күренергә кәрәк.

— Бәхетлемен, тик тәнемдә тимер ярсығы бар. Шуны сығарып, үҙ взводыма ҡайтарһындар ине.

— Мәсьәләне ап-анһат хәл ҡылаһың, егет! Операция яһамайынса сығарып буламы ни ярсыҡты? — тип көлдө Шәһиҙә.

— Шулай оҙаҡ тоторҙар микән ни мине бында?

— Оҙаҡмы, тиҙме икәнлеген хирург әйтер, — тип медицина сестраһы егетте өсөнсө ранг хәрби врачы Сөләймәнов эргәһенә ебәрҙе.

Санэскадрондағы медицина работниктарының эше үтә мәшәҡәтле һәм ҡатмарлы ине. Дошман ҡойондорған ут аҫтынан санинструкторҙар алып сыҡҡанда йәки операция яһарҙан алда ғына үлгән ҡыҙылармеецтарҙың бер нисә урынға теҙеп һалынған үле кәүҙәләрен күргәс, икенсе тапҡыр яраланып та үлмәй ҡалыуына Зәки аптыраны. Ул иҫән-һау, ә күпме яуҙаштары һуғышта һәләк булған! Улар яҡты донъяны, туған-тыумасаларын, ата-әсәләрен, бала-

сағаларын, өҙөлөп һөйгән йәрҙәрен башҡаса күрә алмаяса҇к бит!..

Урман эсендәге палаткалар араһынан артабан барған һайын, яралыларҙы носилкаларҙа ташыусы санитарҙар, ҡултыҡ таяҡлы, башы-ҡулы йәки тәне ап-аҡ марля менән уралған яралылар күбәйҙе. Бер урында яралыларҙы дауалайҙар, ә икенсе ерҙә, ауыр ялан шарттарында, кемдәргәлер аҡыртып операция яһайҙар...

Яралыларҙы ҡабул итеүсе Сөләймәновтың да эше үтә тығыҙ ине. Ауыр яралыларға тейешле ашығыс ярҙамды күрһәтеп, уларҙы палаталарға оҙатып бөткәс, ҡояш байып барғанда ғына Байдәүләтов шикелле еңел яралыларға сират етте.

Фельдшер тәненә ҡан менән ҡуша йәбешкән иҫке марляны аҡтара башлағас, яраһы һыҙлауына сыҙай алмаған Зәки үҙе лә аңғармаҫтан ҡысҡырып ебәрҙе.

Яралылар менән күп аҙапланып күнеккән хәрби хирург та Байдәүләтовты йыуатып торманы. Шунда уҡ беләгенә операция яһап, снаряд ярсығын сығарғас, фельдшерға уның яраһын бәйләргә ҡушты ла үҙе икенсе яралыны саҡыртты.

Еңел яралылар өсөн тәғәйенләнгән палатка иҙәненә йәйеүле һалам өҫтөндә ятҡан Байдәүләтов операция яһалған ҡулы һыҙлауҙан төнө буйы интекте. Таң беленгәндә генә күҙҙәрен йомғайны, дошман самолеттарының геүләүе ишетелде һәм санэскадрон тирәһендә бомбалар төшөп ярыла башланы.

«Бында ла пакуй юҡ икән!» — тип уйларға ла өлгөрмәне, бөгә ер өҫтө өҙлөкһеҙ шартлауҙарға күмелде.

Йоҡо аралаш палаткаларҙан йүгереп сыҡҡан еңел яралылар төрлө яҡҡа һибелде, ә палаткаларҙа ҡалған ауыр яралылар һөрән һалып аҡырышты, фашистарға ләғнәт яуҙырҙы:

— Әх, эттән тыуғандар!

— Яралыларҙы ла аямайҙар, ҡәбәхәттәр!

— Үҙҙәрсн ҡасан дөмөктөрөрбөҙ икән!

— Сестра-а!..

— Сестрица-а!..

Ағастар араһындағы бик күп палаткаларҙы, медицина пункттарын, төрлө ҡорамалдар менән йөк машиналарын тырым-тырағай ҡыйратып, ерҙең аҫтын-өҫкә әйләндереп бөткән дошман бомбардировщиктары китеп бер аҙ ваҡыт уҙғас, йәнә тынлыҡ урынлашты. Бомба төшөп ярылғанда аҡтарылған ағас ҡумырығы аҫтында ятҡан Байдәүләтов Зәки башын ҡалҡытып ҡараны. Бөтә ер үләләр менән тул-

ғайны. Әсе көйөк менән төтөн ҡатыш эфир һәм ҡан еҫе уҡшытты, Зәкиҙең башын әйләндерҙе...

Аҡ халатлы ҡыҙҙар йүгереп йөрөп яралыларға тейешле ярҙам ойоштороған саҡта, ашығыс килеп еткән махсус команда үлеләрҙе йыйырға тотондо...

Байдәүләтов санэскадронда ике аҙна ғына ятты. Һауыға башлағас, әсәһе менән Мәстүрәһе тураһында өҙлөкһөҙ уйланды, уларҙан хат килмәүенә ҡайғырҙы.

«Үҙем бик һирәк яҙғанға яҙмайҙарҙыр, бәлки, — тип ул медицина сестраһынан ҡағыҙ-ҡәләм һорап алды.

## X

Зәкиҙән хат килмәүенә Мәстүрә лә яфаланды.

Аҙна буйы урмандан ҡайтмай промартель өсөн ағас киҫеп әҙерләгәндән һуң өйөнә ҡайтып ингәс тә:

— Ҡәйнәм, улыңдан хат килдеме? — тип һораны ла, Хәмиҙә әбей өндәшмәй баш сайҡағас, өмөтһөҙләккә бирелде: — Ниңә хаты килмәй икән? Бер-бер хәл булмаһа ғына ярар ине!

— Ҡуйсы, киленкәйем, ҡуй, туҙға яҙмаған һүҙҙе һөйләмәсе! Хат яҙырға ваҡыты юҡтыр, йәки хаты берәй ерҙә ята торғандыр! Зәкиҙең һуғышҡан урыны яҡын ара түгел бит, — тип киленен йыуатҡан бахыр әсәнең сырыш баҫҡан йөҙөнән дә бөрсөк күҙ йәштәре тәгәрәне.

Ҡиске тамаҡты туйҙырғас, ҡайғыһын баҫырға теләгән Мәстүрә Зәкиҙең ике ай элгәре килгән хатын ҡабат алып уҡыны.

«Ҡәҙерле әсәй, һөйөклө кәләшем Мәстүрә!

Һеҙгә Урал тауҙары ҙурлығындай ҡайнар сәләмдәремде ебәреп ҡалам.

Мин ҡапылда иҫән-һаумын. Тейешле урыныбыҙға килеп еттек. Тиҙҙән яуыз фашистар менән күҙгә-күҙ осрашып алышырға әҙерләнәбеҙ. Ҡәйефем күтәренке. Мин станковый пулеметтың беренсе расчеты, йәғни командиры. Командамда бер кеше бар. Станковый пулемет бик ҡеүәтле ҡорал. Минең өсөн борсолмағыҙ. Өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ. Менеп йөрөгән атым да туҡ, көр. Йыртҡыс дошманды йәһәтерәк тар-мар итеп, имен-аман өйгә ҡайтыу өсөн бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Фашистар менән иҫәпләшер көн яҡынлаша. Һуғышта төрлө хәлдәр булыуы ихтимал. Берәй бәләгә тарыҡһам-нитһәм, артыҡ көйөнмәгеҙ. Үлергә тура килһә, илем өсөн, халҡым өсөн, Сталин өсөн булыр.

Һеҙҙән күптәнән хат алғаным юҡ. Хат яҙып тороғоҙ. Иҫән булығыҙ! Сәләмдәр менән, Зәки.

*2 июль, 1942 йыл».*

Зәкиҙең иҫкереп бөткән хатын ҡат-ҡат уҡып сыҡҡас, Мәстүрә уйға ҡалды. «Беренсе һуғышҡа инеү менән бәләҡаҙаға осраны микән ни? Бәлки, юҡҡа борсоламдыр. Беҙ яҙған хаттарҙы ла ваҡытында алмауын яҙған бит», — тип Мәстүрә үҙен-үҙе йыуатты.

Хәмиҙә әбей самауырҙың һыуын бушатып, көлөн көлдөксәгә ҡаҡты ла килененә ауыл яңылыҡтарын һөйләне. Фронтҡа ебәреү өсөн кәзә дебетенән бәйләгән ойоҡбаш менән бейәләйҙе ауыл Советына алып барып тапшырыуын, үрге остағы Ҡәйенсафаның ире үлеүе хаҡында «похоронка» ҡағыҙы килеүен, Мөһөйәнең Ғәлиәхмәте һуғыштан ҡултыҡ таяғы менән ҡайтыуын әйткәс, Мәстүрә йөрәкһенде.

— Ғәлиәхмәт ағайға барып, Зәкиҙе һорашайым микән әллә? Бәлки, берәй ерҙә осратҡандыр?

— Осрашһалар, моғайын, ишетелер ине. Ҡуйсы, ыҙалап йөрөмә!

Мәстүрә ҡәйнәһен тыңламаны. Өҫ-башын арлы-бирле төҙәткеләне лә, ишектән сығып йүгерҙе.

— Туҡтале, килен, бергә барайыҡ!

Башланғыс мәктәп ҡаршыһында өйөүле бүрәнәләр өҫтөндәге ҡарт-ҡоро, бала-саға араһында берҙән-бер һыңар аяғын һоноп ултырған Ғәлиәхмәт Мәстүрәне таныманы, ахрыһы. Маңлайы тәңгәленә ҡулын ҡуйып ҡарап иҫәнләште лә, тоҡос мыйығы остарын һыпыра-һыпыра, фронт хәлдәрен ҡабаланмай ғына һөйләүен дауам итте.

— Ай-һа-а-ай, сыҙар әмәл ҡалманы! Фашист яман ҡыҫа... Бигерәк тә самолеттары бомбалар ташлағанда йәки туптары төшөп ярылған саҡтарҙа ҡыйын була. Ҡайҙа ҡасып ҡотолор әмәл тапмайһың. Ер өҫтө утлы ҡойонға әйләнә. Берәһендә бомба төшөп шартлауҙан урғылған ер мине күмде. Иптәштәрем ҡаҙып сығарғас, уларҙың нимә әйткәнен ишетмәйем. Ҡул болғауҙарын, ирендәре ҡыймылдауын күрәм, нимә һөйләгәндәрен ишетмәйем. Башым геүләне, әйләнде, сәнсеп һыҙланы. Контузия алған булғанмын икән. Уны аҙаҡтан белдем. Башым геүләүе әҙ-мәҙ баҫылғас, фашистар ҡамауында булыуыбыҙҙы әйттеләр. Тәүлектән ашыу һуғышып-һуғышып, ҡамауҙы йырып сыға алманыҡ. Уң ҡулына осколка тейгән беҙҙең взводный, фашистарға пленға эләгеүенән ҡурҡып, үҙен-үҙе атып һәләк итте... Уны бик ярата инек. Шуға асыуыбыҙ ҡабарҙы. Фашистарға ҡаршы ажарланып атакаға ташландыҡ. Бик ярһыу һуғыштыҡ һәм ҡамауҙы йырып сыҡтыҡ. Инде ҡотолдом тигәндә генә, фашистарҙың тубы ярылып, һыңар аяғымды юғалттым. — Ҡайғылы күҙҙәрен мөлдөрәтеп, Ғәлиәхмәт буш салбар балағын ҡыймылдатты. — Минең эш-

тәр бына ҡалай, — тип яңы ғына килеп килене эргәһенә баҫҡан Хәмиҙә әбейгә иғтибар итте ул. — Улынды бер ҡайҙа ла осратманым. Үпкәләмә. Мин бит Башҡорт кавалерия дивизияһына эләкмәнем. Өфөлә ойошторолған егерме беренсе гвардия уҡсылар дивизияһында хеҙмәт иттем.

Ғәлиәхмәттең көнгә янған йөҙөнә, ослайған эйәгенә, ваҡытһыҙ ағарған сәсенә, һөйәлле ныҡ ҡулдарына, иҙеүе ысҡындырыулы гимнастеркаһына, күкрәгендәге миҙалына, эргәһендә ятҡан ҡултыҡ таяғына күҙ йөрөтөп, Хәмиҙә әбей яманһыу һуланы.

— Зәкиҙе осратмағанһың икән. Был тиклем ғәскәр араһында бер-береңә нисек тап булмаҡ кәрәк. Аллаһы тәғәлә ҡушҡанын күрер инде балаҡайым. Яҙмыштан уҙмыш бар тип үтә иркә, донъяның әсеһен-сөсөһөн үҙ елкәһендә татымаған әҙәм генә әйтә ала.

— Һүҙең хаҡ, бик тә хаҡ!

Фронттан һыңар ҡулын ҡалдырып ҡайтҡас та «Заря» промартеле председателе итеп ҡуйылған Хәлимов Абдулла яҡынлашты. Офоҡ ситенә етеп барған ҡояшҡа ҡаршы оҙон ҡара шәүлә эйәртеп килгән ыңғайҙа ул алыҫтан ҡысҡырып өндәште:

— Йәмәғәт, иртәгә — бесән өмәһе. Бөтә халыҡ сыға, бер кемдең дә ҡалырға хаҡы юҡ!

— Ваҡ бала-сағаны кемгә ҡалдырырға? — тип һораны сыбар яулыҡ бөркәнгән ҡатын ҡыйыуһыҙ ғына.

— Бесән әҙерләгән урынға бергә апарығыҙ! Эшкингәндәре ололарға ярҙамлашыр, бик бәләкәйҙәрен ҡарарға берәй бисәгә ҡушырбыҙ.

— Ашау яғы нисек була?

— Бер ҡаҙан ыумас өйрәһе бешертермен. Кем уны хушһынмай, кәртишкәгә биргән пайугығыҙҙы апарығыҙ!

— Минең кеүектәргә ниндәй эш башҡарырға? — тип һораны Ғәлиәхмәт.

— Әҙ-мәҙ ял итеп алырға теләмәйһеңме?

— Мынауҙай һуғыш барған саҡта нисек ял итеп ятмаҡ кәрәк?!

— Маладис! Мына, исмаһам, ысын фронтовиктарса, — тип маҡтаны промартель председателе Ғәлиәхмәтте. — Аяғың булмаһа ла, ҡулың эшкә ярай. Әртиллерия лафиттары өсөн тәгәрмәс туғыны, сана табаны бөгә беләһеңме? Ҡалтағай [1] яһай беләһеңме?

— Ҡәк же. Белмәй ни. Тик ярҙамға берәй малай кәрәк булыр.

---

[1] Аҫтына тире тегелмәгән саңғыны — ҡалтағай, табанына тире ҡағылғанын саңғы тип йөрөткәндәр тау башҡорттарында.

— Сәмсикамал малайы булышыр.

— Ул уғата бәләкәй түгелме?

— Туғыҙ йәшлек малай бәләкәй буламы! Харап бешек, әнкә тырыш малай!

Кешеләр таралыша башлағас, Хәмиҙә әбей Мәстүрә килененең терһәгенә ҡағылды.

— Ҡасан үҙебеҙгә бесән хәстәрләрбеҙ икән? Абдулланан берәй көнгә бесән сабырға рөхсәт алаһыңмы әллә?

— Һәммәһе күмәкләшеп хөкүмәткә бесән әҙерләгән саҡта улай килешмәҫ, ҡәйнәм.

— Бесәнһеҙ ҡалһаҡ, нисек ҡышлатырбыҙ һыйырҙы?

Промартель председателе ҡушҡан эште мөһим һанаған Мәстүрә ҡәйнәһенең тәҡдиме менән ризалашмайынса:

— Бүтәндәрҙән ҡалышмайыҡ. Берәй әмәле табылыр әле, — тине.

Хәмиҙә әбей киленен артыҡ өгөтләмәне. Ялтырауыҡлы ҡалай менән сыбарланған оло һандыҡ өҫтөндә өйөүле яҫтыҡ-мендәрҙәрен урындыҡтың бирге мөйөшөнә һалды ла, сисенмәй-нитмәй йоҡларға ятты. Көндөң иң оҙон мәле. Киске сәғәт ун бер тирәһе булыуға ҡарамаҫтан, өй эсе һаман яп-яҡты. Бер төркөм малай-шалай, урам буйлап барышлай ҡысҡырышып көлөшә-көлөшә, йыр йырлап ебәрҙе:

Ҡыҙҙар кейә ҡыҙыл ыштан,  
Беҙгә ҡараһы ла юҡ.  
Хәҙер ҡыҙҙар үҙе килә,  
Барып алаһы ла юҡ.

Йәштәре уҙған ҡыҙҙар ҙа урам осондағы ат аҙбары түңгәлендә йырлай, таҡмаҡ әйтә...

Үҙҙәренә иш булырҙай ир-егеттәр һуғышҡа китеп бөткәс, үҙҙәрен-үҙҙәре йыуатмай ҡалайтһындар инде, бахырҡайҙар! Бала тыуҙырып, ҡыуаныс-шатлыҡтар менән донъя көтә торған саҡтары бит! Мәстүрә ике тәүлек булһа ла Зәки ҡуйынында йоҡлап ҡалды, исмаһам. Ҡыҙҙар Мәстүрәнең кейәүгә сығыуына көнләшә. Мәстүрә Зәкигә кейәүгә сыҡмаһа, уны зарығып көтмәһә, донъяның ни ҡыҙығы ҡалыр ине. Юҡ, бүтән ҡыҙҙарға ҡарағанда ул барыбер бәхетле! Сөнки уның өмөтө — мөхәббәте бар...

Хәмиҙә әбей ҙә, уйҙарына күмелеп, йоҡламаны. Мәстүрәнең төшөгәндә борғоланыуынан, өҙләкһеҙ уфтаныуынан ныҡ яфаланыуын аңлап, уны йәлләне. Зәкиҙе генә уйлап, бахырҡай, ут йотоп йөрөй шул! Ялы — ял, ашағаны — аш, йоҡоһо йоҡо түгел уның! Ҡайғыһына сыҙамай, күҙ алдында һурыға, кибә, һарғая!..

«Килен илай, ахрыһы. Әйҙә, илаһын! Илаһа, исмаһам, күңелендә эркелгән ауырлыҡтарҙан бушанып ҡалыр. Кешеләр менән аралашмай, һөйләшмәй, һәммәһен эстән янғыҙы кисереп йөрөүе яман нәҫтә бит ул» — тип уйланы Хәмиҙә әбей.

Урамда күңел асҡан ҡыҙҙар шаулашыуҙан тыйылғас, арғы остағы Гөлмәҙинә әбейҙең әтәсе һуҙып-һуҙып ҡысҡырыуы ишетелде.

Таң яҡынлаша. Йоҡларға... Йоҡларға...

Хәмиҙә әбейҙең йоҡоһо йоҡомо ни? Күпме генә серем иткәндер, кәзә-һарыҡтың тәзелдәшеп баҡырыуына уянғас, ул самауыр ҡайнатырға ҡуйҙы.

— Ҡәйнәм, бесәнгә барырға һуңламайбыҙмы? — тип һораны Мәстүрә, өҫтөндәге юрғанын ситкә ҡайырып.

— Иртә әле, әҙерәк ята бирһәңсе, — тине Хәмиҙә әбей.

Мәстүрә тәҙрәнән үрелеп ҡараны.

Тышта көн аяҙ. Күк йөҙөндә болоттоң әҫәре лә күренмәй. Офоҡ ситен ҡыҙғылт буяуҙарға мансылдырып, ҡуйы урманлы Урал тауҙары аръяғынан күтәрелеп килгән ҡояш нурҙары ергә һибелде.

— Көн яҡшы булмаҡсы, ҡәйнәм!

— Хәйерлегә булһын! Бар, килен, йыуын. Ҡомған соланда.

Биҙрәһен тотоп, Хәмиҙә әбей тышҡа сыҡты. Һауған һөтөн өй беренсә йөрөп йыйған уполминзаг вәкиленә тапшырҙы ла, һыртаҡ һыйырын көтөүгә ҡыуҙы.

— Бар, һәүкәшем, бар, — тип һыйырының муйынынан һөйҙө.

Көтөүсе Фәсхитдин ҡарт, оҙон сыбыртҡыһы менән һелтәнеп шартлата-шартлата, Хәмиҙә әбейгә һуҡранды:

— Ниңә быҙмырлайһың? Көн эҫетеп себен-күгәүен күбәйһә, малға ашау ҡайғыһымы?

— Ярар, асыуланма!

Көтөүсе, Хәмиҙә әбейгә башҡаса иғтибар итмәйенсә, ун — ун ике йәштәр самаһындағы малайға ҡысҡырҙы:

— Ниңә ҡаттың? Бар, анау һыйырҙарҙы туғай яғына ҡайыр!

Көтөүсегә ярҙамлашыусы малай, абалап өргән этен эйәртеп, таралыша башлаған һыйырҙарҙың ҡаршыһына йүгереп сыҡты.

— Һәш, һәш!..

Мал көтөүен оҙатып, Хәмиҙә әбей өйөнә ҡайтты. Килене менән сәй эскәндән аҙаҡ сынаяҡтарын йыя ғына башлағайны, промартель председателе Абдуллиндың тауышы ишетелде:

— Әй, йәмәғәт, ашығығыҙ! Йәйҙең һәр минуты дарағ!

Бесән эшенә барасаҡ кешеләр йәһәт йыйналды. Оҙон билле арбаларға тейәлгән ос, күкрәк, күбә һәнәктәре, тырмалар, һауыт-һабалар араһында ҡалған буш урындарға сабыйҙарҙы урынлаштырыу менән ҡуҙғалып киттеләр.

Бесәнлек ере — Ҡоръятмаҫ яланы — ауылдан алыҫ түгел ине.

Унда кесе сабыйҙарҙы ҡарау өсөн ике әбейҙе ҡалдырып, барыһы ла бесән эшенә тотондо. Ә Хәмиҙә әбейҙе аш-һыу әҙерләргә ҡуштылар.

Бесән эше ҡыҙыу барҙы.

Һуғыш башланғандан бирле балалыҡ уйынын онотҡан малай-шалай ҡатын-ҡыҙҙан ҡалышмай эшләне.

Аш бешергән урынға яҡын ғына ерҙә күбә тарттырған малайҙың илай-илай бер тирәлә оҙаҡ аҙапланыуына аптыраған Хәмиҙә әбей, һауыт-һаба йыуыуынан туҡталып, тегенең эргәһенә барҙы.

— Нимә булды, үҫкәнем?

— Күбә аҫтындағы арҡан йырыла ла сыға, йырыла ла сыға, — тип һыңҡылданы күбә тарттырыусы малай, туҙанлы битендә буй-буй эҙ ҡалдырып аҡҡан күҙ йәштәрен ус һырты менән ышҡый-ышҡый.

— Шуға илайһыңмы егет башың менән? — Хәмиҙә әбей малайҙың етек сәсле башынан һыйпаны. Шунан, күгәүендәрҙән нисек ҡотолорға белмәй, баҫҡан урынында тыпырсына-тыпырсына, ҡойороғон уңға-һулға һелтәгеләп, башын сайҡаған ҡара бейә эргәһенә барҙы. Уның үтә йыуаш, тыныс хайуан икәнлеген, хатта бала-сағаны тыңлауын аңлап, ялы аҫтына ҡулын тығып һөйҙө. — Әй, малҡайым, малҡайым, бәп-бәләкәс кенә хужаларың шикелле, һин дә йонсойһоң шул! Яңғыҙыңа күпме эш башҡарырға тура килә! Сыҙа, малҡай, сыҙа, — тип һөйләнә-һөйләнә, аҫҡа тыҡҡан һуйыл — шеш осондағы епте күбәнең артҡы яғындағы арҡан менән ҡуша баҫты ла, ат башында йөрөүсе ҡыҙға өндәште:

— Балаҡай, әйҙә, ҡыуала!

Беҙ китәбеҙ иртәгә,
Шинель һалып елкәгә.
Беҙ китмәҫ инек иртәгә —
Гитлер тейә теңкәгә, —

тип йырлаған малайҙарҙы күңел биреп тыңлаған ҡыҙ атты көбә ҡуйған яҡҡа ҡыуҙы. Ҡамыттың ҡолаҡбауына ике яҡлап бәйләнгән арҡан менән уратыулы күбәне урынынан ҡуҙғата алмайынса бер урында сыпыраңлап торҙо-торҙо ла, барлыҡ көсөн туплап, ҡара бейә алға табан ынтылды.

Күбә еңелсә елпенә-ҡалтырана урынынан ҡуҙғалыуына ихлас шатланған үҫмер:

— Өлкәндәр ҡулы ипкенә, — тине.

— Әҙерәк күнеккәс, һинеке лә ипкенер!

— Рәхмәт, инәй!

Аҡландан өҫтәрәк урындағы сауҡалар араһында ҡатын-ҡыҙ, ажғыртып-быжғыртып, балаларын бесән йыйырға өйрәтә.

Сабыйҙар менән аҙапланыусы ҡатын-ҡыҙҙың ырамһыҙ эшләүенә асыуы ҡабарған промартель председателе Хәлимов өҙлөкһөҙ ашыҡтырҙы:

— Шәберәк, бисәләр, шәберәк ҡыймылдағыҙ! Малай-шалайҙар рәтендә аҙапланыуығыҙ һис килешмәй!

Уның мыжыуы ҡатын-ҡыҙҙың теңкәһен ҡоротто.

— Ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәктәй, ниңә һәр нәмәгә ҡыҫылаһың ир-абышҡа башың менән?!

— Үҙ нурмыбыҙҙы беҙ үтәмәй кем үтәр тиһең?

— Балаларҙы ла бесән эшенә өйрәтергә кәрәк!

— Давай ҙа давайҙан башҡа һинең һүҙең юҡ!

— Бисәләр батшаһы, бар, мында йән көйҙөрөп йөрөмә!..

Хәлимов Абдулла ла, үҙенең хөкөмөн танытырға маташып, оторо ҡыҙҙы.

— Нимә һеҙ, бузатерҙар, фашистарға ҡаршы һуғыш барғанын оноттоғоҙмо? — тип буш еңе эсендәге беләге ҡалдығын шәп-шәп ҡыймылдата башлағайны, Зәлифә исемле шаян ҡыҙ уның ҡаршыһына сығып баҫты.

— Абдулла ағай, ҡуйсәле, ерле юҡҡа туҙынма! Һиндә минең бик тә сурьюзный йомошом бар ине!

— Ҡыҙыу бесән өҫтөндә ниндәй сурьюзный йомош ул тағы? — Абдулла, ярһыуынан тыйыла алмайынса, ҡыҙға ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡараны.

— Һин «Заря» промартеленең түрәһе булһаң да, мине тыңларға тейешһең, Абдулла ағай!

— Ярай, әләйһә, йомошоңдо әйт!

— Мин бик, бик ир теләйем.

— Нимә-ә-ә?

— Ир теләйем, тим!

— Аҡылдан шаштыңмы әллә, йүнһеҙ ҡыҙыҡай! — тип ажғырҙы Абдулла.

— Аҡылдан шашырҙай хәлгә еттем шул, — тине Зәлифә тыныс ҡына. — Миңә ир кәрәк, ир, — тип ҡабатланы, ҡатын-ҡыҙҙы көлдөрә-көлдөрә. — Шуны нисек итеп аңларға теләмәйһең һин, түрә башың менән? Йыл да бала тыуҙырырға, уларҙы күпләп үҫтерергә, бесән сабырға өйрәтергә теләйем!

— Булмаған ирҙе ҡайҙан табайым һиңә? — Хәлимов, күҙҙәрен аҡайтып ҡарап, шаҡ ҡатты.

Һене ҡатып көлөүҙән тыйылған ҡатын-ҡыҙ ҙа һағая төштө.

Зәлифә генә, теленә һалышыуҙан тыйыла алмайынса, меҫкен булып ҡыланыуын белде.

— Үҙемдән икеләтә ҡарт кейәүгә сығырға ла ризамын мин, Абдулла ағай!

— Ҡарт-ҡороноң үҙ биҫәһе бар икәнен белмәйһеңме ни?

— Улай булғас, йәш бисә итеп мине үҙеңә ал! Үкенмәҫһең! Абдуллаҡайым, бәғеркәйем, яныҡайым, тип төнгө йоҡоларымды ҡалдырып иркәләрмен, ҡосағыма ҡыҫып-ҡыҫып үбәрмен үҙеңде...

Хәлимов, ни әйтергә белмәйенсә, аптырап, баҫҡан урынында тапанды.

— Фу, оятһыҙ ҡыҙыҡай! — тип асыу менән ҡаҡырҙы ла, йүгерә-атлай сауҡалар араһына инеп юғалды.

Юҡтан мәрәкә табып, ваҡытлыса булһа ла ҡайғы-хәсрәттән ҡотолорға тырышыусы ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренән йәш сыҡҡансы ҡысҡырып көлөштө.

— Ҡыҙыҡ иттең бит Апушты!

— Ауыҙын асып ҡалды!

— Мәңге бәйләнмәҫтәй иттең!..

Ҡатындарҙан маҡталыуына Зәлифә генә ҡыуанманы. Салғы һабы тотҡаһына таянып, үлән араһынан үрмәләгән йәшел төҫтәге өлкән сиңерткәгә текләп ҡарап тора торғас, уның оҙон сөм-ҡара керпектәре күҙ йәштәре менән сүешләнде.

— Шаяртҡан һылтау менән Абдуллаға ысынын әйттем, — тине ул, тауышын ҡалтырандырып.

— Күңел итеп йөрөгән берәй ирҙе осратманыңмы әлгәре? — тип һораны салғы яныусы ҡатындарҙың береһе.

— Осратыуҙан, уға минең күҙем төшөүҙән ни файҙа? — тип һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы ла, салғыһы менән ирҙәрсә һелтәнеп, Зәлифә сәскәле үләндәрҙе сабырға тотондо. Уның артынса башҡа ҡатындар ҙа ҡуҙғалды.

Уларҙың бесән сабыуы менән алыҫтан һоҡланған Хәмиҙә әбей:

— Эшкә ҡайһылай уңғандар. Бакуйҙары арттарынан тип-тигеҙ булып һуҙыла бара!

Көн кискә һарҡҡанда, көтөүҙе ҡаршыларға тип, ҡатын-ҡыҙ ҡайтыу яғына ыңғайланы. Ләкин сирек юлды ла үҙмәргә өлгөрмәнеләр, күк күкрәп көслө ямғыр яуырға кереште.

Ялан аяҡ, ялан баш иң алдан барған Зәлифә:

— Берәй ышыҡта тороп торайыҡмы әллә ямғыр уҙғансы? — тип һораны.

Бүтән ҡыҙҙар риза булманы:

— Тоҙ түгелбеҙ бит, иремәбеҙ!

— Ағас аҫтында йәшен ата!

— Әллә йырлап ебәрәбеҙме?

— Башла!

Көләүектәрҙе сәсрәтә кисеп иң алдан барған Зәлифә әллә ямғырға күшегеүенән, әллә йәшендән ҡурҡыуынан ҡалтырана-ҡалтырана йыр башланы:

Һандуғастың күрһәң ине
Юлда теҙелгәндәрен.

Унын аҙаҡҡы өлөшөнә башҡалар ҙа дәррәү ҡушылды:

Һис кем белмәй эстәремдең
Нинә өҙөлгәндәрен.
Ал да булырбыҙ әле,
Гөл дә булырбыҙ әле.
Армиянан бәғерем ҡайтыр,
Бергә булырбыҙ әле.

Зәлифәгә икенсе йыр оҡшаманы.

— Көтөр бәғерем юҡ көйөнә, нимә бушты йырлайым әле, — тине лә, халыҡ йырына күсте:

Әҙрәс бишмәт, еңе оҙон,
Еңе оҙонға төнө оҙон.
Төн оҙонон шунан беләм:
Бер түшәктә бер үҙем...

Йәшен балҡып, күк күкрәгән һайын ҡото алынып «бисмилла»ны ҡабатлаған Хәмиҙә әбей, йырлап барыусы йәштәрҙең ҡыланышына ризаһыҙлыҡ белдереп, эстән генә үртәләнде: «Ай, хоҙайым, үҙең ярлыҡа! Ҡойоп ямғыр яуғанда ҡыҙҙарҙың буҙлап барыуы һис кенә лә оҡшамай. Ялағайҙан[1] ҡурҡып ҡасҡан шайтан ауыҙҙарына инеп, йәшен һуҡмаһа ғына ярар ине үҙҙәрен!»

Күк күкрәгән һайын көсәйгәндән-көсәйә барған эре күҙле ямғыр туҡтаманы. Әсәләре итәгенә тотоноп килгән бала-саға сыр-сыу килеп илашты...

Ауылға етер саҡта ямғыр ҡапыл туҡтаны. Йылға буйындағы әрәмәлектең аръяғында йәйғор дуғаланды. Арта-

---

[1] Ялағай тип йәшен утын йөрөтә тау башҡорттары.

бин бөтөнләй яумаған. Туҙанлы ер өҫтө ҡоп-ҡоро. Ҡояш көндөҙгөсә ҡыҙҙыра. Кешеләрҙең өҫтөндәге кейем дымлана киба башланы.

Килене менән өйөнә ҡайтып ингән Хәмиҙә әбей «һә» тигәнсе өҫтөн алмаштырып, ваҡ-төйәк эштәрен башҡарырға ла өлгөрмәне, көтөүҙән ҡайтҡан малдарҙың ығыжығы ҡубарып баҡырышыуҙары ишетелде.

Хәмиҙә әбей һыртаҡ һыйырын ҡаршыларға йүгерҙе. Уны быҙауы менән эйҙәреп һауҙы ла, киске үрешкә ҡыуҙы. Шунан, элемтә бүлегендә эшләүсе ҡыҙ эргәһенә йүгергән киленен көтөп, ул ҡапҡа төбөндәге бүкәнгә ултырҙы. Ана, етә баҫып Мәстүрә килә. Ниндәйҙер ҡағыҙ тотҡан. Йә, илаһи, бер-бер яман хәбәр яҙылмаһа ине унда!

Хәмиҙә әбей, урынынан тороп, Мәстүрәгә ҡаршы атланы.

— Хат килгәнме әллә?

Мәстүрә, яуап ҡайтармайынса, ҡәйнәһен ҡыҫып ҡосаҡланы ла, үкһеп-үкһеп иларға тотондо.

— Нимә булды, килен? — Хәмиҙә әбейҙең йөрәген ҡурҡыу алды.

— Зә-зә-зә... — Бер ни әйтә алмайынса, Мәстүрә быуылды.

— Яман хәбәрме?

Илауҙан тыйылмайынса, туҙған сәстәрен ялпылдатып, Мәстүрә баш сайҡаны.

— Нимә булды һуң?

— Зә... Зәки яраланған, — тип Мәстүрә усына йомарлап тотҡан өс ҡырлы хатты һуҙҙы.

— Бик ауыр микән? — Хәмиҙә әбейҙең ҡобараһы осто. — Аяҡ-ҡулы имен микән?

— Ул хаҡта бер ни яҙмаған.

— Хатты үҙ ҡулы менән яҙғанмы?

— Эйе.

— Йә раббым, ҡолонсағым иҫән булыуына шөкөрмөн! — Сабыр булырға өйрәнгән Хәмиҙә әбей, күҙ йәшен киленәнә күрһәтмәҫкә тырышып, ситкә боролдо.

Мәстүрә, тынысланғас, ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы күрһәтте.

— Бер юлы өс хат алдым, ҡәйнә. Икеһе улыңдан, өсөнсөһө Зәйтүнә исемле теге йәш ҡатындан.

— Зәйтүнәһе кем тағы?

— Әйткәйнем бит. Оноттоңмо? Улыңды һуғышҡа оҙатҡанда танышҡайныҡ уның менән.

— Зәки улым ниҙәр яҙған?

— Хәҙер, ҡәйнәм, хәҙер уҡып ишеттерәм! — Йөҙө алсаҡланған Мәстүрә өскөл хаттың береһен уҡырға тотондо:

«Хат башы. Яҙ ҡаршы.

Ҡәҙерле әсәйем һәм һөйөклө Мәстүрәм!

Һеҙгә йәш йөрәгемдән урғылып сыҡҡан Урал тауҙарындай оло сәләмдәремде ебәреп ҡалам.

Ҡапылда мин иҫән-һау. Һуғышҡа беренсе мәртәбә индек. Һуғышты элгәре китаптарҙан уҡып, киноларҙан ҡарап, кешеләр һөйләүе буйынса ишетеп белә инем. Бына хәҙер һуғышты үҙ елкәмдә татыным. Бигерәк тә яман, ҡот осҡос ҡурҡыныслы икән һуғыш барған ваҡытта! Йыуан-йыуан ҡарағайҙарҙы, меңәр йәшлек имән ағастарын төбө-тамырынан аҡтарып күккә олаҡтырған иң көслө өйөрмә-дауылға ғына тиңләргә була көслө һуғышты. Фашист ҡоҙғондары ташлаған бомбалар беҙҙең позицияға төшөп ярыла башлағас, тәүҙә ҡотом алынды. Үҙемде ҡайҙа йәшерерҙәй урын тапмай, тәрән соҡор төбөнә боҫтом. Ерҙе аҡтарып юғарыға сөйгән яман шартлауҙар баҫылғас, үлемдән инде ҡотолдом тип урынымдан күтәрелә генә башлағайным, беҙҙең өҫкә фашист снарядтары яуырға кереште. Бер снаряд эргәмдә генә төшөп ярылды. Шунда мине ер күмеп киткән. Ҡуҙғала ла, тын да ала алмайынса оҙаҡ яттым. Үлемем ошолор, ахрыһы, тим. Күллөгөҙ бәхил булығыҙ, тим. Юҡ, үлмәнем. Иптәштәрем ҡаҙып сығарғас, хәл инде. Аҙаҡтан, һуғыштағы яҙмышыма бер аҙ күнгәс, атакаға килеүсе фашистарҙы станковый пулеметымдан ҡурғаш ямғыры менән ныҡ ҡойондорҙом! Немецтарҙың һигеҙ атакаһын кире ҡағып, үҙебеҙ ҙә контратакаға күтәрелдек. Бер контратакаға күтәрелгәндә мин яурынымдан яраландым. Ярам еңел булды. Уға бинт һалдырып бәйләткәс, сафта ҡалдым. Фашистарҙы пулеметтан күпләп ҡырған өсөн командирҙарымдан маҡталдым. «Батырлыҡ өсөн» миҙалын бирҙеләр. Мин һеҙгә еңеүсе исемен алып ҡайтасаҡмын. Ҡайтмаһам, минең күкрәгемдәге миҙалым ҡайтыр.

Һау булығыҙ!

Ҡайнар сәләмдәр менән, Зәки.

10 июль, 1942 йыл».

Килене уҡып бөтөргән хатты ҡулына алғас, уны төрлөсә әйләндергеләп ҡараны ла, Хәмиҙә әбей хат менән сирылыш баҫҡан битен ҡапланы.

— Эй балаҡайым, бәбекәйемдең ҡулы менән яҙылған хат бит был! Миңә миҙалың хәжәт түгел! Хәсистәрҙе дөмөктөрөп, үҙеңдең иҫән-һау ғына ҡайтыуың насип булһа ярар ине!

— Икенсе хатын уҡыйыммы?

— Уҡы, киленкәйем, уҡы, — тине Хәмиҙә әбей, өтәләнеп.

Икенсе хатында еңелсә яраланыуы һәм санэскадронда дауаланыуы хаҡында бөтөнләй яҙмағайны Зәки. Әсәһе менән һөйгән кәләшен борсолдорорға теләмәгәндер, ахырыһы. Дошман бомбаларының һәм снарядтарҙың ярылыуына өйрәнеүен, уларҙан беренсе көндәрҙәге һымаҡ ҡурҡмауын, һуғыштағы ҡыйыулығы арҡаһында командирҙарының ихтирамын яулауын, хатта атаҡлы рус яҙыусыһы Константин Симонов менән осрашып дуҫтарса һөйләшеүен, уға «Урал»ды йырлап ишеттереүен түкмәй-сәсмәй яҙғандан һуң, хатының аҙағын күтәренке кәйеф менән тамамланған:

«...Минең өсөн ҡайғырыуығыҙҙы беләм. Борсолмағыҙ! Тыуған илебеҙҙе мин һаҡламай кем һаҡлаһын! Фашист илбаҫарҙары ғәзиз еребеҙҙе бысраҡ итектәре менән тапаған саҡта, намыҫы булған һәр совет кешеһе еңеү өсөн хәленән килгән барлыҡ эште башҡарырға бурыслы. Беләм, һеҙгә ҡыйындыр. Әммә түҙергә тырышығыҙ. Бүтәнсә әмәл юҡ илебеҙ ҡотолғоһоҙ бәлә кисергән ваҡытта. Ҡарточкаға икмәк бирәләрме? Ашау-эсеү яғы нисек? Әсәйемә пособие ни саҡлы бирәләр? Ҡышҡылыҡҡа утын, бесән әҙерләй алдығыҙмы? Ат кәрәкһә, Абдулла ағайҙан һорағыҙ. Фронттың ни икәнен үҙ елкәһендә татығас, ул һеҙгә ярҙамлашырға ҡаршы булмаҫ, моғайын. Мәстүрә, һөйөклө кәләшем, һин көнөн-төнөн урман эшендә интегә торғанһындыр инде. Ҡалайтаһың, ҡыйын булһа ла сыҙарға тырыш. Барыбыҙҙың да төп бурысы фашистарҙы йәһәтерәк ҡыйратыу бит!

Мин алдағы һуғыштарҙа ла дошмандан аяуһыҙ үс аласаҡмын. Нимә генә булмаһын, ышанығыҙ, комсомолец исеменә, Ватаныбыҙ исеменә, һөйөклө юлбашсыбыҙ, атайыбыҙ И. В. Сталин исеменә тап төшөрмәйәсәкмен!

Ҡөнбайышҡа — алға! Немец-фашист илбаҫарҙарын ҡыйратыу, тар-мар итеү өсөн! Тыуған илебеҙ өсөн! Сталин өсөн!

Яҡташым Мөхәммәтҡазы менән бергә йоҡлап, бергә һуғышып, бер котелоктан ашап йөрөйбөҙ.

Ҡәҙерлеләрем! Барыһы тураһында ла яҙығыҙ.

Хат көтөп, Зәкиегеҙ.

*15 июль, — 1942 йыл».*

Улы яҙғандарҙың һәммәһен мейеһенә һеңдерергә тырышып тыңлаған Хәмиҙә әбей, килене шымғас, ауыҙ эсенән уҡына-уҡына ишеккә табан ыңғайланы.

— Ҡәйнә, ҡайҙа бараһың? — тип һораны Мәстүрә.

— Улымдан хат килһә тип әйткән нәҙерем бар ине. Хәйернисә инәйгә хәйер биреп киләйем, тим.

— Хәйер бирергә иртәгә көн бөткәнме?

— Ундай әйтеүҙе иртәгәсә ҡалдырыуы гонаһ! — тип һөйләнә-һөйләнә ҡәйнәһе сығып киткәс, Мәстүрә, иренән хат алыуға ҡыуанып, үҙ алдына ҡотборноп-шашынып бейене-бейене лә, йөҙө менән урындыҡҡа ҡапланып, йәнә иланы. Оҙаҡ илауҙан күңеле ауырлыҡтарҙан бушанып бер аҙ тынысланғас, Зәйтүнәнән килгән хатты иҫенә төшөрҙө.

«Мәстүрә, һиңә бер үтенесем бар, — тип яҙғайны Зәйтүнә үҙенең хатында. — Ҡыйынға һанамаһаң, Башҡорт кавалерия дивизияһының адресын һалып ебәр. Миңлеғәле бер ҙә генә иҫемдән сыҡмай. Уға хат яҙып һалһам, йөрәгем янныуы әҙерәк баҫылырмы тигәйнем...

Мин Туймазылағы нефть промыслаһында эшләп йөрөйөм. Бындағы бөтә ирҙәр һуғышҡа китеп бөткәс, күңелһеҙ. Ил яҙмышы хәл ҡылынған саҡта, ҡалайтаһың, сыҙарға тура килә. Өҫтәүенә ҡаты закон сыҡты. Эште рөхсәтһеҙ ҡалдырып китеү хәҙер ярамай. Ундай кешене фронттан ҡасыусыға тиңләйҙәр. Нефть эшендә машиналар етешмәй. Бында бөтә ауыр эш минең кеүек бисә-сәсә йәки малай-шалай көсө менән башҡарыла. Аҙыҡ яғы хөрт. Иртәнгегә лә, төшкөгә лә, кискегә лә кәбеҫтә менән картуф ашы бешерелә. Ит эләкмәй. Берәй хәйләһен табып йәнә Өфөгә шылырға булғайным, һуғыш мәлендә ҡайҙа ла еңел булмағас, әлегә Туймазыла ҡалырға булдым. Фронт өсөн нефть бик кәрәк, тиҙәр. Әллә нисәмә рәт «Башнефть» тресы түрәләре менән нарком беҙгә килеп китте. Улар нефтселәрҙе маҡтанылар. Бүләк итеп кәбеҫтә пирогы бирҙерттеләр...»

Хәмиҙә әбей ҡайтып инде.

— Ҡилен, мин ярты юлымдан боролдом. Һине йәһәт кенә кантурға килергә ҡуштылар!

— Ҡем ҡушты?

— Силсәүит рәйесе.

— Ниңә икәнен әйтмәнеме? — Мәстүрә йөрәкһене.

— Һуғыштағы башҡорт ғәскәренә ебәреү өсөн кешеләрҙән йыйған әйберҙәрҙе ылау менән районға апарып тапшырырға ҡушалар, ти.

— Ҡасан юлға сығырға икән?

— Белмәйем.

Мәстүрә ауыл Советында оҙаҡ булманы. Ҡайтып инеү менән, өр-яңы сабатаһын кейеп, паегын тоҡсай төбөнә төрөп һалды ла:

— Ҡәйнәм, миңә Сәлимә еңгәй менән бергә тәүҙә районға, унан Өфөгә барырға ҡуштылар. Ҡешеләрҙән йыйылған бүләктәрҙе апарып тапшырғас та, унда оҙаҡламам, — тине.

Хәмиҙә әбей аптыраны.

— Төнгә ҡаршы ниңә юлға сығаһығыҙ? Иртәгә көн бөткәнме?

— Һуғыш барған саҡта көнө түгел сәғәте, минуты, хатта секунды ҡәҙерле, ҡәйнәм! Өҫтән бомбалар яуып тормай әле, — тип ҡәйнәһе менән хушлашты ла Мәстүрә контора тәңгәлендәге ылауға табан йүгерҙе.

## XI

Бесән эшен теүәлләргә өлгөрмәнеләр, ураҡ та килеп етте.

Бындай ҡыҙыу көндәрҙә Башҡорт АССР-ының Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе Ваһапов Сабир Әхмәтйәнович та Өфөлә ултырып сыҙаманы. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытындағы үтә ҡатмарлы һәм яуаплы осорҙа ир-атһыҙ ҡалып, бөтә ауырлыҡтарҙы үҙ елкәләрендә күтәргән ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро менән генә хужалыҡты алып барыусы урындағы етәкселәргә хәленән килгән ярҙамды ойоштororға ниәтләнеп, ул колхоздан колхозға, совхоздан совхозға йөрөнө.

Республиканың иң төпкөл райондарында булып Өфөгә ҡайтышлай ул юл ыңғайындағы Ҡырмыҫҡалыға һуғылып китергә булды.

ВКП(б) райкомы секретары Сәлимйәнова уны асыҡ сырай менән ҡаршы алды.

— Рәхим итегеҙ, һеҙҙе икенсе көн көтәбеҙ, — тине ул, бүлмәлә ултырыусылар берәм-берәм сығып киткәс.

— Бында һуғылып китеремде ҡайҙан белдегеҙ?

— Нисек белмәҫкә ти? — Сәлимйәнова хәйләле йылмайҙы. — Беҙҙән алыҫтағы райондарҙан ҡайтасағығыҙҙы һорашып белгәс тә, данлыҡлы яҡташыбыҙ Шайморатов тыуып үҫкән район хәле менән ҡыҙыҡһыныр ығыҙға ышандым, Сабир Әхмәтйәнович!

— Һеҙ хаҡлы, Хөснә Мәжитовна, — тине Башҡорт АССР-ының Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе.— Полковник Шайморатовтың яҡташтары тормошо менән ҡыҙыҡһынмау мөмкин түгел. Сөнки ул һеҙҙең район менән ҡыҙыҡһынып бик йыш хат яҙа.

— Миңлеғәле Минһажетдинович беҙгә лә яҙа, — тине Сәлимйәнова ғорурлыҡ менән. — Тик уның ышанысын аҡлай алмайбыҙ әле... Бер нәмәгә лә етешеп булмай. Көнөн-төнөн ҡатын-ҡыҙ эшләүе етмәгән, бала-саға ла интегә...

— Аңлайым. Башҡаса әмәл юҡ.

Сәлимйәнованың эше ауыр булыуын Ваһапов белде. Партияның район комитеты секретары итеп һайланғандың беренсе көндәрендә бының ише генә интегеүе лә мәғлүм ине. Аҙаҡтан, эшкә аҙыраҡ күнеккәс, уның район етәкселәренә ҡарата талапсанлыҡты ҡырҡа арттырыуын, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларға ҡаршы закон ярҙамында көрәшеүен, хатта үҙе менән пистолет йөрөтөүен дә Ваһапов ишеткәне бар.

— Танмайым, Хөснә Мәжитовна, һеҙгә түгел беҙгә, республика етәкселәренә лә бик ҡыйын...

Фронт заказдарының үтәлеше һәм республикалағы ҡыйынлыҡтар хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләгән Ваһаповты иғтибар менән тыңланы Сәлимйәнова. Ул, Халыҡ Комиссарҙары Советы председателенән тартынмай, кеҫәһендә йөрөткән кескәй көҙгөгә ҡарап, аҡһыл йөҙөн ҡулъяулығы менән һыпырғылағас, ҡыҫҡа итеп яңыраҡ ҡына киҫтергән сәсен тарап, өр-яңы күн картузды маңлайына батыра кейҙе лә, иҫке күн тужуркаһын төҙәткеләй-төҙәткеләй, өҫтәл тартмаһынан сығарған пистолетын билен быуған яҫы ҡайышҡа таҡты.

Уның һәр хәрәкәтен күҙәтеп ултырған Ваһапов көлөмһөрәне.

— Хөснә Мәжитовна, партияның район комитеты секретарына пистолет тағып йөрөүе килешерме икән?

— Телохранителем булмағас, ҡалайтайым, Сабир Әхмәтйәнович? Район буйлап япа-яңғыҙыма йөрөргә тура килә бит! Тирә-яҡта дезертирҙар ҙа осраштыра, тиҙәр. Диверсанттар ҙа тотолоп тора. Үткән аҙнала ғына милиционерҙар немецтар файҙаһына эшләгән дүрт кешене тотҡан.

Ваһапов, игенде урып-һуғыу һәм хөкүмәткә тапшырыу хаҡында һорашып белгәс, райком секретарын рухландырырға ниәтләнгәндәй, әйтә һалды:

— Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советының егерменсе июлендәге ҡарары буйынса утыҙ мең ҡала кешеһе ураҡҡа мобилизовать ителә. Уларҙан тыш мәктәптәрҙә, техникумдарҙа һәм ВУЗ-дарҙа уҡыу йылы беренсе сентябрҙән ун бишенсе октябргә күсерелә.

— Барыбер эшсе көсө етмәйәсәк, Сабир Әхмәтйәнович!

— Барын файҙалана белегеҙ.

— Нисек кенә тырышһаҡ та, белмәйем, ҡар яуғанға саҡлы бөтә игенде йыйып алырға өлгөрөрбөҙ микән?

— Игенде ҡар аҫтында ҡалдырырға хаҡығыҙ юҡ!

Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы һәм ВКП(б) өлкә комитеты уполномоченныйы Аҙнабаев менән район Советы башҡарма комитеты председателе Ғәлл-

мова Фәнүзә Хисамовнаның бүлмәгә инеүен күргәс, улар һөйләшеүҙән тыйылды.

Совет эшендә яңырак эшләй башлаған Ғәлләмова Ваһапов алдында үҙен оялсан һәм уңайһыҙ тотто. Аҙактан, бер аҙ өйрәнгәс кенә, ул батырайҙы һәм МТС-тарҙа Аҙнабаев менән бергә булғанда күргән етешһеҙлектәр хаҡында һөйләргә тотондо.

МТС-тарҙағы етешһеҙлектәр Ваһаповты ғәжәпләндермәне. Тракторҙар һәм комбайндар эшенә бәйләнешле бер нисә һорау бирҙе лә, бөтә нәмәне дөйөмләштереп, былай тине:

— Республикабыҙҙағы ауыл хужалыҡтары ла, илебеҙҙәге барлыҡ хужалыҡтар шикелле, ҡыйынлыҡтар кисерә. Бөтә ресурс фронтҡа оҙатылыу сәбәпле, Башҡортостандағы аттар һаны ике ярым тапҡырға кәмене. Тракторҙар паркының өстән ике, йөк машиналары паркының биштән бер өлөшө генә ҡалды. Ауыл хужалығында йөк машиналары бөтөнләй ҡалмауы хаҡында Дәүләт Оборона Комитеты Председателенә лә билдәле. Тракторҙар менән комбайндарҙы ремонтлау өсөн запчастар юҡлығы ла сер түгел. Уның өҫтәүенә, хәҙер бензин биреүҙе туҡтаттылар тиерлек. Ҡырмыҫҡалы районында ғына түгел, республиканың барлыҡ хужалыҡтарында ремонт эше фәҡәт иҫке запчастарҙы яңыртыу иҫәбенә башҡарыла. Уларҙан тыш, һигеҙ йөҙ алтмыш дүрт тракторҙы һәм туғыҙ йөҙ комбайнды запчастар өсөн ботарларға рөхсәт иттек. Ошо уҡ ваҡытта эш аты нагрузкаһы ике тапҡырға артты. Сәсеү майҙаны кәмене, үҫтергән иген йыйылып бөтмәү сәбәпле, иген һатыу планы үтәлмәй... Республика буйынса һыйыр малы, һарыҡ-кәзә һаны ла кәмегәндән-кәмей. Шуға күрә ҡала кешеләрен, техникум, ВУЗ, оло синыфтарҙа уҡыусы балаларҙы һеҙгә эшкә ебәреүҙән башҡа ярҙамды көтмәгеҙ.

— Запчастар булмауына һылтанып, машина-трактор станцияларының насар эшләүен аҡларға тейешбеҙме? — тип һораны райком секретары Сәлимйәнова асыу менән.

— МТС-тарҙың хөрт эшләүен аҡлар өсөн һөйләмәнем республика күләмендәге етешһеҙлектәрҙе. Киреһенсә, һеҙ ысын хәлде белһен, ҡайҙандыр ярҙам килеүен көтөп ултырмаһын өсөн һөйләйем мин һеҙгә был һүҙҙәрҙе. Үҙегеҙгә таянып эш итегеҙ. Бына шул.

— Уныһы аңлашыла, Сабир Әхмәтйәнович, — тине Сөләймәнова өмөтһөҙләнеп.

— Тырышырбыҙ, — тип өҫтәне Ғәлләмова. — Район етәкселәре генә түгел, колхоздар ҙа ауырлыҡтарҙы күтәрергә өйрәнде инде. Кисә «Сулпан» колхозының икенсе бригадаһында булғайным. Арыш урып йөрөгән сағында

күп балалы Хәлимә апайға кемдер «ҡара ҡағыҙ» килтереп киткән. Ире фронтта һәләк булған икән... Был хаҡта белгәс, ул апай йәне әрнеп иланы. Бригадир уға ҡайтып китергә рөхсәт итте. Әммә апай ҡайтырға теләмәне. Шәмәргән йөҙөн яулыҡ осо менән һөрттө лә ҡабаттан арыш урырға кереште. Оҙон көн буйына баш ҡалҡытмай эшләне. Игенде урағы менән һоҫоп-һоҫоп ала ла, тип-тигеҙ генә бәйләп, уны ергә ултырта... Ҡараңғы төшкәнсе япа-яңғыҙы бер яҡ ситтә эшләне. Ләкин сер бирмәне, ыңғырашманы. — Ғәлләмова шымыбыраҡ ултырҙы. — Беҙҙең барлыҡ ышанысыбыҙ шундай булдыҡлы, эшсән ҡатын-ҡыҙҙа. Ундайҙар беҙҙең районда күп, бик күп! Уларҙың ҡаһарманлығына, сыҙамлығына, көсөнә иҫ китерлек!

Ваһапов, үҙенең еңел машинаһына район етәкселәрен ултыртып, МТС-та, унан Башҡортостандағы беренсе шәкәр заводында булды ла райондың башҡа колхоз-совхоздарындағы эш барышын ҡарарға китте. Улар ҡайҙа ғына бармаһын, беренсе һәм икенсе синыфтарҙа уҡыясаҡ балаларҙан алып иң оло йәштәге ҡарт-ҡороға саҡлы иген баҫыуҙарына эшкә сыҡҡайны. «Тылдағы фронт бригадаһы», йәки «тылдағы фронт звеноһы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булырға тырышып, улар төнгө ай яҡтыһында ла эш менән мәшғүл инеләр. Ҡатын-ҡыҙ тәүлегенә етешәр йөҙ — меңәр көлтәлек арыш ура, һабан менән ер һөрә. Уларҙың күбеһенең өйөндә биш-алты бала. Өҫтәүенә әлдән-әле фронттан ҡайғылы хәбәрҙәр килә тора...

Ҡатын-ҡыҙҙан бала-саға ла ҡалышмай. Эҫкерттәр ҡуйыласаҡ ергә улар көлтә ташый, башаҡ йыя, молотилкаларҙы төҙәтеп аҙапланыусы ҡарттарға һәм аш хәстәрләүсе әбей-һәбейҙәргә лә ярҙамлаша.

Урылып һуғылған арышты тоҡтарға тултырып, яҡындағы тимер юл станцияһына алып барыусы ҡыҙыл ылауҙы осратып, транспаранттарға «Иген — фронтҡа!» тип яҙылған һүҙҙәрҙе уҡығас, машинаның артҡы кабинаһында ултырып килгән Сәлимйәнова менән Ғәлләмованы маҡтамайынса булдыра алманы Ваһапов.

— Һәйбәт, бик һәйбәт. Әх, машиналар булһа икән!

Ҡыҙыл ылауға юл биреп, ситтә көтөп торған машина урынынан ҡабат ҡуҙғалып киткәс, Ваһапов Шайморатовтың тыуған ауылы Биштәкәгә барып әйләнергә теләк белдерҙе.

Биштәкә ауылында ла кесеһенән иң ҡартына саҡлы арыш баҫыуында ине. Ураҡ урып көлтә бәйләүсе ҡатын-ҡыҙ араһында йөрөгән берҙән-бер сулаҡ ир, машинала Башҡортостандың иң оло дәрәжәле етәкселәре генә йөрөүен белгәнлектән:

— Әй, бисәләр, йылдамыраҡ ҡыймылдағыҙ, — тип ҡысҡырҙы ла яҡында ғына туҡтаған машина кабинаһынан сығыусыларға табан ыңғайланы. — Һаумыһығыҙ!

— Ҡолхоз председателе Суфиян ағай Бәҙретдинов, — тип райком секретары уның менән Ваһаповты таныштырҙы. — Ҡолхоз районда иң алдынғыларҙан һанала. Арыш һәр гектарҙан ун — ун бер, бойҙай һигеҙ — ун центнер самаһы сыға.

— Ҡала кешеләре һәм студенттар килеп етмәнеме әле? — тип һораны Ваһапов.

— Егерме ике студент килде килеүен. Улар килеү менән генәме ни?

— Студенттар әле ҡайҙа?

— Уларҙың бәғзе береһен мәктәпте яңы уҡыу йылына әҙерләшергә, балалар менән ҡышҡылыҡҡа урманда утын ҡырҡырға, Украинанан килтерелгән балаларҙы элгәрге клубты рәтләп урынлаштырырға ҡуштым.

— Урманда студенттар ғына эшләйме?

— Ниңә улар ғына булһын, күберәге үҙебеҙҙең бисәләр эшләй унда!

Ҡөнөнә икешәр йөҙ грамм һоло көрпәһе менән туҡланып, алыҫтағы урман участкаларында көнө буйы йыуан-йыуан ағастарҙы бысыусы, ботаҡтар ботаусы, түмәрҙәр ярыусы ҡатын-ҡыҙҙы, малайҙар менән йәп-йәш кенә ауыл ҡыҙҙарының аҙапланыуын күҙ алдына килтергәс, Ваһаповтың йөрәге әрнене.

— Һеҙҙең колхозда эшләргә башҡорт артистарын да ебәрергә тырышырмын, — тине ул.

Ҡолхоз председателе, ғәжәпкә ҡалып, бот сапты.

— Хи-хи-хи ла ми-хи-хи килеп, кешеләрҙе көлдөрөргә генә өйрәнгән артистарҙың бында килеүенән ни файҙа?

— Артистарҙы улай кәмһетеү килешмәҫ, — тип шелтәләне райком секретары. — Уларҙың күбеһе беҙҙең кеүек кешеләр араһынан сыҡҡан. Шулай булғас, башҡорт артистары колхозсыларҙан кәм эшләмәйәсәк. Иген дә урырҙар, кешеләрҙең күңелен дә асырҙар!

— Ашау-эсеү наҡыҫ, эш ауыр, тормоштары хөрт булһа ла, беҙҙең ауыл ҡыҙҙары күңел асыуға әүәҫ, — тине колхоз председателе. — Әҙ-мәҙ ял итеп алалар ҙа, арып талыуҙарын, ҡайғы-хәсрәттәрен шунда уҡ онотоп, тыпыр-тыпыр бейергә, таҡмаҡ әйтергә тотоналар...

Ҡолхоз председателе әйткәнде дөрөҫләгәндәй, йырын буйындағы ураҡсы ҡатын-ҡыҙ, эштәренән бүленмәйенсә, йыр башланы:

Һағынһам да, һарғайһам да,
Түҙер әле йәш күңел;
Айырылһаҡ та ҡушылырбыҙ,
Тик көнө бөгөн түгел...

Йырлай-йырлай арыш урған ҡатын-ҡыҙҙың эшенә хайран ҡалып торҙо Ваһапов. Барлы-юҡлы ризыҡтарын балалары ауыҙынан өҙөп фронтҡа оҙатҡан халыҡ үҙен-үҙе һис аямай. Улар, тәрән тылда нисек тә булһа сыҙарҙарына өмөтләнеп, ҡышҡы һалҡын көндәрҙә өшөп-туңып окоптарҙа ятыусы фронтовиктар аслыҡтан интекмәһен өсөн илгә күберәк икмәк тапшырырға тырышалар, ә эштән ҡайтҡас, төндәр буйы йоҡламайынса, бейәләй бәйләйҙәр, һуғышсыларға ебәрергә йылы күлдәк-ыштан тегәләр, ҡулъяулыҡ сигәләр...

— Кешеләргә фронт хәлдәрен һөйләйһегеҙме? — тип һораны Сабир Әхмәтйәнович.

— Ҡәнишнә, аңлатыла, — тине колхоз председателе. — Ял иткәндә район гәзитен һәм һирәк-мирәк беҙгә ебәрелгән Башҡорт кәүәлириә дивизиәһенең «Ҡыҙыл атлылар» гәзитен дә уҡып ишеттерәм. Аҙаҡтан кешеләргә тырышып эшләргә ҡушам. Беҙ бит Шайморатов яҡташтары, махы бирмәбеҙ!

## XII

Планшетында йөрөткән картаны йәйеп һалып, Нәзиров Сталинград йүнәлешендә барған дәһшәтле һуғыштарҙы күҙ алдына килтерергә тырышты. Сталинград эргәһендәге алыштарҙы бер нәмә менән дә сағыштырыу мөмкин түгел. Унда хәҙер утлы өйөрмә, ҡыйралыш-үлеш, донъя яҙмышы хәл ителә, ә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы һаман оборонала тора. Был хәл һәр намыҫлы кешене борсолдора. Шуға күрә башҡорт егеттәренең изге ниәте аңлашыла. Улар, Волга буйындағы һуғыштарҙа йәһәтерәк ҡатнашырға теләк белдереп, дивизия комиссарының теңкәһен ҡорота. Сталинградтан алыҫ ерҙә булыуҙарына Нәзиров ғәйепләме ни? Хәрби частарҙың фронтта тотҡан урыны подразделение командирҙары йәки комиссарҙарының теләге менән генә билдәләнмәй...

Землянкаға килеп ингән «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторын күреп, Нәзиров уйҙарынан бүленде:

— Карнай, үҙең килеп шәп иттең әле! Хат әҙерме?

— Әҙер, иптәш батальон комиссары, — тип Али Карнай һыбайлы башҡорт егеттәре исеменән Башҡортостанға ебәреләсәк хатты Нәзировҡа тапшырҙы.

Уға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, дивизия митингыһында тикшереләсәк башҡорт һыбайлыларының ант-хатын Нәзиров ҡысҡырып уҡырға тотондо:

*«Башҡорт һыбайлылары дошманды аяуһыҙ ҡыйрата! Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә уларҙың батыр улдарынан.*

*Ҡәҙерле иптәштәр! Эшселәр, эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, колхозсылар, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, хеҙмәтсән интеллигенция, беҙҙең яҡындарыбыҙ һәм туғандарыбыҙ!*

*Беҙ, Совет Башҡортостаны егеттәре, фронттың бер өлөшөндә дошманға ҡаршы дәһшәтле һуғыш башланыҡ һәм шул ерҙән хәрби сәләм ебәрәбеҙ... Дошмандың атакаларын кире ҡағып, Башҡортостан һыбайлылары үҙҙәре контратакаларға күтәрелделәр һәм ҡаты һуғыштарҙа уларҙы сигенергә мәжбүр иттеләр... Н. йылғаһын кисеп сыҡҡанда ла һыбайлылар үҙҙәрен һынатманы. Улар фашистарҙы бик яҡын ебәрҙе һәм, «ура! Ватан өсөн!» тип һөрәнләп, контратакаға ташланды. Дошман атакаһы кире ҡағылды. Ул һуғышта 500 фашисты ҡыйратҡан Нафиҡов иптәш командалығындағы боецтар һәм командирҙар иҫ киткес ҡыйыулыҡтар күрһәтте. Һуғыш менән етәкселек иткән Нафиҡов иптәш батырҙарса һәләк булды...*

*Бер генә лә паникер, ҡурҡаҡ йән, артҡа сигенеүсе арабыҙҙа юҡлығы менән ғорурланыу белдерәбеҙ.*

*Советтар Союзы халҡын, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, гитлерсы фашистар үҙ итектәре аҫтында тапап тоторға маташалар, ләкин хыялдары бойомға ашмаясаҡ! Совет илен фашистарҙан азат итеү өсөн башҡорт һыбайлылары аҡтыҡ ҡанын, әгәр кәрәкһә — бөтә ғүмерен бирергә әҙер. Һәләк булған яугир иптәштәребеҙ өсөн фашистарҙан үс аласаҡбыҙ. Дошман ҡайҙа ғына беҙгә осрамаһын, ул дөмөгәсәк.*

*Ҡәҙерле иптәштәр, беҙ һеҙгә үтенес менән мөрәжәғәт итәбеҙ, — Ватан өсөн һуғышта һәләк булған боецтарҙың һәм командирҙарҙың ғаиләһенә хәстәрлекле һәм иғтибарлы булығыҙ. Һәр ҡайһығыҙҙың бурысы: фронтҡа ярҙамды арттырыу, һуғыш ҡоралдарын, аҙыҡ-түлекте күберәк етештереү һәм хеҙмәт һағында ныҡлы тороу.*

*Беҙ, ойошторолған хәрби берләшмәләге һуғышсылар, командирҙар һәм политработниктар, беҙҙең хәрби эштәребеҙҙе иғтибар менән күҙәтеүегеҙҙе беләбеҙ һәм башҡорт халҡы тарафынан беҙгә тапшырылған байраҡты ныҡ тоторға һүҙ бирәбеҙ. Беҙҙең ергә ингән фашист илбаҫарҙарын ҡурҡыу белмәй ҡыйратасаҡбыҙ.*

*Бүтән бөйөк державалар халҡы менән берлектә совет халҡының фашистарҙы тулы еңеүенә арналған байраҡты күтәрәсәгенә күп ваҡыт ҡалманы.*

*Башҡорт һыбайлылары командиры полковник* ШАЙМОРАТОВ.
*Берләшмә комиссары, батальон комиссары* НӘЗИРОВ».

Али Ҡарнай яҙып килтергән хат-антты уҡып бөткәс, Нәзиров яғымлы йылмайҙы.

— Һәйбәт, бик һәйбәт. Тик бер замечание бар. Политбүлек начальнигы, батальон комиссары Абдуллин иптәштең ҡултамғаһын да өҫтәп яҙыу кәрәк булыр, — тип ул хатты дивизия командирына күрһәтергә ниәтләнде.

Яугирҙарҙың митингта уҡыласаҡ хат-анты полковник Шайморатовты ла ҡәнәғәтләндерҙе.

— Беҙҙең редактор молодец, бик тә молодец, — тип ул Али Ҡарнайҙы маҡтаны.— Уның әҙәби һәләтлегенә, эшсәнлегенә, егәрлелегенә һоҡланып бөтә алмайым мин! Ҡарнай яҙған һәр мәҡәлә, очерк йәки һүрәтләмә бер генә яугирҙы ла битараф ҡалдырмай!..

— Һеҙ хаҡлы, — тине Нәзиров, дивизия командиры менән теләктәшлек белдереп. — Уның «Ҡыҙыл атлылар» газетаһында баҫылған «Взвод командиры», «Дошманға бирелмәҫкә!» исемле мәҡәләләре һыбайлыларҙы тәрбиәләүҙә һәм уларҙың һуғышсан рухын күтәреүҙә беҙгә бик ныҡ ярҙам итте.

— Али Ҡарнай менән Әһел Истамғәлиндең үҙ-ара һыйыша алмауҙары ғына бер аҙ эсте бошора. Өҫтәүенә, икеһе лә ҡыҙыу, — тине политбүлек начальнигы Абдуллин.

Нәзиров, уның менән ризалашмайынса, баш сайҡаны.

— Хаталанаһығыҙ! Уларҙың икеһен бер ҡалыпҡа һуғып, яңылыш фекер тыуҙырыу зарарлы. Фронтҡа килгәне бирле Али Ҡарнайҙы мин күп һынаным. Ул, ҡыҙыу булһа ла, ваҡланмай торған, бик кешелекле, кенә ҡыуыуҙың ни икәнен дә белмәгән әҙәм йәнле, эскерһеҙ егет! Үтә аҫтыртын ҡылынған Истамғәлиндең холоҡһоҙланыуына ҡарамаҫтан, Ҡарнай бер ҡасан да сабырлығын юғалтмай, түҙемле. Уның үҙ ҡулы аҫтында эшләгән кешене яманлағанын йәки уның хаҡында ғәйбәт таратҡанын ишеткәнем булманы. Аҙна элгәре осрашыуыбыҙҙа ул: «Газетаның яуаплы секретары үҙгәрҙе, үҙен тыйнаҡ тота, подразделениеларға ла йыш йөрөй башланы», — тип Истамғәлинде маҡтап телгә алды.

— Их, Ҡарнай!.. Ул бер ҡатлы, еңел ышаныусан шул,—

тип Абдуллин үкенес белдерҙе. — Һуғышҡа саҡлы уҡ Истамғәлиндең аҫтыртын яуыз икәнлеген, йәше етмәгән ҡыҙҙы көсләүен, үҙен генә шәп шағир итеп танытыр өсөн, намыҫлы яҙыусыларҙы милләтселектә нахаҡтан ғәйепләргә маташыуын һәм улар өҫтөнә сүп өйөүен Ҡарнай онотҡан!

— Үткән эштән төш яҡшы тигәндәй, ниңә үткәнде иҫкә алырға? Истамғәлин, бәлки, ысынлап та үҙгәргәндер, — тине Шайморатов.

— Үҙгәрмәүен тын алышынан беләм! Унын эсе тулы боҙоҡлоҡ! Һуғыштың алғы һыҙығында булғанын ҡасан күргәнегеҙ бар? — Бер кем дә өндәшмәгәс, Абдуллин үҙенә-үҙе ныҡлы ышаныс менән яуап ҡайтарҙы: — Күргәнегеҙ юҡ һәм күрмәҫһегеҙ ҙә! Ул һуғыш бөтөп тынлыҡ урынлашҡас ҡына подразделениеға килә, ти Әлибаев иптәш. Унда ла оҙаҡ булмай, айырым һуғыш эпизодтарын ҡыҙылармеецтарҙан һорашып ҡуйын дәфтәренә яҙып ала ла, йәһәтерәк тайырға тырыша икән.

— Истамғәлиндең алама ҡылыныштарын белгәс, ошоғаса ниңә шымып йөрөйһөгөҙ? — тип асыуланды Шайморатов.

— Али Ҡарнай үҙе Истамғәлин менән мөнәсәбәтен боҙорға теләмәгәс, беҙ ни эшләргә тейеш, иптәш полковник? — Политбүлек начальнигы, йәне һөймәгән кешегә ҡаршы көрәшеү өсөн фронтта ваҡыты юҡлығына һылтанып, ҡул һелтәне. — Ҡарнайға ярағас, әйҙә, йөрөп ятһын! Тиҙәккә ҡағылһаң, һаҫығы аңҡый башлай, ти.

— Мәсьәләгә бындай ҡараш хата. Газета туранан-тура политбүлеккә буйһона. Шуға күрә, Ҡарнай менән Истамғәлиндең үҙ-ара мөнәсәбәтен асыҡлау — һеҙҙең бурыс, — тип Шайморатов күҙ ҡарашын Нәзировҡа йүнәлтте: — Мөбәрәк Зиһаниевич, Күсимов менән Әлибаевтың үҙ-ара мөнәсәбәтенә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?

Ғүмерен кешеләрҙе тәрбиәләүгә бағышлаған Әлибаев һүҙгә үтә һаран, яй, тыныс, ағымлы, әҙәпле холоҡон хәрби хеҙмәткә алынғас та үҙгәртмәүен яҡшы белгән Шайморатовтың көтөлмәгән һорауына Нәзиров ғәжәпкә ҡалды.

— Уларҙың мөнәсәбәтен Ҡарнай менән Истамғәлиндекенә сағыштырып булмай, иптәш полковник. Минеңсә, һәйбәт...

— Күсимов комиссар менән иҫәпләшмәй, үтә ҡыҙыу, һүгенә, эсә, имеш, тигән хәбәрҙе ишеткәнегеҙ юҡмы?

— Күсимов иҫәпләшмәһә, ул хаҡта Әлибаев политдонесениела күптән яҙған булыр ине, иптәш полковник... Күсимовтың тотанаҡһыҙ, тупаҫ холоҡло икәнен һәм йыш эсеүен Әлибаев йәшермәй. Икәүҙән-икәү ҡалып һөйләшкән саҡта элегерәк: «Һин мине тәрбиәләргә маташма, комис-

сар, һыбайлыларҙы тәрбиәлә», — тигән. Хәҙер инде: «Бөттө, Сәғит Рәхмәтович, бөттө. Ундай етешһеҙлектәр башҡаса ҡабатланмаҫ», — тип һүҙ биреп, аҙаҡтан һәммәһен онотоуы ла беҙгә мәғлүм.

— Ҡыҙыу командир менән тыныс полк комиссарының бергә булыуы, минеңсә, һәйбәт, — тине политбүлек начальнигы.

— Беҙ төп мәсьәләнән ситләштек, ахырыһы, — тип полковник Шайморатов дивизияла уҙғарыласаҡ митинг ваҡытын билдәләне...

Митингтан һуң блиндажына ҡайтҡан дивизия командиры бер аҙ ял итеп алырға әҙерләнгәндә, полковник Голенев килеп инде.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, ике приказ алдыҡ! Береһе яҡын-тирәләге игенде урып-йыйыу эше беҙҙең дивизияға йөкмәтелеүе хаҡында, икенсеһе — совет ғәскәрҙәре Новочеркасскийҙы һәм Ростовты ҡалдырып киткәндән аҙаҡ, 1942 йылдың 28 июлендә Оборона Халыҡ комиссары Сталин ҡул ҡуйған 227 номерлы приказ... Приказда әйтелеүенсә: «Бер аҙым да сигенмәҫкә!» Сигенеүселәр үҙебеҙҙең махсус хәрби частар тарафынан атыласаҡ!

— Үҙебеҙҙекеләр — тылдан, немецтар — ҡаршынан ҡырасаҡ икән! — Шайморатовтың төҫө үҙгәрҙе.

— Башҡаса әмәл ҡалмағандыр... Сталинград эргәһендәге алыш та киҫкенләшә бит.

— Приказ секретныймы?

— Уның ситенә «Без публикации» тигән гриф ҡуйылған. Әммә боецтарҙың һәммәһен таныштырырға ҡушылған. Нәзиров менән Абдуллинға хәбәр итеп...

— Ҡабаланмағыҙ, Иван Иванович, — тип бүлдерҙе уны дивизия командиры. — Тәүҙә үҙем танышырға теләйем. Приказды ҡалдырығыҙ.

Ҡот осҡос ҡаты приказ ошоға саҡлы немец командованиеһы сығарған приказға оҡшаш булыуын асыҡлағас, Шайморатов аптыраны. Мәскәү эргәһендә барған һуғыштарҙан һуң немец һалдаттарының һуғышсанлығы кәмеү, күңел күтәренкелеге төшөү сәбәпле, сигенеүсе ғәскәрҙәрҙе тотҡарлаусы махсус отрядтар ҡуйғайны фашистар. Бына хәҙер, уларға һылтанған һымаҡ, Ставка шундай ысулды үҙебеҙҙә ҡуллана. Немец армияһында ойошторолған махсус отрядтар ышанысһыҙ дивизиялары артына ҡуйылып, юғарынан рөхсәтһеҙ үҙ позицияларын ҡалдырған паникерҙарҙы урында атырға ҡушылғайны. Ошондай ҡәтғи саралар менән немецтар тейешле маҡсаттарына иреште, «хәҙер немец ғәскәрҙәре ҡышҡа ҡарағанда яҡшы һуғы-

ша... Был тәңгәлдә дошмандан өйрәнмәҫкәме...» тигән һығымта яһала приказда.

Әлбиттә, фронтта хәл ауыр һәм үтә ҡатмарлы ине. Приказдан күренеүенсә, беҙҙең 70 миллион халҡыбыҙ, 800 миллион бот икмәгебеҙ дошман баҫып алған ерҙәрҙә ҡалған. Артабан сигенеү — үҙенде һәм Ватанды харап итеү. Совет ғәскәрҙәре тарафынан ҡалдырылған һәр ер киҫәге дошманды көсәйтеп, беҙҙең оборонаны, беҙҙең Ватанды көсһөҙләндерә, тип яңы документта былай яҙылған: «Бер аҙым да сигенмәҫкә! Беҙҙең төп өндәмә шулай булырға тейеш. Аҡтыҡ тамсы ҡан ҡалғансы һәр позицияны ныҡышмалы һаҡларға, һәр киҫәк совет ере өсөн йәбешергә һәм һуңғы мөмкинлеккә саҡлы уны тоторға...»

Приказды уҡыуҙан бүленеп, Шайморатов уйға ҡалды. Фронтта төрлө хәлдәр булыуы ихтимал. Ундағы көтөлмәгән шарттар ҡаты приказда иҫәпкә алынмай. Ҡотолғоһоҙ ҡыйынлыҡтар килеп тыуғанда ла үҙ урынында ҡалаһаҡ ғәскәрҙәрҙе тулы ҡыйралыш көтә. Сөнки сигенеү уларға ҡәтғи тыйылған. Уны үтәмәүсегә үлем! Маневрҙар яһалған һуғышта тотҡан позицияны ҡалдырыу — ҡайһы саҡта бик мөһим шарт... Шуны аңламайҙармы икән ни Ставкала?..

Полковник Шайморатов 227 һанлы был приказды 1941 йылдың 16 авгусында сығарылған 270 һанлы документ менән сағыштырҙы. Ул ваҡытта беҙҙең ғәскәрҙәр бөтә фронт буйлап сигенде, күп частар ҡамауға эләкте һәм әсирлеккә төштө. Шул көндәрҙәге ул приказ дошман тарафынан әсирлеккә алынған һәр совет боецын Ватанға хыянат итеүҙә ғәйепләне. Плендағы командирҙар һәм политработниктар репрессияланырға тейеш булып, уларҙың туғандары һуғышта ҡатнашыусыларҙың ғаиләләре өсөн билдәләнгән льготаларҙан мәхрүм ителде. Ул ҡот осҡос документҡа, Сталиндан тыш, бүтән етәкселәр менән бергә Г. Қ. Жуков та ҡул ҡуйған. Бөтә әсирҙәргә шулай ҡарауҙың сәбәбен аңлауы ҡыйын. Сөнки күпселек командирҙар менән ҡыҙылармеецтар әсирлектә лә фашистарға ҡаршы көрәште һәм көрәшә. Ундай батырҙар миллионлаған. Политрук Фәхретдинов шикелле намыҫлы кешеләр аҙмы ни хәбәрһеҙ юғалыусылар араһында? Уларҙың һәммәһен Ватанға хыянат итеүҙә ғәйепләү һис шикһеҙ хата! Бер генә һуғыш та үлеләрһеҙ, яралыларһыҙ, әсирлеккә алыуһыҙ булғаны юҡ. 270-се приказ арҡаһында миллионлаған ғаилә нахаҡҡа ыҙа сигә. Уларға тағылған «хыянатсы» мөһөрө бер быуындан икенсеһенә, өсөнсөһөнә күсәсәк һәм бер ниндәй ғәйепһеҙ кешеләрҙең йөрәген мәңге һыҙландырасаҡ...

Мәскәү эргәһендәге һуғышта булған ҡатмарлы ваҡиғаларҙы Шайморатов әле лә бик яҡшы хәтерләй. Хөкүмәт етәкселәренең яңылышыуҙары арҡаһында ул саҡта байтаҡ дивизиялар, корпустар, хатта армиялар дошман ҡамауына эләкте. Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа ла пленға төшөүселәр күп булды. Ләкин ундағы беҙҙең ғәскәрҙәр баш һалманы. Улар дошмандың егерме һигеҙ дивизияһына тотҡарлыҡ яһамаһа, Мәскәү һаҡланыр инеме? Ундағы совет ғәскәрҙәренең батырҙарса көрәше бәрелеш яҙмышына ҙур ыңғай йоғонто яһаны. Верховный Баш командующийҙың етди хаталары өсөн рядовой ҡыҙылармеец йәки командир ғәйепләме ни? Йәки бына Киев ҡалаһы өсөн барған һуғышты ал. Киевты һаҡлау мөмкинлеге ҡалмауын аңлап, Жуков беҙҙең ғәскәрҙәрҙе Днепр аръяғындағы рубежға күсерергә теләгән. Сталин бындай тәҡдим индергән өсөн Жуковты Генеральный штаб начальнигы вазифаһынан бушатты. Һөҙөмтәлә Киевты ҡалдырҙыҡ, ундағы армия дошман ҡулсаһына эләкте, фронт командующийы, меңәрләгән командирҙар һәм боецтар һәләк булды, тиҫтәләрсә меңләгәне әсирлеккә төштө, һәм уларҙың барыһына ла хыянатсы мөһөрө баҫылды. Ошондай фажиғәгә кем ғәйепле?..

«Уның дөрөҫлөгөн, ысын хәҡиҡәтте тик тарих ҡына асыҡлаясаҡ. Әммә хәҙер, ил яҙмышы хәл ителгән яуаплы осорҙа, беҙҙең бурыс — Ставканың һәр приказын тайпылышһыҙ үтәү!» — тигән һығымтаға килеп, полковник Шайморатов ярҙамсыларын йыйырға бойорҙо.

## XIII

Дивизияның һыбайлылары дошмандан азат ителгән колхоз баҫыуҙарындағы игенде урып-һуғып, складтарға оҙатты.

Эш үтә ауыр шарттарҙа барҙы.

Көҙгә табан көндәр боҙолдо, ҡар ҡатыш ямғырҙар яуҙы. Игендең ҡар аҫтында ҡалыуынан ҡурҡҡан полковник Шайморатов баҫыу эштәре менән ҡыҙыҡһынып торҙо. Бөгөн, алтынсы октябрҙең таңында, ныҡ һыуытыуына һәм үҙәккә үтерҙәй киҫкен ел сығыуына ҡарамаҫтан, блиндажда ултырып сыҙамайынса, иген әҙерләүсе хәрби частар эргәһенә барҙы.

Бер төркөм һыбайлылар тимерселәрҙән эшләтеп алған ураҡтар менән иген ура, икенселәре көлтә бәйләй, өсөнсөләре иҫке мал аҙбарына урынлаштырылған молотилкаларҙа ашлыҡ һуға, дүртенселәре төрлө ерҙәргә йәйеп иген киптерә... Ләкин ризаһыҙлыҡ белдереүсе юҡ. Киреһенсә,

хужалыҡ эштәрен ныҡ һағынған кавалеристар арыу-талыуҙы белмәй, дәрт һәм сәм менән эшләй. Уларҙың үҙ-ара һөйләшеүҙәрен тыңлаған полковник Шайморатов һуғышҡа тиклемге тыныс тормошто күҙ алдына килтерҙе. Уға тыуған Биштәкә ауылында бик аҙ ваҡыт йәшәргә тура килһә лә, малай саҡ тәьҫораттары әле һаман иҫендә һаҡлана. Иртәнге ҡояш ҡалҡҡанға саҡлы атаһы менән аттар аҙбарына барыуын, йоҡомһорап торған хайуандарҙың тир еҫен йәки йәм-йәшел үләндәрҙең еҫе нисек аңҡыуын ҡасан да булһа онотоуы мөмкинме ни?..

Ҡул тирмәнендә тартҡан ондан бешерелгән йып-йылы, йоп-йомшаҡ икмәк менән Миңлеғәле сәй эсергә генә ултырғайны, үҙен эҙләп элемтәсе килеп етте.

— Иптәш комдив, штаб начальнигы полковник Голенев һеҙҙең йәһәтерәк ҡайтыуығыҙҙы һораны.

Дивизия штабының плащ-палатка менән ҡапланыулы ишеге аша уҙып, Шайморатов блиндажға инде. Тоноҡ төшкән шәм яҡтыһында саҡ төҫмөрләнгән командирҙар һикереп торҙо. Ул ултырырға ҡушып ишара яһаны.

— Нимә бар?

Уға йәһәт кенә яуап ҡайтарыусы булманы.

Дивизияның политбүлек начальнигы Абдуллин, Нәзировтың терһәгенә еңелсә ҡағылып, полковник Голеневҡа ҡараны.

— Иван Иванович, серҙе дивизия командирына асабыҙмы?

— Белмәйем. — Голенев көләмһерәне. — Башҡорт халҡының боронғо ғәҙәте буйынса, бәлки, һөйөнсө алырға кәрәктер Миңлеғәле Минһажетдиновичтан?

Тыумыштан аҙ һүҙле, мәғәнәһеҙгә шаяртыуҙы йәне һөймәгән Шайморатов асыуланды:

— Ниндәй һөйөнөс тағы?

Блиндажға йыйналыусылар, ни әйтергә белмәйенсә, уңайһыҙланған ҡиәфәттә бер-береһенә ҡаршты.

— Шаяртыуға мин ғәйепле, — тип өндәшкән ҡатын тауышын ишетеп, Шайморатов артына әйләнеп ҡараны. Гилзенән яһалған тоноҡ шәм яҡтыһында мөйөштә торған ҡатынды күргәс, аптырап ҡалды. Ул ҡатындың ҡыҫҡа һары сәсенә, киң маңлайына, тура танауына, тулы йөҙөнә текләнгән көйө торҙо-торҙо ла, бышылдап ҡына әйтте:

— Оля!.. Оленькам!..

— Миша, ҡәҙерлем минең! — тип Ольга Павловна иренең ҡосағына ташланды...

Блиндаждағылар, уларға ҡамасауламаҫҡа тырышып, шунда уҡ юғалды.

Ҡатынын ҡыҫып ҡосаҡлаған Миңлеғәле, бер аҙ тынысланып, ҡыҙы Октябрина хаҡында һорашты, алдан хәбәр итмәйенсә килгәне өсөн ҡатынын шелтәләп тә алды.

Фронттағы ире менән иҫән-һау осрашыу бәхетенә ирешкән Ольганың зәңгәр күҙҙәре шатлыҡлы оҫкондар сәсеп баҙланы, алсаҡ аҡһыл йөҙөнән һары һағыш һәм мөхәббәт хисе ағылған һымаҡ тойолдо. Ул, Миңлеғәленең муйынынан һығып ҡосаҡланы ла, сикәһен сикәгә ҡыҫҡан көйө, яғымлы шыбырланы:

— Һағындым!.. Бик тә һағындым, Мишенькам!.. Һинең менән бергә икәнлегемә күңелем һаман ышанмай!..

— Миңә лә һәммәһе төш шикелле. Уянырмын да, һине ҡапыл юғалтырмын һымаҡ, — тине Миңлеғәле. — Юлда йонсонңмо?

— Юҡ, — Ольга, сәсен елпендереп, баш сайҡаны.

— Ҡасан килереңде белһәм, машина ебәртер инем.

— Мине былай ҙа машинала алып килделәр. Һине ҡайҙан табырға икәнлегеңде һорап бер генералға мөрәжәғәт иттем. Ул шоферын саҡырып алды ла мине «эмка»-ла илтеп ҡуйырға ҡушты.

— Корпус командиры булды микән? Бәлки, бүтән берәйһелер, — тип Шайморатов адъютантын саҡырҙы.

Плащ-палатка ситен ҡайырып блиндажға ингән һонтор егет, Ольга Павловна алдында ҡапыл ҡыйыуһыҙланып, честь бирҙе.

— Тыңлайым, иптәш полковник!

— Сәй бармы?

— Сәй түгел, мәйе лә әҙер, иптәш полковник! Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ, — тип адъютант блиндажды ҡап уртаға бүлеп торған плащ-палатканы асып, «йоҡо бүлмәһе»ндәге топчанға өйөлөүле ризыҡҡа күрһәтте: — Барыһын да мәжлескә саҡырырға рөхсәт итегеҙ!

— Бар, саҡыр, — тине Шайморатов, йылмайып.

Адъютант блиндаждан сығыуға күп тә уҙманы, дивизия командирының ярҙамсылары ҡабаттан йыйналырға ла өлгөрҙө, һәм Ольга Павловнаның килеүенә арналған һый башланды.

Дивизия комиссары Нәзиров, Баймаҡ районында эшләгән тыныс йылдарҙағы бәхетле тормошто, белеш-таныштарын, фронтҡа китерҙән алда Өфөгә күсерелгән ҡатыны менән бала-сағаһын иҫенә төшөрөүҙән нык тәьҫирләнеп, «Урал»ды йырлап ебәрҙе:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын...

Көй шауҡымына арбалған кешеләр шып-шым булып ҡалды.

Был боронғо йырҙы Миңлеғәленән күп тапҡыр ишеткән булһа ла, Оля уның тәрән мәғәнәһен ошонда, блиндажда ултырғанда ғына аңлағандай булды һәм үҙендә ниндәйҙер эске тиберләнеү тойҙо...

Башын һалындырып боронғо йырҙы тыңлаған Шайморатовтың да ҡырыҫ йөҙө уйсан ине. Ул тыныс ултырып сыҙаманы, һәр саҡ үҙе менән йөрөткән баянын алды ла, ярһыуынан баҫыла алмайынса, «Илсе Ғайса»ны уйнап ебәрҙе, ә Нәзиров көйгә ҡушылды:

Аҙаштырған болан балаһылай,
Яңғыҙ башым ситтә лә интегәм...

Был йырҙы тәү башлап ишеткән полковник Белов та ғәмһеҙ ҡалманы. Ниндәйҙер һағыш менән һуғарылған көй бөтә халыҡ кисергән тормошҡа, фронтовиктарҙың яҙмышына ауаздаш икәнлеген тойҙо.

Баянда бирелеп уйнағандан һуң Шайморатовтың күңеле бушанып ҡалғандай булды, һәм ул күкрәк тултырып иркен тын алды.

— Ҡайҙарҙа ғына йөрөһәм дә, тыуған төйәгем күҙ алдынан китмәй, уның һәр ҡыуағы, хатта ташы ла минең күңелемә үрелеп үҫкән кеүек, төштәремә керәп ыҙалата.

Нәзиров Шайморатовтың уйсан йөҙөнә ҡараны ла, һорап ҡуйҙы:

— Миңлеғәле Минһажетдинович, һеҙҙең ауылға ни өсөн Биштәкә исеме ҡушылған икән?

— Минең ауылым исеме һеҙгә ҡыҙыҡ булмаҫ.

— Ниңә улай тиһегеҙ? Дивизия командирының тыуған ауылы тарихын белеү беҙгә лә зыян итмәҫ, Миңлеғәле Минһажетдинович, — тине полковник Голенев.

Шайморатов, байтаҡ өндәшмәй ултырғандан һуң, кружкаһы төбөндәге араҡыны иптәштәре менән сәкәштереп эсте лә ҡарттарҙан ишетеп белгәндәрен һөйләргә тотондо.

— Төп тамыр буйынса, мин айлин ҡәбиләһе башҡортомон. Ун етенсе быуаттағы бунтта ҡатнашҡан башҡорттарҙы батша карателдәре эҙәрләгән саҡта Урал аръяғындағы Борай буйынан ҡасып килеп, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районында урынлашҡанбыҙ. Минең нәҫел-ырыуҙы урындағы башҡорттар ҡәҙерләп ҡаршы алған. Ҡарағайлы һәм Иҫке Муса ауылы башҡорттары, үҙ ерҙәрен бүлеп биреп, минең нәҫел-ырыуҙы ҡунаҡ итеү өсөн биш тәкә һуйған. Итте ялан уртаһындағы тағанға аҫылы оло ҡаҙанда бешергәндәр. Аҙаҡтан, һый тамамланғас, яңы һалынасаҡ

ауылға «Биш тәкә», ә үҙҙәре бүләк итеп биргән урманға «Бүләк урманы» тигән исем биргәндәр... Минең нәҫелырыуым, тормоштары бик йәһәт ыңғайлауға ҡыуанып: «Беҙҙең эштәр, аллаға шөкөр, ишле» тип, ауыл ситенән аҡҡан йылғаға «Ишле» исемен биргәндәр. Тора-бара ул йылғаның исеме «Иштил»гә үҙгәртелгән...

— Ҡыҙыҡ, — тине Ольга Павловна. — Был хаҡта мин дә беренсе тапҡыр ишетәм.

Яурынына ап-аҡ шәл ябынып ултырған ҡатынының мөләйем йөҙөнә һоҡланып ҡараған Миңлеғәле: «Ҡайһылай һөйкөмлө, һәйбәт, сыҙамлы, аҡыллы минең Оленькам! Һин, тик һин генә минең берҙән-бер тоғро тормош юлдашым», — тип уйланы һәм тост күтәрҙе.

— Ольга Павловна менән минең Октябрина ҡыҙым һаулығына!

— Юҡ, — Ольга Миңлеғәлене төҙәтте, — барыбыҙҙың да һаулығы, фашист илбаҫарҙарын дөмөктөрөп, иҫән-һау тыуған илгә ҡайтыуыбыҙ өсөн!

Кружкаһы төбөндәге араҡыны түңкәрә эскәс, полковник Белов урынынан торҙо.

— Иптәштәр, үҙ ҡәҙеребеҙҙе юғалтмайыҡ. Юлда арыпталып килгән Ольга Павловнаға ла ял кәрәк!

— Григорий Андреевич хаҡлы, — тип Голенев ишеккә табан ыңғайланы.

Блиндаж эсе бушап ҡалды.

— Йоҡлайбыҙмы?

Ризалашып баш һелккән Ольга, өндәшмәйенсә, иренең муйынына килеп аҫылынды.

— Ҡәҙерлем минең, Мишенькам!..

Һуғышта, фронттың алғы һыҙығында ҡатыныңды осратыу, мөхәббәттең ялҡынын ҡабаттан тойоу үҙе бер оло бәхет түгелме ни?!

Миңлеғәле суфый түгел. Үҙ ғүмерендә ул байтаҡ бисәләр менән осрашты. Әммә Ольгаһы менән өйләнешеп йәшәй башлағандан бирле уны янында тойоу — һәр саҡ оло байрам. Ольгаһыҙ тормоштоң киләсәген күҙ алдына килтереүе лә мөмкин түгел!..

Ошо уҡ тойғоно Ольга ла кисерҙе. Ут эсендә йөрөгән иренең иҫән булыуына, ниндәй ҡыйын, ҡатмарлы шарттарҙа ла кешелек сифатын, яғымлылығын юғалтмауына, әүәлгесә ялҡынланып һөйә белеүенә шөкөр ҡылып, ул үҙ яҙмышына рәхмәт белдерҙе.

— Биштәкәнән хат киләме?

— Башҡортостандан сығып китерҙән алда ебәргән иҫке кейемдәремде килтереүҙәре хаҡында Ғәлимә һеңлем бер хат яҙғайны, шунан һуң бер ни юҡ!

«Улай булғас, Ҡамила апаһының үлеүен һаман ишетмәгән икән! Уны белмәгәне яҡшы», — тип уйланы Ольга, яман яңылыҡ менән ирен борсорға теләмәне.

— Ғәлимә миңә хатты йыш яҙа.

— Нисек йәшәйҙәр?

— Билдәле инде... Ауылдағы ҡыйынлыҡтарға зарлана...

Ҡултығы аҫтына йөҙө менән ҡапланып ятҡан ҡатынын һыңар ҡулы менән ҡосаҡлаған Миңлеғәле, салҡан ятҡан көйө юғарыға текләнеп, өндәшмәне. Бер ҡиәфәттә уйланып ята торғас, үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡоға сумды. Ләкин һиҙгерлеген юғалтманы. Төнгө тынлыҡты боҙоп, һирәк-мирәк ҡысҡырып өндәшкән һаҡсыларҙың тауышын, аттарҙың кешнәшеүен йәки ҡайҙалыр алыҫта пулемет тәтелдәүен йоҡо аралаш ишеткән һайын һиҫкәнде, беленер-беленмәҫ ҡыймылданы. Тирә-яҡтағы тыныслыҡты һағайыулы тыңлағандан һуң, тынысланып, Ольгаһын ҡосаҡлаған көйө, йәнә хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Иренә һырығып ятҡан Ольганы ғына, юлда бик йонсоуына ҡарамаҫтан, йоҡо алманы. Ул, юлда килгәндә һәм бында күргән-ишеткәндәренә тәьҫирләнеп, Миңлеғәленең хәрби хеҙмәте үтә тынғыһыҙ, хәүефле, үҙе өсөн генә түгел, дивизиялағы барлыҡ кешеләр менән ил яҙмышы өсөн яуаплы икәнлеге хаҡында уйланды. Ҡасан да булһа берберенән айырылмай йәшәргә яҙғанмы икән уларға?..

Таң беленә башлағанда, Шайморатов аяҡ өҫтөндә ине инде. Шул саҡ кемдеңдер аяҡ тауышы ишетелде.

— Ҡем?

— Зинһар, ғәфү итегеҙ, Миңлеғәле Минһажетдинович. Мөмкинме? Был — мин!

Штаб начальнигы Голеневтың тауышын ишеткәс, Шайморатов блиндаждан уға ҡаршы сыҡты:

— Ольга йоҡлай, — тине ул бышылдап ҡына. — Йә, ни булды?

— Дошман лагерынан беҙҙең яҡҡа сыҡҡан ике кешене килтерҙеләр.

— Ҡемдәр улар?

— Дошман ҡамауында ҡалған 62-се уҡсы дивизия кешеләре. Береһе батальон комиссары һәм шул уҡ дивизияның парткомиссия секретары, ти; икенсеһе — капитан, батальон штабы начальнигы булып хеҙмәт иткән. Икеһе лә бик ябыҡҡан, бетләгән, өҫ кейемдәре ылҡаланып туҙған. Батальон комиссары менән капитан, гитлерсылар лагерынан ҡасып киткәс, ике аҙна буйы төрлө үлән ашап көн күргән.

— Документтары бармы?

— Ҡомиссар партбилетын гимнастеркаһының еңе осонда нисектер йәшереп һаҡлай алған, ә икенсеһенең документы юҡ.

— Тамаҡтарын туйҙырып, йүнле кейем кейҙерегеҙ ҙә, корпус штабына оҙатығыҙ!

Полковник Голеневтың йомошо бөтмәгәйне әле.

— Миңлеғәле Минһажетдинович, беҙҙең дивизияға беркетелгән бер танкист, танкы армияһынан алынған бойороҡ буйынса, Уралға танкылар алырға китә. Уның менән һөйләшергә теләмәйһегеҙме?

— Саҡырығыҙ!

Блиндажға ингән танкист, итек үксәләрен ҡуша һуғып, честь бирҙе.

— Здравия желаю! Лейтенант Сөләймәнов...

— Исемең нисек, лейтенант?

— Исемем Мөҙәрис, иптәш полковник!

— Башҡортостандың ҡайһы районынан?

— Бөрйән районынан, иптәш полковник!

— Яҡшы, — тине Шайморатов һынын ҡатырып торған лейтенанттың мөләйем йөҙөнә тура ҡарап. — Бер үтенесем бар, лейтенант. Уралдағы заводҡа барһаң, танкылар алыуға бер-бер тотҡарлыҡ килеп сыҡһа, минең исемдән Башҡортостан Халыҡ Ҡомиссарҙары Советы председателе Ваһапов иптәшкә, йәки партияның өлкә комитеты секретары Вострецов иптәшкә мөрәжәғәт ит! Улар һиңә тейешле ярҙам ойошторасаҡ.

— Есть, — тип лейтенант китергә булғайны, Шайморатов бүленгән һүҙен дауам итте:

— Өфөлә мотлаҡ булырға тырышығыҙ. Унда «Башнефть» комбинатына, Ҡувыкин иптәшкә ин. Уға беҙҙең дивизияға беркетелгән танкыларҙың бензинһыҙ тороуын һөйләп бир. Йәнә шуны иҫенә төшөр: улар беҙҙең иң яҡшы взвод командиры Хөсәйеновты нефть сығарыу эшенә алып ҡалды, ә танкыларыбыҙ өсөн бензин етешмәй. Хәйерле юл!

Полковник Голенев менән лейтенант Сөләймәнов блиндаждан сығып китеүгә, дивизияның разведка начальнигы менән Нәзиров килеп инде.

— Иптәш полковник, үткән аҙнала юғалған һигеҙ һыбайлыбыҙҙы разведчиктар тапҡан!

— Ҡайҙа улар? — тип һораны Шайморатов.

— Фашистарға пленға эләккән булғандар... Алтыһының аяҡ-ҡул бармаҡтарын, танауҙарын киҫеп, сәстәрен яндырғандар, күҙҙәрен соҡоғандар. Шунан, уларҙың мәйеттәре тейәлгән арбаға ике ҡыҙылармеецты егеп, беҙҙең яҡҡа алып сыҡҡан ваҡытта, фашистарҙы беҙҙең разведчиктар ҡыйратҡан һәм береһен пленға алғандар...

Яңылыҡты Шайморатов ауыр кисерҙе. Оҙон һаплы төрөпкәһен ҡабыҙҙы ла, ауыҙ-танауынан борҡоған ҡуйы төтөндөң ағымынан күҙҙәрен алмай, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Байтаҡ уйланып ултырғандан һуң, ул баш ҡалҡытып ҡараны.

— Фашистарҙың йыртҡыстарса ҡыланышы хаҡында барыһы ла белергә тейеш! Һәр полк, һәр эскадрон, һәр взвод дошмандан үс ҡайтарыу ярышын ойошторорға бурыслы! Кем нисә фашисты үлтергәнен иҫәпкә алырға! Фашистарға ҡарата бер ниндәй ҙә аяу булмаҫҡа тейеш! Ошо миҫал һәр ҡыҙылармеецта фашисҡа ҡарата ерәнеү, асы нәфрәт тойғоһо уятырға тейеш!

— Ҡаһарман һыбайлыларҙың кәүҙәләрен ерләгән саҡта һәр подразделениенан вәкилдәр саҡырырға уйлайбыҙ. Боронғо башҡорт һуғышсылары йолаһы буйынса, ҡәбер өҫтөндә йылҡылар салыу һәм башҡа төрлө мажаралар ойоштороу килешерме? — тип һораны дивизия комиссары Нәзиров.

— Фашистарға ҡаршы һуғышырға рухландырырҙай һәр йоланы файҙаланыу урынлы, Мөбәрәк Зиһаниевич, — тине Шайморатов.

Комиссар менән разведка начальнигы көн яҡтырғанда ғына китте.

Бер ни һиҙмәй йоҡлаған ҡатынын уятмаҫҡа тырышҡан Шайморатов, иртәнге сәйҙе лә эсмәйенсә, дивизия штабына китте. Ул күренгәс тә:

— Фашистар танкылар ярҙамында 275-се кавполк тәңгәленән һөжүмгә әҙерләнә, — тине полковник Голенев.

— Һеҙҙең тәҡдим?

Голенев, өҫтәлгә йәйеүле карта-схемалағы һыҙыҡтың буйынан буйына дошмандың ниндәй частары тупланыуын, уларға ҡаршы торған беҙҙең ниндәй көстәрҙең нисек урынлашыуын ҡәләм осо менән күрһәтеп, ҡыҫҡаса аңлатты ла:

— Был план артдивизион командиры һәм танкистар менән килешелде, — тине.

— Хуплайым, — тине Шайморатов. — Мин хәҙер 294-се кавполкка барам, ә һеҙ, Григорий Андреевич, — тип ул полковник Белов яғына ҡараны, — 275-се кавполкта булығыҙ. Кусимов менән бергә дошман һөжүмен кире ҡағыуҙы ойоштороғоҙ һәм штаб менән бәйләнеш тотоғоҙ!

Полковник Белов, ризалыҡ белдереп, честь бирҙе.

— Юлланырға рөхсәт итегеҙ!

— Рөхсәт.

Голенев эргәһендә оҙаҡ булманы Шайморатов. Сәйгүнендәге сәйҙе йылыттыртып эсте лә 294-се полкка китте.

## XIV

275-се кавполк тарафынан дошман атакалары кире ҡағылғандан һуң да йүнләп ял итергә, Ольга янында булырға тура килмәне Шайморатовҡа. Ул, корпус штабынан алынған яңы приказ менән танышҡас, ҡапыл күңелһеҙләнеп, ҡатынын ҡосаҡланы.

— Ҡәҙерлем, мөхәббәтем минең, танһығыбыҙ ҡанғансы күрешә алмайынса, йәнә айырылышабыҙ! Һиңә бөгөн үк ҡайтып китергә тура килер!

— Ниңә ашығыс айырылышыу, Мишенька? — Ольга, йәшләнгән күҙҙәрен мөлдөрәтеп, иренә ҡараны.

— Беҙҙең дивизия икенсе урынға күсереләсәге хаҡында яңы приказ алынды...

— Минән сер булмаһа, ҡайҙа күсерелә?

— Ниндәй сер булһын һинән, — тине Миңлеғәле, ҡатынының күңелен табырға тырышып. — Төн уртаһында Тербуны-2 ауылынан сығып китергә һәм ҡараңғыла Үрге Ломовецта булырға тейешбеҙ.

— Эргәңдә ҡалырға рөхсәт ит!

— Ярамай, һөйөклөм, һис ярамай, — тине Миңлеғәле, бошонҡо тауыш менән. — Минең теләк кенә хәл ҡылһасы мәсьәләне! Беҙ бит фронтта! Көтөлмәгән хәлдәр килеп сығыуы ихтимал, ҡәҙерлем!..

Дивизия командиры булып та ябай ғына һымаҡ тойолған мәсьәләне хәл ҡылырға көсө етмәгән иренең күкрәгенә йөҙө менән ҡапланып, Ольга оҙаҡ, бик оҙаҡ иланы. Әҙерәк тынысланғас, ауыр һуланы.

— Ҡыҙғаныс, өйләнешкәндән бирле һис кенә лә бер көн тыныс йәшәй алғаныбыҙ юҡ бит, Миша, Мишенькам!.. — Үҙен ҡулға алырға тырышҡан Ольга үкенгәндәй итеп әйтте: — Ғүмерем буйы һинән айырым йәшәү ялҡытты мине, Миша!

— Башҡаса әмәл юҡ, һөйөклөм, — тип Миңлеғәле ҡатынының маңлайынан, күҙҙәренән үпте. — Дошманды ҡыйратҡас, гел генә бергә йәшәрбеҙ! Йәйге матур көндәрҙә, Октябрина ҡыҙыбыҙ, һин, мин, Ҡырымдағы санаторийҙарҙа ял итербеҙ, Ҡара диңгеҙҙә рәхәтләнеп һыу инербеҙ, йәки Башҡортостанға ҡайтырбыҙ.

— Һуғыш бөтмәйенсә осрашырға тура килмәҫ микән ни беҙгә, Мишенька?

— Әйтеүе ҡыйын, Оленькам... Шайтан ғына өмөтһөҙ, тиҙәр беҙҙең ауыл ҡарттары. Өмөтөңдө өҙмә.

Ольганы Мәскәүгә оҙатҡас, Миңлеғәле үҙенә урын таппай йөрөнө. Ярты йөрәген алып киттеме ни! Ҡатыны ҡайтып китте, ә ул һаман шул хәрби тормошо эсендә яңғыҙы

тороп ҡалды. Октябринаһы булмаһа, граждандар һуғышы йылдарындағы айырым командирҙар һымаҡ, Ольгаһын эргәһенән ебәрмәй, гел бергә алып йөрөр ине... Хәҙер берҙән-бер ҡыҙы хаҡында ла уйларға, хәстәрлек күрергә кәрәк...

Блиндажда Шайморатов үҙенә йәм тапманы. Ер аҫтындағы тормошо үтә бер төрлө, һөйкөмһөҙ, тоноҡ, ялыҡтырғыс һымаҡ тойолдо. Күңелен сорнаған болоҡһоу уйҙарҙан йәһәтерәк ҡотолорға тырышып, ул танкылар алыр өсөн Уралға киткән Бөрйән егете Сөләймәнов Мөҙәристән килгән хатты уҡыны. ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Вострецов бөтә нәмәне дивизия файҙаһына хәл ҡылырға ярҙамлашыуы, уның кәңәше буйынса Сөләймәновтың Ишембайға һәм Туймазыға барыуы, нефтселәр менән осрашҡанда фронттағы хәлдәрҙе, башҡорт егеттәренең фашистарға ҡаршы батырҙарса һуғышыуы хаҡында һөйләүен белгәс, дивизия командирының күңеле бер аҙ күтәрелде.

— Ниндәй маладис, өлгөр булып сыҡты Бөрйән егете! — тип ул блиндажға бер-бер артлы килеп ингән Голенев менән Нәзировҡа ҡараны: — Танкист Сөләймәновтың хатын уҡып тора инем...

— Иптәш полковник, ул хатты һеҙгә мин ҡалдырҙым, — тине Нәзиров. — Сөләймәнов нефтселәр менән осрашҡанда беҙҙең Хөсәйенов та шунда булған. Хөсәйенов элекке үҙ взводы яугирҙарына хат яҙып ебәргән...

— Ул ҡайҙа эшләй?

— Һаман да Ишембай нефть промыслаһында икән!..

— Яҡшы, — тип бүлдерҙе Шайморатов. — Хөсәйеновтың хатын егеттәр уҡыуы һәйбәт! Ваҡытты бушҡа уҙғармайыҡ. Подразделениеларҙа ошо ике хатты ҡысҡырып уҡыуҙы ойоштороғоҙ! Икенсе үтенесем шул, бынан ҡуҙғалып киткәнсе дивизия исеменән Туймазы һәм Ишембай нефтселәренә махсус хат яҙып ебәрергә кәрәк!

— Ундай хатты Карнай әҙерләне, — тине Нәзиров. — Уҡып ишеттерәйемме?

— Уҡығыҙ!

— Есть, — тине Нәзиров һәм хатты ҡысҡырып уҡырға кереште:

— «...Ишембай һәм Туймазы комсомолецтары — нефтселәре! Тыуған Ҡыҙыл Армияға нефтте күберәк бирегеҙ. Артыҡ етештерелгән һәр тонна яғыулыҡ — фашист бандаларына үлем икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Яңы ятҡылыҡтарҙы эҙләгеҙ, иҫке скважиналарҙан нефтте күберәк сығарығыҙ. Нефтте юғалтыуҙарға ҡаршы көрәшегеҙ. Шыйыҡ яғыулыҡтың бер генә килограммы ла түгелмәҫкә

тейеш. Арыу-талыуҙы белмәйенсә, көнөн-төнөн эшләгеҙ. Фашистарҙы өҙлөкһөҙ туҡмарға кәрәк.

...Белорет һәм Баймаҡтың комсомолецтары һәм йәштәре! Туған Ҡыҙыл Армия хәрби машиналар өсөн һеҙҙән юғары сифатлы күп металл көтә. Һәр тонна металл — йөҙәрләгән туптар һәм миналар, танкыларға броня, самолеттар өсөн материал икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ...»

Хат-мөрәжәғәтте иғтибар менән тыңлаған Шайморатовтың айырым теләктәрен өҫтәп яҙғандан һуң, Нәзиров үҙ эше менән китте, ә полковник Голеневҡа Шайморатов полк командирҙары менән комиссарҙарҙы йыйырға ҡушты.

Дивизия командиры кәңәшмәне башларҙан алда Күсимов менән Макаевты подполковник званиеһы алыуҙары менән ҡотланы ла, корпус командирының приказын иғлан итте һәм юлға сығырға әҙерлек эштәрен нисек алып барырға кәрәклеген ентекләп аңлатты.

Һигеҙенсе октябрҙең таңында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы, гитлерсылар менән өс ай буйына аяуһыҙ алышҡандан һуң, үҙ позицияһын уксы дивизияға тапшырып, көнсығышҡа табан юлланды.

Фронттан кире яҡҡа ниндәй маҡсат менән барыуҙарын бер кем дә белмәне.

Үҙҙәрен тылға ҡасып барған һымаҡ итеп тойған Байдәүләтов Зәки, ғәжәпләнеүенең сигенә етеп, лейтенант Атаевҡа мөрәжәғәт итте:

— Ниңә кире киттек?

Ошо хаҡта үҙе лә баш ватҡан взвод командиры, нисек яуап ҡайтарырға белмәйенсә, ҡырт киҫте:

— Тейешле урынға еткәс, барыһын белербеҙ!

Ҡапыл кәйефһеҙләнгән Байдәүләтов, һөмһөрө ҡойолоп, лейтенант Атаевтан арттараҡ тороп ҡалды. Уҡсылар взводын ҡыуып еткән Сәғит Әлибаевтан һорашып та ҡайҙа барыуҙарын асыҡлай алмағас, ул башҡаса ныҡышманы.

Дивизия үткән юл фронттан алыҫ булмау сәбәпле, кавалеристар көндөҙ урманда туҡталып ял иттеләр ҙә ҡараңғы төшөү менән ҡабат ҡуҙғалдылар.

Көндәр һалҡын торҙо. Шыр ҡола яланға барып сыҡҡас, ел көсәйҙе. Дошман ғәскәре булған был ерҙәрҙә бөтә нәмә яндырылған һәм ҡыйратылған. Фашистар тарафынан таланып, бер ниндәй мөлкәтһеҙ-хужалыҡһыҙ тороп ҡалған урындарҙағы кешеләр үҙҙәре ярҙамға мохтаж булыуҙары сәбәпле, аттарға бесән-һалам табыуы ла ҡыйынлашты. Ялға туҡталған саҡта һыбайлылар туң далалағы үлән ҡалдыҡтарын йыйып аттарына ашатты...

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының егерме бишенсе йыллығы алдынан, биш йөҙ километрлы маршрутты көс-хәлгә уҙып, Дон йылғаһының уң яҡ ярындағы Слащевская станцияһында туҡталдылар. Шунда ғына яугирҙар ҡаты бәрелештәр барған Сталинградҡа яҡынлашыуҙарын аңланылар. Тимәк, уларҙы алда дәһшәтле алыштар көтә!

Көньяҡ-көнбайыш фронттың Бишенсе танк армияһына[1] буйһондоролған һигеҙенсе кавалерия корпусы сафындағы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Елан станицаһы эргәһендәге тәрән соҡорҙа урынлашты. Шунда ентекле маскировка яһалып, немецтарға ҡаршы оло һөжүмгә әҙерлек алып барған осорҙа Башҡортостандан хөкүмәт делегацияһы килеүе хаҡында ишеткәс, Шайморатов шатланды.

— Делегация ағзалары әле ҡайҙа икән?!

— Калач ҡалаһында туҡталғандар, — тине полковник Голенев.

— Делегация етәксеһе билдәлеме?

— Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы председателе урынбаҫары иптәш Вальшин, ти.

— Осрашыуҙы ҡасанға билдәләнегеҙ?

— Бөгөн кис, иптәш комдив! Ә иртәгә, иртәнге сәғәт алтыға, станцияға Башҡортостандан килгән бүләктәрҙе алыр өсөн ылауҙар ебәрергә ҡуштым.

— Был хаҡта полктарға ла хәбәр итергә кәрәк.

— Полктарҙағы ылауҙарҙы ла файҙаланабыҙ. Ул тиклем күп бүләкте ташыуы еңел булмаясаҡ, — тине Голенев. — Көньяҡ-көнбайыш фронты һуғышсыларына Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы алтмыш вагон бал, ит, май, төрлө тәмле-татлы ризыҡтар килтергән. Унан тыш, һигеҙ вагондағы посылкаларҙа кешеләрҙән йыйылған китаптар, тәмәке, папирос, һабын, йылы өҫ кейеме, ойоҡбаштар, бейәләйҙәр... Уларҙың күпселек өлөшө беҙҙең дивизияға тәғәйенләнгән...

Тыуған ауылы Биштәкәгә ҡайтҡанда кешеләр аҡтыҡ әйберҙәрен тапшырыуын күреп белгәнлектән, кавалеристарға өләшеләсәк бүләктәрҙең нисек итеп йыйналыуын Шайморатов күҙ алдына килтерҙе. Үҙҙәре ас-яланғас булғанда ла яҡташтарының башҡорт дивизияһы хаҡында хәстәрлек күреүе һоҡландырҙы.

[1] Сталинград өсөн барған һуғыш осоронда тәү башлап танк армияһы төҙөлгәйне. Ләкин танк армияһы сафында күберәге уҡсы дивизиялар булды. Мәҫәлән, 5-се танк армияһына алты уҡсы дивизия, ике танк һәм бер кавалерия корпусы индерелде.

— Митинг уҙғарабыҙҙыр бит? — тип һораны полковник Голенев.

— Уҙғарабыҙ.

— Ҡасан?

— Замполит[1] Нәзиров иптәшкә тапшырығыҙ, митингыны көндөҙгө сәғәт бергә әҙерләтһен!

— Есть!..

Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы менән осрашыу тетрәткес һәм мәңге онотолмаçлыҡ булды.

Ҡавалерия полктарында уҙғарылған митингыларҙа сығыш яһаған делегация етәксеһе Мөхит Вальшин һәм башҡа делегация ағзалары фронт өсөн Башҡортостан республикаһы хеҙмәтсәндәре тарафынан башҡарылған эштәр хаҡында һөйләнеләр һәм башҡорт халҡының һуғышсыларға фашист илбаçарҙарын аяуһыҙ ҡыйратырға өндәгән наказы менән ҡайнар сәләмен тапшырҙылар.

Улар артынса ялан уртаһында төҙөлгән трибунаға бербер артлы яуап һүҙе менән сыҡҡан яугирҙар дошманды аяуһыҙ туҡмарға ант иттеләр. Шунан аҙаҡ концерт башланды. Артистарҙың боронғо йырҙарҙы оçта башҡарыуҙарын, ҡурайҙа һәм баянда уйнауҙарын бик ныҡ тәьçирләнеп тыңлаған Байдәүләтов Зәкиҙең күҙҙәренә йәш эркелде.

— Әх, әртистәр йәнде тетрәтә, — тип бышылданы кемдер.

Мөхәммәтҡазы, алға һонолоп, яуҙаштарын киçәтте:

— Сеүегеҙ! Ана, Бәҙәр Йосопова апай сәхнәгә сыҡты!

Тауыш кәмеү менән, атаҡлы башҡорт артисткаһы Йосопова шағир Рәшит Ниғмәтиҙең «Үлтер, улым, фашисты!» тигән поэмаһын ятҡа уҡырға тотондо:

...Әгәр яуҙа ҡалтыраһа
    һинең ҡулың,
Ҡылысың һынһа, ҡурҡыуыңдан
    яҙа һуғып,
Бел: күкрәгем һиңә нәфрәт
    менән тулыр, —
Ҡайтма кире, һин түгелһең
    минең улым!..

Барлыҡ Башҡортостан халҡы яратҡан артистка ауыҙынан яңғыраған поэманы көсөргәнешле тыңлаған Байдәү-

---

[1] Ҡыҙыл Армияла етәкселекте үҙәкләштереү һәм хәрби комиссарҙар институтын бөтөрөү хаҡындағы СССР Верховный Советы Президиумы Указы нигеҙендә, элекке комиссарҙар командирҙарҙың политик эш буйынса урынбаçарҙары итеп ҡалдырылды һәм уларға хәрби звание бирелде: Нәзировҡа — подполковник, Әлибаевҡа майор һ. б.

латов, тетрәткес һүҙҙәрҙе үҙенә, тик үҙенә генә ҡарата әйтелгәндәй тойоп, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы нәфрәтләнеүенән ҡулындағы автоматын ҡуш ҡуллап ҡыҫты.

— Алтмыштағы атаңды
Ҡол итмәһендәр тиһәң;
Билгенәһен бөкрәйтеп,
Күҙгенәһен секрәйтеп,
Тарамышын тарттырып,
Тибеп һынын ҡатырып,
Ер итмәһендәр тиһәң, —
Үлтер, улым, фашисты!
Үлтер, улым, фашисты!..

Бәҙәр Йосопова артынса сәхнәгә бер-бер артлы сыҡҡан шағирҙар Сәйфи Ҡудаш, Баязит Бикбай, Ҡадир Даян һуғышҡа арналған шиғырҙарын, ә яҙыусы, «Башҡорт атлылары» газетаһы редакторы Али Ҡарнай фронтта яҙған хикәйәләрен уҡыны...

Концерт тамамланғандан һуң, сауҡалар араһындағы аҡландарҙа плащ-палаткалар йәйҙеләр ҙә ҡунаҡтарҙы ҡәҙерләп ултырттылар, һәм уйын-көлкөлө мәжлес башланды.

Күп һөйләүселәрҙе яратмаған, үҙе лә аҙ һүҙле, тыйнаҡ һәм баҫалҡы Шайморатов, ғәҙәттәге холҡона хыянат итеп, ҡунаҡтар араһында үҙен иркен тотто. Ҡурайсылар бейеү көйөн уйнап ебәреү менән, ул урынынан һикереп торҙо.

— Рәхим итегеҙ, ханым, — тип Бәҙәр Йосопованы һаҡлыҡ менән майҙан уртаһына алып сыҡҡас, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы баҫтылар ҙа ер һелкетеп бейергә керештеләр.

Дәртле көй ыңғайына бейеүселәрҙең етеҙ, оҫта хәрәкәтләнеүҙәренә дәртләнгән башҡа ҡунаҡтар ҙа, тыныс ултыра алмайынса, туҡталмай сәпәкәй һуҡты, әҫәрләнеп ҡысҡырышты:

— Һай, һай, һай!

— Үт килештерәләр!

— Аяҡтары ниндәй еңел!..

Танһығы ҡанғансы бейегән Шайморатов урынына барып ултырғас, майор Әлибаев уртаға сығып баҫты. Бер урында өйрөлөп, шпорлы итеген зыңҡылдата баҫып тапанды тапанды ла һаһылдап көлгән Ҡусимовҡа баш эйҙе.

— Таһир Тайыпович, ҡунаҡтарға һөнәрегеҙҙе күрһәтегеҙ!

— Мин бейеүемде ҡарау өсөн иң әүәл билет һатып алырға кәрәк! Бушлай йырларға ғына яратам мин, — тип шаярта-шаярта, ул «Сибай»ҙы йырлап ебәрҙе:

Иәшел генә сана, зәңгәр дуға
Ектерһәңсе, Фатимам, тур(ы) атҡа...

Мәжлес оҙаҡ барҙы.

Икенсе көндө кис, Башҡортостан хөкүмәте делегацияһын кире юлға оҙатырға әҙерләнгән ваҡытта, алдан хәбәр итмәйенсә, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына корпус командиры Борисов килде.

Рапорт тапшырған Шайморатовтың буй-һынына мәҙәк кенә ҡарап, ул көлөмһөрәне.

— Яҡташтарығыҙҙан айырылышыуы ҡыйынмы, генерал?

— Әлбиттә, иптәш комкор! — Еңелсә ҡыҙарынып, Шайморатов өҫтәне: — Ләкин һеҙ минең званиемды яңылыш...

— Яңылыш түгел, — тип бүлдерҙе уны Борисов. — Генерал-майор званиеһы бирелеүе менән һеҙҙе ихлас ҡотлайым, — тип ул үҙе менән алып килгән өр-яңы генерал погонын сығарып бирҙе. — Генерал икәнлегегеҙҙе яҡташтарығыҙ күреп ҡайтһын өсөн, ул погонды хәҙер үк тағығыҙ!

Көтөлмәгән яңылыҡҡа ҡаушаған Шайморатов, бындай ваҡытта әйтелергә тейешле һүҙҙе онотоп, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә, корпус командирын дуҫтарса ҡосаҡланы.

— Рәхмәт!..

Бындай ҡыланышы өсөн Шайморатовты Борисов шелтәләмәне. Башҡортостан ҡунаҡтары менән бергә ултырып сәй эсте лә, уларға яҡташтары менән хушлашырға ҡамасауларға теләмәйенсә, эйәрле атына атланды һәм китеп тә барҙы.

Генерал-майор званиеһы алыуы менән Башҡортостандан килеүсе ҡунаҡтар Шайморатовтан да бигерәк шатландылар.

— Шайморатов-генерал! Нисек йәтеш! Йыр кеүек яңғырап тора, — тине Ҡадир Даян.

— Наполеон ғәскәрен эҙәрләп, Парижды алыуҙа ҡатнашҡан Ҡаһым түрә менән ҡурайсы-сәсән Буранбайҙың һыбайлылары шикелле, һеҙҙең башҡорт егеттәренә лә фашистарҙы үҙ өңөндә — Берлинда дөмөктөрөп, иҫән-һау тыуған илебеҙгә ҡайтығыҙ!

— Салауат шикелле батыр булығыҙ, быуаттар буйы онотолмаҫтай дан яулағыҙ!

— Башҡорт генералы Шайморатовҡа дан, дан, дан! — тип һөрән һалып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, ҡурайсылар менән баянсылар уйнаған дәртле «Салауат» көйөнә ҡушылып, ҡунаҡтар берҙәм йыр башланы:

Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында...

Йырсыларға шағир Ҡадир Даян ғына ҡушылманы. Ул аулағыраҡ урынға китеп сүкәйҙе лә, елкендергес көй шауҡымына илһамланып, генерал Шайморатовҡа арналған шиғырының тәүге юлын яҙып ҡуйҙы:

«Башҡорттар китте һуғышҡа...»

Йыр-моң менән ҡунаҡтар оҙатылғандан һуң, Ольгаһы менән айырылышып ҡалғандағы шикелле, Шайморатов бәғерҙе әсетерлек юҡһыныу тойғоһон кисереп оҙаҡ яфаланды.

## XV

Башҡортостан делегацияһы оҙатылған көндөң кисендә корпус командирының приказы буйынса 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы урынынан ҡуҙғалды һәм Дон йылғаһына табан ыңғайланы.

Икенсе тәүлектең ҡараңғы төнөндә понтон күпер аша йылғаның ҡаршы ярына сыҡҡас, 8-се кавалерия корпусы сафындағы Башҡорт дивизияһы һыбайлылары Елан станцияһы ҡаршыһындағы тәрән уйһыулыҡта туҡталды.

Өҙлөкһөҙ яуған көҙгө һалҡын ямғырҙарҙан һуң юл бик ныҡ иҙелеүенә ҡарамаҫтан, машиналарға, арбаларға тейәлгән фураж, аҙыҡ-түлек, йылы кейем, хәрби ҡоралдар, боеприпастар, бензин һәм башҡа төрлө яғыулыҡ дивизия торған урынға ноябрҙең икенсе яртыһына тиклем ташылды.

Подразделениеларҙағы хәрби күнегеүҙәр менән тактик уйындар ҙа көсөргәнешле барҙы. Боецтар менән кәңәшмәләр, әңгәмәләр уҙғарылды, партия, комсомол ойошмалары йыйылыштарында коммунистарҙың һәм комсомолецтарҙың бурысы тикшерелде, иң алдынғы һыбайлылар ВКП(б) сафына ағза итеп алынды.

Көндәрҙең береһендә Шайморатов менән бүтән дивизия командирҙарын корпус командиры генерал-майор Борисов саҡыртты.

— Көньяҡ-көнбайыш фронтындағы совет ғәскәрҙәренең, шул иҫәптән корпус ҡарамағындағы дивизияларҙың контрһөжүмгә башланасағы көтөлә. Шуның өсөн әҙерлекте һәм уяулыҡты артабан көсәйтергә. Приказ булғас та дивизиялар дошмандың тәрән тылына үтергә, көньяҡ йүнәлешендәге Чир йылғаһын кисергә һәм Сталинградтан сиге-

нәсәк Паулюс ғәскәрҙәренең юлын быуырға тейеш, — тип ул һәр һыбайлы дивизияның тотҡан урынын картанан күрһәтте, уларҙың ҡайҙан һәм нисек һөжүм башларға тейешлеген аңлатты.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 8-се корпус башында барасағы һәм дошман менән беренсе булып бәрелештә ҡатнашасағы асыҡланғас, көпә-көндөҙ киң даланы иңләп дошманға ҡаршы барасаҡ һыбайлыларҙың ус төбөндәге кеүек күренеп торасағын күҙ алдына килтереп, Шайморатов дивизияға самолеттар һәм танкылар менән ярҙам итеүҙе һораны.

Корпус командиры Борисов уның тәкдимен иғтибарһыҙ ҡалдырҙы.

— Фашист илбаҫарҙарын әлегәсә батырҙарса тураусы Башҡорт кавалерия дивизияһының бер ниндәй ярҙамһыҙниһеҙ артабан да ҡыйыулыҡтар күрһәтеренә һәм корпустың барлыҡ подразделениеларына үрнәк булырына ышаныс тотам, — тине лә Шайморатовҡа китергә һәм дивизияла әҙерлек эштәрен башҡарырға бойорҙо.

— Ышаныс өсөн рәхмәт. Ләкин мин ярҙамға танкылар талап итәм, — тине Шайморатов, кире боролоп.

— Танкылар миндә юҡ, — тине Борисов ҡәтғи.

— Романенконан һорағыҙ!

— Уныһы, Шайморатов, минең эш! Бойороҡто үтәгеҙ!

— Есть, — тине Шайморатов теләр-теләмәҫ кенә.

Корпус командиры эргәһендә булып ҡайтҡас, борсоулы уйҙарына күмелеп, байтаҡ ваҡыт баш ватты Шайморатов. Башҡорт кавалерия дивизияһы яҙмыш ихтыярына тапшырылған һымаҡ булып тойолдо уға. Танкылар ярҙамында һыбайлылар фронтты йырһа, улар артынса барасаҡ уҡсы полктарға ирешелгән уңышты нығытыуы еңел булыр ине! Ә тейешле ярҙам менән нығытылмаған ҡоро приказ бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән... Корпус командирының был бойороғон бер ни тиклем үҙгәртеүҙе һорап, Бишенсе танк армияһы командующийы генерал-лейтенант Романенкоға мөрәжәғәт итергәме әллә? Комкор башы аша үрелеүе килешерме? Ул, бәлки, командующий бойороғона ярашлы шулай ҡушҡандыр?..

«Нисек кенә булмаһын, корпус командиры приказы үтәлергә тейеш», — тигән һығымтаға килгән генерал-майор Шайморатов таң алдынан ғына серем итеп алды ла үҙенең урынбаҫарҙары менән полк командирҙарын йыйҙыртты.

Кәңәшмә башланғас, үҙенең икеләнеү тойғоларын Шайморатов белгертмәне. Ул, ғәҙәттәге һалҡын ҡанлылығын юғалтмайынса, корпус командиры бойороғон иғлан итте

һәм Сталинград эргәһендә уҙғарыласаҡ контрһөжүм тураһында ентекләп туҡталды.

Иртәгеһе көндөң таңында, һөжүмгә әҙерлекте асыҡларға ниәтләнеп, атһыҙ ҡалған ҡыҙылармеецтарҙан ойошторолған уҡсы полкҡа барҙы дивизия командиры.

Ундағы ҡыҙылармеецтар иртәнге зарядкаға сыҡҡайны.

Беренсе ротаның старшинаһы, генерал-майор Шайморатов менән бергә йөрөгән уҡсылар полкы командирын алыҫтан күреп, барлыҡ көсөнә команда бирә башланы: «Ша-го-ом арш!.. Раз-два, раз-два!.. Выше ногу! Выше...»

Дивизия командиры, уҡсы ротаға барып етмәйенсә, боҫ борхотоп төтәгән поход кухнялары янына килде. Тары бутҡаһынан ауыҙ итте, сәй эсте. Аҙаҡ ул 275-се кавалерия полкына килде.

Был полкта ла Сталинград тәңгәлендәге контрһөжүмгә әҙерлек бара ине. Башҡорт егеттәренең берәүҙәре ҡылыстарын сарлай, ҡоралдарын таҙарта, икенселәре эйәрҙәрен төҙәтә, аттарын ашата-эсерә, дағалата, өсөнсөләре йөк арбалары менән аҙаплана, тәгәрмәстәрҙе дегетләй, өҫ-баштарын таҙарта, ямай...

Полктағы тәртип менән дивизия командиры ҡәнәғәт икәнлеген һиҙгән подполковник Күсимов:

— Беҙҙең егеттәр Берлинға саҡлы туҡталмай барырға әҙерләнә, иптәш генерал-майор, — тип шаяртты.

Шайморатов, өндәшмәйенсә, Дон йылғаһы аръяғындағы дошман позицияһын стереоторбанан күҙәтте.

Дивизияға һәр саҡ тотҡарлыҡ яһаясаҡ соҡор-саҡырлы юлдарҙы, урманлы йырындарҙы, төрлө нығытмаларҙы күҙ алдына килтерҙе Шайморатов. Ул үҙенең дошманды аңғармаҫтан атакалау планы тураһында уйланды. План һәйбәт булһа ла, танкылар ярҙам итмәгәс, уның ҡоро хыялға әүерелеүе ихтимал. Дошман танкыларына ҡаршы һыбай сабыу аҡылһыҙлыҡ түгелме ни? Самолеттар булмаған хәлдә лә, танкыларға ҡаршы танкылар кәрәк! Дошмандың бик күп самолеты, танкылары алдан юл ярып барасаҡ башҡорт кавалерия дивизияһына ябырыласағын белеп тә, корпус командиры Борисов Шайморатовтың тәҡдимен ниңә иғтибарһыҙ ҡалдырҙы икән?..

Һөжүм ваҡытындағы ике кавполктың төп йүнәлешен алдан билдәләү өсөн саҡырылған 313-сө кавполк командиры подполковник Макаев килгәс, Күсимов менән Әлибаев икеһе бергә йәшәгән ҡыҫыҡ һәм тәпәшәк кенә блиндажға инделәр. Генерал-майор Шайморатов йылы тимер мейес эргәһендәге берҙән-бер бүкәнгә ултырҙы. Ул, планшетынан сығарған картаны тубығына йәйеп, яһалма шәм яҡтыһында яҡшы төҫмөрләнгән түңәрәктәргә ҡараны.

— Һеҙҙең полктар һөжүм башланасаҡ ерҙәрҙе ныҡлап өйрәндеме?

— Әлегә ныҡлап түгел, иптәш генерал, — тип Ҡусимов урынынан ҡалҡынып ҡуйҙы. — Беҙҙең тәңгәлдәге дошман позицияһы беленмәçлек маскировкаланыуға ҡарамаçтан, ундағы айырым ҡоролмаларын асыҡларға өлгөрҙөк. Ҡаршы яр артындағы һөҙәк урындарҙа немецтарҙың тимербетонлы ут нөктәләре урынлашҡан. Ике полоса нығытмалары бар. Беренсеһе артынса икенсеһе һуҙылған. Һәр терәк нөктәнең төбөндә артиллерия-миномет позициялары, һалдаттары менән офицерҙары өсөн землянкалары һәм блиндаждары төҙөлгән.

Дивизия командиры бойорҙо:

— Дошман көсөн, уның уй-ниәтен ныҡлы белеү өсөн, һәр төндө фрицтар тылына разведчиктар ебәрергә, ә көндөҙ ныҡлы күҙәтеү ойошторорға һәм миңә һәммәһен хәбәр итергә!

— Есть, — тине Ҡусимов.

Шайморатовтың күҙ ҡарашы Макаевҡа төбәлде.

— Һуғыш ваҡытында берҙәм, уйлап хәрәкәт итергә өйрәнегеҙ! Полктар бер-береһен бәләнән ҡотолдороу сараһын күрергә тейеш. Йәшермәйем: был контрнаступление үтә ҡатмарлы һәм ауыр буласаҡ. Беҙҙең контрһөжүмебеҙҙе туҡтатырға, үҙебеҙҙе ҡыйратырға тырышасаҡтар. Дошманға ҡаршы һыбайлылар берҙәмлеген ҡуйығыҙ. Дошман өçтөнә аңғармаçтан ябырылығыҙ һәм яуланған плацдармды киңәйтә барығыҙ. Иң мөһиме — фрицтарҙың һуғыш тәжрибәһен үҙҙәренә ҡаршы файҙаланыу сараһын күрегеҙ, — тип йомғаҡланы ул сығышын.

Полктарҙа булып штабына ҡайтҡас, Шайморатовҡа полковник Голенев яңылыҡтарҙы хәбәр итте:

— Иптәш генерал, Бишенсе танк армияһы командующийы генерал-лейтенант Романенконың үҙгәреш индергән яңы приказы алынды!

— Ниндәй үҙгәреш?

— Командующийҙың үҙгәртелгән приказы буйынса, фронт ҡапҡаһын кавалеристар танкылар менән берлектә асырға тейеш! Ә пехота беҙҙән артта барасаҡ!

— Корпус командирының аҡылына барып еткән беҙҙең тәҡдим! — Шайморатов ҡәнәғәт йылмайҙы. — Былай булғас, үҙебеҙҙең планға ла айырым төҙәтмәләр индереү кәрәк, Иван Иванович!

— Төҙәтмәләр индерелгән яңы приказ әҙер, иптәш генерал, — тип Голенев папканан сығарған ҡағыҙҙы Шайморатовтың алдына килтереп һалды.

— Рәхмәт, Иван Иванович! Бында һәммәһе ентекле уйланылған, — тип Шайморатов приказға ҡул ҡуйҙы. Елкәһенән ауыр йөк төшкәндәй тойолдо уға.

1942 йылдың ун туғыҙынсы ноябре таңында, ҡырпаҡ ҡар ҡаплаған Дон далалары өҫтөндә канонада күкрәне. Фашистарҙың ҡыйратылған землянкаларынан, блиндаждарынан, ныҡытмаларынан күккә һибелгән бүрәнә-таҡта киҫәктәре менән дошман мәйеттәре бергә буталды...

— Иптәш генерал, ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, «катюша»лар ҙа беҙгә ярҙамлаша, — тип ҡысҡырып ебәрҙе Нәзиров.

Шайморатов мөмкин тиклем тыныс булырға, тулҡынланыуын бер кемгә лә белгертмәҫкә тырышты.

— «Ҡатюша»лар ваҡытлыса ярҙамлаша, — тип ул артналетты күҙәтеүен дауам итте.

Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа һыбайлылар полкы командиры Шайморатовҡа артиллеристарҙың бөгөнгө шикелле ут асасағын берәйһе әйтһә, һис ышанмаҫ ине. Хәҙер һәммәһе үҙгәрҙе. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ниндәй ҡеүәтле һуғыш ҡоралдары етештерелде бит! Ғәжәп хәл. Тик самолеттар ғына һаман аҙ. Дүрт моторлы ТБ-3 бомбардировщиктары, үтә ҙур, яй осоуы сәбәпле, бәлә-ҡазаны арттыра. Бомбардировщиктарҙы һаҡларҙай, уларҙы оҙатып барырҙай истребителдәр ҙә етешмәй. Шунлыҡтан совет ғәскәрҙәрен бомбалар менән өҙлөкһөҙ ҡойондорған дошман самолеттары һауала үҙҙәрен иркен тота...

Беҙҙең туптарҙың тауышы баҫылғас та, ҡайҙандыр аңғармаҫтан килеп сыҡҡан ике ИЛ самолеты, артналеттан һуң иҫән ҡалған дошман һалдаттарын пулеметтарҙан ҡыра-ҡыра, бер нисә тапҡыр аҫтан ғына осоп уҙҙы.

Ватан һуғышы башланғандан бирле бындай күренешкә беренсе тапҡыр шаһит булған Шайморатов ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙе.

Беҙҙең штурмовиктар офоҡ ситенә китеп күҙҙән юғалырға ла өлгөрмәне, танкылар ҡуҙғалды. Беренсе танк артынса уҡ башҡорт атлылары ла алға ташланды. Улар, ҡылыстарын уйнатып, «ура» ҡысҡыра-ҡысҡыра, йән-фарман алға елдерҙе. Ошо уҡ минутта Сталинград эргәһендә тупланған совет ғәскәрҙәренең дә контрһөжүме башланыуы хаҡында Шайморатовҡа хәбәр иттеләр.

Һөжүм ҙур тиҙлектә барҙы. Ҡаршынан яуап уты асырға ла өлгөрмәгән дошман һалдаттарын ҡылыстары менән турай-турай алға елгән һыбайлыларға ҡарап, Күсимов түҙмәне, үҙе лә ҡылысын ҡынынан сығарған ыңғайы алға уҡталды.

Арттағы һыбайлы дивизиялар өсөн фронт «ҡапҡаһы» асылғандан һуң да, тиҙлекте саҡ ҡына ла кәметмәйенсә,

алға, һаман алға табан ынтылған башҡорт егеттәренең ҡаһарманлығын күҙәткән Шайморатов команда пунктын алғараҡ күсерҙе.

Элекке дошман блиндажында дивизия командирының команда пунктын әҙерләп өлгөрөүгә, немецтарҙың алты ауылды ҡалдырып ҡасыуҙары тураһында полк командирҙарынан хәбәр алынды.

Генерал Шайморатов, башҡорт егеттәренең ныҡ арыуын аңлаһа ла, ҡасып барыусы дошман һалдаттарын эҙәрләүҙе дауам итергә ҡушып, полктарға һәм айырым эскадрондарға үҙенең ярҙамсыларын ебәрҙе.

Һыбайлылар һөжүме көнө буйы тип әйтерлек барҙы. Эңер ҡуйырғанда ғына яугирҙар аттарынан төштө лә, үҙҙәрен уйлауҙан элек, бик ныҡ йонсоған аттары менән аҙапланды. Байдәүләтов кеүек йәйәүлеләр дошмандан һуғышып алған траншея төбөндә шатыр-шотор сохари кимерҙе, тәмәке тартты, ҡоралын тикшерҙе...

Икмәк киҫәген ҡап уртаға бүлешеп Мөхәммәтҡазы менән тамаҡ туйҙырған Байдәүләтов бик ныҡ арыуын әле генә һиҙҙе, ә күҙ алдында әлеге һуғышта яуҙаштарының ҡырылыуы, яралы дошман һалдаты лейтенант Атаевҡа тоҫҡап атҡан саҡта кемдеңдер уны үҙ кәүҙәһе менән ҡаплауы һәм башҡа төрлө күренештәр сыуалды... Ҡот осҡос ошондай хәл иртәгә, иртәнән һуңға ла ҡабатланыр микән ни? Ҡабатланһа, сыҙарлыҡ хәле етерме Зәкиҙең?

Үткән һуғыш ваҡытындағы ваҡиғалар Байдәүләтовҡа әле лә тынғы бирмәй. Дошман траншеяһы буйлап йүгереп барған сағында уға осраған яралы фриц, ҡурҡыуынан ялбара-ялбара: «О, рус, үлтермә!» — тип инәлде. Немец һалдаты ла үҙе шикелле кеше икәнлеген, үлемдән ҡурҡыуын тәүге мәртәбә йөрәге менән тойған Зәки уны үлтерергә йәлләне. «Үлергә теләмәгәс, ниңә килдең беҙгә? Кем өсөн һуғышаһың, ҡан түгәһең? Ниңә кәрәк һиңә был һуғыш?» — тип һораны. Күҙҙәрен мөлдөрәтеп уға ҡараған немец ул әйткәнде аңламаны, ыңғыраша-ыңғыраша бер үк һүҙҙе ҡабатланы: «О, рус, үлтермә!» Ә Зәкиҙең ҡанына һеңергә өлгөргән Рәшит Ниғмәтиҙең шиғыры, икеләнеүе менән ризалашмайынса, ҡолағы төбөндә бөтөнләй башҡаса яңғыраны: «...Еренде дошман алмаһын, иленде утҡа һалмаһын. Үлтер, улым, фашисты! Үлтер, улым, фашисты!»

Ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғоларына хужа булмаған Зәки, немецты үлтермәйенсә, артабан атланы. Шул уҡ минутта: «Һаҡлан!» — тип ҡысҡырған тауышҡа әйләнеп ҡараны һәм үҙенә автоматтан атырға йыйналған әлеге яралы дошман һалдатын Мөхәммәтҡазы дуҫы атып үлтереүен күрҙе. Бынан кире Байдәүләтов фрицты аямаясаҡ!

Әгәр ҙә дошманды үлтермәһә, дошман уның үҙен үлтерәсәк! Зәкиҙең дә, бүтәндәр һымаҡ, ҡартайғансы донъяла йәшәгеһе, тормоштоң йәме менән ләззәтләнгеһе, һөйөклө ҡатыны менән бергә итәк тулы бала-саға үҫтергеһе килә!..

Зәкиҙең уй-хыялын уртаҡлашҡандай, кемдер ауыҙ эсенән генә «Урал» көйөн һуҙҙы:

...Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Ошо Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға арналған һымаҡ яңғыраған боронғо көйгә Зәки тәьҫирләнеп ултырҙы-ултырҙы ла, тыуған төйәгенә, ғәзиз Уралына ҡарата булған ҡайғы-һағышын баҫа алмай, еҙ ҡурайын ғыжғылдатырға тотондо. Уның моңо арбаған яугирҙар, арып-талыуҙарын онотоп, ҡурайсы эргәһенә яҡынырaҡ шылып ултырҙы.

— Ҡотелоктарҙы «һуғышҡа» әҙерләргә! — тигән тауыш ишетелгәс кенә Зәки ҡурай тартыуҙан туҡталды.

Фронттың алғы һыҙығына килтергән йылы тары бутҡаһын ашарҙан алда «наркомовский» йөҙ грамм араҡыны эскәс, егеттәрҙең кәйефе күтәрелде. Ләкин ғәҙәттәгесә бисә-сәсә хаҡында фәлсәфә һатырға һәм бер-береһенә һырығышып йоҡларға мөмкинлек булманы — һөжүмде дауам итергә бойороҡ булды.

Йөҙ һикһән километр араны бер аҙна эсендә уҙып, Сталинград — Лихая тимер юлын өҙөү өсөн Обливская станцияһына тейешле ваҡытҡа барып етергә тырышҡан генерал Шайморатов Башҡорт кавалерия полктарын ҡабаландырҙы. «Обливская тимер юл станцияһын алһаҡ, ҡамауға эләгәсәк дошман һалдаттары төркөмө, шул тирәләге гитлерсыларҙың аэродромдарында тороусы истребителдәре менән бомбардировщиктары төп базалары ярҙамынан мәхрүм ителәсәк», — тип уйланы ул.

Икенсе көндөң таңында Беренсе танк корпусына ҡаршы сыҡҡан дошмандың танк дивизияһы һыбайлыларҙың һөжүмен туҡтатты. Шул уҡ ваҡытта Усть-Медведовский совхозы тәңгәлендәге румын танк дивизияһы башҡорт һыбайлыларына уң флангынан һөжүм башланы.

Генерал Шайморатов артиллеристарға көслө ут асырға ҡушты.

Румындарҙың унлаған танкыһы менән утарҙағы терәк пункты ҡыйратылғас та, подполковник Ҡусимов полкындағы эскадрондар дошман һалдаттары өҫтөнә ябырылды.

— Салауат батыр тоҡомо, алға-а-а!..

Подполковник Макаевтың 313-сө кавалерия полкы яугирҙәры ла дошман һалдаттары менән батырҙарса алышты. Улар, иртәнге тынлыҡты боҙоп ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, дошманды һул флангынан ҡыҫырыҡланы һәм 275-се кавполк һыбайлылары менән берлектә Блиновский утарына бәреп инде.

Бындай көтөлмәгән ҡыҫымға сыҙамайынса, бер генә мәртәбә лә атырға өлгөрмәгән минометтарын, пулеметтарын, туптарын, шулай уҡ аҙыҡ-түлек складтарын һәм мәйеттәрен ташлап, дошман көс-хәлгә ҡасып ҡотолдо.

Башҡорт егеттәренә хатта аттарын ашатырға һәм бер аҙ хәл йыйырға ла мөмкинлек булманы. Көн ныҡлап яҡтыра башлағанда, Шайморатовҡа румындарҙың танк дивизияһының контратакаға ҡуҙғалыуы һәм танкыларға эйәргән автоматсылар яҡынлашып килеүе хаҡында әйттеләр.

Шайморатов, барлыҡ орудиеларҙан атырға ҡушып, асыҡ дала уртаһында кәрәкле позиция әҙерләргә лә өлгөрмәгән 275-се кавполк командиры Күсимов менән уҡсы полк командиры майор Ғафаровҡа элемтәселәрен ебәрҙе һәм ҡалған ике кавполк менән дә бәйләнеш булдырыу сараһын күрҙе.

Ошо тирәләге һуғыштың беренсе сәғәтендә үк өлкән лейтенант Рәхмәтуллин батареялары унлаған румын танкыһын ҡыйратыуы, тоҫҡаусы Ғафаров менән орудие ҡороусы Сынбулатов икеһе дүрт дошман танкыһын туҡтатыуы, шрапнель менән атыусыларҙың дошман һалдаттарын ергә боҫорға мәжбүр итеүе хаҡында дивизия штабына хәбәр иттеләр. Бынан һуң күп тә уҙманы, ҡаты яраланған эскадрон командиры Мәмбәтҡолов эскадронының ҡамауҙы йырып сығыуы, 294-се кавполктың эскадрон командиры Сиреғоловтың дүрт дошман танкыһын яндырыуы асыҡланды.

Гитлерсыларға ҡаршы һуғыш 275-се кавполк тәңгәлендә бигерәк тә көсөргәнешле барҙы. Һаҡлыҡ тигән нәмәне онотҡан Күсимов, команда пунктында ултырып сыҙай алмайынса, әле бер, әле икенсе эскадрон командиры эргәһенә сабып барҙы. Ул:

— Бер аҙым да сигенмәҫкә! Дошман атакаларын кире ҡағырға һәм үҙебеҙгә һөжүмгә күсергә! — тип бойорҙо ла бер төркөм һыбайлыларҙы эйәртеп алға табан елдерҙе. Был минутта, ярһыуының аҡтыҡ сигенә етеп, үҙенең яраланыуы йәки үлеме тураһында уйламайынса, танкыларҙан айырылып ҡалған дошманды аяуһыҙ тураҡларға кереште. Арттағы эскадрондар ярҙамға килеп еткәс кенә, һуғыш

яланы уртаһындағы соҡорҙа урынлашҡан команда пунктына барып, Кусимов һыбайлыларҙың алышын күҙәтте.

Ҡасып барыусы дошман һалдаттарын уңышлы эҙәрләгән эскадрондарҙың ҙур ғына ауылға бәреп инеүен күргәс, ярһыуынан бер аҙ баҫылған Кусимов коноводы алып килгән атына атланырға торғанда дивизия штабынан элемтәсе яңы бойороҡ тапшырҙы. Шул саҡ яҡында ғына төшөп ярылған туп ярсығы полк командирының аяғына килеп бәрелде. Кусимов, кәүҙәһен тота алмайынса, туң ергә йығылды.

— Ай, ай, ай, — тип ул санитарҙы саҡырҙы.

Фельдшерҙан яралы аяғын бәйләткәндән һуң да, һыҙланыуына көс-хәлгә сыҙаған Кусимовтың ҡором ҡатыш бысраҡҡа буялған сикәһе буйлап һарҡҡан күҙ йәше ергә тамды. Фляга төбөндәге спиртты адъютантынан алып эскәс кенә яраһы һыҙлауы кәмеүен тойоп, ул яландағы яралыларҙы тиҙ арала йыйып алырға һәм санэскадронға оҙатырға ҡушты.

Күп тә уҙманы, дивизия командиры блиндажға килеп инде. Кусимов башын ҡалҡытып терһәгенә таянырға булғайны, Шайморатов ҡул һелтәне.

— Миңә һәммәһе билдәле, ҡуҙғалма урыныңдан, — тине ул һәм полктың уңышлы һөжүме өсөн Кусимовты маҡтаны. — Тик ваҡытһыҙ яраланыуың шәп түгел. Хәҙер оҙаҡ дауаланырға тура киләсәк!

— Миңә полкта ҡалырға рөхсәт итегеҙ, иптәш генерал, — тине Кусимов.

— Ярағыҙ еңелме? — тип һораны Шайморатов, «һеҙ»гә күсеп.

Кусимов урынына Сәғит Әлибаев яуап ҡайтарҙы:

— Медиктарҙың һүҙенә ҡарағанда, Таһир Тайыповичтың яраһы ҡаты, иптәш генерал! Уның һыңар аяғының һөйәге онталған.

Полк командирының сыҙамлылығына, яраһы ҡаты булғанда ла хәлен белгертмәҫкә тырышыуына Шайморатов ғәжәпләнде.

— Полкта ҡалыу-ҡалмауың хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел! — Шайморатов штаб начальнигы Нурғәлиевте ваҡытлыса полк командиры итеп тәғәйенләне.

Ошо минуттан башлап 275-се ковполкта кәрәге ҡалмауын һәм һуғышҡа бәйләнешле бөтә мәсьәлә Нурғәлиев менән хәл ителәсәген аңлаған Кусимов, дивизия командирына ниңәлер хәтере ҡалыуын һәм яраһы үҙәгенә үтерҙәй булып ҡабаттан һыҙлауын һаман һиҙҙермәҫкә тырышып, һораны:

— Беҙҙең юғалтыуҙар күпме икән, иптәш генерал?

— Юғалтыуҙар күп, бик күп... — Шайморатовтың тауышы ҡапыл бойоҡланды.— Рядовой һыбайлыларҙан башҡа, минең адъютантым Сәфиуллин, орудие командирҙары кесе лейтенант Абдрахманов менән Бәкиров һәләк булды... Дошмандың дүрт контратакаһы кире ҡағылыуына иң әүәл уларға бурыслыбыҙ, — тип үҙенең политик эше буйынса урынбаҫары подполковник Нәзировҡа бойорҙо: — Һуғышта һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләренә тейешле ярҙам күрһәтеүҙе һәм уларға ҡарата һәр саҡ иғтибарлы булыуҙы һорап, Башҡортостан хөкүмәте етәкселәренә хат әҙерләргә!

— Тыңлайым, иптәш генерал!..

Күсимовты санэскадронға оҙатҡан ваҡытта штабы менән яңы урынға күсеп килгән полковник Голенев күренгәс тә, Шайморатов өлкән офицерҙарҙы кәңәшмәгә йыйҙы.

— Бөгөнгө һуғышта ҡыйратылған дошман танкыларынан башҡа, уларҙың егерме төҙөк танкылары, йөҙәрләгән йөк машиналары беҙҙең ҡулға эләкте, һигеҙ йөҙҙән ашыуыраҡ һалдаты һәм офицеры әсир ителде, — тип ул һәр кавполктың һуғыш ваҡытындағы ыңғай, етешһеҙ яғын һанап сыҡты ла һөжүмде артабан дауам итергә бойорҙо.

## XVI

8-се корпус авангардында барыусы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы йәнә алға табан ташланды.

Көн йонсоу. Үҙәкте өҙөрҙәй һалҡын ел, ҡар бөртөктәрен киң дала өҫтөнән һепертеп, өҙлөкһөҙ ҡоторона, ажғыра, олой. Аяҡ аҫты туң, тайғалаҡ. Дағалары ҡаҡшаған аттар һаҡлыҡ менән бара.

Йәйәүлеләргә лә еңел түгел быңдай ерҙән атлауы.

Румындар менән һуғыш баҫылғандан аҙаҡ хәл йыйырға, еүеш өҫ-башын әҙерәк киптерергә мөмкинлек булмағанлыҡтан, Байдәүләтов Зәкиҙең шинель салғыйы боҙланды, аяғындағы обмоткалы ботинкаһы шыҡырайып ҡатты.

— Ярай әле, исмаһам, һауа болотло. Көн аяҙытһа, фрицтарҙың ҡоҙғондары беҙҙе ыҙалатыр ине, — тип ул әйтергә лә өлгөрмәне, ҡайһы яҡтандыр күмәк моторҙар геүләүен ишетеп, Мөхәммәтҡазы асыуланды:

— Күҙ тейҙерҙең! Ана, фашист ҡоҙғоно!

— Мужыт, беҙҙекелер?

— Ҡайҙан беҙҙеке булһын, — тине Мөхәммәтҡазы, йөрәге әрнеп. — Күңел өсөн, исмаһам, берәй самолетыбыҙ осоп уҙһасы!

— Етешмәгән самолетты ҡайҙан алырға? Булғандары Сталинградтағы фашистарҙы ҡыйрата. Хәҙер төп көс шунда тупланған!

— Һуғышҡа ныҡлы әҙерлек булмағас, «Если завтра война, если завтра в поход...» тип ниңә алдан ҡупырынырға ине?

Быңдай һүҙ өсөн башынан һыйпамаясаҡтарын аңлап, Зәки тирә-яҡҡа һағайып ҡаранды.

Күк йөҙөн иңләп осҡан дошман самолеттары баш осо тәңгәленән Сталинград яғына табан уҙҙы.

— Аллаға шөкөр, дошман ҡоҙғондарынан имен-аман ҡотолдоҡ, — тип бышылданы кемдер.

Һөҙәк ҡалҡыулыҡ итәгендә урынлашҡан ауылға етер саҡта уҡсы полк колоннаһын һыбай ҡыуып еткән Али Ҡарнайҙы танып, Байдәүләтов шатланды.

— Иҫәнмеһегеҙ, иптәш яҙыусы!

— Шәп бит! Үҙегеҙ ни хәлдә? — Али Ҡарнай, юртып барған атын аҙымға күсереп, башҡорт егеттәренең румын һалдаттары менән нисек һуғышыуҙары һәм уларҙың кәйефе хаҡында һораша башланы. Аҙаҡтан, артта ҡалыусы яугирҙарҙы ҡабаландырып ҡысҡырған лейтенант Атаевты күргәс, уҡсылар полкы командиры Фәйзи Ғафаровты ҡайҙан табырға икәнлеген асыҡланы ла атын шпорланы.

Али Ҡарнай майор Ғафаров менән уның политик эш буйынса урынбаҫары капитан Головач эргәһендә лә оҙаҡ булманы. Сираттағы һанда газетала баҫыласаҡ мәҡәләһе өсөн кәрәкле материалдарҙы яҙып алғас, артабан елдерҙе.

Дивизияның авангардында барыусы 294-се кавполк һыбайлыларының дошман һалдаттары менән алышыуын белгәс, ул ҡабаланды. Сөнки кемдәрҙең нисек һуғышыуын, ниндәй батырлыҡтар күрһәтеүен ул үҙ күҙҙәре менән күрергә тейеш ине. Туҡта, ни хәл булды алда? Дошман һалдаттарын ҡыйыу атакалаған башҡорт егеттәре кирегә боролдо һәм сигенә башланы. Паникаға бирелеп иң алдан ҡасып барыусы эскадрон командирына ҡаршы йән-фарман сапҡан Али Ҡарнай, ярһыуына сыҙай алмайынса:

— Ал-ға, тик ал-ға-а! — тип пистолетынан һауаға атаата, сигенеп барыусы төркөмдө кирегә бороп, дошман ҡамауына эләккән һыбайлыларға ярҙамға ташланды. Шул саҡ яҡында ғына мина төшөп ярылды. Али Ҡарнайҙың саптары, сабып барған ыңғай ҡапыл янтайҙы ла тәкмәсеп китте. Ҡарнай һөрән һалып сыпранлай-сыпранлай кешнәгән саптарын коноводына тапшырҙы ла, үҙе уның атына атланып, артабан елдерҙе...

Ун биш минут самаһы барған алыш башҡорт егеттәренең еңеүе менән тамамланды.

Бер аҙҙан 294-се кавполкҡа килгән Шайморатов, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы менән осрашҡас, асыуланды:

— Кем рөхсәте менән утҡа индегеҙ?!

Дивизия командирынан шелтә алыуына уңайһыҙланып, Али Карнай ҡыҙарынды. Минут самаһы ваҡыт уҙғас ҡына, ул рәнйеүле тауыш менән яуап ҡайтарҙы:

— Боецтарҙы ҡаһарманлыҡҡа өндәп, ошондай яуаплы мәлдә үҙем ҡасып ҡотолорға тейеш инемме, иптәш генерал?! Миңә ундай рөхсәтте коммунист һәм яҙыусы хоҡуғы бирҙе...

Али Карнайҙың ошо яуабынан һуң Шайморатовтың асыулы күҙ ҡарашы яғымлыланды.

— Газетаның яуаплы секретары Әһел Истамғәлин менән литсотрудник Шакир Насыров ҡайҙа?

— Улар артта, типография работниктары менән бергә килә.

— Подразделениеларҙа гел яңғыҙ йөрөүегеҙ килешмәй, Имамғәли Мөхәммәтдинович! Газетаның башҡа сотрудниктарын да полктар менән тығыҙ бәйләнештә булырға һәм тейешле материалдарҙы урында ойошторорға өйрәтергә кәрәк!

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһының яуаплы секретары Әһел Истамғәлин менән үҙ-ара мөнәсәбәте аҙаҡкы ваҡытта киҫкенләшә барыуы хаҡында дивизия командирына әйтергә уңайһыҙланған Али Карнай өндәшмәне.

Редакциялағы ыҙғыш-талашты политбүлек начальнигы урынбаҫары Ҡадировтан ишетеп белгән Шайморатовтың да был хаҡта һүҙ ҡуҙғатырға ваҡыты юҡ ине — авангардта барыусы Башҡорт кавалерия дивизияһы йәнә дошман ҡаршылығына осраны. Бер үк ваҡытта румындарҙың 48-се корпусының арттан етеп килеүе һәм тылдан һөжүм итеүе асыҡланды.

— Дошмандың сигенеү юлын быуырға маташыуыбыҙ юҡҡа сыҡты. Хәҙер үҙебеҙ дошман ғәскәрҙәре тарафынан фронттан һәм тылдан ҡыҫылдыҡ, — тип Шайморатов корпус штабына хәбәр итер өсөн элемтәсе ебәрҙе.

Тылдан ҡыҫырыҡлаусы дошман танкылары менән һалдаттарына ҡаршы һуғышыусы артдивизионынан тейешле мәғлүмәттәр алынғас та, корпус командиры Борисовтың бойороғо буйынса Шайморатов 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһын иртәнге ҡараңғыла атакаға күтәрҙе.

Алға ябырылған башҡорт аттарының тояҡ тауыштары аҫтында дала геүләне, дер һелкенде.

Дошман ғәскәрҙәрен атакалаусы һыбайлыларға ярҙамлашып, артиллеристар менән минометсылар ҙа көслө ут

асты. Уларға күп һанлы пулеметтарҙың үҙ-ара ярышып тәтелдәүе һәм ҡеүәтле «ура» тауышы ҡушылды.

Былай ҙа нык һирәгәйгән полктарҙағы кешеләрҙе мөмкин тиклем һаҡларға тырышҡан Шайморатов, рация аша туған телендә асыҡтан-асыҡ бәйләнеш тотоп, дошман ғәскәрҙәре менән батырҙарса алышҡан подразделение командирҙарының рухын күтәрерҙәй һүҙҙәр менән бергә, яңынан-яңы ҡәтғи талаптар ҡуйҙы.

Батыр үлемдән ҡурҡмай, тигән һүҙ бар. Шайморатов үҙе лә күп тапҡырҙар үлеп терелде. Ләкин намыҫына, туған халҡы ышанысына бер ҡасан да тап төшөрмәне, иң ауыр, аҡыл етмәҫтәй ҡатмарлы шарттарҙа ла ысын һалдат булып ҡалды һәм хәрби бурысын тайпылышһыҙ башҡарҙы. Ул үҙенә буйһонған кешеләргә ғәҙел, хәстәрлекле булырға, уларға һәр саҡ ярҙамлашырға тырышты. Шуға күрә, нисек кенә талапсан булмаһын, үҙен ҡырыҫ, ҡоро тотмаһын, командирҙар ҙа, рядовой һыбайлылар ҙа уны ярата, һәр бойороғон тайпылышһыҙ үтәргә тырыша. Уны «олатай» тип йөрөтөү ҙә юҡҡа ғынамы ни?

— Иптәш генерал!..

Уйҙарынан бүленгән Шайморатов дивизия штабы начальнигына ҡараны.

— Нимә, Иван Иванович?

— Румын һалдаттарының паникаға бирелеп ҡасыуы тураһында хәбәр итәләр! Яуҙа меңдән ашыу дошман һалдаты дөмөктөрөлгән һәм пленға алынған!..

— Яҡшы, Иван Иванович, яҡшы! — Башҡорт егеттәренең эше менән ғорурланған Шайморатовтың йөҙө яҡтырҙы. — Беҙҙең еңеү румындар тарафынан «ҡурҡыуҙы белмәүсе ҡырағайҙар» тип исемләнгән Башҡорт кавалерия дивизияһының данын арттырасаҡ һәм дошманды артабан батырҙарса ҡыйратыуға рухландырасаҡ!

— 1812 йылғы Ватан һуғышында ла сая батырлыҡтары өсөн башҡорттар ҡурҡыу белмәүсе «ҡырағай» һәм «Төньяҡ амурҙары» исемдәре менән дан яулаған, — тип дөрөҫләне дивизия командирының политик эш буйынса урынбаҫары Мөбәрәк Нәзиров.

Генерал Шайморатов дивизияны йәнә ҡабаландырҙы:

— Маршрутты туҡтатмаҫҡа, дауам итергә!

Киң даланы иңләп, башҡорттар ҡабаттан ҡуҙғалды. Күбекләнгән ауыҙлыҡтарын сәйнәп, баштарын сайҡайсайҡай алға табан барыусы күмәк аттарҙың бышҡырыуы, дағаларҙың ташҡа һуғылып саҡ-соҡ тауыш сығарыуы, нык тапалған туң ерҙән барыусы арба тәгәрмәстәренең шығырлауы ҡатыш командирҙарҙың әлдән-әле бойорған тауыштары ишетелеп торҙо.

— Эскадро-о-он, һуҙылмаҫҡа!

— Ниңә ййланығыҙ?!

— Аттарҙы шәберәк ҡыуырға, шәберәк!

Иртәнге томан таралып, тирә-яҡ бер аҙ яҡтырғас та, дошман самолеттары күренде. Улар яҡынлашыу менән, командирҙарҙың ҡушыуы буйынса пулеметтарҙан һәм ПТР-ҙарҙан берҙәм ут астылар. Дошман самолеттарының береһе ергә табан кәңкәйҙе һәм янғынға солғанып шартланы. Ҡалғандары, ауыр йөктәрен һыбайлыларҙың өҫтөнә бушатып, кирегә осто.

Бындай күренеш күп тапҡырҙар ҡабатланды. Ләкин кавалеристарҙың көньяҡ-көнбайышҡа ҙур тиҙлектә барыуын дошман туҡтата алманы.

Маршрут ваҡытында ла генерал-майор Шаймуратов подразделениелар менән бәйләнеште өҙмәне. Уның ҡушыуы буйынса 275-се кавполкҡа килгән подполковник Нәзиров маршал Ион Антонеску әфәнденең насар һуғышыусы румын командирҙарын яуапҡа тарттырыу, уларҙы пенсиянан мәхрүм итеү, рядовой һалдаттарын ер учаскаһыҙ, ә ғаиләләрен пособиеһыҙ ҡалдырыу менән янаған махсус приказы булыуын әйтте.

— Маршал Ион Антонеску әфәнде румын ғәскәренең батырлығын бына нисек көсәйтергә маташа икән, — тип көлдө полк командиры Нурғәлиев.

— Егеттәрҙең кәйефе нисек?

— Үҙҙәре лә, аттары ла бик нык йонсоно, иптәш подполковник! Уларға нисек тә булһа әҙерәк ял бирергә ине. Әгәр ҙә...

Нәзиров полк командиры вазифаһын үтәүсе капитан Нурғәлиевте тыңлап бөтөрмәйенсә бүлдерҙе:

— 275-се кавполк менән дивизияның төп көсө араһында дошман колоннаһы ҡыҫылып килеүе мәғлүмме һеҙгә?

— Так точно, иптәш подполковник!

— Шулай булғас, һыбайлыларҙың йонсоуы тарҡалһын өсөн, генерал-майор Шаймуратовтың ярышлап килеүсе дошман колоннаһын ҡыйратырға тигән бойороғон тапшырам!

Капитан Нурғәлиев, ишеткәндәренә ышанмаған шикелле, маңлайына батыра кейгән ҡолаҡсын бүркен ҡалҡытыбыраҡ, һораулы ҡараш ташланы.

— Шаяртаһығыҙмы, иптәш подполковник?

— Ниндәй шаяртыу булыуы мөмкин?! — тип Нәзиров асыуланғас, капитандың күҙҙәре баҙлап янды.

— Ғәфү итегеҙ, иптәш подполковник, дивизия командирының бойороғон үтәргә әҙермен! Антонеску әфәнденең

эсен бошороп, румындарҙы йәнә дөмбәҫләргә тура киләсәк, — тине лә, эскадрон командирҙарына атака башларға ҡушты.

275-се кавполк яугирҙары, үтә талсығып, көс-хәлгә килеүҙәренә ҡарамаҫтан, румындарҙың колоннаһына ябырылды.

Автомат, карабиндарҙан ата-ата, политрук Ғәлин Мотаһар артынан йән-фарман сабыусы өсөнсө эскадрон һыбайлылары румындарҙың колоннаһына үтеп ингән ыңғайҙа дошман һалдаттарын иҙеп-тапап, ҡылыстары менән аяуһыҙ тураҡларға тотондо. Политрук Ғәлин бер нисә дошман һалдатының башын өҙә сапты, офицерҙы сәнсеп үлтерҙе, икенсеһенә һелтәнгән саҡта үҙе лә ҡаты яраланды һәм эйәренән ҡоланы. Политруктың һәләк булыуын белгәс, һыбайлы яугирҙарҙың ярһыуы оторо артты.

— Ҡәбәхәттәр!

— Үлемгә — үлем!

— Политрук өсөн үс алырға! — тип һөрәнләп башҡорттар ажарланып алышты.

Арттағы эскадрондар ҙа өсөнсө эскадронға килеп ҡушылғас, алыш бигерәк тә ҡыҙыуланды...

Румындарҙың ике батальон һалдат-офицерҙары тулыһынса тураҡланып-тапалып, биш йөҙҙән артыҡ һалдат һәм офицерҙары әсирлеккә алынғандан һуң, 275-се кавполк дивизияның авангардында һөжүм итеүсе 294-се кавполкҡа барып ҡушылды.

Егермс икенсе ноябрҙә кис, Чир йылғаһының көньяҡ яры буйындағы Краснояровка ауылына етеп, Башҡорт кавалерия дивизияһы ялға туҡталды. Шул уҡ ваҡытта румындарҙың 1-се дивизияһына ҡаршы һуғышып артта ҡалған 55-се алтай кавалерия дивизияһын да көтөргә кәрәк ине.

Иртәгеһенә, 55-се кавдивизия үҙҙәрен ҡыуып еткәс тә, Башҡорт кавалерия дивизияһы һөжүмен дауам итте. Көтмәгәндә һыбайлы яугирҙарҙың өҫтөнә дошман самолеттары килеп сыҡты һәм бомбаға тота башланы.

Бомбардировщиктарҙы утҡа тотҡан зениткаларға беҙҙең минометтар ҡушылды. Һыбайлыларҙан кемдәрҙер аттары менән бергә ҡолап барып төштө, яралыларҙың ярҙам һорап ҡысҡырышыуы, ыңғырашыуы ишетелде, хужаһыҙ ҡалған аттарҙың ҡайҙа барырға белмәй ары һуғылып, бире һуғылып сабышыуы күренде...

Самолеттар күҙҙән юғалырға ла өлгөрмәне, ҡамауҙы йырып сығырға маташҡан дошман ғәскәре танкылары ярҙамында 294-се кавалерия полкын контратакалай башланы.

Ҙур тиҙлектә килеүсе дүрт «тигр» һәм ике «фердинанд»[1] яҡынлашҡас та, орудие командирының командаһы яңғыраны:

— Бронебойным под гусеницу — огонь!..

Бер үк ваҡытта дошман танкылары артынан килеүсе һалдаттарҙы кавалеристар карабиндарҙан, пулеметтарҙан һәм автоматтарҙан ҡойондорҙо. Яҡындағы «тигр», гусеницаһы өҙөлөп, бер тирәлә үрһәләнде, икенсеһе янғынға солғанды, ҡалғандары кире боролдо.

Күп тә уҙманы, дошман һөжүмен яңынан ҡабатланы. Был юлы танкылар һәм «фердинанд»тар башлыса дивизия артиллерияһына ябырылды. Күп орудие менән уларҙың расчеттары ҡыйратылды. Тоҫҡаусы Әпсәләмов дошман танкыларына ҡаршы яңғыҙы һуғышты. Туптар бөтөп бара, ә уның орудиеһы һаман ата. Ана, бер снаряды «тигр»ҙың броняһын ҡыйратты, ә икенсеһенең гусеницаһы өҙөлдө. Үҙе йөрөй торған дошман орудиеһын ҡыйратҡас, ябырылып килеүсе дошман һалдаттары өҫтөнә иң аҡтыҡҡы снарядты тондорҙо ла Әпсәләмов ситкә ташланды. Шул минутта шаңҡыр-шоңҡор тауыш сығарған «фердинанд» яңы ғына ут бөркөгән орудиены иҙеп үтте. Пушкарь Әпсәләмов, тереләй бирелергә теләмәйенсә, ябырылып килеүсе дошман һалдаттарын автомат уты менән ҡыра башланы...

Быларҙы үҙ күҙе менән күреп торған 294-се полк командиры ярҙам һорап 275-се полк командирына мөрәжәғәт итте. Асыҡ далала дошман самолеттары бомбаһына ҡойоноп, уларҙың танкылары менән автоматсыларына ҡаршы һуғышыусы 275-се кавполктың да хәле мөшкөл икәнлеген белгәс, полк командиры Ҡобяков генерал Шайморатовтың үҙенән ярҙам һораны, һәм шул уҡ минутта артиллерия дивизионы командирына дошманға ҡаршы ут асырға команда бирелде.

Ҡөнө буйы контратакалап теләгенә ирешә алмаған дошман һалдаттары тәртипһеҙ рәүештә сигенә башлағас та, һыбайлы башҡорт егеттәре уларҙы артабан эҙәрләне.

Ҡис, бәрелеш тамамланғас, подразделение командирҙарын ауыл уртаһындағы өйҙә урынлашҡан дивизия штабына йыйып, генерал-майор Шайморатов кәңәшмә уҙғарҙы. Өҫтәлгә йәйеүле картаға яһалған билдәләргә ҡәләменең тупаҡ осо менән күрһәтеп, дивизияның артабанғы планын ентекләп төшөндөрҙө. Шул саҡ армияның Хәрби советы ағзаһы генерал-майор Туманян килеп инде.

---

[1] «Фердинанд» — штурмлаусы орудие.

һүҙенән бүленгән дивизия командиры «Товарищи офицеры» тип команда бирҙе һәм рапорт тапшырҙы:

— ...Бөгөнгө алышта ғына 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы дошмандың өс йөҙҙән артығыраҡ һалдат һәм офицерын юҡ итте, һигеҙ йөҙләбе пленға төштө! Ҡыйратылғандарынан тыш, төҙөк егерме ике танк, йөҙләгән автомашина һәм төрлө һуғыш ҡоралдары алынды.

Армияның Хәрби советы ағзаһы кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың һәр береһе менән берәм-берәм күрешеп сыҡҡас, ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Һеҙгә ҡыуаныслы хәбәр алып килдем, иптәштәр! Бөгөн, егерме өсөнсө ноябрҙә, Дон йылғаһы боролошо тәңгәлендәге Калач районында беҙҙең 26-сы танкы корпусыбыҙ Сталинград фронтындағы ғәскәрҙәр менән ҡушылған, шулай итеп Сталинградтағы дошман ғәскәре тулыһынса ҡамалды.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда иң әһәмиәтле һәм үтә мөһим яңылыҡты ишетеп шатланған офицерҙар «ура» ҡысҡырҙы, ашҡынып-ҡотоороноп ҡул сапты.

Дивизия командиры Шайморатов ҡына уйсан, етди йөҙөн үҙгәртмәне. Изге яңылыҡты әйткән өсөн армияның Хәрби советы ағзаһына яугирҙар исеменән рәхмәтен белдерҙе лә бүленгән һүҙен дауам итте...

Егерме дүртенсе ноябрҙең төнөндә, алтмыш километр алыҫлыҡтағы араны уҙып, 294-се кавалерия полкы Обливская тимер юл станцияһына башлаған һөжүмде туҡтатырға һәм иң тәүҙә егерме икенсе номерлы ҡалҡыулыҡты һуғышып алырға тигән комкорҙың бойороғон тапшырҙылар.

Ундай хәл менән ҡырҡа ризаһыҙланып, Шайморатов дивизияның оператив бүлеге начальнигын саҡыртты.

— Йосопов, хәҙер үк корпус штабына сап! Комкор приказын үҙгәртһен. Мин үтенеп һорай, тиң. Сөнки, разведка мәғлүмәттәрен һанға һуҡмайынса, дошмандың бик күп танкылары торған ҡалҡыулыҡҡа һөжүм итеү ғәфү ителмәҫлек хата! Беҙ Обливская тимер юл станцияһына һөжүмде туҡтатмаҫҡа тейешбеҙ. Уны һуғышып алһаҡ, тылда тороп ҡаласаҡ ҡалҡыулыҡтағы немецтар төркөмөн аҙаҡтан ҡыйратыуы еңел буласаҡ!

Дивизия командиры әйткәндәрҙе Йосопов түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәс, комкор Борисовтың йөҙө ҡарайҙы.

— Ҡалҡыулыҡҡа һөжүм итергә теләмәүҙең сәбәбе ниҙә?

— Ҡылыстар менән генә ҡалҡыулыҡтағы танкыларға ҡаршы һуғышыуҙы дивизия командиры мәғәнәһеҙлек һанай. Танкыларға ҡаршы танкылар файҙаланыу мөһим, ти.

— Ҡалҡыулыҡты Пушкин һуғышып алырға тейешме? — тине лә Йосоповҡа ауыҙ асырға ирек бирмәйенсә, ажғырҙы: — Бойороҡто үтәмәгән өсөн Шайморатовты эттәй атып үлтерәсәкмен! Барығыҙ, минең бойороҡто комдивҡа тапшырығыҙ: тәүҙә ҡалҡыулыҡҡа һөжүм итергә!

Ҡорпус командиры үҙ приказын үҙгәртмәйәсәген белгәс, Шайморатов күңелһеҙләнде.

— Мин әйткәнде комкорғаентекле аңлата алдығыҙмы?

— Иптәш генерал, һәммәһен һеҙ әйткәнсә һөйләнем, — тине дивизияның оператив бүлеге начальнигы Йосопов.

— Бар, комкорға минең фекерҙе ҡабаттан тапшыр!

— Есть!..

Йосопов тағы корпус штабына елдерҙе. Ул беренсе тапҡыр килеүендә һөйләгәндәрҙе ҡабатлай ғына башлағайны, ярһыуының сигенә еткән корпус командиры Борисов өҫтәлгә һуҡты.

— Етте!.. Үҙен әллә кемгә ҡуйып маташҡан Шайморатовтың баш-баштаҡлығы һәм минең бойороҡто үтәргә теләмәүе яҡшылыҡ менән тамамланмаясаҡ! — тип ул машинаһын саҡыртты һәм Башҡорт кавалерия дивизияһына китте.

Дивизияға барғас, рапорт тапшырған Шайморатовты тыңларға теләмәйенсә, корпус командиры уны тупаҫлыҡ менән бүлдерҙе:

— Һеҙ ҡурҡаҡ! Ҡомдив булараҡ һеҙҙең һәләтһеҙлекте һәм белемһеҙлекте хәҙер күрһәтәсәкмен! Ҡалҡыулыҡты мин үҙем аласаҡмын,— тип Сиреғоловты саҡыртты ла эскадроны менән ҡаршылағы ҡалҡыулыҡты һуғышып алырға ҡушты.

Сиреғолов эскадроны һыбайлылары алға елдерҙе. Улар бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ ҡалҡыулыҡҡа күтәрелә башланы.

Күҙәтеү пункты урынлашҡан ерҙән һәммәһен көсөргәнешлек менән ҡарап торған корпус командиры генерал-майор Борисов тантана кисерҙе:

— Дөрөҫлөк кемдә, Шайморатов?! Ул ҡалҡыулыҡ ун биш — егерме минуттан беҙҙеке буласаҡ, һәм Обливская тимер юл станцияһына туранан-тура һөжүм итергә мөмкинлек тыуасаҡ! Ә һеҙ, Шайморатов — ҡурҡаҡ, ҡуян йөрәк, наҙан комдив!

Шул саҡ ҡалҡыулыҡта утлы өйөрмә ҡупты. Дошман танкылары утына эләккән һыбайлылар аяуһыҙ ҡырылды. Иҫән ҡалып артҡа табан сабышҡан һыбайлыларҙы ҡыуып еткән танкылар уларҙың күбеһен аттары менән бергә тапаны, ергә ҡуша иҙҙе...

Янырак кына тантана кисергән Борисовтың маһайыулы йөҙө ҡапыл үҙгәреп, ҡара көйҙө. Ул, бер ни өндәшмәйенсә, машинаһы кабинаһына инеп ултырҙы ла дивизиянан китеп тә барҙы.

Корпус командирының Сиреғолов эскадронын тик-томалға ҡырҙыртыуын, тәкәббер һәм әҙәпһеҙ ҡыланыуын үтә ауыр кисергән Шайморатов оҙаҡ тынислана алманы. 1937—1938 йылдарҙа Ҡыҙыл Армияла ҡоротҡослоҡта нахаҡҡа ғәйепләнгән оло дәрәжәле күпселек командирҙар юҡ ителмәһә, Борисов шикелле салдафондар корпус командиры итеп үрләтелер инеме?[1] Ватан һуғышы алдынан бер миллиондан биш миллионға саҡлы еткерелгән Эшсе-Крәҫтиән Армияһы, күпселек командирҙар ҡулға алынып атылғандан һуң, кадрҙарға мохтажлыҡ кисергән ошондай ҡатмарлы, ауыр шарттарҙа бер ниндәй һәләтһеҙ, осраҡлы кешеләрҙең үрләтелеүе ғәжәпме ни? Ундай «бәхет» Борисовты ла ситтән урап уҙмаған. Уның ябай эскадрон командирынан — дивизия командиры, ә һуғыш йылдарында корпус командиры итеп тәғәйенләнеүе репрессия заманының бер бәләһе түгелме ни? Өлкән лейтенанттан ҡапыл генерал дәрәжәһенә үрләтелгән Борисов, корпус командиры булыуы менән ҡупырайып, бүтәндәрҙең фекерен хәҙер һанға һуҡмай, ҡаратырышланып кешеләрҙе күрәләтә утҡа тыға һәм дошмандан ҡырҙырта...

Ҡытайҙа хәрби советник вазифаһын башҡарған ваҡытта, унан ҡайтып төрлө эштәр башҡарғанда Шайморатовҡа һәләтле оло дәрәжәле һәм кесе командирҙар менән байтаҡ йылдар аралашып йәшәргә һәм уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә тура килгәйне. Әммә һәләтлеге һәм тәжрибәһе буйынса эскадрон командиры кимәленән саҡ ҡына ла үҫмәгән Борисов кеүек тупаҫ, ҡаратырыш, яңылышҡанда ла үҙ һүҙен өҫтөн ҡалдырырға маташыусы командирҙар менән бер ҡасан да бергә хеҙмәт итергә тура килмәне. Бына хәҙер уның командалығында дошманға ҡаршы һуғышыуы ҡыйын, бик тә ҡыйын Шайморатовҡа! Ҡалҡыулыҡҡа һөжүм итергә тигән аҡылһыҙ бойороғон һаман үҙгәртергә

---

[1] 1935—1940 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт иткән биш Советтар Союзы Маршалынан — өсөһө, беренсе рангылы 2 армия комиссарының икеһе лә, беренсе рангылы 4 армия командирынан — икеһе, икенсе рангылы 12 армия командирының бөтәһе лә, беренсе рангылы 2 флот флагманының икеһе лә, икенсе рангылы 15 армия комиссарының бөтәһе лә, 67 корпус командирынан — алтмышы, 28 корпус комиссарынан — егерме бише, 199 дивизия командирынан — 136, 397 комбригтан — 221, 36 бригада комиссарынан — 34 кеше ҡулға алынып юҡ ителде. 1937 йылдың иң фажиғәле күренеше түгелме ни? Ҡыҙыл Армия сафындағы юғары комсоставтың өс кешенән икеһе репрессия ҡорбаны булды.

теләмәһә, субординация менән иҫәпләшмәйенсә, Баш командующийға туранан-тура мөрәжәғәт итергә тура киләсәк! Тик командующий уны дөрөҫ аңлармы? Бөтә бәлә шунда: Борисов кеүек аҡылһыҙ, кадрҙар юҡлыҡтан ғына үрләтелгән командирҙар Ҡыҙыл Армия сафында байтаҡ. Хатта Ворошилов менән Буденный ҙа, Советтар Союзы Маршалы исеменә лайыҡ булыуҙарына ҡарамаҫтан, граждандар һуғышы заманындағыса фекер йөрөтөп, ғәскәр менән идара итеүҙә үҙҙәрен булдыҡһыҙ полководецтар итеп таныттылар.

1937 йылдың егерме етенсе ноябрендә Кавказ аръяғы хәрби округында уҙғарылған кәңәшмәлә ҡатнашҡан оборона наркомы Ворошилов, НКВД работниктары тарафынан ҡулға алынған дивизия һәм корпус командирҙары урынына рота командирҙарының, хатта авиация училищеһын бөтөрөп, үҙе техникумда саҡ уҡыта башлаған бер ниндәй тәжрибәһеҙ һәм белемһеҙ кешенең ҡуйылыуын белгәс, Семен Михайлович Буденныйға һылтанып: «Рота менән яҡшы командалыҡ иткән кеше армия менән дә командалыҡ итә ала», — тип әйтеүе көлкө түгелме ни?

М. Н. Тухачевский, И. Э. Якир, И. П. Уборевич кеүек һәләтле хәрби полководецтар немецтар менән буласаҡ һуғышҡа ныҡлы әҙерлек алып барырға, граждандар һуғышы йылдарындағы ҡарашты ҡырҡа үҙгәртергә, Ҡыҙыл Армияны яңыса ҡоралландырырға һәм механизацияланған корпустар төҙөргә тигән талап ҡуйҙылар. Ләкин репрессия һәммәһен юҡҡа сығарҙы.

Фин һуғышы тамамланғас, граждандар һуғышы йылдарындағы тәжрибәне Ҡыҙыл Армияла өҫтөн ҡуйырға тырышҡан Ворошилов урынына оборона наркомы итеп тәғәйенләнгән С. К. Тимошенко беренсе тапҡыр механизацияланған туғыҙ корпус ойоштороуға өлгәште. Әммә барлыҡ иғтибарҙы шул корпустарға йүнәлтәһе урында, көстө тарҡатып, 1940 йылдың мартында йәнә шундай егерме корпус төҙөлдө һәм уларҙың командирҙары итеп танк подразделениеларын, частарҙы бөтөнләй белмәгән, улар менән идаралыҡ итерҙәй тәжрибәһе, белеме, һәләтлеге булмаған пехота һәм кавалерия командирҙары ҡуйылды, һөҙөмтәлә шундай дүрт корпус ҡына Ватан һуғышы башланғанда бер ни тиклем яраҡлы булып сыҡты.

Хәрби-һауа Көстәренең Баш идараһы начальнигының йыл да тиерлек алмашынып тороуы ла кире йоғонто яһаны. Уларҙың иң һуңғыһы — утыҙ йәшлек генерал Рыгалов — Ватан һуғышы башланыуға өс көн генә ҡалғас ҡулға алынып, Берияның бойороғо буйынса октябрь айында атылды.

Һуғыш башланғас, хәрби самолеттарҙың егерме проценты ғына яңы, ә ҡалғандары иҫке, һуғышҡа яраҡһыҙ икәнлеге асыҡланды.

Тейешле хәстәрлек күрелмәүе сәбәпле, фронтҡа кәрәкле танкылар, самолеттар, боеприпастар етешмәне. Шунан килеп, репрессиялар менән мауығып, Ҡыҙыл Армияны күрәләтә көсһеҙләндергән кеше даһи була аламы? Нисек кенә маҡталмаһын-данланмаһын, И. В. Сталиндың «бөйөк» һәм «даһи» икәнлеге Шайморатовта икеләнеү, ниндәйҙер ышанмау тойғоһо тыуҙыра. Күптәргә нахаҡтан баҫылған «халыҡ дошманы» тамғаһы ҡасан да булһа юйыласаҡ, юҡҡа сығарыласаҡ тарих тарафынан. Килер бер көн, «халыҡ дошманы» тигән ҡаҙна тамғаһы уны уйлап сығарыусыларҙың үҙҙәренә ҡайтарып баҫыласаҡ! Шул саҡ һәммәһе үҙ урынына ултырасаҡ! Намыҫлы, Совет власына нык бирелгән хәрби начальниктарҙы нахаҡҡа дошман яһап аттырыуҙы ойоштороусылар енәйәтсе генә түгел, ҡотоҡос. Яуыз ғына түгел, ә халыҡ дошманы... Шул ысын халыҡ дошмандарының беренсе рәтендә — Ягода, Ежов, Берия, Вышинский...

## XVII

Корпус командиры Борисов дивизияла булып киткәндән һуң ярты тәүлек самаһы ваҡыт уҙғас, Шайморатовтың талабы буйынса Обливская тимер юл станцияһына һөжүм итеү планының раҫланыуы мәғлүм булды, һәм оҙаҡламай ҡалҡыулыҡтағы дошман танкыларына ҡаршы һуғышыу өсөн командарм ебәргән танкылар ҙа килеп етте.

Обливская тимер юл станцияһы өсөн һуғыш ҡабаттан башланды. Дошман танкылары, артиллерияһы, пулеметтары утына эләккән бүтән полктарҙың атакалары кире ҡағылғанда ла 294-се кавполктың һөжүме әүәлгесә туҡталманы.

Иртәгеһе көндө болоттарҙан әрселгән күм-күк һауаға күтәрелгән дошман самолеттары яҡынлаша башлағас, башҡорт егеттәренә һөжүмде туҡтатырға тура килде. Үлем сәсеүсе ауыр йөктәрен бушатҡандан һуң да китергә теләмәгән дошман самолеттары, тәпәшәктән генә ҡыйпылып осоп, ергә боҫҡан һыбайлыларҙы ҡурғаш ямғыры менән ҡойондорҙо...

Дошман самолеттары киткәндән һуң 275-се кавполк һыбайлылары дүрт мәртәбә атакаға ташланып ҡараһа ла, һәр саҡ уңышһыҙлыҡҡа осраны.

Бының сәбәбен асыҡларға тырышҡан генерал-майор Шайморатов яңы ғына алынған «Виллис» машинаһында 275-се кавполкҡа китте.

Дивизия командиры Чир йылғаһына яҡынлаша башлағас, дошман орудиелары ҡотороноп ут асты. Яҡында ғына ярылған туп ярсыҡтары тейеп машина ҡапҡасы тишелеүенә эсе бошҡан шоферҙың ҡобараһы осто.

— Берәй урында йәшенәйек, иптәш генерал!

— Ҡурҡаһыңмы?

— Машина йәл, иптәш генерал! Өр-яңы бит, — тине ҡаҡса йөҙлө шофер, иларҙай хәлгә етеп.

Шайморатов асыуланып ҡул һелкте.

— Әйҙә, ҡыу машинаңды! Машина түгел, ана, күр, күпме әҙәм башы ҡырыла!

Урам уртаһындағы санэскадрон повозкалары араһында 275-се кавалерия полкы командирының политик эш буйынса урынбаҫары майор Әлибаевты күреп, Шайморатов машинаһынан сыҡты.

— Сәғит Рәхмәтович!

Артына әйләнеп ҡарау менән дивизия командирын күргән Әлибаев йүгерә-атлай машина эргәһенә килде.

— Здравия желаем, иптәш генерал!

— Бында ни эш бөтөрәһегеҙ? — тип һораны Шайморатов.

Һынын ҡатырып, Әлибаев турайҙы.

— Медицина работниктарын ҡабаландырып йөрөйөм, иптәш генерал! Яралылар күбәйҙе бит!

— Ҡайҙа полк командиры?

— Алғы һыҙыҡтағы эскадронда.

— Атака ниңә туҡталды?

Ундай һорау мотлаҡ биреләсәген аңлаған майор Әлибаев ҡыҙарынды.

— Дошман уты бик яман бит, иптәш генерал! Яугирҙарға баш ҡалҡытырға ла мөмкинлек юҡ! Аттар менән кешеләр ҙә ныҡ йонсоған. Аҙна буйы йоҡламауҙан һәм йүнләп тамаҡтары туймауҙан, иҫерек шикелле, айҡала-сайҡала йөрөйҙәр. Бәғзеләре атлап барған ыңғайҙа йоҡлап китә!

Әлибаевтың аҡланыуы Шайморатовтың асыуын килтерҙе.

— Полк командиры йоҡлаймы әллә?

— Йоҡлауын йоҡламай, иптәш генерал. Шулай ҙа... — тип башланы Әлибаев ҡыйыуһыҙ ғына. — Был хаҡта һеҙгә әйтергә уңайһыҙланғайным... Үҙемдән оло дәрәжәле командир хаҡында яман һүҙ әйтеүе лә әллә нисек...

— Полк командирының кешеләр менән мөнәсәбәте нисек?

— Кешеләрҙе кәрәгенән артыҡ йәлләй. Шул арҡала Ғайсин талапсанлығын юғалтҡан, — тине лә, дивизия ко-

мандиры күп һөйләгән кешене яратмауын иҫенә төшөрөп, Әлибаев үҙенә китергә рөхсәт һораны.

— Сабыр итегеҙ, Сәғит Рәхмәтович, — тине Шайморатов, Әлибаевҡа текләп ҡарап. — Һеҙгә минең үтенесем бар. Полк командиры Ғайсинға ярҙамлашығыҙ!

— Тыңлайым, иптәш генерал!

— Бындағы йомошто йомошларға бүтән кешегә ҡушығыҙ ҙа үҙегеҙ хәҙер үк фронттың алғы һыҙығына сабығыҙ һәм эскадрондарҙы ҡабаттан атакаға күтәрегеҙ! Был һөжүмдең уңышлы тамамланыуына полк командиры менән һеҙ яуаплы, иптәш Әлибаев, — тип Шайморатов ҡаты иҫкәртте лә ғәҙәтенсә һөйләшеү тамамланыуын белгертте: — Можете ехать!

— Тыңлайым, иптәш генерал!

Майор Әлибаев әйәрле атына атланды ла фронттың алғы һыҙығындағы полк командиры эргәһенә елдерҙе.

Полк командирының күҙәтеү пункты Чир йылғаһы аша һалынған күпер эргәһенә яҡын урындағы пожарныйҙар каланчаһында урынлашҡайны. Унда барып етеп, Шайморатовтың бойороғон Ғайсинға тапшырғас, Әлибаев үҙенән өҫтәне:

— Был юлы ла атака уңышһыҙ тамамланһа, дивизия командирынан беҙгә ныҡ эләгәсәк!

— Хәрби трибуналға тапшырамы беҙҙе? — Полк командиры Ғайсин кәйефһеҙләнде.

— Ул тиклемен белмәйем... Бәлки, башта разведка ебәреп, ут нөктәләрен асыҡлау кәрәктер?

— Дошмандың ут нөктәләре разведчиктар тарафынан асыҡланған!

Майор Ғайсин, полк штабы начальнигы капитан Нурғәлиев менән атаканы нисек итеп ойошторорғу хаҡында кәңәшләшкәс, пожарный каланчаһына ҡабаттан күтәрелде. Күрше ауылдағы гитлерсылар позицияһын биноклдән байтаҡ күҙәткәндән һуң, орудие командирына ҡысҡырҙы:

— Прицел ике! Уңғараҡ ноль дүрт! Биш снаряд, беглый огонь!

Күрше ауылдағы гитлерсыларҙың нығытмалары тәңгәленә барып төшкән снарядтарҙың бер-бер артлы гөрһөлдәп ярылыуы ишетелде.

— Әһә, снарядтар иң кәрәк урынға төшөп ярылды! — Майор Ғайсин, ҡулындағы биноклдән күҙен алмайынса, бик ныҡ тулҡынланып, барлыҡ орудиеларҙан ут асырға ҡушты.

Дошман позицияһының аҫты-өҫкә әйләнеүен күргән полк командирының йөҙө асылды. Уның эргәһендәге ярҙамсылары ла йәнләнде.

— Тупсыларға дан! — тине полк штабы начальнигы капитан Нурғәлиев.

Өлкән лейтенант Шамил Рәхмәтуллин батареяһының көслө уты ярҙамында беренсе эскадрон һыбайлылары атакаға ташланды. Улар артынса бүтән эскадрондар ҙа һөжүмгә китте. Дошман сигенә башлағас, башҡорттар уларҙы тын алдырмай эҙәрлекләне.

Дошмандың резервтағы ике уҡсы дивизияһы яуға индерелгәс, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының һөжүме туҡталды.

Немец радистары аңламаһын өсөн полк командирҙары менән эфир аша башҡортса асыҡтан-асыҡ бәйләнеш тотҡан генерал-майор Шайморатов, һыбайлыларҙың ауыр хәлдә икәнлеген белгәс, уҡсы полк командиры майор Ғафаровты рацияға саҡырҙы.

— Фәйзи, ҡаршыңдағы дошман тылына һиҙҙермәй уҙып, уларҙың ҡырмыҫҡа иләүен эстән туҙҙыр!

— Барыһына ла төшөндөм, иптәш беренсе!

Майор Ғафаров, беренсе батальон командирын саҡыртып, дошмандың терәк пункттарын ҡыйратырға бойорҙо.

Кис, ҡараңғы төшкәс, беренсе уҡсы батальон сафындағы лейтенант Атаев взводы беренсе булып румындарҙың тылына һиҙҙермәй үтеп инде. Ул, ауыл осондағы дошман һаҡсыларын дөмөктөргәндән һуң, пулеметтар менән дзоттарын ҡыйратты. Шунан атаевсылар траншеялар буйлап йүгерҙе. Ауылдың төньяғындағы ут нөктәләре лә ҡыйратылғас, улар артабан ташланды. Дошман тылындағы бер уҡсы отделение һөжүм иткән ваҡытта ҡул һуғышы башланды.

Зәки Байдәүләтов эргәһендәге Мөхәммәтҡазы дуҫына киҙәнгән дошман һалдатын тәкмәстерә һуҡты ла, икенсеһенә атырға бирмәй, автоматына йәбеште. Тартҡылаша торғас, улар икеһе бергә тәкмәсләнеләр. Дошман һалдаты Зәкиҙең өҫтөнә атланырға һәм билендәге хәнйәре менән сәнсергә маташты. Байдәүләтов бирешмәне. Яйын табып хәнйәрҙе эләктергәс, боғаҙына йәбешкән дошмандың күкрәгенә ҡаҙаны ла, ерҙән һикереп торған ыңғай, взвод командирына ике яҡлап ташланған дошман һалдаттарының береһенә арттан һикерҙе...

Батальондың төп көсө килеп еткәс, төнгө алыш тулы еңеү менән тамамланды.

Дошман тынғы бирмәйәсәген аңлаған Атаев терәк пунктында тупланған пулеметтарҙы һуғышҡа әҙерләтеп, һәр пулеметсыға һәм һәр автоматсыға тейешле бурыс ҡуйҙы.

Иртәнсәк дошман танкылары яҡынлашыуы күренде. Уларға ышыҡланып бер батальондан күберәк һалдат килгәне төҫмөрләнде.

— Яҡынайҙылар бит, ниңә атмайбыҙ? — тип һораны Мөхәммәтҡазы.

— Бер бөгөнмө һин һуғышта?! — тип асыуланды Зәки, пулеметы аша алға ҡарап.

Лейтенант Атаев яҡынайған танкыларға ҡаршы гранаталар әҙерләргә команда бирҙе. Алдағы ике танк тиҙлеген арттырҙы. Улар траншеяға күтәрелгән ваҡытта, сержант Әбүзәров гранаталар бәйләмен ырғытты. Көслө шартлау яңғыраны. Һыңар гусеницаһыҙ ҡалған танк урынында бөргаланды, ә икенсеһен лейтенант Атаев яндырҙы. Арттараҡ килгән өсөнсө танк, ситтән урап, пулемет расчетын иҙеп үтте һәм траншеяны үтекләй башланы.

Мөхәммәтҡазы танкыға ҡаршы шыуҙы һәм гранаталар бәйләмен ташланы. Танк шунда уҡ янғынға солғанды. Люктан танкистар сығыуы булды, беҙҙең автоматсылар уларҙы сүпләргә өлгөрҙө.

Йәйәүле һалдаттарҙан айырылған дошмандың ҡалған танкылары кире боролдо. Ләкин тынлыҡ оҙаҡҡа барманы. Юғалтҡан терәк пункттарын нисек тә кире ҡайтарырға ынтылып, дошман һалдаттары ҡабаттан атакаға күтәрелде. Алыштың көсөргәнешле, иң ҡыҙыу мәлендә уҡсылар полкының төп көсө килеп етте. Улар менән бер үк ваҡытта дивизияның 275-се һәм 294-се кавполктары ла һуғышҡа индерелде.

Оҙаҡҡа һуҙылған ҡанлы бәрелештәрҙән һуң, Ильиновка ауылы дошмандан тулыһынса азат ителде.

## XVIII

Ҡасып барыусы румындарҙы Шайморатов артабан эҙәрлекләргә бойорҙо.

Йүнләп ял итергә өлгөрмәгән башҡорт егеттәре, тамаҡтары ас, өҫтәрендәге кейемдәре лыҡа еүеш булыуына ҡарамаҫтан, йәнә урындарынан ҡуҙғалды.

Нык йонсоған эскадрондар юлда барышлай тарҡалды, бер-береһенән артта тороп ҡалды. Аяҡ-ҡулдарын туңдырған, асығыуҙан хәлһеҙләнгән кешеләр ҙә күбәйҙе. Сөнки дивизияның хозчасты, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым тейәп килтереүсе ылауҙары кухнялары менән әллә ҡайҙа ҡалды. Етмәһә, епшек ҡар яуа башланы.

Чугунка ауылына килеп етеп, оборона тоторға туҡталғас, тарҡалған эскадрондарҙан ҡалған боецтарға сохари менән эремсек киҫәге өләшеп бирҙеләр.

Ҡаты яраланған яугирҙар өсөн медицина пункты ойошторолған ваҡытта авангардтағы эскадронын 275-се полк командиры Ғайсин ҡыуып етте. Адъютанты ҡар һыуынан ҡайнатҡан сәйҙе соҡор төбөндә ултырып эсә генә башлағайны, дивизия штабынан элемтәсе килде.

— Иптәш майор, һеҙҙе «олатай» саҡырта!

Ғайсин котелок төбөндәге һалҡынса сәйҙе бер тынала һемерҙе лә элемтәсе артынан эйәрҙе.

Дивизия штабы асыҡ дала уртаһындағы ҡыуаҡлыҡтар араһында немецтар төҙөгән иркен блиндажда урынлашҡайны. Ике яҡ стенаның буйынан буйына һуҙылған һике өҫтөндә бер-береһенә уҡмашып йоҡлаған офицерҙарҙың хырылдауына иғтибар итмәйенсә, гильзанан эшләнгән шәм яҡтыртҡан өҫтәл артында япа-яңғыҙы ултырған генерал Шайморатов, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йонсоу йөҙөн сырылдырып, блиндажға ингән 275-се кавполк командирына ҡараны.

— Ғайсин, һиңә ашығыс хәрби задание. Ошо төндә Фроловка ауылының уң яғынан үтеп, егерме дүрт ноль-ноль сәғәттә һөжүм башларға һәм иртәнге өскә Обливская тимер юл станцияһын алырға!

Майор Ғайсиндың төҫө үҙгәрҙе.

— Иптәш генерал, 275-се полк тарҡау, беҙҙең төп көс артта килә. Эскадрондарҙы бергә йыймайынса...

— Полктың тарҡаулығына, эскадрондарҙың артта ҡалыуына һин ғәйепле, — тип Шайморатов уны асыу менән бүлдерҙе. — Ниндәй вайымһыҙлыҡ! Билдәләнгән ваҡытта Обливская станцияһы алынырға тейеш! Ҡитергә мөмкин!

Дивизия командиры блиндажынан ярһып сыҡҡан майор Ғайсин, ни эшләргә белмәйенсә, үҙен һаҡсы янында көтөп тороусы Әлибаевтан кәңәш һораны:

— Сәғит Рәхмәтович, миңә ҡалайтырға хәҙер, ҡалайтырға? Полктың ярты-йорто көсө менән генә Обливская станцияһын нисек һуғышып алырға?

Полк командирын көс-хәлгә тынысландырған Әлибаев:

— Әлегә ваҡыт бар. Төн уртаһына саҡлы берәй әмәле табылыр, — тине лә пушка-минометтарҙың һәм саперҙарҙың әҙерлеген тикшерергә китте. Барлыҡ эште бик тиҙ арала ойошторғас, ул полк командиры эргәһенә кире килде.

— Бындағы взводтар тулыһынса тупланып, үҙ урындарына урынлаштырылып бөттө, ә артта ҡалған 294-се һәм 313-сө кавполктар һаман юҡ!

Көс-хәлгә килеп еткән эскадрон командирҙарын йыйып, майор Ғайсин дивизия командиры тарафынан ҡуйылған хәрби бурысты аңлатты.

— Шуны белегеҙ, иптәштәр: Обливская станцияһын бушатып алыу — Сталинград ҡамауындағы фашистарҙы ҡыйратыусы хәрби частарыбыҙға туранан-тура ярҙам итеү тигән һүҙ. Беҙҙән күпкә артта ҡалып килгән 294-се һәм 61-се кавалеристарҙың ярҙамына ла ышаныс аҙ. Барлыҡ ышаныс тик үҙебеҙҙә генә, иптәштәр! Коммунистар менән комсомолецтар партияһыҙҙарға үрнәк булырға тейеш! Тыуған илебеҙгә һәм туған партиябыҙға тоғро икәнлегебеҙҙе тағы ла бер тапҡыр күрһәтәйек!

Төнгө сәғәт тсүәл ун ике тулғанда 275-се кавполк яугирҙары Обливская тимер юл станцияһына һөжүм башланы.

Өс-дүрт километр араны уҙғас, ҡаршы яҡтан көслө ут астылар. Артиллеристар менән бергә орудиеларҙың береһендә ултырып килгән майор Әлибаев, һикереп төшкән ыңғай, тәгәрмәс артына боҫҡан офицерҙар эргәһенә йәшеренде. Ап-аҡ ҡар яҡтыһында яҡшы күренгән артиллеристарға дошман һалдаттары төбәп тигәндәй атты. Күмәк бал ҡорттары шикелле һыҙғырышып осҡан пуляларҙың береһе Әлибаевтың пистолет тотҡан ҡулын өтөп уҙҙы. Ул, яраланған ҡулынан ҡан һарҡыуына иғтибар итмәйенсә, орудие командирына ҡысҡырып өндәште:

— Рәхмәтуллин, кешеләрҙе күрәләтә ҡырҙыртаһың бит! Пушканды йәһәтерәк бор!

Дошмандың көслө уты аҫтында ҡалған артиллеристар орудиеларын атырға әҙерләй башлағас та, уларҙың бер нисәһе үлемесле яраланды.

Үҙенең үтерҙәй булып һыҙлаған яраһын ҡабаттан бәйләткәс, Сәғит Әлибаев полк командиры Ғайсиндың бойороғо буйынса, тылдан ярҙам ойошторорға тип, дивизия тылындағы Алексеевка ауылына китте.

Таң алдынан ел көсәйҙе. Епшек ҡар өҫтө боҙ менән ҡаҫмаҡланып, ер шыҡыйып туңғанлыҡтан, Әлибаев ултырып барған ике тәгәрмәсле арба әле уңға, әле һулға сайҡалды.

Ярты юлды уҙғас, аттары ҡушарлап егеүле бричкала килгән ике ҡыҙылармеец осраны.

— Ҡайҙа юл тоттоғоҙ?

— Үҙебеҙҙең беренсе эскадронға барабыҙ, — тип яуап ҡайтарҙы бричкала килеүселәрҙең береһе.

— Бында ни эшләп йөрөйһөгөҙ?

— Һуғыш яланындағы яралыларҙы йыйырға ебәргәйнеләр, иптәш майор!

— Яралылар ҡайҙа?

— Ҡараңғыла береһен дә тапманыҡ!

Егеттәрҙең фамилияһын һорашып, уларҙы румын һалдаттары мәйете араһында ятҡан яралы һыбайлылар эргәһенә алып барҙы.

— Алдашыуы оят түгелме? Ҡешеләр ҡанһырап ята, ә һеҙ бер кемде лә күрмәмешкә һалышаһығыҙ. Барыһын да йыйып алығыҙ! Беҙҙең берәй яралы һалдат ошонда ятып ҡалһа, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ! — тине Әлибаев, асыуланып.

Иртәгеһе көндө Алексеевка ауылындағы санэскадронға яраланып килгән 275-се кавалерия полкы командиры урынбаҫары Йосопов Обливская тимер юл станцияһы өсөн барған атаканың дошман тарафынан кире ҡағылыуы, полкта илле алты ғына кеше ҡалыуы тураһында әйткәс, ул һуғыштың аҙағына саҡлы ҡатнаша алмауына Әлибаевтың эсе бошто.

— Беҙҙең полктың исеме генә ҡалған икән!

— Дошманға ла беҙҙән бик ныҡ эләкте, — тине Йосопов.

— Ғайсинға ярҙамды ашығыс ойошторорға кәрәк!

275-се кавалерия полкын тулыландырыу өсөн еңел яралы, аҙашҡан йәки бүтән төрлө сәбәптәр менән үҙ частарынан артта тороп ҡалғандарҙы йыйып фронттың алғы һыҙығына оҙатырға йөрөгән Әлибаевты эҙләп, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының яуаплы секретары Әһел Истамғәлин килде. Ул, иҫәнлек-һаулыҡ та һорашып тормайынса, күҙлеге аша алан-йолан ҡаранып:

— Сәғит Рәхмәтович, миңә һеҙ кәрәк, — тине һәм кеҫәһенән ҡағыҙ-ҡәләм сығарҙы. — Обливская өсөн барған һуғышта ҡатнашыусылар хаҡында һөйләгеҙ әле! Ҡемдәр, ниндәй шарттарҙа батырлыҡтар күрһәтте?

— Мин ул һуғыштың башында ғына булдым, — тине Әлибаев.

— Үҙегеҙ яраланғанға тиклемге берәй ҡыҙыҡлы эпизодты һөйләһәгеҙ ҙә яраған миңә. Иртәгә сығасаҡ газета өсөн мәҡәлә яҙырға кәрәк!

— Мин белгән-күргән эпизодтар газета өсөн иҫкерҙе. Алғы һыҙыҡҡа барып, минең урынға полк командирының политик эш буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнгән Ғилемхан Хәсәновҡа мөрәжәғәт итегеҙ!

— Унда беҙҙең редактор Али Ҡарнай йөрөй. Ҡарнайҙың ҡасан редакцияға ҡайтыуы билдәһеҙ. Ә батырҙар хаҡындағы мәҡәлә беҙгә бөгөн, юҡ, яңылышам, хәҙер үк кәрәк, — тине Истамғәлин, сабырһыҙланып.

— Аҙаҡҡы һуғышта яраланған беҙҙең полк командирының урынбаҫары Йосопов та бында. Уның менән осрашып һөйләшһәгеҙ...

— Уның менән осраштым. Йосопов йүнле нәмә һөйләй алманы. Миңә кешеләрҙең ҡаһарманлығына бәйләнешле ҡыҙыҡлы эпизодтар кәрәк, Сәғит Рәхмәтович!

Ундай материалдарҙы алғы һыҙыҡта ойошторабы урынға, тылдағы кешеләрҙән һорашып, еңел генә материал әтмәләргә маташҡан журналистың ҡыланышына Сәғит Әлибаевтың асыуы килде.

— Мин бер ни ҙә әйтә алмайым был турала! Редакторығыҙ передовойҙа бит. Уны көтөгөҙ!

Истамғәлин һаман ныҡышты:

— Обливская өсөн барған һуғыш ваҡиғаларын һөйләргә теләмәһәгеҙ, көндәлегегеҙҙе биреп тороғоҙ!

Махсус приказ буйынса фронтта көндәлек алып барыу ҡәтғи тыйылыу сәбәпле, Әлибаев бер ни белмәмешкә һалышты:

— Ниндәй көндәлек тағы?

— Һуғыш эпизоды яҙылған көндәлегегеҙҙе уҡырға теләйем, Сәғит Рәхмәтович!

— Әһел туған, һеҙ ниҙер бутайһығыҙ. Булмаған көндәлекте һеҙгә нисек уҡытайым ти?

— Хәрби трибуналға эләгеүҙән ҡурҡып, көндәлек алып барыуығыҙҙы миңә әйтергә теләмәйһегеҙме?

— Эйе, хәрби трибунал хөкөмөнән ҡурҡып алып бармайым көндәлекте, — тине лә, Әһел Истамғәлин бик ныҡыша башлағас, майор Әлибаев ҡырт киҫте: — Көндәлек алып барған булһам да, үҙемдең шәхси уй-тойғоларымды бер кемгә лә уҡытырға теләмәҫ инем!

Асыуы ҡабарған лейтенант Истамғәлиндең оҙонса аҡһыл йөҙө таныш алмаҫлыҡ булып томрайҙы, күҙлек аша ҡараған күҙҙәре таһырайҙы.

— Миңә лә йомошоғоҙ төшөр әле бер заман, Сәғит Рәхмәтович, — тип ул тамаҡ төбөнән ғыжылданы ла, эйәренә атланғас, барлыҡ асыуын меҫкен саптарына төшөрөп, уны аяуһыҙ ҡамсылай-ҡамсылай, яралы һалдаттар менән шығырым тулы урам буйлап ҡайҙалыр йән-фарман елдерҙе.

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһының яуаплы секретары менән осрашып һөйләшеүҙән майор Әлибаевтың күңелендә ниндәйҙер алама эҙ ҡалды. Уның тураһында йәһәтерәк онотorға тырышып, ул бүленгән эшен дауам итте. Тәүҙә ҡырҡ ике кешенән торған бер төркөмдө, унан аҙаҡ йөҙ ҙә етмеш һигеҙ һалдатты берләштергән икенсе төркөмдө 276-сы кавалерия полкы командиры ҡарамағына оҙатҡас ҡына Сәғит Әлибаевтың күңеле бер аҙ күтәрелде.

Алексеевка ауылынан быңдай ярҙам килеүенә кавполк командиры майор Ғайсин бик ҡәнәғәт ине. Ул, полктағы

барлыҡ көстө бер урында туплап, 2 декабрҙең таңында үҙҙәрен контратакалаусы дошман һалдаттарына ҡаршы ут асырға бойорҙо.

Алыштың иң яуаплы ваҡытында өлкән лейтенант Шамил Рәхмәтуллин орудиеларының йәҙрәләре бөттө. Патрондары ҡалмаған станоклы пулеметтар ҙа тынып ҡалды.

— Трофейға алынған пулеметтар күпме? — тип һораны Ғайсин.

— Трофейға алынған немецтарҙың «МГ» пулеметы беҙҙә бөтәһе түгел, иптәш майор! Ләкин ул пулеметтарҙан беребеҙ ҙә ата белмәй, — тип яуап ҡайтарҙы пулеметсылар.

— Их, һеҙҙе! — тип асыу менән һүгенде лә, «МГ» пулеметы артына полк командиры үҙе барып ятты һәм яҡынлашып килгән дошман һалдаттары өҫтөнә ҡурғаш һиптерергә тотондо.

Ҡаршылағы дошман ҡаса башлағас, полк командиры Ғайсин һикереп торҙо.

— Салауат ейәндәре, алға, минең арттан! — тип ҡысҡырҙы ла, пистолеты менән һелтәнә-һелтәнә, дошман һалдаттары артынан ташланды.

Уның артынса күтәрелгән башҡорттар, «ура» ҡысҡырышып, ҡоралдарынан ата-ата, алға табан йүгерҙе.

Дошман һалдаттарын эҙәрләү менән мауыҡҡан башҡорт егеттәре таллыҡҡа барып инде. Шунда уҡ ҡул һуғышы башланды. Ике яҡтан да кешеләр күпләп ҡырылды. Башҡорттарҙың һөжүменә сыҙамаған немецтар сигенә башлағас, полк командирының политик эш буйынса урынбаҫары итеп ваҡытлыса тәғәйенләнгән Хәсәнов артабан эҙәрләүҙе туҡтатты.

— Иптәштәр, беҙгә көстө һаҡларға кәрәк, — тине ул һәм яралылар менән үлеләрҙе йыйырға, һуғыш ваҡытында юғалыусыларҙы эҙләп табырға ҡушты.

Полк штабы начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡарған офицер, ниҙер иҫенә төшөрөп, тирә-яғына ҡараны.

— Ҡайҙа майор Ғайсин?

— Ул күптәнән күренмәне...

Ваҡытлыса полк командиры вазифаһын башҡарасағын әйтеп, өлкән лейтенант Рәхмәтуллин Ғайсинды эҙләтте.

Майор Ғайсин үлеләр менән яралылар араһында табылманы. Ул бер ниндәй эҙһеҙ юғалды. Ҡайһы арала-лыр унан айырылып ҡалған ординарецы ла бер ни белмәне. Ике төркөмдө төрлө яҡҡа ебәреп эҙләтеүҙең дә файҙаһы теймәне.

Төн уртаһында походный кухня килде.

— Тәүҙә ниндәй эскадрон кешеләрен ашатырға? — тип һораны аҙыҡ ташыусы һалдат.

Өлкән лейтенант Рәхмәтуллин асыуланды:

— Взвод тиклем дә кешеләре ҡалмаған полкты ниңә бүлергә? Тотошон бергә ашатырға!

Майор Ғайсиндың бер ниндәй эҙһеҙ юғалыуына ҡайғырған егеттәрҙең тамағына аш барманы.

Иртәгәһе көндөң таңында 275-се кавполктың күҙәтеү пунктына генерал-майор Шайморатов килде. Ҡисәге һуғыш барышы һәм Ғайсинды[1] эҙләтеү буйынса ниндәй саралар күрелеүе хаҡында Рәхмәтуллиндан ентекләп һорашҡандан һуң, ул бруствер ситендәге стереоторбаның окулярынан дошман тотҡан позицияны оҙаҡ күҙәтте. Разведчиктарҙың һәм пленға алынған фрицтың һөйләүенә ҡарағанда, Обливская станцияһының тирә-яғы дошман тарафынан бик нығытылған. Яртылаш емерек өйҙәрҙең баҙында һәм станция ситендәге ҡалҡыу урындарҙа дзоттары төҙөлгән. Бер-береһе менән тоташтырыулы траншеяларында күмәк ут нөктәләре урынлаштырылған. Обливская станцияһы төрлө яҡтан ике-өс рәтле сәнскеле тимерсыбыҡтар менән уратылып, улар тирәһендә миналар һалынған булырға тейеш. Обливская станцияһын һаҡлаусы румын һалдаттары, разведка мәғлүмәттәренән күренеүенсә, тулыһынса немецтар менән алмаштырылған. Сөнки Обливская тимер юл станцияһын юғалтһалар, Сталинградтағы Паулюс ғәскәрҙәрен хәрби боеприпастар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән тәьмин иткән гитлерсыларҙың Сталинград — Лихий — Ростов араһындағы юлы өҙөләсәк.

Шундай шарттарҙа Обливская станцияһын һуғышып алыуы мөмкин түгел икәнлеген яҡшы аңлаған генерал-майор Шайморатов, 275-се һәм 294-се кавалерия полктарын ваҡытлыса берләштерергә, әлеге позициянан ике-өс километр уңдараҡ ятҡан Попов, Үрге һәм Түбәнге Деево ауылдары тирәһендә оборона тоторға бойорҙо.

— Әле беҙ тотҡан фронт асыҡ ҡаламы? — тип һораны өлкән лейтенант Рәхмәтуллин.

— Бында һеҙҙе үҙебеҙҙең уҡсылар полкы алмаштырасаҡ.

— Иптәш генерал, бер һорау менән мөрәжәғәт итергә мөмкинме һеҙгә?

— Рәхмәт!

— Берләштерелгән полктарҙың командиры кем буласаҡ?

---

[1] Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң, Ғайсин Өфөгә ҡайтты. Шунда ғына уның ҡаты яраланған көйө әсирлеккә төшөүе асыҡланды.

— Граждандар һуғышы геройы подполковник Евграфов.

Үҙенән ауыр йөк төшөүенә ҡыуанған Рәхмәтуллин иркен тын алып ҡуйҙы.

Шул уҡ төндә 275-се кавалерия полкын майор Ғафаровтың уҡсы полкы алмаштырҙы.

Көндөҙ ял иткәндә траншеялар төбөндә өшөп-туңып ултырған һалдаттар эргәһенә «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторы Али Ҡарнай килде. Ул башҡорт егеттәре менән оҙаҡ әңгәмәләште. Яугирҙар һөйләгән ҡайһы бер эпизодтарҙы әлдән-әле ҡуйын дәфтәренә яҙҙы.

Граждандар һуғышы геройы, Ҡыҙыл Армияның Генеральный штабының кавалерия инспекторы генерал-полковник Ока Иванович Городовиковтың дивизияға килеп китеүе хаҡында һүҙ сыҡҡас, Мөхәммәтҡазы, иптәштәрен ҡыҫырыҡлап, Али Ҡарнайға яҡыныраҡ шылды.

— Иптәш өлкән лейтенант, Городовиков бында ниңә килгән?

— Беҙҙең хәлде белергә һәм тейешле ярҙам ойоштороrға килгән.

— Дивизияның замполиты Нәзиров ағайҙы генерал-поковник Городовиковтың ҡушыуы буйынса бушатҡандармы әллә урынынан?

Һалдаттарҙың бер ҡатлылығына, һәр яңылыҡтан үҙҙәренсә һығымта яһарға әҙер тороуҙарына иғтибар игеп, Али Ҡарнай көлөмһөрәне.

— Нәзировты дивизия командирының политик эш буйынса урынбаҫары вазифаһынан бер кем дә бушатманы. Ул Башҡортостанға дивизия өсөн өҫтәмә көс алып килергә ҡайтып китте.

— Дивизияның политбүлек начальнигы Абдуллин да шуның өсөн киттеме Башҡортостанға?

— Юҡ, ныҡ ауырыу сәбәпле, врачтар тарафынан ҡайтарылды.

— Полковник Беловты дивизия командиры урынбаҫарынан ниңә бушаттылар икән?

— Ул корпус командирының тыл буйынса урынбаҫары итеп үрләтелде.

Яугирҙар, яйы тура килгәндә һәммәһен асыҡларға тырышып, һаман һорау яуҙырҙы:

— Иптәш өлкән лейтенант, алғы һыҙыҡ буйлап йөрөгән сағында беҙҙең олатайҙы фашистар пленға ала яҙған, имеш, тигән хәбәр ысын микән?

— Эйе, ысын.

— Фашист тоҫҡап атҡанда олатайҙы бер офицер үҙ кәүҙәһе менән ҡаплауы ла ысын хәбәрме?

— Унынһы ла булған хәл.

Яугирҙар, дивизия командиры өсөн борсолоп, үҙ-ара ыҙыҡ шаулашты:

— Олатайҙы нығыраҡ һаҡларға ине!

— Дөрөҫ, олатайҙы күҙ ҡарабыҙ кеүек һаҡларға кәрәк! Берләштерелгән ике полктың командиры подполковник Евграфов кисәге һуғышта ҡаты яраланыуы, ә партюомиссия секретары Хәбир Хәйруллин менән бүтән офицерҙарыбыҙҙың һәләк булыуы ла баштан ашҡан!

— Күҙ алдыбыҙҙа ғына күпме командирҙарыбыҙҙы юғалттыҡ бит!

— Союзниктар вәғәҙә иткән икенсе фронт та йәһәтерәк асылмай бит, исмаһам!

— Ә-әй, уларға ышаныс аҙ!..

Али Ҡарнай киткәндән һуң да егеттәр урындарынан таралышманы. Улар, төркөм-төркөм булып, төрлө ерҙә өйөлөшөп, ишеткән-белгән яңылыҡтары менән уртаҡлашты.

Шайморатовтың дошманға әләгә яҙыуы хаҡында уйлаған Байдәүләтов Зәки, Мөхәммәтҡазы дуҫын аулағыраҡ урынға алып барҙы ла:

— Бер сер асһам, кешегә әйтмәҫһеңме? — тип һораны.

— Ниндәй сер?

— Зәйтүнә исемле бер ҡатындан хат алдым...

— Һинә һөйәм тип яҙғанмы?

— Юҡ, ул хат миңә түгел... Уны олатайға тапшырыуымды үтенгән.

— Эһә, ҡыҙыҡ! — Мөхәммәтҡазы устарын усҡа һуғып ыуҙы.

— Һин, түлкә, был турала берәүһенә лә бер ни ысҡындырып ҡуйма, — тип Зәки иҫкәрткән өсөн Мөхәммәтҡазы үпкәләне:

— Мине бер бөгөн генә беләһеңме?! Ләм-мим! Тик бер нәмә аңлашылмай. Ул бисә ниңә үҙе олатайға туп-тура яҙмаған?

— Минең аша ыңғайлыраҡ булыр тигәндер.

— Ул алйот бисә! Дивизия командиры һәр һалдат менән көн дә күрешеп йөрөй ти микән?

— Әгәре, гражданкала саҡта, олатай менән бергә берәйһен йөрөгәнемә ышанғандыр миңә Зәйтүнә, — тип Байдәүләтов үҙе белгән серҙе дуҫына һөйләне.

Зәкиҙе иғтибар менән тыңлаған Мөхәммәтҡазы, тирәяғына һағайыулы ҡарашып, шыбырланы:

— Алйот бисәнең был хатын хәҙер үк йыртып ташла! Үҙең менән берәй хәл булып, ят кеше ҡулына эләкһә, олатайҙың имманыты сығасаҡ!

— Зәйтүнәгә нисек яҙырға яуапты?

— Яуапты сержант Самарин исеменән яҙырбыҙ. Ул буйҙаҡ. Ата-әсәһе эвакуацияланғанда һәләк булыуын белгәне бирле, үҙен ҡайҙа ҡуйырға урын тапмай интегә. Хатлашһа, мужыт, ҡайғыһы әҙерәк баҫылыр, ә Зәйтүнә олатайҙан һыуыныр.

Зәки хатты йыртып ташланы. Шунан, өшөгән бармаҡтарын көскә ипкендереп, ҡыҫҡа һаплы көрәккә ҡағыҙҙы һалды ла, отделение командиры сержант Самарин исеменән Зәйтүнәгә хат яҙырға ултырҙы. Көс-хәлгә яҙып бөтөп, уны хат ташыусы егеткә тапшырғас, ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Бер изге эш ҡылдыҡ!

Мөхәммәтҡазы, өндәшмәйенсә, Зәки дуҫының арҡаһына арҡаһы менән терәлеп ултырҙы.

Ваҡыт үтә яй үҙҙы.

Траншея төбөндәге һуғышсыларҙы йоҡо баҫты. Үткән төндә уларға саҡ ҡына ла серем итеп алырға мөмкинлек булмағайны. Оборона өсөн мөһим эштәрҙе иркенләп башҡарырға ирек бирмәйенсә, унда-бында дошман миналары өҙлөкһөҙ шапылдап ярылып торҙо, ә иртән таң менән немецтар атакаға күтәрелде. Тәүгеһе кире ҡағылғас, икенсе тапҡыр өс танкы ярҙамында атакаланылар. Ләкин оборона тотҡан һуғышсыларҙы үҙ позицияларынан һөрөп сығара алманылар.

Траншея буйлап килгән взвод командиры Атаев күренде.

— Өшөнөгөҙмө?

— Өшөүҙән дә бигерәк, асыҡтыҡ, — тине Байдәүләтов. — Ниңәлер кухня һирәк килә башланы.

Лейтенант Атаев һуғышсыларға тейешле икмәктең тулыһынса бирелмәүе һәм йылы аштың тәүлегенә бер тапҡыр ғына килтерелеүе сәбәбен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе тылдағы ғәскәрҙәрҙең машинаһыҙ ҡалыуы, икмәк бешереү өсөн ялан ерендә утын юҡлығы һәм икмәк бешерерҙәй урын булмауы менән аңлатты ла:

— Хәҙер эш ыңғайланасаҡ. Беҙҙе асыҡтырмау, яңы бешерелгән икмәк менән туҡландырыу өсөн хозчасть хәстәрлек күрә, — тине.

Взвод командиры киткәс, йәнә тынлыҡ урынлашты.

Тыуған төйәген күҙ алдына килтереп, әсәһе менән һөйөклө кәләше тураһында уйланып ултыра торғас, ҡайғыһағыштарынан баҫыла алмайынса, Байдәүләтов ауыҙ эсенән генә йырлап ҡуйҙы:

Алыҫтарҙан, ай, күренгән
Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы...

Зәки йырлауҙан тыйылғас, кисә кис кенә Башҡортостандан килеп Атаевтың взводына тәғәйенләнгән башҡорт егеттәренең береһе шағир Ҡадир Даян һүҙҙәренә композитор Заһир Исмәғилевтең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы егеттәре менән генерал-майор Шайморатовты данлап йыр яҙыуы хаҡында әйтте.

— Ул йырҙы беләһеңме? — Зәкиҙең йөҙө асылды.

— «Шайморатов генерал» тигән йырҙы белмәгән, уны йырламаған әҙәм заты юҡтыр хәҙер Башҡортостанда, — тине ҡаҡса йөҙлө егет.

Уның һүҙен дөрөҫләп, фронтҡа яңы килгән башҡорттар шаулашты.

— Берәйегеҙ йырламаҫмы ул йырҙы?

— Ниңә йырламаҫҡа? Йырларға була ул, — тине лә ҡаҡса йөҙлө егет:

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал, —

тип башлағайны, уға яңы килеүселәрҙең һәммәһе берҙәм ҡушылды:

Ат уйнатып, алда бара
Шайморатов генерал.

Совет иле өсөн яуҙа
Кисте һыуҙы, уттарҙы;
Дошмандарға ябырылғанда,
Утлы дауыл ҡуптарҙы.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай,
Һай, батыр ҙа ир икән...

Йән тетрәткес йырҙың һәр һүҙен, көйөн отоп алырға тырышып, Зәки ихлас тыңланы.

Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай
Һинең улдарың, Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал.

Яңы йыр Байдәүләтовҡа ғына түгел, һуғышсыларҙың барыһына ла оҡшаны. Уны тиҙ арала отоп, һәр взводта, һәр ротала, батальонда, кавалерия полктарындағы эскадрондарҙа ла мауығып йырланылар.

Ул йыр аслы-туҡлы, йүнләп йыуынмай, өҫ-баштарын алмаштырмай, үҙәккә үтеп ингән әсе елле ҡышҡы һалҡын көндәрҙә өшөп-туңып, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы батырҙарса һуғыша-һуғыша, бер ай самаһы оборона тотҡан башҡорт егеттәренә көс бирҙе һәм дәрт-сәм өҫтәне.

## XIX

Чернышки — Обливская тимер юл участкаһындағы дошман оборонаһын декабрь аҙаҡтарында өҙөп, Красный Яр исемле утар азат ителгән төндә генерал-майор Шайморатов 294-се кавполкка килде. Хәрби совет приказы буйынса бүләкләнгән бер төркөм һыбайлыларға орден һәм миҙалдар тапшырып, уларҙы ҡайнар ҡотланы ла икенсе тапҡыр ошо полкка командир итеп тәғәйенләнгән подполковник Фондеранцевтың ординарецы ҡайнатҡан сәйҙе эсергә ултырҙы.

— Ҡешеләрҙең кәйефе нисек?

— Ҡешеләр ҙә, аттар ҙа бик ныҡ йонсоған, иптәш генерал, — тине подполковник Фондеранцев. — Гитлерсыларҙан ошо траншеяларҙы һуғышып алғас, ҡоралдарҙы тейешле урынға урынлаштырырға, хатта тамаҡ ялғарға ла хәлдәре етмәйенсә, ергә ауҙылар. Эскадрон командирҙары тәртипте көс-хәлгә урынлаштырҙы. Бының өҫтәүенә, үҙәккә үтеп инерҙәй ел менән ҡырҡ градусҡа етә яҙған һалҡын ҡамасаулай.

— Нимә тәҡдим итәһегеҙ? — тип һораны Шайморатов.

— Һалдаттарға ла, аттарға ла ял кәрәк, иптәш генерал.

— Обливская станцияһын һуғышып алмайынса, ял тәтемәйәсәк!

Телефон зымбырланы.

Фондеранцев элемтәсе ҡулындағы трубканы алып тыңланы ла Шайморатовҡа һондо.

— Һеҙҙе, иптәш генерал!

— Кем?

— Полковник Голенев.

— Тыңлайым!.. — Телефон трубкаһын ҡолағы тәңгәлендә тотҡан Шайморатовтың йөҙө үҙгәрҙе. — Ҡасан шылтыратты?.. Хәҙер килеп етермен. Ҡалғанын шунда һөйләшербеҙ. — Телефон трубкаһын элемтәсегә биргәс, ул полк командирына эйәк ҡаҡты: — Ишеттегеҙме? Бына һеҙгә ял! Бөгөн төндә һөжүмде дауам итәсәкбеҙ. Приказды көтөгөҙ, — тине лә, кружкаһы төбөндәге сәйен дә эсеп бөтөрмәйенсә, китергә ҡабаланды.

Дивизия штабына ингәс, землянка уртаһындағы «буржуйка»ла өшөгән ҡулын ышҡып ыуа-ыуа йылытҡан Шайморатов Голеневтан полктарҙағы хәлде һорашты. Шунан, «катюша»ны өҫтәлгә йәйеүле картаға яҡыныраҡ шылдырып яҡтыртҡас, хәрби подразделениеларҙың ҡайҙа, нисек урынлашыуын асыҡланы һәм штабы тарафынан төҙөлгән планға айырым төҙәтмәләр индерҙе.

— Красный Яр утарын кире һуғышып алыу өсөн гитлерсылар атаканы таңға планлаштырһа, беҙ, уларҙың ҡасан уяныуҙарын көтмәйенсә, төндә, тәмле-татлы төш күреп йоҡлаған саҡтарында, аңғармаҫтан, үҙебеҙ һөжүм башлаясаҡбыҙ, — тип картала полктарҙың һөжүм итеү йүнәлешен билдәләне лә, подразделениелар менән бәйләнеште өҙмәҫкә ҡушып, ул бер аҙға ял итеп алырға булды. Ләкин, ныҡ арыған һалдаттарының хәлен еңеләйтерҙәй мөмкинлек таба алмауына эсе бошоп, саҡ ҡына ла йоҡлай алманы. Шул уҡ ваҡытта немецтарҙың ҡасан атакаға күтәрелеүҙәрен көттөрөү ҙә аҡылһыҙлыҡ. Бындай ваҡытта кешеләрҙе йәлләү — үлемгә тиң. Үткән көндө гитлерсыларҙың дүрт атакаһы кире ҡағылды. Самолеттар, ун биш танк һәм бронепоезд ярҙамында һөжүм итеүсе уҡсы батальондары тулыһынса ҡыйратылғандан һуң да, Красный Яр утарын ҡабаттан һуғышып алырға иҫәп тотоп, дошман ҙур көс тупларға өлгөрҙө. Уны был юлы ла еңеү өсөн, һәммәһен ныҡлы уйлап башҡарыу мөһим. Чернышки — Обливская тимер юл участкаһындағы дошман оборонаһының кисәге алышта бер ни тиклем ҡаҡшатылыуын файҙаланырға тырышҡан корпус командиры 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы алдына яңы талаптар ҡуйҙы. Уны тормошҡа ашырыу өсөн тағы ниҙәр башҡарырға мөмкин? Корпустың 21-се һәм 55-се кавалерия дивизиялары урындарынан ҡуҙғалғас та, һыбайлы башҡорт егеттәре Чернышки станцияһы янында ныҡынған дошмандың тылына сығырға һәм гитлерсыларҙы аңғармаҫтан атакаларға бурыслы. Атакаларға? Әйтеүе анһат. Йонсоған кешеләрҙең көсөнә лә сик бар. Һалдат түгел, хатта машина сыҙамай бындай көсөргәнешкә... Берҙән-бер таяныс — артиллеристарҙа. Улар дивизияның ышанысы...

Телефонда кем менәндер һөйләшкән полковник Голеневтың: «Олатайҙы уятырғамы?» — тип һорауын яҙа-йоҙа ишеткән Шайморатов, уйҙарынан бүленеп, кушетканан торҙо.

— Минең хаҡта кем ҡыҙыҡһына?

— Корпус штабы начальнигы полковник Сабуров. — Беҙгә корпус командиры Борисов килеп етергә тейеш, ти.

«Һөжүм алдынан нерваны йәнә ҡаҡшата икән!» — тип уйлаған Шайморатов 313-сө кавполк командиры менән телефондан һөйләшә генә башлағайны, корпус командиры Борисов килеп инде.

Телефонда һөйләшеүенән бүленеп, Шайморатов уға ҡаршы атланы.

— Иптәш генерал!..

Ҡорпус командиры, рапорт тапшырырға йыйналған Шайморатовҡа иғтибар итмәйенсә, папаһаһы менән шинелен сисеп кушеткаға бырағытҡан ыңғайы, асыу менән екеренде:

— Һеҙ йылыла йоҡо туйҙыраһығыҙ, ләззәтле төш күрәһегеҙ, ә мин, корпус командиры, үҙемде-үҙем аямайынса, ошондай ҡаты һыуыҡта өшөп-туңып йөрөйөм!

Үҙенән түбәнерәк дәрәжәле командирҙарҙың фекере менән иҫәпләшмәҫкә, уларҙы теләгән саҡта кәмһетергә, хурларға, арҡыс-торҡос екеренергә ғәҙәтләнгән корпус командирының ҡыланышына асыуы ҡабарған Шайморатов был юлы яуапһыҙ ҡалырға теләмәне, һендерә әйтте:

— Тупаҫ мөғәмәләлә булыу өсөн әллә ниндәй аҡыл кәрәкмәй, иптәш комкор! Килгәнһегеҙ икән, беҙҙе лә әҙәмсә тыңларға өйрәнегеҙ!

Борисовтың аҡһыл йөҙө таный алмаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Әммә ошондай яуаплы, көсөргәнешле минутта шаушыу ҡубармаҫҡа уның аҡылы етте. Ул, ярһыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, ситлектәге арыҫлан шикелле, арлыбирле тапанды ла, Шайморатовҡа һөҙөп ҡараны.

— Ни өсөн дивизия тик тора?

— Дивизия ни эшләргә тейеш, иптәш комкор? Һеҙҙең приказ буйынса төнгө ноль-ноль икегә билдәләнмәгәнме ни беҙҙең һөжүм?

Ярһыуынан һаман баҫыла алмаған Борисов, үҙ һүҙен өҫтөн ҡалдырырға тырышып, сәғәтенә ҡараны.

— Обстановканы төшөндөрөгөҙ!

«Власын күрһәтергә маташа, самодур! Минең рапортты тыңларға теләмәне, хәҙер талап итә», — тип уйлаған Шайморатов үҙен тыныс һәм ышаныслы тоторға тырышты. Ул, Башҡорт кавалерия дивизияһы дошмандың тылына ҡайһы сәғәттә, минутта үтеп инәсәк ваҡытын әйтеп, һыбайлы полктарҙың ниндәй тәртиптә, ҡайһы тәңгәлдән гитлерсыларға һөжүм башларға тейешлеген картанан күрһәтте.

— Полктарҙың әле торған урыны ҡайҙа?

— 275-се кавполк ошо уйһыулыҡта. — Шайморатов ҡәләменең тупаҡ осон карта ситендәге билдәгә терәне. — 294-се һәм 313-сө кавполктар...

— Аңлашыла, күрәм!.. — Шайморатовты тупаҫ бүлдереп, өҫтәл ситенә ике ҡуллап таянған көйө, дивизия штабы начальнигы тарафынан сыбарланған картаға минут самаһы текләнеп ҡарап торғандан һуң, генерал-майор Борисов бармағы менән әле бер, әле икенсе урынға төртөп күрһәтте: — 275-се кавполкты ошонда, 294-се кавполкты ошонда, 313-сөнө ошонда күсерергә һәм төнгө икенсе яртыға барлыҡ көстө туплап, 21-се һәм 55-се кавдивизияларҙың ҡасан һөжүм башларын көтмәйенсә, дошман тылынан атака башларға!

— Үҙ фекеремде әйтергә рөхсәт итегеҙ, иптәш комкор?!

Борисов, үҙ һүҙләләнеп, ҡырт киҫте:

— Рөхсәт юҡ!

— Иптәш комкор!..

— Приказды үтәгеҙ, генерал!

Шайморатовҡа ризалашыуҙан башҡа әмәл ҡалманы.

— Есть!..

— Чернышки — Обливская тимер юл станцияһын алмайынса, һөжүмде туҡтатмаҫҡа, — тип бойорҙо ла Борисов блиндаждан сығып китте.

21-се һәм 55-се кавалерия дивизияларынан алыҫлашаса҇к башҡорт дивизияһының яңғыҙына дошман тылынан һөжүм итеүе бик ҡыйынға тура киләсәген яҡшы аңлаһа ла, Шайморатов полктарҙы корпус командиры ҡушҡан урынға күсерергә һәм билдәләнгән ваҡыттан алда атака башларға мәжбүр булды. Тәүҙә һәммәһе ыңғай барҙы. Аҙаҡтан, корпустың төп көсөнән айырылған Башҡорт кавалерия дивизияһын уратып алған гитлерсылар танкылар ярҙамында төрлө яҡтан ҡыҫырыҡлай башлағас, хәл мөшкөлләнде.

Шайморатов артиллеристарға ут асырға ҡушты.

Немецтарҙың контратакаһы кире ҡағылғандан һуң, дивизия командиры уҡсылар полкы батальонына барҙы.

— Сигенеүсе дошман һалдаттарын нинә эҙәрләмәйһегеҙ?

— Эскадрондарҙың һөжүмен көтәбеҙ, иптәш генерал,— тип яуап ҡайтарҙы комбат. — Үҙебеҙгә генә фашистар позицияһына яҡын барырға мөмкин түгел!

Һыбайлыларҙың атакаһын көтмәйенсә, станциянан бире нығынған гитлерсыларҙың һул флангыһын атакаларға ҡушып, Шайморатов уҡсы һалдаттарҙы күтәрҙе.

Батальон һөжүм башлағас, һыбайлы полктар иркенләне. 275-се полк һыбайлылары, дошман ҡамауын йырып, станцияға бәреп инде, башҡа кавполктар ҙа гитлерсыларҙы берҙәм ҡыйратырға тотондо...

Күп кенә ер азат ителгәндән һуң, Шайморатов үҙенең күҙәтеү пунктын тимер юл эргәһендәге емерек өйҙөң баҙына күсертте.

— Станция немецтарҙан тулыһынса таҙартылғанға тиклем, мин ошонда буласаҡмын, — тип ул дивизия штабы начальнигына хәбәр итергә һәм шул баҙҙа телефон булдырырға ҡушты.

Алда һаман алыш.

Башҡорттар гитлерсыларҙың тылында һуғышҡан ваҡытта ярҙамға килеп еткән корпустың башҡа кавдивизиялары ла һөжүмгә ҡушылды...

Утыҙ беренсе декабрҙең таңында Обливская станцияһы дошман һалдаттарынан тулыһынса таҙартылды. Шуның менән Сталинградтағы Паулюс ғәскәренә тимер юл буйлап оҙатылған гитлерсылар ярҙамы туҡтатылды һәм ҡамауҙағы дошман һалдаттары асығыуға дусар ителде.

Сталинградты дошмандан азат итеүгә тос өлөш индергән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы өсөн генерал-майор Шайморатов сикһеҙ шат һәм ғорур ине.

Кис, бөтә ерҙә тынлыҡ урынлашҡас, иң яҡын ярҙамсыларын йыйып, Шайморатов уларҙы тыуасаҡ Яңы, 1943 йыл менән ҡайнар ҡотланы һәм Еңеүсе данын яулап, уларҙың иҫән-һау, оло шатлыҡ-ҡыуаныстар менән Башҡортостанға ҡайтып, туған-тыумасалары, бала-сағалары һәм һөйгән йәрҙәре менән ҡыуаныслы тормош көтөүҙәрен теләп тост күтәрҙе. Аҙаҡ ул, ниндәйҙер көслө тойғоларға күмелеп, үҙе менән йөрөткән баянда илһамланып уйнаны ла уйнаны.

Шайморатов баянда уйнауҙан туҡтағас, подполковник Макаев яуҙаштарына күҙ ҡыҫты ла:

Башҡорттар китте һуғышҡа, —
Оҙатып ҡалды күк Урал, —

тип башлағайны, үҙенә арналған йырҙы тыңларға уңайһыҙланған Шайморатов ҡабаланып бүлдерҙе:

— Ҡәрәкмәй, Ғариф, кәрәкмәй!

Макаев аптыраны.

— Бөтәһе лә яратып йырлаған йырҙы йырлауҙан мәхрүм итмәгеҙ беҙҙе, иптәш генерал!

Мәжлестә ҡатнашыусы бүтән офицерҙар ҙа ризаһыҙлыҡ менән шаулаша башлағас:

— Минһеҙ ваҡытта үҙ ихтыярығыҙҙа, иптәштәр, әле кәрәкмәй, — тине лә, ҡапыл хисләнеп китеп, үҙенсәлекле тауыш менән Шайморатов «Урал»ды һуҙҙы:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге...

Яңы йыл хөрмәтенә арналған мәжлестә ҡатнашыусы башҡа офицерҙар ҙа үҙҙәре ятҡан йырҙарҙы йырланы, бер-береһен яңы, 1943 йылда иң изге теләктәрҙең береһе булған Еңеү яҡынлашыуы менән ҡотланы.

Генерал-майор Шайморатов, нисәмә айҙар буйы ялһыҙниһеҙ дошманға ҡаршы көрәшеп ныҡ йонсоған ярҙамсыларына күңел асырға ҡамасауламаҫ өсөн, юҡ һылтауҙы бар итеп, фатирына ҡайтып китте. Ләкин ул йоҡларға ҡабаланманы. Һуҡыр шәм менән яҡтыртыулы өҫтәл артына барып ултырғас, буйы-һыны, төҫө-ҡиәфәте, холҡо менән үҙенә оҡшаған берҙән-бер ҡыҙының [1] фотоһына һағышлы күҙҙәрен текләне.

«Нисек кенә йәшәйһең икән ҡыҙым, берҙән-бер ҡыуанысым минең! Хәҙер һиңә ун ете йәш! Ҡасан, ҡайһы арала үҫеп етеүеңде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Хәрби хеҙмәтемдән бушай алмай ғүмеремдең күпселек өлөшөн ситтә йөрөп уҙғарғанлыҡтан, танһығым ҡанғансы һинең менән һөйләшеп ултырырға, бергә ял итергә лә тура килмәне бит, исмаһам!» — тип аяныслы уйлаған Миңлеғәле Минһажетдинович ҡыҙы донъяға барлыҡҡа килгән көндәрҙе иҫенә төшөрҙө. Ул йылды Кремлде һаҡлаусы полк командиры ине... Һөйкөмһөҙ ҡыҫыҡ бүлмәһенә ҡатыны менән бәпесен бала тыуҙырыу йортонан алып ҡайтҡас, мәшәҡәт артты. Хәле һаман шәп булмаған ҡатыны ярҙамында бәләкәй генә тере йән эйәһен иҫке-моҫҡо күлдәге менән һалдат шиненелә төрөп һалғас, сабыйға яраҡлы исем эҙләп баш ҡатырҙылар. Оҙаҡ уйлана торғас, сабыйға Октябрина тип исем ҡушырға килештеләр. Бөйөк социалистик революцияға лайыҡ булырҙай исем ҡушылһа ла, Октябринаны тәрбиәләп үҫтереүе еңел булманы. Шулай ҙа ҡыҙы бирешмәне, һау-таҙа, бешек үҫте. Миңлеғәленең ҡатыны Ольга Павловна ла, барынса ҡәнәғәтләнеп, үҙен үтә бәхетле һананы, ауыр хәрби хеҙмәтенән бушамаған иренең барлыҡ ҡыуаныс-ҡайғыларын ҡап-уртаҡ бүлеште. Тормоштары яҡшырып, әҙәмсә йәшәй генә башлағайнылыр, киләсәккә ҡарата булған кинәндергес уй-хыялдарын селпәрәмә ҡыйратып, Бөйөк Ватан һуғышы башланды... Хәҙер ни хәлдә йәшәй икән ҡатыны менән ҡыҙы?..

---

[1] Октябрина Шайморатова хәҙерге көндә Рига ҡалаһында ғаиләһе менән йәшәй.

Уларҙы Яңы йыл менән ҡотларға, хәленән килгән тиклем йыуатырға, күңелдәрен табырға тырышып, Миңлеғәле хат яҙырға тотондо.

«Һаумыһығыҙ, минең һөйөклөләрем!

Октябрина һәм Оленькам!

Һеҙҙе Яңы йыл менән ихлас күңелемдән ҡайнар ҡотлайым!

Оля, ҡәҙерлем, минең өсөн, зинһар, борсолма. Үҙеңде Октябрина ҡыҙыбыҙ өсөн һаҡла. Ун ете йәше тулһа ла, һинән башҡа уға ҡыйын буласаҡ. Яҡты донъянан китергә һис йыйынмайым мин. Композитор Заһир Исмәғилевтең Башҡорт кавалерия дивизияһы егеттәренә арнап сығарған йырында: «Шайморатов яу ҡырында дошмандарҙы көл иткән; утта янмай, һыуҙа батмай, һай батыр ҙа ир икән», тигән куплет бар. Әлбиттә, композитор Заһир Исмәғилев менән шағир Ҡадир Даян мине артыҡ шаштырған! Ул йырҙы миңә хатта тыңлауы ла йәпһеҙ. Шулай булһа ла үлергә йыйналмайым. Фашистарҙы үҙ өңөндә дөмөктөрөп, һау-сәләмәт ҡайтасағыма ышаныс тотам. Тиҙҙән беҙ Бөйөк Еңеүҙе байрам итәсәкбеҙ һәм элеккесә тыныс, хәүефһеҙ, бер ниндәй ҡайғы-хәсрәтһеҙ, бәхетле йәшәйәсәкбеҙ. Ватаныбыҙ азат ителәсәк ҡыуанyслы көндө күрә алмай, ваҡытһыҙ һәләк булған яуҙаштарым ҡыҙғаныс! Минең күҙ алдымда улар күп, бик күп ҡырылды. Совет иленең азатлығы өсөн үлгәндәр һуғыштан аҙаҡҡы бәхетле тормошто, ата-әсәһен, бала-сағаларын, өҙөлөп һөйгән, яратҡан ҡатындарын, кәләштәрен бер ҡасан да күрә алмаясаҡ. Әммә Ватан-әсә, донъя азатлығы, һуғыштан һуң тыуасаҡ быуын кешеләре өсөн немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы алышта ҡаһармандарса һәләк булыусылар исеме мәңге, мәңгегә үлемһеҙ! Сирек, ярты быуат, йөҙ, биш йөҙ, мең йыл уҙғандан һуң да Бөйөк Ватан һуғышы батырҙары онотолмаясаҡ. Уларҙың исемдәре мәңге, мәңгегә данланасаҡ. Йәнә үтенеп һорайым: минең өсөн, зинһар, ҡайғырмағыҙ, Оленькам һәм һөйөклө ҡыҙыҡайым. Хәҙергә нығынығыҙ. Минең Еңеү менән ҡайтыуымды көтөгөҙ!

МИХАИЛ.

*1/I — 1943 йыл. Чернышки станцияһы».*

## XX

Яңы йылды күңелле ҡаршылауына һәм ғаиләһенә хат яҙыуына ҡәнәғәтләнгән Шайморатов, нервыһы ҡапыл бу-

шанып ҡалыуын тойоп, беренсе тапҡыр йоҡоһон ҡандырғансы ял итергә ниәтләнде. Ләкин ике сәғәт ярымдан артыҡ йоҡларға тура килмәне, уны адъютанты уятты.

— Иптәш генерал, комкор Борисов шылтыратты. Йоҡлағанығыҙҙы белгәс, иртәнге һигеҙ тулыуға һеҙгә корпус штабына килергә ҡушты.

— Коновод ҡара-ерән ҡашҡаны эйәрләһен! — тине Шайморатов.

— Атығыҙ әҙер, иптәш генерал!

Корпус штабына киткән Шайморатов оҙаҡ йөрөмәне. Үҙ дивизияһына ҡайтҡас, полковник Голенев менән ҡайһы бер мәсьәләләрҙе асыҡланы ла полк командирҙарын кәңәшмәгә йыйҙы.

— Иптәштәр, беҙҙең һыбайлылар Обливская — Чернышки станцияһын һуғышып алғандан һуң, Сталинградтағы Паулюс ғәскәре аҙыҡ-түлекте һауа арҡылы ала. Хәҙерге ваҡытта Сталинградтағы Паулюс ғәскәрен тулыһынса ҡыйратыу өсөн көслө алыш бара, — тине лә корпус командиры тарафынан ҡуйылған яңы хәрби бурысты аңлатты: — 8-се корпус сафындағы беҙҙең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Ворошиловград йүнәлешендәге Морозовск ҡалаһына һөжүм итергә тейеш. Дүрт меңгә яҡын дошман ғәскәре тупланған ҡаланы азат итеүе еңел булмаясаҡ. Разведка мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Морозовск ҡалаһы тирәһендәге аэродромдарҙа торған ике йөҙ самаһы дошман самолеты Сталинград ҡамауындағы гитлерсыларға аҙыҡ-түлек, ҡорал ташый. Морозовск ҡалаһы ситенең буйынан-буйына траншеялар, окоптар ҡаҙылыуы, иҫәбе-һаны булмаған дзоттар, доттар ҡуйылыуы ла билдәле, — тип дивизия командиры гитлерсыларҙың ут нөктәләрен, ҡайҙа ниндәй нығытмалар барлығын картанан күрһәтеп, һәр полктың һөжүм ваҡытындағы бурысын аңлатты.

Кәңәшмә тамамланғас, дивизия командиры приказына ярашлы рәүештә, полковник Голенев етәкселегендәге штаб мөһим документтарҙы әҙерләне, ә подразделение командирҙары һәр ҡайһыныһы үҙ сиратында дивизия командиры ҡул ҡуйған приказды тормошҡа ашырыу буйынса айырым план төҙөнө.

Икенсе ғинуарҙың таңында фронт аша осҡан беҙҙең самолеттар Морозовск тирәһендәге дошман аэродромдарын һәм позицияһын бомбаға тота башланы. Улар үҙ аэродромдарына кире әйләнеүгә, беҙҙең орудиелар көслө ут асты. Сәғәт ярымға һуҙылған ҡыйратҡыс артналеттан һуң, уҡсы полктар менән берлектә, 112-се Башҡорт кава-

лерия дивизияһы яугирҙары Морозовск ҡалаһына табан ябырылды.

Ҡар туҙандарын урғылдырып алыҫлашҡандан-алыҫлаша барыусы һыбайлылар дала киңлегендәге бушлыҡҡа сумғас та, фашистар оборонаһы тәңгәлендәге һуғыш барышын белергә тырышҡан Шайморатов борсола башланы.

— Полк командирҙарынан ниңә хәбәр юҡ? Связь боҙоҡмо әллә?

— Связь төҙөк, иптәш генерал!..

— Рация төҙөк булһа, дүрт полктың һис юғында береһе яуап бирергә тейеш ине бит!

Элемтәсе, рацияһының төҙөклөгөнә ышанмай, ялан телефоны тотҡаһын түҙемһеҙләнеп өйрөлтә-өйрөлтә, бер үк һүҙҙе ҡабатлай: «Ағиҙел!.. Ағиҙел!.. Яуап ҡайтар!..»

Түҙемһеҙлегенең сигенә еткән Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаһына атланып көслө һуғыш барған ергә сапмаҡсы ине лә, үҙен тыйҙы. Ярамай! Иң алдан елдерергә граждандар һуғышы заманы түгел...

— Иптәш генерал, связь бар, — тип ҡысҡырҙы элемтәсе.

Шайморатов телефон трубкаһын алды.

— Тыңлайым!..

Майор Байғужа Сәйетғәлиндең һәләк булыуын, күп командирҙарҙың сафтан сығыуын, һыбайлылар һөжүменең кире ҡағылыуын, майор Ғафаров полкы батальондарының ғына дошман оборонаһын йырып инеүе һәм ҡаланан ете-һигеҙ километр алыҫлыҡтағы гитлерсыларҙың беренсе һыҙығындағы нығытмаларын һуғышып алыуын белгәс, генерал Шайморатов рация аша бойорҙо:

— Ғафаров, һуғышып алған позицияңды нығытырға һәм фашистарҙың иғтибарын үҙеңә йәлеп итергә! Ҡавалерия полктарына, танкылар менән берлектә, дошман тылына урап уҙырға!

Полк командирҙарынан яңынан-яңы хәбәрҙәр алынды:

— Дошмандың беренсе һыҙығындағы уҡсы полк үҙ позицияһында ныҡ тора. Фашистарҙың контратакаһы ике тапҡыр кире ҡағылды!

— Танкылар артынан елдереп барыусы 275-се кавполк һыбайлылары ҡалаға көньяҡтан урап уҙҙы. Уларға бүтән полктарҙың һыбайлылары ла ҡушылғас, ҡала урамдарында алыш көсәйҙе!

— Уҡсылар полкында паника тыуҙы. Гитлерсылар ҡыҫымына сыҙай алмайынса, икенсе уҡсы батальон нығынған позицияларын ҡалдырып ҡаса башланы! Ҡалған уҡсы батальондарҙа ла сыуалыш көсәйә!..

Артдивизион командирына кәрәк ваҡытта ут асырға ҡушып, бер төркөм офицерҙар менән полковник Голеневты эйәрткән Шайморатов сигенеүсе уҡсы батальондарға ҡаршы һыбай елдерҙе.

Дәһшәтле һуғыш күренештәренә күнеккән ҡара-ерән ҡашҡа үҙенән нимә талап ителеүен хужаһының тын алышынан һиҙҙе. Бына әле лә, Шайморатов йүгән теҙгенен ҡыймылдатыуы булды, ҡасып барыусы йәйәүлеләрҙең эргәһенә йәһәтерәк барып етергә тырышып, соҡор-саҡырлы урындарҙан туп-тура сапты.

Пистолеты менән һелтәнеп ҡысҡыра-ҡысҡыра фронт буйлап елдергән дивизия командиры үҙҙәре менән бергә икәнлеген күреп сигенеүҙән туҡталған йәйәүле һалдаттар әҙәрләп килеүсе дошман һалдаттарына ҡаршы ҡабаттан ташланды.

— Олатай беҙҙең менән!

— Алға!

— Даешь Морозовск ҡалаһын! — тип бер-береһен сәмләндереп ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, йәйәүлеләр дошман һалдаттары менән батырҙарса алышты...

Өс сәғәт самаһы ваҡыт уҙыуға, уҡсы батальондар гитлерсыларҙың беренсе һыҙығындағы нығытмаларға ҡабат яҡынайҙы һәм тәрән траншеяларҙағы дошман һалдаттарын ҡыҫырыҡлап сығара башланы.

Яңы урынға күсерелгән команда пунктына барып етерҙән алда, Шайморатовтың тирә-яғында кемдәрҙеңдер ҡысҡырышыуы ишетелде:

— Фрицтар беҙҙең тылға үтеп ингән!

— Алышҡа әҙерләнергә!

— Әй, пулеметсылар, ут асырға!..

Көслө һуғыш барған алғы һыҙыҡта ғына түгел, дивизияның тылында һәм Шайморатов эргәһендәге урындарҙа ла барыһы хәрәкәткә килде. Гранаталар шартлаған, карабин-мылтыҡтарҙан, пулеметтарҙан, автоматтарҙан атҡан, һөрән һалып туҡталмай ҡысҡырышҡан тауыштар бергә буталды...

Бер расчеттың тулыһынса сафтан сығарылыуын күргәс, Шайморатов үҙе пулемет артына барып ятты һәм гитлерсыларҙы ҡурғашлы ямғыр менән ҡойондорорға кереште. Ләкин патрондары бөткән пулемет ҡапыл тынып ҡалды. Шунда ғына адъютанты менән коноводы ҡаты яраланыуын, бүтән ярҙамсыларының һәләк булыуын күреп, Миңлеғәленең ҡото алынды. Бында япа-яңғыҙы ла баһа! Голенев менән ҡалған офицерҙар ниңә һаман юҡ? Хәҙер ни эшләргә? Икенең береһе ҡала: йә үлем, йә дошман ҡамауын нисек тә булһа йырып сығыу!..

— Бөтә ышанысым һиндә, дуҫҡай, — тип Шайморатов ышыҡ урында торған атына атланды. Ҡара-ерән ҡашҡа, хужаһына бәлә яҡынлашыуын һиҙгәндәй, хәүефһеҙ яҡҡа ташланды. Үҙебеҙҙекеләр яғына сыҡҡас ҡына, ҡурҡыныс артта ҡалыуын аңлап, бер аҙ тынысланды һәм юртыуға күсте.

Дошман һалдаттары ҡамауынан имен-аман ҡотолоуына ҡыуанырға, ҡара-ерән ҡашҡаһының сослоғона, йылдамлығына, һиҙгерлегенә, ҡыйыулығына, һәр саҡтағыса ышанысын аҡлауына һоҡланырға ла ваҡыт тапманы Шайморатов. Дивизия штабы урынлашҡан яртылаш емерек землянкаға барып ингәс тә, Морозовск ҡалаһының урамдарында һуғышыусы подразделениеларҙы ҡабаландырып, полк командирҙарының әле береһенә, әле икенсеһенә яңынан-яңы бойороҡтар тапшырҙы.

Бишенсе ғинуарҙың төнөндә генә был тирәләге һуғыш башҡорттарҙың тулы еңеүе менән тамамланды.

Морозовск ҡалаһы гитлерсыларҙан таҙартылып, тимер юл станцияһындағы дошмандың ун бер төҙөк паровозы, бер состав аҙыҡ-түлек, ике вагон дарыу, бензин һәм төрлө һуғыш ҡорамалдары һаҡланған складтары дивизия ҡарамағында икәнлеген белгәс, Шайморатов корпус штабына барыһын хәбәр итергә ҡушты.

Ҡис, тауыш-тын баҫылғас, Шайморатовҡа яңы ғына баҫылып сыҡҡан «Ҡыҙыл атлылар» газетаһын килтереп бирҙеләр.

Морозовск ҡалаһын алған ваҡытта батырлыҡтар күрһәткән ир-егеттәр хаҡындағы мәҡәләләрҙән аҫтараҡ шағир Ҡадир Даяндың[1] шиғырына иғтибар итте Шайморатов. Ул шиғыр аҙаҡҡы һуғышта батырҙарса һәләк булған 313-сө кавалерия полкы командирының политик эш буйынса урынбаҫарына арналыуын күргәс, ҡыҙыҡһынып уҡырға тотондо:

Ятып ҡалды батыр яу ҡырында —
Дон буйында — алыҫ ерҙәрҙә,
Үҙе ҡалды егет, даны ҡайтыр
Үлем юҡ ул батыр ирҙәргә.

Ҡолой ҡырҙарынан Миәс үтә,
Күкһелләнеп ята Арғужа.
Шул ерҙәрҙә үҫте ир намыҫлы
Батыр егет майор Байғужа.

---

[1] Шағир Ҡадир Даяндың «Байғужа» исемле ошо шиғырын файҙаланып, композитор Заһир Исмәғилев аҙаҡтан йыр яҙҙы.

Арғужаҡай, һинең тулҡындарың
Күк таштарға килеп ҡағыла.
Батыр булып үҫһен буйҙарында
Байғужалай ирҙәр тағы ла.

— Морозовск ҡалаһын алыуға бағышланған газетаны уҡыйһығыҙмы? — тип һораны полковник Голенев.

— Эйе, — Шайморатов, ризалашып, баш ҡаҡты. — Редакция работниктарының оперативлығы, фәһемле, мауығып уҡырҙай мәҡәләләрҙе тиҙ ойоштороуҙары һәм уларҙы баҫып сығарырға өлгөрөүҙәре маҡтауға лайыҡ!

— Редакциялағы барлыҡ яҡшылыҡ редактор, яҙыусы Али Карнайҙың егәрлегенә, ныҡышмалығына, үҙен аямауына һәм уның юғары культура кимәленә бәйләнгән, тиҙәр.

— Редакция работниктарының үҙ-ара мөнәсәбәте һаман яйланмауы эсте бошора. Әһел Истамғәлин Али Карнай менән уртаҡ тел таба алмауына, барлыҡ эште яңғыҙы башҡарыуына зарлана, ти.

— Буш хәбәр, — тип политбүлек начальнигы урынбаҫары майор Ҡадиров та һүҙгә ҡушылды. — Истамғәлин намыҫлы кешегә яла яғырға оҫта!

— Нисек кенә булмаһын, уларҙың бындай ҡыланышы яҡшы тамамланмаясаҡ, Сабир Рәхимович! Был хаҡта иң әүәл һеҙ, политработниктар, тейешле сараһын күрергә тейеш инегеҙ, — тине Шайморатов.

— Политбүлек начальнигы Абдуллин ауырып Башҡортостанға ҡайтып киткәне бирле, һис бушап булмай, Миңлеғәле Минһажетдинович, — тип аҡланды Ҡадиров.

— Бушайһығыҙмы-юҡмы, редакция эшенә һеҙ яуаплы! Немедленно разберитесь и доложите мне!

— Тыңлайым, иптәш генерал!..

Полковник Голенев, һүҙ йүнәлешен үҙгәртеп, һораны:

— Иптәш генерал, ныҡ һирәгәйгән кавполктарҙы бергә ҡушмайыҡмы?

Шайморатов, өндәшмәй, байтаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң ғына теләр-теләмәҫ ризалашты:

— Нәзиров Башҡортостандан өҫтәлмә көс алып килгәнгә саҡлы, һыбайлы полктарҙы ваҡытлыса берләштереүҙән башҡа сара юҡ, Иван Иванович!

— Берләштереләсәк отрядҡа командир итеп кемде тәғәйенләргә?

— Подполковник Фондеранцевты, — тине лә, штаб начальнигы өндәшмәгәс, уның ризаһыҙлыҡ белдереүен аңлап, Шайморатов мәсьәләне асыҡланы: — Герасим Ефимович Фондеранцевты мин граждандар һуғышы йылдарынан

уҡ яҡшы беләм. Шикләнмәгеҙ. Ул Ҡыҙыл Армияның кадровый офицеры. Һуғыштың иң ауыр, ҡатмарлы минуттарында, 294-се кавполк командиры булараҡ, бөтә нәмәне аныҡ һәм дөрөҫ хәл ҡылыуы һеҙгә лә билдәле бит, Иван Иванович!

— Мине икенсе мәсьәлә борсой, иптәш генерал!

— Әйтегеҙ!

— Полктар бергә ҡушылғандан һуң бушаясаҡ әлеге полк командирҙарын ҡайҙа ҡуйырға бойораһығыҙ?

— 313-сө кавполк командиры подполковник Макаевты ваҡытлыса дивизия штабына күсерергә, ә 275-се кавалерия полкы командиры Иҙрисовты, Башҡортостандан кешеләр килеп еткәнгә тиклем, ҡала гарнизоны начальнигы, уның политик эш буйынса урынбаҫары итеп майор Әлибаевты ҡуйырға! Дивизия штабы менән Фондеранцев отрядын һәм махсус хәрби частарҙы алдағы Вальково станцияһына күсереү хаҡында ла приказ яҙырға!

— Есть!..

Башҡорттарҙың яңы һөжүме Сталинград ҡамауындағы фон Паулюстың үҙ ирке менән баш һалырға теләмәгән өс йөҙ меңдән ашыу ғәскәре ҡыйратыласаҡ операцияға тура килде.

Меңәрләгән орудиеларҙан атыуҙан, бер-бер артлы тулҡын-тулҡын булып осҡан ҡыҙыл йондоҙло бомбардировщиктарҙың Сталинградтағы гитлерсыларҙы бомбаға тотоуынан шул тирәлә тупланған барлыҡ совет ғәскәрҙәренең көслө ҡыҫымы башланды...

Бындай оло тарихи ваҡиғаны ишетеп ҡыуанған Сәғит Әлибаев үҙенең уй-тойғоларын көндәлегенә яҙҙы:

«10 ғинуар. Башланды! Әгәр ҙә «мәхшәр көнө» йәки «тамуҡ уты» тигән нәмәләр булһа, тап ошолай булыр ине улар. Бер юлы меңәрләгән туптарҙан атыуҙан тыуған геүелдәү ерҙе лә, күкте лә тетрәтә; аллы-артлы, эскадрилья-эскадрилья булып беҙҙең бомбардировщиктар, истребителдәр алғы һыҙыҡҡа — Сталинградҡа табан гөрөлдәп осалар. Танкылар, танкылар... Самоходкалар... Бөтәһе лә алға ынтыла, елә, оса, ағыла!..

Тарихта тиңе булмаған был грандиоз алышта беҙ ҙә, шайморатовсылар ҙа, ҡатнашабыҙ. Үҙе бер оло дан бит был!

Иртәнге сәғәт 7-лә Башҡорт кавалерия дивизияһының барлыҡ частары, шул иҫәптән беҙҙең полк та, алға ынтылды.

Алда беҙҙе данлы эштәр, бөйөк еңеү көтә...»

Һигеҙенсе кавалерия корпусының башҡа дивизиялары менән берлектә Таловский ауылын һәм Тацинский тимер

юл станцияһын азат иткәс, башҡорттар Төньяҡ Донецтың көнсығыш яры буйындағы Усть-Белокалитвенский станцияһына бәреп инделәр, һәм ундағы һәр йорт өсөн үлемесле һуғыш башланды.

Көсөргәнешле ҡыҫымға сыҙай алмаған гитлерсыларҙың станциянан сигенеүе хаҡында белгәс, генерал-майор Шайморатов йылғаның уң яҡ ярына йәһәтерәк сығырға һәм Донбасс ерендәге һигеҙенсе һанлы шахта йүнәлешендә һөжүмде көсәйтергә ҡушты. Ләкин, ҡаршылағы ҡалҡыулыҡта нығынған гитлерсылар көслө ут асҡанлыҡтан, подполковник Фондеранцевтың берләштерелгән һыбайлы отрядына юл быуылды.

Уңышлы барған һөжүмдең туҡталыуына эсе бошҡан генерал Шайморатов алдындағы картаға текләгән көйө уйланып ултырҙы-ултырҙы ла ҡаршыһындағы Голеневҡа ҡараны.

— Иван Иванович, ҡалҡыулыҡтағы гитлерсыларҙы нисек юҡ итәбеҙ?

— Орудиелар ярҙамында нығытмаларын тулыһынса ҡыйратҡас ҡына дошман һалдаттары тотҡан ҡалҡыулыҡты һуғышып алырға һәм беҙгә артабан һөжүмде дауам итергә мөмкин буласаҡ.

— Минеңсә, орудиеларҙы файҙаланғанда ла ҡалҡыулыҡтағы гитлерсыларҙы туранан-тура атакалау мөмкин түгел!

— Бүтән сараны күрмәйем, Миңлеғәле Минһажетдинович, — тине полковник Голенев.

— Үҙебеҙҙең төп көстө әлегә ҡуҙғалтмайынса, бер взвод ярҙамында ҡыйратып булмаҫмы ҡалҡыулыҡты?

— Взвод түгел, батальон, хатта ике батальон да ала алмаясаҡ ул ҡалҡыулыҡты. Һуғышып алған хәлдә лә беҙҙең төп көс барып еткәнсе уны тотоп булмаясаҡ.

— Ауыр, бик ауыр хәл килеп тыуҙы, — тине Шайморатов, штаб начальнигы әйткәндәр менән ризалашып. — Әммә тәүәккәлләп ҡарарға кәрәк! Был бурысты үтәүҙе уҡсы взвод командиры лейтенант Атаевҡа йөкмәтергә!

— Аннаклыч Атаев ышаныслы командир, тип дөрөҫләне Голенев.

— Улай булғас, лейтенант Атаевты саҡыртығыҙ! Уның менән үҙем һөйләшергә теләйем!

Генерал-майор Шайморатовтан хәрби задание алыу менән, Аннаклыч Атаев Төньяҡ Донецтың уң яғындағы 79,9 ҡалҡыулығын нисек итеп алыу хаҡында план ҡорҙо, унын тирә-яғындағы һәр ерҙе, взводы өсөн уңайлы урындарҙы яҡшы белеүсе кешеләрҙән төпсөп һорашты.

Бөтә нәмәне ныҡлап асыҡлағас, ул уҡсылар взводында ҡалған егерме һигеҙ кеше менән ҡалҡыулыҡҡа тиң булырҙай урында көсөргәнешле күнегеүҙәр уҙғарҙы. Шунан һуң ғына взводҡа ниндәй яуаплы хәрби бурыс йөкмәтелеүен әйтте:

— Иптәштәр, бөгөн төндә һеҙгә йоҡларға тура килмәйәсәк. Шуға күрә хәҙер ял итегеҙ, ҡоралдарығыҙҙы тикшерегеҙ, өҫ-баштарығыҙҙы ҡараштырығыҙ...

Ҡалҡыулыҡты штурмлаясаҡ яугирҙар урындарына таралышҡас, лейтенант Атаев үҙе лә бер аҙ серем итеп алырға булды. Ләкин уны йоҡо алманы. Борсоулы уйҙарына күмелеп ятты-ятты ла, землянка уртаһындағы «буржуйка» яҡтыһында ултырып ҡатыны менән әсәһенә хат яҙған Байдәүләтов эргәһенә яҡынлашты.

— Ниңә хәл йыймайһың?

— Теләк юҡ, иптәш лейтенант!

— Теләгең булмаһа ла, бар, әҙерәк ятып хәл йый!

Зәки землянка мөйөшөндәге Мөхәммәтҡазы дуҫының янына һырығып ятҡас, Аннаклыч Атаев кеҫәһенән сығарған карта менән «буржуйка» ҡаршыһындағы яҡтыға сүкәйҙе. Ул барлыҡ уй-тойғолары менән 79,9 ҡалҡыулығы өсөн буласаҡ алыш барышын күҙ алдына килтерергә тырышты.

Егерме икенсе ғинуарҙың төн уртаһы еткәс, лейтенант Атаев үҙ яугирҙары менән гитлерсылар ҡулындағы ҡалҡыулыҡты штурмалай башланы.

Был ҡышҡы төн үтә һалҡын һәм ҡараңғы ине.

Тирә-яҡ тып-тыныс.

Бер-бер артлы барған яугирҙарҙың аяғы аҫтында ҡар ишетелер-ишетелмәҫ шығырлай.

Төньяҡ Донецтың йоҡа боҙо өҫтөнән һаҡлыҡ менән генә икенсе ярға сыҡҡас, Атаев иҫкәртте:

— Украина еренә аяҡ баҫыусыбыҙҙы белегеҙ, иптәштәр! Үтә һаҡ булығыҙ. Минерҙар билдәләгән юлдан ғына барығыҙ!

Яугирҙар, тәрән көрт баҫҡан һуҡмаҡтан бата-сума, текә ярҙың һөҙәк урынынан юғарыға табан ыңғайланы.

Өс-дүрт километр самаһы араны уҙып, ҡалҡыулыҡ түбәһендәге дошмандың ут нөктәләренә яҡынлаша башлағас, лейтенант Атаев ерҙән шыуып барырға ҡушты.

Взвод командирынан ҡалмаҫҡа, нисек тә булһа уға яҡынығаҡ барырға тырышып, Байдәүләтов Зәки тәгәрмәстәре ҡыҫҡа буйлы саңғыға беркетелгән станоклы пулеметты ҡар өҫтөнән һөйрәтеп килтергән Мөхәммәтҡазы дуҫына ярҙамлашты.

Ҡуйы ҡараңғылыҡҡа сорналған 79,9 ҡалҡыулығында һаман тыныс. Дошман ракеталары һауаға күтәрелгән ваҡытта дзоттарындағы пулеметтары ут бөркөп татылдай-татылдай ҙа йәнә тынысләна.

Яугирҙар өс ҡатлы сәнскеле тимерсыбыҡты киҫеп артабан шыуған саҡта, дошман дзотына яҡынлашыусы гитлерсыларҙың шәүләһе төҫиөрләнде.

Унда смена алмашынырға тейешлеген аңлаған взвод командиры Атаев, яугирҙарын эйәртеп, алға имгәкләүен белде. Ике дзотта урынлашҡан гитлерсыларҙы хәнйәрҙәре менән сәнсеп үлтергәс, егеттәрҙең бер төркөмө траншеяларҙа бер-береһенә һыйынышып йоҡлаған дошман пулеметсыларын, ҡалғандары блиндаждарҙа һәм землянкаларҙа ял итеүсе гитлерсыларҙы аңғармаҫтан ҡыйратырға тотондо.

Блиндаждың береһендә йыйналған немец офицерҙары терелэй бирелергә теләмәгәс, лейтенант Атаев бойорҙо:

— Гранаталар — яуға!

Өҙлөкһөҙ күнегеүҙәр уҙғарылыуы арҡаһында яҡшы әҙерләнгән яугирҙар ике сәғәткә һуҙылған аяуһыҙ ҡул һуғышынан һуң ҡалҡыулыҡҡа хужа булды.

— Дуҫтарым, ҡалҡыулыҡ хәҙер беҙҙең ҡулда, — тине лейтенант Атаев. — Уны тотоуы ҡыйын буласаҡ. Ҡалҡыулыҡты ҡабаттан һуғышып алыу өсөн фашистар барлыҡ көсөн һаласаҡ. Әммә беҙҙең урын ошонда! Төп көсөбөҙ килеп еткәнсе ошо урындан бер генә аҙым да сигенергә хаҡыбыҙ юҡ!

Яугирҙар, саҡ ҡына ла ял итмәйенсә, дошмандың ҡыйратылған нығытмаларын түңәрәк оборона өсөн әҙерләргә тотондо.

Таң беленгәндә, ҡапыл көслө күк күкрәгәндәй булды. Шул уҡ минутта ҡалҡыулыҡ өҫтөндә бер-бер артлы снарядтар, миналар төшөп ярыла башланы. Тирә-яҡ ҡалтыранды, геүләне.

Тупҡа тотоу туҡталыу менән, Байдәүләтов Зәки йәшеренгән урынынан сыҡты.

— Әҙерләнергә!

Атаевтың командаһынан һуң күп тә уҙманы, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеүсе ике рота самаһы дошман һалдаты күренде. Улар автоматтан ата-ата өҫкә үрмәләй башланы.

Ҡул гранаталары ташларлыҡ яҡынлыҡҡа ебәрмәҫкә тырышып, Байдәүләтов уларҙы пулеметы уты менән ҡойондорҙо. Уға ҡушылып, бүтән яуҙаштарының да ҡоралдары ут бөркөнө.

Яҡындағы дошман һалдаттары ҡырыла торҙо, уларҙы арттағылары алмаштырҙы.

Бер-берећен ҡабаландырып, ҡысҡырыша-аҡырыша килеүсе немецтарға егерме-егерме биш аҙым самаћы ҡалғас, гранаталар гөрћөлдәп ярылыуы йышайҙы.

Араларында үлеләр күбәйгән һайын, гитлерсылар ныға ырак ҡоторондо. Улар һаман үрмәләнеләр һәм һәр метр ер өсөн өйөрө-өйөрө менән ҡырылдылар.

Траншеяларға немецтар үтеп ингән айырым урындарҙа эш ҡул һуғышына саҡлы барып етте. Ана, Байдәүләтов Зәкиҙең һул яғында, отделение командиры сержант Зыя Әминев өс фрицты дөмөктөрҙө лә, ҡоралын ҡабаттан яһарға өлгөрмәгән дошман офицерына ташланды. Офицер, ҡапыл янтайып, Әминевтең бүрекһеҙ башына парабеллумы менән тондорҙо. Маңлайы буйлап ҡып-ҡыҙыл ҡан һарҡыуына иғтибар итмәгән сержант ажарланып фашист офицерының яғаһына йәбеште. Улар, көрмәкләшә торғас, ергә йығылдылар. Әле береће, әле икенсеће өҫкә ҡалҡырға маташып, оҙаҡ алыштылар. Байдәүләтов, ҡаршыһындағы немецтарҙы яҡын ебәрмәй, өҙләкһеҙ гранаталар бырағытты. Бүтәндәр ҙә үҙ тәңгәлендәге гитлерсыларға ҡаршы аяуһыҙ алышыу менән мәшғүл ине...

Дошман һалдаттарының ҡыҫымы бер аҙ кәмегәс тә, Байдәүләтов отделение командиры Әминевкә ярҙамға ташланды. Ләкин өлгөрмәне. Дошман офицерының боғаҙына сәнсергә хәле еткән отделение командиры, ҡан һауған асыулы күҙҙәрен аҡайтып, Зәкигә ҡараны.

— Тотҡан позицияңды ҡалдырып китергә ни хаҡың бар?! — тип ҡысҡырҙа ла иҫерек кешеләй айҡала-сайҡала яҡындағы окопҡа табан ыңғайланы. Ул взвод командиры Атаевҡа һөжүм итеүсе гитлерсыларға автоматынан ут яуҙырған ваҡытта дошман пуляһы тейеүҙән һәләк булды...

Дәһшәтле алыш бер генә минутҡа ла баҫылманы. Взводтағы кешеләр кәмегәндән-кәмей барҙы. Коммунист Михаил Олейник яңғыҙы ун ике гитлерсының башына етте, ун өсөнсөһө менән бергә үҙе лә ҡоланы. Улар артынса Әмир Баджанов, Исмаил Азаматов, Фуат Башаров, Мәхмүт Кәримов, Рәхмәт Әзимов, Малик Атаханов, Сафар Зияев, Дәүләт Талаганов, Алексей Молчанов, Юлай Ситдиҡов һәләк булды. Ләкин алыш туҡталманы. Тере ҡалған яугирҙар тағы ла аяуыһыҙыраҡ була барҙылар.

Ике сәғәткә һуҙылған алышта гитлерсылар, лейтенант Атаев взводы тотҡан рубежды һуғышып ала алмайынса, кире сигенде.

Яңыраҡ ҡына утлы өйөрмә ҡайнаған ҡалҡыулыҡта тирә-яҡ тып-тын булып ҡалды.

Тере ҡалыусы яугирҙар, тауыш-тын сығармайынса, тәрән траншея төбөндә ултырып тәмәке тартты.

Бер кем дә һөйләшергә теләмәне.

Отделение командиры Әминев менән яуҙаштарының һәләк булыуын ауыр кисергән Байдәүләтов Зәки, амбразура эргәһенән һаҡлыҡ менән һонолоп, ҡалҡыулыҡ итәге шығырым тулы немецтарҙың мәйетен ҡараны.

— Ҡайһылай күп ҡырылғандар!

— Бынан аҙаҡ бүтән тығылмаҫтар инде, — тине Мөхәммәтҡазы.

Арыуҙың сигенә еткән яугирҙар тамаҡ ялғарға ғына ултырғайны, дошман самолеты күренде һәм ҡалҡыулыҡта бомбалар төшөп ярыла башланы. Бомбаның ярсығы тейеп, лейтенант Атаев яраланды.

— Зарарлы түгел, — тип ул яраһын бәйләтте лә, бер ни булмағандай, тыныс ҡына бойорҙо: — Дошман контратакаһын кире ҡағырға әҙерләнергә!

Дүрт танкыға ышыҡланып килеүсе дошман һалдаттарын күргәс, Аннаклыч Атаев етдиләнде.

— Сержант Астафьев, сержант Барсуков, сержант Глухомань, старшина Юлдашев, һеҙгә дошман танкыларын ҡыйратырға! Байдәүләтовтың пулемет расчетына — гитлерсыларҙы танкыларынан көслө ут менән айырырға! Ҡалғандарығыҙ барығыҙ ҙа минең арттан траншеяға!

«Максим» пулеметы артындағы Байдәүләтов эргәһендә урынлашҡан Мөхәммәтҡазы ишетелер-ишетелмәҫ шыбырланы:

— Фрицтар бигерәк һөмһөҙләнеп килә!

— Килһендәр! Үлемдәренә ашығалар!.. — тип Байдәүләтов, пулеметының прицелы өҫтөнән ҡарап, танкылары артынан ашыға-ҡабалана килгән немецтарҙы күҙәтте.

— Йә, ат, — тип бышылданы Мөхәммәтҡазы, сабырһыҙланып.

— Ҡабаланма, тағы ла яҡыныраҡ килһендәр! — Ныҡ тулҡынланыуынан Бәйдәүләтовтың да тауышы еңелсә ҡалтыранып сыҡты.

Аннаклыч Атаев менән бергә уң флангылағы яугирҙар автоматтарҙан ут асты. Улар артынса танкыларға ҡаршы һуғышыусыларҙың гранаталары бер-бер артлы ярыла башлағас ҡына Байдәүләтов пулемет гашеткаһына баҫты. «Максим» ҡойондорған ҡурғаш ямғырына эләгеүсе дошман автоматсылары артта бүленеп ҡалғас, гитлерсыларҙың танкылары ла тиҙлеген яйлатты. Уларҙың урталағыһы, сылбыры өҙөлөп, бер урында зыр әйләнде, икенсеһен ут солғаны, ҡалған икеһе кирегә боролдо. Шул саҡ танкыларға ҡаршы һуғышыусыларҙан старшина Юлда-

шевтың, сержанттар Глухомань менән Астафьевтың һәләк булыуы асыҡланды.

Сержант Барсуков командалығындағы һуғышсылар, үлгән иптәштәренең гранаталарын йыйып алғас, ҡалҡыулыҡҡа һөжүмгә киләсәк дошман танкыларына ҡаршы һуғышырға әҙерләнде.

Гитлерсыларҙы оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Ҡалҡыулыҡҡа үрмәләүсе уҡсылар батальоны күренде.

Зәки менән Мөхәммәтҡазы «Максим» пулеметын дотта урынлаштырҙы.

— Беҙҙең патрондар күпме әле?

— Күп түгел. Патрондар бөтһә, шыйыҡса тултырылған шешәләр, гранаталар бар!

Мөхәммәтҡазы Зәкигә:

— Бер фриц күрше дзотҡа шыуышып бара! Ана, ана, йәһәтерәк ат! — тип ҡысҡырҙы.

Байдәүләтов атырға өлгөрмәне, бүтән яугир атҡан тауыш ишетелде. Һул флангылағы дзотҡа граната бырағытҡан немец тәкмәскән ыңғайҙа көслө гөрһөлдәү яңғыраны.

Пулемет утына эләккән дошман һалдаттары сабылған үлән шикелле ҡырылды. Ябырылып килгән икенсе рәттәгеләр, ергә боҫоп, автоматтарҙан атырға кереште. Уларҙың пулялары Зәки менән Мөхәммәтҡазы урынлашҡан дот ҡалпағына тейеп өҙлөкһөҙ шаҡылданы, ҡаҡлыҡты.

Бүтән доттар менән дзоттар ҡаршыһындағы гитлерсылар ҙа, көслө ут ағымына ҡаршы килә алмайынса, соҡорсаҡырлы урындарҙа йәшеренергә мәжбүр булды. Әлегәсә дошман һалдаттарын күпләп ҡырған һул флангылағы яугирҙарҙың пулеметы ниңәлер ҡапыл атыуҙан туҡтаны. Ни сәбәп менән уларҙың тауыш-тыны сыҡмай? Гитлерсылар ташлаған оҙон һаплы гранаталар ярылғанда ҡыйратылдымы икән әллә улар урынлашҡан дзот? Әгәр ҙә ҡыйратылһа, шул тәңгәлдә һөжүм иткән дошман һалдаттары тылға үтеп инәсәген аңлаған Байдәүләтов, пулеметтан атыуҙан туҡталмайынса, Мөхәммәтҡазыға ҡысҡырҙы:

— Бар, һул флангылағы дзот пулеметы ниңә тынғанын барып бел!

Мөхәммәтҡазы шул яҡҡа ташланды. Ул оҙаҡ йөрөмәне.

— Ундағы дзот тулыһынса ҡыйратылған! Пулеметтары юҡ ителгән... Гавриил Персиянов менән Яшка Титов һәләк булған. Бына былары уларҙан ҡалған, — тине Мөхәммәтҡазы һәм үҙе менән алып килгән патрондарҙы пулемет эргәһенә һалды.

— Был хаҡта лейтенант Атаевҡа хәбәр итергә!

— Лейтенант белә!

Гитлерсылар ҡыйратҡан һул флангылағы дзот яғынан беҙҙекеләрҙең атыуы көсәйҙе һәм шул тәңгәлдән ябырылып килгән гитлерсылар теҙеме йәнә тарҡалды.

Нисәмә тапҡыр контратакалаһалар ҙа, немецтар лейтенант Атаевтың взводынан ҡалған бәләкәй генә төркөм тотҡан рубеждан уҙа алманы.

Ҡараңғы төшә башлағас, гитлерсылар атаканы кисектерергә мәжбүр булды.

Егерме дүртенсе ғинуарҙың таңында, 79,9 ҡалҡыулығын алырға өмөтләнеп, гитлерсылар дүртенсе мәртәбә һөжүм башланы. Ул атакалары ла кире ҡағылғас, дошман артиллеристары көслө ут асты. Туптар төшөп ярылған ваҡытта ҡалҡыулыҡтағы дзоттар ҡыйратылды, комсомолец Дәүләт Әлибаев менән Әкрәм Абдрахманов һәм сержант Александр Барсуков һәләк булды.

Взвод командиры лейтенант Атаев шунда ла ҡалҡыулыҡты ҡалдырырға теләмәне. Гитлерсыларҙың артналетынан һуң ун танкы ярҙамында дошман һалдаттары ҡабаттан һөжүмгә килеүен күргәс, ул үҙ командалығындағы кешеләрҙе аҙаҡҡы тапҡыр йыйҙы.

— Дуҫтарым, беҙҙең сафта ни бары алты ғына һуғышсы ҡалды. Һәр кешегә ике дошман танкыһы, унарлаған фашист һалдаты тура килә. Әммә сигенергә хаҡыбыҙ юҡ! Аҡтыҡ минутҡа саҡлы тыуған ғәзиз еребеҙ өсөн алышырға бурыслыбыҙ, — тине ул, һынаған шикелле егеттәрҙең һәр береһенә текләп ҡарап.

Яугирҙар, өндәшмәйенсә, үҙҙәренә билдәләнгән урындарға таралышты.

— Ниңә ярҙам килмәй икән һаман? — тине Мөхәммәтҡазый, асыуланып. — Былай булһа, бөтәбеҙ бит!

— Әжәлдән элгәре үлергә ҡабаланма, паникер! — тине Байдәүләтов. Аҙаҡтан, иптәшен йыуатҡандай, ныҡлы ышаныс менән өҫтәне: — Фашистарҙың дүрт танкыһын ҡыйраттыҡ, ҡалғандарын да дөмөктөрәсәкбеҙ!

Гитлерсыларҙы эйәрткән танкылар һаман яҡынлаша. Уларҙың хатта пулемет көпшәләре, тәреләре асығыраҡ төҫмөрләнде.

Байдәүләтовтан ун биш аҙым самаһы арала урынлашҡан Келуб Беймуратов берҙән-бер ПТР-ҙан ут асты. Дошмандың иң алдан килгән танкыһы утҡа солғанды. Икенсеһе, ҡуйы төтөн ҡатыш ялҡынлана башлағас та, килеүенән туҡталды. Өсөнсө танк Келуб Беймуратов менән бергә ПТР-ын ергә һеңдерә иҙеп уҙғас, траншея буйлап ыңғайланы. Мөхәммәтҡазы, яйын килтереп, уның аҫтына граната бәйләмен бырағытты. Һәм шунда уҡ ҡый-

ратылған танк люгынан ҡуйы ҡара-ҡыҙғылт ялҡын урғылды. Дүртенсе танк, Мөхәммәтҡазыны сырҡырата иҙеп уҙған саҡта, лейтенант Атаев тарафынан яндырылды. Янғынға солғанған танкынан сыҡҡан экипажды дөмөктөрөүсе Рәхим Баджаевтың үҙен бишенсе танк тапап уҙҙы. Ләкин дүрт-биш метр самаһы барырға ла өлгөрмәне, брустверға һикереп менгән Атаев уны гранаталар бәйләмен бырағытып ҡыйратты. Шул саҡ үҙ гранатаһы ярсығы тейеп яраланған взвод командиры иҫән ине әле. Алтынсы, уның артынса етенсе дошман танкыһын яндырғас ҡына Аннаклыч Атаев [1] хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Взвод командирының һәләк булыуы Байдәүләтовты тетрәтте.

— Ҡәбәхәттәр! — тип ажарланып, ул тиҙ тоҡана торған шыйыҡса тултырыулы шешәләр һәм гранаталар бәйләме менән бүтән дошман танкыларына ҡаршы көрәшергә әҙерләнде. Танкының береһе пушкаһынан ата-ата Байдәүләтов йәшеренгән яҡҡа ыңғайланы. Уның моторы геүләүе, гусеницаһы шығырлауы һаман яҡыныраҡ ишетелде. Танк килеп етергә дүрт-биш метр самаһы ара ҡалғас, ҡапыл ҡалҡынған ыңғайы гранаталар бәйләмен ташланы ла, Зәки траншея төбөнә сүкәйҙе. Көслө шартлауҙан аҙаҡ туҡталған танкты шыйыҡса тултырыулы шешә менән яндырған ваҡытта, йәнә бер танкының уң яҡтан яҡынлашыуы күренде. Байдәүләтов уға ҡаршы траншея буйлап йүгерҙе. Уңайлы ерҙе һайлап алып, гранаталар бәйләме һәм шыйыҡсалы шешә менән уныһын да яндырҙы. Иң аҙаҡҡы дошман танкыһы ҡалды. Ул туп-тура килә. Танктың яҡынлашыуын көсөргәнешлек менән көткән Байдәүләтов ҡапыл быуындары бушауын тойҙо. Мейеһе сәңкеп һыҙлай, башы әйләнә башланы, һәм ул хәлһеҙләнеүен һиҙҙе. Ниңәлер ҡоҫҡоһо килде. Барлыҡ көсөн туплап бырағытҡан гранаталар бәйләме танкыға барып етмәй яҡында ғына ярылған саҡта ярсыҡтары тейеүҙән яраланып, Зәки Байдәүләтов траншея төбөнә ауҙы. Траншея өҫтөн шымартып уҙған танк гусеницаһынан ҡойолған ер менән ҡапланғас, ҡыймылдарҙай ҙа мөмкинлеге ҡалмаған Байдәүләтов һауаһыҙ тонсоҡто. «Бына ҡасан килде минең ысын үлемем!» — тигән ҡот осҡос уй менән ул иҫенән яҙҙы...

---

[1] СССР Верховный Советы Президиумының 1943 йылдың 13 мартындағы Указы менән лейтенант А. Атаевҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Ҡалҡыулыҡ өсөн уның менән бергә һуғышыусыларҙың барыһы ла Ватан Һуғышы ордены менән наградланды. 1969 йылда, Белая Ҡалитваның азат ителеүенә 25 йыл тулыу уңайы менән, атаевсылар һуғышҡан ҡалҡыулыҡҡа «Үлемһеҙлек ҡалҡыулығы» исеме бирелде һәм һәйкәл ҡуйылды.

Үлемдән нисек ҡотолоуын, лейтенант Атаев взводынан тере йән эйәһе ҡалмаған 79,9 ҡалҡыулығына ҡабаттан хужа булған гитлерсыларҙың ҡыйратылыуы, башҡорт егеттәре үҙен ҡаҙып алыуы һәм санэскадронға оҙатыуы хаҡында аҙаҡтан, иҫенә килгәс кенә белде Байдәүләтов. Фронттағы барлыҡ газеталарҙың сираттағы һанында Украина ерендә панфиловсыларҙың подвигын ҡабатлаусылар тураһында яҙылыуын, ә корпус газетаһында «В бой, кавалеристы!» тигән баш аҫтында фронтовик шағир Виктор Головановтың атаевсыларға бағышланған шиғыры баҫылып сығыуын ишеткәс, ул тулҡынланды:

— Сестра, газетала баҫылған шиғырҙар менән мәҡәләләрҙе уҡып ишеттерһәгеҙсе!

— Әлегә борсолорға ярамай һеҙгә. Яраларығыҙ төҙәлеп бер аҙ һауыҡҡас та, һәммәһен уҡып ишеттерермен, — тине шәфҡәт туташы.

Зәки бик ныҡ ныҡышҡас, шәфҡәт туташы әлегә Головановтың шиғырын уҡыу менән генә сикләнде:

Скалой неприступной в бушующем море
Стояли атаевцы в грозном бою.
С решимостью твердой и гневом во взоре
Дралися геройски за землю свою.
Они в нашем сердце, как братья родные,
Простые, но гордые славой своей.
Атаевцы, наши орлы боевые,
Вас любит страна, как своих сыновей.
Когда над землею рассеются тучи,
И снова Отчизна, как сад, зацветет,
Страна наша гордые песни споет...

Шиғырҙың һуңғы юлдарын тыңлаған ваҡытта бөтөнләйгә хәлһеҙләнгән Байдәүләтов, йәшләнгән күҙҙәрен йомоп, ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән бышылданы:

— Рә...рәх-мәт, һеңлекәш!..

...Усть-Белая Ҡалитва ҡалаһын кавалеристар тулыһынса азат иткәндең иртәгеһенә, санэскадронда дауаланған Байдәүләтов эргәһенә дивизия командиры генерал-майор Шайморатов үҙе килде.

Тәне дүрт урындан ҡаты яраланған Зәкиҙең һаулығы шәптән түгел икәнлеген һәм уны тәрән тылға оҙатырға йыйналыуҙарын белгәс, Шайморатов икеләнеберәк торҙо. Шунан, лейтенант Атаев взводынан иҫән ҡалған берҙән-бер кешене күрмәй китһә аҙаҡтан ғазапланасағын белеп, Зәки ятҡан палатаға инде.

Тотлоға-тотлоға ҙур ҡыйынлыҡтар менән һөйләшкән Байдәүләтовтан атаевсылар хаҡында һорашҡандан һуң, Шайморатов атаевсылар һаҡлаған ҡалҡыулыҡҡа күтәрелде.

Ҡаһарман яугирҙар ерләнгән бәләкәй генә зыяраттың тирә-яғындағы емерек нығытмаларҙы, ҡыйратылған танкыларҙы, төрлө һуғыш ҡорамалдарын, атаевсылар оборона тотҡан соҡор-саҡырлы урындарҙы ҡарап оҙаҡ йөрөнө ул.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Усть-Белая Калитва ҡалаһындағы фатирына ҡайтҡас та тыныслана алманы. Ул, бер нөктәгә төбәлгән көйө уйланып ултырҙы-ултырҙы ла, тынғы бирмәгән ауыр уйҙарынан нисек тә булһа ҡотолорға тырышып, ҡатынына хат яҙырға тотондо.

«Һаумы ҡәҙерлем, һөйөклөм Оленька!..»

Хатты яҙып бөтөүгә, дивизия штабы начальнигы полковник Голенев килеп керҙе.

— Иптәш генерал, ҡыуаныслы хәбәрҙе ишетмәнегеҙме әле? Сталинград ҡамауындағы фельдмаршал Паулюстың өс йөҙ утыҙ мең кешелек группировкаһы тулыһынса ҡыйратылған һәм фельдмаршал үҙенең еңеүселәре алдында баш эйгән. Шул уңай менән беҙгә корпус штабынан митинг уҙғарырға ҡушалар.

— Яҡшы, бик яҡшы! — Дивизия командирының күҙҙәре шатлыҡлы осҡондар сәсеп ялтланы. — Был оло тарихи ваҡиғала 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының да өлөшө бар, Иван Иванович!

— Әлбиттә, — тине полковник Голенев. — Сталинград өсөн алыш барған осорҙа, бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылдың ноябренән башлап быйылғы ҡырҡ өсөнсө йылдың бөгөнгө көнөнә тиклем, беҙҙең һыбайлыларыбыҙ һуғыш менән дүрт йөҙ километр ерҙе үтте. Ошо рейдта өс меңдән ашыу гитлерсы дөмөктөрөлдө, ике мең ярым һалдат һәм офицеры пленға алынды, бик күп танкыларын, автомашиналарын һәм төрлө һуғыш ҡорамалдарын ҡыйраттыҡ бит!

— Политбүлек начальнигы менән замполит беләме был яңылыҡты? — тип һораны Шайморатов.

— Беләләр.

— Политбүлек начальнигына әйтегеҙ, митингыны юғары кимәлдә уҙғарырға әҙерләнһендәр. Митингыла һөйләнеләсәк сығыштар һәр һуғышсының йөрәгенә үтеп, ҡанына һеңерҙәй һәм артабан да еңеүгә рухландырырҙай булырға тейеш!

Полковник Голеневтың китеүенә биш минут та уҙманы, бер-бер артлы дивизия командирының урынбаҫарҙары, «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының редакторы Али Ҡарнай менән дивизияның политбүлек начальнигы полковник Покровский килеп инде. Уларҙың да йөҙҙәре алсаҡ, ҡыуаныслы, үҙҙәре сиктән тыш ярһыу ине.

## XXI

Митингынан аҙаҡ, Башҡорт кавалерия дивизияһы ялға сығарылды. Ул ашығыс тулыландырылды, аттар өр-яңынан дағаланды, яңы ғына алынған ҡоралдар һыбайлыларға таратылып бирелде.

Нисәмә айҙар буйы гитлерсылар менән бер туҡтауһыҙ алыша-һуғыша йонсоған яугирҙар ҡала мунсаларында рәхәтләнеп йыуынды, өҫ-башын таҙартты, яманы, эйәрҙәрен төҙәтте йәки туған-тыумасаларына иркенләп ултырып хат яҙҙы.

Ваҡ-төйәк мәшәҡәттәрҙән бушағас, яугирҙар һәр кисте күңел асты, ҡурай моңона ҡушылып йырланы һәм бейене. Һәүәҫкәр композиторҙар үҙҙәре сығарған яңы йырҙарҙы һыбайлылар алдында сығып йырланы, концерттарҙа ҡатнашты...

Был көндәрҙә генерал Шайморатовҡа ғына йүнле ял теймәне. Ул формалаштырылған һәр кавалерия полкының, эскадрондың, взводтың, махсуслаштырылған хәрби частарҙың киләсәк һуғыштарға нисек әҙерләнеүҙәрен ентекләп тикшерҙе һәм етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөү хәстәрлеген күрҙе.

Дивизиялағы бөтә нәмә ныҡлы яйға һалынғас ҡына Шайморатов бер аҙ иркенләне.

Иртәнге йоҡоһонан торғас, ғәҙәтенсә, ул дивизия штабына барырға йыйналды. Шунан, ҡабаланырҙай эш булмауын иҫләп, беренсе мәртәбә үҙ яйына йөрөргә ниәтләнеп, Шайморатов ҡала уртаһындағы баҡсаға китте. Унда ҡышҡыса тынлыҡ. Әйтерһең, һуғыш юҡ һәм булмаған да...

Шайморатов, башындағы папахаһын маңлайына батырыбыраҡ кейеп, хром итегенең табаны аҫтында шығырлаған ҡарҙы тыңланы. Әх, ҡайһылай рәхәт! Битен һыйпап, оҙон шинель салғыйын елпендергән ел, кемдәрҙеңдер эҙен йәһәтерәк күмергә тырышҡандай шаяра-шаяра ла, шыр яланғас ағастар ботағында ҡуҡырайышып ултырған турғайҙар яғына ашҡына. Иртәнге саф һауаны һулыуы еңел, ул тәнде ләззәтләндерә.

Бөгөнгө көн аяҙ булмаҡсы. Ана, таңдың яңғырауыҡлы тынлығына һәм ҡышҡы һалҡын томанына ҡат-ҡат уран-

ған ҡыҙғылт-һары ҡояш офоҡ ситенән ҡабаланмай ғына күтәрелә. Уның һалҡынса көмөш нурҙары ҡала баҡсаһы эсендәге ҡарт ҡайындарҙың түбәһен яҡтыртты. Шунан аҫтағы ҡыуаҡлыҡтарҙың япраҡһыҙ ботаҡтарына ҡабынды, артабан йүгергән ыңғайы ҡарҙарға сағылып, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ваҡ-ваҡ ҡына осҡондарҙы балҡытты. Ер өҫтөн мәңге ҡабатланмаҫтай һоҡландырғыс төрҙәргә мансылдырып, әллә нисәмәшәр төҫкә ингән ҡояш нурҙары ҡышҡы һалҡын күк йөҙөн үтәнән-үтә күренеүсән зәңгәр буяу менән буяны.

Бындай матур иртәнге күренеште үлеләр генә күрә алмаясағын иҫенә төшөргән Шайморатовҡа моңһоу һәм аяныс булып китте. Ватан-әсәне гитлерсыларҙан азат итеү өсөн күп, бик күп ир-егеттәрҙең ҡорбан булыуы ниндәй ҡыҙғаныс! Атаевсыларҙың күбеһенә егерме йәш тә тулмағайны бит. Һис шикһеҙ үләсәктәрен белә тороп, хәрби бурыстарын үтәү өсөн аҡтыҡ минутҡа саҡлы ныҡ торғандар...

— Иптәш генерал!..

Уйҙарынан бүленгән Шайморатов артына әйләнеп ҡараны. Йүгерә-атлай яҡынлашҡан адъютантын күргәс, ул туҡталды.

— Мине юғалттыңмы?

— Юғалтыуға юғалтманым... — Дивизия командирының адъютанты, һүҙен нисек башларға белмәйенсә, йыш-йыш ауыр һулап, бер урында тапанды.

— Нимә булды? — тип һораны Шайморатов, ҡобараһы осҡан адъютантының ҡыланышына аптырап.

— «ЧП», иптәш генерал!.. «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы яҙыусы Али Ҡарнай атылып үлгән!

Ҡот осҡос хәбәргә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәгәндәй торған Шайморатовтың йөҙө ҡарайҙы.

— Сәбәбе ниҙә?

Ихлас яратҡан, аҡыллы, кешелекле, үтә ярымлы, илгәҙәк, ҡыҙыу һәм тиҙ ҡайтымһаҡ яҙыусының фәжиғәле һәләк булыуын ауыр кисергән дивизия командирының адъютанты иларҙай хәлгә етте.

— Ә-ә-әлегә сәбәбе билдәһеҙ...

Генерал-майор Шайморатов «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакцияһына барып етеүгә, тикшереүселәр эш башларға өлгөргәйне. Политбүлек начальнигы полковник Покровский менән уның урынбаҫары Ҡадыров та шунда ине.

Дивизия командиры бер кем менән дә һөйләшмәне. Иҙән уртаһындағы мәйет тәңгәлендә папахаһын сискән башын һалындырып минут самаһы шымып торҙо ла, бер

кемгә бер ниндәй һүҙ ҡушмайынса, ишеккә табан ыңғайланы.

Яҙыусы Али Ҡарнайҙың кәүҙәһе мәктәп ҡаршыһындағы ағастар араһында ҡаҙылған ҡәбергә ерләнде.

Шул көндөң кисендә дивизия командиры Шайморатов следователде үҙенә саҡыртты.

— Али Ҡарнайҙың атылып үлеү сәбәбе асыҡландымы?

— Тулыһынса асыҡланып бөтмәне, иптәш генерал, — тип яуап ҡайтарғандан һуң, следователь үҙе белгәндәрҙең һәммәһен төкмәй-сәсмәй һөйләргә кереште.

...Усть-Белая Ҡалитва ҡалаһын азат итеүсе башҡорттар тураһында яҙылған мәҡәләһен газетала баҫырға тапшырғас, Али Ҡарнай, күңел төшөнкөлөгәнә бирелеп, өҫтәл тартмаһын аҡтарҙы, ҡағыҙҙар араһынан ниҙер эҙләне, гимнастерка кеҫәләрен ҡат-ҡат ҡапшаны.

Уның һәр хәрәкәтен өндәшмәй генә күҙәтеп ултырған Әһел Истамғәлин мыҫҡыллы көлдө.

— Алтын юғалттыңмы, Ҡарнай?

— Алтындан да ҡәҙерлерәк партбилетымды таба алмайым. Ҡисә кис кенә гимнастеркам кеҫәһендә ине, бөгөн иртәнсәк тороуыма — юҡ!

— Берәй ергә яңылыш төшөрмәнегеҙме? — тип һораны әҙәби сотрудник.

— Бөгөн мин бер ҡайҙа ла сыҡманым. Әгәр ҙә төшөрһәм, түшәгем эргәһендә ятыр ине.

— Өҫтәлегеҙ тартмаһын ҡарағыҙ.

— Ҡаралмаған урын ҡалманы. Егеттәр, берәйегеҙ юрамал шаяртып йәшермәнеме?

— Партбилет менән шаярмайҙар, — тине Истамғәлин.

— Әләйһә, ҡайҙа булыуы мөмкин? — Али Ҡарнай, өмөтһөҙлөккә бирелеп, Истамғәлингә ҡараны. — Беҙ икәүҙән башҡа бында бер кем дә булманы бит!

Әһел Истамғәлин, тура ҡарарға баҙнаты етмәйенсә, аҫтыртын һәм хәйләле күҙ ҡарашын ситкә йүнәлтте.

— Уның өсөн ниңә сәбәләнергә? Юғалһа, икенсе партбилет алырһың!

Истамғәлиндең тыныс ҡына әйткән һәр һүҙе Ҡарнайҙың йөрәгенә энә шикелле ҡаҙалғандай тойолдо. Сөнки юғалған партбилетты Истамғәлин унан үс алыу өсөн файҙаланасаҡ! Ҡорпусҡа Мәскәүҙән Сталиндың ставленнигы Мехлис килгән, тиҙәр. Ул килгән еренән ҡорбанһыҙ китмәүе һәр кемгә мәғлүм. Партбилеты юғалған ваҡытта Хәрби совет ағзаһына йәки политбүлеккә саҡыртылһа, Ҡарнайҙы бәлә көтә. Әллә ниндәй ғәйеп табып, штрафбатҡа ебәреү урынына атыуға хөкөм итеүҙәре ихтимал...

— Бөгөн бер ҡайҙа ла сыҡмағас, мотлаҡ табылыр, — тине әҙәби сотрудник.

Али Ҡарнай өндәшмәне.

Юғалған партбилеты ике тәүлектән һуң да табылмағас, Ҡарнай ныҡ борсола башланы. Ғәҙелһеҙ ялаға ышанып, булмаған ҡот осҡос ғәйепте үҙенә таҡһалар, ҡалайтыр? Былдай хәл ҡатынына, балаларына, туған-тыумасаһына һәм белеш-таныштарына ла яҡшылыҡ килтермәйәсәк бит! Хыянатсы исемен тағып, нахаҡтан ғәйепләнһә, яҡты донъяла йәшәүенән йәшәмәүе мең тапҡыр артығыраҡ түгелме? Эскерһеҙ саф, таҙа, намыҫлы икәнлегеңде нисек итеп танытырға, нисек?! Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа һәммәһен ентекле тикшерергә, дөрөҫлөктө асыҡларға мөмкинлектәре табылырмы тикшереүселәрҙең? Уны, бәлки, дивизияның политбүлегендә аңларҙар? Ике көн буйы партбилеты юғалыуын әйтмәй йөрөгәс, аңларҙар микән?..

Ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙарының сигенә сыға алмай ыҙаланған Али Ҡарнай, ҡайғы-хәсрәтенең аҡтыҡ сигенә етеп, рухи төшөңкөлөккә бирелде.

Сиратта баҫылып сығасаҡ «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының версткаһын уҡый ғына башлағайны, уны Хәрби совет ағзаһына саҡыртып, элемтәсе офицер килде.

«Партбилетым юғалыуы буйынса саҡырталыр, ахырыһы! Тимәк, кемдеңдер доносы эш итә! Былдай хурлыҡҡа артабан сыҙау мөмкин түгел», — тигән һығымтаға килгән Али Ҡарнай ярһыны. Ул, элемтәсе офицер ишек алдына сыҡҡас та, пистолетының көбәген сикәһенә терәне...

— Атаҡлы журналист, яҙыусы Али Ҡарнайҙың ялҡынлы ғүмере шулай өҙөлөүе ҡыҙғаныс, үтә ҡыҙғаныс, — тип тамамланы һүҙен хәрби тикшереүсе.

Али Ҡарнай менән Әһел Истамғәлиндең үҙ-ара мөнәсәбәтен белә тороп та ваҡытында тейешле сара күрә алмауы өсөн үкенеп, генерал Шайморатов тикшереүсегә ҡайғылы күҙҙәре менән төбәлде.

— Хәрби совет ағзаһына берәйһенең доносы буйынса саҡыртылған булғанмы Али Ҡарнай?

— Бүтән мәсьәлә буйынса, ти.

— Истамғәлин донос яҙғанмы?

— Ул бер кемгә, бер ниндәй ҙә жалоба яҙмаған. Редакторҙы ҡурҡытыр өсөн генә һөйләнгән...

— Али Ҡарнайҙың партбилеты нисек юғалыуы асыҡландымы?

— Юҡ, иптәш генерал.

— Тикшереүҙең һығымтаһы нисек?

— Иптәш генерал, ғәфү итегеҙ, бында ниндәй ҙә булһа һығымтаға килеү мөмкин түгел!

Тикшереүсенең яуабы менән ҡәнәғәтләнмәгән Шайморатов, түҙемһеҙләнеп, оҙон һаплы төрөпкәһендәге тәмәкене ҡабыҙҙы. Ҡуйы ҡара тәмәке төтөнөн бер яҡ ситкә борхолдата өрҙө лә йәнә хәрби тикшереүсегә текләнде.

— Али Ҡарнайҙың фәжиғәле үлеменә бер ниндәй ҙә сәбәп юҡмы ни?

— Ул үҙен-үҙе... — Хәрби тикшереүсе, әйтә башлаған һүҙен нисек дауам итергә белмәйенсә, ыҡ-мыҡ итте. — Бында кемде ғәйепләргә, иптәш генерал?

— Намыҫлы кешегә яла яғыу сәбәп түгелме?

— Истамғәлин иптәште хөкөмгә тарттыртыр өсөн етди дәлил табылманы, иптәш генерал...

Ишек алдында полковник Голенев күренде. Ул, ғәфү үтенеп, Шайморатовҡа мөрәжәғәт итте:

— Иптәш генерал, һеҙҙе корпус штабына саҡырталар!

— Ниндәй мәсьәлә буйынса икәнлеген әйтмәнеләрме?

— Өсөнсө гвардия армияһы командующийы генерал-лейтенант Лелюшенко дивизия командирҙары менән кәңәшмә уҙғарырға тейеш, ти.

Шайморатовтың ҡырыҫ күҙ ҡарашы йәнә хәрби тикшереүсегә төбәлде.

— Беҙҙең әңгәмә бүленде, әммә бөтмәне. Уны мин корпус штабынан ҡайтҡас дауам итербеҙ. Можете идти!

Хәрби тикшереүсе киткәс, Шайморатов оҙаҡ ултырманы. Голенев штабы әҙерләгән материалдарҙы ҡарап сыҡҡас, йәһәт кенә йыйналды ла, «виллис» автомашинаһына ултырып, шунда уҡ юлға сыҡты. Ә уның машинаһы артынан эйәрле ҡара-ерән ҡашҡаһы менән бер төркөм һыбайлы офицерҙар эйәрҙе.

Ҡорпус штабында дивизия командирын ярты сәғәттән артыҡ тотманылар.

Ҡомандующий уҙғарған кәңәшмәнән дивизияға ҡайтҡас, Шайморатовтың тикшереүсе менән әңгәмәне дауам итергә мөмкинлеге булманы. Иң яҡын ярҙамсылары менән полк командирҙарын ашығыс саҡыртып, генерал-лейтенант Лелюшенко ҡуйған хәрби бурысты ҡыҫҡаса аңлатты.

— Дошман оборонаһын өҙөп, гитлерсыларҙың тылындағы Ворошиловград — Дебальцево тимер юл үҙәген һуғышып алырға тейешбеҙ, — тип һәр полк алдында торған хәрби бурысты төшөндөргәс, фашистар тылы буйлап уҙғарыласаҡ тәрән рейдҡа әҙерләнергә ҡушты.

Полк командирҙары кәңәшмәнән таралышыуға алты сәғәт уҙғас, таң алдынан һыбайлылар урындарынан ҡуҙ-

ғалды. Алғы эскадрондағы яңғыҙ йырсы кавалеристар ятҡан йырҙы башланы:

Башҡорттар китте һуғышҡа
Оҙатып ҡалды күк Урал.

Уға бүтәндәр ҙә дәррәү ҡушылды:

Ат уйнатып, алда бара
Шайморатов генерал...

Ҡорпус авангардындағы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тейешле урынға барып етеү менән гитлерсыларға ҡаршы атаҡаға ташланды. 1943 йылдың унынсы февралендә Лисовское һәм Орловское ауылдары тәңгәлендәге дошман оборонаһын өҙөп, ул 21-се һәм 55-се һыбайлы дивизияларға юл асты. Ләкин һигеҙенсе кавалерия корпусының тылдары, фронт аша уҙырға өлгөрмәйенсә, өсөнсө гвардия армияһының бүтән хәрби частары менән бергә бүленеп ҡалды.

Ҡорпустың ауыр хәлдә икәнлеген аңлап, генерал-майор Борисов үҙенең урынбаҫарҙарын, дивизия командирҙары менән политбүлек начальниктарын йыйып кәңәшләште:

— Дошман тылына бер ниндәй запаһыҙ үтеп индек. Беҙ хәҙер үтә ҡыйын хәлдә. Ҡалайтырға? Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, барлыҡ запас боеприпастар һәм бүтән төрлө нәмәләр менән беҙҙе тәьмин итергә тейешле барлыҡ подразделениеларыбыҙ фронттың теге яғында тороп ҡалды. Уларға ҡабаттан ҡушылыу өсөн фронт аша кирегә сығабыҙмы, әллә гитлерсылар тылы буйлап артабан барабыҙмы?

— Өсөнсө гвардия армияһы командующийының приказын үтәмәү — енәйәткә тиң, — тине Шайморатов.

— Личный составтың тамағын нисек туйҙырырға һәм боеприпастарҙы ҡайҙан табырға?

— Дошманда аҙыҡ-түлек һәм боеприпастар бөтәһе түгел. Уларҙың һәммәһен гитлерсыларҙан үҙебеҙ һуғышып алырбыҙ, иптәш комкор!

Ҡалған кавалерия дивизияларының командирҙары ла Шайморатов менән риҙалашыуын белгәс, командующий ҡуйған хәрби бурысты үтәйәсәгенә генерал Борисовта ныҡлы ышаныс тыуҙы.

Дошман тылындағы һыбайлылар рейды, туҡтатылмайынса, ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы.

Давыдовка ауылында нығынысусы фашистарҙың артиллеристар полкы менән уҡсылар батальоны һәм танк полкының контрһөжүмгә әҙер тороуы хаҡында асыҡланғас, Дебальцево эргәһендәге Чернухино тимер юл станцияһын штурмалауcы башҡорттарға корпустың бүтән подразделениелары ла ярҙамға килеп етте. 55-се кавдивизия яугирҙары гитлерсыларҙың уҡсы батальонын Чернухино поселогына ҡыҫырыҡланы, ә көнбайышҡа табан һөжүм итеүсе 21-се кавалерия дивизияһы Дебальцево — Ростов тимер юлын йәһәтерәк киҫергә ҡабаланды.

Дошмандың башҡа урындан ашығыс күсерелгән 17-се дивизияһын ҡыйратҡан корпустың һыбайлылары Чернухино, Бронской, Городище тимер юл станцияларын һуғышып алғас, уларҙы Ворошиловград ҡалаһы менән тоташтырыусы тимер юл өҙөлдө. Ҡавалеристарҙың көтөлмәгән һөжүменә сыҙамаған дошман һалдаттары араһында паника тыуҙы, һәм улар Донбасстан тәртипһеҙ ҡаса башланы.

Ун дүртенсе февралдә, данлыҡлы шахтерҙар ҡалаһы Луганск (Ворошиловград) тулыһынса дошмандан таҙартылған көндө, Верховный Баш командующий И. В. Сталиндың приказы буйынса һигеҙенсе кавалерия корпусы — Етенсе һанлы, 21-се кавдивизия — 14-се, 55-се кавдивизия — 15-се, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы — 16-сы һанлы итеп үҙгәртелеүе һәм уларға «гвардия» исеме бирелеүе тураһында рация аша хәбәр алынғас, һыбайлылар менән үҙенең ҡыуанысын уртаҡлашырға теләп, генерал-майор Шайморатов барлыҡ ярҙамсыларын йыйҙы.

Ул дивизия штабы исеменә генерал-полковник Городовиков ебәргән телеграмманы елпендереп йылмайҙы.

«16-сы гвардия кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелгән Башҡорт кавалерия дивизияһы немец илбаҫарҙарына ҡаршы дәһшәтле һуғышта халыҡ ышанысын аҡланы» тигән һүҙҙәрҙе ҡысҡырып уҡыны ла үҙенән өҫтәп әйтте:

— Иптәштәр, аҙаҡҡы һуғышта гитлерсыларҙың алты танкыһын, үҙйөрөшлө дүрт орудиеһын, мендән ашыу һалдат һәм офицерын юҡ итеп, командующийҙың үтә мөһим һаналған хәрби заданиеһын уңышлы үтәүебеҙ һәм «гвардия» исеменә лайыҡ булыуыбыҙ менән ихлас күңелемдән ҡотлайым!

Барыһы ла, «ура» ҡысҡырып, ҡул сапты.

— Иптәш генерал, һеҙҙе лә «гвардия» исемен алыуығыҙ менән ҡайнар ҡотлайбыҙ, — тип шаулашты командирҙар.

Шайморатов был ҡыуаныслы көндә үтә алсаҡ, яғымлы ине. Ул кружкаларға спирт ҡойорға ҡушты. Ҡуйы ҡара ҡашы аҫтындағы күҙҙәрен ялтлатып, тирә-яҡҡа иғти-

барлы ҡарана-ҡарана, 16-сы гвардия дивизия исемен алыу уңайы менән күтәргән тосын түңкәрә эсте лә баянда һыҙҙырып уйнарға тотондо...

## XXII

Дошман тылы буйлап тәрән рейдта йөрөгән ваҡытта һуғышып алған аҙыҡ-түлек, ҡорал ярҙамында, һыбайлылар бик күп ауылдарҙы гитлерсыларҙан азат итте, бик күп тимер юл эшелондарын тәкмәстерҙе, Германияға ҡыуылған меңгә яҡын совет кешеләрен ҡотҡарҙы, аҙыҡ-түлек, ҡорал, ярыулыҡ һаҡланған складтарҙы шартлатты һәм яндырҙы.

«Икенсе фронт»тан, Европанан ашығыс рәүештә көсәйелгән немец ғәскәрҙәренең һөжүме башланғас, тәрән рейдта йөрөүсе гвардеецтарҙың да хәле мөшкөлләнде. Фашистарҙың снарядтары, бомбалары өҙлөкһөҙ төшөп ярылыуҙан башҡорттар нығынған Чернухино ҡайнаны, уның аҫты-өҫкә килде.

Ҡамауҙағы һыбайлыларҙы йәһәтерәк ҡыйратыу, юҡ итеү өсөн дошман ғәскәрҙәре бер туҡтауһыҙ атакаланы, ҡыҫты һәм шул тәңгәлдә яңынан-яңы көс тупланы. Гитлерсыларҙың самолеттарына ҡаршы көрәшеү өсөн самолеттар, зениткалар, танкыларына ҡаршы — танкылар, туптар һәм гранаталар файҙаланыу мөһим ине. Уларҙы ҡайҙан алырға? Хатта ябай һуғыш ҡорамалдары менән патрондар табырлыҡ та мөмкинлек ҡалманы. Кешеләр аҙыҡһыҙ, аттар фуражһыҙ интегә башланы.

Ҡотолғоһоҙ бәлә яҡынлашыуына борсолған Шайморатов корпус командиры Борисовҡа мөрәжәғәт итергә мәжбүр булды:

— Иптәш гвардия генералы, башҡорттарҙың хәле үтә мөшкөлләнде. Дивизияға ярҙам кәрәк!

— Ярҙам кәрәклеген үҙем дә беләм! — Корпус командиры, аптырап, ҡолас йәйҙе. — Мөмкин булмаған ярҙамды ҡайҙан табырға?

— Командующийға хәбәр итегеҙ!

— Был хаҡта 3-сө гвардия армияһы штабында яҡшы беләләр. Минең барлыҡ һорауыма армия командующийы генерал-лейтенант Лелюшенко яуап ҡайтарманы.

— Командующий үҙе вәғәҙә иткән механизацияланған корпус ҡайҙа?

— Улар фронт аша уҙа алмаған.

— Хәҙер беҙгә ни эшләргә?

— Мин дә ошо һорауға яуап таба алмай ыҙалайым, — тип Борисов башҡа дивизия командирҙарын да саҡыртты һәм ауыр мәсьәләне кәңәшләшеп хәл ҡылырға булды.

Дивизия командирҙары менән политбүлек начальниктары йыйналып бөткәндән һуң да, һүҙҙе ниҙән башларға белмәйенсә, корпус командиры байтаҡ ваҡыт уйланып ултырҙы. Шунан, ауыр һулап, урынынан күтәрелде.

— Генерал Шернерҙың Гитлерға яҙған хатынан күренеүенсә, улар беҙҙе, гвардеецтарҙы, Сталино — Дебальцево тимер юлын тотоусы беҙҙең корпус һыбайлыларын күптән «ҡыйратҡан» булып сыға...

— Генерал Шернер һаташа, ахырыһы, — тине 15-се гвардия кавалерия дивизияһы командиры гвардия генерал-майоры Чаленко.

— Шернер һаташһа-һаташмаһа ла, уның беҙҙе ҡамауҙа ныҡ тотоуы, төрлө яҡлап ҡыҫыуы һәм ҡыйратырға ныҡлы әҙерлек алып барыуы факт! — Гвардия генералы Борисов, ҡәләм алып, топографик картаға билдәләр яһаны. — Дошман танкылары бына ошонда, Давыдово совхозы тирәһендә тупланған. Тимер юлдың көньяғына гитлерсыларҙың 134-се уҡсы дивизияһы күсерелә. Дошмандың 12-се уҡсы һәм механизацияланған 79-сы дивизиялары, Артемовск аша, көнсығыштан яҡынлаша. Улар иртәгә, егерме икенсе февралдә, һәммәһе бергә ҡушылырға һәм беҙҙе ҡыйратырға тейеш. Хәҙер беҙгә ни эшләргә? Кәңәш бирегеҙ! — Корпус командиры Борисов шымыбыраҡ торҙо. Бер кем дә өндәшмәгәс, үҙе яуап ҡайтарҙы: — Корпусҡа икенең береһен һайларға ҡала... Бер ниндәй файҙаһыҙға һуғышып, корпусты ошонда һәләк итергә йәки дошмандың тылы буйлап артабан йөрөүебеҙҙе дауам итергә! Мин һуңғы вариантты һайланым һәм бойорам: бөгөн, төнгө сәғәт ун тулғанда, Фашевка станцияһының көньяҡ-көнсығыш тәңгәленән дошман ҡамауын йырып сығырға һәм ошо йүнәлештә барырға,— тип картанан күрһәтте лә корпус штабы начальнигы полковник Сабуровҡа ҡараны: — Ҡалған мәсьәләне ентекле аңлатыу өсөн һүҙ һеҙгә бирелә, Иван Дмитриевич!

«Мин бында килгәнгә саҡлы корпус командиры тарафынан һәммәһе ентекле хәл ҡылынған икән», — тип уйланы Шайморатов, ҡамауҙы нисек йырып сығыу хаҡында дивизияларҙың бурысын аңлатҡан корпус штабы начальнигын иғтибар менән тыңлаған ваҡытта.

Дивизияға ҡайтып етеү менән Шайморатов, штабы начальнигы Голенев һәм урынбаҫарҙары менән берлектә, корпус командиры бойороғон үтәү буйынса ашығыс эштәр башҡарҙы.

Алдан билдәләнгән ваҡыт етеү менән, полк, эскадрон һәм взвод командирҙарының командаһы яңғыраны һәм һыбайлы башҡорт егеттәре алға табан ыңғайланы.

Шул уҡ төндә дошман ҡамауын йырып сыҡҡас, Миус йылғаһы буйында оборона тоторға әҙерләнеүсе гитлерсылар тулыһынса ҡыйратылып, эскадрондар шул рубежда туҡталды.

— Ошо тирәлә тупланған дошман ғәскәрҙәрен ҡыйратырға мөмкинлек тыуҙы. Тик беҙгә боеприпастар табырға кәрәк! — тине Шайморатов штаб начальнигы Голенев менән икәүҙән-икәү генә ҡалып сәй эскән ваҡытта. — Беҙҙең корпус командиры Борисов көньяҡ-көнбайыш фронты командующийы генерал Ватутинға ярҙам һорап рация аша мөрәжәғәт иткән һәм унан ыңғай яуап алған. Самолеттарҙы ҡабул итеү урынын әҙерләүҙе ойоштороорға кәрәк, Иван Иванович!

— Ул самолеттар беҙгә ҡасан килеп етергә тейеш? — тип һораны Голенев.

— Бөгөн, төнгө туғыҙҙа...

Дивизия штабы начальнигы кружкаһына яһаған сәйен дә эсеп бөтөрмәйенсә китергә ҡабаланды.

Ләкин генерал Ватутин вәғәҙә иткән самолеттарҙы көтөү ҙә бушҡа ғына булды. Фронттағы шарттар киҫкен үҙгәреү сәбәпле, улар икенсе мөһим ергә күсерелгәйне...

— Хәҙер барлыҡ ышаныс тик үҙебеҙҙә, — тине Шайморатов. Ул, һыбайлылар менән Оло ер араһындағы дошман оборонаһын ентекле тикшергәндән һуң, Голеневҡа артабанғы маршруттың планын төҙөргә, барлы-юҡлы аҙыҡты һәм ҡоралдарҙы кешеләргә бүлеп бирергә ҡушып, 275-се кавполкка китте.

Ныҡ йонсоған кавалеристарҙың кәйефе шәптән түгел ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был рейдтан нисек тә булһа сығыу өсөн, улар һөжүмде тиҙләтергә теләне.

Бер ниндәй ярҙамһыҙ-ниһеҙ фронт тәңгәлендәге дошман оборонаһын өҙөүе бик тә ҡатмарлы икәнлеген яҡшы аңлаған Шайморатов, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүен белгертмәҫкә тырышып, дивизия штабына ҡайтты. Гвардия полковнигы Голенев әҙерләп ҡуйған приказды раҫлағас та, яурыны менән землянка стенаһына терәлеп, ял итергә булды. Әммә йоҡламаны. Ҡорпус командирының тиҫкәрелегенә, дивизия командирҙарының фекере менән иҫәпләшмәүенә, тәкәббер ҡыланыуына, кешеләр менән аттарға саҡ ҡына ла ял бирҙертмәйенсә алға барырға ҡушыуына борсолоп баш ватты. Борисовтың артта ҡалған эскадрондар менән артиллеристарҙы саҡ ҡына ла көтөргә теләмәүе, ныҡлы әҙерлекһеҙ һыбайлыларҙы күрәләтә ут эсенә тығырға маташыуы зарарлы, һәм ул фажиғәле тамамланасаҡ! Ҡешеләрҙе ниңә һаҡларға теләмәй икән корпус командиры? Аҙаҡтан ниндәй генә көс менән диви-

зия тулыландырылмаһын, уның төп көсө, елеге — әлеге һуғышсылар бит!

— Иптәш гвардия генералы!..

Шайморатов, күҙҙәрен шар асып, үҙенең эргәһендә торған Голеневҡа ҡараны.

— Нимә, Иван Иванович?

— Һөжүмде дауам итергә ҡушып, комкорҙан элемтәсе офицер килде!

— Әле ваҡыт күпме?

— Биш минуттан егерме өс.

Борисовтың үҙ фекерен үҙгәртмәүенә эсе бошоп, Шайморатов урынынан күтәрелде.

— Полктарға хәбәр итегеҙ, һөжүмде башлаһындар!

Дивизия командирының бойороғо полктарға тапшырылғас та, һыбайлылар дошман һалдаттарына ҡаршы атакаға күтәрелде.

Дивизияны көс-хәлгә ҡыуып еткән ике генә орудие ярҙамында дошман танкылары менән уҡсы полктарын ҡыйратып, һуғыша-һуғыша, тәрән көрткә бата-сума яугирҙар һаман алға ынтылды.

Икенсе тәүлек барған алышта тимер юл станцияһы эргәһендәге урманды дошман һалдаттарынан таҙартып, бәләкәй генә ауылға етеп туҡталған һыбайлыларға бер аҙ ял бирергә ҡушҡан Шайморатов үҙе лә шинеленә төрөнөп йоҡларға ятты. Ул ун — ун биш минут самаһы йоҡларға ла өлгөрмәне, корпус командирына саҡырып, элемтәсе офицер килде.

Юлино ауылы уртаһындағы элекке мәктәптә урынлашҡан корпус штабына Шайморатов килеп инеү менән, Борисов екеренде:

— Ни өсөн туҡталдығыҙ?!

— Иптәш комкор, башҡаса әмәл ҡалманы! Үҙебеҙҙекеләр яғына фронтты йырып сығырҙан алда ныҡ йонсоған кешеләр менән аттарға аҙ ғына булһа ла ял кәрәк! Бынан тыш...

— Курорттамы ни һеҙҙең дивизия һыбайлылары?! — тип корпус командиры Борисов Шайморатовты тупаҫ бүлдерҙе. — Үҙебеҙҙекеләр яғына фронт аша сыҡҡас, ял бирергә булмаймы ни һыбайлыларыңа?

— Кешеләр хәлдән тайған!..

— Һатыулашмағыҙ, генерал!

— Иптәш комкор, ҡыҫҡа ваҡытҡа бында туҡталыуыбыҙҙың икенсе етди сәбәбе лә бар!..

— Ниндәй сәбәп?!

— Ентекләп аңлатырға рөхсәт итегеҙ, иптәш комкор! — Шайморатов үҙен мөмкин тиклем тыныс тоторға тырыш-

ты. — Беренсенән, беҙгә эйәрә алмай артта тороп ҡалған күпселек артиллеристарыбыҙҙы, эскадрондарҙы һәм таралышҡан кешеләрҙең ҡыуып етеүен көтөргә тейешбеҙ. Икенсенән, разведчиктарҙы алға ебәреп, дошман ғәскәрҙәре беҙгә ҡаршы ҡайҙа, ниндәй көс менән һуғышырға әҙерләнеүен асыҡлау мөһим! Шунда ғына үҙебеҙҙекеләр яғына фронт аша сығырға мөмкин буласаҡ!

Корпус командиры Шайморатовтың аныҡ фекере менән иҫәпләшергә теләмәне.

— Һеҙҙең фекерегеҙ нигеҙһеҙ, генерал! Корпус разведкаһы һәммәһен күптәнән асыҡларға өлгөргән. Беҙгә ҡаршы тороусы дошман ғәскәрҙәре артыҡ күп түгел. Штеровка — Широкий йүнәлешендә немецтар бөтөнләй юҡ. Ваҡытты әрәмгә уҙғарғансы, барығыҙ, башҡорттарҙы прорывҡа күтәрегеҙ!

Бер нәмәгә нигеҙләнмәгән Борисовтың бойороғо аҡылһыҙ дыуамаллыҡ, үҙ һүҙен өҫтөн ҡалдырырға маташыу икәнлеген яҡшы аңлаған Шайморатов һаман ныҡышты:

— Иптәш, комкор, ныҡлы әҙерләнмәйенсә, көстө тәртипкә килтермәйенсә фронтты йырып сығыуы мөмкин түгел! Һис юғында бер генә көн ваҡыт бирһәгеҙ, дивизияны бер ниндәй юғалтыуһыҙ үҙебеҙҙекеләр яғына алып сығырға һүҙ бирәм!

— Һатыулашырға ваҡыт юҡ, генерал! — Корпус командирының йөҙө ҡарайҙы. Ул, Шайморатовтың тәкдимен һанға һуҡмайынса, ҡыҙыулыҡ менән ҡыսҡырҙы: — Хәҙер үк прорывҡа барырға!

— Иптәш гвардия генералы!..

— Бында корпус командиры кем? Минме, әллә һеҙме?!

— Һеҙ!

— Шулай булғас, бойороҡто үтәгеҙ!

Тыныслығын нисек кенә булһа ла юғалтмаҫҡа тырышҡан Шайморатов фронтты өҙөп сығыу буйынса икенсе төрлө мөһим дәлилдәрҙе әйтә генә башлағайны, Борисов сабырһыҙланып ажғырҙы:

— Бәхәсте бөтөрөргә!

Кешеләрҙе күрәләтә ҡырҙырырға теләмәгән Шайморатовтың да асыуы ҡабарҙы:

— Аҡылһыҙ приказығыҙҙың аҙағы нимә менән барып тамамланасағын күҙ алдына килтерәһегеҙме?!

Үҙ ҡулы аҫтындағы дивизия командирынан бындай һүҙҙе ишетермен тип башына ла килтермәгән Борисов ярһыуынан шартлар хәлгә етеп ҡалтыранды.

— Томшоғондо онтайым, — тип Шайморатовҡа киҙән-

гән саҡта, уның ҡулына корпус штабы начальнигы Сабуров йәбеште.

— Иптәш гвардия генералы!..

Борисов, ярһыуынан баҫыла алмайынса, дер ҡалтыранып, баҫҡан урынында тыпырсына-тыпырсына, кобураһындағы пистолетына тотондо.

— Ҡурҡаҡты хәҙер үк атып үлтерәм!

Бындай күренештең аҙағы насар тамамланасағын аңлаған гвардия полковнигы Сабуров, ике генерал араһына сығып баҫҡас, Шайморатовҡа эйәк ҡаҡты:

— Барығыҙ, комкор приказын үтәгеҙ!

Үҙенә «ҡурҡаҡ» ҡушаматы тағылыуына ғәрләнгән Шайморатов, корпус командиры менән уртаҡ телгә килә алмауҙарына үкенеп, аҡылһыҙ бойороҡҡа буйһонорға мәжбүр булды.

— Яҡшы, приказығыҙҙы үтәйем! Әммә белегеҙ, аҡылһыҙ приказығыҙ өсөн һеҙгә үкенергә тура киләсәк, — тип Шайморатов Борисовҡа киҫкен ҡараш ташланы ла, әрнеүле тойғолар менән ишеккә табан йүнәлде.

Дивизия штабына ҡайтҡас, Шайморатов һушһыҙ йоҡлап ятҡан кешеләрҙе йоҡоларынан уятырға һәм бик тиҙ арала урындарынан ҡуҙғалырға ҡушты.

Нисәмә тәүлек ял итмәгән кешеләрҙе күрәләтә һәләкәткә алып барыуына Миңлеғәле Минһажетдиновичтың йөрәге сатнарҙай хәлгә етеп әрнене. Ашау-эсеүҙе лә яҡшырта алманы бит, исмаһам! Ярты-йорто ғына ҡалған аттар ҙа бик ныҡ йонсоған. Уларҙы ашатырға бесән дә, фураж да ҡалманы. Артта тороп ҡалған артиллеристарҙың күбеһе булмағас, дошмандың танкыларына ҡаршы артабан нисек һуғышырға? Һис юғында гранаталар менән патрондар етерлек булһасы!

Кешеләр тәрән көрткә бата-сума ҡыйынлыҡ менән барҙы.

Фронт һыҙығына етергә өс-дүрт километр самаһы ара ҡалғас, хәл киҫкенләште. Дивизияны эҙәрләп килеүсе дошман ғәскәрҙәре арттан ҡыҫырыҡлағанда, фронт һыҙығындағы гитлерсылар ҙа башҡорттарҙы ҡыйратырға ныҡлы әҙерлек алып барыуы асыҡланды.

Дивизия командиры Шайморатов, урынбаҫарҙарын, полк командирҙары менән политработниктарҙы йыйып, шулай тине:

— Гитлерсылар фронттан да, тылдан да ҡыҫа. Беҙ рейдтан сыҡҡан ваҡытта немецтарҙы фронттан атакалап, дивизияға ярҙамлашырға тейеш булған 3-сө армия подразделениеларының да тауыш-тыны ишетелмәй. Хәҙер бөтә ышаныс тик үҙебеҙҙә, — тип дивизияны ике колоннаға

бүлде лә бойорҙо: — Ивановка ауылынан уҙасаҡ беренсе колонна менән командалыҡ итеүҙе гвардия подполковнигы Фондеранцевҡа, Петров заводы һәм Штеровка эргәһенән барасаҡ икенсе колонна менән командалыҡ итеүҙе штаб начальнигы гвардия полковнигы Голеневҡа тапшырам. Махсуслаштырылған ваҡ эскадрондарға дивизия штабы менән бергә ике колоннаның уртаһынан барырға! Дошман беҙҙе яҡындан атакалай башлағанға тиклем ут асмаҫҡа! Патрондарҙы һаҡларға. Ҡуберәген штык, приклад һәм ҡылыс ярҙамында һуғышырға. Хәҙер барығыҙға ла билдәләнгән урындарығыҙға таралышырға бойорам һәм именаман үҙебеҙҙекеләр яғына фронтты йырып сығыуығыҙҙы теләйем!

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар таралышҡас, гвардия генерал-майоры Шайморатов үҙенең бик ныҡ хәлһеҙләнеүен тойҙо. Ләкин серем итеп алырға ла ваҡыты булманы. Әле беренсе, әле икенсе колонна командирҙары менән бәйләнеш тотоп, һәр эскадрондың ҡайҙа, ниндәй позицияға беркетелеүен һәм кешеләрҙең кәйефе нисек икәнлеген һорашты.

Ҡөсөргәнешлек менән барған прорывҡа әҙерлек егерме өсөнсө февралдең таңында ғына тамамланды.

Ҡарҙы иретеп адъютанты ҡайнатҡан бер кружка сәйҙе эскәс, нисәмә тәүлектәр буйынса йоҡо тәтемәгән ҡып-ҡыҙыл күҙҙәрен йомоп, Шайморатов башын күкрәгенә һалындырҙы. Минут самаһы йоҡомһорап ултырғандан һуң, ул сәғәтенә ҡараны.

— Теүәл алты. Ваҡыт!

Уның бойороғон подразделение командирҙарына еткереү менән, ҡар туҙандарын борҡотоп, һыбайлылар алға ынтылды. Ат тояҡтарының тыпырлашыуы, яугирҙарҙың ҡылыстарын һелтәй-һелтәй, бер-береһен сәмләндереп ҡысҡырышыуы яҡында ғына ярылған дошман снарядтары һәм миналарының гөрһөлдәүенә күмелде.

«Кешеләрҙе күрәләтә утҡа тығыуы ниндәй ахмаҡлыҡ!» — тип өтәләнеп, Шайморатов үҙенең эргәһендәге ярҙамсыларына ҡул һелтәне.

— Ниңә ҡатып тораһығыҙ? Йәшеренегеҙ!.. Снарядтар соҡорона йөҙ түбән ҡапланығыҙ!..

Гитлерсыларҙың артналеты баҫылғас, Шайморатов йәшеренгән урынынан сыҡты. Шинеле салғыйындағы сүпсарҙы унан-бынан ғына ҡаҡҡыланы ла дошман туптары аҡтарған соҡор-саҡырлы урындарҙан алға ынғайланы. Туң ерҙә ҡанһырап ятҡан кешеләрҙе һәм йән бирергә теләмәй үлем менән тартҡылашҡан меҫкен хайуандарҙы күреп, уның йөрәге әрнене. Әммә уларға бер кем дә ярҙам

итә алмай. Дивизия яҙмышы хәл ителгән бындай көсөргәнешле, үтә яуаплы минутта үлеләргә йәки үлемгә дусар булған кешеләргә мәрхәмәтлек күрһәтергә маташыу тереләргә хыянат итеү менән бер тиң икәнлеген һәр командир яҡшы аңлай ине.

— Фашистар хәҙер атакаға күтәреләсәк, — тип Шайморатов элемтәселәрен колонна командирҙарына тейешле бойороҡ менән ебәрҙе лә үҙе туп-тура барыуын белде.

Өҫ-башы ылҡаланып, ныҡ һурыҡҡан ҡаҡса йөҙҙәрен һаҡал-мыйыҡ баҫҡан бер төркөм командирҙар менән политработниктар араһында торған майор Әлибаевты күргәс, Шайморатов туҡталды.

— Бында ни эшләйһегеҙ?

— Кәңәшләшәбеҙ, иптәш гвардия генералы! — Әлибаев кәүҙәһен турайтып честь бирҙе.

— Кешеләрегеҙ ҡайҙа?

— Алда. Атакаларыбыҙ дүрт тапҡыр кире ҡағылғандан аҙаҡ, кешеләр оборона тоторға әҙерләнә!

— Корпус командирының прорывҡа барырға тигән приказы һеҙгә ҡағылмаймы ни?! — тип асыуланды Шайморатов.

— Кешеләр асығыу-арыуҙың аҡтыҡ сигенә еткән, иптәш гвардия генералы! Уларҙың күбеһе аяҡтарында ла тора алмай, ә яралыларҙың яраһы асылған. Бер аҙ ял бирмәһәк, эштәр харап!

Үҙе лә ошо хаҡта уйлаған Шайморатов, корпус штабындағы күңелһеҙ күренеште күҙ алдына килтереп, бойорҙо:

— Приказ есть приказ! Уны үҙ белдегең менән үҙгәртергә йәки боҙорға бер кемдең дә хаҡы юҡ! Дошмандың атакаларын кире ҡағып, һөжүм башларға һәм фронтты йырып үҙебеҙҙекеләр яғына сығырға!

Ярҙамсыларын эйәрткән Әлибаев алға елдерҙе. Уның төркөмө барып етеү менән, урман аръяғында оборона тоторға әҙерләнеүсе һыбайлылар ҡабаттан һөжүм башланы. Мылтыҡ-карабиндарҙан атҡан тауыштар, гранаталар гөрһөлдәп ярылыуы ҡатыш «ура» яңғырауы баҫылғас, гитлерсылар менән ҡул һуғышы башланды...

Һул флангылағы яугирҙарҙың артҡа сигенеүен күргәс, ҡара-ерән ҡашҡаһына атланған Шайморатов уларҙың ҡаршыһына сапты.

— Ҡасып ҡайҙа бараһығыҙ?! Артта ла немецтар! Алға, тик алға! — тип ҡысҡырҙы ул, ярһып.

Дивизия командирын таныған яугирҙар, бер-береһен дәртләндереп ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, үҙҙәрен эҙәрләүсе гитлерсылар менән ажарланып һуғышырға тотондо.

— Олатай алға барырға ҡуша!

— Бойороҡто үтәргә!..

Прикладтар менән штык, ҡылыстар ярҙамында һуғышыусы яугирҙарҙың ҡыйыулығына сыҙамаған гитлерсылар, тотҡан позицияларын ҡалдырып, кирегә табан ташланды.

Уларҙы эҙәрләүсе башҡорттар, асыҡ яланға сыҡҡас һул яҡтан пулемет утына эләгеп, ергә боҫорға мәжбүр булдылар, ә ҡайһы берҙәре кире сигенде. Әммә уларҙың юлын был юлы ла Шайморатов бүлде.

— Ал-ға-аа!.. Алға! — тип ярһып ҡысҡыра-ҡысҡыра, бер төркөмдән икенсеһенә, өсөнсөһөнә сабып барып, һөжүмде туҡтатыусы яугирҙарҙы ҡабаттан атакаға борҙо.

Аттарҙан тапала яҙып соҡорҙа ятып ҡалған Әлибаев, иң көслө атыш ваҡытында ла генерал Шайморатовтың ҡурҡмауына, ҡыйыулығына, һәр саҡ һау-сәләмәт ҡалыуына, беренсе тапҡыр сиктән тыш ярһып һүгенеүенә ғәжәпләнеп, йәшеренгән соҡоронан торҙо.

— Егеттәр, минең арттан алға! — тип ҡысҡырҙы ла, баш осо тәңгәлендә пистолетын болғай-болғай, бер төркөм яугирҙарҙы эйәртеп, алға ташланды.

Саҡ ҡына булһа ла йайлау, һөжүмде туҡтатыу йәки артҡа сигенеү — тылдан яҡынлашып килеүсе дошман һалдаттарының көслө утына эләгеп кавалеристары ҡырҙырыу икәнлеген аңлаған дивизия командиры Шайморатов өҙлөкһөҙ ашыҡтырҙы. Ул гранаталар ярылған, пулялар һыҙғырышҡан урындарҙан йән-фарман елдереп уҙған саҡта бер үк һүҙҙе ҡабатланы:

— Туҡталмаҫҡа!.. Һөжүмде яйлатмаҫҡа!.. Алға, тик алға!..

Дивизия командиры менән бергә булғанда һәр саҡ еңәсәктәренә ныҡлы ышанған башҡорттар, ҡурҡыу һәм арыу-талыу белмәйенсә, гитлерсыларға ҡаршы батырҙарса һуғыша-һуғыша, һаман алға ынтылды.

Алыштың иң ҡыҙған, иң яуаплы минутында корпус штабынан ебәрелгән элемтәсе офицер гвардия генерал-майоры Шайморатовты ҡыуып етте. Ул, манма һыуға төшөп күбекләнгән ярһыу атының башын шаҡара тартып туҡтатҡан ыңғайы, ҡарлыҡҡан тауыш менән ғыжылданы:

— Иптәш гвардия генералы, корпус командиры менән корпус штабы гитлерсылар ҡамауына эләкте! Ҡомкор урынбаҫары генерал Дудко, корпус штабы начальнигы полковник Сабуров, корпустың политбүлек начальнигы Карпушенко, корпустың оператив бүлеге начальнигы Надашкевич һәм башҡа бик күп офицерҙар фашистар менән алышҡан ваҡытта һәләк булды! Мин, яңғыҙым ғына дош-

ман ҡамауынан сығып, ошо хаҡта һеҙгә хәбәр итергә ашыҡтым!

Гитлерсылар ҡамауындағы корпус командиры менән корпус штабын бәләнән ҡотҡарыу өсөн ашығыс сара күрергә кәрәк ине. Ҡамауҙағы офицерҙар менән корпус командиры дошманға пленға эләкһә, уның аҙағы фәжиғәле тамамланасағын һәм корпусҡа ниндәй оло юғалтыу буласағын яҡшы аңлаған Шайморатовтың фекер тупларға, башҡорттарҙың дошман траншеяларын һуғышып алыуҙарын көтөргә ваҡыты юҡ ине. Ул, уңышлы барған һөжүмде туҡтатмаҫҡа ҡушып, дивизия штабы начальнигы Голеневҡа адъютантын ебәрҙе лә, алғы һыҙыҡтан ситтәрәк ҡалған бер төркөм һыбайлыларҙы эйәртеп, дошман ҡамауындағы иптәштәренә йәһәтерәк ярҙамға барып етергә ашыҡты. Тик изге маҡсатына өлгәшә алманы. Корпус командиры Борисов менән корпус штабының гитлерсылар ҡулына эләгеүен[1] белмәгән Шайморатов, йән-фарман елдереп барған саҡта, үҙе лә аңғармаҫтан, дошман засадаһына эләкте.

Уңдан да, һулдан да һорғолт-йәшел кейемдәге немецтар төрлө яҡтан яҡынлаша башлағас ҡына, ҡамауға эләкмәҫкә тырышҡан Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаһын кирегә борҙо һәм дошман автоматсылары менән ҡапма-ҡаршы осрашты.

— Минән ҡалмаҫҡа! — тип артынан килеүсе һыбайлыларға ҡысҡырҙы ла, үҙебеҙҙекеләр яғына сығыу юлын быуырға маташҡан немецтарҙы автомат уты менән ҡойондора-ҡойондора, Шайморатов ҡара-ерән ҡашҡаһын дошман һалдаттары өҫтөнә йүнәлтте.

Шайморатовсыларҙың бындай сая батырлыҡтарын көтмәгән немецтар ҡырылды, тапалды, тураҡланды...

Бәләкәй генә төркөм менән дошман ҡамауын инде йырып сыҡтым тигәндә, Шайморатов менгән ҡара-ерән ҡашҡа нимәгәлер һөрөнөп йығылды, ә уның яраланған хужаһы эйәренән йығылып ҡалды. Бер аҙ сабып барғандан һуң, Шайморатовты көтөп, ҡара-ерән ҡашҡа ғәҙәттәгесә хәүефһеҙерәк урынға барып баҫты.

Шайморатовтың ауыр хәлгә ҡалыуын күргән гитлерсылар, аҡылдарынан шашҡандай ҡотороноп, төрлө яҡтан уның өҫтөнә ябырылды. Уларға яҡын килергә ирек бирмәйенсә, Шайморатов, яралы терһәге менән көс-хәлгә ҡар

---

[1] Немецтарға штабы менән әсирлеккә эләккән корпус командиры гвардия генерал-майоры М. Д. Борисовтың власовсыларға хеҙмәт итеүҙән ҡырҡа баш тартыуы һәм үҙен ысын патриоттарса тотоуы Ватан һуғышы тамамланғас ҡына асыҡланды.

өҫтөнә таянып, автоматынан ут асты. Атыш ваҡытында биш тапҡыр яраланған Шайморатов һаман алышты. Уға немецтарҙы яҡын ебәрмәҫкә тырышып аяуһыҙ алышҡан лейтенант менән сержант һәләк булғас ҡына дошман һалдаттары батырайҙы.

Уларҙан ҡотола алмаясағын аңлаған Шайморатов патрондары бөткән автоматын ситкә ырғытты ла:

— Бәхил бул, Ватаным!.. Һөйөклө Оленькам, ҡыҙым Октябрина, мине онотмағыҙ!.. — тип һуңғы гранатаһы менән гитлерсыларҙың яҡынараҡ килеүен көттө.

«Мине терелә́й алырға өмөтләнеп, атмайҙар», — тип уйланы Шайморатов. Уның күҙ алды сыбарлана башланы, аҫтындағы ер сайҡалғандай булды. Ул, аңын юғалтҡанда гитлерсыларға пленға терелә́й эләгеүенән ҡурҡып, барлыҡ ихтыярын тупланы, һәм гранатаһы менән һелтәнгән ыңғайҙа тетрәткес шартлау яңғыраны...

Көслө атышҡа иғтибар итмәйенсә, ҡара-ерән ҡашҡа ҡуйы ағастар араһында хужаһының йәки таныш коноводтың килерен көттө. Ҡайһы араларҙыр бер ынтылыуҙа һыртына атланған кешене ырғытырға тырышып, ул ҡапыл ярһыны, үрә баҫты. Теҙгенде шаҡара тотҡан сит һыбайлыға баш бирмәйенсә, ауыҙлыҡты тештәре менән сәйнәп, осаһын һикертә-һикертә әле уңға, әле һулға йылдам кәйкәләнде. Һыртындағы эйәрҙә ныҡ ултырған ят кешенән бер нисек тә ҡотола алмаясағын аңлағас, асыу менән башын ситкә һирпте лә көслө атыш барған яҡҡа табан сапты. Артта ҡалған гитлерсылар, ат һыртындағы офицерға тейҙереүҙән ҡурҡып, автоматтарынан ут асмайынса, шау-шыу ҡубарып ҡыҫҡырышты.

Ҡара-ерән ҡашҡа батырҙарса һуғышҡан башҡорттарға яҡынлаша башлағас, ҡурҡышынан ҡото алынған дошман офицеры эйәрҙән ҡолап ҡалды...

Ҡара-ерән ҡашҡа колоннаға килеп ҡушылғас ҡына генерал Шайморатовтың яҙмышы хаҡында ошоғаса белмәгән-ишетмәгән дивизия штабы начальнигы Голенев дивизия командирының ниндәй фажиғәгә осрауын аңланы.

## ӨСӨНСӨ КИҪӘК

### I

Рейдтан сыҡҡан 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы Кременской станцияһына яҡын урында ялға күсерелде.

Аҡтыҡ сиккә етеп арыған, өҫ кейемдәре туҙған, үҙҙәре

таный алмаҫтай булып ябыҡҡан кешеләр, тейешле ергә етеп туҡталыу менән торған урындарында ауып, йоҡоға талды. Ерҙең үҙе шартлаһа ла уята алмаҫ ине уларҙы.

Генерал Шайморатовтың үлемен ауыр кисергән гвардия полковнигы Голенев, һушһыҙ йоҡлаған һыбайлыларҙы урындарынан торғоҙоп тамаҡтарын туйҙырырға маташҡан командирҙарҙың аҙапланыуы бушҡа икәнлеген аңлағас, ҡул һелтәне.

— Юҡҡа ыҙаламағыҙ, бер аҙ хәл йыйыуҙарын көтөгөҙ!

— Иптәш гвардия полковнигы, кешеләрҙең күпселек өлөшө аҙналар буйы ас йөрөй, — тине 58-се гвардия полкы командирының политик эш буйынса урынбаҫары Әлибаев.

— Беләм, Сәғит Рәхмәтович, бик яҡшы беләм! Ләкин уларға ҡамасауламайыҡ. Хәҙер һыбайлыларға иң мөһиме — йоҡо, — тине Голенев.

Ваҡытлыса дивизия командиры вазифаһын башҡарған гвардия подполковнигы Фондеранцев та, үтә йонсоу һәм ҡайғылы йөҙөн сырылтып, тотлоға-тотлоға:

— И-иван И-и-ваныч ха-хаҡлы... Ҡе-кешеләрҙең ү-үҙҙәре уяныуын кө-көтөгөҙ! — тип әйтеүҙән башҡа сара тапманы.

Ҡонтузияланыуы сәбәпле гвардия подполковнигы Фондеранцевтың тотлоға-тотлоға һөйләшеүе, фекер туплай алмай интегеүе, еңелсә ҡалтыранған башы әйләнеүе һәм уның бик ныҡ ябығыуы Голеневты борсолдорҙо.

— Герасим Ефимович, һеҙ ҙә бер аҙ ял итеп алһағыҙсы!

Фондеранцев, штаб начальнигы һүҙенә ғәжәпләнгән һымаҡ, ныҡ сейләнеп ҡыҙарынған күҙҙәрен йыш-йыш йомғолап:

— Ҡа-ҡасан ял итергә? — тип һораны ла иң элгәре һыбайлылар хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш икәнлеген аңлатты.

Немецтар казармаға әйләндергән бысраҡ, сүпле мәктәп иҙәнендә, коридорҙарҙа, ишек алдындағы буш урындарҙа бер-берейһенә уҡмашып бер ни һиҙмәй йоҡлаған кешеләрҙе ҡарап йөрөгәндән аҙаҡ, саф һауаға сыҡҡас, Фондеранцев менән Голенев 58-се гвардия кавалерия полкы[1] урынлашҡан ихатаға табан ыңғайланы.

---

[1] Рейдтан сыҡҡан подразделениелар барыһы ла яңы бирелгән һан менән йөрөтөлә башланы: 275-се полк — 58-се гвардия полкы, 294-се полк — 60-сы гвардия полкы, 313-сө полк — 62-се гвардия полкы. Ә 101-се айырым артиллерия дивизионы 148-се гвардия артиллерия-миномет полкына үҙгәртелде. Элемтә һәм саперҙар эскадрондарына ла бүтән һандар бирелде.

Ике-өс көн ваҡыт уҙғас ҡына кешеләргә бер ни тиклем хәл керҙе. Ләкин, үҙҙәре әтмәләгән ябай мунсаларҙа йыуынып, өр-яңы ҡышҡы кейемдәргә кейенеп, Башҡортостандан ебәрелгән бүләктәрҙе өләшеп алғандан һуң да, тәрән рейдтан сыҡҡан һыбайлыларҙың кәйефе күтәрелмәне. Улар, айырыуса рядовой һыбайлылар, үҙҙәре өҙөлөп яратҡан «олатай»ҙы — дивизия командиры гвардия генерал-майоры Шайморатов Миңлеғәле Минһажетдиновичты мәңгегә юғалтыуҙарына сикһеҙ ҡайғырышып, бер-береһе менән моң-зарҙарын уртаҡлашты.

— Үҙ олатайыбыҙҙан да артығыраҡ күргән ҡәҙерле дивизия командирын һаҡлай алманыҡ шул!

— Унһыҙ нишләрбеҙ икән инде?

— Дивизия командиры итеп кемде генә ҡуйһалар ҙа, Шайморатов ағай шикелле аҡыллы, ғәҙел, кешелекле булмаясаҡ, — тигән һүҙҙәрҙе һиҙҙермәй генә тыңлаған Сәғит Әлибаевтың да йөрәге әрнене. Сөнки Шайморатовтың аҡылы, ихтыяр көсө, ифрат та оло хәрби начальник икәнлеге, уның белемле, тыйнаҡ, юғары культуралы, әҙәпле, юҡ-бар өсөн сәбәләнмәүе һәр яугирға билдәле ине.

Ана, үҙҙәрен-үҙҙәре йыуатырға теләп, улар Шайморатовҡа арналған йырҙы йырлай:

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;
Ат уйнатып, алда бара
Шайморатов генерал...

Миңлеғәле Минһажетдинович һәләк булғас, уның тураһындағы был йыр тәрән юҡһыныу, ҡайғылы һағыш менән һуғарылғандай ишетелде Әлибаевҡа.

«Шайморатов яу ҡырында дошмандарҙы көл иткән; утта янмай, һыуҙа батмай, һай, батыр ҙа ир икән...» Йырҙың һүҙҙәре лә хәҙер, дивизия командиры үҙе булмағас, бөтөнләй башҡа мәғәнәлә яңғыраған һымаҡ. Йылдар артынса йылдар, быуаттар уҙғанда ла тыуған илдең азатлығы өсөн Бөйөк Ватан һуғышында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы батырҙарса көрәшкән гвардия генерал-майоры Шайморатовтың ҡаһарманлығы халыҡ тарафынан онотолмаясаҡ! Уның исеме Наполеон Бонапарт ғәскәрҙәрен Рәсәй иленән ҡыуып сығарып, французларҙы үҙ ерендә — Парижда ҡыйратҡан «төньяҡ амурҙары»ның — казачий башҡорт полктарының башлыҡтары Ҡаһым түрә, Буранбай кеүек данлыҡлы шәхестәр менән бер рәттән йөрөйәсәк, уға арнап композиторҙар яңынан-яңы йырҙар сығарасаҡ, шағирҙар — шиғырҙар, яҙыусылар повестар һәм

романдар яҙасаҡ, ә тыуған халҡының күңелендә уның батырлығы, даны һынланасаҡ...

Миңлеғәле Минһажетдиновичҡа ҡарата ошондай һығымтаға килгән Әлибаев, ауыр тойғоларға күмелеп, ҡурай көйөнә ҡушылып йырлаусыларға табан ыңғайланы.

Полк командирының политик эш буйынса урынбаҫары яҡынлашыуын күргәс, башҡорт егеттәре йырлауҙан тыйылды. Улар, урындарынан һикерешеп тороп, өр-яңы гимнастеркаларының итәген ҡайыш аҫтына тартып шымарта-шымарта, баҫҡан урындарында ҡатты.

— Һаумыһығыҙ, иптәш гвардия майоры!

Тыйнаҡ ҡына йылмайып, Әлибаев уртаға уҙҙы.

— Ял итәһегеҙме?

— Ялыбыҙ ял, ашағаныбыҙ аш түгел әле, иптәш гвардия майоры, — тип ҡурайсы егет иптәштәре исеменән яуап ҡайтарҙы.

— Ниңә улай? — Әлибаев бер ни белмәмешкә һалышты.

— Олатайҙың үлеме тынғылыҡ бирмәй беҙгә!

Ҡурайсы егет әйткәнгә ҡушылып, бүтәндәр ҙә шаулашты:

— Ниндәй командирыбыҙ һәләк булыуына ҡайғырышып ултырабыҙ!

— Һәммәбеҙҙең эсе тулы ҡайғы-хәсрәт!

— Был ҡайғыбыҙ мәңге оноталмаҫлыҡ!..

Миңлеғәле Минһажетдиновичты юҡһыныу тойғоһон кисергән Әлибаев үҙе лә башҡорт егеттәренең күңелен йыуатырҙай һүҙ таба алманы. Бер аҙ тынысланғас ҡына, мәктәптәге балаларға дәрес аңлатҡандағы шикелле, ҡабаланмай, рейд ваҡытындағы мөһим ваҡиғаларҙы бүтән фронттарҙағы һуғыштарға һәм тылдағы яңылыҡтарға бәйләп тәьҫирле һөйләгәндән һуң, егеттәрҙең күңелен күтәрерҙәй һүҙҙәр табырға тырышты:

— Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Беҙгә, ун алтынсы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы яугирҙарына, яратҡан командирыбыҙ Шайморатовтың үлеме өсөн гитлерсыларҙан үсте икеләтә-өсләтә ҡайтарырға кәрәк.

Әлибаев менән теләктәшлек белдереп, егеттәр йәнә шаулашты:

— Фашистарға бының өсөн аяу булмаясаҡ, иптәш гвардия майоры!

— Уларҙы үҙ өңөнә ҡыуып индереп дөмөктөрәсәкбеҙ!

— Әҙ-мәҙ хәл йыйғас та, фашистарҙың ғүмер күрмәгәнен күрһәтәсәкбеҙ!..

Йүгерә-атлай килгән ординарецы Әлибаевтың әңгәмәһен бүлдерҙе:

— Иптәш гвардия майоры, һеҙҙе подполковник Күсимов көтә!

Яңылыҡҡа ышанмай торған Әлибаев ординарецына текләп ҡараны.

— Күси-мов? Ҡайҙа?

— Полк штабында, иптәш гвардия майоры!

Күсимовтың полкка ҡабаттан килеүе хаҡында белгәс, яугирҙарҙың да йөҙө яҡтырҙы.

— Был һөйләшеүҙе аҙаҡтан бөтөрөп ҡуйырбыҙ, — тип Әлибаев китергә ҡабаланды.

Полк штабы тәңгәлендә торған подполковник Күсимов Әлибаевты еңел генә күтәреп алды ла, иҫән-һау осрашыуҙары ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә зыр әйләндереп, һаһылдай-һаһылдай, ҡысҡырып өндәште:

— Бына ҡабат күрергә яҙған бит һине, Сәғит Рәхмәтович!

Айыу шикелле ҡосағына ҡыҫҡан Күсимовтан көс-хәлгә ҡотолғас, Әлибаев тыйнаҡ ҡына көлдө.

— Яраң төҙәлеп, яңынан бергә булыуыбыҙға шатмын, Таһир Тайыпович!

— Мин дә сикһеҙ шат!

— Дивизия штабында булдығыҙмы? — тип һораны майор Әлибаев, ҡапыл «һеҙ»гә күсеп.

— Ҡуйсәле, сит кешеләр һымаҡ, «һеҙ» тиеүеңде ташла! — тине лә, һорауға яуап бирмәйенсә, Күсимов Әлибаевтың яурынынан тотоп һелкте. — Дивизия командирын ни өсөн һаҡламанығыҙ?! Ә-әх, һеҙ!..

Шайморатовтың һәләк булыуын былай ҙа ауыр кисергән Әлибаев, иларҙай хәлгә етеп, аҡлана башланы:

— Комкор Борисовтың аҡылһыҙ приказы арҡаһында...

— Беләм, беләм! — тип бүлдерҙе Күсимов, ярһып. — Дивизия штабында һәммәһен һөйләнеләр!.. Рейдтан сыҡҡанда мин булһам да, уны ҡотҡара алмаҫ инем!.. Барыбер ауыр, бик ауыр, эсем боша!.. Шайморатов урынына ҡуйырҙай кешеләребеҙ юҡ!..

— Бәлки, һине ҡуйырҙар уның урынына?

— Мине үҙ полкыма ҡабаттан командир иттеләр!

— Ҡайһылай һәйбәт булған, Таһир Таипович! — Әлибаев шатланды.

— Үҙ полкымда миңә лә бик һәйбәт! — тип Күсимов өтәләнде: — Нимә торабыҙ әле аяҡ өҫтө? Башҡортостандан әпкилгән йыуасаларым бар! Әйҙә, шулар менән сәй эскәндә кинәнеп һөйләшербеҙ!

Күсимовтың самауыр артында ултырғанда һөйләшеү ғәҙәтен белгәнлектән, Әлибаев инәлтмәне.

Тирләп-бешеп сәй эскәндә улар танһыктары ҡанғансы гәпләште.

Рейдтан сыҡкан ваҡытта дивизияның ниндәй ҡыйынлыҡтар кисереүе һәм генерал Шайморатовтың ниндәй шарттарҙа һәләк булыуы хаҡында һөйләүҙән туҡтағас, Әлибаев Ҡусимовтың хәлен һорашты.

Яраланғандан һуң Ҡусимов үҙенең Ҡамышиндағы стационар госпиталдә дауаланыуын, унан Урта Азияға оҙатылыуын, юлда барышлай Ырымбур госпиталенә һорап ҡалдырылыуын әйтте. Бер аҙҙан һуң ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе ярҙамында Башҡортостанға күсерелеүен һәм Өфөләге госпиталдә дауаланыуын ентекләп һөйләне.

— Һауығып госпиталдән сыҡкас, яңы назначение алыр өсөн Мәскәүгә китергә тип йөрөй инем, Башҡортостан Верховный Советы Президиумы Председателе Ибраһимов ағайҙы осраттым. Ул минең хәл-әхүәлемде һорашты ла дивизияның комиссары Нәзиров иптәштең Башҡорт кавалерия дивизияһын тулыландырыу өсөн Башҡортостанға кешеләр йыйырға ҡайтыуын әйтте. Был хаҡта ишеткәс, бәхетем был юлы ла хыянат итмәүенә ҡыуанып, Нәзировты йәһәтерәк табырға тырыштым. Уның менән осрашып һөйләшкәс, үҙем ойошторған полкка командир булып килергә рөхсәт алдым...

— Нәзиров та ҡайттымы дивизияға?

— Ҡайтты.

— Әле ул ҡайҙа? — Әлибаев тулҡынланды.

— Башҡортостандан алып килгән кешеләр менән бергә дивизия штабында ҡалды.

— Ҡешеләр күпме?

— Әйтә алмайым. Әммә фашистарға ҡаршы һуғышырға яраҡлы ирҙәрҙең барыһын да ҡырып-сырып йыйғандар!

— Нисек «ҡырып-сырып»?

— Бер беҙҙең башҡорт дивизияһы ғынамы ни фронтта? Башҡортостандың ике йөҙ илле меңдән ашыу ирегете һуғыш башланғас та мобилизацияланды бит!

Йөҙөн сирылтып, Әлибаев борсолоуын белдерҙе:

— Былай булғас, ир-атһыҙ ҡалған завод-фабриктар менән колхоз-совхоздар ҡалайтыр?

— Республикалағы барлыҡ эш тармаҡтарында хәҙер бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро, бала-саға эшләй.

— Интегәләр икән, бахырҡайҙар!

— Интегәләр, бик интегәләр, — тип дөрөҫләне Таһир Таипович, тылдағы кешеләрҙе йәлләп. — Беҙҙе ҡорал,

аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән тәьмин итеү өсөн, тылдағы кешеләр, үҙҙәре ас-яланғас көйө, барлыҡ хужалыҡтарҙа тәүлектәр буйы эшләйҙәр. Етмәһә, үҙҙәренең ауыҙҙарынан булеп, фронтовиктарға күстәнәстәр һәм йылы кейем әҙерләйҙәр. Беҙ эшелондарға тейәлеп юлға сығырға йыйналғанда ла халыҡтан төрлө нәмә әҙерләнеүе хаҡында әйттеләр. Уларҙы беҙҙең дивизияға киләсәк делегация менән бергә ебәрәләр, ти.

Байтаҡ ваҡыт шымып ултырҙылар.

— Партия өлкә комитетында һәм Совнаркомда булдыңмы? — тип һораны Әлибаев.

— Күп булырға тура килде. Республика етәкселәренә лә тынғыһыҙ, үтә ҡыйын. Тәүлектәр буйына өйҙәренә ҡайтмайынса, уларҙың һәр ҡайһыныһы эш урындарында тамаҡ туйҙыра, әҙ-мәҙ серем итеп ала ла йәнә эшкә тотона.

Әлибаев яманһыу көрһөндө.

— Үҙегеҙ нисек бында? — тип һораны Күсимов.

— Ҡапылда ялдабыҙ.

— Мин белгән кешеләр күпме полкта?

— Офицерҙар менән сержанттар составы тулыһынса алмашынды... Рядовой һыбайлыларҙы ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Дошман тылы буйлап йөрөгән рейдтан дивизияның ун проценты самаһы ғына фронт аша үҙебеҙҙекеләр яғына иҫән-һау сыҡты. Беҙҙең егеттәр ҙә гитлерсыларҙы етерлек ҡырҙы. Рейд ваҡытында дошмандың ун ике мең һалдат-офицерын, утыҙ бер танкыһын, һикһән биш орудие-минометын, йөҙ илленән ашыу йөк машинаһын, хәрби боеприпастар һаҡланған егерме биш складын ҡыйраттыҡ, гитлеровсыларҙың алтмыш икенсе һанлы пехота дивизияһының штабын тар-мар иттек. Германияға оҙатылырға тейешле бер эшелон кешеләрҙе азат иттек, 3-сө гвардия армияһы һуғышсыларына Ворошиловград йүнәлешендә уңышлы һөжүм яһарға, дошман тылындағы партизандар менән подпольщиктарҙың хәрәкәтен активлаштырырға булышлыҡ иттек!..

Башҡорт кавалерия дивизияһында бергә хеҙмәт итә башлағандың беренсе көндәрендә үк дуҫлашыуҙарына ҡарамаҫтан, Әлибаев менән Күсимов холоҡ-ғәҙәттәре менән бер-береһенә саҡ ҡына ла оҡшамағайны. Сәғит Рәхмәтович Әлибаев үҙен фронтта ла тыйнаҡ, баҫалҡы, үтә әҙәпле тотто. Рядовой һуғышсылар менән осрашып һөйләшкәндә екеренмәй, тәьҫирле итеп, яй, ҡабаланмай һөйләү ғәҙәтен ташламаны. Уның һәр һүҙе фәһемле булды, һыбайлыларҙың йөрәген арбаны, уларҙы рухландырҙы. Таһир Таипович Күсимов Әлибаевтың бөтөнләй киреһе ине.

Ул үтә ҡыҙыу, ҡайһы саҡта кәрәгенән артыҡ дыуамал, асыҡ-ярыҡ холҡон саҡ ҡына ла үҙгәртә алманы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тәүҙә комиссар, аҙаҡтан полк командирының политик эш буйынса урынбаҫары вазифаһын үтәгән Әлибаев менән уртаҡ тел тапты һәм татыу йәшәне. Бында, бәлки, Сәғит Рәхмәтовичтың кешеләр менән оҫта мөғәмәләлә булыу һәләтлеге булышлыҡ иткәндер. Ул, үҙенең СССР Верховный Советы депутаты абруйы, кешелеклеге, һалҡын ҡанлылығы менән Таһир Таипович Күсимов холҡондағы ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә ыңғай йоғонто яһаны, уның бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғәйрәтле көсөн полктағы офицерҙар менән һалдаттарҙы тәрбиәләүгә йүнәлтте.

Бына әле бөгөн дә Күсимовтың үҙенең элекке тотанаҡһыҙ ҡыланышына кире ҡайтыуына, ике һүҙҙең берендә һүгенеүенә иғтибар иткән Сәғит Әлибаевтың кәйефе ҡырылды.

«Барлыҡ тырышлығым юҡҡа сыҡҡан! Полк командирының солдафонлығын ташлатыуы был юлы ла миңә еңел булмаясаҡ», — тип уйлап, ул һораны:

— Таһир Таипович, бөгөнгө төндө ҡайҙа уҙғарырға теләйһең?

— Һинең фатирыңда урын табылырмы?

— Табылыр, — тип Әлибаев Күсимовты үҙ фатирына алып ҡайтты.

Иртәгеһе көндө ҡабаттан полк штабына барғас, контузия алыуҙан бик ныҡ ыҙаланған гвардия подполковнигы Фондеранцевтың госпиталгә оҙатылыуы, 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһына командир итеп Шайморатовтың элекке урынбаҫары вазифаһын башҡарған гвардия полковнигы Беловтың тәғәйенләнеүе тураһында корпус штабынан хәбәр алынды.

— Шайморатов менән бергә хеҙмәт иткәндәге тәртипкә күнеккән Белов дивизия командиры булғас, моғайын, эштәр насар булмаҫ. Брянск һәм Воронеж фронттарындағы үтә ҡатмарлы, яуаплы һуғыштарҙа дивизия командирының урынбаҫары Белов үҙен яҡшы яҡтан танытты.

— Миңлеғәле Минһажетдинович полковник Беловты гел яҡшы яҡтан телгә ала торғайны, — тине Әлибаев.

Күсимов яңы дивизия командиры менән дуҫ икәнлеген әйтте.

— Миңә ул Гриша, уның өсөн мин Таһир!

— Хәҙер, дивизия командиры булғас, уның менән субординацияны һаҡларға тура киләсәк!

Күсимов, ризалашмайынса, ҡупырынды:

— Ул минең өсөн әүәлгесә Гриша! Дивизия командиры булып тәғәйенләнеүе менән ҡотлайым әле үҙен!

— Ҡәрәкмәй, Таһир Таипович, улай килешмәҫ, — тине Әлибаев, Күсимовты тыйып. — Бергә осрашҡанда ҡотларға ла өлгөрөрһөң!

— Гриша Белов минең дуҫ икәнлеген нисек аңларға теләмәйһең, Сәғит Рәхмәтович? Уға «һин» тип кенә өндәшергә күнеккәнмен!

— Элгәре шулай яраған, хәҙер ярамай, Таһир Таипович! Һин, кадровый офицер, был хаҡта миңә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белергә тейешһең. Нисек кенә дуҫ булһағыҙ ҙа, дивизия командиры менән полк командиры араһындағы дәрәжә айырмаһы һаҡланыуы мөһим!

— Һин мине йәнә политграмотаға өйрәтәһең, — тип асыуланды Күсимов.

— Өйрәтмәйем... Мин былай, иптәштәрсә генә әйтәм.

— Мине тәрбиәләргә маташыуыңмы был, Сәғит Рәхмәтович?

— Ярай, Таһир Таипович, әләйһә, һиңә бер миҫал килтерәм, — тине Әлибаев, полк командирының зитына теймәҫкә тырышып. — Дәрәжәһе яғынан түбән эскадрон командиры һинең менән тиң булып ҡыланырға маташһа, оҡшатыр инеңме?

— Полк командиры менән эскадрон командирын ниңә сағыштыраһың? — Күсимов Әлибаевҡа аҡайып ҡараны.

— Дивизия командиры менән полк командиры һымаҡ түгелме ни бында ла дәрәжә айырмаһы?

Әлибаевҡа нисек итеп яуап ҡайтарырға белмәгән Күсимов тик-томалға асыуы ҡабарып екеренде-екеренде лә штабтан сығып китте.

Ярһыуы баҫылып кире ингәс, араларында бер ниндәй ҙә аңлашылмаусылыҡ булмағандай, үтә ҡайтымһаҡланып, Күсимов һаһылдап көлдө.

— Ярар, бөттө, асыуланышмайыҡ!..

Аҙна-ун көн самаһы ваҡыт уҙғас, бер төркөм офицерҙарҙы эйәрткән полк штабы начальнигы килеп инде һәм Күсимовҡа мөрәжәғәт итте:

— Иптәш подполковник, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Усманов иптәш етәкселегендәге бер төркөм башҡорт яҙыусылары, артистар һәм республиканың төрлө ойошма вәкилдәре беҙгә ҡунаҡҡа килеүҙәре хаҡында дивизия штабынан хәбәр иттеләр!

— Ҡунаҡтар ҡайҙа туҡталған? — Күсимов йөрәкһенә.

— Ҡунаҡтарҙың ҡайҙа туҡталыры әлегә асыҡланмаған.

Күсимов, күмәк офицерҙар алдында дуҫлыҡ мөнәсәбәтен белгертмәҫкә тырышып, үҙенең политик эш буйынса урынбаҫарына бойорҙо:

— Гвардия майоры Әлибаев, Башҡортостандан килеп етәсәк ҡунаҡтарҙы ҡаршылауҙы ойоштororға!

Сәғит Әлибаев, шпорлы итек үксәләрен бер-береһенә зыңҡылдата һуғып, полк командирына честь бирҙе:

— Тыңлайым, иптәш гвардия подполковнигы!

— Әлегә мин «гвардия» түгел, отставить!

— Есть отставить, — тип ҡабатланы ла Әлибаев полк командиры ҡушҡанды йәһәтерәк эшләргә ашыҡты. Ләкин Башҡортостан хеҙмәтсәндәре делегацияһын икенсе, өсөнсө көн көтөүҙәре лә бушҡа ғына булды.

## II

Башҡортостан ҡунаҡтарының дивизияны таба алмай ҡайҙалыр аҙашып йөрөүе асыҡланғас, гвардия полковнигы Беловтың ҡушыуы буйынса, бер төркөм һыбайлы офицерҙарҙы эйәрткән Күсимов юлға сыҡты.

Эңер төшөрҙән алда ғына Северский Донец йылғаһына етеп, шул тирәлә тупланған армия штабы ярҙамында ҡунаҡтарҙың ҡайҙа икәнлеге асыҡланды, һәм Күсимов командалығындағы төркөм уларҙы эҙләп тапты.

Делегация етәксеһе Усманов, дивизия вәкилдәре менән осрашҡас, ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе:

— Үҙегеҙ килеп, яҡшы иттегеҙ бит әле, егеттәр! Һеҙҙең дивизия ҡайҙа икәнлеген был тирәлә бер кем белмәй!..

— Донец буйындағы армия штабына мөрәжәғәт итһәгеҙ, моғайын, беҙҙе эҙләп ыҙаланырға тура килмәҫ ине, — тине Күсимов.

— Ярар инде, ул-был эштәрҙе рәтләйек тә дивизияға табан ҡуҙғалайыҡ!

— Бынан йәһәт кенә ҡуҙғалып булмаҫ, Әбүбәкер Нуриянович! Донец аша һалынған күпер емерек бит!

— Былай булғас, ҡалайтырға беҙгә?

— Армия штабында йылға аша понтон күпер һалырға вәғәҙә бирҙеләр. Шул күпер һалынып бөтмәйенсә, ауыр йөк тейәлгән составты икенсе ярға сығарыуы мөмкин түгел.

Күсимов шулай тигәс, делегация вәкилдәре, ваҡытты бушҡа уҙғарырға теләмәйенсә, Сталинградты барып күрергә теләк белдерҙе.

Икенсе көндө фронт командующийы рөхсәте менән бирелгән йөк машинаһына тейәлеп, бер төркөм артистар

менән яҙыусылар илле-алтмыш километр самаһы алыҫлыҡтағы Сталинградҡа юлланды.

Иптәштәренә һырығып ултырған йырсы Хәбир Ғәлимов, тирә-яҡты иғтибар менән ҡарап барышлай, машина ҡуҙғалырҙан алда Күсимов әйткән һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө. Ул, артистар менән Сталинград ҡалаһын күрергә бара алмауына үкенес белдергәс, бышылдап ҡына:

— Хәбир ағай, минең хаҡта кешеләргә яман һүҙ һөйләп ҡуйма, — тигәйне.

Бындай мәҙәк һөйләшеү Ғәлимовтың күңелендә шик тыуҙырҙы. Өфөләге бәйһеҙ ҡыланышы өсөн борсола микән әллә Күсимов? Башҡа сәбәптең булыуы мөмкин түгел! Әһә, хәҙер иҫенә төштө. Ватан һуғышының беренсе көндәренән үк ауыл хеҙмәтсәндәре һәм фронтҡа китәсәк кешеләр алдында концерттар менән сығыш яһаған Хәбиргә төрлө хужалыҡтарҙа, хәрби подразделениеларҙа, Өфөләге госпиталдәрҙә лә бик йыш булырға тура килде. Ауыр яралы айырым фронтовиктар өсөн боронғо башҡорт көйҙәрен уларҙың палаталарында йәки карауаттары эргәһендә тороп ихлас, һәр кеше йөрәгенә үтеп инерҙәй итеп башҡарырға тырышты ул. Ленин урамындағы госпиталдә [1] дауаланыусылар янына ла уға бик йыш барырға тура килде. Һуңғы мәртәбә унда концерт менән сығыш яһаған сағында, медицина работниктары араһында ығы-зығы ҡупты. Күңел биреп йыр тыңлаусы яралылар ҙа, ҡапыл йөрәкһенеп, урындарында борғаланды:

— Медсестралар ниңә шулай йүгерешә?

— Госпиталдә дауаланған бер офицер икенсе ҡаттан һикергән, ти!

— Имгәнеп үлергә теләгәнме икән?

— Бер бисә эргәһенә ҡасып барырға теләгән, ти!

— Бисә эргәһенә барырға булғас, ниңә ишектән сыҡмаған?

— Врач рөхсәт итмәгән, ти.

— Үәт дыуамал әҙәм! Имгәнмәгәнме икән?

— Гипсҡа һалынған аяғының яраһы ҡуҙғалған, ти...

Госпиталдә дауаланыусылар, икенсе ҡаттан һикергән офицер иҫән-һау икәнлеген белгәс, көлөшә-көлөшә, йырсы Хәбир Ғәлимовтан ғәфү үтенеп, бүленгән концертты дауам итеүен һорағайны.

Концерт тамамланып, ҡайтып китергә йыйналғанда ғына, Хәбир госпиталдең икенсе ҡатынан һикереүсе офицерҙың Күсимов икәнлеген белде, ә бер ай уҙғас, уның үҙе менән яҡындан танышты. Башҡорт кавалерия дивизия-

---

[1] Ул йортта хәҙер медицина институты.

һына кешеләр йыйыу өсөн Башҡортостанға ҡайтҡан Нәзиров Мөбәрәк икенсе тапҡыр фронтҡа китерҙән алда хушлашыу кисәһенә башҡалар менән бергә Хәбир Ғәлимовты ла саҡырғайны. Шул мәжлестә ҡатнашҡан Таһир Күсимов ҡыҙмасаланып алғас, үҙен үтә иркен тотто, тәкәббер ҡыланды, бер кемде лә һанға һуҡманы. Ҡурай моңона ҡушылып боронғо көйҙәрҙе башҡарған Хәбир Ғәлимовты тыңларға теләмәйенсә: «Етте һиңә, етте! Хәҙер мине, фронтовикты, тыңла!» — тип ҡарлыҡҡан тауыш менән «Сибай»ҙы һуҙҙы. Ләкин ул йырҙың беренсе куплетын йырларға ла өлгөрмәне, ҡапыл бүленеп, ишек тәңгәлендәге йәп-йәш һылыу ҡатынға күҙҙәрен майландырып ҡараны.

— Эвакуацияланып килгән һылыуҡаймы? — тип һораны ла эштән арып-талып фатирына ҡайтҡан йәш ҡатынды араҡы менән һыйларға тотондо.

Мәжлестең иң ҡыҙған мәлендә Таһир Күсимов иҙән уртаһына сығып баҫты.

— Ашанығыҙ-эстегеҙ, хәҙер өйҙәрегеҙгә таралышығыҙ!

Мәжлестә ҡатнашыусылар ризаһыҙлыҡ белдереп шаулашты:

— Фронтҡа китәсәк кешеләр менән һаубуллашыу кисәһенә йыйналғас, ниңә ҡабаланырға беҙгә?!

— Былдай күңел асыу йәнә ҡасан тейә?

— Күптәребеҙ менән һуңғы мәртәбә ултырабыҙҙыр, бәлки!..

Күсимов ярһыны. Ап-аруҡ иҫерергә өлгөргән йәш ҡатынды ҡыҫып ҡосаҡланы ла, сабырһыҙланып ажғырҙы:

— Башҡа бергә ултырырға тура килмәһә, война все спишет!

— Таһир, улай ҡыланыу килешмәҫ,— тип Нәзиров шелтәләгәс, Күсимов оторо ҡоторондо.

— Комиссарҙарса ҡыланышыңды ташла, Мөбәрәк! Фронтта саҡта аҡыл өйрәтеүең дә еткән! Хәҙер бойорам: бөтәгеҙ ҙә бынан сығып тайығыҙ, — тип ҡыуа башлағас, мәжлестә ҡатнашыусылар йәһәтерәк китеп ҡотолорға тырышты.

Таһирҙың әҙәпһеҙ ҡыланышына рәнйеп ҡайтҡан Хәбир Ғәлимов төнө буйы йоҡлай алмайынса уйланып ятты: «Был тиклем дә дыуамал, тотанаҡһыҙ әҙәм булыр икән! Уның ҡолҡо һуғышта саҡта шулай боҙолдомо икән?..»

Һорауына яуап таба алмаған Хәбир иртәгеһе көндө филармонияға эшкә китеп бара ине, бите, танауы, маңлайы ҡара ҡанға уҡмашып ҡатҡан Күсимовты осратып, ғәжәпкә ҡалды.

— Нимә булды, Таһир?

— Ә-эй, һорама инде... Ҡисәге мәжлестә йәш ҡатын һыҙыра тырнаны, — тип Ҡусимов һаһылдап көлдө. — Икебеҙ генә аулаҡта ҡалғас, миңә буйһонорға теләмәйенсә, аҡылдан шашҡан бесәй шикелле ҡоторондо! Бына, күрәһең бит, тырнамаған, тешләмәгән имен еремде ҡалдырманы, яуыз бисә!

— Теләгеңә ирештеңме?

— Ирешерһең! Үҙемде бысаҡ менән сәнсеп үлтерәә яҙҙы, саҡ ҡасып ҡотолдом!..

«Һиңә лә бирешмәгәс, намыҫлы, үҙен-үҙе яҡларҙай маладис ҡатын икән!» — тип уйланы Хәбир Ғәлимов, эстән генә ҡыуанып.

— Әле ҡайҙа бараһың?

— Балнисҡа!

— Битең ошолай сапсылған көйө дивизиялағы егеттәргә нисек күренәһең инде?

— Унда барғанға саҡлы уңалыр әле. Уңалмаһа, война все спишет!..

Уйҙарынан бүленгән Ғәлимов киң юлдан ситкә ҡайрылып туҡталған машина эргәһенән бер-бер артлы үтеп барған дошман һалдаттары колоннаһына иғтибар итте.

— Сталинградтағы һуғыш бөтөүгә ҡарамаҫтан, пленныйҙар һаман да бөтмәгән!

— Былары ҡала урамдарындағы яралы немец һалдаттары менән үлектәрҙе йыйып алыу өсөн ҡалдырылғандары, — тип аңлатты ҡунаҡтарҙы оҙатып йөрөргә тәғәйенләнгән капитан.

Өҫтәренә юрған, шәл, сепрәк-сапраҡ ябынып, аяҡтарына һалам урап бәйләгән, һаҡал-мыйыҡлы, үтә йонсоу, ябыҡ, кешелек ҡиәфәтен юғалтҡан маҡтансыҡ гитлерсыларҙың шөкәтһеҙ колоннаһын күҙәткән Зәйтүнә Бикбулатова көрһөндө.

— Бына кемдәр килтерҙе беҙҙең илгә ҡайғы-хәсрәт!

— Ошолайтып йөрөткәнсе, уларҙы ниңә дөмөктөрмәйҙәр икән, — тине Арыҫлан Мөбәрәков, нәфрәтләнеп.

Пленға алынған дошман һалдаттарына мәрхәмәтлек күрһәтергә тигән махсус бойороҡ барлығы хаҡында капитан әйткәс, артистар шаулашты:

— Улар совет халҡын йәлләмәгәнде, ниңә уларҙы йәлләргә?

— Рәшит Ниғмәтиҙең: «Үлтер, улым, фашисты!» тип яугирҙарҙы өндәүе бушҡамы ни хәҙер?..

Ҡапитан яуап ҡайтарманы.

Дошман һалдаттары колоннаһы уҙғас, автомашина юлын дауам итте. Юлдың буйынан буйына һуҙылған ҡарҙар өйөмө менән бергә буталған төрлө һуғыш ҡорамал-

дары, артиллерия-минометтар ҡалдығы, яндырылған танкыларҙың дөм ҡара һөлдәләре эргәһендә тырым-тырағай ятҡан мәйет күбәйҙе, сыра шикелле телгеләнгән ағастар ҙа йышыраҡ осраны...

Ҡарҙарҙы тирә-яҡҡа тәгәрмәстәре аҫтынан һирпеп, шыңшый-шыңшый барған йөк машинаһы әле уңға, әле һулға сайҡалды. Тотошлай емерек ҡала урамы уртаһына еткәс, ул, тиҙлеген кәметеп, «Ҡорбан булғандар» исеме менән йөрөтөлгән майҙан эргәһендәге өҫкө ике ҡаты емерек универмаг бинаһы ҡаршыһында туҡталды.

— Гитлерсы фельдмаршал Паулюстың штабы ошо универмагтың подвалында урынлашҡайны, — тине капитан.

Ҡар аҫтынан ҡаҙып алып төрлө ерҙә мәйеттәрҙе әрҙәнә шикелле өйгән пленныйҙарҙың көс-хәлгә ҡыймылдауҙарын, анда-бында аунап ятҡан аяҡ-ҡулдарҙы, ҡыйратылған бик күп һуғыш ҡоралдарын күреп ҡоттары алынырҙай хәлгә еткән артистар, капитанға эйәреп, универмагка табан ыңғайланы.

Тәҙрәләре ҡом тултырылған тоҡтар менән ҡапланған ҡараңғы, һаҫыҡ еҫе һаман да елләтелмәгән дымлы баҙға шәм яҡтыртып төшкәс, ошонда фельдмаршал Паулюсты пленға алыуҙа үҙенең дә туранан-тура ҡатнашлығы булыуын әйтеп, артистарҙы оҙатып йөрөүсе капитан немецтарҙың генералдары ҡайҙа, ниндәй ерҙә урынлашыуын күрһәтте һәм көн яҡтыһы түшәм тәңгәлендәге тәҙрәнән генә төшкән ҙур, иркен бүлмәгә алып инде.

— Паулюс йәшәгән ошо бүлмәне иң беренсе булып мин таптым! — тине ул ғорурлыҡ менән. — Сталинградтағы гитлерсыларҙың капитуляцияһын ойошторған 64-се армия штабы начальнигы генерал Ласкиндың бойороғо буйынса, фельдмаршал Паулюс йәшәгән урынды миңә бик оҙаҡ эҙләргә тура килде. Уның ҡайҙа икәнлеген асыҡлағас, бүлмәһенә аҫтан ҡаҙылған траншея арҡылы индем. Паулюс карауатынан торорға теләмәне. Тик ята. Һеҙгә буйһонмайым, минең дәрәжәләге кеше кәрәк, ти. Бик аптырағас, подвалдағы тәҙрә аша сығарып, ике һалдатты үҙебеҙҙең штаб начальнигына ебәрҙем. Генерал Ласкин бик тиҙ килеп етте. Ул фельдмаршалға кейенергә һәм Мәскәүгә китергә йыйналырға ҡушты. Паулюс өҫтәлдәге самауырҙы үҙе менән алырға рөхсәт һораны. Беҙҙең генерал ҡаршы булманы. Ул стеналағы картаны ла ҡалдырмайынса, Мәскәүгә алып барырга бойорҙо.

— Аҙағы нисек бөттө? — тип һораны Хәбир Ғәлимов.

— Уның аҙағы билдәле инде, — тип капитан яурынын йыйырҙы. — Беҙҙең генерал, фельдмаршалды үҙенең «эмка»һында ултыртып, 64-се армия штабына алып китте.

Бер тәүлек уҙғас, икенсе февралдә, Сталинградтағы һуғыш тулыһынса тамамланды. Дон фронтында гитлерсыларҙың туҡһан мең һалдат һәм офицеры, егерме дүрт генералы пленға алынды.

— Беҙҙең делегация башлығы менән һөйләшкән кеше армия штабы начальнигы Ласкин түгелме?

— Әйе, ул 64-се армия штабы начальнигы генерал Ласкин ине, — тип дөрөҫләне капитан. — Ул, һеҙҙең делегация хаҡында ишеткәс, бик шатланған. Сөнки генерал Ласкин Башҡортостандың Йәрмәкәй районында, Васильевка тигән бер ауылда тыуып үҫкән, ти.

Паулюсты пленға алыусы генерал Ласкиндың яҡташ икәнлеген белгәс, артистарҙың күңеле күтәрелде.

## III

Артистар Сталинградтан әйләнеп ҡайтыуға понтон күпер һалынып бөткәйне. Күстәнәстәр тейәлгән йөктәрҙе йылғаның икенсе ярына сығарыу менән, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре делегацияһы артабан ыңғайланы.

Ворошиловград ҡалаһында уларҙы 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы яугирҙары йыр-моң менән, алҡышлап ҡаршыланы.

Осрашҡан урында уҙғарылған митингыла ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Усманов башҡорт халҡы исеменән яҙылған хатты һуғышсыларға уҡып ишеттерҙе:

*«Башҡорт халҡының яратҡан улдары, Салауат батырҙың ҡыйыу ейәндәре!*

*Ҡайҙа ғына йөрөһәгеҙ ҙә, беҙҙең хатты тыңлағыҙ! Йөрәктәребеҙҙән урғылып сыҡҡан ҡайнар сәләмдәребеҙ менән һеҙгә мөрәжәғәт итәбеҙ һәм Ватан-әсәбеҙҙең намыҫы һәм ирке өсөн артабан да ҡыйыу һуғышырға һеҙгә фатиха бирәбеҙ.*

*Уралдың ғорур улдары!*

*...Һеҙ беҙҙең ышанысыбыҙҙы аҡланығыҙ... Киләһе быуын кешеләре һеҙҙең батырлыҡтарығыҙҙы данлап йырлаясаҡ, легендалар сығарасаҡ...*

*Бер-беребеҙҙе меңәр километр алыҫлыҡтағы ер айыра, ләкин беҙ һәр саҡ һеҙҙең менән. Беҙҙең уй-тойғоларыбыҙ, теләктәребеҙ берҙәм, изге маҡсатыбыҙ ҙа бер: ҡырағай фашист ордаларын ҡыйратыу, өйҙәребеҙгә татыулыҡ һәм тыныслыҡтың кире ҡайтыуын тиҙләтеү.*

*...Бөйөк Совет илендәге халыҡтарҙың үҙ-ара талашасағына, бер-береһенә ышанмаясағына һәм ыҙғышасағына иҫәп тотто дошман. Ләкин ул яман яңылышты.*

*Советтар Союзы халҡының бөйөк дуҫлығы бер ҡасан да ҡаҡшамаясаҡ. Уралдың ташлы ҡаяларынан да ныҡыраҡ ул...*

*Илебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғона һәм иркенә һонолған килмешәк илбаҫарҙары менән беренсе тапҡыр ғына алышмай һуғышсан башҡорт халҡы.*

*Халҡыбыҙҙың «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тигән тел хикәйәһен бала саҡтан уҡ ишеткәнһегеҙ. Батырҙарҙы яуға оҙатҡанда бик боронғо ҡарт Хабрау йырлаған йырҙы иҫләгеҙ. Тыңлағыҙ, егеттәр, фәһемле һүҙҙәрҙе:*

Бейек тау үлә,
Һоро томан уны ҡаплаһа...»

Рус ғәскәре сафындағы башҡорт һыбайлыларының 1760 йылда Пруссияның баш ҡалаһы Берлинға нисек барып инеүен, 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттарҙың французлар менән алышыуын, Париж урамдарынан казактар менән бергә уҙыуын, Ҡырым-Төрөк һәм граждандар һуғышы йылдарындағы батырлыҡтарын сағылдырған хатты делегация башлығы ҡысҡырып уҡыған ваҡытта шып-шым ғына торған ир-егеттәрҙең күҙҙәре осҡондар сәсеп баҙлаған һымаҡ күренде Сәғит Әлибаевҡа.

Усманов, күкрәк тултырып һулағандан һуң, артабан уҡыны:

*«Һеҙҙе үҫтергән халыҡтың намыҫына тап төшөрмәнегеҙ, сал сәсле ата һәм әсәгеҙ йөҙөн ҡыҙартманығыҙ. Һеҙгә, ыласындар, бөтә йөрәктән әйтәбеҙ: «Рәхмәт!»*

Йылы, йән кинәндергес һүҙҙәрҙе ихлас тыңлаған һыбайлылар алҡышланып ҡул сапты, ә бәғзеләре сәмләшеп ҡысҡырҙы:

— Был хатҡа яуап итеп, фашистарҙы тағы ла ҡыйыуыраҡ туҡмарға ант итәбеҙ!

— Халҡыбыҙҙың ышанысын киләсәктә лә намыҫ менән аҡлаясаҡбыҙ!..

Шау-шыуҙан һуң, йәнә тынлыҡ урынлашты. Яугирҙарҙың иғтибары хатты уҡыусыға йүнәлде:

*«Ҡырағайҙар беҙҙе ҡырағайлыҡта ғәйепләй. Беҙҙең егеттәр түгел, ә улар, талауға һәм ҡанға ҡаныҡмаған кеше ашаусы гитлерсылар, — ысын ҡырағайҙар. Ләкин башҡорт яугирҙарының ҡурҡыу белмәүе — хаҡ. Меңләгән фрицтар, емтек шикелле, ерҙә ятып серей. Уларҙы аяуһыҙ ҡырыусы ҡыйыу һуғышсыларыбыҙ Миңлеғәле Шайморатов, Таһир Күсимов, Ғәли Нафиков...»*

Һаналған исемдәр араһында үҙенекен дә ишеткәс, Сәғит Әлибаевтың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ту-

ған халҡы онотмай, исемен маҡтап телгә ала икән, ул үлемһеҙ!

Башҡорт кавалерия дивизияһының гвардия байрағына лайыҡ булыуы, лейтенант Атаев командалығындағы утыҙ гвардеецтың һәм бик күп ир-егеттең батырлығы хаҡындағы ялҡынлы һүҙҙәрҙе диҡҡәт менән тыңлаған Сәғит Әлибаев, ғорурлыҡ тойғоһон күңеленә һыйҙыра алмайынса, эргәһендә тороусыларға һиҙҙермәй генә ҡараны. Яуҙаштарының да үтә иғтибарлы, уйсан, ғорур йөҙөн күргәс, ул бер аҙ тынысланды. Тимәк, башҡорт халҡы хаты бер кемде лә ғәмһеҙ ҡалдырмаған, яугирҙарҙың һәр ҡайһыныһы йөрәгенә үтеп ингән!..

*«Туғандарыбыҙ беҙҙең, белегеҙ! — тип хат уҡыуҙы дауам итте делегация етәксеһе Усманов. — Дошмандың дөмөгөүен һәм уның ҡоллоғонан Ватаныбыҙҙы азат итеүҙе тиҙләтеү өсөн, башҡорт халҡы барлыҡ ҡыйынлыҡтарҙы һәм ыҙаланыуҙарҙы кисерергә әҙер. Ишембай һәм Туймазы нефтселәре, Белорет сталеварҙары, Баймаҡ таусылары, Башҡортостандың баш ҡалаһы — Өфө һәм бүтән ҡалаларҙағы завод-фабрик эшселәре, һөжүм итеүсе Ҡыҙыл Армияға ярҙам ойоштороп, фронтҡа күберәк яғыулыҡ һәм металл, ҡорал һәм боеприпастар биреү өсөн арыу-талыуҙы белмәй эшләйҙәр.*

*Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яңы гигант заводтар төҙөлдө. Тыныс ваҡытта ике-өс йылда ҡоролған заводтар хәҙер ике-өс ай эсендә сафҡа индерелә...*

*Һөйгән улдарыбыҙ, быйыл мул иген үҫтерергә, Уралдағы рудаларҙы күпләп табырға, Туймазы һәм Ишембай бырауылау скважиналарында нефть сығарыуҙы ҡырҡа арттырырға, Ҡыҙыл Армияны ҡорал һәм боеприпастар менән өҙлөкһөҙ тәьмин итергә һүҙ бирәбеҙ. Һеҙ бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйәсәкһегеҙ. Шағир Рәшит Ниғмәтиҙең һүҙҙәре менән һеҙгә әйтәбеҙ, батыр егеттәр:*

Әгәр ҡылысың үтмәҫләнһә,
Икенсеһен һиңә бирермен...

*Башҡортостан яугирҙары!*

*Бөйөк Ватан һуғышының иң мөһим мәле етте. Батыр Ҡыҙыл Армияның юлбаҫар фашист ордалары һырт һөйәген һындырыр һәм Ватаныбыҙҙы дошман ҡоллоғонан тулыһынса азат итер сәғәте яҡынлаша. Батыр егеттәр, ... ҡылыстарығыҙ менән дошмандың ҡара ҡанын ағыҙып, нәфрәтегеҙҙе ҡандырығыҙ. Һеҙ атҡан һәр пуля дошман тәненә ҡаҙалһын. Уларҙы ҡырағай йыртҡыстар кеүек итеп ҡырығыҙ. Халыҡтың асыулы ярһыуын улар үҙ тәндәрендә*

*татыһын. Аҡтыҡ тын алғанда: «Кем ел сәсһә, ул дауылға ҡаҙаныр!» тигән мәҡәлде иҫләһен.*

*Немец илбаҫарҙарына үлем!*

*Дошманға табан алға, ғәйрәтле егеттәр, еңеү һәм дан ҡаршылап — алға!*

*Йәшәһен героик Ҡыҙыл Армия!»*

Башҡорт халҡы хатына яуап һүҙе менән һуғышсылар исеменән сығыш яһаған 16-сы гвардия дивизияһының политбүлек начальнигы Покровскийҙан һуң артиллерист Әхмәров, пулеметсылар взводы командиры лейтенант Дәүләтов, сержант Миңлеғолов, рядовой Дауытов һүҙ алды, һәм уларҙан аҙаҡ дивизия яугирҙары исеменән яҙылған хат уҡылды:

«Ҡәҙерле атайҙар, әсәйҙәр, ҡатындар, балалар, ҡустылар һәм һеңлеләр, совет ере фашист илбаҫарҙарынан тулыһынса таҙартылмайынса ҡорал һалмаҫҡа ант итәбеҙ. Ата-олатайҙарыбыҙ шикелле, беҙ ҙә ныҡышмалы, тотороҡло, фиҙәкәр һәм батыр булырға ант итәбеҙ. Арабыҙҙа ҡыйыуҙар, мәргән снайперҙар, пулеметсылар күп... Үҙебеҙҙең бурысыбыҙҙы һәм халыҡ наказын үтәйәсәгебеҙгә ышанығыҙ».

Митинг тамамланыу менән, Башҡортостандан ҡунаҡтар алып килгән аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һәм бик күп төрлө бүләк-күстәнәстәр яугирҙарға таратылды.

Иртәгеһе көндө Ворошиловград ҡалаһы уртаһындағы культура һарайының оло залына яугирҙар йыйналды.

Башҡортостан делегацияһы исеменән ҡыҫҡаса сығыш яһаған ВКП(б) өлкә комитеты секретары Усманов трибунанан төшкәс, ҡапыл ут һүнде. Стенаның буйынан буйына һуҙылған киң экранда эре хәрефтәр менән яҙылған һүҙҙәр күренде: «Бөйөк Ватан һуғышы».

Совет халҡының батырлыҡтарына арналған кино башланыу менән, бөтә донъяны дөм ҡараңғы төн шикелле ҡуйы төтөн томаланы һәм йән тетрәткес йыр яңғыраны:

Вставай, страна огромная,  
Вставай на смертный бой  
С фашистской силой темною,  
С проклятою ордой!

Ошо минуттағы тып-тын залға һуғыш үҙе килеп ингән һымаҡ тойолдо Сәғит Әлибаевҡа. Бәғзе берәүҙәр, музыка яңғырағанда дер ҡалтыранып, атакаға ташланырға әҙерләнгәндәй, тирә-яғына һағайыулы ҡарана-ҡарана, урындарынан һикерешеп торҙо... Ләкин бөтә яугирҙар ҙа күтәре-

ләргә өлгөрмәне, яуыз дошманға ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә, уны ҡыйратырға, еңергә өндәгән талапсан йыр баҫылғас та, экранға «Салауат Юлаев» килеп сыҡты. Ҡешеләрҙең йөҙө үҙгәрҙе. Улар, ҡапыл тынысланып, бер-береһенә ҡарап йылмайҙы.

Төп ролде Арыҫлан Мөбәрәков башҡарған, бөтә илгә киң билдәле кинофильмдан айырым өҙөктәр күрһәтелгәндән һуң, залда: «Мөбәрәков маладис, маладис!» тип ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелде һәм Башҡортостан артистарының концерты башланыуы хаҡында иғлан ителде. Артабан алҡышлап ҡул сабыуҙар саҡ ҡына ла баҫылманы.

Бер-бер артлы сәхнәгә сыҡҡан шағирҙарҙың шиғыр уҡыуы, йырсыларҙың йыр-моңо, бейеүселәрҙең оҫта бейеүе һәр һуғышсының күңелен арбаны, дошманды еңеүгә рухландырҙы.

Ҡисер, иптәш!
Шиғыр итеп яҙҙым
Һинең кәләшеңдең хаттарын.
Бәлки, уҡып,
        һинең менән бергә
Фронтташ иптәшең дә шатланыр.
Иптәштәреңдең дә ҡалғандарҙыр
Кәләштәре, һөйгән ҡыҙҙары.
Бәлки, уларҙы ла шатландырыр
Һинең кәләшеңдең йырҙары, —

тип Рәшит Ниғмәтиҙең «Һинең кәләшеңдең хаттары» исемле поэмаһын уҡыған Зәйтүнә Бикбулатова артынса сәхнәгә атылып сыҡҡан Мөхәммәт Иҙрисов өтә баҫып бейергә тотондо. Залдағылар, тыныс ултыра алмайынса, аяҡтарын тыпырлата-тыпырлата, сәмләнеп ҡысҡырышты:

— Әх, ойота бит, суҡынғыры!

— Аяҡтарын ҡайһылай килештереп баҫа!..

Урынында бер туҡтауһыҙ борғаланған Таһир Күсимов та, бейеүсе менән ләззәтләнеүен белгертергә теләп, Әлибаевтың ҡабырғаһын тызыны.

— Ҡара әле, Сәғит, ҡара! Иҙрисов ҡайһылай шәп бейей!

— Күрәм, — тине Әлибаев, Күсимовтың ҡамасаулауына ризаһыҙланып.

Иҙрисовтан һуң сәхнәгә Хәбир Ғәлимов сыҡты. Ул башҡарған боронғо йырҙар Сәғит Рәхмәтовичтың күҙ алдына алыҫ үткәндәрҙе, тыуған төйәген һәм һоҡландырғыс Урал тәбиғәтен килтереп баҫтырҙы. Ил өсөн һәләк булған Миңлеғәле Шайморатов, Ғәли Нафиҡов, Байғужа Сәйет-

ғәлин кеүек бик күп ҡыйыу ир-егеттәрҙең ошо матурлыҡты бер ҡасан да күрә алмаясағын иҫенә төшөрөп, эсе бошто.

Фәйзи Ғәскәров тарафынан сәхнәләштерелгән «Өс таған»[1] бейеүен башҡарған һуғышсылар сәхнәгә сыҡҡас, Күсимовтың да бойоҡ йөҙө ҡабаттан яҡтырҙы.

— Һа-аай, беҙҙең һыбайлылар ҙа ысын артистарҙан кәм бейемәй бит!

Полк командирының тулҡынланыуы залдағы бүтән тамашасыларға ла күсте. Ағалы-энеле булып ҡыланған бейеүселәрҙең зирәклегенә, оҫта шаярыуҙарына, бер-береһен мәрәкәләшеүҙәренә һындары ҡатып көлә-көлә, улар алҡышлап ҡул сапты.

Башҡорт драма артистары тарафынан спектаклдә тыуҙырылған сағыу, фәһемле образдар, авторҙары уҡыған шиғыр-хикәйәләр, йыр-моң, бейеү — барыһы-барыһы ла ир-егеттәрҙең иҫендә мәңге һаҡланырҙай итеп башҡарылды. Сәғит Әлибаев милли культура кимәленең үҫеүе менән ғорурланды.

Концерт аҙағында ҡунаҡтар барыһы ла сәхнәгә сығып баҫҡас, яугирҙар урындарынан торҙо һәм оҙаҡ ҡул сапты.

Осрашыу бының менән генә бөтмәне. Аҙна-ун көн буйы подразделениенан подразделениеға, госпиталдән госпиталгә йөрөп, артистар менән әҙиптәр яугирҙарҙы хеҙмәтләндерҙе. Уларҙың һәр сығышы ихлас, ир-егеттәрҙе гитлерсыларға ҡаршы көрәшергә һәм яңынан-яңы еңеүҙәргә рухландырырҙай итеп башҡарылды.

Яҙғы көндәрҙә тирә-яҡ ала-солаға әйләнеп, юлдар боҙолдо. Башҡортостан ҡунаҡтары шунда ла бойоҡманы. Ватанды азат итеүсе яугирҙарҙың тормошон, көнкүрешен саҡ ҡына булһа ла сәнғәт һөнәре ярҙамында йәнләндерергә, кәйефен күтәрергә, дошманға ҡаршы һуғышырҙай дәрт һәм сәм өҫтәргә тырышып, улар нык иҙелгән юлда бата-сума подразделениеларға төнөн-көнөн йөрөүҙе дауам итте.

Тәрән үҙән буйындағы ауыл мәктәбендә яңыраҡ ойошторолған госпиталдә дауаланған ҡаты яралы фронтовиктар өсөн концертты палаталарҙа айырым-айырым бирергә тура килде.

Ҡараңғы коридор осондағы ҡыҫыҡ бүлмәлә япа-яңғыҙы ятҡан үтә ауыр хәлдәге танкист, артистарға иғтибар итмәйенсә, тәне һыҙланыуынан тештәрен шығырлата ҡы-

---

[1] «Өс таған» бейеүен, ниңәлер, хәҙер «Өс туған» тип үҙгәртеп йөрөтәләр.

çып ыңғыраша-ыңғыраша, йоҡо аралаш бер үк һүҙҙе саф башҡортса бер туҡтауһыҙ ҡабатланы:

— Әсәй!.. Әсәкәйем!..

Артистарҙы палатанан-палатаға оҙатып йөрөгән медицина сестраһы ауыр һуланы.

— Танкист бик ныҡ интегә!.. Яңыраҡ йоҡлап китте, ә үҙе төш аралаш һаташа. Ул бер ай самаһы иҫһеҙ ятты...

Маңлайы, башы, үңәсе, ҡулдары марля менән уралған танкисҡа текләп ҡараған Арыҫлан Мөбәрәков:

— Уның тәне снаряд ярсыҡтары менән яраланғанмы? — тип һораны.

— Ул танкыһы менән бергә тотошлай янған... Тәне дөм ҡара көйөк, бер генә имен ере лә ҡалмаған... Бите менән күҙҙәре нисектер имен...

— Тәрән тылға ниңә оҙатмайһығыҙ?

— Хәле үтә мөшкөл булғанға, врачтар уны урынынан ҡуҙғатырға ҡушманы.

— Егет һауығырмы?

— Әйтеүе ҡыйын...

Палаталағы артистарға иғтибар итмәгән танкист, ыңғыраша-ыңғыраша, һаман һаташты:

— Әсәй!.. Әсәкәйем!..

Арыҫлан Мөбәрәков, ныҡ ыҙаланған танкистың хәлен еңеләйтерҙәй әмәл табылмауына ғазапланып, уға үҙенең һаулығын бүлешеп бирерҙәй аяныс-әрнеү менән тимер карауатҡа эйелде.

— Нимә, улым?

— Атай, әсәйем ҡайҙа? — Танкист күҙен асты. Оҙаҡ ваҡыт бер көйө текләнеп ҡарап ята торғас, уның зиһене асыҡланды. — Салауат Юлаев ағай, был һеҙме?

— Мин, улым, мин, — тине Арыҫлан, ә үҙенең йонсоу йөҙө буйлап күҙ йәштәре аҡты.

— Һеҙҙе таныным, ағай. — Фронтовик-танкист, үтә ҡыйын булғанда ла ыңғырашмаҫҡа тырышып, тештәрен шығырлата ҡыҫты. — Салауат Юлаев ролендә һеҙ уйнаған киноны аҙаҡҡы мәртәбә ғинуарҙа ҡараным... Бик фәһемле, шәп!..

— Ҡасан яндырҙылар һине?

— Башҡорт дивизияһын фронт аша рейдҡа оҙатҡанда... Шайморатов ағай шул рейдтан сыға алмаған, һәләк булған, тиҙәр... Шуға йөрәгем әрней... Йәлке...

— Башҡортостандың ҡайһы районы егете һин?

— Минме? — Танкист, һыҙланыуына сыҙай алмайынса, һиҙелер-һиҙелмәҫ ыңғырашты. — Бөрйән районынан... Сөләймәнов Мөҙәрис мин...

— Силәбегә танкы алырға барған егетме һин?

— Әйе... Шайморатов ағайҙың ҡушыуы буйынса, миңә Өфөлә лә булырға тура килгәйне... Туймазы, Ишембай нефтселәре менән дә осраштым... Бензинды хәҙер артығы менән етештерәләр, ә Шайморатов ағай менән өр-яңы танкымды фашистар юҡ итте...

— Әсәйең эргәһендә лә булдыңмы?

— Әсәйем эргәһендә була алмай киттем шул, ағай!.. — Танкистың тамағы быуылды.— Хәҙер уны күрә алмай үләүем үкенесле...

— Төҙәлерһең әле.

— Юҡ, ағай, мин төҙәлә алмаясаҡмын, — тине Мөҙәрис, ауыр һулап. — Әсәйемде күрә алмағанға, һис юғында, үҙебеҙҙең боронғо башҡорт йырын ишетеп үләһе ине!..

Ҡурайсы ҡурайҙа уйнаған моңға ҡушылған Хәбир Ғәлимов «Ҡолой кантон»ды һуҙып йырлай башлағас, Сөләймәнов Мөҙәрис күҙҙәрен йомдо.

«Егет йоҡлап китте, ахрыһы», — тип уйланы Арыҫлан Мөбәрәков. Ләкин ҡарайып янған бөтә тәне ап-аҡ марля менән сырмалған фронтовик-танкист уяу ине. Биләүле көйө сәңгелдәктә ятҡан сабый сағынан әсәһенең күкрәк һөтө менән ғүмерлеккә аңына, йөрәгенә үтеп һеңгән кинәндергес был боронғо көй уның һыҙланыуын бер ни тиклем кәметкәндәй һымаҡ тойолдо. Сөләймәнов ойоно. Иҫен юғалтҡан ваҡытта йәнә әсәһен саҡырып, еңелсә ыңғырашты. Ҡабат аңына килгәс, ул көс-хәлгә бышылданы:

— Ағай, йырла, йырлағыҙ!..

Моңло тауыш менән башҡарылған йыр һаман ағылды:

Ҡантон, кантон да килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ...

Хәбир Ғәлимов йырлауҙан тыйылғас, күҙ ҡабағын елпендереп, Мөҙәрис Арыҫлан Мөбәрәковты үҙенә саҡырҙы:

— Салауат Юлаев ағай, бәхил булығыҙ!.. Мин үләм...

— Үлмә, улым, үлмә! Нығын, сыҙарға тырыш!.. — тине Арыҫлан Мөбәрәков, аҡырып илар хәлгә етеп.

— Мин анһыҙ ҙа сыҙайым, ағай, сыҙайым... Барыбер сыҙауы ҡыйын, бик тә ҡыйын...

Лейтенант Сөләймәнов ятҡан палатанан коридорға сыҡҡас, Вәлиәхмәтова менән Шәрәфетдинова кеүек артисткалар һығылып-быуылып иларға кереште. Ауыр күренешкә сыҙарҙай хәле ҡалмаған Арыҫлан Мөбәрәков, Хәбир Ғәлимов шикелле баһадирҙарҙың күҙҙәренән дә бөрсөк-бөрсөк тамсылар һығылып сыҡты...

## IV

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре делегацияһын оҙатҡандан һуң, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһына тәғәйенләнгән башҡа милләт вәкилдәре лә бер-бер артлы килә башланы. Башҡорттарға үзбәктәр, төрөкмәндәр, ҡаҙаҡтар менән таджиктар ҙа килеп ҡушылғас, дивизияла төрлө телдә һөйләшеүселәр һаны артты.

Төрлө милләт вәкилдәрен берләштереүсе 16-сы гвардия кавалерия дивизияһын ҡоралландырыуға ла иғтибар көсәйҙе. Хәҙер уға танк, артиллерия-миномет полктары һәм зенит-артиллерия дивизионы ҡушылды. Немец илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышып оло тәжрибә туплаған рядовой башҡорт һыбайлыларының күбеһенә сержант, старшина званиелары бирелеп, улар взвод командирҙары итеп тәғәйенләнгәс, хәрби хеҙмәткә яңы алыныусыларҙы киләһе һуғыштарға ныҡлы әҙерләү башланды.

Фронттағы шарттарға ярашлы рәүештә көнөн-төнөн уҙғарылған күнегеүҙәрҙең иң көсөргәнешле ваҡытында 16-сы гвардия кавалерия дивизияһына Ҡыҙыл Армияның кавалерия командующийы урынбаҫары генерал-полковник Ока Иванович Городовиков килде.

Полктарҙа һәм эскадрондарҙа йөрөп сыҡҡас, бик төптә ултырған сөм ҡара күҙҙәрен йылтыратып, ул көлтә шикелле ҡуйы мыйығы аҫтынан йылмайҙы.

— Моя доволен, очень доволен подготовкой личный состава кавалерский дивизии, — тип рус телен ҡалмыҡсараҡ боҙоп, Городовиков үҙенең артынан ҡалмай эйәреп йөрөүсе дивизия һәм полк командирҙарына рәхмәтен белдерҙе.

Папаха, оҙон салғыйлы шинель кейгән Ока Иванович Городовиков һын ҡатырып ҡаршыһында торған 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының яңы командиры гвардия полковнигы Белов эргәһендә сибек, үтә бәләкәй булып күренде. Ока Иванович Городовиков менән Белов беренсе тапҡыр 1920 йылда Ҡырым перешеегына ҡыҫырыҡланған Врангелдең һыбайлыларын уңышлы ҡыйратыусы Икенсе һыбайлы Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт иткәндә осрашҡайны. Ул заманда Григорий Андреевич Белов 92-се кавалерия полкының беренсе эскадронында политбоец — ячейка секретары булып хеҙмәт итә ине. Ҡаты һуғыштар тамамланғандан һуң донесение менән иң тәүҙә дивизия штабына, унан аҙаҡ армия штабына барғас, ул:

— Миңә командармды ҡайҙан табырға? — тип һораны.

Күмәк һыбайлылар араһында торған төпөш кәүҙәле

сибек кеше, көлтә шикелле ике яҡҡа тырпайтылған мыйығын һыпырғылай-һыпырғылай, алға сыҡты.

— Зачем командарм тебе?

— Донесение тапшырырға, — тине Белов.

— Моя командарм!

Белов, ышанмайынса, тирә-яҡҡа ҡаранды.

— Шаяртмағыҙ!

— Ниндәй шаяртыу тағы? Ҡаршыңда армия командующийы Ока Иванович Городовиков үҙе, — тип бүтәндәр ныҡлы ышаныс менән дөрөҫләгәс кенә, Белов пакетты кеҫәһенән сығарып бирҙе.

Донесениены уҡығас, Городовиковтың йөҙө яғымлыланды. Ул, дуҫтарса йылмайып, Беловтың фамилияһын, исемен, атаһының исемен, тыуған яғын, атакаларға һыбай барған саҡта ҡурҡыныс түгелме икәнлеген һорашты.

Шул замандан бирле Ока Иванович Городовиков Беловты яҡшы иҫләне һәм бергә осрашҡан һайын күптәнге танышы шикелле алсаҡ ҡаршыланы.

Был юлы ла улар граждандар һуғышы йылдарындағы иҫтәлекле ваҡиғалар тураһында байтаҡ ваҡыт һөйләшеп ултырҙы...

Генерал-полковник Городовиков гвардия кавалерия дивизияһында аҙнанан артығыраҡ булды.

Ул Мәскәүгә ҡайтып китеү менән, гвардия полковнигы Белов барлыҡ иғтибарын дивизиялағы һыбайлыларҙы киләһе алыштарға әҙерләүгә йүнәлтте.

Хәрби күнегеүҙәр ҡала ситендәге далала уҙғарылды. Саперҙар, гитлерсыларҙыҡы шикелле өс һыҙатлы тәрән траншеялар ҡаҙып, нығытмаларҙан алда ҡағыулы тимер бағаналарға сәнскеле тимерсыбыҡтар беркетте, миналар заграждениеһын билдәләне һәм ваҡ-төйәк кәртәләр ҡуйҙы. Ә һыбайлылар, һуғыш ваҡытында тупланған бай тәжрибәләрен практик күнегеүҙәрҙә файҙаланып, һыбай сабышты, «дошманды» тураҡланы, ҡар ҡатыш бысраҡ ерҙән имгәкләп барырға, атакаға күтәрелергә, «дошман» һөжүмен кире ҡағырға, уларҙың ут нөктәләрен ҡыйратырға, гранаталар ташларға, окоптар ҡаҙырға, тотҡарлыҡ яһаусы кәртәләр аша уҙырға, ҡул һуғышында дошман һалдаттарын штык менән сәнсергә, приклад, көрәк һәм башҡа төрлө нәмәләр менән оҫта һуғышырға өйрәтелде.

Шайморатовтоң файҙалы кәңәштәрен һәр саҡ иҫендә тотҡан гвардия полковнигы Белов дивизиялағы элекке тәртипте боҙманы. Ул ҡайҙа ғына бармаһын, киләһе һуғыштарға һыбайлыларҙың ныҡлы әҙерләнеүен күрҙе һәм командирҙарҙың талапсан тауышын ишетте:

— К бою готовьсь!

— Гранаты к бою!
— Бего-ом арш!
— Отс-тавить!..

Госпиталдә дауаланғандан һуң 58-се кавалерия полкына взвод командиры итеп тәғәйенләнгән старшина Байдәүләтов та барлыҡ күнегеүҙәрҙе Хөсәйенов менән Атаев шикелле уҙғарырға тырышты.

«Күнегеүҙәр мәлендә һалдаттарҙы йәлләү — һуғышта уларҙы йәлләмәүгә тиң», — тип ул, үҙ һыбайлыларына талапсанлыҡты арттырыу менән сикләнмәйенсә, атаевсыларҙың батырлығы, һуғыштарҙа һәләк булған ир-егеттәрҙең тәжрибәһе тураһында һөйләне һәм улар кеүек Ватанәсәгә тоғро хеҙмәт итергә өндәне.

Ҡыҫҡа ваҡытҡа ялға туҡтаған минуттарҙа ла Байдәүләтов буш ултырманы. Ул үҙенең дуҫы Мөхәммәтҡазының ҡыйыулыҡтарын, яҡын иптәштәренең һәм дивизия командиры Шайморатовтың нисек һәләк булыуын иҫкә алды.

Төндә, көнө буйы барған көсөргәнешле күнегеүҙәр тамамланып, һыбайлылар йоҡларға ятҡас, Зәки үҙенең уйхыялдарына ирек бирҙе. Әсәһе менән кәләше Мәстүрәһен, һуғышҡа тиклемге тормошто, моңһоҙ бала сағын күҙ алдына килтергәс, уға яманһыу булып китте.

Уйланып ята торғас, бер күреүҙә дивизия командирына ғашиҡ булған Зәйтүнәнең дә һыны Зәкиҙең күҙ алдына килеп баҫты. Үҙенән күпкә оло кешегә Зәйтүнәнең ғашиҡ булыуы ғәжәп нәмә! Ул ихлас яратты микән Миңлеғәле ағайҙы? Яратҡандыр! Шулай өҙөлөп һөймәһә, ғаиләле кешенең артынан зарығып йөрөр инеме Зәйтүнә?.. Бына хәҙер Зәйтүнә өҙөлөп яратҡан Миңлеғәле Минһажетдинович юҡ. Уның гитлерсыларға ҡаршы ҡаһармандарса һуғышып һәләк булыуын ишетһә, Башҡортостандағы барлыҡ халыҡ шикелле, Зәйтүнә лә күҙ йәштәрен ағыҙып илай-илай ҡайғырыр, зарланыр инде...

## V

...Генерал Шайморатовтың һуғышта һәләк булыуын ишеткәс, Зәйтүнә башта ышанманы.

— Буш хәбәр, булмаҫ, — тип ул ҡырт киҫте. Аҙаҡтан, Байдәүләтовтан хат алғас ҡына, ҡайғы-хәсрәтенән оҙаҡ, бик оҙаҡ иланы.

Зәйтүнә менән бергә нефть промыслаһында эшләгән ҡатын, әхирәтенең ни өсөн бойоҡ йөрөүе сәбәбен белгәс, аптыраны.

— Ҡуйсәле, кеше абышҡаһы-ире өсөн бөтөрөнмә! Бүтән бисәләр һымаҡ итәк тулы бала-саға менән яңғыҙ ҡалһаң, тағы бер хәл! Сабыр иткән — моратына еткән, ти. Мәле еткәс, моғайын, үҙеңә тиң булырҙай йәр табылыр әле!

— Ундай кеше табылмаç!

— Яҙғаны табылыр! Ҡөт! Ана, Ҡәйенсафаны беләһең бит... Әүәлдән белмәгән-күрмәгән, һуғыштағы ирҙәр менән хатлаша торғас, бер әфисәр үҙенә хат аша ғашиҡ булған. Ул әфисәр егет, йәрәхәтенән төҙәлеп һауыҡҡас, Ҡәйенсафа эргәһенә килгән. Бөгөн улар силсәүиткә барып яҙылышҡан, ә иртәгә ире йәнә һуғышҡа китә, ти.

— Ниңә улай ҡабалан?

— Һуғыш ваҡыты булғас, ҡалайтһын. Әфисәр егет кәләш алырға ғына һорап килгән, ти.

— Туйҙары булғанмы?

— Туй ҡайғыһымы ни был заманда?..

Эштән ҡайтҡас, Зәйтүнә үҙенә урын тапманы. Танһығы ҡанғансы шәмәреп иланы-иланы ла, эсе бошоуын баҫа алмайынса, ятаҡта йәшәгән ҡыҙҙар эргәһенә китте. Унда ла ултырып йәм тапманы.

Дөм ҡараңғы урам уртаһындағы батҡаҡты итегенең ҡуңысына саҡлы кисеп, бата-сума фатирына ҡайтып барғанда, контора тәңгәлендә ҡатыны менән торған Хөсәйеновты осратты.

— Ни эшләйһегеҙ бында?

— Туймазыға килгәйнек. Төндө ҡайҙа уҙғарырға белмәйбеҙ, ә ҡарауылсы конторағა индерергә теләмәй, — тине Хөсәйенов, өшөүенән еңелсә ҡалтыранып.

— Белеш-танышығыҙ юҡмы ни Туймазыла?

— Юҡ.

— Гостиницаға барып ҡарағыҙ, — тине Зәйтүнә.

— Барҙыҡ... Урын юҡ тип, унда ла индермәнеләр.

— Командировкаға килдегеҙме?

— Эшкә, — тип Хөсәйенов ҡатыны һәм үҙе менән таныштырҙы.

— Мин һеҙҙе беләм... Башҡорт дивизияһы фронтҡа киткән саҡта, һеҙҙе нефть эшенә ебәргәндәр бит!

— Мине ҡайҙан беләһегеҙ?

— Байдәүләтов Зәки тигән һалдат һеҙҙең хаҡта бик күп нәмә һөйләне. Ул хатта һеҙҙең фотоғыҙҙы бер нисә тапҡыр күрһәтте, — тине лә Зәйтүнә уларҙы бер бүлмәле ҡыҫыҡ фатирына алып ҡайтты.

Искәндәр менән Зөбәржәт ишек төбөнән ары уҙырға баҙнат итмәне.

— Беҙгә ишек төбөндәге мөйөш тә яраған!

— Тартынмағыҙ. Минән башҡа кеше юҡ был фатирҙа. Фронттан ҡаты яраланып ҡайтҡан еҙнәм менән апайымды Ишембайға эшкә күсерҙеләр.

— Ә беҙҙе Ишембайҙан бында күсерҙеләр, — тине Хөсәйенов.

— Урындан урынға күсереп йөрөтөүҙәре шәп түгел, — тип Зәйтүнә тимер мейескә ут яҡты.

— Еҙнәң менән апайың специальностары буйынса кемдәр?

— Еҙнәм — геолог, апайым — инженер, ә мин — простой эшсе. Белемем ете класс ҡына. Нефть техникумына уҡырға инергә хыяллана инем, һуғыш ҡамасауланы.

— Мин дә нефть институтының беренсе курсын саҡ тамамларға өлгөрҙөм, — тине Зөбәржәт, моңайып.

Сәй эскән саҡта Зәйтүнә менән дуҫлашырға өлгөргән Зөбәржәт Туймазылағы тормошто һорашты, Искәндәрҙең промыслаға өлкән инженер булып килеүен дә әйтте.

Тамаҡ туйҙырғас, өйҙәштәренә урынды Зәйтүнә стена буйындағы ағас карауатҡа һалды, шаршау артындағы һикегә үҙе ятты. Ләкин төнө буйы йоҡлай алмай интекте. Карауаттағы ир менән йәш ҡатындың шыбырлашыуы, суп та суп үбешеүе Зәйтүнәне ярһытып, йөрәгенә ут һалды, мөхәббәттән мәхрүм булыуы йөрәген әрнетте.

«Яңыраҡ өйләнешкәндәрҙер, ахырыһы. Уғата сабырһыҙ ҡыланалар. Төнө буйы контора тәңгәлендә өшөп-туңып торһалар, былай үбешә алмаҫтар ине», — тип кешеләр бәхетенә асыуы ҡабарып өҙгәләнгән Зәйтүнә әле бер, әле икенсе яҡ ҡабырғаһына әйләнеп ятты. Йәштәрҙең ҡыланышын ишетмәҫкә тырышып, баш аҫтына һалған көпөһөнөң ситен ҡайырып ҡолаҡтарын ҡаплауының да файҙаһы теймәгәс, тамам тәҡәте ҡороно...

Карауаттағы ир менән ҡатын йоҡоға талды, ә Зәйтүнәгә эшкә барырға ваҡыт еткәйне инде.

Төндө йоҡоһоҙ уҙғарған Зәйтүнә түшәгенән ҡыйынлыҡ менән торҙо. Бер киҫәк арыш икмәген сәйгүн төбөндә ҡалған һыуға манып ашаны ла, эшкә йүгерҙе.

Фатир хужаһы эшкә киткәндән һуң, Хөсәйенов та оҙаҡ ятманы. Ваҡ-төйәк әйберҙәре менән ҡатынын үҙҙәре төн уҙғарған фатирҙа ҡалдырып, конторағa китте.

Нефть промыслаһы мөдире Даянов Сәләхетдин Даянович, махсус белемһеҙ практик, үҙ ғүмерен нефть эшенә бағышлаған оло ғына йәштәге кеше, Хөсәйеновтың йәп-йәш көйөнә өлкән инженер булып килеүен белгәс, ябалаҡтыҡына оҡшаған күҙҙәрен аҡайтып ҡараны.

— Институтты ҡайҙа бөттөң?

— Бакуҙа...

— Унан ҡайҙа эшләнең?

— Башҡортостанға ҡайтып, Ишембайҙың өсөнсө промыслаһында тәүҙә оператор, унан аҙаҡ мастер ярҙамсыһы һәм мастер булып эшләнем.

— Ишембайҙа нефть күп бирҙеңме?

— Дүрт мең.

— Биш мең урынына дүрт меңме?

— Ундағы компрессор бик иҫке. Баҫым паспорт буйынса етмеш биш атмосфера. Былай эшләгән ваҡытта атмосфера баҫымы илленән артһа, манометр стрелкаһы һикерә башлай, — тип Хөсәйенов үҙе эшләгән скважина хаҡында һөйләне.

Уны иғтибар менән тыңлаған Даянов, ялтлас башын һыйпай-һыйпай, теләр-теләмәҫтән генә ризалашты:

— Әйе, скважинаның шәплеге һауа баҫымының күберәк булыуынан ғибәрәт. Беҙҙең компрессорҙар менән дә артыҡ маҡтанырлыҡ түгел. Баҫым илле-илле биш атмосферҙан уҙмай.

— План үтәләме?

— Үтәлгәндә үтәлә, үтәлмәгәндә юҡ, — тип яуап ҡайтарҙы ла, ниҙер иҫенә төшөргәс, нефть промыслаһы мөдире ҡабаланып һораны: — Һин нисек һуғышҡа китмәнең?

— Мин бер тапҡыр һуғышта булдым. Яраланғандан һуң, госпиталдә дауаланып сыҡҡас, Башҡорт кавалерия дивизияһына тәғәйенләндем, — тип Хөсәйенов дивизия менән бергә ниңә китмәүе сәбәбен һөйләне.

— Ғәйепкә алма, белмәнем, — тине Даянов.

— Миңә ҡасан эшкә сығырға?

— Бында һине кем ебәрҙе?

— «Башнефтекомбинаты»нан ебәрҙеләр, — тине Хөсәйенов, промысла мөдиренең һорашыуынан ялҡып.

— «Башнефтекомбинаты» начальнигы Степан Иванович Кувыкиндың үҙендә булдыңмы?

— Булдым.

— Бындағы ҡыйынлыҡтарҙы, кадрҙар етешмәүен һәм бөтә эштең етмеш процентын ҡатын-ҡыҙ башҡарыуын әйттеме?

— Әйтте.

— Ҡыйынлыҡтарҙы белеп килгәс, яҡшы, — тине Даянов, ҡәнәғәтләнеп. — Үҙебеҙҙең хужа ла һөйләнеме бындағы хәлде?

Хөсәйенов, кем хаҡында һүҙ барыуын аңламайынса, аптырап, күҙлеген бер кейҙе, бер систе.

— Ниндәй «хужа»?

— «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов Иван Перфильевичты белмәйһеңме?

— Унын менән ОСрашып һөйләшкәнем юҡ.

— Нисек юҡ? — Тәрән сырыш баҫҡан промысла мөдиренең алсаҡ йөҙө үҙгәрҙе. — Иван Перфильевичтың үҙендә булмағас, ниңә миңә килдең?! Әх-ма-а-а!.. Ҡиммәтле ваҡытымды зәрәгә уҙғартаһың бит! Бүтәнсә һөйләшергә теләмәйем! Иң әүәл хужаға бар! Шунан килерһең, — тип әңгәмәне ҡапыл бүлдереп, Даянов ҡайҙалыр китергә йыйналды.

— Управляющий менән телефон аша һөйләшеп булмаймы ни, Сәләхетдин ағай?

Промысла мөдире ҡырт киҫте:

— Булмай! Иң әүәл хужаның үҙенә барып күренергә тейешһең!

Хөсәйенов трестҡа китте.

«Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов уны һалҡын ҡаршыланы. Ул, промыслаға өлкән инженер итеп ебәрелгән Хөсәйеновтың нимәгә һәләтле икәнлеген беренсе осрашыуҙа уҡ белергә теләгәндәй, уңалған аҡһыл ҡашы аҫтындағы һорғолт күҙҙәре менән текләнде.

— Ватан һуғышы барған ваҡытта самолеттар һәм танкылар өсөн иң мөһиме нефть икәнлеген һиңә аңлатырға кәрәкмәйҙер бит?

Бындай һорауға ғәрләнгән Хөсәйенов һалҡын ғына яуап ҡайтарҙы:

— Һәр сабыйға мәғлүм нәмәне һорайһығыҙ, Иван Перфильевич!

— Кәрәкле һүҙҙе мең тапҡыр ҡабатлаһаң да яҙыҡ түгел, — тип асыуланды трест управляющийы Нифантов.— Краснодар крайындағы барлыҡ нефть промыслаларын баҫып алып, нефткә бай Грозный менән Бакуға дошман ғәскәрҙәре барлыҡ көскә ынтылыуҙары сәбәпле, көнсығыш нефть райондарының әһәмиәте артҡандан-арта барыуы, әлбиттә, бер кемгә лә сер түгел. Әммә СССР Дәүләт Оборона Комитетының бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылдың егерме икенсе сентябрендәге ҡарары нигеҙендә нефть сығарыуҙы «Икенсе Баку» тип исемләнгән Башҡортостанда икеләтә арттырыу урынына, беҙ сығарған нефть кәмей бара. Һәр тәүлектә илгә һигеҙ-туғыҙ мең тонна нефть биреү өсөн беҙгә бик күп көс һәм тир түгергә тура киләсәк!

— Берҙән-бер ышаныс девон нефте түгелме? — тип һораны Хөсәйенов.

— Девон, эйе, девон! — Туп-тура, тигеҙ елкәһен ыуаыуа, Иван Перфильевич уйға ҡалыбыраҡ торҙо. — Ул девонды ҡайҙан табырға икәнлеген генә белмәйбеҙ! Туғыҙ йөҙ, мең, мең бер йөҙ метр тәрәнлектә бырауланған сква-

жиналарҙан да табылманы девон нефте. Бәлки, һин, әҙерлекле, энергиялы белгес килгәс, девон эҙенә бергәләп төшөрбөҙ?

Ҡарамаҡҡа талапсан, үтә ҡырыҫ холоҡло күренгән Нифантовтың тауышы әҙерәк яғымлыланғас, Хөсәйенов та тынысланды.

— Иван Перфильевич, миңә ҡасан эш башларға?

— Бөгөн!

Фатир хаҡында һүҙ ҡуҙғатырға ла баҙнат итмәйенсә, күңел төшөнкөлөгө менән урамға сыҡҡас, Хөсәйенов: «Һәр тонна нефть — Гитлерға беҙҙең залп!», «Заданиеңды үтәмәйенсә, өйөңә ҡайтма!», Биргән вәғәҙәңде үтә!» — тип эре хәрефтәр менән яҙылған лозунгылар тәңгәлендә туҡталыбыраҡ торҙо.

Фатирһыҙ-ниһеҙ нисек йәшәргә бында? Управляющийға кире кереп, иң әүәл фатир яғын хәстәрләүҙе талап итергәме икән әллә? Үҙ мәнфәғәтеңде өҫтән ҡуйыу килешерме?

«Берәй әмәле табылыр әле», — тине лә Хөсәйенов урам буйлап атланы.

Совет иле яҙмышы, уның киләсәге хәл ителгән осорҙа үҙенең шәхси тормошо, йәшәргә фатиры булмауы Хөсәйеновҡа үтә ваҡ мәсьәлә, иғтибарға лайыҡһыҙ һымаҡ тойолдо.

Ул, юҡ-бар йомош менән трест етәкселәренең башын ҡатырыуҙы йәпһеҙ һанап, торлаҡ табылғанға саҡлы Зәйтүнә фатирында ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт һораны.

Фатир хужаһын маҙаһыҙламаҫҡа тырышып, Хөсәйенов ҡатыны эргәһенә һирәк ҡайтты. Йәкшәмбе көн Зәйтүнә Өфөгә ял итергә киткәс кенә, ул Зөбәржәте менән иркенләп йәшәне.

Уларға ҡамасаулауҙан Зәйтүнә үҙе лә ҡыйынһына ине. Юҡ һылтауҙы бар итеп, ул бик йыш ҡыҙҙар ятағында йоҡларға ҡалды. Бер көндө ул эшкә барманы. Ҡайҙалыр йөрөп килгәс, иң кәрәкле әйберҙәрен төрөп бәйләне лә:

— Рәхәтләнеп йәшәгеҙ, ә мин Өфөгә китәм, — тип әйткәс, Зөбәржәт аптыраны.

— Оҙаҡҡамы?

— Оҙаҡҡа!

— Эшкә бармаған өсөн, үҙеңә һүҙ теймәҫме?

— Теймәҫ. Мин кейәүгә сыҡтым!

— Кейәүгә? — Зөбәржәт шатланды. — Ҡотлайым һине, бәхетле бул!

Зәйтүнә ҡул һелтәне.

— Ҡуйсы, ҡотлама!..

— Әллә яратмаған кейәүгә сыҡтыңмы?

— Яратырҙайы табылмаған, ҡалайтайым? — Зәйтүнә, күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡараны ла, күңеле тулып, иларға тотондо. — Ғүмер тигәнең үтә тора бит. Йәшәп ҡалырға кәрәк!.. Һуғыш, һәммәһенә тик һуғыш ғәйепле!..

— Ирең йәшме?

Зәйтүнә яуап ҡайтарырға теләмәне. Төйөнсөктәрен берберенә ҡуша бәйләп яурыны аша һалды ла станцияға табан ыңғайланы.

Зәйтүнә Туймазыла башҡаса күренмәне. Ә уның фатирында ҡалған йәш ғаилә үҙ тормошо менән йәшәне. Зөбәржәт әсә булырға әҙерләнде. Искәндәр тәүлектәр буйына нефть промыслаһынан ҡайтманы.

Бына бөгөн дә эштән ҡайтып киске тамағын туйҙырғас та, ғәҙәтенсә промыслаға йүнәлде. Тәүҙә икенсе, аҙаҡтан өсөнсө скважинаға барҙы.

Буровой тәңгәлендәге күперҙә торған машинист-компрессорщик менән скважина операторын күргәс, Хөсәйенов ҡысҡырып һораны:

— Атмосфера баҫымы күпме?

Машинист-компрессорщик елгә сайҡалған вышкаларҙағы электр лампочкаларының тоноҡ яҡтыһында саҡ беленгән манометрға күрһәтте:

— Ана, ҡарағыҙ, илле атмосфера!..

— Бындай атмосфера баҫымы беҙҙе ҡәнәғәтләндерергә тейеш түгел! Өсөнсө скважинаның нефтте күберәк биреүен теләһәк, атмосфера баҫымын мотлаҡ арттырырға тейешбеҙ!

— Әлегә саҡлы ла атмосфера баҫымын арттырырға маташыуҙар күп булды, тик бер ни ҙә барып сыҡманы,— тип оператор өлкән инженерҙың мәғәнәһеҙгә аҙапланыуын оҡшатманы.

— Йәнә самалап ҡарайыҡ әле. Был юлы, бәлки, берәй әмәле табылыр, — тип үҙенең алдан уйлап йөрөгән иҫәп-хисабы менән уртаҡлашты ла, Хөсәйенов кәңәш һораны:— Йә, һеҙҙеңсә, нисек? Минең ошо расчетты практикала һынап ҡарайыҡмы?

— Ҡасан?

— Хәҙер.

— Промысла начальнигының рөхсәтенән тыш, баш-баштаҡ ҡыланыуыбыҙ килешмәҫ, — тине машинист-компрессорщик, промысланың өлкән инженеры тәҡдиме менән ризалашмайынса.

Даянов яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алмаясағын яҡшы аңлаған Хөсәйенов, тәүәккәлләп, тимерҙе ҡыҙыу сағында һуғып ҡалырға тырышты.

— Минең әҙме-күпме эш тәжрибәм бар. Тәүәккәллек күрһәтмәһәң, эш барып сыҡмаясаҡ! Ишембайҙағы айырым етәкселәрҙең ҡурҡаҡлығы, эш ысулын үҙгәртеп ҡорорға теләмәүҙәре арҡаһында күп нәмәне үҙемсә башҡара алмауыма үкенәм. Ишембайҙа ла скважиналарҙың нагрузкаһын арттырырға тырыштырыштҡайным, түрәләр ризалығы булманы. Бында ла шул уҡ хәл ҡабатлана. Мин фронттағы Башҡорт кавалерия дивизияһы егеттәре менән хатлашам. Улар фронтҡа күберәк бензин ебәреүҙе һорап яҙа. Самолеттар менән танкыларға бензин күберәк етештерелһә, кавалеристар ул тиклем ҡырылмаç ине, тиҙәр. Ә бында нефтте күберәк сығарырға бер-беребеҙҙе өгөтләйбеҙ ҙә үҙебеҙ баçҡан урыныбыҙҙа тапанабыҙ! Беҙҙең резервтағы утыҙ өс процент файҙаланылмай, йәғни атмосфера баçымы илленән уҙмаған һәр скважина нефттең өстән ике өлөшөн генә сығара. Булған мөмкинлекте файҙаланмау, минеңсә, Ватан алдында енәйәт!

— Баçым арттырылһа, компрессор шартлаясаҡ һәм мине яуаплылыҡҡа тартторасаҡтар, — тине машинист-компрессорщик.

— Расчет нимә өсөн яһалды? — Хөсәйенов үҙ планынан сигенергә теләмәне. — Яуаплылыҡты мин үҙ өçтөмә алам! Шунһыҙ яй ғына барған эште ыңғай яҡҡа үҙгәртергә мөмкин булмаясаҡ!

— Бүтәндәрҙең башлауын көтәйек, — тине оператор.

— Фронтта ла, бүтәндәрҙең һөжүм башлауын көтөп, һуғышсылар тик ятһа, ни булыр ине?

— Нефть сығарыуҙы һуғыш менән сағыштырмағыҙ!

Операторҙың тиçкәрелегенә асыуланып, Хөсәйенов ҡапыл ҡыҙҙы.

— Нисек сағыштырмаçҡа? — тине лә трест управляющийы Нифантовтан ишеткән һүҙҙәр менән яуап ҡайтарҙы: — Фронт һәм тыл тығыҙ бәйләнештә икәнлеген иçтән сығармаçҡа!

Икенсе йыл барған Бөйөк Ватан һуғышы бензинды көндән-көнгә ҡомһоҙланып аşауы бер кемгә лә сер түгел ине. Шунлыҡтан Дәүләт Оборона Комитеты ағзалары, нарком, партия өлкә комитеты һәм республика хөкүмәте етәкселәре лә «Икенсе Баку»ҙағы «ҡара алтын»ды икеләтә-өсләтә арттырыуҙы талап итеп өҙлөкһөҙ ҡыçа һәм тейешле хәстәрлек күрә...

— Яуаплылыҡты үҙ өçтөгөҙгә алырға булғас, теләһә ни эшләгеҙ!

— Әйе, һеҙ промысланың өлкән инженеры, — тип оператор ҙа теләктәшлек белдерҙе.

Икеләнеберәк торғандан һуң, Хөсәйенов ҡул һелтәне.

— Бер ни эшләмәгән кеше генә яңылышмай! Әйҙә, тәүәккәлләнек, — тип компрессорҙың атмосфера баҫымын арттырырға ҡушты.

Манометр теле, нимәнәндер ҡурҡҡан шикелле ҡалтырана-ҡалтырана, яй ғына өҫкә табан ыңғайланы. Ул «60» һаны тәңгәленә күтәрелгәс:

— Стоп! Ҡабаланмаҫҡа! Таңға тиклем беҙҙең ваҡыт етерлек. Мотор әҙерәк һыуынһын, — тине Хөсәйенов.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, манометрға теклэп ҡараған Хөсәйенов ҡул болғаны.

— Давай!..

Манометр теле йәнә өҫкә табан яй ғына ыңғайланы. Күтәрелеп бара торғас, ул «70» атмосфера баҫымын күрһәтте. Бер урында ярты сәғәт самаһы дерелдәп торҙо-торҙо ла, ҡылдай тартылған көсөргәнешлекте тағы ла нығыраҡ арттырып, ҡабаттан ҡуҙғалды. Әкренләп ул «71» гә етте... «72» не уҙҙы... «73» кә яҡынлашты...

— Етте!.. Хәҙер скважинаға барып ҡарайыҡ!..

Март етеүенә ҡарамаҫтан, төн бик һалҡын торҙо. Ҡар өйөмдәрен бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөткән көслө ел, уҫал йыртҡыстай ажғырып-ҡотороноп, әле алдан, әле арттан килеп бәрелә, йылы фуфайка аша уҙып, тәнде өшөттөрә, битте сәпәкәләй, өтә...

Көрттө йырып алдан барған Хөсәйенов, ярты километр самаһы алыҫлыҡтағы араны көс-хәлгә уҙғас, операторға скважинаның фонтан арматураһы ҡапҡасы менән шөғөлләнергә ҡушып, үҙе сепаратор пункты эргәһенә барҙы һәм трап ҡоролмаһының баҫымын ҡулайлаштырырға тотондо.

— Миңә нимә эшләргә, иптәш өлкән инженер? — тип һораны машинист-компрессорщик.

— Мин ҡушҡанды операторға әйтеп торорһоғоҙ. Көслө ел ваҡытында ул бер ни ишетә алмай!

Манометрға ҡарағас, бишенсе сепараторға бүтән скважиналар ҙа тоташтырылған булыуын аңлап, Хөсәйеновтың йөрәген ҡурҡыу алды. Хәҙер ҡалайтырға? Скважинанан нефть фонтаны урғылып сыҡһын өсөн кәрәге булмаған дүрт атмосфера баҫымын нисек итеп кәметергә? Сепаратор эргәһендәге бәләкәй генә тимер һауытҡа — мерникка ваҡытлыса тоташтырырғамы әллә уны?

«Бүтән әмәл ҡалманы. Тәүәккәлләмәй ярамай! Ни булһа ла булыр», — тип операторға тейешле эш ҡушыуына ун — ун биш минут самаһы ваҡыт уҙманы, көслө шартлау ишетелде.

Хөсәйенов, бер ни аңламайынса, тәрән көрткә һикерҙе. Шул саҡ ҡар туҙандарын борҡотоп яман ҡотороңған яҙ-

ғы бурандың ажғырыуына ҡушылған ниндәйҙер көслө тауышҡа иғтибар итте. Ҡурҡышынан уның ҡото алынды.

— Ә-ә-әй!..

Хөсәйенов эргәһенә йүгереп килеп еткән оператор менән машинист-компрессорщик, аҡылдарынан шашҡан һымаҡ һикергеләп бейей-бейей, ҡысҡырыша башланы:

— Искәндәр Сабитович, нефть!

— Нефть, нефть!

— Ура!..

Ярҙамсыларының ҡотороноуы сәбәбен аңламайынса, Хөсәйенов ғәжәпләнде:

— Нимә шартланы?

— Аҫтан урғылып сыҡҡан нефть!

— Ул мерник ҡапҡасын алыҫҡа атып бәрҙе!..

Шунда ғына әҙерәк һушына килгән өлкән инженер, алыҫҡа урғылған нефть ағымына иғтибар итеп, үҙе лә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Нефть фонтаны!.. Ура-а-а!..

Хөсәйенов яҡындағы культбудкаға йүгерҙе. Нефть урғылып сығыуы хаҡында телефондан шылтыратып хәбәр итеүенә күп тә үҙманы, промысла мөдире Даянов килеп етте. Уның артынса баш инженер менән «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов һәм башҡа етәкселәр ҙә күренде.

Нифантов, сананан төшкән ыңғайы, өҫтөнә кейгән толобын сисеп бырағытты ла, тирә-яҡтағы ап-аҡ ҡар яланына урғылған ҡап-ҡара нефть тамсылары менән ҡулын йыуа-йыуа, ҡыуанысынан сыҙай алмайынса, ажарланып ҡысҡырҙы:

— Яҡшы!.. Ә-ә-әх, яҡшы бит, шайтан алғыры!.. Әлегәсә тамсылап ҡына аҡҡан «ҡара алтын» ер аҫтында, тимәк, күп, бик күп!.. Нефть барлығын белдем! Тик уны тейешлесә сығара ғына белмәгәнбеҙ! Күп нефть бүтән скважиналарҙа ла булырға тейеш! Нефть фонтаны урғылып сығыуы хаҡында немедленно наркомға шылтыратырға!..

— Иван Перфильевич, туранан-тура наркомдың үҙенә шылтыратыуы килешмәҫ, — тине трестың баш инженеры.

— Ну, к черту! — Ярһыған Нифантов, бер кемдең кәңәшен тыңларға теләмәйенсә, һелтәнде. — Нарком үҙе беҙгә туранан-тура шылтыратҡанды, ниңә беҙ уға шылтыратмаҫҡа тейеш?!

— Мәскәү ваҡыты менән әле бик иртә бит!

— **Иртә** булһа, наркомдың өйөнә шылтыратабыҙ, — тип Нифантов культбудкаға табан ыңғайланы. Ярты юлға еткәс, туҡталып, күкрәгендәге өс орденының береһен алып

Хөсәйеновтың күкрәгенә таҡты. — Үҙенә орден юллағанға саҡлы ошоно тағып йөрөт! Заслужил! Нефть урғылып сығыуы хаҡында Башҡорт кавалерия дивизияһына ла яҙырға онотма! Дивизия вәкиле бында һин!

— Мин генәме ни? Бында оператор менән...

— Беләм! — Нифантов, Хөсәйеновты ашығыс бүлдереп, ажғырҙы: — Ҡаршылашма! Әйҙә, артымдан ҡалма! Нарком менән һөйләшеүемде тыңларһың. Яңылышһам-нитһәм, мине төҙәт!

Нифтановтың холҡо ҡырыҫ, кешеләргә талапсан, аяуһыҙ икәнлеген белгәнлектән, Хөсәйенов ҡаршылашманы. Ләкин управляющийҙың ҡыланышы үтә мәҙәк, ғәҙәттән тыш кәрәкһеҙ күренеш һымаҡ тойолдо уға.

Культбудкалағы телефон трубкаһын алғас та управляющий ярһыуынан баҫыла алманы.

— Нарком йоҡлағанын беләм! — тип ярыла яҙып ҡысҡырҙы ул элемтәсе ҡыҙға. — Йоҡоһонан уятығыҙ! Һуғыш барғанын оноттоғоҙмо әллә, барыня-сударыня? Нарком таң алдынан ятҡан булһа ла уятығыҙ! Көтәм! — Сымдың икенсе яҡ осонан сыҡҡан ҡалын ир тауышын ишеткәс, управляющий етдиләнде. — Иптәш нарком, ваҡытһыҙ борсоуым өсөн ғәйепкә алмағыҙ. «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов шылтырата. Көслө нефть фонтаны урғылып сыҡты! Скважина баҫымы беренсе тапҡыр һикһән атмосфераға етте... Тәүлегенә һигеҙ йөҙ тонна «ҡара алтын»ды ошо бер скважина бирәсәк!.. Бүтән скважиналарҙа ла нефттең күпләп сығырына ышаныс тыуҙы... Бөтә бәлә иҫке компрессорҙың атмосфера баҫымын илленән арттыра алмауыбыҙҙа булған... Йәш инженер Хөсәйеновтың расчеты буйынса, ошоғаса иҫәпкә алынмаған барлыҡ резервтарҙы тулыһынса файҙаланасаҡбыҙ, иптәш нарком! Эйе, эйе!.. — Һөйләшеүҙән тыйылған Нифантов нарком әйткәндәрҙе иғтибар менән тыңлаған саҡта, күҙҙәрен баҙлатып, баш ҡаҡты. — Дөрөҫ, иптәш нарком! Дәүләт Оборона Комитеты Председателе иптәш Сталин да ҡыҙыҡһынамы ни беҙҙең трест менән? Уға хәбәр итегеҙ, Дәүләт Оборона Комитетының ышанысын аҡларбыҙ! Ирешелгән уңыштар ғына беҙҙе ҡәнәғәтләндермәй, иптәш нарком! Ҙур нефтте мотлаҡ табасаҡбыҙ!.. Яҡшы... Яҡшы... Шылтыратырмын, иптәш нарком! Рәхмәт. Һау булығыҙ!

Телефон трубкаһын рычагына элгәс, управляющий культбудка эсе шығырым тулы кешеләргә күҙ йүгертеп сыҡты.

— Ишеттегеҙме? Мәскәү беҙҙән ҙур нефть көтә, — тине трест управляющийы.— Беҙҙе бер урында тапаныуҙан ҡотҡарғаны өсөн Хөсәйеновҡа рәхмәтен белдерергә ҡушты

нарком. Бер скважинанан нефть фонтаны урғылыуын белгәс, нарком бик ҡыуанды. Ул был хаҡта СССР Дәүләт Оборона Комитетына хәбәр итәсәк! Ошондай ваҡиғанан аҙаҡ нефть табыуҙы кәметеп ҡарағыҙ! Давай, туҡталмай ҡыҫығыҙ, ти нарком. Туймазы нефте фашистарҙы тыуған илдән ҡыуып сығарыуҙы тиҙләтәсәк, ти...

— Митинг уҙғарырға ине, — тине партком секретары.

— Бөгөн эш аҙағында. Өйҙә ултырыусы бисә-сәсәне лә саҡырырға кәрәк, — тине управляющий.

— Уларҙы ниңә саҡырырға?

— Беҙ эшсе көсөнә мохтажбыҙмы, иптәш парторг? — тип һораны ла, Нифантов үҙе үк яуап ҡайтарҙы: — Бик тә мохтажбыҙ!

Трестың баш инженеры шик белдерҙе:

— Белмәйем, Иван Перфильевич, итәк тулы бала-сағалы бисәләрҙән йүнле рәт сығырмы икән? Минеңсә, эшкә сығырға эшкингәндәре күптәнән нефтепромыслала...

— Бөтә нәмәне йәшермәйенсә, эшсе көсөнә бик тә мохтажлыҡ кисереүебеҙҙе асыҡтан-асыҡ һөйләһәк, моғайын, улар беҙҙе аңлар! Ҡыҫҡаһы шул: өйҙә ултырыусы ҡатын-ҡыҙҙың береһен дә ҡалдырмайынса митингыға саҡырырға!

Эш көнө тамамланыу менән, кешеләр митингыға йыйнала башланы.

Халыҡтың яртыһынан күберәк өлөшө клубҡа һыймағанлыҡтан, митингыны трест контораһы ҡаршыһындағы асыҡ яланда уҙғарырға булдылар.

Алтынсы скважинанан сыҡҡан нефть фонтанына бағышланған митинг бик йәнле, шау-шыулы уҙҙы.

Митингыны ябырҙан алда трестың баш инженерына һүҙ бирелде.

Трибуна урынына эшләнгән ҡалҡыу ергә сығып баҫҡас, трестың баш инженеры фронттағы һәм тылдағы хәлдәрҙе ҡыҫҡаса ғына әйтте лә, төрлө сәбәптәр менән әлегәсә эшләмәй өйҙә ултырыусы ҡатын-ҡыҙға мөрәжәғәт итте:

— ... Мылтыҡ тоторға яраҡлы ир-аттың һуғышҡа китеп бөтөүе бөтәгеҙгә мәғлүм. Уларҙы ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағa алмаштырыуын да беләһегеҙ. Барыбер эшсе көсө етешмәй. Вышкаларҙа эшләрҙәй эшселәр таба алмайынса ыҙаланабыҙ. Минән алда сығып һөйләгән парторг һәм управляющий менән кәңәшләштек тә, һеҙгә фашистарҙы аяуһыҙ ҡыйратыусы ир-егеттәрҙең ҡатындарына, әсәләренә, кәләштәренә, ҡәрендәштәренә һәм балаларына эшкә сығыуҙарын үтенеп һорарға булдыҡ...

Сабата кейгән ҡатын-ҡыҙ, баҫҡан урындарында тапанатапана, тауыш-тын сығарманы.

Трестың баш инженеры, уларҙы эшкә сығырға ҡыҙыҡһындырырға тырышып:

— Нефтселәргә паекты бүтән ергә ҡарағанда мулыраҡ бирәләр, — тип әйткәйне, ҡатын-ҡыҙ зыҡ ҡупты:

— Паек биреү менән әүрәтмә беҙҙе!

— Илдең ауыр хәлдә икәнлеген аңламаҫтай кешеме ни беҙ?!..

Шау-шыу ҡубарып ҡысҡырыусы ҡатын-ҡыҙ төркөмөн йырып, күп балалы йыуантаҡ ҡатын алға сығып баҫты.

— Беҙ һиңә эшкә ялланмайбыҙ, нәчәлник!

— Дөрөҫ, Зәлифә, бик тә дөрөҫ!

— Түрәләр беҙҙе аңғыра бәрәнгә һанай!

— Ил өсөн ҡан ҡойоусы ирҙәребеҙгә беҙ ярҙамлашмай, кем ярҙамлашырға тейеш!

— Ҡешеләр кәрәк булғас, һәммәбеҙ ҙә эшкә сығырға риза!

— Яҙығыҙ мине эшкә!

— Мине лә, — тип ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, ҡатындар алға ябырылды.

Ҡулына ҡағыҙ-ҡәләм тотҡан кадрҙар бүлеге начальнигын шунда уҡ уратып алған ҡатын-ҡыҙҙы күҙәтеп торған трест управляющийы Нифантов, ҡыуанысын йәшерә алмайынса, баш инженерҙың терһәгенә ҡағылды.

— «Тартай теленән таба» тигәндәй, ниңә паек тураһында һүҙ ҡыҫтырҙың инде?

— Шайтан бутаны, Иван Перфильевич! — Баш инженер, уңайһыҙланып, баш сайҡаны.

Управляющий, өндәшмәйенсә, треҫка табан ыңғайланы.

Ул, ишекте асып инерҙән алда, туҡталыбыраҡ, үҙенең артынан ҡалмай эйәреп килеүселәргә сәнскеле күҙ ҡарашын һирпте.

— Ярандарым шикелле артымдан ҡалмай эйәреп йөрөргә, мин фельдмаршал Кутузовмы ни? Ниңә ваҡытты әрәм итергә? Барығыҙ үҙ эшегеҙгә!

Профком председателе, иптәштәренә күҙ ҡыҫып, шаяртты:

— Управляющий менән командующий бер төрлө яңғырай түгелме ни, Иван Перфильевич? Шулай булғас, һеҙҙең дә ярандарығыҙ булырға тейеш!

— Мәғәнәһеҙ сағыштырыуҙы бөтөрөгөҙ, — тип асыуланды ла Нифантов тауышын йомшартыбыраҡ һораны: — Төнгө сәғәт икелә кәңәшмә уҙғарыласағын барығыҙ ҙа беләме?

— Белә, — тине баш инженер.

— Хөсәйеновҡа ла хәбәр итегеҙ! Унын кеүек фронтовик-белгестең фекере беҙгә ҡиммәтле, — тип партком

секретарын, профком председателе менән бер нисә инженерҙы үҙенең бүлмәһенә саҡырҙы управляющий. — Ваҡ-төйәк нәмәләрҙе кәңәшләшеп хәл ҡылаһы бар!

Нифантовтың «ваҡ-төйәк» тигәне туҡталған скважиналарҙы эшләтеү, эшләгәндәрен төҙөкләндереү өсөн һуғышҡа тиклем ташланған төрлө оҙонлоҡтағы иҫке торбаларҙы, болттарҙы, фланецтарҙы йыйып алыу, тутыҡҡан торбаларҙың һырҙарын яңыртыу, йүнлерәк туҡымалар табып, ҡайыш стропын тегеү хаҡында ине.

Иҫке ҡорамалдарҙы тейешлесә файҙаланыу өсөн «Туймазынефть» тресы етәкселәре күптәнән баш ватты. Ләкин мәсьәләне ыңғай хәл итеү өсөн күп нәмә кәрәк булды. Промыслаларҙа етешмәгән механизм, транспорт, уларҙан башҡа төрлө ярҙамсы нәмәләр урынына ҡул көсөн файҙаланыу хаҡында ла кәңәшләшеү мөһим ине...

## VI

Башҡортостан республикаһында нефть сығарыуҙы арттырыу, «ҡара алтын»ға бай ер ятҡылыҡтарын табыу өсөн партия өлкә комитеты һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы кисектергеһеҙ саралар күрҙе.

Республика етәкселәренең хәстәрлеге арҡаһында, «Икенсе Баку»лағы барлыҡ нефть промыслаларының материаль-техник базалары бер аҙ нығыны, эвакуацияланып Башҡортостанға килгән «Азнефтеразведка» тресы эше лә ыңғайланы.

Ишембай тирәһендәге ауылдарҙа, Ғафури, Воскресенск, Оло Теләк һәм башҡа бик күп райондарҙа яңы нефть ятҡылыҡтарын эҙләүҙе ойоштороу менән сикләнмәйенсә, партияның өлкә комитеты геологтарҙан Туймазылағы нефть горизонттарының девон ҡатламына разведка уҙғарыуҙы тиҙләтеүҙе талап итте.

Өлкә партия һәм совет ойошмаларының ҡарары буйынса, «Туймазынефть» тресы промыслаларында бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ өсөнсө йылдың аҙағына тиклем Туймазы районындағы егерме биш скважинаны бырауалау, дизель электр станцияһы менән механик мастерскойҙы төҙөү эштәре тамамланырға һәм нефть сығарыу ике тапҡырға арттырылырға тейеш ине. Ләкин республикала нефть табыу саҡ ҡына ла үҫмәне, киреһенсә, айырым промыслаларҙа нефть хатта кәмене.

**Фронтты һәм халыҡ хужалығын иң юғары сортлы шыйыҡ яғыулыҡ — бензин менән тәьмин итеүҙә Бөтә союз күләмендә берҙән-бер предприятие һаналған Өфө нефть**

эшкәртеү заводының артабанғы эшенә тотҡарлыҡ яһау ҡурҡынысы килеп тыуҙы.

Бындай хәлгә бик ныҡ борсолған партия өлкә комитеты секретары Вострецов республикалағы барлыҡ танылған белгестәрҙе, ғалимдарҙы, партия-совет работниктарын, нефть эшенә ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте булған етәкселәрҙе саҡыртып һөйләште. Аҙаҡтан, мәсьәләне урында хәл ҡылырға тырышып, «Башнефтекомбинаты» начальнигы Кувыкин менән Туймазыға барғас уҙғарылған кәңәшмәлә Вострецов үҙе башлап һүҙ алды.

— Иптәштәр, хәрби машиналар өсөн фронт шыйыҡ яғыулыҡтарҙы көндән-көнгә күберәк талап итә. Былтыр төҙөлөп бөтөп файҙаланыуға тапшырылған Ишембай һәм Өфө нефть эшкәртеү заводтары тотҡарлыҡһыҙ эшләй башланы. «Уфимнефтезаводстрой» тресы коллективы өҫтәлмә рәүештә яңы цехтар һәм егерме установка төҙөнө. СССР Фәндәр академияһының шыйыҡса яғыулыҡтар яҡкылығы институты ғалимдары Өфө нефть эшкәртеүселәре менән берлектә хәрби-стратегик яҡтан үтә мөһим булған юғары октанлы авиабензин алыу ысулын эшләне. Үткән йылдың йәйендә, фронтты һәм ауыл хужалығын шыйыҡ яғыулыҡтар менән тәьмин итеү ҡыйынлашҡан ваҡытта, Өфө нефть эшкәртеү заводы үҙ бурысын намыҫ менән үтәне. 1942 йылда был предприятие ҡырҡынсы йыл менән сағыштырғанда таҙа нефть продукттарын ике тапҡырға, авиабензинды ике ярым мәртәбәгә артыҡ эшкәртте. Хәҙер, Башҡортостанда нефть сығарыу кәмеү сәбәпле, Өфө нефть эшкәртеү заводы ҡыйынлыҡтар кисерә. Барлыҡ ышаныс «Туймазынефть» һәм «Ишембайнефть» коллективында! Ике тапҡырға арттырылырға тейешле нефтте бер нәмәгә ҡарамайынса бирергә! Юҡһа һуғыш мәрхәмәтһеҙ, фронт беҙҙе ғәфү итмәйәсәк!..

Туймазыла уҙғарылған кәңәшмәлә ҡатнашыусы Өфө нефть эшкәртеү заводы директоры ла өтөлөп-янып сығыш яһаны.

«Туймазынефть» тресы коллективы Өфө нефть эшкәртеү заводын нефть менән өҙлөкһөҙ тәьмин итәсәгенә ышаныс тотоп, ул сығышын ярһыу тамамланы:

— Бензин, — ул самолеттарҙың, танкыларҙың, автомашиналарҙың ҡаны. Беҙ, нефтселәр, моторҙарҙың һалҡын ҡоросон терелтәбеҙ, уларҙы хәрәкәтләндерәбеҙ. Гитлерсы ҡәбәхәттәргә ҡаршы көрәшеүсе хәрби техникаларҙы тулыһынса файҙаланыу туранан-тура беҙҙең эшкә бәйләнешле булыуы хаҡында иҫегеҙҙән сығармағыҙ!

— Мин дипломат түгел. Дипломат итергә ни саҡлы тырышһалар ҙа, бер ни барып сыҡманы, — тип башланы

һүҙҙе «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов. — Ләкин һуғыш ваҡытындағы яуаплылыҡты мин йөрәгем менән тоям! Фронтҡа күп яғыулыҡ кәрәклеген беҙ яҡшы беләбеҙ һәм девон нефтенең Туймазыла табыласағына ныҡ ышанабыҙ! — Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың фекерен белергә теләгәндәй, ул трибуна аша һонолоп ҡараны. — Аңланығыҙмы, иптәштәр? Мин һеҙҙең исемегеҙҙән партия өлкә комитетына һүҙ бирәм! СССР Оборона Комитеты талап иткән мул девон нефтен беҙ табасаҡбыҙ! — тип ул ҡыҙыл буҫтау йәйелгән оҙон өҫтәл артындағы «Башнефтекомбинаты» начальнигы менән һөйләшеп ултырған Вострецовҡа асыулы ҡарап ҡуйҙы. — Иптәш ВКП(б) өлкә комитеты секретары, бында мин һөйләгәндәр һеҙҙе бер ҙә ҡыҙыҡһындырмаймы әллә?

— Ҡыҙыҡһындыра, бик тә ҡыҙыҡһындыра, иптәш Нифантов, — тине партияның өлкә комитеты секретары, ҡабаланып.

— Ҡыҙыҡһындырғас, ниңә тыңламайһығыҙ?! «Башнефтекомбинаты» начальнигы Кувыкин Степан Иванович менән Өфөгә ҡайтҡас әңгәмәләшергә булмаймы ни?!

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар көлөштө, ә Вострецов, Нифантовтың әҙәпһеҙлегенә асыуы ҡабарып, ҡыҙарынды. Ләкин тыныслығын юғалтманы.

— Үҙегеҙҙе тота белергә өйрәнегеҙ, иптәш управляющий, — тип шелтәләне лә, тегеһе өндәшмәгәс, һораны: — Башҡа һүҙегеҙ юҡмы?

— Бар! — Артыҡ ҡыланыуын аңлап, Нифантов ҡапыл тыйнаҡланды: — Беҙгә торбалар менән ярҙамлашһағыҙ ине, Никита Иванович! — Ватан һуғышы башланғаны бирле бер генә метр ҙа торба биргәндәре юҡ!

— Торбалар, ысынлап та, дефицит, — тине Кувыкин.

— Беҙҙе ундай яуабығыҙ ҡәнәғәтләндермәй, Степан Иванович! — «Туймазынефть» управляющийы Нифантов ҡыҙҙы. — Торба нефть промыслаһының тарамышы, ҡан тамыры икәнлеген, торба буйлап бур төшөрөлөүен, нефть ағыуын беләһегеҙ. Әммә торба менән ярҙамлашырға теләмәйһегеҙ! Беҙҙә хәҙер һәр метр торба, һәр штанга алтынға тиң икәнлеген нисек аңларға теләмәйһегеҙ?!

— Иҫке торбаларҙы файҙаланығыҙ!

— Файҙаланылмаған иҫкеләре лә ҡалманы. Торбалар бирергә мөмкинселек булмаһа, беҙгә фронттағы хәрби производствоға яраҡһыҙ биш дюймлы миномет торбалары ла яраған!

— Осо йәмшәйгән йәки йыртыҡ иҫке миномет торбаларын нефть промыслаларында ҡуллана алырһығыҙмы? —

тип һораны кәңәшмәгә саҡырылған Өфө тау-байыҡтырыу заводы директоры.

— Ебәрһәгеҙ, ҡулланырбыҙ! — Нифантов ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе. — Иҫке минометтарҙың йыртыҡ-йортоҡ остарын киҫеп, фаскаларын бөтөрһәк, ул торбалар беҙгә яҡшы хеҙмәт итәсәк!

— Уларҙы һеҙгә ебәреү өсөн юғарынан рөхсәт алырға ғына кәрәк, — тине Өфө тау-байыҡтырыу заводы директоры.

— Рөхсәт булыр, — тип ВКП(б) өлкә комитеты секретары Вострецов президиум өҫтәле артынан күтәрелде. — Был мәсьәлә менән үҙем шөғөлләнәсәкмен... — Ул «Туймазынефть» тресы управляющийына ҡараны. — Йәнә ниндәй йомошоғоҙ бар, иптәш Нифантов?

— Бүтәнсә юҡ, — тине Иван Парфильевич.

— Һеҙҙеке бөтһә, минең һорау бар!

«Баяғы тотанаҡһыҙлығым өсөн бәйләнә икән», — тип уйлап, Нифантов һағайҙы.

— Тыңлайым, иптәш Вострецов!

— Туймазыла ҙур девон нефте табырға вәғәҙә биреүегеҙ ниндәй факттарға нигеҙләнгән?

ВКП(б) өлкә комитеты секретарының ваҡланмауын аңлағас, трест управляющийы тынысланды.

— Беҙҙең вәғәҙә фәнгә, геологтарҙың расчетына һәм уларҙың тырышлыҡтарына нигеҙләнгән. Хәҙер һүҙҙән практик эшкә күсергә генә ҡала!

— Фекерегеҙҙе асығыраҡ төшөндөрөгөҙ!

— Йөҙөнсө скважинаны быраулауға әҙерлек алып барабыҙ, иптәш Вострецов. Девон нефте табырға өмөтләнеп, барлыҡ көсөбөҙҙө, иң яҡшы ҡорамалдарҙы йөҙөнсө скважина быраулanaсаҡ урынға йыябыҙ. Минең уйым буйынса, беҙҙең геологтарға ышанырға кәрәк! Ер структураһы, шул тирәлә табылған керн ошо хаҡта һөйләй.

— Йөҙөнсө скважина быраулanaсаҡ ерҙе барып ҡараһаҡ, нисек булыр? — тип һораны Кувыкин.

Уның тәҡдиме партия өлкә комитеты секретарына оҡшаны.

— Барайыҡ. Кәңәшмәне шунда барғас дауам итербеҙ, — тине ул.

Саналарға тейәлеп, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар юлға сыҡты.

Аттар ҡушарлап егеүле кашауайҙа Кувыкин менән ярыш ултырған Вострецов, «Туймазынефть» тресы конторaһы эргәһенән ҡуҙғалып киткәс, проектһыҙ ашыҡ-бошоҡ төҙөлгән бер ҡатлы саман стеналы бараҡтарҙы алан-йолан күҙәтте.

— Торлаҡтар хөрт, күпселек бараҡтарҙың стеналары йшелеп төшә башлаған, — тине ул, эсе бошоп.

— Улар ваҡытлыса... Туймазыла ла, ҡалалағы шикелле, күп ҡатлы кирбес йорттар төҙәсәкбеҙ, — тине «Башнефтекомбинаты» начальнигы Кувыкин, хыялланып. — Ошоға тиклем яҡшы торлаҡтар төҙөргә бер ниндәй мөмкинлек булманы. Бындағы ҙур нефть ҡыйынлыҡтар менән тыуа. Утыҙынсы йылдарҙан бирле һәр метр ерҙе беҙҙең разведка ентекләп тикшерә. Утыҙ етенсе йылдың аҙағына саҡлы бында биш мең тонна нефть табылды.

— Күп табылмаған.

— Әлеге нефть менән сағыштырғанда, әлбиттә, аҙ, үтә аҙ, — тип ризалашты Кувыкин. — Ләкин утыҙынсы йылдарҙа табылған нефть арҡаһында, Башҡортостанда Икенсе Баку тыуыуын һәм нефттең йылдан-йылға үҫә барыуын онотоға ярамай! Был партияның XVIII-се съезында ла ап-асыҡ әйтелде. Хәҙер, Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа, әлеге темп беҙҙе һис ҡәнәғәтләндермәй. Шуға күрә ерҙең иң тәрән ҡатламындағы девон нефте ҡыҙыҡһындыра. Ҙур нефть Туймазыла әллә бар, әллә юҡ...

— Икеләнәһегеҙме, Степан Иванович?

— Мин икеләнәм, ә Главнефттә беҙҙә ҙур нефть табыласағына бөтөнләй ышанмайҙар. Тәрән ер ҡатламын бырауылауҙы тыйырға маташып, Главнефть етәкселәре беҙгә төрлө мәшәҡәттәр тыуҙыра.

— «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов ҙур нефть табыласағына бер ниндәй икеләнеүһеҙ ышана, — тине Вострецов.

— Ул иң элгәре үҙенең интуицияһына таяна!

— Уның тупаҫлығы кешеләрҙе үҙенән биҙҙермәйме?

Нифантовтың бойондороҡһоҙ холҡо, тупаҫыраҡ ҡыланышы, бер кемдең дә абруйы, тотҡан дәрәжәһе менән иҫәпләшмәүе Вострецовтың зитына ныҡ тейеүен һиҙеп, яйы тура килгән саҡта Кувыкин үҙе белгәндәрҙең һәммәһен әйтеп ҡалырға ашыҡты:

— Шулай ҡырыҫ холоҡло булырға Нифантовты ауыр тормош өйрәткән. Ул ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Йәшләй генә большевиктар партияһы сафына ингәс, губком ҡушыуы буйынса төрлө эштәр башҡарған. Нефть промыслаһында эшләп, Баку ҡалаһында бер аҙ уҡығандан һуң, Верхне-Чусовских ҡаласығында, Башҡортостанда һәм Ҡаҙағстанда ер бырауылаған. Утыҙ етенсе йылда Промакадемияны тамамлағас, «Туймазынефть» менән «Краснокамскнефть»та промысла мөдире, трест управляющийы һәм Ҡаҙағстандың нефть комбинаты начальнигы вазифаһын башҡарған... Әйтергә кәрәк, Иван Перфильевич

һәләтле, эшкә йәнс-тәнс менән бирелгән етәксе-коммунист, һәм унан бик күп нәмәгә өйрәнергә мөмкин.

Вострецов, битен ҡаплаған толобы яғаһын ҡайырып, сәнскеле ҡараш һирпте.

— Тупаҫлыҡҡа ламы?

Кувыкин, Вострецовтың һорауына иғтибар итмәгән һымаҡ, өндәшмәне. Былай ҙа шәп барыусы аттарҙы һуҡҡылап та тартҡылап ҡабаландырыусы күсерҙең елкәһендәге ҡар өйөмөнә текләгән көйө байтаҡ өндәшмәй барғандан һуң ғына яуап ҡайтарҙы:

— Иван Перфильевичтың ҡаты холоҡло булыуына бында бер кем дә зарланмай, киреһенсә, һәммәһе уны ихлас ихтирам итә. Сөнки ул ғәҙел, эш өсөн өтөлөп-яныпп йәшәй. Үҙенә генә хас шәхес булараҡ, Иван Перфильевич промыслаларҙағы һәр эшсе менән уртаҡ тел таба белә.

— Нефть эшендә Нифантов шәп етәксе тип әйтмәксе булаһыңмы?

— Эйе, — тип баш ҡаҡты Кувыкин. — Иван Перфильевич Нифантов бер кем менән алмаштырғыһыҙ һәм ғүмеренең аҡтыҡ минутына тиклем Туймазыла ҙур нефть табыу өсөн көрәшәсәк!

— Бик һәләтле етәксе булғас, ниңә уны үрләтмәйҙәр?

— Главнефть күпме тапҡыр үрләтергә тырышып-ныҡышып та Нифантовты Туймазынан китергә күндерә алманы.

Киҫкен һыпыртма ел, ҡар өҫтөндә һерәйешеп торған ҡыу үлән баштарын һелкетеп, ҡайҙалыр алыҫтағы тауҙар теҙмәһенә ҡарай елдерә...

Күңелһеҙ, эс бошорғос дала киңлеге буп-буш. Сана юлының әле уң, әле һул яғында бик йыш осраған нефть скважиналарын уҙып байтаҡ ер барғас ҡына, тәбиғәт күренешен төрлөләндереп, дала тау-ташлы урындарҙа үҫкән ағастар менән алмашынды.

Үҙәкте аша сығып, сауҡалар үҫкән һөҙәк тау итәгенән һуҙылған юл уңға ҡайырылды һәм бер урында өйөлөшөп торған нефтселәр күренде.

Уларҙың һәр ҡайһыныһы менән күрешеп сыҡҡас:

— Йөҙөнсө скважина ошонда бырауланасаҡмы? — тип һораны Вострецов.

— Ошонда,— тине Нифантов, кашауай санаһынан төшкән ыңғайҙа. Ул, девон нефтен күрһәтергә теләгәндәй, аяғы аҫтындағы ҡарҙы быйма үксәһе менән тапаны.

— Бырауылау эше ҡасанға билдәләнгән?

— Киләһе аҙнала башлайбыҙ.

— Өлгөрәһегеҙме?

— Өлгөрмәҫкә хаҡыбыҙ юҡ! — тине Нифантов. — Йөҙөнсө скважинаның быраулау барышын үҙем контролгә алам һәм Туймазыла ҙур нефть тапмайынса бер ҡасан да тынысланасаҡ түгелмен!

— Йөҙөнсө скважинаны быраулауҙа берәр төрлө тотҡарлыҡ килеп тыуһа йәки ҡорамал етешмәһә, Иван Перфильевич, туранан-тура үҙемә шылтыратығыҙ, — тине Вострецов.

ВКП(б)-ның өлкә комитеты секретары менән мөнәсәбәте яҡшырыуына трест управляющийы артыҡ шатланманы.

— Телефонығыҙ миңә кәрәкмәй, иптәш Вострецов! Бик кәрәкһәгеҙ, һеҙҙе йәһәннәмдең төбөндә булһағыҙ ҙа табырмын! Хәҙер вәғәҙә иткән миномет торбаларын ебәртеүҙе йәһәтләгеҙ!

Ҡыҙыулығы менән Нифантовтың ҡабаттан эште боҙоп ҡуйыуынан ҡурҡҡан Кувыкин әңгәмә йүнәлешен үҙгәртте:

— Иван Перфильевич, быраулаnасаҡ йөҙөнсө скважинаға яуаплы итеп трест кешеләренән кем беркетелде?

— Әйттем бит, йөҙөнсө скважинаға үҙем яуаплы! — тине Нифантов.

— Бындай эшкә промысланың өлкән инженерын ниңә ылыҡтырманығыҙ?

— Уны бер ниндәй эштән ҡалдырғаныбыҙ юҡ, Степан Иванович!

— Шулай булғас, ниңә күренмәй өлкән инженер?

— Хөсәйенов бында булырға тейеш. — Нифантов тирәяғына алан-йолан ҡаранды. Нефтселәр менән бер яҡ ситтә һөйләшеп торған Хөсәйеновты күргәс, ҡулын болғай-болғай, ҡысҡырып өндәште: — Ә-әй, Искәндәр Сабитович, ҡайҙа йөрөйһөң?! Кил, үҙеңде түрәләр күрергә теләй!

Күн тышлы иҫке бүркен маңлайына батыра кейеп, өҫтөндәге ҡарҙы һыпырҙы ла Хөсәйенов нефтселәр төркөмөнән айырылды.

Уның ашыҡмай ғына яҡынлашыуына иғтибар итеп, оҙонсай ябыҡ йөҙөнә, боҙланған күҙлегенә, ҡаҡса кәүҙәһенә текләп ҡараған Кувыкин Вострецовҡа бышылдап ҡына әйтте:

— Алтынсы скважиналағы көслө нефть фонтанын урғылтырға мәжбүр итеүсе йәш һәм перспективалы инженерыбыҙ!

— Партияһыҙмы?

— Коммунист!

— Башҡорт кавалерия дивизияһы менән фронтҡа ебәрмәй алып ҡалған егет түгелме?

— Тап үҙе, — тине Кувыкин.

— Әләйһә, уны мин беләм... Ишембайҙа эшләгән сағында танышҡайныҡ. Уны «Ишембайнефть» етәкселәре әле лә маҡтап телгә ала...

Хөсәйенов менән байтаҡ ваҡыт һөйләшеп торҙо Вострецов.

Треста башланған кәңәшмә йөҙөнсө скважинаны быраулаясаҡ нефтселәр менән берлектә дауам итте.

Кәңәшмә тамамланғандан аҙаҡ «Туймазынефть» тресына кире килгәс, Вострецов Нифантовтан һаҡлыҡ менән генә һораны:

— Иван Перфильевич, һеҙгә бер үтенесем бар. Мөмкинме?

— Тыңлайым!

— Инженер Хөсәйеновты өлкә комитетына эшкә күсерһәк, ни әйтерһегеҙ?

— Шаяртаһығыҙмы, иптәш Вострецов?

— Ихлас әйтәм.

— Хөсәйенов бында кәрәк! — тип ҡырт киҫте трест управляющийы, һәм уның йөҙө таный алмаҫлыҡ булып үҙгәрҙе.

— Партия өлкә комитеты аппаратында ла ул Туймазы нефте менән шөғөлләнәсәк!

— Ошо булдымы беҙгә ярҙамығыҙ, иптәш Вострецов?! Хөсәйеновты беҙҙән алһағыҙ, мине лә управляющий вазифаһынан бушатығыҙ!

— Коммунист булараҡ, һеҙ...

— Коммунист булараҡ, минең бурыс икенең береһе: Туймазыла ҙур нефть табырға бурыслымын йәки фронтҡа китәсәкмен! — тине трест управляющийы, ярһып.

Кувыкин менән «Башнефтекомбинаты»ның баш геологы Трофимук та Нифантов яҡлы икәнлеген белгәс, партияның өлкә комитеты секретары трест управляющийы менән ризалашырға мәжбүр булды.

## VII

Өфөгә ҡараңғы төндә генә ҡайтҡас, Вострецов туптура партияның өлкә комитетына барҙы. Фатирына шылтыратып, ҡабул итеү бүлмәһендәге дежурный ҡайнатҡан чифир шикелле ҡап-ҡара ҡаты сәйҙе эсте лә, Мәскәүҙәге Главнефть начальнигы менән Туймазы өсөн торба һәм бүтән төрлө мәсьәләләр хаҡында телефондан һөйләшә генә башлағайны, Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе Вәһапов килеп инде. Ул баш ҡағып иҫәнләште лә, Мәскәүҙәге Главнефть начальнигы менән телефондан пыр туҙышып алышҡан Вострецовҡа ҡамасауламаҫҡа тырышып,

бүлмәнең урам яҡ стенаһының буйынан-буйына һуҙылған оҙон өҫтәлдең икенсе осондағы ултырғыстарҙың береһенә ултырҙы.

Ҙур девон нефте табыу өсөн ҙур тырышлыҡ һалған Туймазынефть етәкселәренең хәлен ҡат-ҡат аңлатып, уларға торба менән ашығыс ярҙам ойоштороуҙы талап иткән Вострецов Главнефть начальнигы менән оҙаҡ бәхәсләште.

— Партияның Башҡортостан өлкә комитеты туймазыларҙың ҙур девон нефтен табасағына ныҡ ышана һәм «Туймазынефть» тресы управляющийы иптәш Нифантовҡа тейешле ярҙам ойоштороу сараһын күрәсәк, — тип ҡысҡырҙы ул, ярһып. — Главнефть начальнигының шулай пессимист булыуы, Туймазыла ҙур нефть табыласағына ышанмауы беҙҙе бик борсой һәм үкендерә, — тип уның менән һүҙен тамамлағас, Мәскәүҙәге наркомға һәм нефть буйынса шөғөлләнеүсе СССР Дәүләт Оборона Комитеты ағзаһына шылтыратты. Улар менән һөйләшеп бөткәс, тамам тынысланып, ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Был мәсьәлә ыңғай хәл ителде, — тип ул телефон аппаратына ымланы. — Өфө тау-байыҡтырыу[1] заводындағы һәм бүтән өлкәләрҙәге иҫке миномет көбәктәренә өҫтәп, «Туймазынефть» тресы өсөн өр-яңы торбалар бирергә вәғәҙә бирҙеләр!

— Һәммәһенә төшөндөм, Никита Иванович! «Туймазынефть» етәкселәренең үҙ һүҙендә тороуына мин дә ышанам! — тине Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе Ваһапов. — Ундағы нефтселәрҙең тормошо, көнкүреше нисек?

— Нисек икәнлеге билдәле инде. — Вострецов Мәскәү менән һөйләшеү ваҡытындағы тәьҫирләнеүенән һаман баҫыла алмайынса, папирос тоҡандырҙы. — Ҡарточканан тыш, премия урынына, төнгө вахтала иң ауыр эш һаналған скважина ремонтлаусыларға кәбеҫтәнән йәки картуфтан бешерелгән берәр пирог бирәләр. Ҡешеләр унда ла аслы-туҡлы йәшәй. Төндәрен, ҡараңғыла тиерлек эшләп, планды йөҙ илле — йөҙ етмеш процентҡа арттырып үтәйҙәр. Күпселек бригадалар тыл гвардеецтары исеменә лайыҡ булған. Эшсе ҡатын-ҡыҙ, бала-саға бик ныҡ йонсо-

---

[1] Бөйөк Ватан һуғышы башланғандың беренсе көндәрендә үк Өфө тау-байыҡтырыу заводында мина корпусын ҡойоу һәм М-13 снаряды деталдәрен эшкәртеү буйынса ике цех төҙөлдө. Завод үҙ заданиеһын йыл да арттырып үтәне. Белореттағы «Автотрактордеталь» заводы ла 1942—1943 йылдарҙа 7,6 млн. һумлыҡ оборона продукцияһы сығарҙы.

ған. Әммә нисәмә кеше менән һөйләштем, береһе лә ҡыйынлыҡтарға зарланманы.

— Бөтә скважиналар ҙа эшләйме?

— Эшләй. Авариялар юҡ. Үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә ҡатнашыусылар күрһәткән концертта ла булырға тура килде миңә. Ундағы сығыштар ҙа кешеләрҙе күберәк нефть табыуға рухландырырҙай итеп ойошторолған, — тип Вострецов һәүәҫкәр артистарҙан отоп алған бер нисә шиғырҙы уҡып ишеттерҙе:

И не двинутся машины
В грозном танковом полку,
Если в баках нет бензина
Из далекого «Второго Баку»...

Йәки бына икенсе шиғыр:

Туймазинец, помни, нефть
нужна везде —
На суше, в воздухе
и на воде...

— Уларҙы кемдәр сығара? — тип һораны Ваһапов.

— Авторҙары билдәһеҙ. Халыҡ таланттарға бай бит ул.

— Һин Туймазыла саҡта иптәш Сталин шылтыратты, — тине Ваһапов.

Вострецов йөрәкһене.

— Нефть хаҡында һораштымы әллә?

— Нефть хаҡында ла, оборонаға бәйләнешле барлыҡ предприятиеларҙың, бигерәк тә Белорет заводтарының ҡырҡ икенсе йылғы эш йомғаҡтары менән ҡыҙыҡһынды. Нефть буйынса беҙҙе Дәүләт Оборона Комитеты ултырышында тыңларға тейештәр...

— Ниңә башта уҡ әйтмәнең был хаҡта?

— Бушауыңды көттөм.

— Республикалағы хәлдәрҙе Оборона Комитеты Председателенә төшөндөрҙөңмө?

— Минең менән ул оҙаҡ һөйләшмәне. СССР Госпланы председателе иптәш Вознесенский менән бәйләнеште өҙмәҫкә ҡушты. Беҙҙең хәл уға билдәле бит.

— Иптәш Вознесенскийға һәммәһе билдәле булыуына мин дә шикләнмәйем. СССР Оборона Комитетына саҡыртһалар, беҙ әҙер түгел!

— Ниңә әҙер түгел ти? Бөтә нәмә әҙер!

Вострецов стеналағы боронғо сәғәткә ҡараны.

— Теүәл ун бер! Таңға тиклем ваҡыт етерлек. Йә, улайһа, үткән йылғы эш йомғаҡтарын һәм быйылғы эш барышын өлкә комитеты бюроһында һәм Совнарком ултырышында тикшереп, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә йүнәлдерелгән ҡарар ҡабул итергә кәрәк беҙгә, — тип ул яуаплы республика етәкселәрен йыйырға ҡушты.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғандан бирле көн дә тиерлек бюро ултырышы йыйыу йәки республиканың партия-совет һәм хужалыҡ етәкселәре менән бергә төндә эштә уҙғарыу ғәҙәткә ингәнлектән, ун-ун биш минут та уҙмаңы, саҡыртылған кешеләр ВКП(б) өлкә комитеты секретары бүлмәһенә йыйылырға ла өлгөрҙө.

Бында тикшереләсәк төп мәсьәлә буйынса докладты Башҡорт АССР-ының Дәүләт планы председателе Ниғмәтйәнов Ғилман Вилданович яһаны.

— Республика промышленносын хәрби ҡоролошҡа үҙгәртеп көйләү уңышлы тамамланды, һәм ҡырҡ икенсе йылда материаль-техник яҡтан дошмандан өҫтөн булыу өсөн илебеҙҙә тейешле шарттар тыуҙы, — тип Ниғмәтйәнов республикала нефть сығарыу эшенән башланы ла, ҡалған предприятиеларҙың ниндәй хәлдә икәнлеген ентекле анализларға тотондо: — Партияның өлкә комитеты секретары исеменә ебәрелгән Дәүләт Оборона Комитеты телеграммаһын алғандан аҙаҡ, Белорет заводтарының эше ынғайланы. Ҡорос сым заводы оборона промышленносына алтмыш төрлө ҡорос сым әҙерләне, хәрби машиналар өсөн тростар, шариклы подшипник һәм пружиналы сымдар етештерҙе. Белорет металлургия комбинаты сығарған суйын менән ҡорос ҡырҡынсы йыл менән сағыштырғанда бер ярымға артты. Белорет металлургия комбинаты марганецлы, хромлы рудаларҙы иретеп юғары сифатлы ҡоростар сығарыуға өлгәште. Башҡортостан геология идаралығы ҡырҡ беренсе — ҡырҡ икенсе йылдарҙа боксит, марганец, кобальт, никель, баҡыр рудаһы һәм оборона промышленносы өсөн әһәмиәтле булған башҡа төрлө һирәк осраған металл ятҡылыҡтары эҙләп тапты. Башҡортостанда сығарылған боксит рудалы Мгнитогорск, Ҡузнецк металлургия заводтарында һәм һигеҙ оборона заводында файҙаланыла.

Машина эшләү һәм металл эшкәртеү предприятиелары миналар, авиабомбалар, снарядтар һәм башҡа төрлө продукция етештереүҙе тулыһынса үҙләштерҙе. Благовещенскиҙағы машиналар эшләү, яҙыу машиналары заводтары, Өфөләге, Стәрлетамаҡтағы, Белореттағы механика мастерскойҙарының айырым цехтары боеприпастар сығарыуға күсте. Паровоздар ремонтлау заводы, мәҫәлән, эш-

тең ҡырҡ һигеҙ процентын оборона өсөн башҡара. Ул бронепоездар, бронеплощадкалар сығарыуҙы үҙтәштерҙе, «ФД» маркалы ҡеүәтле паровоздарҙы ремонтлауға өлгәште. Октябрь революцияһы исемендәге Өфө судноларремонтлау заводы Ҡыҙыл Армия өсөн аэросаналар эшләп сығара башланы. Владимир Ильич Ленин исемендәге Стәрлетамаҡ заводы коллективы үткән йылда танкылар һәм оборона заводтары өсөн төрлө инструменттар, деталдәр эшләне, бик күп артиллерия снарядтары эшләп сығарҙы, Өфө машиналар эшләү заводының йыллыҡ продукцияһы ике ярымға үҫте...

— Башҡортостанға эвакуацияланған предприятиеларҙың һуңғы ваҡытта башҡарған эшен дә әйтеп үтһәгеҙ ине. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар һәммәһен белергә тейеш, — тине Вострецов.

Дәүләт планы председателе Ниғмәтйәнов, ҡалын күн папка эсендәге ҡағыҙҙар араһынан кәрәген һайлап алғас, күҙ йөрөтөп сыҡты.

— Башҡортостанға эвакуацияланған күпселек предприятиеларҙы монтажлау һәм уларҙың оборона продукциялары сығара башлауы ҡырҡ икенсе йылдың уртаһында тамамланыуы республика етәкселәренә билдәле, Никита Иванович! Шуға күрә, иң мөһимдәренә генә туҡталырға теләйем. Аҙаҡҡы йылда электротехник, химик, станоктар төҙөү, авиация моторҙары төҙөү кеүек яңы промышленность тармаҡтары барлыҡҡа килде. Мәскәүҙән, Ленинградтан, Рыбинскиҙан күсерелгән ҡоролмаларҙы яңы төҙөлгән майҙандарға ҡыҫҡа ваҡыт эсендә урынлаштырылғандан һуң, Өфө моторҙар эшләү заводы коллективы хәрби самолеттар өсөн ҡеүәтле моторҙар сығарыуҙы тулыһынса үҙләштерҙе. Хәҙер ул моторҙар Пе-2 бомбардировщиктарына, Як-3, Як-7, Як-9 истребителдәренә ҡуйыла. Моторҙарҙан башҡа, авиация соединениелары һәм предприятиелар өсөн завод төрлө ҡорамалдар, кәрәк-яраҡ сығара...

— Ошо көндәрҙә ҡайҙа, ниндәй заводтар урынлаштырылыуын да һөйләһәгеҙ ине, — тине Ваһапов.

— Аңлашыла. Үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, был тәңгәлдә республикала күп эш башҡарылды һәм башҡарыла, — тип Ниғмәтйәнов, ҡағыҙҙарына ҡарамайынса, ятҡа һөйләне: — Мәскәү «Ураҡ-Сүкеш» заводының биметалл цехы ҡорамалдары Белорет заводында, СССР наркомчерметы ҡарамағындағы Харцызский менән Одессаның канат заводтары — Белорет ҡорос сым заводында урынлаштырылды. Запорожье, Гомель, Изюмь, Сталинславтан килтерелгән ҡорамалдар Өфө паровоз ремонтлау заводына ҡу-

йылды. Орша тимерсыбыҡ-сөй, Гомель быяла, Микаш фанер заводтары, Мәскәүҙең күн комбинаты, туғыҙ шәкәр заводы, механизацияланған егерме май эшкәртеү заводы ҡоролмалары республикалағы оҡшаш предприятиеларға ҡушылды. Беренсе Май исемендәге Өфө шырпы фабрикаһының производство майҙанында Ҡалуганың «Гигант» шырпы фабрикаһы, Витебскиҙың «Прогресс» аяҡ кейеме фабрикаһы Өфө аяҡ кейеме фабрикаһында урынлаштырылды. Туапсенән килтерелгән нефть заводы ҡоролмалары Благовещенск машиналар төҙөү заводына бирелде. Яңы төҙөлә башлаған Өфө көкөрт кислотаһы заводы бинаһына Рубежанскиҙан күсерелгән химия заводы ҡуйыла. СССР Дәүләт Оборона Комитеты ҡарары буйынса, Стәрлетамаҡта — Дзержинский исемендәге Баку нефть заводы ҡорамалдары менән Әзербайжан тресының нефть разведкаһы; Ишембайҙа һәм Туймазыла Майкопнефтегазстрой, Грозный нефть комбинатының быраулау конторалары һәм башҡа бик күп ҡалаларҙан күсерелгән заводтар менән ҡорамалдары урынлаштырылды...

— Иптәш Ниғмәтйәнов, ниңә быларҙың һәммәһен һанарға? Иң мөһимен әйтеү ҙә еткән бит, — тине Вострецов, докладсыны бүлдереп. — Ҡыҫҡаса урындағы промышленность торошон әйтегеҙ!

Сөм-ҡара ҡуйы ҡашы аҫтындағы уйсан һәм аҡыллы күҙҙәрен бер нөктәгә төбәлдереп, бүленгән фекерен нисек ялғарға белмәгән һымаҡ бер аҙ шымып торғандан һуң, Ғилман Вилданович һүҙен дауам итте:

— Эвакуацияланған предприятиелар иҫәбенә республикала еңел, аҙыҡ-түлек, урында товарҙар етештереү промышленностары байтаҡҡа үҫте. Өфө, Ишембай, Черниковск фабрикалары фронт өсөн хәрби кейем, маскхалат, противогаздар өсөн тоҡсайҙар тегеүгә, Новотроицк фабрикаһы шинель буҫтауҙары, кейем өсөн...

— Улары кәрәкмәй, иптәштәргә яҡшы билдәле, — тине Вострецов. — Барыһы ла ал да гөлмө ни? Мөһим мәсьәләләрҙе хәл ҡылыуҙа тотҡарлыҡ яһаған етешһеҙлектәрҙе асыу, республика етәкселәренән кемдәр насар эшләүен тәнҡитләү урынына, һеҙ предприятиеларҙың ыңғай яғын һөйләү менән генә мауығаһығыҙ!

Вострецов әйткәнгә Ваһапов та ҡушылды:

— Ғилман Вилданович, республиканың Госплан председателе булараҡ, һеҙ етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә нимә тотҡарлыҡ яһауы, ошо кәңәшмәлә ҡатнашыусы наркомдарҙан, хужалыҡ етәкселәренән кемдәр үҙ вазифаһын йомшаҡ үтәүе, эш барышына тотҡарлыҡ яһаусылар кемдәр икәнлеген хаҡында һөйләгеҙ!

— Аңлашыла...

Ниғмәтйәнов Дәүләт Оборона Комитеты заказдарын үтәү буйынса республикалағы етешһеҙлектәр хаҡында һөйләй башлағас та, әлегәсә йоҡомһорап ултырған кешеләр йәндәнде һәм һағайҙы.

Вострецов, Ниғмәтйәновты бик йыш бүлдереп, партияның өлкә комитеты бюроһы һәм Халыҡ Комиссарҙары Советы ултырышында ҡатнашыусыларҙың әле береһен, әле икенсеһен торғоҙоп, етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөүҙе талап итте...

Ниғмәтйәновтан аҙаҡ һүҙ алыусыларҙың да сығышы фәһемле булды. Етешһеҙлектәрҙе йәшермәйенсә, эшкә тотҡарлыҡ яһаусыларҙың исемен асыҡтан-асыҡ әйтеп, улар бер-береһен ҡаты тәнҡитләне, һәм етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөүгә йүнәлтелгән махсус ҡарар ҡабул ителде.

Иртәнге биш тулғанда ғына тамамланған ултырыштың һөҙөмтәһе менән Вострецов ҡәнәғәт ине.

— Хәҙер иң мөһиме — башланған эште һүлпәнәйтмәйенсә, һәр тармаҡ буйынса көсөргәнешлекте арттырыу, — тине ул, Ваһапов менән икәүҙән-икәү генә бүлмәлә ҡалғас.

— Ҡырҡ икенсе йылдың һигеҙенсе декабрендәге ҡарар буйынса төҙөлгән «оператив бюро» ярҙамында Дәүләт Оборона Комитетының хәрби заказдары үтәлеше даими рәүештә тикшерелә барыла.

— Йә, ярай. Ҡайтабыҙмы?

— Ваҡыт, таң яҡынлаша бит инде!

— Командировканан ҡайтҡандан һуң да ҡатынға күренмәһәм, миңә ныҡ әләгәсәк, — тип Вострецов өҫ кейемен кейҙе.

Урамға сыҡҡас, Ваһапов Вострецов менән бергә ҡайтырға теләмәне.

— Совнаркомға инеп сығам әле. Мине кешеләр көтә, — тип ул Халыҡ Комиссарҙары Советына табан ыңғайланы.

Эш урынында Ваһапов оҙаҡ булманы. Мөһим мәсьәләләрҙе тиҙ-тиҙ генә хәл итте лә фатирына ҡайтып китте. Әммә ярты сәғәттән ары ял итергә тура килмәне. Дары заводы урынлашҡан иҫке барактарҙың түбәһен көслө дауыл алып бырағытҡандан һуң да эш туҡталмауы, төнгө сменаға ҡалған вальцовщиктар ҡышҡы һыуыҡта аслытуҡлы көйө эшләүе, нормала ҡаралған ике йөҙ ун алты килограмм урынына бер мең ике йөҙ килограмм дары эшләп сығарыуы хаҡында Халыҡ Комиссарҙары Советындағы дежурный шылтыратты. Ошо уңайҙан файҙаланып, ВКП(б) өлкә Комитеты парторгы дары заводында митинг уҙғарырға һәм социалистик ярыш алдынғыларын икешәр пачка тәмәке, икешәр йөҙ грамм икмәк менән бү-

ләкләргә әҙерләнеүен белгәс, Ваһапов та унан ситтә ҡалырға теләмәне.

— Митингыла мин дә булырға тейешмен. Көтһөндәр,— тип ҡабул итеү бүлмәһендәге дежурныйҙы иҫкәртте лә ул Вострецовҡа шылтыратты һәм машинаһын саҡыртты.

Юлда барышлай, Сабир Әхмәтйәнович совет халҡының көнөн-төнөн арыу-талыуҙы белмәй эшләүенә, иҫ киткес ҡыйынлыҡтарға сыҙауына ғәжәпләнеп барҙы. Ауырлыҡтар менән иҫәпләшмәй, фронт өсөн бөтә нәмәләрҙе етештерергә тырышҡан тылдағы кешеләрҙең көсөргәнешле хеҙмәтен, уларҙың дошманға ҡарата булған көслө нәфрәтен, Ватан-әсәне өҙөлөп яратыуын нимә менән генә үлсәргә мөмкин икән? Ундай үлсәү юҡ һәм бер ҡасан да булмаясаҡ!

«Дары — һуғыш икмәге. Былдай хәҡиҡәтте аңламаһа, дары заводы эшселәре иң ауыр шарттарҙа ла шундай ҙур күрһәткестәргә өлгәшә алыр инеме?» — тип уйланы Ваһапов һәм ҡыйыҡһыҙ торған дары заводын, уның һалҡын цехтарындағы ауыр күренеште, төнө буйы ялһыҙ-ниһеҙ эшләгән кешеләрҙең йонсоу йөҙөн һәм улар менән бер рәттән немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы ошондай һалҡын көндәрҙә ҡанын-йәнен аямай һуғышыусы яугирҙарҙың фронтта нисек интегеүен күҙ алдына килтерҙе. Эйе, тылда ла, һуғышта ла һәммәһенә ауыр! Тәрән рейдтан бик күп юғалтыуҙар менән сыҡҡандан һуң ялға күсерелгән 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының артабанғы яҙмышы нисек барып тамамланыр икән?..

## VIII

1943 йылдың егерменсе майында, көндөҙгө сәғәт теүәл ун ике тулғанда, нәфис буйлы йәм-йәшел ҡайындар менән уратып алынған аҡлан уртаһында 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының полктары сафҡа теҙелде.

Урта өлөштә ҡуйылған трибунаның бер яҡ ситендә урынлашҡан хәрби оркестранттарҙың ентекле таҙартылған баҡыр торбалары алыҫтан алтын кеүек ялтырай.

Байрамса кейенгән һыбайлыларҙың йөҙө шат, ғорур. Уларҙың күбеһенең күкрәгендә орден һәм миҙалдар. Айырым һалдаттарҙың маңлай-бите ап-аҡ марлялар менән уралған. Яралары тулыһынса уңалып бөтмәйенсә, улар госпиталдән йәһәтерәк сығырға тырышҡан.

58-се кавалерия полкының байрағы тәңгәлендә үрә ҡатып торған полк командиры гвардия подполковнигы Күсимовтың йөҙө лә ғорур ине.

«Смирно» командаһы яңғыраны.

һындарын ҡатырып тороусы кавалеристар тып-тын ҡалып, бурҙат төҫтәге ебәк ҡыҙыл байраҡты күтәреп килеүсе гвардеецтар төркөмөн күҙәттеләр. Ҡыҙыл байраҡҡа Владимир Ильич Лениндың һыны төшөрөлгән һәм «За нашу советскую Родину» тигән һүҙҙәр яҙылған.

Дивизия байрағын күтәреп килеүселәр артынса 7-се кавалерия корпусы командиры күренде. Уға ҡаршы йүнәлгән 16-сы кавдивизия командиры Белов рапорт тапшырғас, бер төркөм юғары офицерҙар ҡаршылағы трибунаға күтәрелде.

Ҡыҙыл төҫтәге бәрхәт байраҡтар елберләүе, ҡояш нурҙарына мансылған ер өҫтөнөң еңелсә дымланыуы, оркестр торбалары менән яугирҙар күкрәгендәге ордендар һәм миҙалдарҙың ялтлауы тантаналы күренештең йәмен арттырҙы.

Телмәр менән ҡыҫҡаса сығыш яһаған 7-се корпус командиры 16-сы дивизияның Ҡыҙыл байрағын гвардия полковнигы Беловҡа тапшырғас, көслө «ура» яңғыраны.

Белов, ергә теҙләнеп, байраҡтың ситенән үпте һәм ҡабаттан трибунаға күтәрелде. Ул ҡулындағы ҡағыҙҙы тулҡынланыу ҡатыш тантана менән уҡый башлағас та, меңәрләгән гвардеецтар, изге байраҡ ҡаршыһында тубыҡтарын еңелсә бөгөп, ант һүҙҙәрен дәррәү ҡабатланы:

«Гвардеецтар Байрағын ҡабул итеп, социалистик илебеҙ өсөн киләһе яңы һуғыштарҙа еңеү данын арттырырға, уны юғары тоторға һәм намыҫ менән алып барырға ант итәбеҙ. Бөйөк Лениндың яҡты төҫө алдында тубығымды бөгөп, уның исеме менән гвардеецтар байрағына аҙаҡҡа саҡлы тоғро булырға, дошманды тулыһынса еңеү өсөн аҡтыҡ тамсы ҡанымды һәм ғүмеремде йәлләмәйенсә, Ватанды аҡыл һәм намыҫ менән батырҙарса һаҡларға ант итәм...»

Гвардеецтар анты тамамланғандан һуң:

— Байраҡты Берлинға тиклем алып барырбыҙ!

— Ошо байраҡ аҫтында фашистарҙы үҙ өңөндә дөмөктөрөрбөҙ!

— Немец окупанттарына үлем! — тип ҡысҡырған һәм дәррәү «ура» тауыштары артынса оркестр уйнап ебәрҙе, уға берҙәм ҡушылып йырлаған гвардия полктары бер-бер артлы урындарынан ҡуҙғалды.

Вставай, страна огромная,
Вставай на смертный бой
С фашистской силой темною,
С проклятою ордой.

Йырҙың һәр һүҙе тигеҙ сафҡа теҙелгән взводы алдында барған Бәйдәүләтовтың йөрәге аша уҙып, ҡан тамырҙарын таштырғандай тойолдо. Ул, өҙөлөп һөйгән йәш кәләшенән, әсәһенән, тыуған еренән айырыусы фашист илбаçарҙарына ҡарата булған нәфрәтле асыуы артҡандан-арта, көсәйгәндән-көсәйә барыуына сыҙамайынса, ярһыны.

Пусть ярость благородная
Вскипает как волна.
Идет война народная,
Священная война...

Төшкө ашты ашағас, эскадрондарҙа уҙғарылған тантаналы йыйылыштарҙа яугирҙарға орден һәм миҙалдар тапшырылды. Унда бүләкләнеүселәр исеменән сығыш яһаған дивизия штабы начальнигы, гвардия полковнигы Голенев, гвардия майоры — артиллерист Хәбиров, политбүлек начальнигы урынбаçары гвардия майоры Ҡадиров, 58-се полк командирының политик эш буйынса урынбаçары Әлибаев, эскадрон командирҙары, рядовой кавалеристар үҙҙәренең һуғыш тәжрибәләре менән уртаҡлашып, һәләк булған дивизия командиры генерал Шайморатов шикелле батырҙарҙы иçкә алды.

Ошо тантананан һуң һәүәçкәр артистарҙың концерты башланды.

Иртәгеһе көндө, гвардеецтар байрағы полктарҙа ла тапшырылғас, дивизия штабы начальнигы Голенев фронт резервынан күсерелергә тейешле 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы буйынса приказ яҙырға ултырҙы. Ләкин уны бөтөрөргә өлгөрмәне, элемтәсе офицер 16-сы дивизияны ашығыс рәүештә һуғышҡа индереү хаҡында корпус командирының яңы бойороғон килтерҙе.

16-сы гвардия дивизияһы һыбайлылары тимер юл станцияһында торған эшелондарға тейәлгән саҡта, генерал Шайморатовтан ҡалған ҡара-ерән ҡашҡаны ветлазареттан алып килеп Күсимовҡа тапшырҙылар.

58-се кавполк яугирҙары шул уҡ көндө, вагондарға тейәлеп, станциянан ҡуҙғалды һәм көнбайышҡа табан ыңғайланы.

Чернигов ҡалаһының төньяғындағы Десна йылғаһына яҡынлашҡан 61-се армияға Короб районы тирәһендә барып ҡушылғас, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы 7-се кавкорпустың беренсе эшелонындағы төп йүнәлештә һөжүм башланы: Зметнево — Сосница — Баба — Мена — Березна һәм артабан Черниговтың көнбайыш-төньяғы...

Дивизия командиры Белов, Шайморатов шикелле, подразделениеларҙан подразделениеларға йөрөнө һәм полк командирҙарын алға барырға ҡабаландырҙы:

— Алға, тик алға! Сигенеүсе дошман ғәскәрҙәренә яйлы урында туҡталырға, оборона тоторға, нығынырға ирек бирмәйенсә, уларҙы бер туҡтауһыҙ эҙәрләргә!

Белов нисек кенә ашыҡтырһа ла, 16-сы дивизияның төп көсө артта ҡалды, ә алдағы 61-се армияның 76-сы һәм 77-се гвардия уҡсы дивизиялары ҡасып барыусы дошманды ҡыуып етә алманы.

Гвардия полковнигы Белов, политбүлек начальнигы Покровский менән кәңәшләшкәндән һуң, Күсимовты саҡыртты.

— Таһир Таипович, барлыҡ ышаныс һеҙҙә! Борки һәм Дон эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнашҡанда һеҙҙең полктың һәләтлеген мин беләм. Шул тәжрибәнән сығып, арттағы хәрби частарҙың ҡасан килеп етеүен көтмәйенсә, алдағы уҡсы дивизияларҙы ҡыуып уҙырға, Чернигов эргәһендә нығынырға ниәтләнгән дошманды артабан эҙәрләргә һәм Черниговтағы группировканың сигенеү юлын быуырға бойорам!

— Ундай ышаныс белдереүегеҙ өсөн рәхмәт, иптәш гвардия полковнигы! Бойороғоғоҙ намыҫ менән үтәлер, — тип честь бирҙе лә ҡара-ерән ҡашҡаға атланған Күсимов, һыбайлыларын эйәртеп, алға сапты.

Десна йылғаһын кисеп сыҡҡас, Күсимовтың атлылары, уҡсы дивизияларҙы уҙып, утыҙ километр самаһы алда ҡасып барған дошман һалдаттарын йәһәтерәк ҡыуып етергә ашҡынды.

Таң беленә башлағанда Күсимов өлкән лейтенант Гранитовтың эскадронын алға ебәрҙе, ә ул эскадрондың авангардында кавалерияға күсерелгән өлкән сержант Байдәүләтовтың взводы барҙы.

Уботь йылғаһы аша уҙғас, танкыларҙың юлын быуыу өсөн ҡаҙылған соҡорҙарҙың киңлеге алты-һигеҙ, тәрәнлеге дүрт-биш метрға етеүен асыҡлағас, Байдәүләтов уйға ҡалыбыраҡ торҙо.

— Соҡорҙарҙы аша сығыу өсөн ниндәй ҙә булһа әйбер кәрәк буласаҡ, — тип ул эскадрон командирына ике разведчикты ебәрҙе. Эскадрон командиры өлкән лейтенант Гранитов, үҙ сиратында, был хаҡта Күсимовҡа хәбәр итте.

Урында ҡул аҫтындағы нәмәләрҙе файҙаланып, соҡорҙоң икенсе яғына сығырға һәм унда плацдарм булдырырға тигән бойороҡ алғас та:

— Алға, минән ҡалмаҫҡа, — тип Байдәүләтов һалдаттары менән соҡор ярының тәпәшәгерәк урынын һайлап, үҙҙәре әтмәләгән баҫҡысты ҡуйған саҡта взвод командирының күңелендә шик тыуҙы: «Икенсе ярға сығыу менән ҡаршылағы дошман пулеметтарҙан һәм автоматтарҙан ут асмаҫмы? Бик тә ихтимал... Шуға күрә үтә һаҡ булырға кәрәк!..»

Аппараты менән мина эҙләгән һалдат артынан икенсе ярға күтәрелгән Байдәүләтов, һалдаттарының тын алышын һиҙеп, тынысланды. Ҡиләләр! Егеттәрҙең күбеһе яңы. Әлегәсә һуғышта ҡатнашмаһалар ҙа, улар төрлө шарттарҙа үткәрелгән күнегеүҙәр арҡаһында, ҡыйынлыҡтарға сыныҡҡан. «Өйрәнгән — еңгән, өйрәнмәгән — бөлгән», тип бик йыш ҡабатларға ярата торғайны лейтенант Атаев.

Бөтә ерҙә тынлыҡ. Бер ниндәй ҙә һағайтырлыҡ нәмә тойолмай. Хәҙер алға, тик алға барырға! Фашистарҙың тылына һиҙҙермәй үтеп, уларҙы аңғармаҫтан атакаларға!.. Туҡта, ҡаршыла ниндәйҙер ҡараҫҡы төҫмөрләнә түгелме? Нимә был — дзотмы әллә дотмы?

Взвод командиры Байдәүләтов һалдаттарына тауыштын сығармаҫҡа, үтә һаҡ булырға ишара яһап, ерҙән шыуыша ғына башлағайны, ҡаршылағы өйөмдән ҡапыл ут астылар. Ергә лыпын боҫҡан яугирҙарҙы тирәләп пулялар һыҙғырышты.

«Фашистарҙың һаҡсы төркөмөнә тап булдыҡ», — тип уйлаған Байдәүләтов ут бөрккән дошман дзотына граната бырағытты. Дөрөҫ ташламаны, ахырыһы. Граната ярылған тауыш ишетелмәне. Взвод командиры икенсе гранатаны алды. Уны бырағытыу менән бөтә үҙәнде яҡтыртҡан көслө шартлау яңғыраны һәм егеттәргә ут бөрккән дзот тынып ҡалды.

— Егеттәр! Минең арттан, алға! — тип һикереп торған Зәки Байдәүләтов ҡыйратылған амбразура аръяғындағы траншеяларға табан йүгерҙе.

Тәрән итеп ҡаҙылған дошман траншеялары буп-буш ине. Шулай булһа ла, Байдәүләтов траншея төбөнә автомат уты һиптереп сыҡты. Шунан, Уботь йылғаһының һай урынынан сығарылған атына атланғас, үҙ командалығындағы һыбайлыларын эйәртеп, Байдәүләтов артабан елдерҙе.

Ҡавалеристарҙың тылдан һөжүм итерен көтмәгән гитлерсылар төркөмө ҡыйратылғас, Сосница ауылы азат ителде һәм Баба ауылы өсөн алыш башланды. Эңер мәлендә ҡыуып еткән эскадрон ярҙамында ауыл һуғышып алынғас, тынлыҡ урынлашты. Тәүлек буйына барған көсөргәнешле һуғыш ваҡытында ныҡ арыған егеттәр шунда уҡ йоҡоға

талды. Огневойҙа — ут нөктәһендә тороусыларҙың башлығы ғына, йоҡламаҫҡа тырышып, ҡыйынлыҡ менән сыҙаны һәм башын күкрәгенә һалындырған элемтәсенең яурынына әлдән-әле ҡағылды.

— Йоҡламаҫҡа!

Төндөң йоҡламай уҙғарған һәр минуты Байдәүләтовҡа ла мәңгелек һымаҡ тойолдо. Йомолған күҙ ҡабаҡтарын асыуы ҡыйынлашҡандан-ҡыйынлаша барҙы, улар үҙҙәренән-үҙҙәре йәбешә...

Төн уртаһы уҙғас, телефон зымбырланы.

— Иптәш взводный, һеҙҙе, — тип элемтәсе трубканы һондо.

Йоҡо аралаш ҡысҡырған эскадрон командиры Гранитовтың: «Һуғышҡа!» тигән борсоулы тауышын ишеткәс тә, Зәкиҙең йоҡоһо ҡасты.

— Взво-о-од, к бою!

Байдәүләтовтың командаһына иғтибар итмәгән егеттәрҙең хырылдауы нығыраҡ ишетелде.

Команда бер генә мәртәбә бирелә. Әммә сыҙамлылығының сигенә еткән өлкән лейтенанттың ярылырҙай булып телефондан ҡысҡырған талапсан тауышы яңынан ҡабатланды:

— Ни өсөн яйлайһығыҙ?!..

Эскадронда ваҡиға киҫкенләшеүен аңлаған взвод командиры Байдәүләтовтың тәне ҡалтыранды. Бер ни һиҙмәй һушһыҙ йоҡлап ятҡан һалдаттарын йәһәтерәк күтәрер өсөн, ул «ТТ» пистолетынан һауаға атты ла йоҡо аралаш һикерешеп тороп аттарына атланған һыбайлыларға:

— К бою! — тип ҡысҡырҙы һәм ябырылып килеүсе гитлерсыларға ҡаршы ташланды.

Алыштың иң ҡыҙған мәлендә өлкән лейтенант Гранитовтың үлемесле яраланыуын ишетеп, Байдәүләтов ярһыны.

— Эскадрон командиры өсөн дошманды аяуһыҙ ҡырырға, тураҡларға!

Баба ауылын төндә һуғышып алырға маташҡан контратакалары кире ҡағылып, немецтар ун километр самаһы эҙәрләнде.

## IX

Бер аҙ ял итеп алғандан һуң, немецтарҙы эҙәрләп барыусы Күсимов полкы һыбайлылары йәнә алға ябырылды. 1708 йылда шведтарға ҡаршы һуғышҡан Петр I-нең ғәскәре лә Полтаваға ошо юлдан барған, тиҙәр. Граждандар һуғышы йылдарында комбриг Муса Мортазиндың ҡыйыу

атлылары ла ошондағы дошман тылы буйлап гиҙгән, ә бына хәҙер ҙә шул уҡ юл...

Мена ҡалаһына еткәс, Күсимов эскадрон командирҙарын йыйҙы.

— Разведка мәғлүмәттәренә ҡарағанда, быңдағы дошман позицияһы Гомель — Бахмач тимер юлындағы бронепоезд һәм танкылар ярҙамында һаҡлана. Мена ҡалаһы менән тимер юл станцияһын немецтарҙың уҡсы батальоны һаҡлай. Ҡалаға яҡынлашыуыбыҙҙы улар белмәй. Шуға күрә аңғармаҫтан һөжүм башларға! — тип полк командиры һәр эскадрондың урынын картала күрһәтте лә, ашыҡтырҙы: — Хәҙер, ваҡытты әрәмгә уҙғармайынса, кешеләрҙе күтәрергә!

Бер сәғәттән кавалеристарҙың атакаһы башланды. Улар менән рация аша бәйләнеш тотҡан Күсимов һәр эскадрон хәрәкәтен күҙәтеп барҙы. Полк батареяһының дошман пулеметын ҡыйратыуын да, лейтенант Байдәүләтовтың пулеметсылар взводы көслө ут асып эскадрондарға ярҙамлашыуын да, саперҙарҙың тимер юл полотноһын шартлатыуын да белеп торҙо. Аҙаҡ гитлерсылар гарнизонына яҡынлашҡан бронепоезд полктың юлын быуыуын белгәс, Күсимов алға табан елдерҙе. Эйәрҙәге яңы хужаһының ярһыуы ҡара-ерән ҡашҡаға ла күсте. Ҡойроғон һоноп йән-фарман сабып барған сағында елгә йәйелгән уның ялы сыйылдаған һымаҡ тауыш сығарғандай булды. Шайморатовты юғалтҡандан бирле ветлазаретта яраларынан дауаланған ҡара-ерән ҡашҡа юҡһыныу кисереп, етемһерәне. Яңы хужаһына әле лә эйәләшә алмай интегә. Күсимовтың бик йыш екеренеүенә, тупаҫ ҡыланышына, шпорлы үксәһе менән һәр саҡ ҡабырғаһына тибеүенә сыҙамайынса, уның һөрән һалып кешнәһе, элекке хужаһы Шайморатовты ярҙамға саҡырғыһы килде. Шайморатов бөгөн, бөгөн булмаһа иртәгә, иртәнән һуңға ҡара-ерән ҡашҡаһын эҙләп табыр ҙа уны иркәләр, ялы аҫтына ҡулын тығып муйынынан һыйпар һымаҡ тойолдо. Ләкин нисек кенә тилмереп көтмәһен, элекке хужаһы күренмәне. Шайморатовтың һәләк булыуын, бынан кире ғүмеренең аҡтыҡ минутына саҡлы яҙмышы яңы хужаһына бәйле икәнлеген ҡайҙан ғына белһен инде меҫкен ҡара-ерән ҡашҡа?..

Күсимовтың холҡона ҡара-ерән ҡашҡа тулыһынса күнегә алманы. Унан туҡмалғаны булмаһа ла, ниңәлер һәр саҡ ҡурҡты. Бына әле лә, бүтән һыбайлыларҙы эйәртеп иң алдан сабып барышлай, яңы хужаһының һәр хәрәкәтенә һағайҙы, дарһ та дорһ типкән йөрәге ҡурҡышынан ҡапыл туҡталып ҡалырҙай шикелле булды.

Алда һуғыш бара... Үлеш-ҡыйралыш мәлендә ҡаты яраланған аттар менән кешеләрҙең ергә тәкмәсләүен, аяҡ аҫтынан туҙан менән ҡуйы төтөн урғылыуын ҡара-ерән ҡашҡа күреп торҙо, ләкин бүтән аттар һымаҡ ҡасан да булһа үҙенең үлемесле яраланыры хаҡында башына ла килтермәне. Ниңәлер ул үлмәç, берәй ваҡыт туған төйәгенә, Уралына кире ҡайтыр һымаҡ хис итте...

Ҡавалеристарҙы ҡабаландырып, пистолеты менән һелтәнә-һелтәнә бер туҡтауһыҙ ниҙер ҡысҡырған Күсимов йүгән теҙгенен шаҡара тартып ирендәрен ауырттырыуға аҫыуы ҡабарған ҡара-ерән ҡашҡаның күҙ алды ҡараңғыланды, гитлерсылар ташлап ҡасҡан һуғыш ҡоралдары, яралылар менән мәйеттәр тулған ер өҫтө тояҡтары аҫтында сайҡалып, көйөк еҫен аңҡытҡан төтөн-ҡоромға быҫранған ҡояш та бер туҡтауһыҙ ҡалтыранғандай күренде.

Һуғышып алынған блиндаж эргәһендә туҡталғас та шәп елдереп килеүҙән арыған ҡара-ерән ҡашҡа һаман ҡалтыранды.

Эйәрҙән төшкән ыңғайы йүгән теҙгенен коноводына тотторған Күсимов, тирә-яҡҡа һағайыулы ҡарана-ҡарана, Мена ҡалаһы урамдарында барған алыштың ҡасан тамамланыуын көттө.

Мена ҡалаһы дошмандан тулыһынса таҙартылғандан һуң да, һыбайлыларға саҡ ҡына ла ял бирмәйенсә, полк командиры дошманды артабан эҙәрләүҙе дауам итергә бойорҙо.

Ун туғыҙынсы сентябрҙең таңында 58-се гвардия полкы һыбайлылары Гусавка ауылын азат иткән ваҡытта, гвардия майоры Горлатовтың 60-сы полкы гвардеецтары уларҙы ҡыуып етте. Березна ауылы немецтарҙан тулыһынса таҙартылғандан аҙаҡ, дошмандың ике уҡсы батальоны Снов йылғаһы буйына ҡыҫырыҡланды.

Дошман ғәскәрҙәре менән һуғышып артта ҡалған гвардия майоры Макарьяндың 62-се кавполкын көтөргә ҡушып, дивизия командиры Белов уңышлы барған һөжүмде туҡтатты. Березна ауылын дошман самолеттары бомбаға тота башлағас ҡына, ул яңылышыуын аңланы. Әммә бәләнән ҡотолоу әмәлен табыу ҡыйын ине инде.

Дивизия штабы урынлашҡан йорттан йүгерешеп сыҡҡан офицерҙар, ҡайҙа йәшеренер урын таба алмайынса, бер урындан икенсе урынға күсте. Немецтарҙан ҡалған яртылаш емерек траншеяға еткәс кенә, гвардия полковнигы Белов менән штаб начальнигы Голенев үлемдән ҡотолдо.

Дивизия командиры күк йөҙөн ҡалтырандырып күмәк моторҙар геүләүен, бомбалар төшөп ярылған яҡта ҡатын-

ҡыҙҙың, бала-сағаның аҡылдан шашырҙай хәлгә етеп аҡырышыуҙарын, аттарҙың һөрән һалып кешнәүҙәрен ишетте. Бер төркөм дошман самолеттары ауыр йөктәрен бушатып китергә өлгөрмәй, улар артынса икенсе, өсөнсө, дүртенсе төркөмдәге самолеттар күренде...

— Бензин бөтөүе арҡаһында зенит орудиеһы артта ҡалмаһасы! — тине Белов, үрһәләнеп.

— Ярай әле полктарҙың барыһы ла ауылдан китеп өлгөрҙө! — Голенев ауыр һуланы. — Улар бында ҡалған булһа, ҡыйралыштың ниндәй икәнлеген күҙ алдына килтерергә лә мөмкин түгел!

Донъяның аҫтын өҫкә килтергән бомбаларҙың шартлауы ҡараңғы төшкәс кенә баҫылды.

Дивизия командиры Белов Березна ауылын бомбаға тотоуға саҡлы ике сәғәт элгәре алға киткән кавалерия полктарына табан елдерҙе.

Икенсе эшелонда барған 62-се кавполкты ҡыуып еткәс, Белов Макарьян янында туҡталды.

— Күсимов менән Горлатов полктары ҡайҙа?

— Улар бынан биш километр алыҫлыҡтағы Снов йылғаһы тәңгәлендәге урманда булырға тейеш, иптәш комдив!

— Ни өсөн Снов йылғаһын кисмәйһегеҙ?

— Йылғаны аша сығырға булғайныҡ, дошман батальондары ҡамасауланы, иптәш комдив!

— Йылға аръяғындағы дошман тылына разведка ебәрҙегеҙме?

— Ебәрҙек.

— Йылғаны аша сығырға, дошмандың тылынан һөжүм итеп, Клочков ауылын азат итергә! — тине Белов һәм үҙе беренсе эшелондағы полктарҙы эҙләп китте.

Ҡола яландағы йырғанаҡтар араһынан һалынған бормалы-бормалы юлдан бармайынса, алдағы бәләкәй генә ауылды ситләтеп уҙғас, урылмай ҡалдырылған иген баҫыуы менән ҡалҡыу урындар аръяғындағы Снов йылғаһы күренеше ҡабаттан асылды. Йылғаның ике яҡ яры ла таллыҡ менән ҡапланған ине.

Снов йылғаһының «сон» — «йоҡо» исемен йөрөтөүе мәрәкә тойолдо Беловҡа. Йоҡоно хәтерләткән был йылға элгәре ысынлап та төрлө тарихи ваҡиғаларға бай булған. Уның тәрән, төш кеүек гүзәл, матур, һоҡландырғыс көмөштәй саф һыуында элгәре заманда елкәндәр йөҙгән, ә тирә-яктағы ауылдарҙа йәшәүсе халыҡты әбей батшаһына — Екатерина II-гә ҡаршы күтәрелергә өндәп атаман Емельян Пугачев йөрөгән, имеш...

Яр буйындағы урманда туҡталған кавполктарға барып етеү менән, 60-сы гвардия полкы командиры Горлатовҡа Снов йылғаһының көнбайыш ярына сығырға һәм Черныш — Лопатино — Певцы ауылдары йүнәлешендә һөжүм башларға ҡушты Белов.

Бер үк ваҡытта Ҡобылянка ауылының көнсығышы тәңгәленән Снов йылғаһы аша сыҡҡан Күсимов полкы, Брусиловты обороналаусы дошман һалдаттарын тар-мар итеп, ун туғыҙынсы сентябрҙә Тереховка — Лопатино — Березанка рубежына сыҡты һәм Снов йылғаһы яры буйында плацдарм әҙерләне.

Белов полк командирҙарына яңы бурыс ҡуйҙы:

— Ҡорпус командиры приказы бер көнгә элгәре үтәлде. Утыҙ алты сәғәт эсендә беҙҙең дивизия йөҙ ҙә утыҙ километр араны уҙып, 61-се армияның соединениеларына Снов йылғаһы аша юл асты. Хәҙер, туҡталып тормайынса, ҡасып барыусы дошманды артабан эҙәрләргә!

Һыбайлылар, ҡом бурандарын уйната-уйната, йәнә алға табан ябырылды.

Өс тәүлек буйы барған ҡаты алыштарҙан һуң, 16-сы дивизияға һуғыштан сығырға, фронтты төньяҡҡа күсерергә, 14-се һәм 15-се гвардия кавалерия дивизияларына ярҙам итергә бойоролдо.

Уҡсы дивизияларға мөһим плацдарм әҙерләгән 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы 1943 йылдың 21 сентябре таңында Десна йылғаһының уң яҡ яры буйлап ыңғайланы, ә уны алмаштырған бүтән хәрби частар Чернигов ҡалаһын штурмлай башланы...

16-сы кавдивизия Десна буйындағы урманға барып еткәндә, тирә-яҡ яҡтырҙы.

Ошоғаса серем итеп алыу форсаты теймәгән һыбайлылар эйәрҙә барған көйө йоҡланы. Артабан барырға аттарҙың да хәле ҡалманы.

Дивизия командиры Белов, кешеләргә урман эсендә ял бирергә ҡушып, үҙе иҫерек кешеләй айҡала-сайҡала, радиостанция урынлашҡан автомашинаға инеп ятты. Бербереһенә ялғанып туҡталмай геүләгән алыҫтағы канонаданы тыңлап, ул Чернигов ҡалаһы өсөн барған һуғыш күренешен күҙ алдына килтерергә тырышты. Шунан, ҡала яғында туптар һәм бомбалар ярылыуы бер аҙ кәмегәс, күҙҙәрен йомдо һәм нисек йоҡлап киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Ниндәйҙер төш күреп йоҡлаған сағында, Мәскәү тулҡынын тотҡан радистарҙың шау-шыу ҡубарып ҡысҡырышыуҙарын Белов йоҡо аралаш ишетте:

— Иптәш гвардия полковнигы, Чернигов ҡалаһы азат ителгән!

— Был хаҡта СССР Верховный Баш командующийының приказын тапшыралар!

— Беҙҙең дивизияға «Черниговский» тигән маҡтаулы исем бирелгән! [1]

Һикереп тороп автомашинанан сыҡҡан Беловҡа дивизия штабы начальнигы яҡынлашты.

— Григорий Андреевич, яңылыҡты ишеттегеҙме?

— Ишеттем!.. Ҡотлайым!..

— Һеҙҙе лә!.. Черниговты алыуҙан башҡа тағы бер яңылыҡ бар.

— Ниндәй?

— Комкорҙың приказы буйынса, «Беренсе Май» совхозына һөжүм башларға тейешбеҙ! Беҙҙең дивизияға ярҙамға майор Джиоевтың танкылары килгән. Танкистар һеҙҙең бойороҡто көтә!

Белов атына атланды. Ҡала ситенә барып еткәс, үҙен көткән танкистарҙың полк командиры Джиоев менән күрешеп танышты ла, тирә-яҡтағы дошман позицияһының нисек урынлаштырылыуы хаҡында ҡыҫҡаса аңлатҡандан һуң, атака башларға ҡушты.

Танкылар менән бер үк ваҡытта тиерлек уҡсы батальондарҙағы гвардеецтар ҙа алға табан ҡуҙғалды.

Саперҙар тарафынан ҡыуаҡлыҡтар араһында ҡоролған күҙәтеү пункты тәңгәленә тиклем майор Джиоев танкыһында барған дивизия командиры Белов төшөп ҡалғас та, дошмандың үҙйөрөшлө орудиелары хәрәкәткә килде. Әле бер, әле икенсе урында йоҡа бронялы беҙҙең Т-70 танкылары дошман тарафынан дөрләп яндырыла башланы. Ҡаты яраланған полк командиры майор Джиоевтың танкыһы ла, гусеницаһы өҙөлөп, бер урында әйләнде. Шулай ҙа беҙҙең танкистар ҡырҡ биш миллиметрлы пушка урынлаштырылған дошмандың «фердинанд» орудиеһы менән танкыларына ҡаршы көслө ут асырға өлгөрҙө, ә беҙҙең төҙөк ҡалған танкылар, туҡталып тормайынса, һаман алға барыуын белде. Улар яҡынлаша башлағас, «Беренсе Май» совхозы тәңгәлендә ныҡынған немецтарҙың да яуап уттары көсәйҙе.

Һуғыш барышын күҙәткән Белов контратакаға күскән дошман полкына ҡаршы һыбайлыларын ташланы.

---

[1] Чернигов ҡалаһын азат итеүҙә 148-се, 181-се, 211-се, 77-се, 76-сы уҡсы дивизиялары, 16-сы гвардия кавдивизияһы, 129-сы танк бригадаһы, танкыларға ҡаршы һуғышыусы 874-се артиллерия полкы, 476-сы миномет полкы, 1287-се зенит полкы, 2-се гвардия авиация дивизияһы ҡатнашты, һәм улар маҡтаулы «черниговсы» исеменә лайыҡ булды.

Ел-дауыл ҡубарып иң алдан йән-фарман сапҡан Күсимовтың һыбайлылары менән бер үк ваҡытта гвардия майоры Горлатовтың кавполкы ла алға табан ынтылды.

Күп тә уҙманы, Беловҡа яу барышы тураһында рация аша хәбәр итә башланылар:

Гвардия сержанты Ивановтың орудиеһы гитлерсыларҙың буш пулеметын ҡыйратты...

Орудиены ҡороусы гвардия рядовойы Мирошников алыш ваҡытында яңғыҙы иҫән ҡалып, дошмандың бер танкыһын ҡыйратты, икенсеһен яндырҙы һәм дошмандың контратакаһын кире ҡаҡты...

Гвардия сержанты Әхмәров[1] менән орудие ҡороусы Алмазов өс «тигр»ҙы һәм дошмандың ике «фердинанд»ын ҡыйратты...

Гвардия өлкән лейтенанты Клочковтың полк батареяһы дошмандың миномет батареяһы менән өс пулеметын юҡ итте...

Һыбайлы черниговсы полктар «Беренсе Май» совхозын дошман һалдаттарынан азат иткәндә, корпустың һыбайлы дивизиялары ла Снов йылғаһының икенсе ярына сыҡты...

Уңышлы һөжүм менән рухланған дивизия командиры Белов Күсимов менән Макарьяндың полктарына һөжүмде артабан дауам итергә, Ивашково ауылын һуғышып алырға бойорҙо.

Шул уҡ төндө Ивашково ауылы дошмандан тулыһынса таҙартылды. Ләкин һыбайлыларға ял итергә тура килмәне, 16-сы кавалерия дивизияһына көньяҡҡа табан барырға, Чернигов ҡалаһының көнбайышындағы Днепр йылғаһына сығырға корпус командирынан яңы приказ алынды.

Икенсе көндө дивизияға корпус командиры үҙе килде. Ул, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһына «Черниговсы» тигән маҡтаулы исем бирелеүе менән яугирҙарҙы ҡайнар ҡотлап, һыбайлыларҙың артабан да дошманға ҡаршы алыштарҙа батырлыҡ, бүтән хәрби частарға өлгө күрһәтәсәктәренә ныҡлы ышаныс белдереп үҙ сығышын тамамлағас, Белов һүҙ алды.

Ул Чернигов ҡалаһы эргәһендәге һәм Чернигов өлкәһендәге ауылдар өсөн барған һуғыштарҙа дошмандың өс мең ярым самаһы һалдат һәм офицерҙары юҡ ителеүе, пленға алыныуы, бик күп танкылары, һуғыш ҡорамалда-

---

[1] Ошонан һуңғы һуғыштарҙа ла ҡыйыулыҡтар күрһәткәне өсөн Ғ. А. Әхмәровҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Ғәбит Абдулла улы Әхмәров әле лә иҫән-һау, Федоровка районының Пугачев совхозында йәшәй.

ры ҡыйратылыуы, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһындағы сержант һәм һалдаттарҙың ҡыйыулығы, үҙ бурыстарын белеп, намыҫ менән башҡарыуҙарын ҡыҫҡаса һөйләп, дивизияның артабанғы хәрби заданиеһын төшөндөрҙө...

«Черниговсы» исемен алыу уңайы менән полктарҙа митинг уҙғарырға ҡушып, кешеләрҙе таратыр алдынан, дивизия командиры күҙҙәре менән кемделер эҙләне.

— «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакцияһынан кәңәшмәлә ниңә бер кем дә ҡатнашманы?

— Али Ҡарнайҙан һуң тәғәйенләнгән редактор, ҡаты яраланып, госпиталгә оҙатылды, — тине политбүлек начальнигы Покровский.

— Яраланған редактор урынына ошоғаса бер кемде лә тәғәйенләмәнегеҙме ни?

— Ваҡытлыса яуаплы секретарь Истамғәлин редактор итеп ҡуйылғайны. Уның кәңәшмәгә ниңә килмәүе билдәһеҙ!

— Газета ваҡытында сығарыламы?

— Иғтибар итмәнем, — Покровский ҡыҙарынды.

— Ниңә иғтибар итмәнегеҙ? — Дивизия командирының асыуы ҡабарҙы. — Истамғәлиндең кәңәшмәгә килмәүе һәм газетаның ваҡытында сығыуы-сыҡмауы хаҡында асыҡларға һәм миңә әйтергә!

— Есть!..

Гвардия полковнигы Покровскийға ҡушылған йомошто политбүлек начальнигының урынбаҫары Ҡадиров үтәне һәм дивизия командирына доклад менән барҙы.

Березна ауылын дошман самолеттары бомбаға тотҡан ваҡытта «Ҡыҙыл атлылар» газетаһының хәреф йыйыусылары араһында юғалтыуҙар булыуы, әҙәби хеҙмәткәр Шакир Насыровтың яраланыуы, редактор вазифаһын ваҡытлыса башҡарған лейтенант Әһел Истамғәлиндең Березна ауылын бомбаға тоторҙан алда ғына Снов йылғаһы буйындағы эскадрондарға китеүен, шул китеүҙән һуң уны бер кем дә күрмәүен һәм белмәүен әйткәс, дивизия командиры ярһыны.

— Аҙаҡҡы тапҡыр ҡайһы полктың эскадронында булған Истамғәлин?

— Был турала бер кем дә асыҡ белмәй, иптәш гвардия полковнигы!

— Үлеләр араһында ла юҡмы?

— Юҡ.

— «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы өсөн политбүлектә кем яуаплы?

— Мин.

— Газетаның хәле менән ниңә ҡыҙыҡһынмайһығыҙ?

— Һуғыш барған осорҙа эскадрондарҙа йөрөп бушай алманым, иптәш гвардия полковнигы!

— Хәрби трибуналға тарттырһам, унда бушатырҙар!

— Ғәфү итегеҙ, иптәш гвардия полковнигы! Бындай хәл башҡаса ҡабатланмаясаҡ, — тине Ҡадиров.

— «Ҡыҙыл атлылар» газетаһын ашығыс сығарыу эшен ойошторорғоҙ! Барығыҙ, хәҙерҙән эшкә тотонорға!

— Тыңлайым, иптәш гвардия полковнигы!

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакцияһы өсөн хәрби трибунал хөкөмөнә тарттырылыуынан ҡурҡҡан Ҡадиров, бәләнән еңел ҡотолоуына ҡыуанһа ла, борсолоуы кәмемәне. Газета сығарыу эшен нисек итеп юлға һалырға? Хәреф йыйыусыларҙы һәм ваҡытлыса редактор вазифаһын үтәрҙәй кешене нисек табырға? Әһел Истамғәлин менән нимә булды икән?..

## X

Күренекле яҙыусы һәм журналист Али Карнай фажиғәле һәләк булғандан һуң да Әһел Истамғәлин «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакцияһында күңел биреп эшләмәне. Ул, Снов йылғаһы буйындағы берәй эскадронда ҡыҙыҡлы материал яҙып алырға ниәтләнеп, редакция урынлашҡан Березна ауылынан юлға сыҡты. Чернигов яғынан килеүсе күмәк дошман самолеттарының яҡынлашыуын күреп ҡото алынды һәм уларҙан ҡасып ҡыуаҡлыҡтар араһына елдерҙе. Ләкин алыҫ китергә өлгөрмәне, бер-бер артлы бомбалар төшөп ярыла башланы. Әһел Истамғәлин, эйәренән төшөп, яҡындағы соҡор төбөнә йәшеренде. Ул, ошоғаса алғы һыҙыҡта булырға тура килмәгәнлектән, бомбаларҙың утлы дөм ҡара стеналары юғарыға урғылған һайын ер ҡалтыраныуынан, сүп-сарлы тупраҡ ҡатыш ниндәйҙер ҡаты киҫәктәр тәненә һирпелеүенән меңтапҡыр үлеп терелде. Кешеләрҙең һуғышта ҡыйыулыҡтар күрһәтеүенә, маҡталыуына, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеүенә көнләшеүе, редактор дәрәжәһенә күтәрелә алмауы өсөн кемгәлер үс тотоуы, үртәләнеүе был минутта үтә бәләкәй, иғтибарға лайыҡһыҙ һымаҡ булып тойолдо...

«Йәшәргә, нисек тә булһа йәшәргә, иҫән ҡалырға» тигән йән әрнеткес уй менән дер ҡалтыранып, ул ерҙең ете ҡатына үтеп инерҙәй хәлгә етте. Бомбалар ярылыуҙан туҡталғас та, икенсе төркөмдәге дошман самолеттары килеп яңынан бомбаға тотоуын көтмәйенсә, төтөнлө эҫе туҙан ағымына сәсәй-сәсәй, урманға табан йүгерҙе. Ләкин ағастар араһында ла хәүефле ине. Янғынға солғанған

йөк машиналары тәңгәлендәге шартлауҙар йышая башлагас, эҫе ағым тағы ла көсәйҙе.

«Үлемем ошонда икән!» тигән ҡот осҡос уй Әһел Истамғәлинден ҡан тамырҙары буйлап ағылды. Ул артабан йүгерҙе. Шул саҡ эргәһендәге көслө шартлау уны ергә тәкмәстерә һуҡты, һәм Әһел һушынан яҙҙы.

Аңына килгәс, Истамғәлин артабан йүгерҙе. Урман эсендәге ташландыҡ блиндажға ингәс кенә уға бер аҙ йән керҙе.

Әһел, блиндаждың ҡыйратылған амбразураһына, ишек тәңгәлендәге емерек «буржуйка»ға, дошман һалдаты мәйетенә иғтибар итеп, уҡшыны, ҡоҫҡоһы килде.

Блиндаж эсендә ултыра биргәс, Әһел Истамғәлинден йөрәген тағы ла ҡурҡыу солғаны: «Ҡыйратылған Березна ауылын гитлерсылар һуғышып алды микән әллә? Бәләнән нисек ҡотолорға? Совет Армияһы офицеры икәнлегемде белһәләр, немецтар мине интектерәсәк! Хәҙер ҡалайтырға?..»

Аянысль һорауҙарына яуап таба алмайынса, Әһел Истамғәлин, яурынындағы офицер погонын аҡтарып алып, кеҫәһендә йөрөткән документтары менән партбилетын ҡомло балсыҡ араһына йәшерҙе лә әрәмәлеккә табан йүгерҙе. Ҡыуаҡлыҡтар араһында бер аҙ ял иткәс, блиндажда документтарын ҡалдырып китеүе өсөн үкенде. Ләкин уны кире барып алырға батырлығы етмәйенсә, был хәүефле урындан йәһәтерәк китергә ашыҡты.

Зиһенен томалаған ҡоршау ҡыҫымы әҙерәк кәмегәс, дөм ҡараңғы ағастар араһындағы һөйкөмһөҙ күренеш, алыҫтағы пулеметтың тыҡылдауы, һирәк-мирәк ярылған йәҙрәләрҙең тоноҡ тауышы төш һымаҡ тойолдо Истамғәлингә. Көнө буйына һуҙылған ҡот осҡос шартлауҙарҙы кисергәндән аҙаҡ уның аңы буталды, нимә эшләүен, ҡайҙа йөрөүен аңламаны, донъялағы барлыҡ тормош мәғәнәһеҙ күренде.

Ялан уртаһындағы һалам өйөмө тәңгәленә етеп ял итергә ултырғайны, нисек йоҡлап китеүен һиҙмәй ҙә ҡалды. Иртәнге һалҡынға өшөп уянғас, эс бошорғос ауыр тойғо уның йөрәген ҡыйпып уҙҙы, һәм ул документтарын ҡалдырып китеүенә бик ныҡ ҡайғырҙы. Ниңә шулай ахмаҡланды икән? Үҙебеҙҙекеләргә эләкһә, документһыҙ нисек аҡланыр? Березна ауылында хәҙер кемдәр икән? Ҡотолмаған яңы бәләнән нисек ҡотолорға? Башҡорт кавалерия дивизияһына йәки Етенсе корпус сафындағы бүтән кавалерия дивизияһы кешеләренә тарыҡһа, «ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ» тигәндәй, бәлки, документһыҙ ҙа аҡлана алыр ине... Таныш булмаған башҡа хәрби час-

тарға эләкһә, уны аямаясаҡтар, хөкөмһөҙ-ниһеҙ атасаҡтар!..

Саҡ ҡына ла тынғылыҡ бирмәгән ауыр уйҙарына күмелеп, өшөүенән, әллә ҡурҡышынан ҡалтырана-ҡалтырана, тирә-яғына бер туҡтауһыҙ һағайыулы ҡаранған Истамғәлин кирегә табан ыңғайланы. Березна ауылына яҡын блиндажда йәшереп киткән документтарын табырға тырышып, төрлө ерҙе гиҙеп йөрөй торғас, ул бөтөнләй билдәһеҙ урынға барып сыҡты һәм бында яңыраҡ ҡына көслө һуғыш булып уҙыуын аңланы. Көлө күккә осоролған элекке поселок урынындағы соҡор-саҡырлы ерҙәрҙә ҡыйратылған пушкалар, төрлө һуғыш ҡорамалдарының кәкре-бөкрө ҡалдыҡтары, яндырылған дошман танкыларының шөкәтһеҙ, ҡап-ҡара һөлдәләре генә төҫмөрләнә, йөк машиналары менән арбалар һаман да төтәп яна. Мәйеттәр менән үле аттарҙың кәүҙәләре лә йыйып алынмағайны. Тамырынан аҡтарылып ауған оло тирәк эргәһендәге үле әсә имсәгеп илай-илай имгән шыр яланғас сабыйҙы күргәс, Истамғәлин һушынан яҙырҙай хәлгә етеп уҡшыны.

«Былай булғас, үҙебеҙҙең кавалерия дивизияһын табырға маташыуым мәғәнәһеҙ! Документһыҙ-ниһеҙ тотһалар, дезертирлыҡта йәки немецтар яғына ҡасып сығырға ниәтләнеүҙә ғәйепләйәсәктәр! Хәҙер иң мөһиме — һуғыштан нисек кенә булһа ла иҫән ҡалыуым хаҡында хәстәрлек күрергә!» — тигән көтөлмәгән яңы уй килде Истамғәлиндең башына. Үҙенең журналист-яҙыусы, ҡайһы республиканан, өлкәнән һәм ниндәй хәрби частан икәнлеген белгертмәҫкә тырышып, төрлөсә план ҡорҙо. Шунан, өйөлөшөп ятҡан мәйеттәр араһындағы офицерҙарҙың кеҫәһен аҡтарып, фотоһы үҙенә оҡшағаныраҡ документ эҙләне. Ниндәйҙер лейтенанттың документтары менән погонын алып кеҫәһенә тыҡты ла, был урындан йәһәтерәк китеп ҡалырға тырышты. Шул минуттан Истамғәлин Әһел лейтенант Улыбин Геннадий Михайловичҡа әүерелде һәм ялған тормош менән йәшәй башланы.

Япраҡтары һарғайып ҡойолған әрәмәлектә, ағастар араһындағы күл буйында часынан тороп ҡалған яралы совет һалдатын осратҡас, Улыбин-Истамғәлин шатланды.

— Ашарға берәй нәмәң юҡмы?

— Бар, иптәш лейтенант!

Һалдаттың бер һыныҡ икмәген ашап, күл һыуын усы менән һоҫоп эскәс, Улыбин-Истамғәлин кеҫәһе төбөндәге тәмәке саңын төрөп тартты.

— Бында ни эшләп йөрөйһөң?

— Госпиталгә бара ята инем, аҙаштым, — тип яуап ҡайтарҙы ҡулы яралы һалдат.

Геннадий Михайлович Улыбин, тәмәке төтөнө ағымын бер яҡ быялаһы сарсылып онталған ҡалай тирәсле күҙлеге аша күҙәтеп, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Бармаҡтарын яндыра башлаған төпсөктө уксәһе менән иҙеп һүндергәс, ул урынынан торҙо.

— Ҡиттекме?

— Ҡайҙа барабыҙ, иптәш лейтенант? — тип һораны һалдат.

— Белмәйем... — Улыбин уйға ҡалыбыраҡ торҙо. — Бында тик ултырыуҙан ни мәғәнә?

Һалдат, өндәшмәйенсә, лейтенант Улыбин артынан эйәрҙе. Яңы ғына күмелгән ҡәберҙәрҙе уҙғас, улар бер төркөм йәйәүле һалдаттарға осраны һәм шуларға эйәреп көнсығышҡа табан ыңғайланы.

Өс тәүлек буйына теләһә ҡайҙа йоҡлап, аслы-туҡлы йөрөгән һалдаттар төркөмөн патрулдәр ҡулға алды һәм яҡындағы блиндажға алып килде.

«Ҡатюша» менән яҡтыртылған яһалма өҫтәл артында ултырған иҫерек капитан, доклад яһаған сержантты тыңлап бөтөрмәйенсә, бүлдерҙе:

— Дезертирҙарҙың барыһын да атырга!

— Иптәш капитан, хөкөмһөҙ...

— Молча-а-ать!

Яҙмышы ошолай киҫкен үҙгәрер тип башына ла килтермәгән Улыбин-Истамғәлиндең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте, тештәре ҡыҫылды, сирылыштары беленә башлаған оҙонсай аҡһыл йөҙөнөң ҡобараһы осто. Буш фляга, кружка, асылған консерва банкыһы, арыш икмәге валсыҡтары, тәмәке төпсөктәре тулған өҫтәлгә терһәктәре менән таянып, башын күкрәгенә һалындырған иҫерек капитандан бер ниндәй мәрхәмәт булмаясағын аңлағас, Геннадий Михайлович Улыбин өмөтһөҙлөккә бирелде һәм үҙенең ғүмерен оҙайтырҙай иң хурлыҡлы ялыныу-ялбарыуға әҙерләнде.

— Иптәш капитан!..

Капитан уны тыңларға теләмәне.

— Молча-а-ать, — тип өҫтәлгә йоҙроҡлап һуҡты ла, күҙҙәрен таһырайтып, сержантҡа ҡараны: — Нимә көтәһең?!

— Иптәш капитан, үҙебеҙҙекеләрҙе хөкөмһөҙ-ниһеҙ ата алмайым, — тине сержант.

— Дезертирҙарҙы йәки шпиондарҙы йәлләйһеңме? Немедленно ат!

Капитан ҡушҡанды үтәргә ашыҡмаған сержант ҡулға алыныусыларҙы полк штабындағы махсус бүлек вәкиленә алып барып тапшырҙы.

Истамғәлин-Улыбинда йәнә яҡты донъяла йәшәү ышанысы тыуҙы. Ул махсус бүлектә һорау биргән ваҡытта ла үҙен лейтенант Улыбин тип танытты һәм үҙ часынан тороп ҡалыуы сәбәбен дошман самолеттары бомбаға тотҡан саҡта траншея төбөндә күмелеп ятыуы һәм үҙен ниндәйҙер ауыл кешеләре ҡаҙып алыуы менән аңлатты. Уға ышанманылар. Уны һуғыштан ҡасып йөрөүҙә ғәйепләнеләр һәм үҙен-үҙе яралаған һалдат менән бергә атырға хөкөм иттеләр. Иң аҙаҡҡы минутта үлем язаһы штрафной батальонға ебәреү менән алмашынды. Истамғәлин-Улыбин ҡабаттан үлеп терелде. Ул үҙенең хыянатын ҡан менән йыуырға тейеш. Әгәр тере ҡалһа, яҡташтары алдында: «Мин хәҙер таҙа, Ватан-әсә алдындағы ғәйебсмде ҡан менән йыуҙым», — тип аҡланасаҡ...

## XI

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһы редакторы вазифаһын ваҡытлыса башҡарған Әһел Истамғәлин хәбәрһеҙ юғалғандың иртәгеһенә 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы алыҫ маршҡа сыҡты һәм икенсе аҙна уртаһында Днепрға яҡынлашты.

Днепр йылғаһының ҡеүәтен, матурлығын, гүзәллеген маҡтап бөйөк Тарас Шевченко шиғырҙар ижад итеүе, украин халҡы йырҙар сығарыуы, Богдан Хмельницкийҙың һыбайлылары, Полтавалағы шведтарҙы ҡыйратыу өсөн ашҡынып барған бөйөк Петр батша полктары, Буденныйҙың армияһындағы комбриг Муса Мортазиндың һыбайлы башҡорттары уны 1920 йылдың майында кисеп сығыуы һәм йәш Совет Россияһына баҫып ингән аҡ Польша пандарын аяуһыҙ ҡыйратыуҙары тураһында мауығып һөйләгән 58-се кавполк командирының политик эш буйынса урынбаҫары майор Әлибаев шымғас, гвардеецтарҙың да йөҙө балҡыны.

— Ата-олатайҙарыбыҙ данын был юлы ла арттырырға барабыҙ икән!

— Улар кисеп аша сыҡҡан бөйөк Днепрҙы хәҙер беҙгә кисергә яҙған, — тип үҙ-ара ығы-зығы ҡубарған һыбайлы егеттәр дәрт һәм сәм менән алға табан елдерҙе. Ҡаршынан иҫкән һалҡын елгә лә, өҙлөкһөҙ яуған ҡар ҡатыш ямғырға ла иҫтәре артыҡ китмәне уларҙың.

Беренселәрҙән булып Днепр ярҙарына барып еткән Байдәүләтов Зәки взводы, сәүкәләр шикелле шау-шыу ҡубарып, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, йылға буйында йыуына башланы.

— Ҡайҙа икәнлегегеҙҙе оноттоғоҙмо? Бөтәгеҙ ҙә ағас-

тар араһына ма-аарш! — тип асыуланды гвардия подполковнигы Күсимов.

Кавполкта тулы тәртип урынлаштырылғанға тиклем Днепр яры буйынан китмәйенсә, Күсимов, тулҡынланып-урғылып аҡкан ҡеүәтле йылғанан күҙҙәрен алмай, хайран ҡалып торҙо.

— Һа-а-ай, Днепр йылғаһының икенсе яҡтағы яры күҙгә лә күренмәй ҙә баһа!

— Етмәһә томан, — тип өҫтәне Сәғит Әлибаев.

Бик күп легендаларға һәм төрлө ваҡиғаларға бай булған Днепрҙың күренеше менән һаман һоҡланып бөтә алмаған кавполк командиры Күсимов баш сайҡаны.

— Бер мең туғыҙ йөҙ егерменсе йылда был йылғаны нисек итеп аша сыҡты икән Муса ағай Мортазиндың атлылары?

— Беҙ ҙә сығасаҡбыҙ бит!

— Эйе, Днепрҙы беҙ ҙә аша сығасаҡбыҙ, — тине Күсимов. — Хәҙер ул һайыраҡ, сентябрь аҙағы бит! Ә комбриг Муса ағай Мортазиндың атлылары Днепрҙы яҙғы ташҡын ваҡытында аша сыҡҡан!

Әлибаев өндәшмәне.

— Һеҙ ошонда кәмә табыу, һал бәйләү яғын ҡарағыҙ, — тине Күсимов полк штабы начальнигына. — Ә беҙ Әлибаев менән дивизия штабына барып киләбеҙ!

— Днепрҙы ҡайһы тәңгәлдән сығырға икән беҙгә?

— Быны дивизия штабына барғас асыҡларбыҙ, — тип гвардия подполковнигы Күсимов коноводы килтергән ҡара-ерән ҡашҡаға атланды.

Күсимов менән Әлибаев дивизия штабына барып етеүгә, кәңәшмә башланғайны инде.

Блиндаж стенаһына эленеүле карта ҡаршыһында хәрби бурысты аңлатып торған дивизия командиры Белов, һүҙенән бүленеп, Күсимовҡа асыулы ҡараш ташланы.

— Кәңәшмәгә һуңлауҙың сәбәбен аңлатығыҙ!

— Иптәш гвардия полковнигы, ғүмерҙә бер мәртәбә һуңлауҙың әллә ни ғәйебе юҡтыр бит, — тине Күсимов.

— Бындай ҡыланышты бөтөрөргә, подполковник! Дивизияның элекке командиры Шайморатов заманында уҙғарылған кәңәшмәгә лә һуңлап килеүегеҙҙе оноттоғоҙмо?!

Беловтың ошондай талапсанлығына аптыраған Күсимов, үҙен был хаҡта нисәмә тапҡыр иптәштәрсә киҫәткән Әлибаевтың һүҙен һанға һуҡмауына үкенеп, ҡыҙарынды.

— Ғәйеплемен, иптәш гвардия полковнигы! Бындай хәл бүтәнсә ҡабатланмаясаҡ!

— Ултырығыҙ, — тине Белов һәм һүҙен дауам итте. — Дымарка ауылының төньяғы тәңгәленән Днепрҙы форси-

ровать итергә бойоролдо. Ошо урында йылғаның тармағы Кривая Речка тигән күл менән бергә тоташа. Йылға тармағының ҡомло яры эргәһенән һыулы киң болон йәйелгән. Яр буйында үҫкән ағастар араһында йәшеренеп, бөтә нәмәне йылға тармағынан алып барырға һәм Днепрҙы аша сыға торған урында тупланырға! Быға әҙерләнеү өсөн бер тәүлек ваҡыт бирәм. Һорауҙар бармы?

— Иптәш гвардия полковнигы, мөмкинме? — тип дивизияның инженер-капитаны Рогачий ҡул күтәрҙе.

— Рәхим итегеҙ!

— Иптәш гвардия полковнигы, бер тәүлек ваҡыт эсендә ундай эште башҡарыуы мөмкин түгел!

— Мөмкин булмағанды ла мөмкин итергә тейешбеҙ, капитан Рогачий!

— Иптәш гвардия полковнигы!..

Инженер-капитандың аңлатмаһын тыңларға теләмәйенсә, дивизия командиры уны бүлдерҙе:

— Рогачий, һатыулашмағыҙ! Ҡабатлайым: Днепрҙы аша сыға торған барлыҡ средстволарҙы бер тәүлек ваҡыт эсендә әҙерләргә! Был мөһим эштә подразделение командирҙарынан башлап һәр рядовой һыбайлы ҡатнашырға тейеш! Яҡын тирәлә йәшәүсе халыҡтан бөтә кәмәләрҙе йыйҙыртырға! Һал бәйләүгә йәки төҙөлөш материалдарына яраҡлы булырҙай ағастарҙы йыҡтырып яр буйына ташытырға!

Днепрҙың һул яҡ ярында эш ҡайнаны. Инженер-капитан Рогачийҙың саперҙары менән берлектә башҡа яугирҙар кисеү урынына яҡын-тирәләге ауылдарҙан ситән, таҡта, мискә, кәмәләр ташыны, урмандан килтерелгән бүрәнәләрҙән һал бәйләне, ишкәктәр яһаны. Подразделениеларҙа партия-комсомол йыйылыштары уҙғарылды. Унда дивизия яугирҙары ҡушылған бурысты үтәргә ант бирҙеләр, иң алдынғы гвардеецтар партия сафына алынды. Дүртенсе эскадронда ғына егермегә яҡын кеше партия сафына алыуҙы һорап ғариза яҙҙы.

Төн уртаһы уҙған мәлдә Күсимовтың күҙәтеү пунктына сержант Степановтың разведчиктары Днепр аръяғынан «тел»[1] алып килде. Галки — Вяле — Нивки — Иҫке Иолча рубежында дошмандың төп көсө тупланыуы, ә Днепрҙы аша сығасаҡ Дымарка ауылы тәңгәлендәге траншеяларында гитлерсыларҙың һаҡсылары ғына тороуы асыҡланғас, полк командиры Күсимовтың күңеле күтәрелде.

---

[1] Был батырлығы өсөн Н. А. Степановҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелде.

— Былай булғас, беҙҙең эштәр яйлы, — тип ул разведчиктар алып килгән «тел»де дивизия штабына оҙатырға кушты ла йылғаны аша сығыу буйынса төҙөлгән план-таблицаға айырым төҙәтмәләр индерҙе. — Полктың алғы отрядына билдәләнгән дүртенсе эскадрон һыбайлылары ҡаршы яҡ ярға сығып плацдармды алыу менән, дошмандың танкылары менән һуғышырға тәғәйенләнгән артиллерияны сығарырға һәм үҙ аллы һуғышты булдырыу өсөн арьяҡҡа сығарыласаҡ һәр подразделениены тейешле ҡорал менән тәьмин итергә!

Ҡараңғы төн үргәһы етеүгә, бөтә урында әҙерлек эштәре тулыһынса тамамланды.

Днепрҙы беренсе булып сығырға тейешле дүртенсе эскадронға ярҙамлашыу өсөн яр буйында урынлаштырылған полк орудиелары менән минометтарын тикшереп сыҡҡас, Күсимов дүртенсе эскадрон десантсылары эргәһенә барҙы.

Ул, эскадрон командиры тапшырған рапортты алғас, дуҫтарса әйтте:

— Анатолий Михайлович, дошманды еңергә теләһәң, кешеләреңде һакла һәм аҡыл менән эш ҡыл!

— Иптәш гвардия подполковнигы, ышанысығыҙҙы аҡларбыҙ, — тип эскадрон командиры Рудной офицерҙары менән һалдаттары исеменән һүҙ бирҙе.

— Уңыш теләйем!

— Рәхмәт!

Дүртенсе эскадрон гвардеецтары, тауыш-тын сығармайынса, ярҙан төштө. Кривая Речка күле буйында уларҙы кәмәләр менән һалдар көтә ине.

Станоклы дүрт пулемет, танкыларға ҡаршы ата торған дүрт мылтыҡ урынлаштырылған кәмәләрҙең береһенә эскадрон командиры Рудной, ҡалғандарына взвод командирҙары менән һалдаттар ултырғас та, ҡуҙғалырға тигән команда бирелде. Бер үк ваҡытта ярҙан айырылған кәмәләр менән һалдар Кривая Речка күленә тоташҡан йылға тармағы буйлап йүнәлде. Һәр секундта ике метр тиҙлектә аҡҡан Днепрға етеү менән, тулҡындар араһында сайҡалыусы кәмәнең ағып барыуын һиҙеп, Рудной ярҙа уҡ күнекмәләр уҙғарылған ишкәкселәргә нисек ишергә икәнлеген төшөндөрҙө.

Эскадрон командиры Рудной ултырған кәмәнән башҡалар ҙа ҡалышманы.

Кәмә ҡабырғаһына шап та шоп һуғылған тулҡындар супылдауы ишкәктәр шапылдауына ҡушылып, ниндәйҙер шом тыуҙыра. Дөм-ҡара йылға өҫтө көсөргәнешле тынлыҡҡа сумған. Ялбыр болоттарҙан әрселгән күк йөҙөндә бер нисә йондоҙ күренде. Уларҙың һалҡынса емелдәүе тул-

ҡындар менән шаҙраланған тынғыһыҙ һыу өҫтөндә сағыла. Ана, яңғыҙ йондоҙҙан айырылған метеорит ҙур тиҙлектә ергә табан йүнәлде лә, һауа киңлегендә яп-яҡты көмөш эҙ ҡалдырып, ярты юлда һүнде.

Яҡында ғына бер нисә тапҡыр балыҡ ҡарпыны. Тынлыҡ. Тулҡындар тауышынан башҡа нәмә ишетелмәй.

Днепр йылғаһының яртыһынан күбеһен уҙғас, эскадрон командиры Рудно́йҙың йөрәкһенеүе артты, үҙен ҡапыл ярһығандай итеп тойҙо.

Ул, ҡаршылағы ярға төбәлеп, унан ут асыуҙарын көттө. Атыш башланһа, һыуҙағы десанттарына бик тә ҡыйынға тура киләсәк. Өҫтәүенә, дошман һалдаттары ярҙың ҡалҡыу өлөшөндә урынлашҡан. Тағы ла ун-ун биш, һис юғында бер нисә минут ошолай тының торһасы!

Ишкәкселәр тырышып-тырышып ишә. Әлегә һәммәһе тып-тыныс.

«Йәнә бер нисә тапҡыр ошолай етеҙ ынтылһаҡ, яр ситендә буласаҡбыҙ», — тип Рудной уйларға ла өлгөрмәне, алғы яҡтан бер-бер артлы һауаға осҡан ракеталар һүнер-һүнмәҫтән, дошман минометтарҙан һәм пулеметтарҙан ут асты.

Эскадрон командиры:

— Огонь! — тип ҡысҡырҙы ла үҙе башлап автоматтан яуап уты асты.

Йылға өҫтөн ҡайнатып ярылған миналарҙың береһе Руднойҙың кәмәһенә яҡын йөҙгән лейтенант Дәүләтовтың пулемет взводы урынлашҡан кәмәне түңкәрә һуҡты, ә икенсе взвод командиры Монаховтың кәмәһе ҡомға ултырҙы.

Рудной һыуға һикерҙе.

— За мной! — тип автоматынан ҡурғаш ямғыры яуҙыра-яуҙыра, ул дошман утына ҡаршы ташланды. Йылғала бөрхаланыусы Монахов менән Дәүләтов та, һалдаттарын ҡабаландырып ҡысҡыра-ҡысҡыра, Рудной артынан ҡалмаҫҡа тырышты.

Бына улар ҡоро ергә аяҡ баҫты. Десантсыларҙың бер төркөмө текә яр ҡалҡыулығындағы дошмандың бормалы-бормалы траншеяларына етер саҡта, эскадрон командиры Рудной:

— Снайпер Арсенюк [1], дошмандың ут нөктәләрен ҡыйратырға! — тип бойорҙо ла, һыуҙағы гвардеецтарҙы ҡабаландырҙы: — Йәйләмағыҙ, егеттәр, шәберәк, шәберәк!

---

[1] Ошо һуғыштағы ҡыйыулығы өсөн Александр Николаевич Арсенюк Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды. Һуғыштан аҙаҡ ул институт тамамланы һәм хәҙерге көндә Мәскәүҙә йәшәй.

Лейтенант Монахов взводы алға ташланды, һәм дошмандың траншеяһы тәңгәлендә ҡул һуғышы башланы. Монаховҡа бер юлы өс немец һалдаты һөжүм итте. Икеһен Монахов автоматтан атырға өлгөрҙө, арттан киҙәнгән өсөнсөһөн приклады менән тәкмәстерә һуҡты ла һалдаттарына ярҙамға йүгерҙе.

Десантсыларҙың һул флангыһындағы дошман төркөмө менән алышыусы эскадрон командиры Рудной траншеяларҙы һуғышып алған Монахов взводына түңәрәк оборона тоторға һәм Дәүләтовтың пулемет взводына уң флангынан атакалаусы немецтарға ут асырға ҡушты.

Йылғалағы һалдар менән кәмәләр ярға сығып бөткәс, алыш ҡыҙҙы. Һәр метр ерҙе дошмандан азат итеү өсөн аяуһыҙ көрәшкән гвардеецтарҙың ҡыҫымы артҡан һайын, пулеметтар менән автоматтарҙан атҡан тауыштар ҙа йышайҙы.

— Гранатами — огонь!

Гранаталар шартлауы баҫылыр-баҫылмаҫтан, эскадрон командиры лейтенант Рудной һикереп торҙо.

— Егеттәр, минең арттан! — тип ҡысҡырҙы ла, һуғышсыларын эйәртеп, алға ташланды. Уларҙың берҙәм, көсөргәнешле ҡыҫымына сыҙамайынса, дошман артабан сигенергә мәжбүр булды.

Ҡөн һалҡын булыуға ҡарамаҫтан, манма һыуға төшөп тирләгән эскадрон командиры Рудной гитлерсыларҙан һуғышып алынған траншея төбөнә сүкәйҙе. Ул, гимнастерка иҙеүен ысҡындырып, битен еңе менән һыпырҙы ла:

— Днепрҙың уң яҡ яры беҙҙеке! Ошо урындан бер аҙым да сигенмәскә! — тине һәм, һул яҡ ярҙа ҡалған полк командиры Ҡусимов һәммәһен белһен өсөн ракетанан атып, сигнал бирҙе.

Днепр яры өҫтөндә оборона тотоусы десантсыларҙы ҡыҫырыҡлап-ҡыҫырыҡлап та сигендерә алмағас, дүртенсе эскадрондың тылына кәмә менән сығырға маташыусы дошман һалдаттары Искәндәр Дауытовтың станоклы пулемет утына эләкте. Ҡөсло атыш ваҡытында икенсе расчеттағы башҡорт егете Әбүзәров һәләк булды, ә Дауытов һул яҡ яурынынан ҡаты яраланды. Ләкин ул гитлерсылар өҫтөнә ҡурғашлы ямғыр яуҙырыуҙан туҡтаманы. Ярҙамға ебәрелгән гвардеецтар килеп етеүгә, икенсе тапҡыр ҡаты яраланған Әбйәлил районы егете Дауытов та йән биргәйне инде.

Ҡараңғы төшкәндә лә яр буйындағы көслө алыш баҫылманы, Ҡүмһегән һөт еҫен аңҡытҡан төтөн ҡатыш ҡуйы туҙан өйөмө күк йөҙөндәге көләс айҙы томаланы.

Дошман уты таң алдынан ғына туҡталды, ләкин тынлыҡ оҙаҡҡа барманы. Күсимовтың бүтән эскадрондары Днепр аша сыға башлағас та, һуғыш ҡабаттан ҡыҙҙы. Яр буйындағы полк артиллеристары нисек кенә дошман утын баҫырға тырышмаһын, Күсимов ултырып килгән кәмәнең тирә-яғында һыу өҫтө дошман туптары менән миналары төшөп ярылыуҙан өҙлөкһөҙ ҡайнаны, урғылды. Снаряд тейеп ярылған ыңғайҙа алдағы кәмәләрҙең бер нисәһе онталды, бүрәнәләре тарҡалған һал аҫҡа аҡты, юғарылағыһы, һыу тулҡындарын төрлө яҡҡа һирпелдереп, һауаға күтәрелде...

«Воздух! — тип кемдеңдер ҡысҡырыуын ишеткән Күсимов башын ҡалҡытып ҡарау менән һауала дошман самолеттарын күрҙе. Улар ташлаған бомбалар шартлауынан йылға өҫтө ҡот осҡос ҡойонға әүерелде.

Шул мәл Днепр өҫтөндә совет истребителдәре төҫмөрләнде. Улар яҡынлаша башлағас та, дошман самолеттары кире боролдо. Ләкин ҡыуанырға иртәрәк ине. Беҙҙең истребителдәр китеп күҙҙән юғалыуға күп тә уҙманы, дошман самолеттары ҡабаттан күренде, һәм йылға өҫтө яңынан күҙ асҡыһыҙ көслө ҡойонға әүерелде...

Ярға сығырға ун метр самаһы ара ҡалғас, туп ярсығы Күсимовтың кәмәһен тиште һәм ишкәксенең ишкәген һындыра һуҡты. Кәмә бата башлағас, Күсимов һыуға һикерҙе, һәм үҙәккә үтерҙәй һалҡын һыу уның тәнен өттө. Днепрҙың сите һай булһа ла, еүеш өҫ кейеме Та-һирға йөҙөргә ҡамасауланы, аҫҡа һөйрәне. Эргәһендәге кешеләр ярҙамында ҡороға сыҡҡас, уны яр башындағы яугирҙар ҡыуанып ҡаршыланы.

— Полк командиры беҙҙең менән!

Күсимов, хәлде асыҡлағас, эскадрон командирҙарына плацдармды киңәйтергә бойорҙо.

Плацдарм фронт буйынса ике, ә тәрәнлеге бер километрға киңәйтелгәс кенә, һөжүмде туҡтатырға ҡушып, полк командиры һуғышып алған йылы блиндажға инде. Ул ярты кружка самаһы спиртты бер тына һемерҙе лә, өшөүенән ҡалтыранған тәненең ҡан тамырҙары буйлап ағылған йылылыҡҡа кинәнеп-ләззәтләнеп, ҡәнәғәтләнеү менән йылмайҙы.

— Ә-әх, кинәндергес!..

Ординарецы биргән ҡоро кейемде кейгәс, Күсимов эскадрон командирҙарын саҡыртты һәм уларға ла яртышар кружка спирт ҡойоп бирергә ҡушты.

— Взвод командирҙары менән рядовой һалдаттарҙы ла онотмаҫҡа! Юғиһә, уларҙы һалҡын аласаҡ, — тип искәртте ул.

Бер аҙ ҡыҙмасаланып алғас, блиндажға йыйналған офицерҙар десантсыларҙың ҡыйыулығын маҡтап телгә алды, һуғышып алынған плацдармда нисек оборона тотоуҙары, һыуҙы аша сыҡҡан ваҡыттағы ваҡиғаны һөйләне.

— Лейтенант Руднойҙың дүртенсе эскадроны бигерәк тә маҡтауға лайыҡ, — тине Күсимов, ҡыҙыу итеп яғылған «буржуйка» ҡаршыһында йоҡомһорап ултырған эскадрон командирына ҡарап.— Анатолий Михайловичтың десантсылары арҡаһында беҙҙең 58-се гвардия кавалерия полкына һәм дивизияның ҡалған полктарына ла йылғаны аша сығырға мөмкинлек тыуҙы.

— Дүртенсе эскадрондан ҡала, гвардия өлкән лейтенанты Язенконың икенсе эскадроны ҡыйыулығын да иҫтән сығармайыҡ, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы гвардия майоры Сәғит Әлибаев.

Күсимов полк штабы начальнигы подполковник Карпенко ултырған яҡҡа әйләнеп ҡараны.

— Михаил Александрович, икенсе эскадрондың батырлығы хаҡында мин ниңә бер ни белмәйем?

— Һеҙгә был хаҡта әйтергә мөмкинлек булманы, иптәш гвардия подполковнигы, — тип Карпенко икенсе эскадрон һуғышсылары тураһында һөйләргә тотондо.

...Лейтенант Руднойҙың десантсылары артынса Днепрҙың уң яҡ ярына табан йөҙөп барған икенсе эскадрондың кәмәләре менән һалдарындағы гвардеецтар дошмандың көслө артиллерия-миномет утына эләкте. Снаряд ярсығы тишкән кәмәгә һыу тула башлауын күргәс, унан арттағы һалда килгән взвод командиры гвардия старшинаһы Әхмәтшин һалҡын һыуға һикерҙе һәм алға табан йөҙҙө. Туптар ярылыуынан ҡайнаған йылға өҫтөндә бер нисә ынтылыуҙа ҡыуып етеп, яртылаш батҡан кәмәгә күтәрелгәс, ул өҫтөндәге күлдәген сисеп тишекте томаланы ла кәмәгә тулған һыуҙы пилоткаһы менән түгергә кереште. Лейтенантҡа ишкәкселәр менән бүтән яугирҙар ҙа ярҙамлашты.

Ҡаршылағы ярға имен-аман сыҡҡас, дошман артиллеристары көслө ут асты. Гитлерсыларҙың уты туҡталыу менән, дошман һалдаттары контратакаға күсте һәм Әхмәтшиндың взводын уратып алды. Дошман ҡамауы ҡыҫылғандан-ҡыҫыла барҙы.

— Боеприпастар бөттө! Үҙебеҙҙекеләр яғына гранаталар менән юл асырға! — тип взвод командиры Әхмәтшин алға табан шыуышты. Баш ҡалҡытып ҡарарға ла мөмкинлек бирмәгән дошман пулеметын ҡыйратҡас, ул ҡысҡырҙы: — Гранаты — к бою!

Атакаға беренсе булып ташланған комсомолец Ҡылыснияз Азалов яңғыҙы тиҫтәләгән дошман һалдатын, ике офицерҙы гранаталар менән дөмөктөргәс, ҡаршынан уның өҫтөнә һикергән немецты бысағы менән сәнсеп үлтерҙе лә, икенсеһенең боғаҙына йәбешкән ваҡытта, өс тапҡыр ҡаты яраланыуынан хәлдән тайып, үҙе лә ергә ауҙы. Уға ярҙамға килеп еткән яуҙаштары, дошман һалдаттарын ҡыйрата-ҡыйрата, ҡамауҙы йырып сыҡты.

Карпенко һөйләгәнде иғтибар менән тыңлап ултырған полк командиры йөрәкһенде.

— Михаил Александрович, дүртенсе эскадрон командиры лейтенант Руднойға, взвод командирҙары Монаховҡа, Әхмәтшингә, Дәүләтовҡа, гвардия рядовойҙары Арсенюкка, Азаловҡа Советтар Союзы Геройы [1] исеме биреүҙе, ә ҡалған батырҙарға ордендар юлларға!

— Улар хаҡында реляция яҙырға ҡуштым, иптәш гвардия подполковнигы, — тине полк штабы начальнигы.

— Әлегә белмәгән батырҙарҙы ла асыҡларға һәм уларҙы ла наградлауҙы ойоштороорға!

— Бойороғоҙ үтәлер!..

Иртәгеһе көндө, егерме һигеҙенсе сентябрҙең таңында, Днепрҙың уң яҡ ярына сыҡҡан 60-сы һәм 62-се гвардия кавалерия полктары менән берлектә, Күсимовтың полкы Нива ауылына һөжүм башланы.

Дошмандың контратакаларын кире ҡаға-ҡаға, гвардеецтар ике тәүлек ваҡыт эсендә фронт буйынса ун дүрт, тәрәнлеге — һигеҙ километр плацдарм яулап алғас, шул арала саперҙар һалырға өлгөргән понтон күпер аша сығарыласаҡ аттарҙы, танкылар менән артиллерия-минометтарҙы көттөртөп, 16-сы гвардия кавалерия Чернигов дивизияһы командиры Белов һөжүмде туҡтатырға ҡушты.

Днепрҙы кискәндән бирле беренсе тапҡыр бәрелеш тамамланып, бөтә ерҙә тынлыҡ урынлашҡас, эскадрондарға алмашлап ял бирергә рөхсәт ителде.

Бындай мөмкинлекте бер ҡасан да файҙаланмай ҡалмаған гвардия подполковнигы Күсимов, күңел асып алырға ниәтләнеп, ҡурайсыларҙы саҡыртты.

Адъютанты алып ингән ике егет блиндаж ишеге төбөндә күренгәс тә, ул асыуланып һораны:

— Ҡайҙа ҡурайығыҙ?

— Иптәш гвардия подполковнигы, беҙ ҡурайһыҙ ҡалдыҡ, — тип яуап ҡайтарҙы ҡурайсыларҙың олораҡы.

---

[1] Черниговты азат итеү һәм Днепрҙы аша сығыу ваҡытындағы батырлыҡтары өсөн, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының 54 һуғышсыһы, шул иҫәптән Күсимов та, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды.

— Табығыҙ!

— Днепрҙы аша сыҡҡанда һыуға батҡан ҡурайҙы нисек итеп табырға, иптәш гвардия подполковнигы?!

Теле осонда яман һүҙҙәр уралған полк командирының асыуы ҡабарҙы. Ләкин ул был юлы екеренмәне лә, һүгенмәне лә. Ҡурайсыларға спирт ҡойоп бирергә бойорҙо ла, кисәге һуғышта зенит артиллериялары бәреп төшөргән бөрәй дошман самолетын табып, уның бензин көпшәһенән ҡурай яһарға ҡушты.

Ҡурайсылар оҙаҡ йөрөмәне. Блиндажға кире әйләнеп килгәс, бер-береһен бүлдереп, улар полк командирына рапорт тапшырҙы:

— Иптәш гвардия подполковнигы, бойороғоғоҙ үтәлде!

— Яҡында ғына дөмөккән фриц «мессер»ының бензин багы көпшәһенән бынамын тигән ике ҡурай сыҡты!

Ҡурайсыларҙың сослоғона һәм етеҙлегенә ҡыуанған Күсимов «Любизар»ҙы уйнарға ҡушты.

Ҡурайсылар ғыжғылдатҡан дәртле көйгә Күсимов үҙе лә ҡушылып йырланы:

Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда,
Алдан сыҡты даныбыҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис...

Блиндажға башҡа офицерҙар ҙа йыйналғас, бер аҙ ҡыҙмасаланып алған Күсимов дәртләнеберәк йырланы.

Көслө атыш барған саҡта ла радио аша башҡорт көйҙәрен уйнап яугирҙарҙы атакаға барырға, дошман һалдаттарын аяуһыҙ ҡыйратырға рухландырған ҡурай моңо бөгөн бигерәк тә көслө яңғыраны.

Күптән түгел генә совет һалдаттарына ҡаршы көрәшергә дошманға ярҙамлашҡан бензин багы көпшәһе, ҡурай итеп эшләнгәс, башҡорттоң музыка ҡоралына әүерелде.

Һуғыш барған ваҡыттағы иң ҡыйын, иң моңһоу, ҡайғылы минуттарҙа яңғыраған һоҡландырғыс сихри көйгә арбалып ултырған Таһир Күсимов ләззәтләнде. Күңелен ҡыҫып тотҡан хәсрәттәре таралып, көс еткеһеҙ ауыр тойғоларынан бушанып ҡалғандай тойҙо ул үҙен.

— Ә-әһ, булмаһа, бер һелкенеп тә алайыҡ, — тип ул блиндаж уртаһына сығып баҫты. Ҡурайсылар «Перовский»ҙы һыҙҙыра башлағас та, ҡулдарын ҡанат шикелле йәйеп елпендерә-елпендерә, бер урында аяҡтарын тыпырлатты-тыпырлатты ла Әлибаевҡа ҡысҡырып өндәште:

— Сәғит, давай, хәҙер һин бейе!

Әлибаев бейергә теләмәне.

— Ҡыҫыҡ блиндажда тыпырсынып тороуҙан файҙа юҡ, — тине лә, тиҙ арала иҫереп алырға өлгөргән Күсимовтан еңел генә ҡотола алмаясағын аңлап, тамағын ҡыра-ҡыра, тоноҡ тауышы менән ашыҡмай «Үткәүел» исемле боронғо йырҙы һуҙҙы:

Үткәүелкәйҙәрҙе лә, ай, үткәндә,
Бер ҡараным артыма ҡай(ы)рылып,
Бер ҡараным артыма ҡай(ы)рылып.
Тыуған илкәй ҡалды ай(ы)рылып,
Тыуған илкәй ҡалды ай(ы)рылып.

Ҡулыңдағы ҡылысың, ай, һынмаһын,
Алдарыңдан дошман уҙмаһын,
Алдарыңдан дошман уҙмаһын.
Егет кенә саҡта ҡәҙерен бел,
Йәш ғүмерең заяға уҙмаһын,
Йәш ғүмерең заяға уҙмаһын...

Икенсе октябрҙең таңында Днепрҙың уң яҡ ярында тотҡан рубежды уксы дивизияға ҡалдырып, 16-сы гвардия кавалерия Чернигов дивизияһы икенсе эшелонға күселде.

## XII

16-сы кавалерия дивизияһының ялға сығарылыуына өс тәүлек ваҡыт уҙғас, яңы приказ алынды.

Тиҙ арала маршҡа йыйналған һыбайлы полктар, понтон күпере аша Днепр йылғаһының һул яҡ ярына кире сығып, юғарыға табан йүнәлде.

Днепр яры буйындағы ағастар араһынан һуҙылған батҡаҡлы ерҙән барған аттар бик тиҙ арыны. Төштән аҙаҡ ҡар ҡатыш ямғыр яуа башланы. Ҡаршынан иҫкән һалҡын ел көсәйҙе.

— Төбө тишелде инде әллә күктең, — тип зарланды һыбайлылар.

Бер аҙ шымып барғандан һуң, кемдер йәнә һүҙ башланы:

— Өҫ-баш лыҡа һыуланды!

— Бигерәк тә еле яман, — тине икенсе һыбайлы. — Эйәрҙә ултырып барыр әмәл ҡалманы.

— Ҡышҡы кейем бирмәйҙәр бит! Бирһәләр, был тиклем өшөргә тура килмәҫ ине!

— Терпи казак, атаманом будешь!

Яугирҙарҙың үҙ-ара зарланышыуын ишетмәмешкә һалышҡан взвод командиры Байдәүләтов Зәки әлдән-әле бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлап ҡысҡырҙы:

— Взво-о-од, подтянуться!.. Не отставать!..

Бәкәлдәренә саҡлы батҡан меҫкен хайуандарҙы ҡыуып ҡабаландырыуҙарына ҡарамаҫтан, һыбайлылар шәп бара алманы.

Илле километр араны көс-хәлгә уҙып, Днепр йылғаһының уң яҡ ярына ҡабат сыҡҡас, генерал-лейтенант Батовтың 65-се армияһына буйһондоролған 7-се кавалерия корпусына ингән 16-сы дивизияға Лоев ҡалаһы эргәһендәге уйһыулыҡта туҡталырға бойоролдо.

Эскадрондарҙа уҙғарылған партия, комсомол ойошмалары йыйылыштарында, төрлө кәңәшмәләрҙә һәм ултырыштарҙа дивизияның элекке һуғыштарҙа нисек ҡатнашыуы, һыбайлыларҙың батырлыҡтары тураһында ентекле анализ яһалды. Парторгтарҙы, комсоргтарҙы, агитаторҙарҙы айырым-айырым йыйып, политработниктар төрлө инструктаждар үткәрҙе, рядовой гвардеецтар өсөн лекциялар һәм докладтар уҡылды. Уларҙың аңына һеңдерерҙәй иң кәрәкле, мөһим һүҙҙәрҙе әйтеп, киләсәктә башҡарыласаҡ хәрби операцияның үтә ҡыйын, ҡатмарлы шарттарҙа буласағы, фашистар тотҡононда ыҙалаған белорус халҡын азат итеүҙе тиҙләтеү өсөн ниндәй бурыстар тороуы ентекле аңлатылды.

Хәрби күнегеүҙәр барышында һыбайлылар Белоруссиялағы һаҙлыҡлы-батҡаҡлы ерҙәрҙә, ағас араларында дошман һалдаттарына ҡаршы һуғышырға өйрәтелде. Сөнки әлегәсә немецтар менән күпселеген асыҡ яландарҙа йәки далаларҙа һуғышырға тура килгәйне уларға.

Һаҙлыҡлы урман шарттарында эскадрондарҙың һуғышы менән идаралыҡ итеүе ҡыйын буласағын яҡшы аңлаған гвардия подполковнигы Күсимов һәр взводта уҙғарылған занятиеларҙа, практик күнегеүҙәр ваҡытында ғәҙәттә үҙе ҡатнашты.

Көнө буйы күнегеүҙәрҙә арыған Байдәүләтов Зәки тәрән траншея төбөнә сүкәйҙе һәм үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡоға сумды. Ул төшөндә тыуған өйөн, әсәһе менән һөйөклө кәләшен күрҙе. Мәстүрәһе үтә алсаҡ, шат, Зәкиҙе иркенләп ҡосаҡлай, шыбырлап ҡына ниҙер һөйләй. Тик уларға танһыҡтары ҡанғансы икәүҙән-икәү ултырып һөйләшергә, бер-береһе менән ләззәтләнергә кемдер ҡамасаулай. Ана, һыйыр һауырға сыҡҡан әсәһе тик-томалға кемгәлер асыулана, биҙрәләренең тотҡаһын өҙлөкһөҙ зыңҡылдата...

— Иптәш командир!.. Иптәш командир, башланды!..

Ярҙамсыһының борсоулы тауышына уянған Байҙәүләтов орудиелар менән минометтар канонадаһына иғтибар итте.

Шул уҡ минутта эскадрон командиры менән траншея буйлап килгән подполковник Күсимов күренде. Полк командиры, Байҙәүләтов взводының һөжүмгә әҙерлеген белгәс, беҙҙең орудиелар ҡыйратҡан дошман нығытмаларын күҙәтте.

Пушкалар тыныуға, баш осонан беҙҙең бомбардировщиктар геүләп уҙҙы. Улар дошман позицияһына еткәс тә, бомбалар гөрһөлдәп ярыла башланы...

— Хәҙер беҙгә сиратмы, иптәш гвардия подполковнигы? — тип һораны Байҙәүләтов, түҙемһеҙләнеп.

— Ҡабаланма, приказ булыуын көт! Хәҙергә... — Күсимов, башлаған һүҙен әйтеп бөтөрмәйенсә, атакаға берҙәм күтәрелгән уҡсы батальондар яғына әйәк ҡаҡты. — Ана, әлегә уларҙың сираты!

Батальондар артынса 15-се танк бригадаһы ла ҡуҙғалды. Танкылар йәйәүле һалдаттарҙы уҙып бер аҙ барғас ҡына, Күсимовтың һыбайлыларына атакаға ташланырға бойороҡ бирелде.

Танкыларҙан ҡалышмайынса йән-фарман сабыусы 58-се кавполк һыбайлыларының дошман араһына барып инеүен көтмәйенсә, дивизия командиры Белов икенсе эшелондағы полктарҙы ла һуғышҡа индерҙе.

Черниговсыларҙың утлы ағымы алға, һаман алға тәгәрәне. Һыбайлыларға ярҙамлашыусы артиллеристар атҡан снарядтар ҙа һаман алыҫыраҡ осто.

Күсимов, телефондан фронттың өҙөлөүе, ләкин уңышлы барған һөжүмдең ҡапыл тотҡарланыуы, Кузьминка ауылында нығынған дошмандың көслө ҡаршылыҡ күрһәтеүе хаҡында белгәс, дивизия командирына хәбәр итте.

— Дошман утын орудиелар ярҙамында баҫырға! [1] — тип бойорҙо Белов.

Шунда уҡ дошман оборонаһындағы дотҡа — оҙаҡ ваҡытлы нығытмаға — беҙҙең туптар төшөп ярыла башланы.

Кузьминка ауылы дошмандан таҙартылған саҡта, Күсимов полкына тейешле ярҙам килеп етте. 58-се кавалерия полкы, дивизияның башҡа полктары менән берлектә, ауылдың көнбайышындағы урманға сыҡты.

Төн уҙып, көн әкренләп яҡтырҙы.

---

[1] Радистар менән телефонистар, Шайморатов заманындағыса, дивизия командирының бойороғон башҡортсаға тәржемә итеп, дошман аңламаған телдә асыҡтан-асыҡ тапшырҙы.

Юғалтҡан позицияһын ҡабаттан ҡайтарырға теләп, дошман ҡат-ҡат контратакалап ҡараны, ләкин уның һәр атакаһы кире ҡағылды.

Госпиталдән һуң йәнә 60-сы кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнгән гвардия полковнигы Фондерацевтың һыбайлылары менән бергә хәрәкәт иткән Күсимов полкының асыҡ флангыларына орудиелар ҡуйылыуына сәғәт ярым самаһы ваҡыт уҙғас, дошман яғынан моторҙар геүләүе ишетелде.

Ергә йәйелгән аҡһыл-һорғолт томан арҡылы күҙәтеү пункытынан бер ни ҙә күрә алмағас, Күсимовтың борсолоуы артҡандан-арта барҙы. Дошман танкылары ҡайһы тирәлә икән? Артиллеристар ниңә һаман атмай?..

Дүрт дошман танкыһы асыҡ урынға килеп сыҡты. Уларға автоматсылар эйәргән.

Шул саҡ орудие командирының:

— По первому танку — огонь! — тигән командаһы ишетелде.

Иң алда килгән дошман танкыһы, гусеницаһы тарҡалып, бер урында үрһәләнергә тотондо. Ҡалған танкылар, артҡы торбаларынан яман урғылған күкһел төтөн көлтәләре ҡатыш оҫҡондар сәсеп үкерә-үкерә, йөрөшөн яйлатты. Артиллеристар яуҙырған снарядтар йәнә ике танкыны туҡтатты. Улар шунда уҡ ялҡынланды һәм ҡара төтөнгә солғанды. Дүртенсе танк арты менән сигенде. Дошман автоматсылары, танкыларға ышыҡланып килеүҙән мәхрүм ителгәс, ни эшләргә белмәйенсә, кирегә боролдо һәм Күсимов полкының пулеметсылары утына эләкте.

Дошмандың ҡырылыуын күреп тантана кисергән Күсимов эскадрон командирҙарына Романовка менән Молодушка ауылдарын һуғышып алырға бойороҡ бирҙе.

Молодушка ауылына етеп барғанда эскадрондар ҡалҡыулыҡта ныҡынған дошмандың көслө оборонаһына юлыҡты.

Полктың һөжүме өҙөлөү ҡурҡынысы тыуҙы.

Күсимов был хаҡта полк ҡарамағындағы артиллерия-миномет полкы командирына хәбәр итте.

Шул уҡ минутта беҙҙең орудиелар көслө ут асты. Артиллеристар тарафынан дошмандың ун танкыһы ҡыйратылғандан һуң, ҡалған дүртеһе кирегә боролдо. Ярҙамһыҙ ҡалған гитлерсыларҙың уҫсы батальондарын тураҡлай-тураҡлай, Күсимовтың һыбайлылары алға үтте.

Кис, дошман оборонаһы тулыһынса ҡыйратылып, Молодушка ауылы һуғышып алынғас, ҡорбандарҙың күп булыуы асыҡланды: артиллерия-миномет полкы командиры гвардия капитаны Шелабутин, икенсе эскадрон команди-

ры, ике пулемет взводы командирҙары, элемтә линияһын һаҡлаусы өлкән лейтенант Мөхәммәтҡолов, артиллерия полкының бишенсе батареяһы яугирҙары тотошлай һәләк булған.

Күңелһеҙ яңылыҡты ишетеп, Күсимов бик нык ҡайғырҙы. Ул, эсе бошоп, һуғыш ваҡытындағы барлыҡ күренеште — бомбалар менән туптарҙың ярылыуын, ҡорос-тимерҙәрҙең өҙгөләнеүен, машиналарҙың онталыуын, ҡоралдарҙың ҡыйратылыуын, ямғырға шешенгән окоптарҙы, дымлы землянкаларҙы, бозло йылғаларҙы нисек кисеүҙәрен, һаҙлыҡлы ерҙәрҙән бата-сума барған аттарҙы һәм ир-егеттәрҙең ҡырылыуын күҙ алдына килтерҙе... Башҡорт кавалерия дивизияһы һуғышҡа индерелгән минуттан башлап һәләк булған кешеләрҙе һанап бөткөһөҙ бит! Һуғыш шәфҡәтһеҙ. Берлинға етеп Ватан һуғышы тамамланғанға тиклем йәнә күпме кешеләрҙең ҡаны ҡойоласаҡ, күпме ғүмер өҙөләсәк! Оло донъя менән сағыштырғанда әҙәм заты туҙандай ҙа түгел. Әммә кешеһеҙ ҡаласаҡ тирә-яҡтағы иң ҡәҙерле, иң ғәзиз, иң һоҡландырғыс барлыҡ нәмәнең әһәмиәте мәғәнәһеҙ! Кешеһеҙ донъя — тоноҡ, буп-буш... Шулай булғас, кемдәргә кәрәк булды икән ошондай вәхшиҙәрсә ҡыйралыш? Үлем менән вандализмдың һәм мәғәнәһеҙгә ыҙаланыуҙарҙың кемгә файҙаһы бар? Гитлер шикелле бәндәләргә был донъяла нимә етмәй? Мәңгелеккә тыуғанмы ни ундайҙар?..

Иҫән-һау ҡалып тыуған иленә ҡайтырға насип булһа, Таһир Таипович тыныс тормоштоң ҡәҙерен белеп, һәр нәмәгә ҡыуанып йәшәр ине. Әлегә, Ватан-әсәне яуыз илбаҫарҙарҙан азат итеү өсөн дәһшәтле көрәш барған осорҙа, ул тик еңеү хаҡында ғына хыялланырға бурыслы.

«Ватан һуғышында ҡатнашҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының полк командирҙарынан мин генә ҡалдым. Генерал-майор Шайморатов, уның урынбаҫарҙары, башҡа эскадрон командирҙары шикелле, бәлки, миңә лә яҡты донъяла йәшәргә күп ҡалмағандыр? Әгәр ҙә ил өсөн, халҡым бәхете өсөн алышта үлергә тура килһә, һуғыштан һуң йәшәйәсәк киләһе быуын кешеләре мине лә иҫкә алырмы икән?..»

Сәғит Әлибаев менән блиндажға килеп ингән полк штабы начальнигы Карпенко:

— Иптәш гвардия подполковнигы, корпус штабынан предписание алдыҡ, — тине.

— Нимә хаҡында? — Таһир һағайҙы.

— Немец-фашист баҫып алыусыларына ҡаршы һуғышып бай тәжрибә туплаған батырҙар араһынан туғыҙ кешене Тамбов кавалерия училищеһына ебәрергә ҡушалар!

— Был мәсьәлә ашығысмы?

— Ике көн ваҡыт биргәндәр.

— Үҙебеҙҙең ихтыярға ҡуйһалар, полктан бер кемде лә ебәрмәйем, — тип Ҡусимов ҡырт киҫте.

Шуға саҡлы һүҙгә ҡыҫылмай ғына бер яҡ ситтә баҫып торған Сәғит Әлибаев:

— Таһир Таипович, минеңсә, мәсьәләне улай ҡуйыу килешмәҫ, — тип ҡаршы төштө. — Бөгөнгө көн менән генә йәшәп булмай бит. Белемле һәм һәләтле командирҙар беҙгә иртәгә лә кәрәк буласаҡ.

— Иң һәләтле, ҡыйыу туғыҙ кешене полктан уҡырға ебәреп, кем менән һуғышырға тейеш мин? — Ҡусимов кәпрәйҙе.

— Әмәлен табырбыҙ, Таһир Таипович!

Ҡайһы саҡта кәрәгенән артыҡ ҡыйыу, тәүәккәл һәм ҡыҙыу холҡон әле булһа ташлай алмаған полк командиры, ғәҙәттәгесә пыр туҙып ҡысҡырғандан һуң, ҡапыл тынысланды.

— Ярай әләйһә, һеҙ теләгәнсә булһын! Училищеға кемдәрҙе ебәрәбеҙ? Исемлек әҙерме?

— Әҙер.

Полк штабы начальнигы биргән ҡағыҙға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, Ҡусимовтың йөҙө яғымлыланды.

— Бөтәһе лә күп һуғыштарҙа һыналған һыбайлылар һайлап алынған икән! Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолған замандан бирле миңә таныш булған берҙәнбер взвод командирын да училищеға уҡырға ебәрергә ине!

— Өлкән сержант Байдәүләтовты әйтәһегеҙме? Ул уҡырға китергә ҡаршы буласаҡ, иптәш гвардия подполковнигы!

— Нисек ҡаршы?

— Үҙебеҙҙең полктан айырылғыһы килмәй уның. Быныһы бер. Икенсенән, ул уҡыуҙа саҡта Берлинды унан башҡа алыуыбыҙҙан ҡурҡа!

— Һа-а-ай, суҡынмыш егет икән! — Ҡусимов һаһылдап көлдө. — Беҙгә шундайҙарҙы уҡырға ебәрергә, мотлаҡ ебәрергә кәрәк! Бына мин әйтте тиерһегеҙ, Байдәүләтовтан шә-ә-әп офицер-кавалерист сығасаҡ, Сәғит Рәхмәтович! Был хаҡта взвод командиры Байдәүләтов менән үҙең һөйләш!

— Яҡшы, һөйләшермен, — тине Әлибаев.

Улар китеү менән блиндажға килеп ингән коноводы, иларҙай хәлгә етеп, ҡара-ерән ҡашҡаға снаряд ярсығы тейеүен әйтте. Ҡусимов, кружкаһы төбөндәге сәйҙе эсеп

бөтөрмәйенсә, йүгереп тышҡа сыҡты. Ағас төбөндәге һапһары япраҡтар өҫтөндә ятҡан ҡара-ерән ҡашҡа, хужаһын күргәс, алғы аяҡтарына баҫырға тырышып ҡараны. Ләкин тәнен ҡуҙғалта алмайынса, ҡапыл хәлһеҙләнеп, кире йығылды. Ҡат-ҡат торорға маташыуының файҙаһы теймәгәс, фәжиғәле яҙмышына буйһонорға мәжбүр булған ҡара-ерән ҡашҡа башын ергә һалындырҙы һәм ҙур күҙҙәрен мөлдөрәтеп Күсимовҡа ҡараны.

«Бына хәҙер мин дә үләм! Туған төйәгемә ҡайтырға яҙмаған икән!» тигән һымаҡ ине ул күҙҙәр.

Үлем менән тартҡылашҡан ҡара-ерән ҡашҡаға нисек итеп ярҙам ойошторорға белмәйенсә, аптырап, Күсимов уның ялынан һыйпаны, муйынынан һөйҙө. Хәле бик ҡыйын, мөшкөл булыуына ҡарамаҫтан, меҫкен ҡара-ерән ҡашҡа хужаһының яғымлылығына иғтибарһыҙ ҡалманы, ҡалын ирендәре менән Күсимовтың бармаҡтарынан эләктереп, һау сағындағы шикелле иркәләнергә тырышты.

Коновод саҡыртҡан ветврач килде. Ул ҡара-ерән ҡашҡаның осаһы менән артҡы бото тәңгәлендәге ҡаты яраны таҙартты. Йөрәгенә үтеп ингән һыҙланыуҙарға сыҙай алмайынса, ҡалтырана-ҡалтырана, Күсимовтан күҙ яҙҙырмай ҡарап ятҡан хайуан, уның китергә йыйналыуын күреп, йән әрнеткес тауыш менән кешнәне, башын ҡалҡытырға маташты...

Ҡара-ерән ҡашҡаның иҫән ҡалырына ышаныс юҡлығын белгәс, Күсимовтың күҙҙәренән ике бөртөк йәш һығылып сыҡты. Ул, меҫкен хайуандың ыҙаланыуын, йән менән нисек болашыуын башҡаса ҡарап торорға теләмәй, йәһәтерәк китеү яғын ҡараны.

Көҙгө йонсоу төн шикелле бошонҡо уйҙарына күмелеп блиндажына ингәс, сисенеп-нитеп тормайынса, ул йөҙ түбән ҡапланды. Нисәмә үлемдәрҙе, ҡырылыуҙарҙы күреп тә ошо тиклем ҡыҙғаныс хәлдә бер ҡасан да кисергәне юҡ ине Күсимовтың.

Ҡайһы аралалыр блиндажға килеп ингән адъютанты уның терһәгенә ҡағылды.

— Иптәш гвардия подполковнигы, һеҙҙе телефонға!

Күсимов телефон трубкаһын алды.

— Тыңлайым, иптәш беренсе, — тине ул, ҡабаланып.— Есть, иптәш беренсе!.. Аңлашыла!..

Дивизия командиры менән һөйләшкәндән һуң, Күсимов эскадрон командирҙарын саҡыртты.

— Беҙҙең кавалерия дивизияһы оборона тотҡан майҙанды яңы ғына килгән уҡсы корпусҡа ҡалдырырға, ә үҙебеҙ Защебье ауылына һөжүм итергә тейешбеҙ!..

Иртәгеһе көндө кис 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы урынынан ҡуҙғалды.

Һыбайлылар ҡараңғы урман эсендәге һаҙлыҡлы урындарҙан бата-сума барҙы.

Артиллерия, автомашиналар һәм ауыр йөк тейәүле арбалар батып, артта ҡалды.

Һәр саҡтағыса, 16-сы кавалерия дивизияһының алғы отряды итеп тәғәйенләнгән 58-се кавполкҡа юл ярып барыуы ҡыйынға тура килде.

Авангардтағы эскадрон менән бергә һаҙлыҡтан барған полк командиры Ҡусимов, саперҙарҙы саҡырып, һыбайлылар уҙасаҡ һаҙлыҡ ситендәге ҡоро ерҙәрҙә миналар бармы-юҡмы икәнлеген тикшерергә ҡушты һәм дошман позицияһын асыҡлау өсөн ауылдың ике осона бер төркөм яугирҙарҙы ебәрҙе.

Һаҙлыҡ ситендәге юл миналарҙан таҙартылды һәм шунда уҡ полк егеттәре Защебье ауылына табан елдерҙе.

Улар менән бер үк ваҡытта дошмандың тылына сыҡҡан 60-сы кавалерия полкы һыбайлылары ла һөжүм башланы.

Тирә-яҡтағы барлыҡ ер өҫтө шау-шыулы тамуҡ утына әүерелде.

Һөрөмлө ҡара төтөн араһында ҡайҙа нимә булыуын белмәгән Ҡусимов элемтәсенән телефон трубкаһын алды.

— Алло, бишенсе!.. Алло, бишенсе, — тип ярыла яҙып ҡысҡырҙы-ҡысҡырҙы ла, бер ниндәй ҙә тауыш-тын сыҡмағас, ҡулындағы телефон трубкаһы менән асыулы һелтәнеп, ул элемтәсегә ажғырҙы: — Ниңә эшләмәй?!

— Берәй ерҙә сым өҙөлгәндер.

— Уны кем ялғарға тейеш?

Соҡор төбөндә сүкәйеп ултырған кесе сержант бруствер аша атылды һәм сым буйлап йүгерҙе. Ул оҙаҡ бара алманы, снаряд ярсығы тейеп, йөҙ түбән ауҙы.

Кесе сержант артынса ебәрелгән икенсе яугир ҙа һәләк булды. Унан аҙаҡ өсөнсөһө, дүртенсеһе, бишенсеһе... Тик алтынсы элемтәсе генә өҙөлгән сымды ялғап алды.

Элемтә булдырылғас, Ҡусимов, эскадрон командирҙарын әрләй-әрләй, яңынан-яңы бойороҡтар бирҙе.

Соҡорҙан баш ҡалҡытып ҡарарға ла мөмкинлек бирмәгән дошман уты артиллеристар тарафынан баҫтырылғас ҡына, ер ҡуйынына һыйынған һыбайлылар атакаға күтәрелде, һәм ҡеүәтле «ура» яңғыраны.

Алға китеүсе ир-егеттәр артынса артиллеристар ҙа ҡуҙғалды, ә элемтәселәр сымдарын катушкаларға урай башланы.

Ике сәғәт буйы (
ыҡлы терәк пунктыбарған бәрелештән һуң дошмандың
ғышып алыныуы тураа әйләндерелгән Защебье ауылы һу-
мов дивизия штабынаһында гвардия подполковнигы Күси-
Беловты был еңеү хәбәр итте.
чи тимер юл үҙәген һ ҡәнәғәтләндермәне. Ул, Ҡалинкови-
Александровка — Осиуғышып алырға ниәтләнеп, һөжүмде
итеүҙе талап итте. повка — Руда йүнәлешендә дауам
Дивизия командир
рырға ашҡыныусы һынын был бойороғон тормошҡа ашы-
осраны. Ике тәүлек бибайлы гвардеецтар уңышһыҙлыҡҡа
тарҙан аҙаҡ, 16-сы Куйы туҡталмай барған ҡаты һуғыш-
күп юғалтыуҙар менәавалерия дивизияһы полктары бик
лында оборонаға күсән кире сигенергә һәм Защебье ауы-
Кис Күсимовтың ргә мәжбүр булды.
инде. блиндажына Сәғит Әлибаев килеп
— Бер күңелһеҙ х
— Ниндәй? хәбәр алып килдем, Таһир Таипович.
— Ниҙән башларғ
— Нисек башлаһға ла белмәйем...
— Хәбәрһеҙ-ниһеҙаң да аңлармын, Сәғит Рәхмәтович.
Таһир Таипович! Баш юғалған Әһел Истамғәлин тере икән,
— Башҡортостанғашҡортостандан хат алғайным...
раны Күсимов, сабыр а ҡасып ҡайтҡанмы әллә? — тип һо-
— Ҡайтмаған. — Сһыҙланып.
хатты һондо. — Бына,Сәғит Әлибаев кеҫәһенән сығарған
Күсимов хатты уҡ үҙең уҡы!
ләп ҡараны ла кире бҡырға теләмәне, төрләсә әйләндерге-
— Телдән аңлат! бирҙе.
— Истамғәлин Ул
дәге документ менән лыбинға әүерелгән икән! Шул исем-
би трибунал хөкөмө б ҡасып йөрөгән сағында тотолоп, хәр-
гән. Һуғыштарҙың ббуйынса штрафной батальонға ебәрел-
госпиталдә дауалана ереһендә яраланған һәм әлеге көндә
— Ниндәй яуыз, т икән!..
Ә-ә-әх!.. — Ҡулындағыҡәбәхәт бәндә! — Күсимов ярһыны. —
тәлгә шаҡылдата улты сәйен сайпылдырып, кружкаһын өҫ-
төшөргән өсөн уны атҡыртты.— Башҡорт халҡы исеменә тап
гә ҡушылғандан бирҡтыуға хөкөм итергә кәрәк ине! Рәсәй-
сит ил баҫып алыусыле башҡорттар рус ғәскәре сафында
һуғышҡан. Ләкин ошыларына ҡаршы һәр саҡ батырҙарса
рөмәгән! Ә бына Бөйюғаса бер генә башҡорт та ҡасып йө-
һатлыҡ йән табылғайөк Ватан һуғышы барған осорҙа бер
госпиталгә эләккәс, еын! Ниндәй хурлыҡ! Хәҙер, яраланып
насаҡ, ә үҙе де-зер-тиенәйәтен ҡан менән йыуыуына һылта-
гир!.. Уның ҡасып йөрөүе ниндәй мәс-

хәрә! Ватан һуғышы тамамланғас, кешеләр күҙенә нисек күренергә уйлай икән?

— Бәлки, беҙҙән аҙашып ҡалғандыр, — тине Әлибаев.

— Аҙашып ҡалһа, Улыбин фамилияһын йөрөтөр инеме?

Полк командиры хаҡлы икәнлеген аңлаған Сәғит Әлибаев, бәхәсләшмәйенсә, Истамғәлин-Улыбиндың артабанғы яҙмышы хаҡында уйланды. Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң ул кешеләр араһында ниндәй намыҫ менән йәшәр икән?..

Ярһыуынан бик тиҙ баҫылған Күсимов Сәғит Әлибаевтан һораны:

— Сәғит Рәхмәтович, ҡаҫҡындарҙы элгәрге башҡорт яугирҙары ниндәй хөкөмгә тарттырҙы икән?

— Башҡорт яугирҙары араһында элгәре ҡаҫҡындар булмаған, Таһир Таипович!

— Ниндәй ҙә булһа закон-маҙар булғандыр бит инде!

— Борон-борондан быуындан быуынға күсә килгән йола буйынса, ҡаҫҡындар йәки һуғыш барған ваҡытта енәйәт ҡылыусыларға ҡарата аҡһаҡалдар аяуһыҙ булған. Улар хөкөмгә тарттырылырға һәм ҡая таштан бырағытылырға тейеш икәнлеге билдәле. Мәҫәлән, Алдар-Күсем восстаниеһы барған ваҡытта бер һатлыҡ йәнде хәҙерге Белорет районының Мәхмүт ауылынан алыҫ булмаған ерҙәге ҡаянан ташлауға хөкөм иткән булған аҡһаҡалдар.

— Йола законы яман ҡаты икән!

— Әлбиттә, — тип ризалашты Сәғит Әлибаев. — Бәлки, шуға күрә лә башҡорт яугирҙары араһында бер ниндәй ҡурҡаҡтар һәм ҡаҫҡындар булмағандыр.

— Нисәмә йылдар буйынса восстаниеларға күтәрелеп, башҡорттар үҙен бөтөрҙө лә инде! Унын өҫтәүенә, сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшкәндә лә күпме ҡырылырға тура килгән!..

Майор Әлибаев, байтаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң, һүҙҙе 1812 йылғы Ватан һуғышына күсерҙе. Ул һуғышта французларға ҡаршы егерме һигеҙ башҡорт казачий полкы, һәр полкта биш йөҙ ҙә утыҙ биш һыбайлы башҡорт хеҙмәт итеүе хаҡында белгәс, Истамғәлин-Улыбинды иҫенән сығармай ултырған Таһир Күсимов ғәжәпләнде:

— Мең һигеҙ йөҙ ун икенсе йылғы Ватан һуғышы заманында ла һыбайлы башҡорт полктары һаны хәҙерге ваҡыттағы шикелле булған икән дә баһа! Айырма тик шунда: был һуғышта өс кавполк, ә үткән замандағы Ва-

тан һуғышында егерме һигеҙ башҡорт казачий полы ун биш мең кешене берләштергән!

— Айырма унда ғына түгел, Таһир Таипович! Үткән Ватан һуғышында ҡатнашҡан егерме һигеҙ казачий башҡорт полкынан башҡа, номерһыҙ ун башҡорт полкы «ремонтный», йәғни резервный булған, ә егерме казачий башҡорт полкы Рәсәйҙең көнсығыш сиген һаҡлаған!

— Шул тиклем күп полктарҙың һәммәһе француз яуы ваҡытында төҙөлгәнме?

Әлибаев раҫлап баш ҡаҡты.

— Йәнә икенсе айырма шунда: үткән Ватан һуғышында Рәсәй илен азат итеүҙә ҡатнашҡан барлыҡ казачий башҡорт воиндары халыҡ иҫәбенә ҡоралландырылған, кейендерелгән, ашатылған һәм эсерелгән.

— Хәҙерге заман кешеләренең атай-олатайҙарыбыҙ тормошо, көнкүреше, ҡаһарманлыҡтары менән ҡыҙыҡһынмауы ҡыҙғаныс, — тине Күсимов. — Йәштәрҙе патриотик рухта тәрбиәләү өсөн, минеңсә, иң әүәл бай тарихыбыҙҙы үҙебеҙ ентекле өйрәнергә һәм өйрәтергә бурыслыбыҙ! Үҙ нәҫеленден, тыуған төйәгенден, ғаиләнден, ер-һыуындың тарихын өйрәнеүҙән башлана ысын патриотизм! Минеңсә, Ватан тигән төшөнсәнең дә төп нигеҙе шунда! Ваҡытында «Башҡорт атлылары» газетаһы редакцияһы работниктары менән тейешле эш башҡарылған булһа, Әһел Истамғәлин дә һатлыҡ йәнгә әүерелмәҫ ине, бәлки!

— Өгөт-нәсихәт менән үҙ ҡарашын үҙгәртә торғандарҙан түгел Истамғәлин, — тине Әлибаев, Күсимов менән ризалашмайынса. — Сөнки әҙәм балаһының холоҡ-ғәҙәте, артабанғы ҡылығы сабый сағынан тәрбиәләнә. Истамғәлинден һатлыҡ йәнгә әйләнеүе лә күп йылдар элгәре билдәләнгән булған. Кешенең ҡанына һеңгән яуызлыҡты йәһәт кенә үҙгәртеүе мөмкин түгел! Яҙыусыларҙан һуғышҡа тиклем ишеткән хәбәрҙәр буйынса, Истамғәлин элгәре лә иптәштәренә ялыу яҙған...

— Уны «Башҡорт атлылары» редакцияһына яуаплы секретарь итеп тәғәйенләүҙәре ҡайһылай хата булған, — тине лә, күңелһеҙ ваҡиғаға эсе бошоп, Күсимов ҡул һелтәне. — Етте, бүтән төрлө яңылыҡтар юҡмы? Ҡыҙҙарың әле лә Өфө балалар баҡсаһында тәрбиәләнәме?

Ҡыҙҙары тураһында һүҙ сыҡҡас, Әлибаевтың йөҙө яҡтырҙы.

— Эйе, балаларым әле лә шунда!

— Улар һиңә хат яҙырға эшкингәнме?

— Әлмирә менән Ғәлиәм әлегә уҡый-яҙа белмәйҙәр шул, Таһир Таипович! — Әлибаев алсаҡланды. — Улар уҡымай әле, бәләкәйҙәр бит! Ҡыҙҙарым өсөн хатты тәр-

биәсе яҙа. Бына уның аҙаҡҡы хаты. Ете йәштәге өлкән ҡыҙым Әлмирәне «балалар ярата, ул хикәйәләрҙе ятҡа һөйләй белә, госпиталгә барып концерт ҡуйҙыҡ. Әлмирә шунда Балтик диңгеҙенең морягы булып бейене», — тип яҙған тәрбиәсе. Ул хатты уҡығас, күңелем тулды.

— Минең малай ҙа бәп-бәләкәй генә ҡалды, — тип көрһөнөп ҡуйҙы Күсимов. — Һуғыш тамамланып, иҫән-һау ҡайтырға насип булһа, танһығым ҡанғансы ҡыҫып-ҡыҫып һөйәр инем үҙен!..

## XIII

Дәүләт Оборона Комитетында яһаясаҡ отчетына әҙерләнеп, ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Вострецов, кешеләрҙе ҡабул итмәйенсә, ҡырҡ өсөнсө йыл йомғаҡтары менән танышты. Уның күҙ алдына республикала башҡарылған мөһим эштәр, тылдағы кешеләрҙең фиҙәҡәр хеҙмәте килеп баҫты.

...Немец-фашист илбаҫарҙарының Сталинградта ҡыйратылыуы, совет ғәскәрҙәренең Курск дуғаһында һәм Днепрҙа еңеүе, гитлерсыларҙың туҡмала-туҡмала совет еренән бер туҡтауһыҙ ҡыуылыуы, туғандаш күп республикаларҙың азатлығы яҡынлашыуы тылдағы хеҙмәт гвардеецтарының, шул иҫәптән Башҡортостан халҡының күңелен күтәрҙе һәм яңынан-яңы хеҙмәт еңеүҙәренә рухландырҙы. Бөйөк Ватан һуғышы унда ҡатнашыусы ир-егеттәрҙән ҡаһарманлыҡ, Туған илде гитлерсыларҙан азат итеү өсөн ҡан түгеүҙе, хатта ғүмерен фиҙа ҡылыуҙы талап иткән булһа, тылда ҡалған ас-яланғас балалар менән әсәйҙәрҙе ул хеҙмәт фронтында сыныҡтырҙы, ҡыйынлыҡтарға һәм ҡайғы-хәсрәткә бирешмәҫкә, сыҙамлы булырға өйрәтте.

Күкрәгендәге ордендарҙан тыш, һалдат фронтта алған яралары менән ғорур, тиҙәр. Ә фронт өсөн, дошманды еңеү өсөн завод-фабриктарҙа, рудниктарҙа, алтын прииаскыларында, колхоз-совхоздарҙа, промартелдәрҙә, леспромхоздарҙа, урман участоктарында көнөн-төнөн ял итмәйенсә эшләүсе ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаның хеҙмәтен нимәгә тиңләргә?!

Ҡыйын, бик тә ауыр тыл гвардеецтарына! Ләкин улар һәммәһе түҙҙе, төн йоҡоларын йоҡламайынса, фронтовиктарса эшләргә өйрәнде һәм эшләй.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғандың беренсе йылында СССР Дәүләт Оборона Комитеты Председателе Иосиф Виссарионович Сталин барлыҡ автоматтарҙы һәм бүтән төрлө һуғыш ҡоралдарын үҙе бүлергә мәжбүр булһа, со-

вет тылының мөмкин булмағанды мөмкин итеп фронт өсөн кәрәкле барлыҡ нәмәләрҙе тиҙ ваҡыт эсендә эшләп сығарыуы һөҙөмтәһендә хәҙер һәммәһе ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Өфө машиналар эшләү заводы самолеттар өсөн меңләгән моторҙар эшләп сығара башланы, В. И. Ленин исемендәге Стәрлетамаҡ станоктар эшләү заводы ике мең станок етештереүгә өлгәште. Мәскәү өлкәһенең Клин ҡалаһынан Белоретҡа күсерелгән станоктар төҙөү заводының инструменталь, механик, литейный, термик цехтары, тулыһынса төҙөлөп бөтмәҫтән, ун икешәр сәғәткә һуҙылған ике сменалы эш башланы. Фронтҡа оҙатылған ир-егеттәрҙе алмаштырыусы ҡатын-ҡыҙҙар менән йәш үҫмерҙәр ҡышҡы асыҡ һауалағы станоктар артында эшләгәндә өшөнө, туңды. Ләкин бер кем дә үҙенең эш урынын ташлап китмәне.

Белорет ҡалаһында командировкала йөрөгән сағында бер ҡыҙыҡлы күренешкә Никита Иванович Вострецов үҙе шаһит булды. Ул төшкө тәнәфес ваҡытында цех начальнигы менән икәүҙән-икәү генә эш хаҡында һөйләшеп ултыра ине, бүлмәгә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ килеп ингән йәш кенә ҡыҙ бала прокат станында эшләргә теләген белдерҙе. Цех начальнигы риза булмағас, иларҙай хәлгә етеп, ҡыҙ бала ялына башланы:

— Ҡешеләр етешмәй, ти бит һеҙҙә! Мине, зинһар, эшкә алығыҙ, иптәш нәчәлник! Ҡарамаҡҡа сибек күренһәм дә, мин эшкә сыҙамлы һәм көслөмөн!

— Ул цехта нимә эшләй алырһың?

— Мин унда булдым, иптәш нәчәлник! Бөтөнөһөн күрҙем. Беләм. Нимә генә ҡушһағыҙ ҙа, тырышып эшләрмен!

Эшсе көсө етешмәүҙән интеккән цех начальнигы тәүҙә икеләнде. Аҙаҡтан, өлкә комитеты секретары Вострецов ыңғай фекерҙә икәнлеген белгәс, Рауза исемле был ҡыҙҙы эшкә алырға ризалыҡ белдерҙе, һәм прокат станында ҡатын-ҡыҙ бригадаһы ойошторолдо. Бер ай самаһы ваҡыт уҙғас, ауыр крючечник һөнәренә өйрәтелгән ҡатын-ҡыҙ бригадаһының яҡшы эшләүе тураһында партия өлкә комитетына хәбәр иттеләр.

Вальцовщиктар менән крючечниктарҙың эшен ситтән күҙәтеп йөрөгәндә һәммәһен ҡыҙыҡлы уйын һымаҡ күргән Рауза Кәфиуллина әллә нисәмәшәр килограмм ауырлыҡтағы заготовкаларға тотонғас ҡына үҙ теләге менән башҡарған яңы эшкә күп көс кәрәклегенә төшөнгән.

Завод-фабрикаларҙағы һәр хеҙмәт көнө ҡаһарманлыҡҡа тиң! Цехтарҙа өтөлөп-янып эшләүсе һәр эшсе үҙенең туранан-тура фронтҡа мөнәсәбәте, ҡатнашлығы булыуын йөрәге менән тоя. Ун ике сәғәт буйына һуҙылған көсөргәнешле эш тамамланғандан аҙаҡ өйөнә ҡес-хәлгә ҡайтырға

йыйналған ваҡытта уларҙы завод-фабрик ҡапҡаһы тәңгәлендәге плакат ҡаршылай: «Фронт өсөн һин бөгөн нимә эшләнең?»

Бындай һорауға һәр эшсе: «Хәлемдән килгәндең һәммәһен башҡарҙым», — тип намыҫ менән тура яуап ҡайтарырға хаҡлы.

## XIV

Ҡараңғылатып ҡына «Башнефтекомбинаты»нан Туймаҙыға ҡайтып еткән трест управляющийы Нифантов, кашауайҙан төшкән ыңғай толобон сисеп күсеренә тапшырҙы ла трест контораһына табан йүнәлде.

Эш тамамланғандан аҙаҡ ҡайтып китергә йыйналған секретарша, Нифантов күренгәс, өҫ кейемен ҡабаттан һалды.

— Һаумыһығыҙ, Иван Перфильевич!

— Сәләм, Любаша! — тип яуапланы ла, туҡталып тормайынса, Нифантов үҙ бүлмәһенә уҙҙы. Ялбыр бүрке менән салғый сите ҡырылған пальтоһын ишек артындағы сөйгә элгәс, өшөгән бармаҡтарын ыуа-ыуа, приемныйҙағы секретаршаны саҡырып индерҙе: — Любаша, кешеләрҙе кәңәшмәгә йый!

— Ҡасанға йыйырға, Иван Перфильевич?

— Ҡиске һигеҙгә!

Бындай кәңәшмә иртәнге ике-өскә тиклем һуҙыласағын һәм кәңәшмәгә кемдәр саҡырылырға тейешлеген яҡшы белгән Любаша управляющий бүлмәһенән сыҡҡас та нефть промыслаһы мөдирҙәренә телефондан шылтыратып хәбәр итте, ә треста эшләүселәрҙе бүлмәнән бүлмәгә йөрөп иҫкәртте:

— Хужа Өфөнән ҡайтты, сәғәт һигеҙгә кәңәшмәгә!..

Кәңәшмәлә ҡатнашасаҡ кешеләр тейешле ваҡытҡа йыйналғас, Нифантов өҫтәл артынан күтәрелде.

— Башлайбыҙ, иптәштәр! — тип ул трестың баш инженеры ултырған яҡҡа ҡараны. — Иптәш Акопян, йөҙөнсө скважиналағы эш барышы хаҡында ҡыҫҡаса аңлат!

Акопян, ризаһыҙлыҡ белдереп, яурынын йыйырҙы.

— Иван Перфильевич, был хаҡта ниңә мин һөйләргә тейеш? Йөҙөнсө скважина эше өсөн иң беренсе сиратта разведчиктар яуаплы ла баһа!

— Трестың баш инженеры булараҡ, разведка барышы өсөн яуап бирмәйһеңме ни?

— Иван Перфильевич, мин яуаплылыҡтан ҡасҡандан әйтмәнем, — тип аҡлана башланы Акопян. — Кәңәшмәлә йөҙөнсө скважина кешеләре лә ҡатнаша бит! Кәңәшмәне

һәр саҡ йөҙөнсө скважинанан башларға яратыуығыҙҙы белгәнлектән, бында бригада мастеры Трипольский менән бүтән иптәштәрҙе тыңлауы яҡшыраҡ булмаҫмы тигәйнем...

— Ул ниәттән булһа, икенсе хәл. — Нифантов күҙҙәре менән йөҙөнсө скважина бригадаһы мастеры Трипольскийҙы эҙләне. — Алексей Павлович, һүҙ һиңә! Эштәр нисек барғанын һөйлә!

— Әлегә һәммәһе ыңғай бара, — тип Трипольский йөҙөнсө нефть скважинаһындағы быраулау эше хаҡында һөйләне.

— Бөгөн барлығы нисә метр быраулланды скважина?

— Бер мең ҡырҡ ике метр ҙа ун дүрт сантиметр, — тип яуап ҡайтарҙы теге.

Управляющий Нифантов күн папка эсендәге ҡағыҙ ситенә ниҙер сыймаҡланы ла кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға күҙ йүгертеп сыҡты. — Йә, ҡайһығыҙ нимә өҫтәп әйтергә теләй?

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар өндәшмәгәс, управляющий тынысланды.

— Бүтән төрлө йүнле фекер булмаһа, икенсе мәсьәләгә күсәбеҙ, — тип ул трестың баш инженеры Акопян ултырған яҡҡа боролоп ҡараны: — Аким Андреевич, был мәсьәлә буйынса һүҙ һиңә!

Барлыҡ булмышы менән һаҡ, үтә яғымлы, тыйнаҡ холоҡло Акопян дипломатияның ни икәнеп белмәгән тура һүҙле, асыҡ-ярыҡ, ҡыҙыу Нифантовтың ҡапма-ҡаршыһы ине. Ул бер ҡасан да кешеләргә ҡаты һуғылмаҫ, һәр нәмәне ҡабаланмай, ентекләп аңлатырға тырышыр.

Был юлы ла, ғәҙәттәгесә, Аким Андреевич үҙенең сығышын фронттағы хәлдәрҙән башланы ла төп мәсьәләгә күсте:

— Иптәштәр, фашистарҙан азат ителгән Краснодар, Майкоп, Грозный нефть промыслалары ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыла башланы. Беҙҙең трест, главканың ҡушыуы буйынса, аяҡҡа баҫтырыласаҡ промыслаларҙа эшләү өсөн белгестәр, йәғни мастерҙар менән инженерҙар һәм тәжрибәле эшселәр ебәрергә, ҡорамалдар менән ярҙамлашырға тейеш!

Йоҡомһорап ултырыусы кешеләр, ҡапыл һиҫкәнеп, шаулашты:

— Булмаған ҡорамалдарҙы ҡайҙан алырға?

— Үҙебеҙҙең иҫке-моҫҡо торбалар менән аҙапланыуыбыҙ етмәгән...

— Артыҡ кешеләребеҙ ҙә юҡ!

— Тәжрибәле нефтселәрҙе ситкә оҙатып бөтһәк, үҙебеҙ ни эшләрбеҙ?..

Ризаһыҙлыҡ белдереп, управляющий өҫтәлде шаҡыны.

— Баҙарға килдегеҙме һатыулашырға?! — Бүлмәләге шау-шыу баҫылғас, Нифантов ҡырҡа әйтте:— Үҙебеҙгә нисек кенә ҡыйын булһа ла, дошмандан азат ителгән нефть промыслаларын аяҡҡа баҫтырыуҙа ярҙамлашырға бурыслыбыҙ! Ҡайҙан, ниндәй ҡорамалдар табыу тураһында күмәкләп уйлашырбыҙ, ә Туймазы промыслаһынан ебәреләсәк кешеләр хаҡында бойороҡ иртәгә үк булыр!

Кешеләр ҡаршы һүҙ әйтергә баҙнат итмәне.

Таң яҡынлашыуына ҡарамаҫтан, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар өйҙәренә ҡайтып китергә ҡабаланманы.

Трест управляющийы менән баш инженер икәүҙән-икәү генә ҡалып, кисектергеһеҙ мәсьәләләрҙе хәл ҡылған саҡта, коридорҙа кемдәрҙеңдер ҡысҡырышыуы ишетелде. Шул уҡ минутта бүлмәгә атылып килеп ингән пожарный хәлһеҙләнеп аһылданы:

— И-и-и... Иван Парфильевич, ярҙам итегеҙ! Юҡһа егерме бишенсе скважиналағы бөтә нәмә шартлаясаҡ, кешеләр һәләк буласаҡ!.. Мине пожарныйҙар часы начальнигы ебәрҙе... Һеҙҙе тиҙ арала килеп етһен, ти...

Трест управляющийы, ниндәйҙер ҡотолғоһоҙ бәлә яҡынлашыуын һиҙеп, ағарынды.

Промысланың баш инженеры Хөсәйеновтың тунған нефть торбаларын ут яғып иретеүен, ут яғыусыларҙы туҡтатырға маташҡан пожарныйҙарҙы нефтселәрҙең яҡын ебәрмәүе хаҡында белгәс, Нифантов ярһыны.

— Башһыҙҙар!.. Әх, башһыҙҙар!.. Нефткә ут тоҡанһа, һәммәһе ҡыйраласаҡ!..— тип, ул телефонға тотондо. Шылтыратып-шылтыратып, егерме бишенсе скважинаға яҡын культбудкала бер кемде лә таба алмағас, пожарныйҙың эйәрһеҙ атына атланды ла көрт күмергә өлгөргән сана юлы буйлап елдерҙе. Үҙәккә үтерҙәй һалҡын ел Иван Перфильевичтың аяҡ-ҡулын өшөттөрҙө, бит алмаларын өттө. Ләкин ул кире боролорға теләмәне, ап-аҡ ҡар күмгән киң дала буйлап сабып барыуын белде.

Юлдың яртыһынан күберәк өлөшөн уҙғас, Нарыш ауылы осондағы вышканың утын тоноҡландырған тыуасаҡ көндөң яҡтыһы асығыраҡ беленде.

Аяҡтарын бәүелдереп тәпәшәк кенә ат һыртында сайҡалып килгән трест управляющийының яҡынлашыуын күргән кешеләр бер ҙә ғәжәпләнмәне. Сөнки тәүлектең теләһә ҡайһы ваҡытында уның йәйәү, һыбай, йөк машинаһында йәки ҡайҙалыр китеп барыусы ылаусыларҙың санаарбларына ултырып килеп сығыуы хаҡында кешеләргә күптәнән мәғлүм ине.

Егерме бишенсе скважиналағы ваҡиғаны ғәҙәттән тыш ҡурҡыныслы хәл итеп күҙ алдына килтергәнлектән, Нифантов, унда яҡынлаша башлағас, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Пожарный алдашты микән әллә? Скважина янында тауыш-маҙар ишетелмәй, һәммәһе тып-тыныс. Пожарныйҙар менән промысловиктар ҙа үҙ-ара татыу һөйләшә...

Тәпәшәк ат һыртынан шыйғалап төшкәс, Нифантов пожарныйҙар командаһы начальнигына ябырылды:

— Ни өсөн ялған тревога ҡубарҙың?

— Тәүҙә хәлде асыҡлағыҙ, — тип пожарныйҙар командаһы начальнигы Боковиков Нифантовҡа ҡаршы атланы. — Егерме бишенсе скважиналағы нефтселәрҙең башбаштаҡ ҡыланышын былай ғына ҡалдырмаясаҡмын, Иван Перфильевич! Инструкцияны тупаҫ рәүештә боҙоусыларҙы быжғытаһы урында, уларҙы яҡлашырға килдегеҙме?

— Промысловиктарҙан кем ниндәй инструкцияны боҙған?

— Минең күҙ алдымда туң нефть торбаһын ут яғып иреттеләр! Ә беҙҙе, утты һүндерергә тырышҡан өсөн, күмәкләшеп туҡмай яҙҙылар!

Ҡалын һарғылт ҡашына уҡмашҡан боҙ киҫәктәре араһынан балҡыған күҙҙәрен ялтлатып, Нифантов промысланың өлкән инженерына асыулы ҡараны.

— Боковиков ысынын һөйләйме?

— Эйе, ысынын, — тип дөрөҫләне Хөсәйенов, ап-асыҡ боҫ туңып томаланған күҙлеге аша бер ни йүнләп күрмәйенсә.

— Ундай хоҡуҡты һиңә кем бирҙе?

— Ватан һуғышы бирҙе, Иван Перфильевич.

— Нефтте туңған торба өҫтөнә ут яғып ireткәнде ҡасан күргәнең бар? Әгәр нефткә ут тоҡанһа?

— Ил яҙмышы хәл ителгәндә инструкцияға табынып булмай, Иван Перфильевич! — Хөсәйенов үҙен ғәжәп тыныс тотто. — Беҙ үҙ бурысыбыҙҙы үтәнек. Нефттең һәр килограмы, хатта грамы алтынға тиң тип үҙегеҙ әйттегеҙ бит. Шуға күрә беҙ нефть сығарыуҙы туҡтатыуҙы енәйәткә тиң күрҙек. Туңған торбаларҙы киҫеп, ҡабаттан ялғау өсөн күпме ваҡыт кәрәк булыр ине. Ә былай эш йәһәт йәйланды.

— Яман риск! Ну, дыуамалһың, Хөсәйенов!

— Дыуамал түгел, тәүәккәл, Иван Перфильевич.

Управляющий йылмайҙы.

— Дыуамал булһаң да, егет һин, Искәндәр Сабитович,— тип Хөсәйеновтың яурынынан умырып ҡыҫып, ул ут һүндереүҙә файҙаланылмаған машина эсәге менән аҙапланған пожарныйҙар командаһы начальнигы яғына бо-

ролдо. — Боковиков, был хаҡта шау-шыу ҡубарма! Ошонда бөтөр! Быҥдай хәл башҡаса ҡабатланмаясаҡ! Промысловиктарҙың фронт өсөн тырышыуын аңла! Әллә ниндәй яманлыҡ булмаған бит!

— Ә яман тамамланһа, быға кем яуап бирер ине? Быны былай ғына ҡалдырырға ярамай...

— Былай булғас, беҙҙең ара боҙола бит, Боковиков! Йомошоң төшһә, бүтәнсә миңә килмә, — тип ул ҡайтыу яғына табан ыңғайланы.

— Иван Перфильевич, әҙ генә көтөгөҙ, үҙегеҙҙе машинала алып барып ташлайым, — тип ҡысҡырҙы Боковиков.

— Өфөгә бер ни ҙә яҙмаһаң, машинаңа ултырырға ризамын, — тип Нифантов артына боролоп ҡараны.

— Аҙаҡтан күҙ күрер...

Нифантов һәм Хөсәйенов пожарныйҙар менән бергә машинаға инеп ултырҙы. Трест контораһы янында машинанан төшөп икәүҙән-икәү генә ҡалғас, Иван Перфильевич, өндәшмәй, уйға ҡалыбыраҡ торҙо һәм Хөсәйеновты шелтәләне:

— Искәндәр Сабитович, быҥдай хәл башҡаса ҡабатланмаҫҡа тейеш! Пожарныйҙар алдында аҡланыр өсөн һиңә выговор бирергә тура киләсак, ә эш өсөн тырышыуыңа рәхмәтемде белдерәм!

— Аңлашыла, Иван Перфильевич, — тине Хөсәйенов, көлөп.

— Искәндәр Сабитович, егерме бишенсе скважинаға ҡасан килергә өлгөрҙөң?

— Ҡәңәшмәнән ҡайтып барғанда замерщицаны осраттым. Мине күргәс, илай-илай, егерме бишенсе скважиналағы хәлде һөйләне. Шунан, өйөмә инеп тә тормайынса, промыслаға йүгерҙем...

Нифантов, йәнә бер тапҡыр Хөсәйеновтың ҡулын ҡыҫып рәхмәт белдерҙе лә, ныҡ йонсоуынан айҡала-сайҡала, трест конторағына табан йүнәлде, Хөсәйенов иһә фатирына ҡайтып китте. Ҡатынының йоҡлауын белгәс, уны уятмаҫҡа тырышып, Искәндәр тамаҡ ялғарға ултырҙы. Шул саҡ Зөбәржәт уянды. Түшәгенән торған ыңғайы иренең һалҡын маңлайынан үпте лә тимер мейес эргәһендә өтәләнә башланы.

— Әҙ генә көт, хәҙер сәй ҡайнай!

— Сәй эсерҙәй хәлем ҡалманы, һөйөклөм, — тип Искәндәр салҡан ятыу менән нисек йоҡлап китеүен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Ул ярты сәғәттән артыҡ йоҡламаны. Ашыҡ-бошоҡ ҡына сәй эсте лә эшкә китергә йыйналды.

— Яцыраҡ ҡайттың бит, һуңлабыраҡ барһаң да әллә ни булмаç ине, — тине Зөбәржәт, ирен йәлләп.

— Һуңлап ҡайтһам да, эшкә һуңларға ярамай. Хәрби дисциплина!

— Әләйһә, әҙерәк көт. Мин дә сығам.

— Ҡайҙа бараһың?

— Лафкаға.

— Тайып йығылып, донъяға тыуасаҡ малайҙы имгәндереп ҡуйма, — тип Искәндәр ҡатынының ныҡ кәпәйгән ҡорһағына ҡараны. — Декретный отпусканы һиңә тиккә генә бирмәгәндәр бит!

Зөбәржәтте карточкаға икмәк биргән магазинға тиклем оҙатып барҙы ла Искәндәр промыслаға китте.

## XV

Тамбов кавалерия училищеһына уҡырға тәғәйенләнгән Зәки Байдәүләтовтың сәфәр сығып китеүенә дүрт аҙна ваҡыт уҙҙы. Ул ултырған теплушканы таҡҡан поезд ҡабаланманы, үтә яй барҙы. Һәр станцияла, һәр разъезда туҡталып, ул икешәр-өсәр тәүлек ҡуҙғалмай торҙо. Көнбайышҡа табан бер-бер артлы ҙур тиҙлектә уҙып киткән поездарға юл биргәндер, ахырыһы. Көнбайышҡа уҙған поездарҙың һәр вагонында өҫтө брезент менән ҡапланыулы өр-яңы танкылар, төрлө калибрҙағы орудиелар, үҙйөрөшлө установкалар урынлаштырылғайны.

Ундай ҡеүәтле хәрби техниканы тыл хеҙмәтсәндәре ҡыҫҡа ваҡытта етештереүен Байдәүләтов яҡшы аңланы. Ләкин ул 1943 йылда ғына завод цехтарынан фронтҡа утыҙ биш мең танк, йөҙ утыҙ мең орудие, минометтар, реактив установка — «катюша»лар оҙатылыуын белмәй ине әле. Шулай уҡ Башҡортостанда эшселәр менән крәҫтиәндәр йыйып биргән аҡсаға танк колонналары, авиация эскадрильялары һәм хәрби техника эшләп сығарылыуы хаҡында уға йыш ишетергә тура килде.

«Былай булғас, дошман көнө һанаулы! Мине мәлһеҙ уҡырға ебәреүҙәре генә үкенесле!» — тип уйланы ул, көнбайышҡа бер-бер артлы ағылыусы хәрби составтарҙы күҙ ҡарашы менән оҙатып.

Киреһә, көнсығышҡа табан барыусы поездарҙың һаны ла байтаҡ ине. Уларҙың күбеһендә — яралылар.

Поезд барған ваҡытта ла, теплушканың ҡыҫыҡ ишеге алдынан китмәйенсә, Зәки яртылаш ҡыйратылған станцияларҙы, онталып яндырылған ҡалаларҙы, ер менән тигеҙләнгән ауылдарҙы ҡарап барҙы.

«Шундай ауыр, фажиғәле күренеште совет халҡы ҡасан да булһа онота алырмы икән? Миллионлаған кешеләрҙе бәхетһеҙ иткән һуғышты мәңгегә тыйырҙай мөмкинлек булырмы икән бер заман?» — тип уйланы ул.

Ҡавалерия училищеһына бергә китеп барыусы иптәштәре лә Зәки Байдәүләтов кеүек үк тойғо кисерә ине.

Сүкәйеп ултырып тәмәке тартҡан сержант уфтанды:

— Ә-әх, ниндәй матур, ҙур ҡалалар ҡыйратылған!

— Ҡешеләрҙең интегеүе в счет түгелме? — тине икенсеһе.

— Әйтмә инде!..

— Яуызлыҡтары өсөн фашистар тулыһынса яуап бирәсәк!

— Хәлемдән килһә, һәр немецты тураҡлар инем! — тип ярһыны Зәки.

Советтар Союзы Геройы старшина Мамыкин ул әйткәнде оҡшатманы.

— Совет Армияһы немец халҡына үс тотмай. Бөтә бәлә — немец халҡын упҡынға этәреп, бар донъяға бәлә һалған фашизмда. Бына шуны яңынан баш ҡалҡытмаҫлыҡ итеп юҡ итергә кәрәк...

Һуғышҡа тиклемге тыныс көндәрҙең бер тәүлегендә елдереп уҙырҙай араны поезд менән егерме алты көн буйы барҙылар.

Байдәүләтов менән бергә килеүсе барлыҡ яугирҙарҙы икенсе һанлы Тамбов кавалерия училищеһында тантаналы рәүештә ҡаршыланылар.

Училище начальнигы генерал-майор Шведков, фронтовик-гвардеецтарҙың һәр береһе менән айырым-айырым осрашып танышҡас, барыһын бергә йыйып, һораны:

— Ҡемдең ниндәй теләге бар?

Тынлыҡ урынлашты. Генерал-майорға яуап ҡайтарыусы булманы.

Буласаҡ курсанттарҙың күкрәгендә сайҡалған Алтын Йондоҙҙарға, орден һәм миҙалдарға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, училище начальнигы көлөмһөрәне.

— Теләктәрегеҙ булмаһа...

Уның һүҙен бүлдереп, Советтар Союзы Геройы Арсенюк ҡул күтәрҙе.

— Иптәш генерал-майор, бер теләкте әйтергә мөмкинме?

— Мөмкин, гвардия сержанты!

— Иптәш генерал-майор!.. — Арсенюк тулҡынланыуынан тотлоғоп ҡалды. — Ҡавалерия училищеһында уҡыуҙар башланғанға саҡлы беҙгә өйҙәребеҙгә ҡайтып килергә рөхсәт итегеҙ!

Одесса егете Денис Арсенюктың ғаиләһе һуғыш башланғандың беренсе көндәрендә үк дошман самолеттары бомбалар ташлаған ваҡытта һәләк булыуын уның үҙенән ишетеп белгән Байдәүләтов ғәжәпкә ҡалды. Уның яуҙаштары ла, аптырашып, бер-береһенә ҡарашты.

Училище начальнигы мәсьәләне ыңғай хәл ҡылды.

— Яҡшы, өйҙәрегеҙгә ҡайтып килерһегеҙ, — тип ул тәнәфес иғлан иткәс, гвардеецтар Арсенюкты уратып алды.

— Денис, Одесса яғына бараһыңмы?

— Мин бында ҡалам!

— Бер ҡайҙа бармаҫтай булғас, ниңә рөхсәт һораның?

— Һеҙҙең өсөн! Ғаиләгеҙҙе ҡайтып күрергә теләгегеҙ юҡмы әллә? — тине Денис.

Егеттәр, бер-береһен бүлдереп, дәррәү яуап ҡайтарҙы:

— Теләк булмаған ҡайҙа ул!

— Рәхмәт, Денис!

— Әйҙә, минең менән бергә!

— Юҡ, минең менән!..

Яуҙаштары ихлас күңелдән үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырыуҙарына ҡарамаҫтан, Арсенюк риза булманы.

— Рәхмәт, егеттәр, ҙур рәхмәт, — тип ул училищела ҡалырға булды.

Бер айға отпуск алған Байдәүләтов, поезға ултырып, Башҡортостанға ҡарай юлға сыҡты.

Өфөлә ул Силәбе яғына бара торған поезды көтөп алды, ә иртәгеһен, Ҡолғонбәк разъезында вагондан төшөп, ауыл яғына йәйәүләп атланы.

Юлдың буйынан-буйына һуҙылған тау-ташлы урмандарҙы, сылтырап аҡҡан көмөштәй йылғаларҙы уҙғанда, ул һәр күренешкә һоҡланып бөтә алманы. Оло-оло ҡарағайҙар осона эләгә-йыртыла ҡайҙалыр ашҡынып ағылған аҡһыл-һорғолт болоттар ҙа бүтән ерҙәгеләр менән сағыштырғанда һөйкөмлөрәк һымаҡ тойолдо.

Ҡыскә табан ағас ботаҡтарын һелкетеп шаулаған ел көсәйҙе. Күҙ алдында тирә-яҡты сыймаҡлап ялтлаған йәшен артынса күк күкрәне һәм эре-эре күҙле ямғыр яуырға тотондо. Ул туҡтағас, болоттар артынан һығылып сыҡҡан ҡояш күренде. Уның нурҙарына йылынған Байдәүләтовтың өҫ кейеменән һиҙелер-һиҙелмәҫ боҫ ағыла башланы. Офоҡ ситенә яҡынлашҡан ҡояш, көнө буйы йыһан киңлеген гиҙеп хәлһеҙләнгән түп-түңәрәк кәүҙәһен тота алмайынса, урманлы ағастар артындағы бушлыҡҡа тәгәрәне. Ер ситендәге ҡыҙғылт буяуҙар яйлап-яйлап юйылғас, тәбиғәт күренеше тоноҡланды, күҙ алдында шыйыҡланды, ҡараңғылыҡҡа сумды.

Өҫкө кейеме кибеп өлгөрмәгән Зәки, өшөй башлағас, аҙымын шәбәйтте.

Аҫта, әрәмәлектәге йылға буйында, һандуғастың ҡыйыуһыҙ ғына тауышы ишетелде. Теләр-теләмәҫтән генә дүрт-биш минут самаһы һайрағандан һуң, ҡапыл дәртләнеп китеп, ҡараңғы урман эсен йән тетрәткес моңға күмде. Турғай ҙурлығы ғына бәләкәй йырсы, тауышын төрләләндереп, нисек кенә ҡыланманы. Ҡиҫкен тауышын ҡуйырғандан ҡуйыра барған төнгө саф һауаға һуғып шаҡылдатты-шаҡылдатты ла сутылдарға кереште...

Һандуғастың моңло тауышы төнгө күк йөҙөн әҙерәк ағартҡандай тойолдо. Ҡайҙандыр бер-бер артлы ҡалҡып сыҡҡан йондоҙҙар йымылдаша башлағанда ла күҙгә күренмәгән бәләкәй солист үҙенең моңон туҡтатманы. Ошо бөтмәҫ-төкәнмәҫ төнгө «ария», дымланған һауа һәм яңы ғына япраҡ ярған ағастарҙың хуш еҫенә буталып, Байдәүләтовтың йөрәген елкендерҙе, ниндәйҙер нескә хис күңеленең иң төпкөлөнә үтеп инде.

— Их, Урал! Һөйөклө Уралым, ҡәҙерле төйәгем минең! Һинең өсөн элгәре замандарҙа атай-олатайҙарым яуҙарҙа алышһа, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы әле мин һуғыштым һәм һуғышасаҡмын, — тине лә, һағышлы ярһыуын баҫа алмайынса, йырлап ебәрҙе:

> ...Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
> Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын.
> Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
> Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Борон, бик боронғо ваҡытта сығарылған был йыр Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа бөгөнгөсә яңғырауы Зәкиҙе тетрәтте. Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары ла Уралдың именлеге, халыҡтың артабанғы яҙмышы өсөн фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыша бит! Гвардия генерал-майоры Шайморатов, полк командирҙарынан майор Нафиҡов, комиссар Байғужа Сәйетғәлин, лейтенант Аннаклыч Атаев кеүек унар-йөҙәр меңләгән батыр ирегеттәр ҡорбан булды инде был оло яуҙа. Ҡәһәрле һуғыштың ҡасан бөтөрө билдәһеҙ, яңынан-яңы кешеләрҙе һәләк итеп, ул һаман дауам итә... Шуныһы ғәжәп, нисәмә тапҡыр яраланып та, Зәки тере ҡалды һәм бына иҫәнһау көйө тыуған төйәгенә ҡайтып бара, ә уның яуҙаштары гитлерсыларға ҡаршы алыша... Ошондай яуаплы осорҙа уларҙан айырылып китеүе өсөн үкенә Зәки...

Тыуған Мағышты ауылы осона еткәс, Байдәүләтовтың тулҡынланыуы артты, йөрәге ярһып-ярһып тибергә тотон-

до. Ул, үҙен-үҙе тынысландырырға ниәтләнеп, төнгө ҡараңғыға сумған тып-тыныс урам буйлап ҡабаланмай ғына атланы.

Өйө тәңгәленә еткәс, туҡталыбыраҡ торҙо. Шунан, эске яҡтан бикләнмәгән ишекте һаҡлыҡ менән асып, өйгә инде.

Әсәһе менән кәләше Мәстүрә йоҡларға ятмағайны әле. Улар ҡаҙан аҫтына яғылған ут яҡтыһында киске тамаҡ туйҙырып ултыра ине.

Ишек асылған тауышҡа боролоп ҡараған әсәһе, ҡараңғыла бер ни күрмәгәс:

— Мөнөйә күрше, һинме? — тип һораны, ә Мәстүрә, урынынан һикереп торған ыңғайы, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ҡәйнәм, улың ҡайтҡан!

— И, илаһым, — тине Хәмиҙә әбей, йөрәген тотоп.

Мәстүрә, ҡәйнәһенә иғтибар итмәйенсә, иренең ҡосағына ташланды.

— Зәки, яныҡайым!

— Мәстүрә!..

Килене менән улы сөсөкәләшеүенә Хәмиҙә әбей ҡамасауларға теләмәне. Шыйыҡланған һөткә ҡуянтубыҡ, ҡымыҙлыҡ, ҡуҙғалаҡ тураҡлап бешергән өйрәне йылытып, икмәк урынына файҙаланылған дегәнәк төбө менән һарна төбөн ашъяулыҡҡа һалғас, улын саҡырҙы:

— Әйҙә, балаҡайым, тәүелә тамаҡ туйҙырып ал. Юлда йөрөп ҡорһағың асыҡҡандыр!

Зәки һалдат тоҡсайында йөрөткән сохари, шәкәр киҫәктәрен, оло икмәк һынығын, колбаса менән таҡта сәйен сығарып биргәс, быҗдай ризыҡты һуңғы йылдарҙа төшөндә лә күрмәгән Хәмиҙә әбейҙең күҙҙәре дүрт булды.

— Ай, балаҡайым, байтаҡ байлыҡ апҡайтҡанһың да баһа, — тип сәйҙе самауырҙа ҡайнатырға булды.

Был кистә уларҙың һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Зәки фронттағы хәлдәрҙе, ә Мәстүрә, ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙан тылдағы фронт бригадаһы ойоштороп, һуғыш заказдары буйынса саналар, арбалар, саңғылар, махсус таралар эшләүҙәре, һалабаш ебетеүҙәре, урманда ағас киҫеүҙәре, яҙғылығын һал ағыҙыуҙары хаҡында түкмәй-сәсмәй һөйләне.

Килене шымғас, Хәмиҙә әбей өҫтәп һүҙ ҡыҫтырҙы:

— Мәстүрә килен һал ағыҙыу эшенән өлөкөгөн генә бушаны. Бөгөн, әртил прсиҙәтеленән рөхсәт алып, урмандан этлегән менән һарына төбө ҡаҙып алып ҡайттыҡ.

— Тамаҡты алдатып булмай. Ашарыбыҙға ризығыбыҙ бөткәс, һарына ҡаҙырға бармай ҡалайтаһың, — тине Мәстүрә.

— «Заря» промартеле председателе һаман да Хәлимов Абдулла ағаймы? — тип һораны Зәки.

— Әйе, һаман да шул, — тип яуап ҡайтарҙы Мәстүрә. — Һыңар ҡулы булмаһа ла, үтә тырыш, ауылдағы бөтә кешене фронт һыҙығындағы шикелле итеп бик ныҡ эшләтә белә.

— Утын-бесән ташырға ат менән ярҙамлашамы?

— Нисек ярҙамлашһын, ти, әртил эшенә егеп йөрөрҙәй ҙә ат ҡалмағас? Утын-бесәнде ҡыш буйына бәләкәй санала ташыйбыҙ.

Ҡалаларҙан алыҫ урындағы ерҙә, тау-ташлы урман эсендәге бәләкәй ауылда йәшәүсе ауылдаштарының фронт өсөн кәрәкле барлыҡ нәмәләрҙе хәлдәренән килгән тиклем етештерергә тырышыуҙары Зәкиҙә ғорурлыҡ тойғоһо уятты.

— Беҙҙең көс тыл менән фронттың берҙәмлегендә, тип элекке комиссар Әлибаев ағай ҡайһылай дөрөҫөн әйткән!

— Шундай оло дәрәжәле ағайҙы һин беләһеңме ни? — тип һораны Мәстүрә.

— Кәк же белмәҫкә?! Ул да мине бик яҡшы белә. Сәғит Рәхмәтович Әлибаев ағай мине Тамбов кавалерия училищеһына уҡырға китергә өндәп күндермәһә, моғайын, әле һеҙҙе лә күрә алмаҫ инем...

Таң яҡынлашыуын белгертеп ауыл әтәстәре ҡысҡырыша башлағанда ғына һүҙҙәренән бүленеп, улар йоҡларға ятты.

## XVI

Мозырь һәм Калиновичи ҡалаларын азат итеүҙә күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған 16-сы Чернигов гвардия кавалерия дивизияһы Владимир-Волынскийҙы һуғышып алыу өсөн көньяҡ-көнсығыштан һөжүмгә күсерҙән алда, Белов кавполк командирҙарын үҙ блиндажына йыйҙы.

— Обстановка шул, — тине ул. — Дивизиялағы полктарҙа һалдаттарҙың яртыһынан әҙерәге ҡалды. Улар ҙа йүнләп ял итергә өлгөрмәне. Әммә, нисек кенә ҡыйын булмаһын, корпус командиры ҡуйған бурысты үтәргә тейешбеҙ. Разведка мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Владимир-Волынский линияһы хәтәр нығытылған. Беренсе оборона һыҙығы алты-ете ҡатлы тимерсыбыҡтар менән уратып алынған, ун метр һайын тиерлек дзоттары бар. Землянкалар һәм траншеялар бер-береһе менән тоташтырылған. Нығытмалары алдына миналар һалынған. Ә беҙҙең көс, ҡа-

батлап әйтәм, дошмандыҡы менән сағыштырғанда, бишалты тапҡырға кәм. Бының өҫтәүенә, тылыбыҙҙа ҡалған дошман гарнизондарынан һаҡланыу өсөн беҙгә байтаҡ эскадрондарҙы артта тоторға тура киләсәк. Шуға ҡарамаҫтан, дошмандың терәк урынын ҡыйратырға һәм ҡеүәтле узелын һуғышып алырға тейешбеҙ. Турья йылғаһы аша һалынған емерек күперҙе Рогачий саперҙары тиҙҙән төҙәтеп бөтәсәк. Ҡараңғы етеү менән, Ковель ҡалаһына һөжүм башлайбыҙ...

Турья йылғаһының аръяғына күпер аша төндә сыҡҡан кавполктар дошман тылына аңғармаҫтан үтеп ҡалырға тырышты. Ләкин ҡалала ҙур көс тупларға өлгөргән немецтар, һыбайлыларҙың яҡынлашып килеүен һиҙеп ҡалып, көслө ут асты. Авангардта барған Күсимов полкының һыбайлылары дошмандың доттары, дзоттары һәм траншеялары ҡаршыһындағы соҡор-саҡырлы урындарҙа йәшеренергә мәжбүр булды.

Күсимов, дивизия командирына хәбәр итеп, дошман утын орудиелар ярҙамында баҫтырыуҙы үтенде.

Шул уҡ минутта дошман позицияһына табан осҡан снарядтарҙың бер-бер артлы ярылыуы ишетелде. Бер сәғәткә яҡын һуҙылған көслө канонаданан һуң, 58-се кавалерия полкы һыбайлылары ҡабаттан һөжүмгә күтәрелде. Ләкин ул атакалар ҙа кире ҡағылды.

Асыуы ҡабарған гвардия полковнигы Белов Күсимовты команда пунктына саҡыртты.

— Ни өсөн бер үк урында тапанаһығыҙ?!

— Алға барырға бер ниндәй мөмкинлек юҡ, иптәш комдив! Атаканы уңышлы дауам итеү өсөн дошмандың күп һанлы ут нөктәләре ҡамасаулай, — тип яуап ҡайтарҙы 58-се кавполк командиры.

— Ҡыйыулығыбыҙ етмәй, ҡурҡабыҙ тип әйт!

— Хаталанаһығыҙ, иптәш гвардия полковнигы! — Дивизия командирынан нахаҡ шелтәләнеүенә Күсимовтың да асыуы ҡабарҙы. — Минең егеттәргә һүҙ тейҙермәүегеҙҙе һорайым. Арыҫландар улар!

— Ул арыҫландарҙың эше ҡайҙа һуң?

— Станцияға ебәрелгән бер төркөм саперҙар-подрывниктар тимер юл полотноһын шартлатырға өлгөрҙө. Шуның менән Сокальға ебәрергә әҙерләнгән дошман эшелондарының юлын өҙҙө. Әммә дошмандың уты көсәйҙе, атака туҡтатылды. Немецтарҙың күп һанлы ут нөктәләрен дивизия артиллерияһы ҡыйратмайынса, һөжүмде артабан дауам итергә мөмкин түгел! Ярҙам итегеҙ!

Дивизия командиры Белов байтаҡ ваҡыт өндәшмәй торҙо. Шунан, тауышын йомшартыбыраҡ, әйтте:

— Дошмандың ут нөктәләрен ҡыйратырҙай көсөбөҙ юҡ. Артиллеристарҙың снарядтары ҡалманы, миналар ҙа бөткән.

Ҡусимов дыуамалланып, ҡапыл ярһыны.

— Иптәш гвардия полковнигы, тейешле ярҙам булмаһа, кешеләрҙе дошман уты аҫтында ҡырҙырыуҙан файҙа юҡ! Һис юғында ҡараңғы төшкәнгә саҡлы атаканы кисектерергә рөхсәт итегеҙ!

Дивизия штабы начальнигы Голенев та шул уҡ фекерҙә икәнлеген белгәс, Белов 58-се полк һыбайлыларын ваҡытлыса хәүефһеҙ урынға күсерергә тигән һығымтаға килде.

Ҡусимов үҙ подразделениеһына сапты.

Көнө буйы ике яҡтан да атыш булманы. Ләкин тынлыҡ үтә көсөргәнешле ине.

Төн уртаһында төрлө төҫтәге ракеталар һауаға күтәрелде. Шуны ғына көткән гвардеец-черниговсыларҙың атакаһы ҡабаттан башланды.

Ҡаланың көнсығыш өлөшөнән һөжүм итеүсе ҡусимовсылар, сәнскеле тимерсыбыҡ кәртәләре киҫелгәс, алға табан ташланды. Дошмандың беренсе траншеяһын немецтарҙан таҙартып, икенсеһе өсөн алыш барған саҡта ҡала ситендәге өйҙәрҙән уларға ҡаршы көслө ут астылар.

— Ә-ә-әх, артиллерия — һуғыш батшаһы, һин ҡайҙа?— тип Ҡусимов ҡаты һүгенде лә, һөжүмде туҡтатырға һәм үҙҙәре һуғышып алған позицияны нығытырға бойорҙо.

60-сы һәм 62-се гвардия кавалерия полктары ла атакаларын туҡтатҡас, бөтә урында йәнә шомло тынлыҡ урынлашты.

Аяғына баҫып торорҙай ҙа хәле ҡалмағайны Таһир Ҡусимовтың.

Ул, дивизия командиры менән рация аша һөйләшкәс, бер аҙ серем итеп алырға ниәтләнеп, окоп төбөндә хыр ҙа мыр йоҡлаған Әлибаев эргәһенә һыйынып ятты. Әммә күҙҙәрен йоморға ла өлгөрмәне, иртәнге тынлыҡты боҙоп, яҡын-тирәлә дошман снарядтары ярыла башланы.

«Фашистар беҙҙе бынан һөрөп сығарырға маташа икән!» — тип уйланы Ҡусимов.

Тупҡа тотоу туҡталыу менән, немецтар күренде.

Бик аҙ ҡалған патрондарҙы бушҡа әрәм итмәҫкә тырышып, эскадрон командирҙары дошмандың яҡынырaҡ килеүен көттө.

Ҡусимовсылар тауыш-тын сығармағас, дошман һалдаттары батырайҙы.

Һорғолт-йәшел кейемдәге немецтарҙы күҙәткән Ҡусимов эскадрон командирҙарын ут асырға ҡабаландырманы.

Ҡаршы яҡтан атыу тауышы һаман ишетелмәгәс, дошман һалдаттары, йәшеренмәйенсә, асыҡтан-асыҡ килә башланы.

— Фрицтар иҫерек ахырыһы, — тип бышылданы яҡындағы һыбайлыларҙан кемдер.

— Уларҙы хәҙер айнытабыҙ, — тине икенсеһе.

Ҡусимов эргәһендәге Сәғит Әлибаев сабырһыҙланды.

— Таһир Таипович, ут асырға ваҡыт түгелме?

— Ҡабаландырма! Эскадрон командирҙары үҙҙәре белә, — тине Ҡусимов тыныс ҡына.

Уң флангылағы беҙҙең һалдаттар автоматтарҙан ут асты. Немецтар һулға ҡайырылып, бер тирәлә урһәләнгән ваҡытта, икенсе яҡтан да ата башланылар. Оҙаҡламай барлыҡ пулеметтар, шашынып-которонop, ҡурғашлы ямғырҙар яуҙырырға тотондо.

Дошман һалдаттары, ҡайҙа ҡасып ҡотолорға урын таба алмайынса, төрлө яҡҡа һибелеп, ергә ятты. Екеренгән офицерҙар талабына буйһоноп, улар алға табан шыуыша башлағайны, эскадрон командирҙарының «Гранаты — к бою!» тигән командаһы ишетелде.

Немецтар, берҙәй булып ташланған гранаталар утына ҡаршы килә алмайынса, кирегә сигенде.

Бер аҙҙан немецтарҙың яңы атакаһы башланды. Уныһы ла кире ҡағылғас, улар өсөнсө тапҡыр күтәрелде. Ләкин дошман был юлы ла кирегә боролдо.

Төштән аҙаҡ дошман артиллеристары йәнә көслө ут асты. Тупҡа тотоу баҫылғас, пушкалары менән пулеметтарынан ата-ата ҙур тиҙлектә килгән «тигр»ҙарға һәм «фердинанд»ҡа эйәргән дошман һалдаттары күренде.

Гвардеецтар ут асты.

Траншеяға етеп килгән «фердинанд» бронебойщиктар тарафынан дөмөктөрөлгәс, дошмандың йәйәүле һалдаттары ергә боҫто, ә танкылары, туҡталып тормайынса, һаман алға шыуышты. «Тигр»ҙарҙың икеһе ПТР-ҙан атып яндырылды. Өсөнсөһө, бронебойщиктарҙы гусеница аҫтында иҙергә ашҡынып, тиҙлеген арттырҙы. Ҡыйратылмаған тәрән траншея төбөндә йәшеренеп ҡалған батырҙар танкка арттан ут асты. Траншеяны ҡабаттан шымартырға ниәтләнеп, кирегә боролған саҡта «тигр»ҙың броняһынан янғын урғылды.

— Егеттәр молодец, ай, молодец! — тип ҡысҡырып ебәрҙе һәммәһен команда пунктынан күҙәткән Ҡусимов.

Иртәнге ҡараңғыла башланған тиңһеҙ алыш киске ҡараңғы төшөрҙән алда ғына баҫылды.

Танкылар менән көсәйтелгән дошман дивизияһының ҡалаға инеүе хаҡында хәбәр алынғас, черниговсы-гварде-

еңтар һөжүмде туҡтатты. Һуғышып алынған урында ныҡлы оборона ойоштороорға тигән яңы приказ алынды.

Ике көндән оборона һыҙатына уҡсы дивизия килде, ә алмашынған 16-сы кавалерия дивизияһы Икенсе Белоруссия фронтының резервына күсерелде.

Гвардеецтар үҙҙәрен тәртипкә килтереп, аттарын дағалатҡан саҡта, СССР кавалерия командующийы Советтар Союзы Маршалы Семен Михайлович Буденный килергә тейеш икән, тигән хәбәр таралды.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, уны ҡаршы алыу өсөн полктарҙа һәм эскадрондарҙа ашығыс әҙерлек башланды. Офицерҙар өҫ-баштарын рәтләне, китель төймәләрен ышҡып ялтыратты; рядовой кавалеристар аттарының баҡталарын ҡырҙы, таҙартты, йылға буйына алып барып йыуҙы, эйәр-йүгәндәрен төҙәткеләне, мунса инеп сыҡҡас, ҡырынды, яманды; артиллеристар үҙҙәренең пушкалары менән аҙапланды, ә гвардия подполковнигы Күсимов полктағы постарҙы, тәртипте һәм таҙалыҡты тикшереп йөрөнө.

Полк командирынан ҡалмай, һәр саҡ уның менән бергә булған Сәғит Әлибаев:

— Ниндәй маҡсат менән килә икән Семен Михайлович? — тип һораны.

— Ниндәй маҡсат менән йөрөүен үҙенән һорарһың, — тип яуап ҡайтарҙы ла, үҙенең тупаҫ ҡыланыуын аңлап, Күсимов көлдө. — Буденный бушҡа йөрөмәҫ. Беҙ белергә тейеш булмаған берәй хикмәте барҙыр, моғайын.

— Уның ҡасан, ҡайһы ваҡытҡа килере билдәле түгелме?

— Был хаҡта тик корпус командирына мәғлүм.

— Маршалды ҡаршы алғанда беҙҙе ҡатнаштырырҙар микән?

— Беҙҙе түгел, хатта дивизия командирҙарын ҡатнаштырыуҙары икеле, Сәғит Рәхмәтович!

Күсимов хаҡлы ине.

Ун һигеҙенсе майҙың иртәнге таңында килеп төшкән маршалды һәм уның ярҙамсыларын 7-се гвардия кавалерия корпусы командиры менән штаб начальнигы һәм политработниктар ғына ҡаршыланы.

Бик ныҡ тулҡынланған корпус командиры гвардия генерал-майоры Константиновтың рапортын аҙаҡҡа тиклем тыңлап бөтөрмәйенсә, Семен Михайлович Буденный уны тыйнаҡ ҡына бүлдерҙе:

— Бөтәһен бер ыңғай һөйләп бөтөрһәң, аҙаҡтан нимә ҡала? Әйҙә, иң әүәл хужалығың менән таныштыр!

Константинов, еңелсә ҡыҙарынып, ҡаушаны.

— Ғәфү итегеҙ, иптәш Советтар Союзы Маршалы, тәүҙә тамаҡ ялғап алырға теләмәйһегеҙме?

Иртәнге ҡояш нурҙарына күмелгән йәм-йәшел урман эсендәге землянкаларҙы, блиндаждарҙы, тирә-яҡтағы һаҡсыларҙы байҡап сыҡҡас ҡына яуап ҡайтарҙы Буденный:

— Рәхмәт, беҙ туҡ. Команда пунктына алып бар!

— Тыңлайым, иптәш маршал!

Йыуан-йыуан бүрәнәләр менән ҡат-ҡат йәйеп нығытыулы ер аҫтындағы тәрән, иркен, киң блиндажға төшкәс, блиндаждың ныҡлығына һәм корпус ҡарамағындағы оператив-тактик хәлде аңлатыу өсөн бында һәммәһе әҙер булыуына иғтибар итеп, маршал Буденный ҡуйы көлтә мыйығы аҫтынан ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Миңә бында оҡшай, — тип өҫтәл артында теҙелеүле торған ултырғыстарҙың береһенә ултырғас, ул корпус командирына эйәк ҡаҡты: — Генерал, кавалерия корпусы хаҡында тыңларға әҙермен!

Константинов корпустың оператив-тактик хәлен ентекләп аңлатырға тотонндо.

Семен Михайлович Буденный уны иғтибар менән тыңланы.

Сталинград эргәһендә барған дәһшәтле һуғыштар ваҡытында дошмандың дүрт дивизияһын ҡыйратҡандан һуң, гвардия кавалерия корпусының немецтар тылы буйлап бик күп ерҙәрҙе гиҙеүен, Мозырь һәм Калиновичи ҡалаларын азат итеүҙәрен, Владимир-Волынский йүнәлешендәге алыштарҙа уңышһыҙлыҡҡа осрау сәбәбен корпус командиры түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.

16-сы кавдивизия полктарының Владимир-Волынский йүнәлешендәге һуғыштарҙа бер ниндәй снарядһыҙ, патронһыҙ булыуы, полктарҙағы өсәр эскадрондың һәр ҡайһыһында егерме-егерме бишәр генә һуғышсы ҡалыуы, шуның өҫтәүенә, корпус менән элемтә өҙөлөүе тураһында белгәс, Семен Михайлович уйға ҡалыбыраҡ ултырҙы.

— Шунда ла дивизия үҙ позицияһын бирмәнеме? Сигенмәнеме?

— Бирмәне лә, сигенмәне лә, иптәш Советтар Союзы Маршалы, — тип яуап ҡайтарҙы корпус командиры.

— Молодцы, — тип Буденный урынынан торҙо һәм корпус менән танышыуҙы 16-сы гвардия кавалерия дивизияһынан башларға теләк белдерҙе.

58-се гвардия кавалерия полкына килеп еткәс, үҙенә доклад яһаған полк командиры подполковник Күсимовҡа Семен Михайлович Буденный текләп ҡараны:

— Подполковник, Башҡортостандың ҡайһы районынан һин?

— Баймаҡ районының !
веттар Союзы Маршалы, - Күсем ауылынанмын, иптәш Со-
— Граждандар һуғыше — тип яуап ҡайтарҙы Күсимов.
бригадаһы командиры Мы Геройы, айырым кавалерия
юҡмы? Муса Мортазинға туғанлығың
— Никак нет, иптәш Сс
— Ҡиәфәтең, ҡыланышСоветтар Союзы Маршалы!
ғанһың. Яҡташың Муса Мшың менән уға бик ныҡ оҡша-
дир була торғайны... Мортазин һәләтле, ҡыйыу коман-
Семен Михайлович Буд
дарындағы хәл-ваҡиғаларҙенный граждандар һуғышы йыл-
да Беренсе атлы армияныҙы иҫенә төшөрҙө. Ул, 1920 йыл-
шыуына бәйләп, Бөйөк Ьың аҡтарға ҡаршы нисек һуғы-
совет һалдаттарының ҡаһаВатан һуғышында ҡатнашыусы
өлкәләренең, Новгородтың арманлығы, Ленинград, Калинин
ере өсөн көслө алыш ба азат ителеүе, Совет Эстонияһы
Румынияға инеүе тураһынлашланыуы, совет ғәскәрҙәренең
бер генә дошман һалдатыда әйтте һәм тиҙҙән тыуған илдә
ышаныс белдерҙе. ының да ҡалмаясағына ныҡлы
Аттарҙың торошон тикı
ҙары һәм рядовой һыбайшереп, 58-се полктың командир-
Семен Михайлович Буденлылары менән осрашҡанда ла
лекле тотто. ный үҙен үтә ябай һәм кеше-
Асыҡ һауала ҡоролғаı
Буденный Күсимовты үҙе н палатка эсенә ингәс, маршал
Ул Таһирҙың белеме, (эргәһенә саҡырып ултыртты.
се йылдарҙан бирле хеҙмСовет Армияһы сафында нисән
полктар менән командаль әт итеүе, ҡасан, ҡайҙа, ниндәй
Геройы исеме ниндәй һуғыҡ итеүе, уға Советтар Союзы
ҙыҡһынды һәм көтмәгәндәш өсөн бирелеүе тураһында ҡы-
— Һине 15-се гвардия :
баҫары итеп күсерһәк, по дивизияһы командирының урын-
һораны. дполковник, ни әйтерһең? — тип
Бындай тәҡдим булыр
симов аптыраны. тип башына ла килтермәгән Кү-
— Ғәфү итегеҙ, иптәш
не полк командиры вазиСоветтар Союзы Маршалы... Ми-
аңламайым! фаһынан бушатыуығыҙ сәбәбен
— Башҡорт кавалерия
беренсе көндәренән бирле дивизияһы ойошторолғандың
манымы ни? полк командиры булыу ялҡыт-
— Ялҡытманы, иптәш
рәһенсә, үҙем ойошторғанСоветтар Союзы Маршалы! Ки-
серелеүемде язаға тиң һан кавполктан икенсе урынға кү-
— Мин һине ҡыуандыайым...
ırырға теләгәйнем, подполков-

ник. — Буденный уйға ҡалыбыраҡ ултырҙы.— Әгәр ҙә Хәрби академияға уҡырға тәҡдим итһәк, ни әйтерһең?

— Уҡыуҙан баш тартмаясаҡмын, иптәш Советтар Союзы Маршалы!

— Баш тартмағас, подполковник, килештек! Саҡырыуҙы көт, — тине Семен Михайлович Буденный, көлтә мыйығы аҫтынан йылмайып.

Кавалерия командующийы Маршал Буденный Мәскәүгә ҡайтып киткәс, Күсимов Хәрби академияға уҡырға ебәрелеренә өмөт тотманы. Маршал һәммәһен онотор тип уйланы. Ләкин ул яңылышты. Күсимовты Мәскәүгә уҡырға саҡырып телеграмма килде.

58-се гвардия кавалерия полкын штабы начальнигына тапшырғас, ҡыуаныс-ҡайғыларын һәр саҡ уртаҡ бүлешеүсе Сәғит Әлибаев кеүек иң яҡын хәрби дуҫтары һәм барлыҡ һыбайлылар менән һаубуллашып, Күсимов тыуған илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүгә табан юлланды.

## XVII

Көндәр бер-бер артлы үтә торҙо. Һуғыш һаман дауам итте.

Люблин ҡалаһын азат итеүҙә күрһәткән батырлығы өсөн Суворов орденына лайыҡ булған 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының, Висла аша сығып, йылғаның көнбайыш ярында нығыныуы тураһында ишеткәс, «Туймазынефть» тресы управляющийы Нифантов ҡыуаныслы тойғолар кисерҙе. Ул ҡайҙа ғына бармаһын, кемдәр менән генә осрашып һөйләшмәһен, данлыҡлы һуғышсыларыбыҙға дошманды еңергә ярҙамлашыр өсөн нефтте тиҙерәк һәм күберәк сығарыуҙы талап итте.

Девон нефтен тапҡанда ғына «Икенсе Баку»ҙың яҙмышы ыңғай хәл ителәсәгенә ныҡлы ышаныс тотоп, ул йөҙөнсө скважинаны быраулауҙы ашыҡтырҙы. Ләкин йөҙөнсө скважинанан девон нефте сығырмы? Был хаҡта танылған ғалимдар ҙа, уртаҡ фекергә килә алмайынса, һаман бәхәсләшә...

Девон нефте хаҡындағы бәхәс Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге йылдарҙа уҡ башланғайны.

Академик Иван Михайлович Губкиндың ғилми һығымталарына нигеҙләнеп, девон нефте эҙләү буйынса Нарыш ауылы эргәһендә 1936 йылдың йәйендә 1.100 метр тәрәнлегендәге беренсе скважина пар машинаһы ярҙамында быраулағайны. Быраулау эшен ойоштороу өсөн Туймазынан бик күп һыу ташытырға тура килгәйне ул заманда. Әммә, Мәскәүҙәге Главнефть етәкселәренең тиҫкәреләнеүҙәре, һәр

яңылыҡҡа шик белдереүҙәре, эшкә аяҡ салыуҙары сәбәпле, тейешле тәрәнлеккә еткерелмәйенсә, бырауылау туҡтатылды. Шул йылдарҙағы ҡаршылыҡтар әле лә дауам итә. Хөкүмәт аҡсаһын мәғәнәһеҙ туҙҙырыуға һылтанып, Главнефть етәкселәре хәҙерге ваҡытта ла бер мең ете йөҙ метр тәрәнлектә бырауланылған скважинаның эшен туҡтатырға маташа. 1944 йылдың июнь айында ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты пленумы Башҡортостанда нефть сығарыуҙы арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итмәһә, йөҙөнсө скважиналағы бырауылау туҡтатылыр, разведка ла республикала ошолай киң йәйелдерелмәҫ ине, моғайын...

«Туймазыла девон нефте мотлаҡ табыласаҡ! Беҙҙең геологтар алып барған кернды тикшереп ҡарағас, Ленинградтағы профессор Наливкин да беҙҙә ҡеүәтле яңы нефть ҡатламы барлығын дөрөҫләгән», — тип үҙен-үҙе йыуатырға ғәҙәтләнгән Нифантов эш көнө тамамланырҙан алда трестың баш геологын саҡыртты.

— Минең менән бергә йөҙөнсө скважинаға барып әйләнергә теләгең юҡмы?

— Транспорт табылырмы?

— Ниңә транспорт табылыуын көтөргә? — Управляющийҙың асыулы йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. — Юлда машиналар бөткәнме ни? Улар осрамаһа, берәй тракторға, ылаусыға ултырырбыҙ, йәки йәйәү барырға ла мөмкин!

Нифантовтың тәҡдимен кире ҡағырға баҙнат итмәй, трестың баш геологы хәйләләште:

— Йөҙөнсө скважинала мин өс-дүрт көн генә элгәре булғайным, Иван Перфильевич!

— Ә мин кисә генә унда булдым, бөгөн йәнә барып әйләнергә теләйем! Девон нефтен табыуҙы иң әүәл трестың баш геологы ҡайғыртырға тейеш түгелме ни?

— Треста мин ҡул ҡаушырып ултырмайым, Иван Перфильевич! — Баш геолог үпкәләне.

— Ҡағыҙҙар аҡтарып ултырыуҙан фронттағы автомашиналарға, танкылар менән самолеттарға бензин өҫтәлмәй, — тип асыуланды трест управляющийы.

— Улай булғас, ярар! Мин хәҙер... Әҙерәк көтөгөҙ, Иван Перфильевич, — тип трестың баш геологы өҫтәлдәге ҡағыҙҙарын йыйнай башлағайны, Нифантов ҡырт киҫте:

— Кәрәкмәй, ҡағыҙҙарың менән ҡал!

— Иван Перфильевич!..

Управляющий трестың баш геологын тыңларға теләмәне.

— Үҙ вазифаһын теләр-теләмәҫтән башҡарыусы спе-

циалист миңә кәрәкмәй! — тип ишекте ҡаты ябып бүлмәһенән сыҡҡас, туҡталып тормайынса, коридорҙағы секретарына эйәк ҡаҡты: — Любаша, Өфөнәң йәки Мәскәүҙән һорап шылтыратһалар, мин — йөҙөнсө скважинала!

Нифантов, ауыр итегенең үксәһе менән шаҡ та шоҡ баҫып, коридор буйлап атланы. Тышҡы ишек эргәһендә АХО начальнигы менән һөйләшеп торған промысланың өлкән инженеры Хөсәйеновты күргәс, аптыраны.

— Искәндәр Сабитович, треста ни эш бөтөрөп йөрөйһөң?

— Үҙ йомошом менән килгәйнем.

— Ниндәй үҙ йомошоң булыуы мөмкин эш ваҡытында?

— Иван Перфильевич, минең ҡыуаныслы көнөм! Малай тыуҙы.

— Май айы ҡуңыҙы шикелле ауыҙыңдың йырылыуы сәбәбе хәҙер аңлашылды, Искәндәр Сабитович, — тип ҡотлап, Нифантов Хөсәйеновтың ҡулын ҡыҫты. — Ҡасан тыуҙы сабыйың?

— Өс көн элгәре, Иван Перфильевич. Малайҙың ауырлығы өс кило ла дүрт йөҙ ҡырҡ ике грамм!

— Яҡшы, ҡатыныңдың хәле нисек?

— Бөгөн алып ҡайтам.

— АХО начальнигы транспорт бирҙеме?

— Юҡ. Ҡатынымды больницанан йәйәү алып ҡайтырға ҡушмай врач. Өҙлөгөүенән ҡурҡа.

— Уларҙы алып ҡайтырға ниңә ашығаһың? Аҙна-ун көн ятһын ине больницала ҡатының... Йәһәтерәк күргең киләме?

— Күргем килеү-килмәүҙән түгел, Иван Перфильевич. Больницала башҡаларға урын етешмәй.

Управляющий транспорт табып бирергә ҡушҡас, АХО начальнигы һаман үҙ һүҙен ныҡыны:

— Булмаған транспортты ҡайҙан табайым, Иван Перфильевич?

— Ғәбит, һин һаранланма! Автомашина таба алмаһаң, күсергә әйтеп, минең атты кырандасҡа ектерт!

Ылау табылыуына Хөсәйенов ихлас шатланды.

— Рәхмәт, Иван Перфильевич!

— Ҡатыныңа минән сәләм һәм ҡотлау һүҙен әйт!

— Әйтермен, Иван Перфильевич, әйтермен!

Трест управляющийы Нифантов, урамға сыҡҡас, йөк тейәүле машинаны туҡтатты.

— Нарыш яғынамы?

— Унда ике саҡрым самаһы барып етмәйенсә, һулға боролорға тейешмен. Һеҙгә ҡайҙа барырға? — тип һораны шофер.

— Йөҙөнсөгә!

— Әләйһә, әйҙәгеҙ, Иван Перфильевич, ултырығыҙ! — Шофер кабина ишеген асты.

Шофер йөҙөнсө скважинаға тиклем алып барырға теләк белдергәс, управляющий риза булманы.

— Кәрәкмәй, ҡиммәтле ваҡытты әрәмгә уҙғарма. Ҡәҙерле бензинды экономиялауҙы ла онотма, — тип Нифантов машинанан төшөп ҡалды һәм артабан йәйәүләп атланы.

Управляющийҙы алыҫтан күреп таныған бырауласылар:

— Һай тынғыһыҙ!

— Көн йонсоу йәки транспорт булмауына ҡарап тормайынса, гел йөрөй ҙә йөрөй, — тип улар үҙ-ара һөйләште.

Разведчиктар менән берәм-берәм күрешеп сыҡҡас, Нифантов, хәлһеҙләнеп, ергә сүкәйҙе.

— Эштәр нисек бара?

— Торбаларҙан бушаған ҡыуышҡа ер ишелеп төшмәһен өсөн, барлыҡ мөмкинлекте файҙаланабыҙ, — тине бригада мастеры.

— Девон нефте һиҙелмәйме?

— Һиҙелмәй ҙә, һиҙелә лә һымаҡ, Иван Перфильевич!

Управляющий, күҙҙәрен йомоп, баш сайҡаны.

— Бөгөн егерме бишенсе сентябрь, беҙ көткән девон нефте юҡ та юҡ!

— Девон тиҙҙән булырға тейеш, — тине йөҙөнсө скважинаны бырауласы бригада бригадиры Трипольский, буровойҙың идара пультындағы приборҙан күҙҙәрен алмайынса. — Аҫтан өҫкә сыҡҡан шыйыҡсаларҙың төҫө йыш үҙгәреүенә ҡарағанда, нефть ана-бына урғылып сығырға окшаған, Иван Перфильевич!

Лебедкаға беркетелгән махсус свабаларҙы алмаштырып төшөргәндә һыу ярҙамында юғарыға сығарылған балсыҡлы иретмә ҡатыш тау тоҡомдарын тикшереп сыҡҡас, Нифантов йөрәкһенде.

— Оло ваҡиға ысынлап та яҡынлаша бит!

Эш барышынан иғтибарын саҡ ҡына ла кәметмәйенсә, бырауласыларҙың әле береһенә, әле икенсеһенә бер туҡтауһыҙ ашығыс командалар биргән Трипольский Нифантовтың һорауҙарына ла яуап ҡайтарырға өлгөрҙө:

— Эйе, оло ваҡиға яҡынлаша...

Бырауласыларға ҡамасауламаҫҡа тырышып, управляющий аҫтан сығарыласаҡ нефть өсөн әҙерләнгән насос-компрессорлы лифт торбаһына тоташтырыулы фонтан арматураһын, газды сепараторлау баҫҡысын тикшереп сыҡты. Шунан аҙаҡ ҡына, бөтә нәмә үҙ урынында икәнлеген

асыҡлағас, ул тынысланды һәм, ер аҫтынан төрлө ваҡытта сығарылған йәшкелт-көрән, аҡһыл-һары төҫтәге ҡомло балсыҡтарҙы аҡтарып, һуйырташтар араһындағы ҡаты дололит менән ҡыҙыҡһынды. Тау тоҡомдарының һәммәһе йөҙөнсө скважинала девон нефте булырға тейешлеген раҫлай. Тик ул ниндәй тәрәнлектә? Уны табыу өсөн йәнә күпме бырауларға һәм уның запасы нисек? «Икенсе Баку» исемен аҡларҙай нефть йөҙөнсө скважинанан сыҡмаһа, артабан ҡалайтырға?

Эңер мәлендә ваҡ-ваҡ күҙле ямғыр яуырға тотондо.

Управляющий төндө йөҙөнсө скважинала уҙғарырға булды. Ниндәйҙер шомло, көсөргәнешле уйҙар уға тынғылыҡ бирмәне.

Егерме алтынсы сентябрҙең иртәнге таңы яҡынлашты.

Нифантов, бер аҙ ял итеп алырға ниәтләнеп, палатка эсенә инеп ятты. Тик оҙаҡ йоҡларға тура килмәне, кешеләрҙең ҡысҡырышҡан тауышына уянды.

«Бер-бер яман хәл килеп тыуҙы микән әллә», — тип палатка ишеген асып сыҡҡан ваҡытта ул бер мең ете йөҙ ҡырҡ метр тәрәнлегенән ер аҫтынан урғылып сыҡҡан сөмҡара ҡуйы шыйыҡсаның алыҫҡа атылыуын күрҙе. Промысловиктар, ҡыуаныстарынан сыр-сыу килеп ҡысҡырыша-ҡысҡырша, утыҙ — утыҙ биш метр бейеклеккә күтәрелгән ҡеүәтле «ҡара алтын» фонтанын күҙәтәләр.

Барлыҡ кешеләр, ҡотороношоп, йөҙөнсө скважинаның нефте менән ҡул йыуалар, бер-береһенең биттәрен буяйҙар.

Үҙенең тотҡан дәрәжәһен онотҡан трест управляющийы Нифантов та бала шикелле алҡышланып ҡысҡырҙы:

— Девон нефте!.. Девон нефтен табыусыларға дан!.. Ура!

Уға ҡушылып, башҡалар ҙа һөрән һалды:

— Ура-а-а!..

Ҡемдер:

— Управляющийҙы сөйөргә! — тип ҡысҡырҙы.

Бер төркөм промысловиктар, управляющийҙы күтәреп алып, юғарыға сөйҙө.

— Ниңә мине?!. Төшөрөгөҙ! — тип сәбәләнде управляющий, үҙен бер туҡтауһыҙ өҫкә һикерткән бырауласыларҙан нисек ҡотолорға белмәйенсә. — Трипольскийҙы сөйөгөҙ, Трипольскийҙы!..

Управляющийҙы үҙ яйына ҡалдырып, промысловиктар ауыҙын йырып торған Трипольскийға табан йүгерҙе, ә Нифантов культбудкаға инеп китте.

Йөҙөнсө скважинанан девон нефте урғылып сығыуы хаҡында уның хәбәр итеүенә ике-өс сәғәт тә уҙманы,

ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары, «Башнефтекомбинаты» начальнигы Кувыкин менән баш геолог килеп етте. Улар артынса «Туймазынефть» тресы кешеләре, район партия комитеты секретары менән район Советы башҡарма комитеты председателе күренде һәм яҡын-тирәләге ауыл кешеләре лә йыйналырға өлгөрҙө.

Йөҙөнсө скважинанан девон нефте табылыуы менән бер-береһен ҡотлап, улар ығы-зығы килде.

Буровойға күтәрелеүсе оло дәрәжәле түрәләр араһында торған Нифантов үҙен һаман да тынғыһыҙ тотто. Ул ҡиммәтле ваҡытты бушҡа үткәрмәҫкә тырышып, промыслоның өлкән инженерын өтәләне:

— Хөсәйенов, бында разведчиктарҙың эше тамамланды, йөҙөнсө скважинаның нефтен артабан үҙләштереү бурысы һиңә йөкмәтелә! Давай, ең һыҙғанып эшкә тотон! Әммә бер ҡасан да шуны иҫеңдән сығарма: фронт беҙҙән күп, бик күп нефть талап итә!

— Оло ышанысығыҙҙы намыҫ менән аҡлармын, Иван Перфильевич, — тип Искәндәр Сабитович ысын һалдаттарса честь бирҙе.

— Давай, командуй!

— Есть, командовать! — тип Хөсәйенов ситкә тартылғайны, уны управляющий туҡтатты:

— Митинг бөткәнен көт инде, хәҙер митинг!

Йөҙөнсө скважинала ҡеүәтле девон нефте сығыуға бағышланған митинг оҙаҡ барманы.

Ул тамамланғас та, «Башнефтекомбинаты», «Туймазынефть» тресы етәкселәре, Башҡортостан өлкә һәм район комитеты работниктары Туймазыға табан юлланды, нарышлылар өйҙәренә таралышты, ә Хөсәйенов, үҙе менән бергә ҡалған нефтселәрҙе ҡабаландырып, төрлө эштәр ҡушты.

Скважиналағы таҙартылған һыу сепаратор установкаһы аша уҙғарылғас, сепараторҙағы баҫым көйләнеп, аҫтан сыҡҡан нефть торба буйлап ағыҙылды һәм факел яндырылды.

— Хәҙер проба алып, уны лабораторияға оҙатырға, нефтте мерникка йүнәлтергә һәм замер башларға! — тине Хөсәйенов.

Ҡатыны көтмәгәндә ауырып китеү сәбәпле, уларҙы өйөнә алып ҡайта алмауы өсөн үртәләнгән Искәндәр Сабитович ҡайғырҙы.

Йөҙөнсө скважиналағы эштәр бер аҙ яйланғас, промысловиктарға аҙыҡ ташыусы йөк машинаһына ултырып, ул ҡайтырға йыйналды. Ләкин кабина эсенә инеп ултырған

сакта, унын ни өсөн ҡайтмай оҙаҡлауын белергә тип, Зөбәржәт үҙе килде.

Ҡатынын күргәс, Искәндәр асыуланырға ла, ҡыуанырға ла белмәне.

— Ауырыу көйө ни өсөн сыҡтың больницанан?

Танымаҫлыҡ булып төҫкә-башҡа бик нык һурыҡҡан Зөбәржәт, иренең һорауына тура яуап ҡайтармайынса, яғымлы йылмайҙы.

— Һиңә аш бешереп килтерҙем, — тип ҡулындағы төргәкте һондо. — Мә, һыуынмаҫ элгәре берәй ерҙә ултырып тамаҡ ялға. Мин больницала ятҡас, моғайын, ас йөрөй торғанһыңдыр. Яңы скважинаны үҙләштереүе һиңә еңел түгел бит!

— Бындағы эш ыңғайланы инде. Мин үҙем ҡайтырға йыйналғайным.

— Ҡайтырға йыйналыуыңды белмәнем шул.

Зөбәржәтенең һәр сактағыса хәстәрлек күрһәтеүенә күңеле арбалған Искәндәр нефткә буялған ҡулдарын сепрәккә ышҡып һөрткән ваҡытта, сабыйын иҫенә төшөрөп, ҡапыл ҡурҡты.

— Ҡайҙа малайыбыҙ?

— Ул больницала ҡалды.

— Ауырыймы әллә?

— Иҫән-һау.

— Асыҡмаймы ни ул?

— Асыҡмаҫ. Һөтөмдө һауып ҡалдырҙым.

— Уны кем ҡарай?

— Медицина сестраһы.

— Больницала һиңә оҙаҡ ятырғамы?

— Белмәйем.

— Белмәгәс, ниңә йөрөйһөң?

— Һине һағындым!

— Бында врачтан рөхсәт алып килдеңме?

— Юҡ.

— Ә-ә-әх, улай йөрөүең һис тә ярамай!

— Әллә ни булмаҫ әле, — тине Зөбәржәт, ирен тынысландырырға тырышып.

— Ныҡлап һауыҡмайынса, һиңә ун-ун биш минут та йөрөргә ярамағанын нисек аңларға теләмәйһең? Аҙаҡтан ныҡытып түшәккә ятһаң, ҡалайтырбыҙ?

— Минән һыуынғанһың, ахырыһы. — Зөбәржәт үпкәләгән ҡиәфәт менән ауыҙын турһайтты.

— Юҡты һөйләмә!

— Минән һыуынмаһаң, шулай көймәҫ инең.

— Көймәйем, үҙенде йәлләгәндән әйтәм, Зөбәржәт!

— Мине йәлләһәң, бар, һөйөклөм, тамағыңды туйҙыр.

Хөсәйеновтан тамаҡ туйҙырыу ҡайғыһы китте. Туймазыға барасаҡ йөк машинаһының кабинаһына ултырып, ул ҡатынын больницаға алып китте.

Ныҡлап һауыҡмайынса Зөбәржәтте бер ҡайҙа ла сығармаҫҡа ҡушып, ҡатынын медицина сестраһына тапшырғас, фатирына һуғылмайынса, Искәндәр йөҙөнсө скважинаға кире китте.

## XVIII

Йөҙөнсө скважинаның эше ныҡлы юлға һалынды.

Ер аҫтынан урғылып сыҡҡан девон нефте дебетының тәүлегенә ике йөҙ илле тоннаға етеүе, ул скважинаның тора-бара Туймазылағы барлыҡ промыслаларҙан да күберәк нефть биреүе һәм уның артабан да көндән-көнгә арта барыуы бөтә ил өсөн бер оло ваҡиға булды. Туймазыла ғына түгел, Өфөлә һәм Мәскәүҙә «девон» һүҙе ауыҙҙан төшмәне.

Йөҙөнсө скважинала ҡеүәтле девон нефтен сығарыуҙа үҙенең дә өлөшө барлығына ғорурлыҡ тойғоһо кисергән Хөсәйенов өсөн ҡыуаныс менән ҡайғы икеһе бер мәлгә тура килде. Туймазы промыслаларында нефть сығарыу бер ай эсендә ун тапҡырға артты. Бындай хәл, үҙ сиратында, бүтән предприятиеларҙың эшенә туранан-тура ыңғай йоғонто яһаны. Өфө нефть эшкәртеү заводы ғына фронттағы самолеттар, танкылар һәм автомашиналар өсөн пландан тыш байтаҡ яғыулыҡ бирә башланы.

Туймазыла девон нефтен асыуҙа ҡатнашҡан бер төркөм кешеләргә СССР Дәүләт премияһы һәм ордендар тапшырыу кисәһенә барырға йыйналған Хөсәйенов, больницала ҡатынының һаулығы ҡапыл хөртәйеүе хаҡында ишеткәс, ҡурҡыуға төштө.

— Әх, Зөбәржәт, Зөбәржәт, берҙән-бер һөйөклөм, ҡәҙерлем минең! Үҙеңде-үҙең аямауың бына ни эшләтте һине! — тип үртәләнә-үртәләнә өҫтөнә кейгән ҡупшы кейемен сисеп ырғытты ла урамға йүгереп сыҡты һәм туҡтатылған йөк машинаһында больницаға елдерҙе.

Искәндәр шоферҙы күпме генә ҡабаландырмаһын, ул барыбер һуңланы...

Больница ишеге алдында ҡаршы алыусы врачтың күҙҙәре шәмәреүен күргәс, Хөсәйенов ҡотолғоһоҙ оло бәләгә тарығыуын аңланы.

— Зөбәржәткә бер-бер хәл булдымы?

— Булды...

Искәндәр, ишеткәндәренә ышанмайынса, шаҡ ҡатты.

— Ҡа-а-а-сан?

— Яңыраҡ... Ул һеҙҙе көттө, бик көттө...

Хөсәйеновтың күҙҙәренә йәш эркелде, ирендәре дерелдәне.

— Зөбәржәттең хәле мөшкөлләнеүен ҡалданыраҡ белгертһәгеҙсе!

— Ул һауыға башлағайны...

— Ә-ә-әх, хәҙер ҡалайтырға? Зөбәржәтһеҙ нисек йәшәргә?..

— Тынысланығыҙ, Искәндәр Сабитович, тынысланығыҙ! — тине врач, күҙҙәрен мөлдөрәтеп.

Сыҙарға, нисек тә булһа тынысланырға, көтөлмәгән ҡайғынан өҫтөн торорға тырышып, Хөсәйенов тештәрен шығырлата ҡыҫты. Коридорҙың мөйөшөнә терәлеп тауыштын сығармай торғандан һуң, бер аҙ тынысланғас, йыш-йыш һуланы.

— Зөбәржәтем эргәһенә керергә мөмкинме?

— Уны күреп, үҙегеҙҙе яфалауҙан ни мәғәнә? Иртәгә саҡлы түҙегеҙ, — тине врач.

— Бәпесте алып ҡайтырғамы?

— Сабый өсөн әлегә бында яйлы булыр, Искәндәр Сабитович.

Хөсәйенов, врач менән бәхәсләшеүҙе урынһыҙ һанап, иҫерек кешеләй айҡала-сайҡала, тышҡы ишеккә табан ыңғайланы.

Больницанан сыҡҡас, аңын томалаусы ауыр ҡайғыһынан айный алмайынса, ул ҡотороноп яуған көҙгө һалҡын ямғыр аҫтында оҙаҡ ваҡыт шаҡ ҡатып торҙо. Дөм ҡара йөнтәҫ болоттар менән томаланған тирә-яҡтағы күренеш үтә һөйкөмһөҙ, эс бошорғос булып күренде, ала ҡарғаларҙың кемуҙарҙан һөрән һалып ҡарҡылдашыуҙары уның йөрәген телгеләне.

«Зөбәржәттән башҡа нисек йәшәргә яҡты донъяла? Әсәһенән бер айлыҡ ҡына ҡалған сабыйҙы нисек үҫтерергә?..»

Йән әрнетерҙәй һорауҙарына бер нисек тә яуап таба алмаған Искәндәр, үҙен еүешләгән ямғырға һәм лысҡылдап ятҡан батҡаҡҡа иғтибар итмәйенсә, һаман үртәләнде: «Әх, Зөбәржәт, Зөбәржәтем минең! Үҙеңде-үҙең һаҡламауың, кәрәгенән артыҡ хәстәрлекле, кешелекле булыуың арҡаһында харап булдың бит. Миңә һәм үҙең яҡты донъяға тыуҙырып ҡалдырған бәп-бәләкәс, бер ни аңламаған сабыйыңа ниндәй ҡайғы-хәсрәт тыуҙырыуыңды белһәңсе!..»

Ике көн тынғыһыҙ мәшәҡәтлелектә үтте.

Таштар менән кәртәләнеүле дала уртаһындағы зыяратта ҡатынын ерләгәндән аҙаҡ бер айлыҡ ялға сыҡҡан

Искәндәр, рухи төшөнкөлөккә күмелеп, кешеләр менән аралашмайынса, берҙән-бер аянысы ла, ҡыуанысы ла булған Шәкирйән исеме ҡушылыулы сабыйы менән көндәр, аҙналар буйы фатирынан сыҡмай ултырҙы.

Өсөнсө аҙна аҙағында ғына, алдан хәбәр итмәй-нитмәйенсә фатирына килеп ингән трест управляющийы Иван Перфильевич Нифантовты күргәс, ул аптырап ҡалды.

— Ғәфү итегеҙ, мин... мин...

— Эйе, миңә һин кәрәк булдың, сабака малай! — тип ажғырҙы Нифантов, сәңгелдәктә ятҡан сабыйға, бүлмәнең буйынан-буйына һуҙылған епкә эленеүле еүеш сепрәктәргә һәм туҙып ятҡан ҡаралтыларға алан-йолан ҡаранып. — Ғүмерең буйына ошолай ултырырға булдыңмы?

— Бүтәнсә ҡалайтырға, Иван Перфильевич?

Управляющий ярһыны.

— Һин, Искәндәр, ирме, әллә бисәме?! — тип асыу менән һораны ла, ул күҙҙәрен таһырайтып ҡараны. — Совет иле һәм барлыҡ Европа халҡы яҙмышы хәл ителгән осорҙа һинең ҡайғың ҡайғымы ни? Итәк тулы бала-сағалары менән ир-атһыҙ ҡалыусы ҡатын-ҡыҙ ҙа һинең шикелле бәлйерәп ултырмай! Уларҙан оялыр инең, исмаһам, ир башың менән!

— Иван Перфильевич!..

— Үҙеңдән ололар өгөт-нәсихәт ныҡығанда, бүлдермә,— тине трест управляющийы.— Һин, промысланың өлкән инженеры, Бөйөк Ватан һуғышы барған ваҡытта үҙ бурысыңды онотһаң, иҫеңә төшөрәм! Хәҙер барлыҡ халыҡ ҡайғы кисерә, Искәндәр Сабитович! Дәһшәтле һуғышҡа ирҙәрен, һөйгән йәрҙәрен ебәреп, уларҙы мәңгелеккә юғалтыусы беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар шәхси ҡайғыларынан өҫтөн торорға, еңеү, киләсәк быуын кешеләре, һинең сабыйың кеүек бала-сағалар бәхете өсөн барлыҡ ауырлыҡтарға сыҙарға тырышалар, ә һин, ир башың менән... Тфу, ниндәй ғәрлек!.. Отпускаңдан отзывать итәм! Бөгөн, юҡ, яңылышам, хәҙер үк, һиңә эшкә сығырға бойорам! Әйҙә, кейен!

Трест управляющийынан бер ниндәй ҙә мәрхәмәт булмаясағын аңлап, Хөсәйенов, ни эшләргә белмәйенсә, аптыраны.

— Сабыйҙы ҡайҙа ҡалдырырға, Иван Перфильевич?

— Сабыйыңды ашатыр өсөн кемдән алаһың һөттө?

— Зиновьева Варваранан.

— Шешә менән һөт ташып йөрөгәнсе, сабыйыңды ниңә Варвараға имеҙергә ҡалдырмаҫҡа? — тип һораны Нифантов.

— Варвараның үҙ сабыйы булғас, уңайһыҙландым.

— Ә уның күкрәгендәге һөтөн һауҙыртып алырға уңайһыҙланманыңмы? — тип һораны ла, Искәндәр өндәшмәгәс, Иван Перфильевичтың тауышы бер аҙ ягымлыланды. — Бында килерҙән алда мин Варвара менән осрашып һөйләштем. Ул Шәкирйән улыңды үҙенеке менән бергә ҡарап үҫтерергә ризалашты. Бар, малайыңды уға алып барып тапшыр ҙа эшеңә һыпырт!

Искәндәрҙең йөҙө асылды.

— Рәхмәт, Иван Перфильевич, һеҙгә мең-мең рәхмәт!

— Ул рәхмәтеңде Варвараға һаҡла, — тип Нифантов ишеккә ыңғайланы.

Урамға сыҡҡас, яҡындан ғына үтеп барған тракторҙы туҡтатып, трест управляющийы һораны:

— Ҡайҙа юл тоттоң?

— Контора яғына.

— Шунда мине лә алып бар, ҡабаланам!

— Рәхим итегеҙ, Иван Перфильевич, — тине тракторист.

«Туймазынефть» тресы конторалы тәңгәлендә трактор кабинаһынан сыҡҡас, Нифантов оҙон бағанаға беркетеүле радионан яңғыраған һуңғы яңылыҡтарҙы тыңлап тороусы снабженец эргәһенә яҡынлашты.

— Совинформбюро тапшырыуын тыңлайһыңмы? Левитандың тауышы көндән-көнгә күңеллерәк һәм ҡыуаныслыраҡ яңғырай бит, ә? Фашистарҙы беҙҙекеләр ҡыҫа, яман ҡыҫа! Совинформбюроны баштан аҙағына саҡлы тыңланыңмы?

— Аҙағын ғына...

— Тыңламағас, ниңә шаҡ ҡатып тораһың бында? — тип һораны Нифантов, асыуланып.

— Һеҙҙе көтәм, — тине снабженец, бойоҡ йөҙөн томрайтып.

— Ниндәй йомош?

— Көтөлмәгән бәлә килеп сыҡты, Иван Перфильевич!

— Ниндәй бәлә тағы? — Нифантовтың һағайыулы йөҙө үҙгәрҙе.

— Икмәк юҡ нефтселәргә ашатырға.

— Нисек «юҡ»? Йүнләп аңлат!

Квартал буйынса карточкаға бирелергә тейешле икмәк запасы бөтөүе сәбәпле, нефтселәр һәм уларҙың ғаиләләре ас ултырыуҙары хаҡында белгәс, ҡапыл ярһып, Нифантов Башҡортостан республикаһының сауҙа халыҡ комиссарына шылтыратты. Уның менән һөйләшеп уртаҡ һүҙ таба алмағас, Туймазы район комитетына мөрәжәғәт итте. Аҙаҡтан, райком секретарының кәңәшен тотоп, ул район уполминзагына барҙы.

Иван Перфильевичтың ниндәй йомош менән йөрөүен белгәс, райуполминзаг етәксеһенең йөҙө томрайҙы.

— Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа мобилизация запасына ҡағылырға минең хаҡым юҡ, — тип ул ҡырт киҫте.

— Фронттағы самолеттар менән танкылар бензинһыҙ тормаһын өсөн нефть сығарыусы промысловиктар ас булырға тейешме?

— Уныһын белмәйем, иптәш Нифантов, белмәйем!

— Мин үтенәм, һорайым...

— Үтенһәң-үтенмәһәң дә, мобилизация икмәге запасына ҡағылырға хаҡым юҡ, — тип ҡабатланы уполминзаг етәксеһе.

— Нефтселәр ҡалайтырға тейеш икмәкһеҙ?

— Белмәйем!

Йомошо төшкән етәкселәр алдында хәйләләшергә, ялағайланырға, инәлергә, йәки нимә булһа ла уларға вәғәҙә итергә өйрәнә алмаған тапҡыр һүҙле, дипломатия тигән нәмәнең ни икәнлеген аңламаған һәм аңларға ла теләмәгән Иван Перфильевич был юлы ла үҙ холҡон үҙгәртмәне.

— Һин белмәй, кем белә? — тип һораны ла, райуполминзаг етәксеһенең тетмәкәйен тетеп тиргәргә тотондо.

— Фронт, армия өсөн тәғәйенләнгән икмәк запасын тотонорға минең башым икеме?! — Райуполминзаг етәксеһе лә, тиҫкәреләнеп, ҡыҙҙы.

— Яҡшылыҡты аңларға теләмәһәң, мин райкомға барам!

— Бар, бар!.. Райкомдан башҡа, Өфөлә минең үҙ түрәм бар!

Нифтанов йүгерә-атлай тышҡа сығып йүгерҙе.

Трест управляющийының янып-ярһып килеп инеүен күргәс, район комитетының беренсе секретары баш сайҡаны.

— Иван Перфильевич, эште боҙғанһың бит!

— Эш боҙоуымды кемдән ишеттең?

— Райуполминзаг етәксеһе Өфөгә шылтыратҡан, ә Өфөнән миңә шылтыраттылар...

— Былай булғас, бер ни ҙә барып сыҡмаймы?

— Әлегә сыҡмай.

— Хәҙер ҡалайтырға? — Иван Перфильевич, икмәк мәсьәләһен нисек итеп ыңғай хәл итеү юлын тапмайынса, өмөтһеҙлеккә бирелде. — Тәүлегенә ун икешәр сәғәт эшләгән нефтселәр икмәкһеҙ бөләсәк! Улар былай ҙа ныҡ йонсоғандар, аяҡтарына саҡ баҫып торалар.

— Эйе, эш ҡатмарланды, — тине партияның район комитеты секретары.

Нифантов, ниҙер иҫенә төшөрөп, йөрәкһенде.

— Өлкә комитеты секретары иптәш Вострецовҡа шылтыратып ҡарағыҙ!

— Уға үҙегеҙ шылтыратығыҙ, — тине райком секретары.

— Был мәсьәлә буйынса минән булмай... — Нифантов ҡабаттан кәйефһеҙләнде.

— Нисек булмай ти? Иптәш Вострецов менән гел һөйләшеп тораһығыҙ бит!

— Нефть сығарыу буйынса, әлбиттә, һөйләшәм... Бында дипломатия талап итәлә.

Райком секретары көлөмһөрәне.

— Аңлайым, — тип ул Өфөгә шылтыратты.

Икмәк мәсьәләһе ыңғай хәл ителгәс тә, балалар шикелле ҡыуанған трест управляющийы райкомдан сығып йүгерҙе.

## XIX

Тамбов кавалерия училищеһының тиҙләтелгән курсын тамамлағандан аҙаҡ кесе лейтенант званиеһы алған Байдәүләтов, үҙ полкына кире әйләнеп ҡайтҡас, эскадрон командиры итеп тәғәйенләнде һәм октябрь айынан бирле Висла йылғаһының көнсығыш ярында оборона тотоусы яугирҙар менән бергә тыуасаҡ 1945 йылды ҡаршыларға әҙерләнде.

Ҡис взводтарҙағы тәртипте, ҡарауылда тороусы һаҡсыларҙың үҙ бурысын белеүен, конюшняларҙағы аттарҙың торошон тикшереп сыҡты. Аҙаҡ өҫ-башын унан-бынан ғына төҙәткеләп, яңы йыл уҙғарыласаҡ ергә китте.

Ашханала ойошторолған мәжлестең иң ҡыҙған мәле ине. Шунлыҡтан уның һуңлап килеүенә бер кем дә иғтибар итмәне.

Оло ашхана залының буйынан-буйына һуҙылыулы өҫтәлдәр артында ултырып яңы йылды ҡаршылаусы офицерҙар, ҡыҙмасаланып алғас, тәмәке төтөндәрен борҡота-борҡота, үҙ-ара ҡысҡырышып һөйләшә, нимә тураһындалыр ҡыҙыу бәхәсләшә, фәлсәфә һата.

Өҫтәлдең иң түрҙәге өлөшөндә 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының командиры генерал-майор Белов ултыра. Уның уңында — дивизияның политбүлек начальнигы полковник Покровский, һул яғында — дивизия штабы начальнигы полковник Голенев, уларҙан бирерәк дивизия командирының урынбаҫарҙары, полк командирҙары менән

уларҙың урынбаҫарҙары, эскадрон командирҙары, врачтар һәм Байдәүләтовҡа таныш булмаған бүтән офицерҙар менән ҡатын-ҡыҙҙар...

Үҙенә тиңдәш эскадрон командирҙары эргәһендә буш урын булмағас, Зәки Байдәүләтов әүәлдән таныш медицина сестраһы эргәһенә барып ултырҙы.

— Иҫәнме, Шәһиҙә!

— Сәләм, яҡташ! — Шәһиҙә, Зәки менән дуҫтарса баш ҡағып иҫәнләшкәс, кружкаға спирт ҡойоп бирҙе. — Мә, яҡташ, берҙе төшөр!

Яңғыҙы эсергә уңайһыҙланып, Байдәүләтов өҫтәл артындағыларға һораулы ҡараш ташланы.

— Ә һеҙ эсмәйһегеҙме?

— Беҙ күп эстек.

— Әйҙәгеҙ минең менән!

— Беҙҙең менән эсергә теләгәс, мәжлескә һуңламаҫҡа кәрәк ине!..

— Ҡуйығыҙсы әле, инәлтмәгеҙ минең яҡташты, — тип Шәһиҙә әйткәс кенә, Зәки эргәһендәге офицерҙар кружкаларын күтәрҙе.

— Яңы йыл менән!

— Яңы йылда тулы еңеү менән!..

Уттай өтөп алған спирт Байдәүләтовтың ҡан тамырҙары буйлап ағылды. Уға рәхәт, бигерәк тә кинәндергес булып китте, еңелсә башы әйләнде, аңы томаланды, күҙ алды сыбарланды. Бындағы барлыҡ күренеш бәғзе ваҡытта төш кеүек тойолдо.

Офицерҙар туҡталмайынса күңел асты, ҡысҡырып көлөштө. Һуғыш ваҡытындағы айырым эпизодтарҙы иҫкә алдылар, бер-береһенә әселе-тоҙло төрлө анекдоттар һөйләнеләр.

Шәһиҙәнең алһыу йөҙөнән күҙҙәрен алмаған Зәки бер кемде тыңламаны һәм ишетмәне. Һағыҙаҡтай бәйләнгән лейтенантҡа Шәһиҙә арты менән әйләнеп ултырғас ҡына бер аҙ тынысланып, ул ун алты йәшлек ҡыҙҙы элгәре заманда бисәлеккә алған етмеш биш йәшлек ҡарт хаҡындағы анекдотты тыңларға тотондо.

Анекдот һөйләүсе капитан шымғас, ризаһыҙлыҡ белдереп, офицерҙар шаулашты:

-- Йә инде, бер башлағас һөйләп бөтөр!

— Ул анекдоттың аҙағы нисек барып бөткән?..

Офицерҙарҙың ялынып-ялбарыуына иғтибар итмәйенсә, капитан Шәһиҙәгә ҡарап күҙ ҡыҫты ла:

В мороз и зной,
Всюду идет за тобой.

Ты ведь достоин, литый воин мой,
Ласки сестры фронтовой, —

тип шәфҡәт туташтарына арналған йырҙы йырлап туҡтағас ҡына анекдотын дауам итте:

— Анекдоттың аҙағы билдәле инде... Ун алты йәшлек ҡыҙ ҡарт кейәүендә оҙаҡ йәшәргә теләмәгән. Ул ирен ҡалдырып өйөнә ҡайтҡас, ата-әсәһе ғәжәпкә ҡалған. Әсәһе ниңә кейәүҙән ҡасып ҡайтыуы сәбәбен һорағас, ҡыҙ: «Кейәүемде йәлләгәнгә ҡайттым», — тип яуап ҡатарған, ти. «Йәлләгәс, бергә йәшәргә кәрәк ине, балаҡайым», — тип әсәһе орошҡас, ҡыҙ: «Кейәүегеҙҙе йәлләүҙең сигенә еттем. Ул мине шыр яланғас сисендерә лә, тәндәремде һыйпай ҙа илай, һыйпай ҙа илай», — тип яуап ҡайтарған, ти.

Офицерҙар һаһылдашып көлөштө.

Баянда дәртле бейеү көйө яңғыраны.

Өҫтәлдәрҙән ситтәге буш урынға сығып баҫҡан бер төркөм офицерҙар менән ҡатын-ҡыҙҙар ҡушарлап бейергә төшкәс, мәжлестең тамадаһы тәнәфес иғлан итте.

Урындарынан күтәрелгән офицерҙарҙың бер өлөшө тәмәке тартырға тип тышҡа сыҡты, ә анекдот һөйләүсе капитан Шәһиҙәне бейергә алып төштө.

Өҫтәл артында япа-яңғыҙы ултырып ҡалған Зәки Байдәүләтовҡа мәжлестең бер ниндәй ҡыҙығы ҡалманы.

«Минең менән бергә осрашҡан һайын Шәһиҙә үтә намыҫлы ҡыҙ булып ҡылана, ә үҙе теләһә кемдәр менән бутала», — тип уйлап, ул кружкаһындағы спиртты түңкәрә эсте лә, шинелен яурынына һалып тышҡа сыҡҡас, аулағыраҡ урынға ыңғайланы.

Бер нисә ҡатын-ҡыҙҙың тышта офицерҙар менән үбешеп тороуын күргәс, Байдәүләтовтың кәйефе бөтөнләйгә боҙолдо. Ул бер тирәлә тапанып торҙо-торҙо ла, яңы йыл хөрмәтенә ойошторолған мәжлескә ҡабат инмәйенсә, блиндажына китте.

Зәки блиндажында ла тынғылыҡ тапманы. Шинеленә төрөнөп ятҡас, капитандан айырылмаған Шәһиҙәгә ҡарата асыуы ҡабарҙы. Уйланып ята торғас, капитан һөйләгән анекдоттағы: «Һыйпай ҙа илай, һыйпай ҙа илай» тигән һүҙҙәрҙе иҫләне.

«Минең шикелле ояттҡа ҡалыусылар уйлап сығарҙы микән ундай анекдотты?» — тип отпускыға ҡайтып ҡатыны менән бергә түшәктә уҙғарған төндө хәтеренә төшөрҙө.

Нисәмә айҙар һәм йылдар буйы һуғышта йөрөп интеккән Зәки һөйгән кәләшенең йылы, кинәндергес тәнен һағынып ҡайтҡайны. Ул ҡатыны менән ҡауышыр минутты

йәһәтләтергә тырышып, өтөлдө, янды. Уға һәммәһе тәбиғи һәм ябай һымаҡ тойолдо. Ләкин яңылышты. Мәстүрәһенең ҡуйынына инеп ятҡас ҡына Зәки үҙенең ғәмһеҙлегенә, дәртләндерерҙәй, йөрәген ярһытып ҡан тамырҙарын таштырырҙай көслө хистәренең ҡапыл тоноҡланыуына ғәжәпкә ҡалды. Әйтерһең, уның ир булыуға хоҡуҡ биреүсе дәрте бөткән һәм бер ҡасан да булмаған! Мәстүрәһенең ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлауының да, ирендәренән һурып үбеүенең дә файҙаһы теймәне.

Ниңә шундай хәлгә ҡалыуының сәбәбен аңламаған Зәкиҙең ҡото алынды: «Ни эшләнем мин? Рәтем ҡалмағас, бисә менән бергә йәшәүҙән ни мәғәнә? Былайтып мәсхәрәгә ҡалғансы, берәй хәйлә табып, фронтҡа тиҙерәк китеү яғын ҡарарға кәрәк. Көйҙөрөлгән кәзә тәкәһе кеүек ир исемен алып йөрөгәнсе, илебеҙ өсөн һуғышып ҡорбан булғаның мең тапҡырға артыҡ!..»

Зәкиҙең уйын һиҙгәндәй, Мәстүрә ситкә тартылды.

— Ҡуйсы, ҡуй!.. Мине лә, үҙенде лә, зинһар, яфалама! — тип шыбырланы ул.

— Хәҙер һиңә кәрәгем ҡалманымы? — Ғәрлеккә ҡалған Зәки ярһыны.

— Тауышланма, ҡәйнәм ишетер... Һиңә ял кәрәк, ял,— тип бышылданы Мәстүрә, ирен тынысландырырға тырышып. — Ял итҡәс, рәтләнерһең... Әлегә аҙапланма...

Зәки, тыныслана алмайынса, бер үк һүҙҙе ҡабатлап һораны:

— Мине бүтәнсә һушһынмайһыңмы?

— Юҡты һөйләмә, бәғерем!.. Яратам, бик тә яратам!.. Аҙаҡтан, хәл йыйғас...

— Мине абышҡаңа һанамайһыңмы бүтән?

— Туҙға яҙмағанды ныҡыма, зинһар, тыныслан!

— Тынысланмайым! Бар, бүтән ир ҡуйынына һыйын!

Мәстүрә, һығылып-быуылып илай-илай, Зәкиҙе өгөтләргә тотондо:

— Бер ниндәй ҙә сит абышҡа кәрәкмәй миңә!.. Һинең былай булыуың арыуҙан, һуғыш касафатынан... Үтер әле... Әҙерәк ял итҡәс, рәтләнерһең...

Мәстүрәһен тыңлап, Зәки көс-хәлгә тынысланды һәм, ысынлап та, ял кәрәк булған икән, тик-томалға боҙола яҙған үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә ҡабаттан яҡшырҙы.

«Бындай хәл берәй һөйәркә менән булған булһа, мине йыуатыу, күңелемде табыу түгел, әйләнеп тә ҡарамаҫ ине. Ә ояты, хурлығы?!.. Шәһиҙәнең минән башҡа йәргә тартылыуы, бәлки, хәйерлегәлер? Мин һөйәркәләр өсөн яралмаған донъяға», — тип Зәки үҙен-үҙе йыуатты.

## XX

Совет Армияһының хәл иткес һөжүме ҡасан башланыры бер кемгә лә мәғлүм түгел ине.

Өр-яңы самолеттарҙың, танкыларҙың, орудиеларҙың, минометтарҙың, яғыулыҡтарҙың, аҙыҡ-түлектең бер туҡтауһыҙ фронтҡа килтерелеүе, һәр хәрби подразделениела партия-комсомол йыйылыштары, митингтар уҙғарылыуы, мунсаларҙа йыуындырылған яугирҙарҙың кейемдәрен алмаштырыуҙары, медицина работниктарының запасҡа дарыуҙарҙы һәм яраланыусыларҙың яраһын бәйләү өсөн төрлө сепрәк-сапраҡтарҙы базанан күпләп алыуҙары тиҙҙән көслө алыш башланырға тейешлеге хаҡында иҫкәртә ине.

1945 йылдың ун өсөнсө ғинуарында 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы Висла йылғаһының көнсығыш ярындағы Пулав плацдармы ҡаршыһына барып урынлашҡас, Байдәүләтовтың эскадронына Сәғит Әлибаев килде.

Һыбайлы гвардеецтарҙың һөжүмгә әҙерлеген тикшергәндән һуң, коммунистарҙы йыйып, ул киләһе хәл иткес алышта ла партияһыҙҙарға өлгө күрһәтергә, Германия еренә аяҡ баҫҡас, ябай немец халҡына иғтибарлы булырға, уларҙы рәнйетеүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәклеген аңлатты.

Төн етте.

Эскадрон командиры гвардия кесе лейтенанты Байдәүләтов менән блиндажда икәүҙән-икәү генә ҡалғас, гвардия майоры Әлибаев сер асты:

— Беҙҙең кавалерия корпусына, 33-сө һәм 69-сы армиялар менән берлектә Висла аша уҙып, Польшаның баш ҡалаһы Варшаваны азат итеү бурысы йөкмәтелгән.

— Ул һөжүм ҡасан башлана? — тип һораны Байдәүләтов.

— Иртәнсәк.

— Иртәнсә-ә-әк? — Байдәүләтов ярһыны. — Был хаҡта кешеләргә ниңә әйтмәйҙәр?

— Ваҡыты еткәс, барыһы ла белер. — Гвардия майоры Әлибаев, уйсан күҙҙәрен блиндаж уртаһындағы «буржуйка»ға текләп ҡараған көйө, оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы. Шунан, яҡташының күңелен табырға теләгәндәй, тыныс ҡына иҫкәртте: — Иртәгә алыш бик ауыр буласаҡ. Бар, ятып ял ит!

— Һеҙ полк штабына китәһегеҙме?

— Юҡ. Был төндө һинең менән бергә уҙғарырға уйлайым.

«Миңә ярҙамлашырға килгән икән Сәғит ағай», — ти-

гән һығымта яһаған Байдәүләтов, шатланып, блиндаждағы буш урынды күрһәтте:

— Ошонда йоҡларһығыҙ, иптәш гвардия майоры!

— Әлегә йоҡом килмәй. Теләһәң, әйҙә, саф һауала йөрөп әйләнәйек!

Улар блиндаждан сыҡты.

Ишек тәңгәлендә тороусы һаҡсыны уҙғас, йылы төндә ҡабаланмай ғына яуған ябалаҡлы ҡар бөртөктәре менән һоҡланған Әлибаев яҡындағы землянканан ишетелгән ҡурай моңо менән йырҙы тыңланы. Ҡараңғылағы тынлыҡты ҡурҡытмаҫҡа тырышҡандай, ҡурай менән йыр моңо тәүҙә тоноҡ, бик тәрәндәге ер аҫтынан сыҡҡандай тойолдо. Аҙаҡтан, талғын ғына иҫкән ел йүнәлеше үҙгәргәс, бөтә яҡҡа иркен таралды.

...Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай
Һинең улдарың, Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал...

Йыр һүҙҙәрен ишеткәс, Сәғит Рәхмәтович Әлибаевтың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Башҡорт кавалерия дивизияһының элекке командиры генерал-майор Шайморатов донъяла юҡ, ә уның рухы, уның даны, уның исеме яугирҙар менән бергә йәшәй һәм уларҙы яңынан-яңы еңеүҙәргә рухландыра!

— Ҡайһы взвод егеттәре ул землянкала? — тип һораны Әлибаев.

— Беренсе взвод һыбайлылары, иптәш гвардия майоры!

— Унда башҡорттар ғынамы ни?

— Интернационал. Унда, башҡорттарҙан башҡа, белорус, тажик, төрөкмән, үзбәк егеттәре лә бар.

Яҡындағы землянканан һаман ағылған моңло оҙон көйгә сихырланған Әлибаев менән Байдәүләтов, икеһе бер юлы һөйләшеүҙән тыйылып, шып-шым булдылар.

Һандуғастар һайрар, ай, ер түгел,
Һайраһа ла туғайы киң түгел.
Эй-й... илама ла, Фатимам, илама,
Йүгереп кенә лә ҡайтыр ер түгел.

Зәки, бик ныҡ тәъҫирләнеп, дәртләнде:

— Иптәш гвардия майоры, йырсы егеттәрҙең эргәһенә инеп сығабыҙмы әллә?

— Уларға ҡамасауламайыҡ. Отбойға саҡлы иркенләп йырлаһындар, — тип Әлибаев блиндажға ҡарай ыңғайланы.

Йөрәкте тирбәлдергән моңло йыр, ниндәйҙер тетрәткес һағыштарға күмелдереп, , һаман туҡталмай ағылды...

Иртәнсәк, яҡты белен-белнмәҫтән, беҙҙең бик күп һанлы орудиелар ҡыйратҡыс эшкә тотондо. Бөтә ер өҫтөн тетрәтеп көсәйгәндән-көсәйә барған канонада ике сәғәт буйы барҙы. Ҡаршы яҡтағы гитлерсыларҙың нығытмалары ҡыйратылғанда ер өҫтө ҡайнаны, урғылды. Дошман позицияһы янғынға солғанды, дөм ҡара төтөн ағымы ер өҫтөн ҡапланы...

— Фашистарҙың атаһын таныталар артиллеристарыбыҙ! — тип гвардия кесе лейтенанты Байдәүләтов эскадронын атакаға әҙерләне. — Артподготовка тамамланыу менән, беҙҙең һөжүм башлана!

Совет Армияһының хәл иткес һөжүме бер мең ике йөҙ километр киңлектәге фронт буйынса оло ҡолас, киң манёвр, ҡеүәтле көс менән ҙур тиҙлектә башҡарыласағын әлегә гвардия майоры Әлибаев белмәһә лә, был бәрелештә күп, бик күп ғәскәрҙәр ҡатнашасағын аңланы һәм Байдәүләтовҡа взводтарҙы ҡабаландырмаҫҡа, дөйөм команда булыуын сыҙамлыҡ менән көтөргә кәңәш бирҙе.

Ҡанонада баҫылыр-баҫылмаҫтан, күмәк моторҙар геүләүе ишетелде һәм күк йөҙөн иңләп килеүсе беҙҙең самолеттар күренде. Улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ ине. Йылғыр ҡарлуғастар шикелле һауала кәйкәләп, бер юғарыға, бер түбәнгә ынғайлаған истребителдәрҙән аҫтараҡ ауыр йөклө бомбардировщиктар менән штурмовиктар бер-бер артлы тулҡын-тулҡын булып ағылды.

— Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, беҙҙең самолеттар күп, бик тә күп, — тип ҡысҡырҙы кемдер.

Беҙҙең самолеттар фронт һыҙығын осоп уҙған саҡта, уларға ҡаршы күмәк дошман самолеттары ла ерҙән күтәрелеүе күренде. Бер-беренә яҡынлашҡандан-яҡынлаша барған ике ҡеүәтле һауа көсө ҡапма-ҡаршы бәрелешеү менән бөтәһе бер юлы буталды һәм ҡот осҡос һауа һуғышы башланып китте.

Ике яҡтан да ҡыйратылған самолеттарҙың бомбалары теләһә ҡайҙа төшөп ярыла башлағас, блиндажға инеп йәшеренергә мәжбүр булған Әлибаев менән Байдәүлбәтовҡа һауа һуғышын иркенләп күҙәтергә мөмкинлек булманы.

Күмәк самолеттарҙың һауа бәрелеше тамамланғас та, атака башларға тигән команда бирелде.

Шуны ғына көткән Байдәүләтов атына атланды.

— Эскадро-о-он, ал-ға!.. Атакаға!..

Һыбайлы гвардеец-черниговсылар, 9-сы һәм 11-се танк корпусы менән берлектә, алға ташланды.

Ҡар һай булғанлыҡтан, егеттәр асыҡ ялан буйлап йән-фарман сабышты.

Ҡасып барыусы дошман һалдаттарын эҙәрләгән һыбайлылар дивизияһы, тәүлегенә иллешәр-алтмышар километр араны уҙып, ун һигеҙенсе ғинуарҙың төнөндә, баш осо тәңгәленән осоусы ҡыҙыл йондоҙло совет штурмовиктары эскадрильяһы менән артиллеристарҙың көслө уты ярҙамында, Пилица йылғаһы аша сыҡты һәм Томашув ҡалаһын штурмлап алды.

Аҙаҡҡы һуғыштағы ҡаһарманлыҡтары өсөн 58-се гвардия кавалерия полкы Томашувсы исеменә лайыҡ булды һәм Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды.

Байдәүләтов полк командирының ҡушыуы буйынса үҙенең эскадроны менән Одер йылғаһы эргәһендәге Фауге — Обра каналы аша сыҡҡас, Редевитш ҡалаһын обороналаусы дошман ғәскәрҙәре тылына үтеп инде һәм атакаға ташланды.

Атаканың иң ҡыҙған мәлендә ҡаланың көнбайыш ситендәге өйҙәрҙең береһенән дошман пулеметы ут асты. Иң алдан йән-фарман сабып барған эскадрон командиры Байдәүләтов ниндәйҙер эҫе тос нәмә күкрәген һыҙырып үтеүен тойҙо. Ул, ҡапыл хәлһеҙләнеп, эйәренән ҡоланы. Ләкин эскадрон һөжүмен дауам итте.

Урам уртаһындағы ҡар өҫтөндә Зәки Байдәүләтов яңғыҙы ятып ҡалды. Бер аҙҙан уның күҙ алды томанланды, аңы буталды.

— Үлемем ошо микән ни? Эскадроным менән Берлинға керә алмауым аяныс! — тигән уй менән ул иҫенән яҙҙы...

## ЭПИЛОГ

Үткән ғүмер, тау йылғаһы шикелле, туҡталмайынса аға ла аға.

Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ленин ордены, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов, Кутузов ордендары менән наградланып, гвардия һәм Чернигов исемен йөрөтөргә лайыҡ булған 16-сы кавалерия дивизияһы сафында немец-фашист илбаҫарҙарынан ғәзиз Тыуған илебеҙҙе һәм Европа халыҡтарын азат итеүҙә ҡатнашҡан батыр азаматтарҙың һаны ла ваҡыт уҙыу менән бергә һирәгәйгәндән-һирәгәйә бара. Советтар Союзы Геройы исемен алған элекке һыбайлыларҙан хәҙерге көндә ни бары ете, хәрби ордендар һәм миҙалдар менән наградланыусыларҙан илле-алтмышлап ҡына гвардеец-черниговсы иҫән ҡалды.

Илебеҙҙең төрлө өлкәләрендә, край, республикаларында йәшәүсе элекке һыбайлы яугирҙар — хеҙмәт ветерандары. Улар хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң да йәштәрҙе патриотик рухта тәрбиәләү өсөн бик күп көс түгә.

Бөйөк Еңеүҙең 40 йыллығы көнөндә байрамса биҙәлгән Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә элекке 16-сы гвардия кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары йыйналғас, Советтар Союзы Геройы, отставкалағы гвардия генерал-майоры Күсимов ҡысҡырып һораны:

— Йә, ир-уҙамандар, тантаналы ултырыш уҙғарылғанға саҡлы тамаҡ ялғап алмайбыҙмы?

— Беловты көтәйек, — тине дивизияның элекке политбүлек начальнигы урынбаҫары Ҡадиров. — Самолет һуңламаһа, тиҙҙән ул бында булырға тейеш!

— Уны ниңә аэродромда ҡаршы алмайбыҙ?

— Григорий Андреевич үҙе теләмәне.

— Беҙҙе бында нисек табыр?

— Беловты ҡаршыларға уның элекке адъютанты Шакиров, элекке артиллерия-миномет полкы командиры отставкалағы гвардия полковнигы Хәбиров менән Советтар Союзы Геройы Шәкирйән Ғиниәтуллин китте.

Күсимов, Ҡадировты шаяртып, дуҫтарса шелтәләне:

— Ну, Сабир Рәхмәтович, фронттағы йылғырлығыңды ҡартайғас та ташламағанһың бит!

Таһир Таипович әйткәнгә ҡушылып, башҡалар ҙа шаулашты:

— Отставкалағы гвардия генерал-лейтенанты Беловтың Өфөгә килерен әйтмәй, сер итеп һаҡлаған бит Ҡадиров!

— Уны аэропортҡа барып бөтәбеҙ бергә ҡаршылаһаҡ та зыяны булмаҫ ине, моғайын!..

— Сюрприз эшләргә теләгәйнем һеҙгә, — тип яуҙаштары алдында Ҡадиров аҡлана ғына башлағайны, түшенә Алтын Йондоҙ, өс Ленин ордены, дүрт Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов, Ҡыҙыл Йондоҙ, Почет Билдәһе ордендары, Польшаның «Виртути Милитари» ордены һәм унлап миҙалдар таҡҡан отставкалағы гвардия генерал-лейтенанты Белов күренде.

Отставкалағы гвардия генерал-майоры Күсимов, дәрәжәһе яғынан иң оло булараҡ, күкрәктәре орден һәм миҙалдар менән сыбарланған элекке 16-сы Чернигов гвардия кавалерия һуғышсыларын сафҡа теҙеп, «Смирно» командаһын биргәс, элекке дивизия командиры Беловҡа рапорт тапшырҙы:

— Товарищ генерал, воины-ветераны нашей славной 16-ой кавалерийской дивизии собрались на родине нашего первого командира кавалерийской дивизии гвардии генерала-майора Миннигали Мингажитдиновича Шаймуратова, чтобы почтить его память в день сороколетия нашей Великой Победы над немецко-фашистскими захватчиками!..

Күп йылдарҙан бирле күрмәгән яуҙаштары менән осрашыуға бик нык тулҡынланып, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһының элекке командиры Белов йылмайҙы.

— Дуҫтарым-фронтташтарым, һаумыһығыҙ!

Һуғыш ветерандары дәррәү яуап ҡайтарҙы:

— Здравия желаем!..

Ветерандарҙың һәр ҡайһыныһы менән берәм-берәм күрешеп сыҡҡас, Белов, сәйерһенеп, оҙонсая йөҙлө, ҡуйы ап-аҡ сәсе артҡа таралған ҡаҡса кәүҙәле етмеш-етмеш биш йәштәр самаһындағы кешегә уҡталды.

— Ғәфү итегеҙ, зинһар, һеҙҙе танымайым. Ҡайһы полкта һәм кем булып хеҙмәт итә инегеҙ?

— Танымауығыҙ ғәжәп түгел, Григорий Андреевич, — тип ҡаҡса кәүҙәле кеше үҙенең кем икәнлеген әйтте: — Мин, элекке политрук Фәхретдинов Мөбәрәк Йыһаншинович, һуғыш башланғандың беренсе көндәрендә Башҡорт кавалерия дивизияһының 294-се полкында хеҙмәт иттем. Меӊ туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылдың йәйендә Лобановка ауылы өсөн барған һуғышта немецтар беҙҙе ҡуласаға алғас, полк командиры майор Нафиҡов мине дивизия штабына ебәрҙе. Ҡамауҙы йырып сыҡҡанда дошман засадаһына эләктем һәм ҡаты яраландым... Иҫһеҙ сағымда мине дошман һалдаттары пленға алған... Аҙаҡтан Дахау концлагерына оҙаттылар һәм эт күрмәгәнде күрһәтеп ыҙалатыуҙарын башымдан кисерҙем...

Ҡиң ялтлас маңлайын сирылтып, Григорий Андреевич Белов уйға ҡалды.

— Әһә, хәҙер иҫләнем... Эҙһеҙ юғалыуығыҙ хаҡында миңә лә күп тапҡыр ишетергә тура килгәйне.

Фәхретдинов, дивизияның һуғыш ветерандары алдында аҡланырға теләгәндәй, Дахау концлагерындағы тотҡондарҙың йәшерен ойошмаһы етәксеһе генерал-лейтенант Вишневский Сергей Владимирович ҡушҡан мөһим йомоштарҙы нисек башҡарыуы, совет ғәскәрҙәре яҡынлаша башлағас та тотҡондарҙы этапҡа сығарыуҙары, күперҙе аша сыҡҡан ваҡытта конвойсыларҙы ҡоралһыҙландырыуы һәм союздаш американыларға ҡушылыуы тураһында әйтеп, һүҙен бошонҡо тауыш менән тамамланы:

— Ул заманда союзниктарыбыҙ менән татыу, дуҫтарса мөғәмәләлә инек... Хәҙер, икенсе донъя һуғышы бөтөүенә

ҡырҡ йыл уҙғас, улар менән арабыҙ бер аҙ боҙолоуы үкенесле!

— Донъя һуғышы ҡабаттан башланһа, еңеүсе лә, еңелеүсе лә ҡалмаясаҡ, — тине Белов.

Унның фекеренә Күсимов та ҡушылды:

— Ошондай ҡурҡынысты аңларға теләмәүселәргә: «Аҡылығыҙҙы юғалтмағыҙ! Икенсе донъя һуғышы фажиғәһен иҫегеҙҙән сығармағыҙ!» тип һөрән һалып ҡысҡырaһым килә минең...

Бөйөк Еңеү көнөнөң ҡырҡ йыллығына арналған Өфөләге парад тамамланғандан һуң, Биштәкә ауылындағы Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалырға, уның яҡты иҫтәлеге алдында баштарын эйергә уйлап, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы ветерандары, «Икарус» автобусына тейәлешеп, Ҡырмыҫҡалы районына табан юлланды.

Ағиҙел йылғаһы күпере аша сыҡҡас, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ваҡиғаларҙы иҫләүҙән ярһыған Ҡадиров йыр башланы:

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;

Уға дивизияның башҡа ветерандары ла берҙәм ҡушылды:

Ат уйнатып, алда бара
Шайморатов генерал...

*1985—1988*
*Переделкино—Чернигов—Аҡлан—Өфө*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Башҡорттар китте һуғышҡа... (роман)

Беренсе киҫәк . . . . . . . . . . . . 4

Икенсе киҫәк . . . . . . . . . . . . 103

Өсөнсө киҫәк . . . . . . . . . . . . 276

Эпилог . . . . . . . . . . . . . . 403

